

*Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина*

# Йәшәргә ваҡыт

Гөлсирә Ғайсарова-
Ғиззәтуллина

# Йәшәргә ваҡыт



*Повестар
хикәйәләр
һәм эсселар*

КИТАП

Зәйнәб Бийишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте
ӨФӨ • 2012

УДК 821.512.141-3
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
F 16

**Fайсарова-Fиззәтуллина Г. М.**
F 16 Йәшәргә ваҡыт: повестар, хикәйәләр һәм эсселар. — Өфө: Китап, 2012. — 352 бит.

ISBN 978-5-295-05598-0

Артабан йәшәргә бөтөнләй теләгең ҡалмағанда нисек үҙеңдә көс табырға? Ниңә бәхет йыш ҡына инде бер ниндәй ҙә өмөт юҡ һымаҡ тойолған саҡта килә? «Йәшәргә ваҡыт» китабының геройҙары был һорауҙарға үҙ яҙмыштары менән яуап эҙләй.

Әҫәрҙәр күңел нескәлеге, тәрән психологизм һәм фәлсәфә, тормошҡа өмөтлө ҡараш менән йәлеп итә.

**УДК 821.512.141-3**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-4**

**ТП — 151/12**

© Fайсарова-Fиззәтуллина Г. М., 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

**ISBN 978-5-295-05598-0**

*Ейәнсәрем Камилә менән
ейәнем Даниярға арнайым.
Өҫтөмдә һеҙ тумарлашып
йөрөмәһәгеҙ, был китап күпкә
моңһоуыраҡ булыр ине.*

# Хикәйәләр



## ТӨШЛӨКТӘГЕ ТӨШ

Тәбиғи булығыҙ — сәскә атырһығыҙ.

*Чжуан-Цзы*

Яланғас табаны шалланмаған шыма таҡтаның рәхәт йылыһын тойоу менән бала саҡ, уйһыҙ, ирәүән студент осор, әсәй йорто келт итеп иҫенә төштө. Еләҫ елдәй генә булып моңһоулыҡ ипкене ҡағылып китте.

Кисә ҡыҙыу мунсала кинәнгәнсе сабынып, аҙағынан һитәле бал менән буйтым шифаланғас, сабыйҙай иҙрәп йоҡланылған. Һуң торғанына уңайһыҙланыңҡырап сыға ине, йәшел сирәм баҫҡан киң ихатала өмәгә әҙерлектең ҡыҙып ҡына барғанын күреп тынысланды. Техникаға һалышҡан ауыл кешеһе эш тип өтәләп-ҡырылып бармай хәҙер. Ана, ҡоҙаһы бар таһылын һалып бесәнгә һимертелгән тәкәне тунай. Өмәгә әйтелгән күрше ҡатындарылыр, ахыры, эсәк йыуырға китергә тора. Береһе ҡаласа аҡ салбарҙан килеш күтәрмәгә сығып баҫҡан Сафуанға һирпелеп баҡты ла, өлкәнерәгенең бөйөрөнә төртөп, тотоҡ, тигәндәй, ерҙәге эсәк-ҡарын тултырылған таҫҡа ымланы. Эйелгән ыңғайға асыҡ иҙеүенән йомро ғына түштәре күренеп ҡалды. Уйынсаҡ ҡыҙыҡһыныу сағылған ҡарашын ҡапҡанан сығып барышлай йәнә бер ташлап алырға өлгөрҙө йәш ҡатын. Ауыл халҡы өсөн Сафуандың тормошо әкиәт кеүек күренә инде. Кисә лә:

— Шоферы йәкшәмбе килеп ала, ти. Эй рәхәт йәшәйҙәр ҙә инде, килтереп ҡуй, килеп ал, — тип һөйләнәләр ине. — Машинаһының матурлығы! Ҡурсаҡ кеүек. Ултырыуы түгел, ҡарап тороуы бер ғүмер.

Ә ҡоҙағыйы ҡәнәғәт йылмайып өндәшмәй генә тыңлай. Уның ултырып йөрөгәне бар, өлкән улы Себерҙән үк машинаһы менән ҡайтып төшкән.

Нисәмә йылдар инде донъя йөгөн бер үҙе артмаҡлап, ағай, атай, хәҙер инде хатта олатай булып киткән Сафуанға бер көнгә генә булһа ла үҙен һис хәстәре булмаған ҡәҙерле ҡунаҡ итеп тойоу рәхәт. Ана, ҡоҙағыйының, аласыҡтан йүгерә һалып сығып, ҡәҙерләп сәйгә саҡырыуы хас та әсәһенең өлтөрәп тороуын хәтерләтте.

Өҫтәлдә яңы ғына сепараттан үткәрелгән йылы ҡаймаҡ, әле генә һуйылған тәкәнең оҫталап ҡурылған бауыры хуш еҫ аңҡыта.

Сафуан үҙенең кисә ҡапыл ғына уйлап бында бороlғанына йәнә бер тапҡыр һөйөндө. Ул был татыу ғаиләне яҡшы белә. Ҡатыны, балалары менән дә, үҙе генә лә булғаны, уларҙың күмәгеп дә, яңғыҙ-ярымлап та болло йортонда һыйлағаны бар. Әле лә хужаларҙың, бесән мәшәҡәтенә ҡарамайынса, ул тип өҙөлөп тороуҙарына тамсы ла уңайһыҙлыҡ кисермәй. Сөнки уларҙан күргән яҡшылыҡты унлата арттырып изгелек күрһәтергә ҡулынан килә, күрһәтә лә. Әммә белә: ҡоҙаһы менән ҡоҙағыйының хөрмәтендә уның биләгән вазифаһына ярамһаҡланыуу, ҡылған һәм ҡыласаҡ ярҙамдарына рәхмәт кенә түгел. Улар Сафуанды кеше булараҡ та ихлас яҡын күрә. Әле уға бына ошоноһо әһәмиәтлерәк.

Эйе, кисәгенәк ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп Башҡортостан юлдары буйлап кәйелә-кәйелә елдергән затлы машиналар тубынан Сафуандың «Тойота»һы Һөйөндөк ауылына илткән сутырмаҡ юлға ҡайырылды ла ҡалды. Уйламағанда ғына айырылды, сөнки тағы ярты көн сыҙарлыҡ та тәҡәте ҡалмағайны. Шул тиклем туйғайны. Боғаҙына килеп тығылғайны ғарыҡ булыуы. Хәйер, был Сафуандың һуңғы осорҙағы ғәҙәти халәте — кешеләрҙән туйыу. Кешеләрҙән генә булһа икән әле? Ғөмүмән, тормоштоң үҙенән булып ҡуймағайы...

Күпселектең ҡарашынан сығып фекер йөрөткәндә, барыһы ла ал да гөл, ашағаны бал да май — ә ул толҡа тапмай. Йоғошло сир кеүек ҡаҙалды бер кәйеф — йәшәүҙең ҡыҙығы бөттө. Был донъяла уны мауыҡтырыр бер генә сер ҙә ҡалмаған кеүек. Бөтәһен дә белә, аңлай. Ниндәйҙер ваҡиға башланып ҡына тора, ә Сафуан уның ахырын күрә. Кеше ауыҙын асып та өлгөрмәй, ә ул ни әйтерен генә түгел, ниндәй йәшерен ниәт менән әйтелгәненә тиклем төшөнә. Башына: «Йәшәүҙән ни мәғәнә?» — кеүегерәк уйҙар инә-сыға йөрөргә әүәҫләнеп бара.

Ə «ни өсөн», «ниңә»ләр борсой башлаған икән, тигенгә түгел. Тере мәйеттең һорауҙары бит был. Тормош һулҡылдап тиртеп, мөлкөлдәп ҡайнап торғанда юҡ-бар башҡа килмәй.

Ҡартлыҡ шулай үҙен һиҙҙерәләр, тигәйне башта. Күҙгә тексәйгән ҡартлыҡтан һөйөү артына боҫмаҡсы булып, ғишыҡ яңыртырға ла уйлап ҡуйғайны. Тик бынан да файҙа сыҡмаҫын самалай. Ғашиҡ булғаны юҡмы ни уның? Башта ҡыҙыҡ, эйе. Ә бер аҙҙан балға батҡан һағыҙаҡ шикелле, ҡанатың һәлберәп, нисек ҡотолорға белеп булмай. Унан ҡатын-ҡыҙҙың уға талпан кеүек йәбешә торған холҡо бар. Юҡ, был мәшәҡәттең дә кәрәге юҡ.

Тағы ниндәй ҡыҙыҡ бар һуң был донъяла? Элек юғарыраҡ үрләү теләге сәмләндерә ине. Инде юғарыла ла йөрөлдө, депутат та булып ултырҙы.

Дөрөҫөн әйткәндә, яйға һалынған тормошон үҙгәрткеһе лә килеп тормай. Зарланмай ул. Зарланырлыҡ та түгел. Ҡыҙыҡ түгел, тип кешегә һөйләп булмай бит инде. Ғүмер баҡыйына үңәсе өҙөлөрҙәй булып эшләп тә осон осҡа ялғай алмаған күпме ҡарт-ҡоро: «Нимә, ҡустым, осаңа май бөрҙөмө әллә?» — тип күҙеңде сәсрәтер.

Әүеҫләк аҫтындағы еләҫтә өмәгә һуңғы әҙерлекте күҙәтеп ултырған Сафуан ялҡау ғына шул хаҡта уйланы. Хәйер, бынау йәмле йәй көнөндә баш ҡатыра торған нәмә лә түгел инде был. Хатта уй ҙа түгел, йонсоҡкос бер тойғо.

Ҡатындар, ана, йүгереклэп йөрөп машинаға ашанды тейәй. Әйтерһең, бесән сабырға түгел, оло-ҡара туй яһарға барыуҙары. Хәйер, эштән бигерәк, бер мәрәкә инде. Ҡоҙаның ҡырҙан ике улы, бер ҡыҙы ғаиләләре менән ҡайтҡан. Улар өсөн ялан күреү, саф һауа һулау мөһим.

— Бынау ҡымыҙҙы ҡайҙа ҡуйайым, улым? Берәүегеҙ тотоп ултырмаһа, түгелеп әрәм булыр.

— Ҡымыҙ быуынды ала бит ул, әсәй, һыуһынға айран яҡшыраҡ. Әсе ҡатығың юҡмы?

— Ҡатыҡ та һалдым. Барһын ҡымыҙы ла, машина һөйрәй ҙә баһа.

Ул арала урам яҡҡа оҙон арбаға егелгән бер ат килеп туҡтаны. Ишек алдындағылар ҡапҡанан килеп ингән был ир менән ҡатынды шулай ҡыуанып ҡаршы

алмаһа, Сафуан, моғайын, уларға иғтибар ҙа бирмәгән булыр ине.

Икеһе лә йонсоу. Кейемдәре ярлы. Ире арзанлы спорт салбары, кәҙимге һиҙрәгән футболка кейгән. Яшыҡ ҡына ҡатыны шул тиклем ҡояшҡа янған. «Ҡара сутыр». Сафуандың иҫенә күптән онотолған ошо һүҙ килеп төштө. Күлдәген дә матур булһын тип түгел, кер күтәрһен өсөн һайлаған, ниндәйҙер бысраҡ төҫ. Бары башына ҡайырып ябынған яулығы ғына аҡ тап булып күренеп тора. Дөйөм иғтибарҙан икеһенең дә йөҙө яҡтырып, ауыҙҙары йырылып китеүгә алғы тештәренең дә теүәл булмауы күҙгә ташланды.

— Ҡотла, ҡәрендәш, — тип шарылданы ир ҡаршыларына йүгереп барған Мәстүрәгә, ҡоҙаның Мәскәүҙән ҡайтҡан фән кандидаты ҡыҙына. — Зәбихулла абзыйың да ҡартатай булды! Малай, өс кило ла ете йөҙ.

Эргәһендә шулай уҡ балҡып торған ҡатыны Сафуандың ғәжәпһенгән ҡарашын тойоп тартынды, яулыҡ осо менән ауыҙын ҡаплай һалды.

«Хәйерсе үрсеткәнгә лә шул тиклем ҡыуана икән кеше». Көтмәгәндә башына килгән уҫал уйына Сафуан үҙе лә ғәжәпләнде. Тик ниңәлер, әллә хөртәмшә ҡиәфәттәре менән ғәҙәттән тыш шәп кәйефтәре тап килмәгәнгә, ҡанығҡты ла ҡуйҙы был икәүгә. Бигерәк тә ямаҡай бисәһенә.

— Етешһеҙерәк йәшәйҙәр шул, — тип ҡуйҙы һәнәктырма тотоп эргәһенән үтеп барған ҡоҙаһы Сафуандың уйын төшөнгән кеүек. — Алты малай. Өлкәнен былтыр өйләндереп башҡа сығарғайнылар. Ана, бөгөн ейәнле булып тороуҙары. Икенсеһенә быйыл туй яһанылар. Өсөнсөләре армияла. Игеҙәктәре военкомат юлында. Кинйәләре мәктәптә уҡый. Балаларының береһе лә ныҡлап аяҡҡа баҫып китә алмаған шул әле.

«Ошолар ҙа, донъяла йәшәйбеҙ, тигән була инде, — тип уйланы Сафуан үҙенән саҡ ҡына йәшерәк был икәүҙе йәлләүҙән аңлайышһыҙ ләззәт кисереп. — Ниндәй генә рәхәт күрҙеләр икән, бахырҙар?»

Үҙе лә ауылдан сыҡҡан малай — аҙыраҡ күҙ алдына килтерә Сафуан уларҙың тормошон. Йәйен-ҡышын резина итектә мал араһында. Ауырырға ла ярамай хатта. Малдың тамағы туҡ булһын, һыйырың ваҡытында һауылһын. Ғүмерең буйы малға ҡол. Ҡыш көрт баҫып китә, яҙлы-көҙлө тубыҡтан бысраҡ. Өс ай йәйҙе күҙҙә-

ре сығырҙай булып көтөп алалар ҙа, йәнә бесән, утын. Йәйге йәннәтен дә инде ташҡа үлсәйем, себен дә серәкәй, күгәүен дә һыйыр ҡойроғо.

Ауыл кешеһенең тормошон эт көнөләй күргеһе килеүе үҙен бер нәмә лә ҡыуандырмаған, күңеле үҙәктән ҡороған ағас кеүек булып барған өсөн үс алыуы инеме? Аңламаны.

Урынлы-урынһыҙға бер көләмәс иҫенә төштө.

...Теге донъя, имеш. Дәүләт етәкселәренең төрлөһө төрлөсә шыйыҡ батҡаҡҡа батҡан. Ленин билдән, Сталин муйындан, Андропов тубыҡтан, ә Брежневтың табанынан ғына тора, ти. Бөтәһе лә: «Бәй, һин шул тиклем гонаһһыҙ түгел дә баһа», — тип аптырағанға: «Шауламағыҙ, мин Хрущевтың башына баҫҡанмын», — ти икән.

Шуның кеүек Сафуан да үҙе батып барған күңел һаҙлығынан бынау ауыл бисәһенең башына баҫып ҡалҡырға маташа ине, ахыры.

Ниһайәт, әҙерлек тамамланды. Ризыҡ-әүкәтте, ҡаҙанды машина багажнигына, салғыларҙы ат арбаларына тейәнеләр.

— Сафуан ағай, ҡайһы машинаға ултыраһың? — тип көтәүелләгән йәштәрҙе:

— Машинала йөрөгән бар ул... — тип шаяртты ла Сафуан ҡоҙаһының арбаһын һайланы. Атайһыҙ үҫкәс, ғүмере буйы утын-бесәнгә ат менән йөрөгән тиҫтер малайҙарына ҡыҙығыуын иҫенә төшөрҙө.

— Сәмиғә еңгә, әйҙә, елдертеп кенә алып барам, — тип ямаҡ бисәне саҡырҙылар. Ул башта ымһына биреп ҡуйғайны ла, арба төбөнә тырма-фәләнде йәтешләп булашҡан иренә ҡарап:

— Ҡуй, ярар, — тине, баш тартты.

«Әллә ире ҡыҙғаныр тип шөбһәләнә, байғош», — Сафуан көлөмһөрәне.

Ҡатын уның уйын аңлағандай:

— Рәхмәт, ҡәйнеш, минһеҙ ағайыңа күңелһеҙ була, — тип өҫтәне.

Арбаларға урынлашҡан арала Сафуандың күҙе «ҡара сутыр»ҙың балтырҙарына төштө. Ҡан тамырҙары ҡарағусҡыл күк булып ҡалҡып сыҡҡан, ҡайһы бер урында хатта ҡанһырап тора. Ҡарарға имәнес. Ә бит кемдер уны ла, матурым, тип яратҡан булалыр...

Келтер-келтер генә юлландылар. Ҡоҙаһы алдан, Зәбихулланың аты арттан төшөп алды. Сафуан үҙенең

лерт-лерт юрткан ат арбаһында сәскәле болондар аша һуңғы тапкыр ҡасан үткәнен дә оноткан икән. Ә машина тәҙрәһенән донъя бөтөнләй икенсе төрлө күренә, хуш еҫе юғала.

Ҡоҙаһы урындағы тәртипһеҙлектәр тураһында һөйләп бара.

— Ил ҡайғыһы, халыҡ мәнфәғәте тигән нәмә аслан бөттө.

Сафуан ялт иттереп ҡарап ҡуйҙы. «Был һүҙҙәр күптән үҙ кеҫәһен ҡайғыртҡан хәйләкәрҙәр өсөн байраҡҡа әйләнде, баһалары юҡҡа сыҡты бит инде». Унан кем арбаһында ултырғанын, был төшөнсәләр изге һаналған урындар ҙа барлығын самаланы.

— Эш буйынса бараһың — бәләкәс кенә дәрәжә эйәһе булғаны ла ришүәт көтөп өмөтөн һәлберәтә. Килеп ултыралар ҙа урлаша башлайҙар.

«Әгәр ил буйынса миңә мәғлүм булғандың барыһын белһә, нимә тиер ине икән? — тигән уй елдереп үтте Сафуандың башынан. — Әммә икенсе яғы ла бар бит, — тип эстән генә бәхәсләшеп китте. — Берҙән, юғарыла ла бик анһат түгел».

Был даирәлә уңыш ҡулыңдан эш килеү-килмәүгә генә бәйләнмәгәнен аңлаған әсәһе улының фән юлынан китмәй, етәкселеккә ынтылыуына, Брежнев заманында уҡ:

— Әллә инде, балам. Түрә булыр өсөн һарыҡтар араһында бүре, бүреләр араһында һарыҡ була белергә кәрәк, — тип шикләнгәйне. Әсәһе шуны күҙ уңынан ысҡындырған. Бүреләр араһында бүре — ҡойроҡто бот араһына ҡыҫтырғаны түгел, тешен ыржайтырға әҙер торғаны — була белеү ҙә мөһим. Йыш ҡына, русса әйтмешләй: «Йә, был юлы кемгә ҡаршы дуҫлашабыҙ?» — тигән хәлгә ҡалаһың. Ҡорбанлыҡҡа тәғәйенләнгән ул берәүҙе йолҡҡослап ырғытҡас, һәр кем үҙ юлына китә. Икенсе тапҡыр инде ҡорбан һин үҙең булыу ихтималы аңында һәр саҡ ҡалтырап тора. Гелән шул хәүеф менән йәшәйһең.

Ә власть, байлыҡ, дәрәжә — үлемесле сир. Уны йоҡторҙоңмо, бөттө. Власть менән дәрәжәңде ҡасан ысҡындырыуың билдәле булмағас, исмаһам, аҫтыңа бол яҫтап алып ҡалғы килә, үҙеңә, балаларыңа, ейәндәреңә етерлек итеп.

Ярай Сафуандың был йәһәттән башы ауыртмай хәҙер. Ваҡытында ҡыбырлап ҡалған. Үҙенең ыҡсым ғына

бизнесын яйға һалғайны. Законлы юл менән, әлбиттә. Хәҙер шул яҡшы сәғәт кеүек текелдәп кенә эшләп тора.

«Нисек күрмәйҙәр, нисек белмәйҙәр урлашҡандарын?» — тип аптыраған була ҡоҙа. Ниңә күрмәһендәр? Кеҫәндәге тиненә ҡәҙәр беләләр. Артыҡ хаттин ашмаһаң, итәк-сабыуыңды йыйып йөрөһәң, тейешле кешегә ярай, иң мөһиме, бүлешә белһәң, әлбиттә, аҙмы-күпме үҙ бурысыңды атҡарһаң, түрәлегеңде оҙонайтаһың.

Ҡомһоҙ ҡарашы менән гөлгә күмелгән болондо һөҙөп барған Сафуан:

— Аһа, ҡоҙа, анау һарына түгелме һуң? — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Шул. — тип йөпләне ҡоҙаһы ҡәнәғәт тауыш менән. — Һуғыш йылдарында күпме кешене ас үлемдән ҡотҡарып ҡалған һарына. Бик һирәк, бөтөү сигендә ине, һуңғы йылдарҙа күренә башланы.

Ҡоҙа йәне әсенеп ошо тәбиғәт ҡомартҡыһы булырлыҡ ерҙәрҙе ситтән килгән байҙарға һатырға ҡырсынған түрәләр хаҡында һөйләргә кереште.

Битарафлығының сәбәбен зирәк ҡоҙаһы дөрөҫ аңлап ҡуймаһын тип хафаланған Сафуан, ниһайәт:

— Тормош арбаһы артыҡ шәп китеп түңкәрелмәһен өсөн тәгәрмәскә таяҡ тығыусылар ҙа кәрәк, тигән фарман күктән үк ебәрелмәнеме икән, ҡоҙа? Һуңғы осорҙа, аптырағас, шулай тип тә уйлап ҡуйыла, — тигән булды.

Ҡоҙаһы сәгер күҙҙәрен һирпеп:

— Ул таяҡ тығыусылар үтә күбәйеп китте бит әле, — тиеү менән сикләнде. — Арбаны бөтөнләй емереп ҡуймаһындар тип ҡурҡыла.

— Ҡурҡытырһың һине!

Әкәмәт кеше инде ул ҡоҙа. Исеме лә бит уның есеменә тап килгән — Ғәҙелгәрәй.

Ғүмере буйы түрәләр менән борсағы бешмәне. Күҙҙәрен сығарғанса әйтә лә үҙе дөрөҫ һанағанды эшләп тик йөрөй. Түҙәләр-түҙәләр ҙә ҡыуып сығаралар. Ул етәксәлек иткәндә гөрләтеп эшләгән коллектив башта көйләнгән юл менән бара бирә лә оҙаҡ та тормай аҡһай. Быны йәнә саҡырып алалар. Үҙе килә тағы. «Беткә үс итеп тунды утҡа яғып булмай инде». Бына уның яратҡан әйтеме. Йәнә эште яйға һала. Һуңғы бер нисә йыл — ауыл мәктәбендә директор. Инде нисәмә тапҡыр сығаралар ҙа, инәлеп, кире саҡыралар.

— Һуңғы саҡырғандарында туп-тура һораным: «Йә, был юлы ниндәй мохтажлығығыҙ бар?» «Мәктәптең башын яптырырға кәрәк тә, бүленгән аҡса етерлек түгел», — тип асығын әйтеп ултыралар. Спонсор табып, яптырҙыҡ. Инде котельныйға ремонт кәрәк. Шуға күрә әлегә тоталар. Шул арала мәктәпкә бәләкәй генә икмәк бешергес алып ҡайтып ҡорҙоҡ. Ярайһы ҙур ғына урындарҙа элекке уҡыусыларым байтаҡ бит. Шулар ярҙам итә. Умарталығыбыҙ бар, яҙ башынан бер нисә башмаҡ алып һимертәбеҙ ҙә итен һатып тотонабыҙ. Шул арҡала быйыл балаларҙы түләүһеҙ ашаттыҡ, ауыр йәшәгәндәргә китап-дәфтәр, кейем-һалым алырға ла етә, — тип һөйләп ултырҙы ана кисә генә. Шулай булғас, илдә выждан-лылар ҡалмаған, тип һис тә әйтеп булмай. Булдырам, эшләйем, тигәндәр ҙә күп. Ана, Ғәҙелгәрәйҙең үҙе кеүек.

Ихлас һоҡлана Сафуан уға. Ихтирамын ҡәҙер иткән, һанлаған бик һирәктәр араһында ошо ҡоҙаһы иң беренсе тормай микән? Депутатлыҡҡа тырышып йөрөгәнендә бик көслө, бай, хаяһыҙ конкуренттарын ҡоҙаһы арҡаһында йырлап тигәндәй үтте лә китте бит ул.

Ҡайһы ғына ауылға бармаһындар: «Ғәҙелгәрәй димләгәс, һайлайбыҙ уны», — ти ҙә ҡуя ине халыҡ. Тик аҡлай алдымы һуң Сафуан ышанысты? Ғөмүмән, уны аҡлау мөмкин түгел икәнен аңлай микән ҡоҙаһы?

Сафуан елегенә төшкән уйҙарынан ялҡып йәнә артҡы арбала килгән икәүгә бороллдо. Зәбихуллаһы бик мәрәкә икән. Балалар шикелле шарҡылдап көлөп ебәрһә, ҡушылмайынса сарaң юҡ. Әле лә ямаҡ бисәһенең көңгөр-ҡаңғыр ниҙер һөйләүенә башын артҡа ташлап тороп көлә лә ебәрә, көлә лә ебәрә. Ә теге нимә һөйләй икән? Сафуандың да тыңлағыһы, рәхәтләнеп көлгөһө килеп китте.

Бына ир атын туҡтата һалып, эргәләге тау итәгенә атлыҡты. «Нимә тапты икән унда?» — тип ҡыҙыҡһынған Сафуан уның шул арала бер услам ҡуҙаҡлы еләк өҙә һалып кире йүгергәнен күрҙе. Сәйер булып китте: «Әллә үҙҙәренсә яратыша инде былар ысынлап та?» — тип көлөмһөрәне.

Уның был ҡарашын күҙәткән Ғәҙелгәрәйҙең иренәнә һиҙелер-һиҙелмәҫ йылмайыу ҡунды. «Яратышыу әллә ҡыҫҡа итәкле, ҡыҙыл тырнаҡлы дорфа секретаршалар менән «һин дә мин — Мөхәммәтәмин» тип кәпрәйгән

йыуан ҡорһаҡлы төрләр араһында ғына була тиһеңме?» — тигәнде аңлатманымы икән был мут йылмайыу...

Бесәнлеге ифрат матур урында икән ҡоҙаның. Ашантыны, кәрәк-яраҡты бушатҡан арала уҡ Сафуан ни өсөн ҡоҙаның балалары был икәүгә: «Һеҙ юҡҡа яландың йәме буламы ни ул?» — тип сорашҡандарының сәбәбен төшөндө.

Зәбихуллаһы балыҡҡа әүәҫ икән. Тәбиғәткә һыуһаған ҡала халҡы уның тирәһенә өймәкләшкән. Арба төбөнән йәтеш кенә мурҙа кейек нәмәһен килтереп сығарҙы. Эргәләге тап-таҙа йылғаға күрһәтеп, нимәләр өйрәтә. Үҙе килеп тороп мәрәкәсел, йор һүҙле, шарылдаҡ.

Сәмиғәһе шым, бөтмөр. Килеп төшөү менән бөтөн ризыҡты йәтеш итеп урынлаштырҙы: һөтөн-майын яҡындағы шишмәгә, итте сая һалып ҡаҙанға, икмәк-маҙарҙы сысҡан тейә алмаҫтай үргә. Тауыш та күтәрмәй, тыңлата ла белә.

— Еңгә, һиңә армияға баш командующий булырға кәрәк, — тип шаярталар.

«Эйе, ниндәй һәләтле менеджер әрәм булып йөрөй тиҙәк араһында», — тип уйларға мәжбүр булды Сафуан да.

Үҙе кешенең тын алышынан уҡ хәл-әхүәлен, уйтеләген абайлай, ахыры, был Сәмиғә тигәндәре. Ғәҙелгәрәй ҡоҙаға дегәнәк япрағы өҙә һалып һондо:

— Ағай, фуражкаңдың эсенә һалып кей, башыңдың ауыртҡаны баҫылыр.

Үҙе эшкә һанамайыраҡ ҡараған был «байғоштар»ҙың ҡапыл-ҡара дилбегәне ҡулға алыуҙары һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә булып өйрәнгән Сафуандың зитына тейә яҙып ҡалды ҡалыуын да: «Ярар, был уларҙың донъяһы», — тип ризаһыҙлығын тыйҙы.

Ул арала Сәмиғә ҡыйынһынғандай торған Сафуанға:

— Анау түмәләстә еләк тумарлап ята, ағай. Аҡтауҙың һыйынан ауыҙ итегеҙ, — тип ҡуйҙы. — Ейәнсәрегеҙгә күстәнәс тиһәгеҙ, бына, йәтеш кенә тырыз да бар.

Ниһайәт, сабынға төшөргә йыйындылар. Сафуан үҙенә оҙон һаплы, елле бер салғы эләктермәксе ине, әлеге лә баяғы, күрмәгәне юҡ Сәмиғә икенсе бер еңел генәһен тотторҙо:

— Ошоноһон алығыҙ, ағай, уныһының тотҡаһы уңайһыҙ.

Саба торған урын — һөҙәк кенә тау итәге. Теҙелешеп төшөп киттеләр. Сафуан да ҡалышманы.

Алдындағы сәскә келәменә хайран булып, бындай ҙа матурлыҡҡа ҡул күтәрергә ҡыймай ҡарап торҙо бер аҙ. Унан тәүәккәлләне. Өйрөлтөп һелтәп ебәреүгә хуш еҫле сәскә көлтәһе ҡаршылдап, аяҡ аҫтына төшәлде.

Салғының да сәс бәкеһе кеүек үткере эләккән, көс-ҡеүәт тә бар икән үҙендә. Инде артыҡ уйланып торманы, еңел генә өйрөлтә сабып алды ла китте. Тән бер белгән һөнәрҙе һис онотмай икән. Тол ҡалған әсәйгә быуыны ҡатмаҫ борон уҡ таяныс булып салғы тотҡан малай бит ул.

Тәүге бер-ике бакуй ҡыҫҡа булған икән. Тора-бара эштең уйын түгеллеге һиҙҙертә башланы йыл әйләнәһенә ҡәләмдән ауыр нәмә күтәрергә тура килмәгән Сафуанға.

Йәштәр йылғыр:

— Ағай, үксәңде абайла, — тип уҙалар ҙа китәләр.

Был бакуйы самаһыҙ оҙон, ахыры юҡ кеүек тойолдо Сафуанға. Маңлайынан шауҙырлап аҡҡан ҡара тир күҙен әсеттерә, шуны һыпырып алыу ҡайғыһы ла юҡ. Ҡолағы шаулап, күҙе тона башлаһа ла, бирешкәнен күрһәтмәҫкә тырышып ятыуы. Ә башында бер уй үрмәксе ауына эләккән себен кеүек тыбырсына: нисек тә осҡа барып сығырға, ошонда һөрләгөп барып ҡапланмаҫҡа.

Ярай әле иң артта һөйрәлмәй. Унан бер нисә аҙымда Сәмиғә, һәлмәк кенә һелтәнеп, ҡыршылдығын сыға. Ҡабаланмай, тора-тора ла туҡтап салғыһын яный. Эйелеп еләк тә ҡабыштыра, буғай. Арттан беренсе булмағаны Сафуанға саҡ ҡына булһа ла көс өҫтәне. Ул да йәнтәслим ашыҡмай башланы. Дөрөп алып барған йәштәр ҙә, ана, күләгәгә ултырып, тәмәке көйрәтә, рәхмәт яуғырҙары.

Салғы үткерләү һылтауы менән аҙыраҡ хәл алырға ла була икән. Ә шулай ҙа арығас, сабыуының рәте китеңкерәне. Тәүҙә алын таҡыр итеп ҡыра тартһа, әле сапҡан ере малайҙарҙың үтмәҫ ҡайсы менән мөнтәлгән башы кеүек: унда ла, бында ла тырпайып ҡала.

Үпкәһе үңәсенә тығылһа тығылды, Сафуан бакуйының осона барып сыҡты. Хатта ергә ҡапланмаҫҡа ла ихтыяр тапты. Һыр бирмәгәненә һөйөндө. Ә Сәмиғә байтаҡ артта ҡалған. «Арыйҙыр ҙа инде».

Айранлы сәйгүндән тамаҡ сылатып, аңды-тоңдо абайларлыҡ хәл алғас, үткән юлына тағы бер ҡарағайны, ҡапыл бөтәһен дә аңланы ир аҫылы.

Сәмиғә таһылы юҡлыҡтан түгел, Сафуандың хәлен аңлап, уның сәмен аяғанға артта килә. Етмәһә, башта үҙ рәтен самаламай үтә киң һелтәнгән Сафуан, арығас, ҡоласын тарайта барған. Әле Сәмиғә бер үҙе ике кешелек араны өйрөлдөрөп ҡырырға мәжбүр. Хатта, ана, Сафуан артынан уның булдыҡһыҙлығына көлгәндәй үрә ҡатып ҡалған үләндәр ҙә ауған.

Бына ҡатын, бакуйҙың осона сығып еткәс, туҡтап маңлай тирен һөрттө лә күҙҙәре Сафуандың ҡарашы менән осрашты. Уның, ғәфү үтенгәндәй, тыйнаҡ ҡына йылмайыуынан түрәнең йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Көтмәгәндә күргән ярҙам өсөн рәхмәт инеме был?

Ә тотанаҡлы йылмайыуы, аҡыллы ҡарашы, ни ғәжәп, уғата һөйкөмлө күренде. Сафуандың күптән инде бер кемдең дә күҙенә шул рәүешле ҡарағаны юҡ ине, ҡараһында емелдәгән һипкел кеүек таптарына тиклем абайланы.

Ул арала ҡаҙан эргәһенә саҡырып, тимер зыңҡылдаттылар.

Төшкө аштан һуң, ә ҡымыҙ ысынлап та быуынды ала икән — Сафуанды рәхәт кенә итеп йоҡо баҫты. Бармаҡ ҡыбырлатырлыҡ та хәле ҡалмауынан ләззәтләнеп — «нирвана» ти торғайны бындай нәмәнең рәтен белгән бер һөйәркәһе — ҡайын күләгәһендә ойоп китте. Йоҡо аралаш эргәһендә тырма теше рәтләгән ҡоҙаһының рәхәт ҡыштырлауын тойҙо.

Ҡатынының бөгөн нишләптер кешенән артта ҡалыуын, салғыһы үтмәҫкә юрап, үҙен ғәйепле һанаған Зәбихулла бөтә салғыларҙы ла тапарға булып киткән, зыңғылдауы әллә ниндәй ҡәҙерле хәтирәләргә һөйрәй. Йәштәр йылға буйында сырҡылдаша. Ҡолағына ҡатындарҙың мөңгөр-мөңгөр генә әңгәмәләшкәне салынды.

— Айсыуаҡтың ҡайтҡанын көтәбеҙ инде, — тине Сәмиғә балалары хаҡында һорашҡан Мәстүрәгә. — Бер көн телефондан һөйләшеп алдыҡ. Ҡалырға өгөтләйҙәр икән.

— Эргәмдә командирым баҫып тора. Нимә эшләйем икән, әсәй? — ти.

— Ағайың Чечнянан урап ҡайтҡансы тешләнеп йөрөп ауыҙымда тешем ҡалманы. Һинән хат көтөп күҙем сыға яҙҙы, — тинем. — Диңгеҙ төбөнә төшөп китәләр ҙә, ярты-

шар йыллап хаты килмәй. Үҙәккә генә үтте бит. Берәй эш табылыр, ҡайт, балам, тинем. Тыңланы, рәхмәт яуғыры.

— Улдарығыҙ үҙегеҙгә оҡшап уңған, аҡыллы, еңгә. Әрәм булмаҫтар, — тип йыуатты Мәстүрә.

— Хәҙер бына Айнур менән Илнур китергә тора инде. Үҙем барҙым хәрби комиссариатҡа. Айырһағыҙ, риза түгелмен, тигәйнем. «Юҡ, игеҙәктәрҙе айырмаҫҡа тигән закон бар», — тип торалар. Икәү булғас, бик ҡыйынға төшмәҫ әле, тип йыуанған булабыҙ.

«Күпме ғәм, хәстәрлек бер башына». Сафуан табын артында ла Сәмиғәнең барыһын да ҡарап, йә теге, йә был ризыҡты ҡул һуҙымына шылдырып ултырғанын күҙ алдына килтерҙе.

«Ниңә бөтөн ил хәстәрен бер Сәмиғә йөкмәргә тейеш? Бына һеҙ эшкә ашмай, һалдаттан ҡасып ятҡан улдарығыҙға ҙур-ҙур коттедждар һалаһығыҙ. Нишләп Сәмиғә һеҙҙекеләр өсөн дә хеҙмәт итеп, Ватан алдындағы бурысын намыҫ менән үтәп ҡайтҡан улдарына үҙәсе өҙөләрҙәй булып үҙе өй һалырға мәжбүр? Ҡайҙа ғәҙеллек? Сәмиғәнең дә был донъяла аҙыраҡ рәхәт күрергә хаҡы юҡмы ни?»

Сафуан трибунаға йоҙроғо менән асырғанып һуҡҡайны, тирә-яҡ гөрһөлдәп китте. Ә залда ултырған ҡалын-ҡалын ирҙәр бер-берейһенә ҡарашып:

— Кем ул Сәмиғә? Ҡайҙа ул Сәмиғә? — тип аптыраша.

Бейек мөнбәр артына баҫып Сәмиғәнең мәнфәғәтен яҡларға йөрьәт итеүенән бигерәк был хәстәрҙең йәнә күңел талабына әүерелеүенә йөрәкһенгән Сафуандың сикәһен еүешләтеп күҙ йәштәре туктауһыҙ аға, имеш.

Уянып китһә, баш осондағы киҫәк кенә болоттан ямғыр яуа. Хатта күк күкрәп маташа. Ҡояш балҡып торғанда йәшен дөһөрләгәнгә ғәжәпһенеп, был донъяға яңы тыуғандай, ҡымшанмай ята бирҙе Сафуан. Эре тамсыларҙың йәйғорҙоң бөтөн төҫтәрендә йылҡылдап өйрөлә-өйрөлә төшөүе әллә ҡайҙан, бейектән үк күренә.

Сафуанға элек тә бында булғаны бар кеүек тойолдо. Бынау аҡ ҡайындың анау ботағындағы суҡ тәлгәштә тирбәлгән семәрле япраҡ уға таныш бит. Ул ошоларҙың барыһын да күргәйне, бына был ҡоштоң һандуғасҡа оҡшатып сутылдатып һайрағанын, күгәүендең жыуылдап

осоп йөрөгәнен элек тә ишеткәйне. Ҡолағына салынған, күҙҙәренә ташланған, зиһене теркәп тә ҡуйған. Әммә элек ул был матурлыҡтан тышта ҡалған. Әле Сафуан, ни ғиллә менәндер, уларҙың бер өлөшөнә әйләнгән: анау үләндең йөнтәҫ япрағында дерелдәгән ынйыла, мөһабәт ағастарҙа, зәңгәр күктә мәғрур талпынып яй ғына осоп йөрөгән ыласында ул да бар. Ул — йыһанда, йыһан унда...

Уҙаман төшөм дауам итәме әллә тигәндәй, һаҡ ҡына ҡалҡынды, тирә-яғына күҙ һалды. Шул саҡ тормоштоң ҡабат үҙенә килеп ҡунғанын айырым-асыҡ тойҙо. Тотош йәшәйеш, ғаләм ҡабат килеп тулған да һулҡылдап ҡан тамырҙары буйлап тарала.

Бына инде бер һыуһын сабып өлгөргән бесәнселәр, салғыларын яурындарына һалып, еүеш үләнде яра-яра күтәренке кәйеф менән был яҡҡа ыңғайлай. Төш түгел, өн барыһы ла. Ул уяу, ә бал еҫе аңҡытҡан тылсым юғалманы. Ҡапыл Сафуан ошо матур донъяла Зәбихулла менән Сәмиғәләрҙең ихлас көләүе яңғырап торһа, был мөғжизәнең бер ҡасан да юғалмаясағын аңланы.

## БЫЙЫЛҒЫ ЯҘ<br>ЙОҠОЛАРҘАН ЯҘҘЫМ

Ул суҡышын юғарыға һонған, ә тамаҡ аҫты нәфис кенә һерелдәй. Сабый йоҙроғондай ғына кәүҙәһенән ағылған моң яҙға кинәнгән донъяны тылсымға сорнай. Үҙ йырына үҙе лә әсир, ахыры, илаһи йән. Хатта минең ҡул һуҙымы ергә килеп баҫҡанымды ла тойманы. Бәлки, күрәлер ҙә минең өсөн генә йырлай торғандыр? Үҙемдең уға ят түгеллегемде күңелем һиҙә. Ә шулай ҙа беҙ өсәүбеҙ бында. Ана, һары талдың йәшкелт-көмөш япрағына сумып был тарафҡа төбәлгән ике күҙ. Уларҙың эйәһе, хас минең кеүек, үҙенә иҫәп бирмәҫтән илаһи моңға арбалып, шау-сәскә алмағас ботағына ҡунған тылсымлы ауаздар инешенә ҡыйыная. Бына хәҙер инде уны айырым-асыҡ күрәм. Йомро тубырсыҡтай ғына ҡошсоҡ — инә һандуғас. Бына ул тәүәккәлләне, талпынды ла осто. Тертләнек: мин дә, һайраған һандуғас та... Сөнки башланырға торған мөғжизәлә уның ҡатнашыуы мотлаҡ. Инә ҡош та һауаға томоролған килеш керпек ҡағыр мәлгә хәрәкәтһеҙ ҡалды: үҙе атлыҡҡан моңдоң өҙөлөүе-

нә шаңҡыны... Моң өҙөлдө... Инә һандуғастың ошо юғалтыуҙан йөрәге шартлап ташҡа әйләнер кеүек тойолдо миңә. Ни ҡылырға?

Аяуһыҙ яҙмыш, исмаһам, хәҙер яһиллашмаһын өсөн ни эшләргә тейешмен? Шул уйымдан һандуғастың мине юҡҡа тышҡа әйҙәмәгәнен, был яҙ, был йыр, был таң һәм ошо ике йән — ошоларға минең шаһитлығым бөйөк бер әһәмиәткә эйәлеген ап-асыҡ аңлайым.

* * *

Мин тағы мәктәптән турһайып ҡайттым.

— Әллә ниндәй исем ҡушҡанһығыҙ ҙа... Малайҙар мине үсекләй...

Ирен киткән бәлшәйеп, ә тоғро ҡоралым — күҙ йәше — кәрәк булһа — бына-бына тубырлап ҡойолорға әҙер. Тик мин кинйәбикәһе алдында ҡояш аҫтында май кеүек ирергә торған атай бөгөн ни ғиллә менәндер бирешмәне, кеше араһындағы «Ҡырыҫ Сәлимйән» ҡушаматын аҡлап, ҡырт киҫте:

— Ярар, ҡуштыр, ана, Наташа тип. Силсәүиткә бар ҙа.

Шунан, алдындағы сәйен дә эсеп бөтөрмәйенсә, сынаяғын ситкә этте лә тышҡа уҡ сығып китте. Ә сабыр әсәйем ләм-мим өндәшмәй, йәһәтләп ҡашығаяҡ йыуырға кереште. Мин иһә көтмәгәндә алған рөхсәтте нимә эшләтергә белмәй шымғанмын. Дөрөҫөн әйткәндә, был ғауғам тәүгә түгел. Шаян малайҙар әләкләй, мин яр һалам. Атам өгөтләй: иң яратҡан ҡыҙыма һайлап ҡына ҡушҡан изге исем... Ә мин уның һайын мыжыйым. Ә бөгөн ана ҡайһылай булып китте.

Ни арала әсәйем түр яҡтан өҫ-башын алмаштырып та сыҡҡан.

— Әйҙә, — ти ул. — Матур итеп кейен.

Аптырап ҡалам. Шулай уҡ тиҙ?! Әсәй башымдағы таҫманы яңынан ҡупшылап бәйләй. Ҡиәфәтендәге тантананы күреп, шигем ҡалмай: силсәүиткә йыйынабыҙ, шунда.

Әммә етәкләп ҡапҡанан алып сыға ла бөтөнләй ҡаршы яҡҡа борола. Һораулы ҡүтәрелеп ҡарайым.

— Ҡәрсәңә барайыҡ башта, — ти әсәй. Ғәжәп, ул мине гел бер һүҙ әйтмәһәм дә аңлай. Туҡтап ҡалдым,

сөнки ҡәрсәмдән — атайҙың әсәһен беҙ шулай тибеҙ — буйтым шыртлайым. Сәбәбе: ул мине күргән һайын:

— Уй, ошо баланы иркәләтеп боҙоп бөттөгөҙ бит, — тип һамаҡлай. — Үтә иркә иҫәр кеүек булып китә бит ул.

Шуның өсөн әле, өйгә эш күп тигән һылтау менән ҡарышырғамы әллә, тип тә уйлаштырам. Тик ҡәрсәм өйөндә бер арбағыс — Сабира еңгәм бар. Мине күргән һайын ул, йылға өҫтөндә ҡанат киреп кинәнгән ҡаҙ ише, ҡолас йәйә. Шул тиклем шатлана. Шундай саҡта уның һөйөнөсөн Мәндүҙә әхирәтемдең ике йәшлек мырҙаһының ҡыуана белеүенә оҡшатам. Ә ҙур ғаиләнең оя төбө буларак наҙға сорналып үҫһәм дә — яҡшынан кем туйған — еңгәмдең яратыуы шундай рәхәт.

— Бикәс, — тип ҡулдарын һоноу менән ҡосағына тотош һеңеп китәм.

Әсәм оҙаҡлап икеләнергә ирек бирмәй, үҙ артынан әйҙәй. Уның серле ҡымтылған иренenән ниндәйҙер етди ҡарарға килгәненә төшөнәм. Тик әле төпсөнөүҙән фәтүә сыҡмаҫын да самалайым. Белеп бөткәнмен: ҡоростай атайҙы ҡамыр иткән минең мамыҡтай йомшаҡ әсәмде бөгөргә ҡулымдан килгәне юҡ.

Ҡәрсәмдәргә кәртә аҫтынан барһаң, күпкә яҡын, әммә әсәм оло урамды һайлай. Быныһы ла мине хәүефкә һала: ҙур йомошоң булмаһа, көпә-көндөҙ урам буйлап һәлмәк баҫып йөрөү күҙгә эш мәлендә, ай-һай...

Ҡәрсәм өйҙә яңғыҙ ғына.

— Беҙҙең килен ферма быҙауҙары тип өҙөлгән саҡлы ҡайһы бисә балаларын ҡәҙерләмәй, — тип хуплау ҡатыш бурылдап алды ул, башҡалар хаҡында һорашҡас. — Ә Сәлимәкәй быйыл ятаҡта ятып уҡый. Нишләп һаман астырмайҙар үҙебеҙҙең ауылда ҙур мәктәп, бала-саға ыҙалатып...

Әсәйем уға ҡушыла:

— Беҙҙең Мөслим һаман көн һайын ҡайта ла килә, шул да булдымы инде уҡыу.

Ауылыбыҙҙа ишектән инеү менән йомошоң хаҡында ҡысҡырыуҙы килештермәйҙәр. Әсәм ҡәрсәмә төйнәгән йыуаса-фәләнен тоттороп, уныһы оҙаҡлап доға ҡылды. Шунан ғына сират етте килеүебеҙҙең төп маҡсатына.

— Бейем, — тип һүҙ башланы әсәйем тантаналы тауыш менән. — Ҡыҙыбыҙ ҙурайҙы инде. Уны аҙаш абзыһы менән таныштырырға мөҙҙәт еткәндер, тип килеүебеҙ. Уҡыуы ла яҡшы, тәртибенә лә зарланыусы юҡ, —

тип өҫтәне, ҡәрсәм риза булмай ҡуймаһын тигәндәй. Тиҫбе тартып ултырған ҡәрсәмдең ҡулы һереләп китте әллә ҡалай. Шул саҡ ҡапыл унынң инде бик ҡарт, һауһыҙ икәнен тәү тапҡыр абайланым.

Ул боронғоса бөрмәсләп тегелгән күлдәгенең иҙеүен ысҡындырып, атлас таҫма баҫылған күкрәксәһенең кескәй кеҫәһенән йәтеш кенә асҡыс килтереп сығарҙы. Был асҡыстың мөйөштә ултырған зәңгәрле-аҡлы сатрашлап биҙәлгән ҙур һандыҡтан икәнен беләм. Ғәжәбемдең һуңғы сигенә етеп ҡәрсәмде күҙәтәм. Абзыйы, тине ләһә әсәм. Һандыҡта абзый була тиме ни?

Ҡәрсәм иһә, һандыҡ өҫтөндәге мамыҡ мендәрҙәрен урындыҡ өҫтөнә күсерә-күсерә, ниндәйҙер бер үткенсе фото төшөрөүсене әрләй.

— Ҙурайта алам, тигән булып таҫма телләнеп алып китте лә юғалтты иң матур, йылмайып төшкәнен. Сабира килен күпме йөрөнө йыландай телен сығарып: тапманым, тине лә ҡуйҙы, битһеҙ. Ултырып та иланым бәпкәмде йәлләп.

Бына һандыҡтың ҡапҡасы ла асылды. Ҡыҙыҡһынып ынтылмаҡсы инем — эсендә нимә бар икән тип — әсәм ипләп кенә тыйҙы: «Һинең кеүек аҡыллы ҡыҙҙарға килешкән эш түгел».

Иң элек унан боронғо ҡалын китап сыҡты. Уның Ҡөрьән тип аталғанын да беләм. Унан — аҡ төйөнсөк. Төйөнсөктән — бик күп өскөл ҡағыҙҙар. Уларҙың һуғыштан һалдаттар ебәргән хат икәне лә мәғлүм миңә. Әсәмдең һандығында ла һаҡлана ундай өсмөйөштәр. Атайым яуҙа йөрөгән саҡта яҙған. Берәүһен уҡып та ҡарағаным бар. «Ҡәҙерле балаларым, улдарым Хисмәтулла менән Нурислам, ҡыҙҙарым Гөлниса менән Гөлйөҙөм», — тип һанап кителгән. Мөслим ағайым менән миңә генә юҡ сәләм, сөнки беҙ — һуғыштан һуң тыуған балалар.

Бында ла түгел икән ҡәрсәйем эҙләгән хазина. Ул хаттарҙы бармаҡтары менән аралап иркәләне лә кире һалды. Шунан бер тимер ҡумта сығарҙы, унан ситтәре оҫталап ҡайылған батист ҡулъяулыҡты яҙҙы һәм, бармаҡтарын ҡалтырата-ҡалтырата, һарғайып барған бер фоторәсем алды.

— Бынауғынаһы ҡалды ҡолонсағымдың, — ти ҡәрсәм. Күҙ төбөнән бөртөк кенә күҙ йәше битен өтөп төшә.

Ҡәрсәм йотлоғоп һүрәткә текләй, унан миңә бер һирпелеп ала — аңлап торам башындағы уйҙы: лайыҡмы

был бала ошондай ҡомарткыға ҡағылырға? Тотош ғаиләбеҙҙең һағыныуы, һағышы тупланған ошо кескәй һүрәткә — ҡапыл ғына шуны тоям. Ике усым үҙенән-үҙе асыла, өлкәндәр әппәр итергә өйрәткәндәгесә.

Текәлгәнмен дә киткәнмен: рәсемдәге күркәм йөҙҙән күҙҙе айырып алмалы түгел. Шулай ҙа арбағыс булыр икән кеше йөҙө. Ә күҙҙәре.

— Күҙҙәренә ҡара әле, — ти әсәй шым ғына. — Кемдекен хәтерләтә ағайыңдың күҙҙәре?

— Сабира еңгәмдекен, — тип яуап ҡайтарам. — Мин уларҙы күргәс тә оҡшаттым. Уныҡы ла шулай мөлдөр.

— Эһ... — Һулышы һағылғанға ҡайырылып ҡараһам, әллә ҡайһы арала еңгәм инеп эргәмә теҙләнгән. Ә күҙҙәре ысынлап та мөлдөр, тойғолары артып, түгелеп бара.

— Үҙеңдең күҙҙәрең тас ағайыңдыҡы, бикәс, — тип шыбырлай еңгәм.

— Әллә йырлаймы был бала? — тип һорай ҡәрсәйем.

— Юҡ, бейем, — ти әсәм, уның күңелен ҡырғанына үкенгәндәй. Унан ҡыуанысλы өҫтәй: — Ә шиғыр сығара!

— Собханалла, собханалла, — ти ҡәрсәм, йөҙө яҡтырып. — Аллаһы Тәғәлә тел асҡысы, зиһен үткерлеге бирһен. — Шунан мине аптыратып (уй, баланы боҙоп ҡына бөтәһегеҙ инде, тип туктауһыҙ сурыткан ҡәрсәй бит) тарамыш бармаҡлы көрәктәй ҡулы менән арҡамдан һыйпай. Әллә танһыҡҡа булғанға талапсан ҡәрсәйҙең иркәләүе, күҙемә йәшем килеп төйөлә.

Шулай итеп, һигеҙенсе йәшемә киткәндә исемемдең серен ныҡлап аңланым. Быға тиклем бер тапҡыр ҙа күрмәгән ағайым йөрәгемдә ғүмерлеккә урын алды. Ә исемгә, гүйә, ағайымдың күркәме йоҡто, ул миңә донъяла иң матур булып яңғырай хәҙер: Йомабикә. Йомабай ағайымдың аҙашы.

— Көллөбөҙҙөң бәхете өсөн үҙенең ғүмерен ҡорбан иткән Йомабай ағайың. Атайыңдың иң яраткан, иң аяулы мырҙаһы, — ти әсәй ике серҙәш кеүек сөкөрләшеп өйөбөҙгә кире ҡайтып барған саҡта.

— Егерме бишкә лә етмәй һәләк булды. Кисерәһе булып та кисереп өлгөрмәгән бәхете, инсеәнеп тә үҙенә яҙмаған барса яҡшылыҡ ошо исем аша һиңә ағыла хәҙер, — тине атам, ағайым хаҡында тәфсилләп һорашҡас. — Кеше бәхетен ҡурсалап изге яуҙа ауған батырҙарҙың исеме ырыҫлы була.

Бына ниңә наҙға төрөнөп йәшәп ятам икән был донъяла. Аҙаш абзыйым үҙенең мул өлөшөн минең өлөшөмә ҡуш иткән дә, шуға бәхетем артып ташып тора икән, баҡһаң.

* * *

Ун һигеҙемә яңы сыҡҡан сағым. Сабира еңгәм бер көн һорай ҡуйҙы:

— Нишләп һаман кейәүгә сыҡмайһың, бикәс?

— Уҡыйым әле, еңгә, — тимен. — Ниңә?

— Рәхәт бит йәнең яратҡан менән. — Еңгәм мөлдөр күҙҙәрен көлдөрөп яуап бирә. — Көслө беләгенә башыңды һалаһың да тын алышын, йөрәге тибешен тыңлап йоҡоға талаһың. Һулҡылдап типкән йөрәге, әйтерһең, йоҡонды ҡарауыллай. Таң һыҙылғас, үпкәненә көлөп уянаһың, ҡыҫҡа төн үткәнсе ул һине, һин уны һағынып өлгөргәнһең.

Үбешеп тә танһығы ҡанмай тол ҡалған еңгәмдең саф, керһеҙ һағышынан бәғерем һыҙлай. Ҡыҫҡа төн үткәнсе, тигәне күңелдә сыйып үтә.

...Әлдә ул йәй сәсеү иртә бөткән. Һабан эше теүәлләнгәс, туйлап киләһе муллыҡҡа нигеҙ һалған уңғандарҙың күңелен уйлау фарыз. Балан сәскәгә күмелһә лә, гөлйемеш һандуғасты телдән ҡалдырып өлгөрмәгән саҡта йәше-ҡарты район һабантуйына йыйына.

Фин һуғышының осмотона эләгеп, яраланып, байтаҡ ваҡыт госпиталдә дауаланып, шул көндәрҙә генә йәнтөйәккә ҡайтып төшә Йомабай — егерме өс йәшлек һалдат. Яңы ун алтыһын тултырған Сабира һылыу ҙа, бейеүселәр бәйгеһендә көс һынашып, ауылына дан юлламаҡ булып килә һабантуйға.

Ат сабыштырып, көрәшселәр өсөн һай-һаулап арыған халыҡ йыр-бейеү майҙанына йыйыла.

— Һаҡмар һандуғасы үҙе йырламаҡсы икән, — тигән хәбәр китә тамаша көткән кешеләр араһында.

Бәйге лә бәйге, тип дәртләнешкән йыраусыларҙың кикреге буйтым шиңгәнгә ғәжәпләнә Сабира. Маҡтауға һаран, төртмәсел халыҡтың, үтә ныҡ шаштырып, кемделер һандуғас, етмәһә, Һаҡмарҙыҡы, тип үк ебәреүенә йәнә аптырай.

Татлы менән затлыны иң аҙаҡҡа ҡалдырырға тырышалар, ғәҙәттә, тамаша ваҡытында. Әммә был юлы сәхнәгә иң тәүҙә Һаҡмар һандуғасы сыға. Һалдат кейемендә, яурынына йәтеш кенә итеп йәшел елән һалған. Һомғол, буйсан. Булмышы, йөҙө менән көләп, балҡып тора.

— Һағындырған. — Ҡарашы менән киң майҙандағы ғәм халыҡты берҙәй һөйөп сыға Йомабай. — Иҫән-аман иләмә ҡайтырға насибы тейһә, күкрәк кireп, ялан яңғыратып «Урал»ды йырлармын, тигән әйтеүем бар ине. — Тауышы бәрхәттәй йомшаҡ, бешкән балдан ҡуйы, сәскә майы кеүек яғылып тора. — Рөхсәтме, туғандар?

Риза булмаған ҡайҙа?! Афарин!

Майҙан бер тынаға геүләшеп баҫыла. Көнө бер аҙ елле ине, әммә хатта болондо уратҡан ағастарҙың япраҡ шыбырлатыуы ла тына. Ихтирам һәм зауыҡланырға ниәттән башҡа, хәүеф тә туҡылғайны был тынлыҡта. Һуғыш һүҙе әйтелмәне яу ялҡынында өтөлөп ҡайтҡан һалдат тарафынан, шулай ҙа дәһшәтле күңелдәргә шом һалып үтте. Егет ҡурай тотоп эргәһенә сығып баҫҡан ағалары Сәлимйән менән Ғәлимйәнгә ҡарап ала ла йыр башлай.

Һай, донъяның хайран мөғжизәһе! Булыр ҙа булыр икән шундай моң! Нисек һыйҙыра уны был артыҡ ҡеүәт тә ҡунып өлгөрмәгән күкрәк? Нисек ярылмай йөрәккенәһе? Йырлай Йомабай. Әҙәм балаһын упҡынға бырғап, асманға сойорғотҡан хистәр өйөрмәһен тотош йырға һала.

Талир тәңкәләрен сылтыратып бына-бына «Еҙ үксәне» бейергә йыйынған Сабира ла сәхнә эргәһенә сығып баҫҡан була. Барса халыҡ менән ул да моң аһәңенә йотола. Егеттең тыны оҙон. Ул көйҙөң һәр бөгөлөн бормаланып, туғарланып аҡҡан йылға кеүек буйлай, тауышы иркен, әллә ҡайҙа юғарыға күтәрелеп сыңғырлап тора ла аҫҡа томорола, инде юғала, өҙөлә тип һиҫкәнәһең, ә ул элеккенән дә көслөрәк булып ҡабат урғыла. Арбалған Сабираның һулышы моңға эйәрә лә, һауа етмәй. Ә ҡыҙ үҙе быны абайламай ҙа. Ваҡытынан алда тын алып ҡуйһа, моң өҙөлөр кеүек, сөнки... Ул был мәлдә йырсы менән бер йән.

Бер йән, әммә тәндең дә ҡануны бар икән — тын етмәүҙән күҙ алдары ҡараңғыланып, иҫе юйыла... Тәңкәләре иһә сылтыр-сылтыр.

Күҙен асһа, хыял түгел, ғәмәл икәненә ышаныр әмәл юҡ — әле генә моң ағылған мөлдөр күҙҙәр уға төбәлгән дә, йырсы алдында теҙләнеп тора...

Эй уңайһыҙ булды, ни рәүешле һикереп торғанын да, халыҡ араһына инеп сумғанын да һиҙмәне Сабира. Ҡайҙа инде бынан һуң сәхнәгә менеп баҫыу!

Әммә был һабантуйҙа иң ҙур бүләк йырсылар бәйгеһенән баш тартҡан йырсы егет менән бейергә ҡыймаған һылыуға эләгә — улар береһен береһе тап итте, осратты.

* * *

Мәскәй төшлө ҡәрсәм туйҙы йәһәтләткән. Улының моңға хайран булып һуштан яҙған хисле ҡыҙға күҙе генә түгел, күңеле төшкәнен төшөнөү менән:

— Бәхетте киләсәккә кисектерер мәл түгел, никахлашҡас ғишыҡланырһығыҙ, — тип ҡыҙға яусы юллаған.

Былдай туйҙы күргән юҡ ине элек тә, күргән булманы аҙаҡ, тип оҙаҡ иҫләй халыҡ. Унда саҡырылғаны ла, саҡырылмағаны ла эркелеп килгән. Беҙҙең яҡтар ашамһаҡ та, әрһеҙ ҙә түгел, әммә йыр менән бейеүгә тиһәң — үлә лә китә торған холоҡтары бар. Шуға байрам киң ихатаға һыймай урамға сыға. Ә ҡәрсәмдәрҙән йыраҡ булмаған Һаҡмарҙың күпере күркәм сәхнәгә әйләнә. Халыҡ байрамға хозурланып та туймай: көнбайышҡа яңы сумған ҡояш, көнсығыштан балҡ итеп ҡалҡып та сыға — егерме икенсе июндә бит иң ҡыҫҡа төн.

Һабантуйҙа бейергә яҙмағанды, үҙ туйында бейеп кинәндерә халыҡты Сабира.

Кейәүе Йомабай халыҡ «Еҙ уксә» тип тә йөрөткән «Сабира» йырын йырлап ебәрһә:

*Мин урамдан үткән саҡта,*
*Ҡар йомарлап ник аттың?*
*Бер атманың, ике аттың —*
*Йәш йөрәккә ут яҡтың.*

Кәләш талир тәңкәләрен сылтырлатып бейеп тә китә.

*— Ат уйнатып үткәнеңдә*
*Теҙгенеңде ник тарттың?*

*Атҡынайыңды туҡтатып,*
*Минең яҡҡа ник баҡтың?*
*Бер баҡманың, ике баҡтың —*
*Йөрәгемә ут яҡтың, —*

тип йыр һүҙҙәре менән яуаплай, осло күтәрмәләре менән яҙғы ташҡын алып киткәндән һуң яңы төҙөлгән күперҙең таҡталарына туҡылдата баҫып. Таң алланған саҡ була был, тап шул мәлдә ил сигендә ергә инде тәүге бомбалар ҡойола.

* * *

Ҡырҡ икенсе йылдың май башында көнө буйы эштә йөрөп арманһыҙ йығылған Сабира еңгәмде таңда һандуғас моңо уята. Үҙәк өҙгөс һағыш та бар, наҙ ҙа... Һандуғас моңон тәүгә ишетеүе түгел ҡолағы зирәк еңгәмдең. Тик был ҡошсоҡтоң йыры әллә ҡайһылай, бүтән. Бөгөлдәре оҙон, тыны иркен. Ошо бәләкәс кенә күкрәккә ни әмәлдәр менән һыйған шул хәтлем моң? Күңелендәге ҡайтауазға буйһоноп, урынынан ҡуба, баҡсаға атлыға ун етеһен саҡ тултырған ҡатын.

Ә башындағы уй үҙенеке түгел, хәләленең күңеленән сыҡҡан шиғри юлдар:

*Һары талға түгел, алмағасҡа*
*Ҡунырмын да, шунан тынырһың...*

Хафанан йөрәге ҡалтырап моң сығанағын эҙләй: ана бүтән ҡоштар яратып ҡуна торған һары тал, ә бына Йомабай ҡасандыр ун һигеҙ йәшенең иҫтәлеге итеп үҙ ҡулдары менән ултыртҡан алмағас.

Ҡартлыҡтың йоҡоһо сос. Мөҙҙәте бына-бына етергә торған ауыр аяҡлы килененән күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа тырышҡан ҡәрсәм, уның оҙаҡлауына борсолоп сыҡһа, күрә: сәскәгә тумалған алмағастың ботағында ҡанаты ялҡынға көйрәгән һандуғас һайрай. Йотлоғоп-йотлоғоп китә, ниҙер еткерергә, нимәлер аңлатырға тырыша бисара. Ә Сабира шуға текләгән дә һынһыҙ. Өн сығарырға ла ҡыймай, берҙән, һандуғас моңон өҙөүҙән ҡурҡа, икенсенән, бейеменең өмөтөн ҡурсалай. Тик бер бөтөн бу-

лыр өсөн яратылған йәне танымаймы һуң үҙенең ҡап яртыһын?!

«Һуғыш быға тиклем бер ҡасан да булмағанса ҡаты һәм аяуһыҙ, йәнем. Бер-бер хәл булып янына ҡайта алмаһам, рәнйей күрмә инде, кисерергә тырыш. Төҫөм итеп балабыҙҙы үҫтер, уға минең йырҙарымды, үҙеңдең бейеүҙәреңде өйрәт. Уны үҙең өсөн бер ятраһаң, икенсеһендә минең өсөн һөй, наҙла. Малай тыуһа — Урал, ә ҡыҙ булһа Сәлимә тип ҡуш.

Был хатымды бәхилләшеү тиеп аңлап, көн элгәре ҡайғыларға батма. Тик тейешен әйтеп ҡуйһам, һуғышырға йәтешерәк булыр кеүек. Мин һинең ҡаһарман ихтыярыңа ышанам, шуға тураһын яҙам. Беҙҙең урамдарға байрам алып килер Еңеүҙе яҡынайтырға самаһыҙ күп ҡорбан талап ителәсәк». Был хатын ул Мәскәү эргәһендәге ҡан ҡойошло һуғыш эсенән, «үҙең генә уҡы, әсәйем күҙенән һаҡла», тип Сабираһына ғына төбәгән. Иң аҙаҡтан үҙәк өҙгөс шиғыр:

*Яҙ һағышлы йәрһеҙ ҡалғандарға —*
*Һөйөү уттарында янырһың.*
*Мин һандуғас булып яндарыңа ҡайтһам,*
*Һары талға түгел, алмағасҡа*
*Ҡунырмын да, шунан танырһың.*

Сабираны тынысландырырға теләгәндәй, хаттар бынан һуң тағы ла йышыраҡ килә. Ҡоралға күнеккән, һыуыҡтан ҡатҡан бармаҡтары менән бер ауыҙ һүҙ генә булһа ла сыймаҡлап һалырға ашыға Йомабай. Бер мәл килеп хаттар туҡтап ҡала. Ғинуар, февраль мең төрлө уй, хафа менән үтә, ә марттың буранлы бер кисендә хат ташыусы «хәбәрһеҙ юғалды» тигән ҡағыҙ ҡалдырып китә.

«Кеше энә түгел эҙһеҙ юғалырға, — ти әсә, киленен йыуатып. — Ҡайтыр, яҙған булһа. — Әйләнә лә шулай ҡабатлай: — Ҡайтыр».

— Кисер инде, бейем, — тине килен, аҡ йүргәккә төрөлгән сабыйын тәүге тапҡыр түшенә терәгәс.

— Аста, нишләп? — тип ҡапыл шомлана әле генә ейәнсәре кескәй Сәлимәкәйгә кендек әбейе булған бейем.

— Малай түгел, — ти Сабира, үкенеп.

— Баш балаға барыбер күсмәй моң-мираҫ, — ти ҡәрсәм. — Малайҙарҙың төпсөгөнә ҡала.

Икеһе лә был нәҫелдә инде нисәмә быуындан быуынға күсә килгән мөғжизәнең — һандуғасты көнләштерер йыраусы һәләтенең Йомабайҙа өҙөлөп ҡалырына хафалана. Әммә ҡәрсәм хәүефен күрһәтмәй.

— Булыр, Алла насип итһә, малайҙарыбыҙ ҙа тыуыр. — Ышаныслы итеп әйтә лә һуң. Раҫҡа сығыуы күпме һыналған мәскәй төштәре тынғы бирмәй үҙенә. «Йомабайым әрме хеҙмәтенә яңы ғына киткәйне. Ябырылып килгән ҡара ташҡын күрҙем. Балам шунан ҡурҡмай, сисенә һалып, сумырға уҡтала. Осмото ғына ҡағылып үтте, тулҡын сигенде. «Сирҡаныс ҡына алып өлгөрҙөм, әсәй», — тине балам. Төшөмдөң үҙендә үк, «ҡолонсағым ҡотолдо», тип ҡыуанып ятам. Икенсе ҡабырғама боролоп ятҡайным, күрәм: ташҡындың икенсеһе, ҡот осмалыһы килә. Сәлимйәнем, Ғәлимйәнем, Йомабайым — уландарым барыһы бергә тулҡындар менән айҡаша. Йәнемде услағанмын да яр буйынан йүгерекләйем. Ярҙам итер әмәлем юҡ. Өй дәүмәле тулҡын ажғырып килде лә өсөһөн дә ялмап алды. Өлкәне менән уртансым ҡалҡып килеп сыҡты шулай ҙа, ә Йомабай башҡаса күренмәне.

Төштөң үңәсе нәҙек кенә була ла ҡайһы яҡҡа юраһаң, шул яҡҡа бәлк итеп бөгөлә, шуға гел яҡшыға юрарға кәрәк, ти торғайны борон ағинәйҙәр. Шуға изгеләргә юрап хәйерҙәр өләштем, ҡорбан салдым, ағын һыуға әллә нисә ҡат һөйләп ағыҙҙым. Ысынлап та, ҡолонсағым хеҙмәтен тултырып, Фин һуғышында ҡатнашып ҡайтты. «Сирҡаныс ҡына алып өлгөрҙөм, әсәй, артыҡ зыян юҡ, тынысла», — тине һуғыш йәрәхәттәре хаҡында һорашҡанымда. Төшөмдәгеләрҙе һүҙмә-һүҙ ҡабатлағанына йөрәгем өҙөлөп төшөп киткән кеүек булды, һиҙҙермәнем генә. Шуға өйләндерергә ашыҡтым. Сәстәре яҙғанына бәйләнгәс, яҙмышы башҡа юҫыҡҡа үҙгәреп китмәҫме тигән өмөт тоттом. Ишараларҙы үҙгәртергә мөмкин булмағас, ни фәтүә ул әүлиә төштәрҙән? Алдан уҡ йөрәк һыҙлатып торор өсөн генәме икән ни?» Быны ҡәрсәм байтаҡ йылдар үткәс, инде нуры бөткән күҙҙәрен алыҫҡа төбәп, тиҫтәләрсә йылдар баҫа алмаған ҡайғы-хәсрәт менән һөйләгәйне миңә.

Ә ул мәлдә, бер-береһен аяп, килен алдай, бейем алдана. Килене хәсрәт упҡынына ҡолай башлағанда бейем алдай, килен был изге ялғанға ышана. Шулай бер-береһен алдай-алдай, «үлгән» тигән ҡара ҡағыҙы килгәс, теп-тере ҡайтып төшкәндәр тураһында мөғжизәләр уртаҡ-

лашып көн артынан көн үткәрәләр. Күңел төшенкелегенә бирелеү, өмөттө өҙөү — үлемесле гонаһ, был хаҡта уларҙың икеһе лә белә.

* * *

— Бейем бер көн килеп өмөткә хыянат итте. — Сабыр еңгәм түшәккә йығылып, мине күрәм тигәс, бар эшемде ташлап ҡайтып төштөм. Янында ултырам. Ә ул һөйләй. — Сәлимәкәйҙе, ун туғыҙы тулғас, башлы-күҙле иттек. Аша ауылға, яҡшы урынға килен булып төштө. Оҙатып ҡайтҡанбыҙ, йәнә бушап ҡалған өйҙә икәү ҡара-ҡаршы ултырғанбыҙ. Шунда ҡәрсәң әйтте:

— Килен, әле һин үтә йәш. Мин утыҙ һигеҙҙә биш бала менән тол ҡалып, ирһеҙлектең әрем әсеһен мул эстем. Ә һинең ишле ғүмерең күпме? Һуғыш сыҡҡан таңда ҡушылдығыҙ, августың егерме һигеҙендә Йомабайыбыҙ утҡа инеп китте. Тулыр-тулмаҫ ике ай булды бәхетегеҙ, уныһы ла дәһшәт менән тулы.

Бығаса бер маҡсат менән ғүмер иттек. Инде Йомабайҙың йән киҫәге Сәлимәкәйҙең артабан үҙ тормошо. Бүтән мине һаҡлап ултырмаҫһың. Имаметдин яҡшы кеше булғанға димләйем. Бар шуға икенсе ҡатынлыҡҡа. «Ҡаршы әйтәм», тип ауыҙымды ғына астым, ә ул форсат ҡалдырманы — ҡамсы менән һыҙырҙымы ни, һаман бәғерем һыҙлай.

Күндәм еңгәмдең нисәмә йылдар үткәндән һуң да рәнйеүе баҫылмағанына аптыраным: тимәк, сәбәп етди.

— Нимә тине ҡәрсәм? — тип һорайым.

— Яҙ еттениһә, төн йоҡоларынан яҙып ут күҙ бесәйҙәрҙән һандуғас ояларын ҡурсалауыңды күрһәм, йәнем әсей, — тине. — Аңла, килен, һандуғас — ул бары ҡошсоҡ ҡына. Йомабайҙай изге яуҙа шәһит киткәндәрҙең йәне шунда уҡ йәннәткә эләгә, шәт. Изге китап үҙе шулай тигән.

— Бикәс, — еңгәм үрелеп туп-тура күҙемә ҡарай, — һин бит ҙур ғилем эйәһе, илдәр ҙә гиҙәһең. Тәғәйен генә әйт әле. Йәннәт, тиҙәр ҙә һуштары китә. Миңә ҡалһа, ул тас беҙҙең Һаҡмар буйы.

— Хаҡһың, еңгә. — Муйыл сәскә атҡан, гөлйемеш хуш еҫ таратҡан болон мең төрлө гөлгә күмелгән, еләге тумарлап бешкән мәлдәрҙе берәм-берәм күҙ алдынан

үткәреп ихлас ризалашам. Уны мин алдай алмайым, сөнки еңгәмә ниңәлер ялған йоҡмай. Бала зирәклегем менән ҡасандыр сабыйлыҡ тип иҫәпләгәндәрем, был донъяла үтә һирәк осрай торған салт сафлыҡ икәнен йәшәй торғас бик асыҡ аңланым. Инде бына сәсе ап-аҡ ҡылған, ә күҙ — күңелдең көҙгөһө — һаман элеккесә: уңмаған, төҫһөҙләнмәгән, керләнмәгән.

— Ожмах күктә лә, ер аҫтында ла түгел, ерҙә булған, ерҙә килеш ҡалған. Әҙәм балаһы сабый сағында үҙенең ожмахта икәнен тойоп йәшәй, нәфсе, ялған, хәйлә ауына һөҙөлөп, күңеле боҙолғас ҡына онота, — тигән бер фәйләсүф.

— Һин шағир шул, — ти еңгәм. — Күңелең асман аҡылына тоташҡан. Абзыйың да шулай ине. Ҡайҙан беләһең һин барыһын да, тиһәң, шиғыр үҙе әйтте, тиер ине.

Еңгәм уйға бата, күрәһең, үткәндәренә ҡайта. Беләм, абзыйыма ирекһеҙҙән ҡылған «хыянаты» уға ғүмер буйы тынғы бирмәй. Ул саҡта шаҡтай ҙур инем, шуға яҡшы хәбәрҙармын еңгәмде хафаға һалған ул хәлдәргә.

Утарҙа йәшәгән Имаметдин ағай баҫалҡы, эшсән, әҙәм йәнле тип ихтирам ҡаҙанған кеше ине. Ҡатыны аяҡтан яҙып, оҙаҡ йылдар буйы түшәктә ятты. Шул саҡыра ла инәлә Сабира еңгәмә:

— Көндәш түгел, әхирәт булырбыҙ. Беҙҙең халыҡта борон-борондан ике бисә алыу яҙыҡ һаналмаған. Тормошобоҙҙо йәмләй күр.

Килененең зая ғүмеренә һуғыштан башҡа үҙен дә ғәйепле һанағандыр, бәлки, ҡәрсәм дә икенсе яҡтан ҡыҫтай. Ҡыҫымға бирешеп ризалашҡан еңгәм иһә йылға яҡын ике арала йөрөп, ике донъяны бергә көтә лә ҡабат бейеменә ҡайта:

— Улар бер-береһе өсөн генә яратылған. Эргәләрендә үҙемдең етемлегемде бер ҡасан да булмағанса тойҙом. Мин дә үҙ хәләлемде тапҡанмын. Яҙмышымды үҙгәртергә теләмәйем бүтән.

Әммә әжәлдәренә тиклем уларҙы ташламаны, ғүмер баҡый ҡараны, керҙәрен йыуҙы, ауырыуҙы тәрбиәләне. Әле килеп шуларҙы гонаһҡа һанай.

— Фанилыҡта оҙаҡ торлауымдың сәбәбе ошолор, бикәс. Йомабай абзыйың менән ҡауышыуыбыҙ шуға һуҙыла, ахыры. Юҡһа инде унең йәшен өс тапҡыр йәшәнем.

— Еңгәм, был һүҙҙәреңдең төптө яңылыш икәнен үҙең дә беләһең, — тип ҡырҡа ҡаршы төшәм. Сөнки был

ғәзелһеҙлекте хатта еңгәмдең үҙ ауыҙынан да ишеткем килмәй. — Донъяла ҡылған яҡшылыҡтарың тотҡарлай һине. Бик күп кешеләргә изгелек ҡылғанһың. Хәҙер улар шуның, исмаһам, бер аҙын үҙеңә кире ҡайтарырға тейеш. Уларға бит миһырбан кәрәк, тотош бурыс эсендә торғоҙоп ҡалдырмай бит инде уларҙы ла Хоҙай. Унан, беләм, һине йәнә бер өмөтөң тота.

Еңгәм керпек ҡағышы менән генә ризалығын белдерә. Икебеҙ ҙә мөғжизәләрҙең ғәҙәттән тыш нескә нәмә икәнен аңлайбыҙ, уны һүҙ итеп әүәләү ҡайҙа. Шунан һаман мөлдөр килеш ҡалған күҙҙәрен көлдөрөп икебеҙ генә аңларлыҡ өҫтәй:

— Сабыр иткәс итәм әле, бикәс.

...Бер ниндәй өмөткә урын булмаһа ла, шиккә бирешмәй һаман көткән өсөн һуңғы мөғжизәһе лә Сабира еңгәмде алдаманы. Алдай алманы, сөнки еңгәм алдында ялған көсһөҙ ине — Йомабай менән Сабираның төпсөк бүләсәре нәҫелдән киткән моң-мираҫ менән тыуҙы.

* * *

Еңгәм беҙҙән мәңгелеккә киткән йәҙҙа ниндәйҙер ғәм йоҡомдан яҙҙырҙы. Ҡар аҫтында үлән шытыуын ишеттем. Умырзаяның күк тажын, биләүҙәге баланың йүргәген асҡан кеүек, көрттән үҙем әрсәләп сығарҙым. Йәнем һаман тынғылыҡ тапманы. Ләйсән үтте, ыуыҙ ғына булып донъя йәшелләнде. Һағышым баҫылманы.

Бына моң ишеттем. Һандуғастың сут-сут һайрауында уй бар, нур бар, ә әрнеү юҡ ине. Саҡырыу бар ине тантаналы ауаздарҙа. Атылып тышҡа сыҡтым...

Әле быны ҡатҡан да ҡалғанмын: һандуғас — алмағасында, инә ҡош — таңғы һауала... Бөтөнөбөҙ бергә бәйләнгәнбеҙ.

— Һайра!

Минме, таңмы, әллә Зөһрә йондоҙ — бышылданы иң кәрәкле һүҙҙе. Әллә йылғамы, сәскә, һанһыҙ япраҡмы шыбырлап ҡысҡырҙы:

— Данла мөхәббәтте!

Моң ялғанды.

Бары шул саҡ ҡына абайланым: тотош ғаләм бер һөйөүҙең мөғжизәһе — һандуғас туйына йыйылғанбыҙ.

«Нисек кенә булмаһын, быны бөгөн эшләп ҡуйырға кәрәк, — тип уйланы Ғаяз. — Тағы бер яңы йылға һөйрәп алып сығып булмай бит инде». Ысынлап та, тағы күпме хыял менән йәшәргә мөмкин? «Машинаһының аҫтына ташланып булһа ла туҡтатам бөгөн. Етте». Үҙенең ҡарарынан еңел булып китте. Уның һаман эшендә икәненә тағы ла бер тапҡыр инаныр өсөн банк ҡаршыһында урынлашҡан ун ике ҡатлы йортҡа инде. Дүртенсе ҡатҡа күтәрелеп подъезд тәҙрәһенән ҡараһаң, банкирҙың кабинеты ус төбөндәгеләй күренә. Әле ике тәҙрәлә лә жалюзиҙар төшөрөлгән. Шулай булһа ла өҫтәл артында ултырған кешенең шәүләһе шәйләнә. Етем көсөк кеүек нисәмә көн ошо тирәлә уралыуы үҫмерҙе ғәрләндерә, әлбиттә. Ошо тойғоһон еңер өсөн үҙен киллер итеп күҙ алдына килтерҙе. Тәҙрә төпһаһына ята биреп, ҡулын винтовка көбәге кеүек тоҫҡаны ла атып ебәргән булды: пиф-паф.

Шул саҡ бер дәү кәүҙә уның өҫтөнә ырғыны ла күҙ асып йомған арала ҡулдарын артҡа шаҡарып ҡулса кейҙереп тә ҡуйҙы.

— Пиф-пафты бирермен мин һиңә, сусҡа малай, — тине был әҙәм һүгенеп. Үҙе етеҙ хәрәкәттәр менән Ғаязды ҡапшап сыҡты: ҡорал-маҙары юҡмы, йәнәһе. Бер нәмә лә тапмағас, баҫҡыстан аҫҡа табан этте. — Атла, йәһәт. — Унан суҡмар дәүмәле йоҙроғон танау аҫтына терәне: — Өнөң сыҡмаһын, ҡорсанғы.

Кем был? Банк ҡарауылсылары абайлап ҡалғанмы икән ни? Теләр-теләмәҫ кенә аҫҡа табан атлаған Ғаяз шул хаҡта баш ватты. Артабан нимә эшләргә?

— Өҫтә бер кем дә юҡ, — тине Ғаязды төрткөләп килгән ҡарауылсы (үҫмер уны Суҡмар танау тип атаны) мөйөш ҡараңғылығынан яҡтыға атлаған икенсе бәһлеүәнгә. Быныһы тағы ла дәүерәк. Өҫтәүенә, хәтәр мыйығы бар. — Яңғыҙы. Пиф-паф тип тора, етмәһә, киллер йораты.

— Бынау байрам көнөндә шул ғына етмәгәйне! — тип һуҡранды Мыйыҡ. — Хәҙер ярты төн менттар менән мәшәҡәтләнергә... Етмәһә, банкир үҙе лә бында.

— Ашыҡмайыҡ әле, — тине Суҡмар танау. — Һаҡсыларын саҡырайыҡ. Үҙҙәре һорау алһын. «Бушҡа ашама-

ғанығыҙҙы раҫлар өсөн малай-шалайҙарға бәйләнә башланығыҙмы?» — тип әйтергә урын ҡалмаһын.

— Әйтмәҫтәр. Бөгөн Фәрүәз эшләй. Ул донъя күргән егет, — тине икенсеһе.

Ғаязды артҡы яҡтан банк бинаһына алып инделәр һәм подвал һымаҡ ергә алып төшөп бер бүлмәгә төртөп керттеләр. Быға тиклем улай килеп сығырын ни өсөндөр уйлап та бирмәгән Ғаяз һис көтмәгәндә үҙенең ысынлап килеп ҡапҡанын аңланы. Күп тә үтмәне, өсәүләп кире инделәр. Ишек асылған арала, Фәрүәз тигәндәренеңдер: «Маньяк йәки шиза түгелме? Улар шулай күренекле кешеләр янында урала торған», — тип һорашҡаны ишетелде.

Быныһы теге ике бәһлеүәндән дә ҡалҡыуыраҡ һәм ҡалыныраҡ. «Ошо хәтлек амбалдарҙы берәй ерҙә сәсеп үҫтерәләр микән әллә?». Башына шундай уй килеүгә ирекһеҙҙән йылмайып ҡуйған Ғаяз, һаҡсы, аяҡтарын айыра баҫып алдына килеп баҫҡас, үҙен кәрлә генә итеп тойҙо.

— Әһә, зәңгәр куртка, зәңгәр куртка... Бер-ике мәртәбә минең дә күҙгә салынғайны был малай ишараты...

— Ай башында аҙна самаһы уралды, — тине Суҡмар танау.

— Шунан, егет кеше, ниндәй ниәт менән йөрөү?

— Ғәзинур Таһировты күреп һөйләшергә кәрәк ине, — тине Ғаяз. Уратып-суратып тороу урынһыҙ. Унын маҡсаты банкирҙы осратып һөйләшеү ҙә баһа. Шулай булғас, бөтәһе лә тәртиптә.

— Аһа, шулай уҡмы? Ә ниндәй йомош? Ссуда юллайһыңмы? Кредит кәрәкме? Әллә бер ыңғайҙан хәтәр иномарка һорайһыңмы?

— Уның үҙенең дә машинаһы хөрт түгел, шулаймы, егет? «Шкода Фабия»... — тип һүҙгә ҡушылды Мыйыҡ.

— Үҙенеке түгел дә түгеллеккә... Әсәһе Зөлфиә Нәғим ҡыҙы Фазылованыҡы, — тип өҫтәне Суҡмар танау. — ДПС-тыҡылар нимә ҡарайҙыр? Танау аҫты кипмәгән, праваһыҙ йөрөп ята.

Ғаяз асҡан ауыҙын ябырға ла онотоп, ҡатып ҡалды. Ҡайҙан бөтәһен дә белә былар?

— Бер башлағас, әйтеп бөтөрәйек тә ҡуяйыҡ, булмаһа: беҙҙең алда баҫып торған был егет — ҡырҡ бишенсе мәктәптең унынсы класс уҡыусыһы Ғаяз Ғәниев. —

Спортсы, уҡыу отличнигы, психдиспансерҙа иҫәптә тормай, эсмәй, тартмай, наркотиктар менән шаярмай.

— Шаярмай торғайны, — тип янаулы өҫтәне Суҡмар танау. — Әммә ләкин шаяра башлауы ла бик ихтимал. Бына хәҙер милиция наряды саҡырабыҙ ҙа уның кеҫәһенән бынау бәләкәс кенә моҡсай килеп сыға. — Уның усында аҡ порошоклы полиэтилен моҡсай күреп, Ғаяз ағарынып китте.

Был бәһлеүәндәрҙең банктан мул ғына эш хаҡын юҡҡа алмағандарын, үҙ эштәренең оҫтаһы булғанын төшөнгәйне инде Ғаяз.

— Миңә ысынлап та Ғәзинур Таһиров менән һөйләшергә кәрәк, — тине ул ихласлығын тауышына мөмкин тиклем сығарырға тырышып.

— Нимә тураһында?

— Шәхси эш буйынса...

— Конкретыраҡ әйткәндә?

— Мин әйтергә теләгән мәғлүмәтте, моғайын, ул башҡалар белеүен теләмәҫ...

— Ярай, иптәштәр, — тип ҡырт киҫте Мыйыҡ, — буш менән ваҡыт әрәм итмәйек. Милицияла бөтәһен дә һөйләтерҙәр. — Ул өҫтәлдәге телефонға үрелде.

Ғаяз үҙен бала-сағаға һанап шулай «бесәй-сысҡан» уйнағандарын аңлағайны инде. Тик, ысынлап та, бала-сағаға кеүек килеп ҡапҡас, нимә ҡылаһың инде?

— Мин уға улы барлығын хәбәр итергә теләгәйнем, — тип әйтеп һалды. Үҙе сәс бөртөктәренә тиклем ҡыҙарҙы.

— Ҡайҙа инде ул уның улы? — Үҫмер башын аҫҡа эйҙе һәм бер һүҙ ҙә өндәшмәне.

— Әллә һин үҙеңме? — Һаҡсылар өсөһө бер юлы шарҡылдап көлөп ебәрҙе. «Бының ни көлкөһө бар?» Ғаяз уларҙың көтмәгәндә шулай кәйефләнеп киткәндәренә аптырап ҡараны. «Моғайын, үҙҙәре лә банкирға атай, ағай, йә, исмаһам, яҡын дуҫ булырға ҡаршы булмаҫ ине».

— Ә ниңә? Ысынлап та оҡшаған бит, — тине Мыйыҡ көлөүҙән туҡтағас. — Иғтибар менән ҡарағыҙ әле.

— Башҡорт башҡортҡа оҡшай инде, — тип ҡырт киҫте Фәрүәз.

— Һин дә башҡорт та, тик һиңә бер ҙә оҡшамаған бит, — тип ауыҙ йырыуын дауам итте Суҡмар танау.

— Һиңә нисә йәш әле, егет? — тип һораны Фәрүәз күҙенән атылып сыҡҡан йәштәрен һөртә-һөртә. «Эй әңгәмә!»

— Ун алты, — тип яуапланы Мыйыҡ Ғаяз урынына.

— Тимәк, һин тыуғанда атайыңа ун ете йәш булған. Өлгөр егет!

— Бының ни көлкөһө бар? Башҡорттар элек улдарын ун дүрт йәш тулыр-тулмаҫтан өйләндергән, — тине Ғаяз тыныс ҡына.

* * *

Телефон шылтыраны. Ғәзинур тәүҙә трубканы берәйһе алыр тип көткәйне, байрам уңайы менән секретарҙы иртәрәк ҡайтарып ебәргәне иҫенә төштө. Дөрөҫөн әйткәндә, уның үҙенә лә ҡуҙғалырға ваҡыт. Юл ыңғайында әсәһенә инеп, бүләктәрҙе ҡалдырып, ҡотлап сығырға кәрәк. Байрамдарҙы ене һөймәй банкирҙың. Яңы йыл байрамын айырыуса яратмай. Бөгөнгө көнгә тиклем ул йылды кәмендә биш тапҡыр оҙатып, алты тапҡыр ҡаршылап өлгөргәйне инде: эштә коллектив менән, үҙҙәре шефлыҡ иткән бер нисә урында, иң әһәмиәтле клиенттар араһында. Бөгөнгө төн һуңғыһы һәм иң ауыры. Өйө тулы ҡунаҡ. Хәҙер шуларҙың күңеле булһын өсөн бер нисә сәғәт буйы клоун шикелле ауыҙ йырырға тура киләсәк. Йылдың йылы шулай. Байрамдар Ғәзинурға эш көндәрендә кисергән ләззәте өсөн яза итеп ебәрелгән кеүек тойола. Ысынлап та абсурд түгелме ни, кемдәрҙеңдер ихтыяры менән йыл һайын фәләнсә көндә һин күңел асырға тейешһең, тип алдан уҡ билдәләп ҡуйылған. Һәм һин бер ҡайҙа ла китә алмайһың, шуға буйһонаһың.

Банкир теше һыҙлағандай ыңғырашып ҡуйҙы ла, саҡ ҡына тынып торғандан һуң, яңынан шылтырай башлаған телефонға үрелде.

— Тыңлайым.

— Һа, Нурый, был ысынлап та һинме? — тигән шатлаҡ тауыш яңғыраны, берәүҙең иһаһайлап ҡәнәғәт көлгәне ишетелде. Был тауыш менән, ниһайәт, Ғәзинурҙың кабинетына ла байрам кәйефе эркелеп килеп инде.

— Һеҙ кем булаһығыҙ? — тине ул ирекһеҙҙән йылмая башлағанын тойоп.

— Һа, ишетәһегеҙме? Танымай. Банкир Ғәзинур үҙенең балалар баҡсаһына бергә йөрөгән дуҫын танымай. —

Шылтыратыусының табындаштары ла ҡыҙышып алғайны, ахыры. Кемдер, трубкаға яҡын килеп:

— Булды, ти, — тип хахылданы. — Ултырҙы, ти, банкир ошо мәлдә эшендә. Ул күптән Канар утрауҙарында сәпелдәп һыу инеп йөрөйҙөр инде.

— Нурый, был ысынлап та һинме? Мин дә уйламағайным, һин яуап бирерһең, тип. От балды, тоттом да шылтыраттым. Теге Ҡыш бабайҙың һаҡалын йолҡоп алғанымды һөйләп ултырҙым да... Иҫеңдәме?

— Ә, Артур, — тине Ғәзинур. — Уны оноторлоҡмо ни?

— Бына, ишеттегеҙме? Мин шул... «Арый, Нурый, Барый — беҙ банда!» — тип йөрөй торғайныҡ. Әллә киләһеңме, туған, ә! Беҙ бында, сантехник егеттәр, эштә Яңы йыл ҡаршылап ултырабыҙ! Уның артында: «Килде, ти, һиңә!» — тип ҡысҡырышҡан, дәррәү көлөшкән тауыштар ишетелде.

— Бөгөн килеп сыҡмаҫ, Артур, — тине Ғәзинур. — Өйҙә көтәләр. Тик һин телефон номерыңды ҡалдыр әле. Мин үҙем һиңә шылтыратырмын.

Уның Яңы йылды айырыуса яратмағанының сәбәпсеһе тап ошо Артур ине шул. Дүрт йәше лә юҡ ине. Әкиәткә ышанған матур саҡ. Ә Арый килде лә хәбәр һалды: бер ниндәй ҙә Ҡыш бабай юҡ. Өлкәндәр алдай. Ышанмаһағыҙ, мин иртәгә байрамда күрһәтәм. Ғәзинур-Нурый баш тартты. Ул Ҡыш бабайҙан бүләккә үҙе йөрөй торған танк һорағайны. Барый өндәшмәне. Әммә Арый икенсе көндө байрам мәлендә атылып барҙы ла, Ҡыш бабайҙың һаҡалын тартты ла алды. Һаҡал аҫтынан тәрбиәселәре Вера Петровнаның тирләп-бешкән йөҙө килеп сыҡты. Тетрәнеүенән хатта илай ҙа алмағайны Ғәзинур. Тормоштоң тылсымдан түгел, ялғандан тороуы менән беренсе тапҡыр шулай осрашҡайны.

Ә Арыйға нимә, ана ул үҙенә үҙе байрам яһай белә. «Шулай булырға кәрәк!» — тигән ҡарарға килде Ғәзинур.

* * *

Фәрүәздең кеҫә телефоны шылтыраны.

— Ҡайҙа йөрөйһөгөҙ ул? Бында телефондан яуап бирергә лә кеше юҡ.

— Мин аҫта, Ғәзинур Ғәлимович, — тип яуапланы һаҡсы. Саҡ ҡына уйланып торҙо ла өҫтәне: — Бында Ҡыш бабай һеҙгә бүләк алып килгән бит әле.

— Ҡумтаһын асып ҡаранығыҙмы һуң?

— Ул ҡумтаға ғына һыйырлыҡ түгел шул. Ҙур сюрприз. — Һаҡсы, һиҙгер эт кеүек, ниндәйҙер билдәләр буйынса хужаһының кәйефе күтәрелгәнен абайлап ҡыйыуланып китте лә өҫтәне: — Әллә үҙегеҙ генә төшөп ҡарайһығыҙмы?

Күп тә үтмәне, аяҡ тауышы ишетелде һәм:

— Күрһәтегеҙ әле ул ҙур сюрпризығыҙҙы, — тип банкир үҙе килеп инде. Һаҡсылар башта уға, унан үҫмергә ҡараш ташланы һәм бер-береһенә ҡарашып алды. Оҡшашлыҡ хайран ҡалырлыҡ шул. Һуйған да ҡаплаған, ти халыҡ бындай ваҡытта. Ғаяз да телен йотто. Ул атаһы менән осрашыуын меңдәрсә тапҡыр күҙ алдына килтереп ҡарағаны бар, әммә, бер ваҡытта ла ошолай тотҡон хәлендә, ҡарауыл бүлмәһендә булыр, тип уйламағайны. Өҫтәүенә, уны банкирҙың артыҡ йәш күренеүе шаҡ ҡатырҙы. Фотоларында ла, телевизорҙан да ул күпкә өлкәнерәк тойола ине лә баһа. Үҫмерҙең күңеленә беренсе тапҡыр, әллә яңылышаммы икән, тигән шик килде. Бары әле генә ҡарауылсыларҙың шул тиклем көлөүҙәренең сәбәбен аңланы.

— Ни бит әле, Ғәзинур Ғәлимович, — Мыйыҡ нисек йәтешерәк әйтергә һүҙ эҙләп маташты ла, тура ярыуҙан да ҡулайырағын тапманы, — бына был егет үҙен һеҙҙең улығыҙ тип таныштыра.

Ғәзинур ғәжәпләнеп һынсыл ҡарашын Ғаязға күсерҙе. Ҡыҙҙарса нәфис һыҙатлы сибәр йөҙ. Оҙон керпекле ҙур ҡуңыр күҙҙәр. Йәтеш кенә танау. Сейә ҡыҙыл ирендәр. Маңлай сәстәре лә матур булып алҡаланып төшкән.

«Ҡыҙҙар кеүек сибәр», — тип йәненә тейә торғайнылар уның да. Ғәзинур алдында ҡыҙарынып баҫып торған үҫмерҙә үҙенең ошо йәштәге сағын танығандай булды. Баштан-аяҡ күҙ йүгертте: әлбиттә, уның ошо йәштәге улы булыуы мөмкин булмаған хәл. Әммә...

— Ысынлап та сюрприз! — тине Ғәзинур. — Әйҙә әле, яҡындан танышайыҡ, Ҡыш бабай бүләге.

Ул, артынан эйәрергә ымлап, бүлмәнән сығып та китте.

Ҡарауылсылар йәнә бер-береһенә ҡараштылар.

— Сытайманы ла! — тип барыһының да уйындағын ҡысҡырып әйтеп бирҙе Суҡмар танау. — Вот выдержка!

— Бына шуның өсөн дә ул — банкир, ә беҙ уның һаҡсылары инде, егеттәр, — тине Фәрүәз. — Әйҙә, сюрприз, атла.

Ғәзинур уларҙы лифт эсендә күтәреп тора ине инде. Ул йәнә егетте баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе. Буй-һыны ла ҡыҙҙарҙыҡы кеүек: зифа, һығылмалы, еңел һөйәкле. Ғәзинур бит, үҫмер ҡорона инә башлағас, үҙенең төҫ-ҡиәфәтенән бик оҙаҡ оялып йонсоно. Малайҙарға оҡшатыр өсөн палубалағы матрос кеүек алпан-толпан баҫып йөрөр ине. Бик иртә мыйыҡ ебәрҙе. Тартып та ҡараны. Был егет тә шул уҡ ҡыйынлыҡтар менән осрашҡан, күрәһең. Тик уларҙы Ғәзинурға ҡарағанда уңышлыраҡ хәл иткән. Хәҙерге йәштәр аҡыллыраҡ шул!

— Махсус күнекмәләр эшләйһеңме? — тине ул Ғаяздың мускулдарына ишаралап.

Ғаяз баш ҡаҡты. Ул банкирҙың бөтөнләй ғәжәпләнмәгәненә, көтөлмәгән һорауҙар биреүенә аптырабыраҡ ҡалғайны. «Әсәйеңдең исеме кем? Нисә йәштәһең? Минең улым икәнеңде нисек иҫбатлай алаһың?» Ни өсөн шулай тип һорамай?

— Ә бокс? — Ғәзинур ирекһеҙҙән үҙенең бокс менән шөғөлләнгәндә ҡыйшайтҡан танауын һыйпап ҡуйҙы.

— Юҡ, — тип баш сайҡаны Ғаяз. — Бер-береһенең башын төйгөсләп һиңмайға әйләнеп бөтәләр, тип әсәйем рөхсәт итмәне. Каратэға йөрөйөм.

— Әсәйең бик аҡыллы икән, — тине Ғәзинур.

«Ул минең үҙенең улы булыуымды етдигә алманы, ахыры», — тип уйланы Ғаяз. Шунан үҙе лә һиҙмәҫтән:

— Һеҙҙең уң аяғығыҙҙың тубығы аҫтында йондоҙ кеүек ҡара миңегеҙ бармы? — тип һораны.

Ғәзинур менән Фәрүәз бер-береһенә ҡарашып ҡуйҙы.

— Юҡ! — тип яуапланы банкир.

* * *

— Яңы йылды ҡайҙа ҡаршылағың килер ине? — тип һораны банкир, кабинетҡа инеп йәтеш кенә кәнәфиҙәргә ултырғас.

— Канар утрауҙарында, тигән егет, — тип йылмайҙы Фәрүәз.

— Унда миңә нимә ҡалған? — тип яуапланы Ғаяз.

— Ниңә, рәхәтләнеп диңгеҙҙә һыу инеп, ҡояшта ҡыҙынып ҡайтҡың килмәйме ни? — тип ҡыҙыҡһынды банкир. «Ысынлап та, Канарҙан башҡа ер бөткәнме?» — тип уйланы үҙе.

— Юҡ, — тине Ғаяз. — Әле унда әсәйем менән атайым һыу инә.

— Шулай уҡмы ни?! — тип кәзекләште һаҡсы. — Ә һинең барғың килмәне инде.

— Туҡтап тор әле, Фәрүәз, — тип тыйҙы уны Ғәзинур. — Мин ысынтылап һорайым. Яңы йылды ҡайҙа ҡаршыларға теләр инең?

— Ирәмәл башында, — тине үҫмер. — Ике көндән беҙ барыбер унда барабыҙ. Мин Яңы йылды ҡаршыларға тәҡдим иткәйнем дә, ҡыҙҙар ризалашманы.

— Ә ниңә, шәп фекер бит, Фәрүәз. — Ғәзинур үҙе лә аңғармаҫтан рухланып китте. — Был хаҡта минең дә уйлағаным бар ине!

— Һеҙ шаяртмайһығыҙмы, Ғәзинур Ғәлимович?

Банкирҙың дәртләнеүе йөҙөнә сыҡҡайны. Ул ышанысլы итеп баш ҡаҡты.

— Әсәйегеҙ көтә, — тип дауам итте Фәрүәз.

— Ә телефон нимәгә?

— Өйөгөҙгә ҡунаҡтар саҡырғанһығыҙ.

— Өҫтәл тулы һый, музыка бар, өйҙә урын етерлек. Әйҙә рәхәтләнеп күңел асһындар.

— Барыбер барып өлгөрмәйбеҙ, — тине Ғаяз.

— Әле һигеҙ ҙә юҡ. Ваҡыт артығы менән етә, — тине Ғәзинур, «был аҡылындамы», тигәндәй ғәжәпләнеп ҡараған Ғаязға күҙ ҡыҫып.

— Ысынтылапмы? Вертолет саҡырайыммы? — Һаҡсы хужаһының холҡона өйрәнеп бөткәйне шикелле, телефондан шылтыратырға тотондо.

— Ә кейем? — тине Ғаяз.

— Урам аша сығып «Спортмастер»ҙан өс тау ботинкаһы, үҙегеҙгә йылыраҡ кейем алаһығыҙ. Минең бында үҙемдең кейем бар. Бының өсөн һеҙгә егерме минут ваҡыт. — Ғәзинурға был мажара торған һайын нығыраҡ оҡшай бара ине. — Йә, нимә тораһығыҙ. Тайығыҙ.

Шул ваҡыт телефон шылтыраны.

— Ҡара әле, Илнара, — тине Ғәзинур күтәренке кәйеф менән. — Бында мине улым килеп тапты бит. Улым, тием, улым. Мой сын, аңланыңмы? Бик шәп егетҡә

оҡшаған. Ул Яңы йылды минең менән ҡаршыларға теләй. Нисәмә йыл эсендә беренсе тапҡыр. Уның быға тулы хоҡуғы барҙыр, тип уйлайым.

Шылтыратҡан ҡатын-ҡыҙ ҡыҙғандан-ҡыҙа бара ине, ахыры. Банкир аҡланыуға күсте.

— Һуң, Илнара, мин бит үҙем дә белмәй инем. Әсәһе менән түгел. Түгел, әлбиттә. Ул бит ҙур инде. Нисә йәш? Белмәйем. Һиңә нисә йәш тинең әле егет? Ун алты. Ун алты йәш, ти. Юҡ, иҫерек түгелмен. Ҡунаҡтар йыйылһа ни? Ашарға-эсергә бар. Хужабикә бар. Һин бит минең хужабикәм, Илнара, шулай түгелме ни? Рәхәтләнеп күңел асығыҙ. Минән файҙа юҡ бит инде. Эсмәйем, тартмайым, йырламайым, бейемәйем. Тексәйеп ултыра бирәм. Үҙең бит гел шулай тип асыуланаһың. Минһеҙ тағы ла күңеллерәк булыр. Трубканы ташланы, — тине ул Фәрүәзгә боролоп. — Хәҙер һиңә шылтыратасаҡ.

— Ә мин нимә тип әйтәйем?

— Башыңды эшләт. Ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшергә һине өйрәтергә түгел инде. Тик ҡайҙа йыйынғаныбыҙҙы әйтеп ҡуйма. Уларға ышанһаң, килеп тә төшөрҙәр.

Шул саҡ һаҡсының телефоны шылтыраны.

— Юҡ, иҫерек түгел. Шаяртмай. Ысынлап та бер егет килде. Улымын, ти. Ун алты йәштә. Эйе, Ғәзинур Ғәлимовичҡа ун ете йәш булған. Юҡ, үҙе генә. Әсәһе әле Канар утрауҙарында, ти. Эйе, осабыҙ. Юҡ, Канарға түгел. Унда әсәһенең ире һәм башҡа балалары бар. Эй, Ғаяз, тағы туғандарың бармы?

— Бар, — тине үҫмер. — Ҡустым менән һеңлем.

— Бына, ишетәһегеҙме, Илнара? — тине Фәрүәз. — Ғәфү итегеҙ. Вертолет килде. Беҙ китәбеҙ. Ҡайҙа икәнен әлегә мин дә белмәйем. Трубканы ташланы. Илай, моғайын, марихуана-фәлән тартҡанһығыҙҙыр, тип енләнә.

— Тайығыҙ «Спортмастер»ға, ун биш кенә минутығыҙ ҡалды, — тип ҡул һелтәне кейемен алмаштырып та өлгөргән Ғәзинур.

* * *

Оло-ҡара таҫтамалдарға уранып мунсаның алғы бүлмәһенә сығып ултырғас ҡына Ғаяздың күҙе банкирҙың тубыҡ аҫтындағы йондоҙ кеүек миңенә төштө.

— Яңы ғына абайланыңмы? — тип көләмһәрәне Ғәзинур. — Ә мин, ниңә һаман өндәшмәйһең икән, тип уйлағайным.

Вертолет, «Бурандар»ҙа жыуылдатып елдереү, Ирәмәл башында Яңы йыл ҡаршылау...

— Мажаралар бер башыма артыҡ күп булып китте шикелле, — тип йылмайҙы Ғаяз. — Бөтөнләй онотоп киткәнмен. — Мунсанан һуң ике бите ҡып-ҡыҙыл ғына булып киткән, ул бөтөнләй малай ғына булып күренә, һәм арҡаһынан тупылдатып яратҡы килә. Ғәзинур егеттең еүеш сәстәрен шаяртып туҙратты ла ҡымыҙлы кәсә тотторҙо.

— Һыуһынға шәп.

— Ә бит һеҙ мине алдағанһығыҙ, — тине Ғаяз, бер тынала кәсәне түңкәреп ҡуйғас. — Нишләп?

— Ул саҡта әле мин һине улым итергә теләйемме, юҡмы икәнен белмәй инем, — тип яуапланы Ғәзинур.

«Ә хәҙер?» — тип һорағыһы килде Ғаяздың, тик, ҡыҙҙар кеүек ҡыланып ултырған шикелле яңғырар, тип тыйылды. Унан яуап бирергә теләмәгән сағында, банкир бик оҫта ялтанып ҡаса. Быңдай мәлдә егет: «Ҡалай хәйләкәр!» — тигәндәй, Фәрүәзгә ҡарай. Ә уныһы: «Бына шуның өсөн ул — банкир, ә мин уның һаҡсыһы ғына», — тигәндәй башын сайҡай. Ҡыҫҡаһы, Ғәзинурҙың ни әйтерен, ни ҡылырын алдан әйтеү еңел түгел. Ул Ғаязға торған һайын нығыраҡ оҡшай бара, әммә инде үҙе лә уның атаһы булыуына нығыраҡ шикләнә. Ә бына шундай ағайың булһа, ҡайһылай хәтәр булыр ине!

* * *

Мул табындан һуң барыһы ла йоҡларға ятҡанда, ҡыштың оҙон төнө лә үтеп бара ине. Ниһайәт, улар икәүһе генә ултырып ҡалды.

— Йә, — тине Ғәзинур шул саҡта ғына. — Әсәйең һиңә нимәләр һөйләне инде?

— Ә әсәйем бер нимә лә, хатта минең был хаҡта белгәнемде лә белмәй.

Ниһайәт, банкирға ла ғәжәпләнергә сират етте. Уны аптырата алғанына бик ҡәнәғәт ҡалған Ғаяз йылмайып ҡуйҙы, унан хатта ошонда ла бер-береһенә оҡшашлыҡтарын күреп, икеһе бер юлы ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

...Шау-шыулы ғаиләләрендә Ғаяз һәр ваҡыт үҙен ят һәм кәрәкһеҙ итеп тоя торғайны. Әсәһе, үгәй атаһы, ҡустыһы менән һеңлеһе — бына, исмаһам, улар ысын ғаилә. Уларға бер-береһе менән күңелле. Шар итеп асыуланышып китәләр, тағы ла ныҕыраҡ шарылдашып ярашалар. Гел генә өй тулы кеше — дуҫтары, туғандары, таныштары өҙөлмәй. Саҡ ҡына берәйһе килмәй торһа, үҙҙәренә урын таба алмай башлайҙар ҙа берәйһенә ҡунаҡҡа сығып китә һалалар. Ғаяздың был ығы-зығынан ҡасып өҫтәл аҫтына ғына булһа ла инеп ултырғыһы килә. Ә ҙурая башлағас, кәштә-кәштә китаптар торған «ҡараңғы мөйөш» уның иң яратҡан урыны булып китте. Малайҙы күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышҡан берҙән-бер кеше — өләсәһе — уны һораһа, бошмай ғына, ҡайҙа булһын, «ҡараңғы мөйөштә», тип яуап бирәләр ине. Башта Ғаяз, атаһы үгәй булғанға шулай ятһынамдыр, тип уйлағайны. Уның үҙ атаһы, ҡыҙғылт ерән сәсле башҡорт (беҙ — ҡыпсаҡ, ә ысын ҡыпсаҡтар ҡыҙыл булған, тип әйтергә ярата), эре һипкелле, гел генә йылмайғыһы килеп торған һөйкөмлө кеше Владивостокта йәшәй. Ике йылға бер ялға ҡайтҡанында Ғаязды артынан ҡалдырмай. Башҡа ваҡытта ла онотмай, тыуған көнөнә һәм Яңы йылға ҡиммәтле бүләктәр һалып тора. Ә инде малайы ҙурая төшкәс, ай һайын аҡса ла ебәрә башланы. Үҙенең берҙән-бер улын — яңы ғаиләһендә уның ике ҡыҙы үҫә — үҙе әйтмешләй, «баш балаһы — Ғәниевтар фамилияһын дауам иттереүсене» мөкиббән китеп ярата ул. Ғаяз да атаһын үҙ итә, тик ғәмһеҙ холоҡло, гел генә йылмайырға торған ҙур ауыҙлы, шаталаҡ атаһы менән бер оҡшашлыҡ та тапмай. «Һин минең өләсәйемә оҡшағанһың, — тип яуаплай атаһы уның һорауына. — Ул да һинең кеүек хисле була торғайны. Матур итеп йырлай, үҙе шиғыр сығара, хатта себенде лә үлтерергә йәлләй ине». Тик Ғаяз бауыр баҫа алырлыҡ ул әбей күптән гүр эйәһе, шуға күрә малай турғай ояһындағы кәкүк балаһылай яңғыҙ...

Бер заман ул үҙенең зарын әсәһе яғынан ике туған апаһы Алһыу менән уртаҡлашты.

— Әллә мине уллыҡҡа алдылармы икән? — тине ул моңһоу ғына.

Ул саҡта Ғаяз ун дүртен тултырып ун бише менән бара ине инде.

— Һин үҙеңдең атайыңа оҡшағанһың, — тип яуап ҡайтарҙы һәр ваҡыт өлкәндәр тирәһендә уралырға яратҡан, шуға күрә бөтә нәмәне лә белгән Алһыу, серле ҡиәфәт менән. Уның «үҙеңдең» тигән һүҙенә айырыуса баҫым яһағанына йәне көйгән Ғаяз:

— Әйттең һүҙ, — тип ҡаршы төштө. — Кемгә-кемгә, ә атайыма түгел инде.

— Мин һинең биологик атайың тураһында әйтәм. Ә Владивостоктағы атайың һиңә атай түгел.

— Нимә һин миңә Бразилия сериалы һөйләйһең? — тип асыуланды үҫмер. Алһыуҙың холҡо шул, саҡ ҡына бер нәмә һораһаң, ереләнә лә китә.

— Ышанмайһыңмы? — тине Алһыу. — Әйҙә киттек беҙгә. Мин һиңә бер нәмә күрһәтәм.

Алһыу төпкө бүлмәнән иҫке сумаҙан килтереп сығарҙы ла унан бер иҫке генә альбом алды. Унан үҙҙәренең әсәләре пединститутта уҡығанда йәйгеһен пионер лагерында вожатый булып эшләгәндә төшкән бер нисә фотоны эҙләп алды.

— Бына ҡара әле, — тине ул бер үҫмергә төртөп күрһәтеп. — Һин бында нисек барып сыҡтың, «ваҡыт машинаһы»на ултырыпмы?

Ғаяз аптырап ҡалды: фотолағы үҫмер ике тамсы һыу кеүек үҙенә оҡшағайны. Иғтибар менән ҡарай торғас, уның саҡ ҡына өлкәнерәк икәнен, танау аҫтында мыйыҡ ишараты шәйләнгәнен абайланы.

— Бында уға ун ете йәш тулып килә. Унынсы класҡа күскән, — тине Алһыу. — Бына шул инде һинең ысын атайың.

Ғаяз банкирға үҙенең ике йылдан ашыу ысын детектив кеүек уның тураһында мәғлүмәттәр йыйғанын, бер нисә тапҡыр хат яҙырға йәки шылтыратырға уйлап ҡуйғанын һөйләп торманы.

— Алһыуҙың әсәһенең исеме Гөлнур Фәритовна, фамилияһын онотҡанмын, ә һинең әсәйең — Зөлфиә Нәғимовна... — тине Фәзинур уйсан ғына. Шунан көтмәгәндә: — Яратҡан ҡыҙың бармы? — тип һораны.

— Берәү оҡшай... — тине егет.

Фәзинур үҙ-үҙенә сәйерһенеп ҡолаҡ һалды. Әлегеләй үҙен бөтөн, яҡлаулы, ышаныслы һәм шул уҡ ваҡытта көслө итеп бығаса бер ваҡытта ла тойғаны юҡ ине. Ҡаршыһында тонйорап торған күҙҙәре менән үҙенә

яратып ҡарап ултырған үҫмерҙе ҡосаҡлап алғыһы килде. «Атайлыҡ тойғоһо ошолай буламы икән әллә?»

— Ә мин ун алты йәшемдә тәүләп ғашиҡ булдым, — тине ул. — Лагерға ла беренсе тапҡыр килеүем ине. «Бигерәк өйҙә лә өйҙә, кеше араһында йәшәргә лә өйрәнһен», тигән өләсәйемдең идеяһы ине был. Туғыҙҙы бөткән йәй. Вожатыйҙарыбыҙ ҙа үҙебеҙҙән күпкә өлкән түгел. Әсәйеңә ун туғыҙ йәш ине ул сағында. Икенсе курсты ғына тамамлаған. Ә мин туғыҙҙы бөткән бер малай. Етмәһә, ҡаҡса булғанға, тиҫтерҙәремдән күпкә йәшерәк күренәм. Фотографияны күргәс, бәлки, иғтибар иткәнһеңдер. Унда беҙҙең бер нисә спортсы егет бар ине. Улар минән аша ҡарап тора. Мин бер күреүҙән вожатыйға ғашиҡ булдым. Башымды юғалттым. Юғалтмаҫлыҡ та түгел ине шул. Мин — болот кеүек бер моңһоу малай, ул — ҡояш. Үрелеп буй етерлек түгел.

Бына шул ҡыҙ миңә иғтибар итте бит, тойғоларыма яуап бирҙе. Мин быны мөғжизә кеүек ҡабул иттем. Был «мөғжизә»нең сәбәбен һуңыраҡ аңланым. Ул йәрәшелгән егете менән асыуланышып килгән һәм минең уға мөкиббән китеүем уның шул йөрәк яраһын уңалтыр өсөн кәрәк булған. «Уға асыу итеп һин — себеш менән сыуалдым». Аҙаҡтан ул миңә шулай тине. Уҡыу йылы башланғас, уны институтынан барып тапҡайным. Ул ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсеп йөрөй ине. Егете менән ярашҡандар, туй көндәре билдәләнгән. Билеттары кеҫәлә — туйҙан һуң улар Алыҫ Көнсығышҡа китергә тейеш ине. — Ғәзинур тамаҡ төбөнә төйөлгән төйөрҙө йотоп ебәрә алмағандай торҙо, ул көндәрҙең шәүләһе йөҙөнә төшкән кеүек булды. — Быларҙы минең әлегәсә бер кемгә лә һөйләгәнем юҡ ине, — тине ул йотлоғоп тыңлаған Ғаязға. — Үҙемде ҡот оҫҡос бәхетһеҙ тойҙом. Тормоштоң бер ниндәй ҙә мәғәнәһе ҡалманы. Туй көнө, ЗАГС-тан сыҡҡас, Салауат һәйкәленә сәскә һалғандарын ҡарап торҙом. Ул тағы ла матурыраҡ, күҙ ҡамаштырырлыҡ күренде. Йәш кәләш күлдәгендә бөтә ҡыҙҙар ҙа матур була. Ул саҡта мин был турала белмәй инем әле. Ә кейәүе шул тиклем шөкәтһеҙ. Мине кемгә алмаштырған, тип үртәлдем.

— Юҡ, ул былай һөйкөмлө генә ул, — тип быға са «атай» тип йөрөткән кешеһен яҡлашмай булдыра алманы Ғаяз.

— Яратышҡандары йөҙҙәрендә сағыла. Быға са мин, бәлки, бер-береһенән көнләшәләр ҡайтыр ҙа мин Зөлфиә-

нең айырылғанын күтәп алырмын, тип хыялланған булғайным.

— Ә бит дөрөҫ уйлағанһың, — тине Ғаяз. — Улар биш йыл да йәшәй алмай айырылышты.

— Уларҙың бер-береһенә ҡарап туймағанын, сут-сут үбешкәндәрен күргәс, был өмөтөм дә һүнде. Зөлфиәнән үс алғым, намыҫына тейеп, бәхетен боҙғом килде. Ҡаршы яҡтағы өй башына йүгереп менергә лә, улар бизәүле машиналарына ултырырға килгәс, ун икенсе ҡаттан алдарына һикереп төшөргә уйланым. Күҙемә аҡ-ҡара күренмәй йүгереп мендем, тик өй ҡыйығына илткән ишек бикле булып сыҡты.

Хат яҙып һалырға ла венамды ҡырҡырға уйлап өйгә ҡайттым. Килеп инеү менән өләсәйем атайым менән әсәйемдең аварияға эләккәнен әйтте. Ғаиләбеҙгә килгән был ҙур хәсрәт эргәһендә минең ҡайғым бер аҙға артҡа сигенде. Атайым айырыуса нық яраланғайны. Минең ҡаным уға кәрәк булды. — Гәзинур тынып ҡалды. Яуапһыҙ һөйөү һалған яралар уңалһа ла, йөрәктә бер шырау тороп ҡалғаны, башҡа бер ваҡытта ла, бер кемгә ҡарата ла ундай тойғо кисермәгәне хаҡында өндәшмәне. — Хәҙер ниндәй икән әсәйең? — тине ул хәтирәләрен һирпеп ташлағандай, башын сайҡап.

— Ниндәй булһын, элекке кеүек үк елбәҙәк инде, — тип өлкәндәрсә яуап ҡайтарҙы егет. Гәзинурҙың ирен ситтәренә йылмайыу ҡунғанын абайлап: — Балаларының атаһы кем икәнен тыуғас ҡына аңлаған кеше тураһында нимә тип әйтәһең инде? — тип өҫтәне. Банкирҙың һорауллы ҡарашын күреп дауам итте: — Ҡустым Владивостоктағы атайым кеүек ерән сәсле, һипкелле. Ә ул тыуғанда беҙ үгәй атайым менән йәшәй инек инде. Тик, нисек кенә булмаһын, уны барыһы ла бик нық ярата. Хатта Владивостоктағы атайым да уны һаман онота алмай.

— Һаман да элекке кеүек һөйкөмлө булһа, был бер ҙә ғәжәп түгел.

— Элеккегә ҡарағанда ла... Сөнки был атайым унан дүрт йәшкә йәшерәк. Әсәйгә үҙен бик нық ҡарарға тура килә. — Ғаяздың тауышында ирония яңғыраны. Атайҙарының артыҡ күплеге уға бик оҡшап етмәй ине, күрәһең.

«Ә миңә, «бала-саға», тигәйне», — тип уйлап ҡуйҙы Гәзинур. Тик был хәҙер мөһим түгел ине инде.

* * *

Был донъяла осраҡлы бер генә лә нәмә булмай, тигәнгә ышана Ғәзинур. Хатта уны күп тапҡыр һынағаны ла бар. Шунан сығып, үҙен нисәмә йылдар буйы әрнеткән был тойғоноң һынауғамы, язағамы ебәрелгәнен аңлай алмай йонсой ине. Әле ҡапыл донъяһының ҡапыл бөтәйеп, күңеленең, ниһайәт, урынына ултырғанын тойҙо. Тормошона Ҡыш бабай менән Яңы йыл мөғжизәһе, донъяның тылсымы ҡабат ҡайтҡайны.

— Ҡыш бабайҙың күптән инде мине былай ҡыуандырғаны юҡ ине, — тине ул. — Йә, минең өсөн иң ҙур сюрприз, ысынлап тороп таныш булайыҡ та, инде бер-беребеҙҙе юғалтышмайыҡ, йәме?

Ул әле алдында баҫып торған йән яҡынына «улым» тип әйтергә әҙер түгел, әммә уның яҡты донъяла барлығына ифрат бәхетле ине.

## АЛМА

Ваҡыт һуң. Туҡталышта кеше юҡ дәрәжәһендә. Машиналар ҙа аҙайған. Урам фонарының яҡтыһында ҡар бөртөктәре ялҡау ғына өйрөлә. Күңелһеҙ уйҙарҙан тубал булған башымды аҫҡа баҫып, итегем менән ҡарҙа һүрәт төшөрәм.

— Ниндәй уйға батҡан был матурҡай?

— Ниңә, матурҙарға бойоҡ булыу ҙа килешә ул. Эйеме, һеңлекәш?

Уйынсаҡ тауышҡа ҡалҡып күҙ һалам: алдымда ике йәш кенә ир йылмайышып баҫып тора.

«Перестройка бармай. Союз тарҡалды. Унда ла, бында ла ҡан ҡойош. Шундай ваҡытта нисек шаярғылары килеп тора икән?» Мин быларға аптырап текләгән дә киткәнмен. Ә улар мине, аҡылдан шашҡан, тип уйланы, күрәһең, икеһе бер юлы ҡырт боролдолар ҙа китергә ҡуҙғалған троллейбус ишегенә барып ҡыҫылдылар.

Ул арала минең автобус та күренде. Саҡ ҡыймылдап йөрөй торған һары ҡарышлауыҡ «Икарус» ярым буш. Тишек-тошоғонан ел өргәнлектән, эсендә эт бәйләһәң дә тормаҫлыҡ һыуыҡ. Шыҡрайып йылымды һаҡларға тырышам. Өйҙәге бөткөһөҙ мәшәҡәттәргә тотонғанға тик-

лем онотолоп торғанда килешер ине. Тик, арытылһа ла, йоҡлап китеп булмай. «Матур һеңлекәш»... Үҙемде йәшәрен йәшәгән ҡарсыҡ һымаҡ тойған миңә был һүҙҙәрҙе ишетеү сәйер.

Үҙгәртеүҙәр, ҡороуҙар, арбалыуҙар, өмөттәр һәм алданыуҙар. Барыһы ла кисерелде. Әммә мине, ике бала әсәһен, иң шаңҡытҡаны — шәп-шәрә магазин кәштәләре булды. Ә бит совет заманында екһендереп бөткән балыҡ консерваларын, әҙәм башы ҙурлығындағы кулинар майҙары, маргарин мәңге бөтмәҫ, улар ана шул быяла витриналар артында үҙҙәренән-үҙҙәре үрсеп яталыр кеүек ине. Һәм шуларҙың бер төн эсендә юҡҡа сығыуы, буш магазинда үлсәгес, тимер герҙәр һәм эшһеҙлектән буш кәштәгә һөйәлеп йоҡомһораған һатыусы бисәнән башҡа бер нәмә лә ҡалмауы башҡа һыймаҫлыҡ булды. «Ғаиләмә нимә ашатырмын?» Ошо аяныслы уйҙан өтөлөп, икенсе, өсөнсө магазинға сабам — һәммә ерҙә лә шул уҡ хәл...

Ауылда ата-әсәм юҡ, баҡсам юҡ. «Эй, Хоҙайым, — тип ялбарыуҙан башҡа сарам да юҡ, — ошо ҡышты ғына балаларымды асыҡтырмай сығарһам, танауым менән ер һөрөп булһа ла картуф сәсер инем...»

Әҙәм балаһы бөтәһенә лә күнегә. Әммә күңел аслыҡтың шәүләһенән генә лә ҡурҡып гел һереләдәп тора. Әле лә ошоларҙы уйлап, башымды һалҡын быялаға терәйем дә күҙҙе йомам. Тик донъямдың ҡотһоҙлоғонан күҙҙе йомоп ҡына ҡотолормон тимә...

Сараһыҙлыҡ көрсөгөнә барып терәлгәндә һәр саҡ атай менән әсәйҙе уйлайһың. Диңгеҙселәр әйтмешләй: «Һәр кемдең тормош ғәрәсәттәренән инеп боҫорлоҡ тыныс пристане булырға тейеш». Минең өсөн ул бәрәкәтле урын — атай йорто. Тик ул хәҙер бары хәтеремдә, ҡайҙалыр күңелемдең иң алыҫ нөктәһендә генә. Үҙәгем өҙөлөп, бер нисә тамсы тоҙло йәш һығылып сыға ла, күҙемде йомам. Йәш бөртөктәре, әллә һаран булғанғамы, шул тиклем әсе — сикәләрҙе уя өтөп аҫҡа тәгәрләй.

Шунда ниндәйҙер көс урынымдан йолҡоп, ишеккә һөйрәй. Туҡталышта инеп тулған төркөмдө йырғыслап тышҡа атлығам.

...Төшөүем булды, күк төҫтәге бәләкәй автобус ҡуҙғалып та китте. Мин эргәмдәге ҡалын көрттәргә аптырап, тирә-яғыма ҡарандым. Эңер зәңгәрлегенә мансыл-

ған һил был урын Өфөгә һис оҡшамаған. Әммә әрнеткес кимәлдә таныш. Һыҙландырғыс...

Ни мөғжизә менәндер күпер төбөндә, өйөбөҙ тәңгәлендә баҫып торғаным аңыма барып етә. Был төш түгел. Әле генә мине төшөрөп ҡалдырған автобустың бензин еҫе лә таралып өлгөрмәгән. Өфөлә уҡып йөрөгән саҡтарҙа йылдың йылы ыҙаланып йә трактор санаһында, йә осраҡлы машинала йөҙәр саҡрым араны һыуыҡта туңып барыуҙарҙы хәтерләткәнгә, был еҫ айырыуса екһендергес. Тыуған йорттан китеү әсенеше һеңгән уға.

Бында ҡыш уртаһы. Бөтөн ауыл йомшаҡ көрт күпмәһенә уранып, рәхәтләнеп йоҡомһорап ята. Урамда һис әҙәм әҫәре юҡ. Мөрйәләрҙән ялҡау ғына итеп йыуан төтөн бағаналары күтәрелә. Саҡ ҡына ҡыбырларға баҙнат итәм. Һаҡ ҡына, сөнки тамсы яңылышһам да, йәнемде ләззәтле тыныслыҡ, йылы ҡыуаныс менән сорнаған был күренеш юҡҡа сығыр. Бер аҙым атлайым, ике. Барыһы ла урынында. Мин был ҡарлы урамда һаман да бик ныҡ һәм ышаныслы баҫып торам.

Иң тәүҙә күпер төбөндә үҫкән йыуан өйәңке төбөнә йүнәләм. Уның төбөндә ҡыштың иң ҡаты һалҡындарында ла туңмай торған Ҡаран бар.

Атайым вафат булғандан һуң, әсәйемде үҙебеҙгә күсереп алдыҡ. Ул үҙен яңы шарттарҙа ҡаһармандарса тотто. «Һағынмайым, — тине, — ғүмерем буйы ер соҡоп, баҡса үҫтереп йонсоп бөткәнмен. Бында рәхәт. Балаларым янымда, крандан эҫе һыуы ағып тора, бөтә нәмә өйҙә». Болоҡһоуын хатта сырайына ла сығарманы. Тик бер мәлде хәл белергә килгән ауылдашҡа төшөн һөйләй:

— Автобустан күпер төбөндә төшөп ҡалдым. Ҡарандың теште ҡамаштырырлыҡ һалҡын, тәмле һыуын услап-услап эстем дә: «Аллаға шөкөр, ошо һыуҙы эсергә тағы бер яҙған икән», — тип әйтәм, имеш.

— Һағынмайым, тиһәң дә, һағынаһың икән әле, — тинем мин аҙаҡтан.

— Утыҙ йылдан ашыу ғүмереӊ үткән ерҙе ҡалайтып һағынмайһың инде? — тине әсәйем. Шунда беҙҙе көйҙөргөһө килмәгәнгә генә сыҙағанын аңланым.

Әле иң элек әсәйемдең өнөндә ғәмәлгә ашыра алмаған хыялын үтәнем: сит-ситтәре селтәрләнеп туңған боҙло дүңгәләктән һыу усланым. Тубыҡланған еремдән тороп, юлға күтәреләм. Ана ғына тора өйөбөҙ. Уның да

мөрйәһенән зәңгәр төтөн урғыла. Сихырланған кеүек шул яҡҡа ыңғайлайым.

Буран үткән. Баҡсаны көрт баҫҡан. Өй эргәһендәге ике ҡарт алмағастың тарбаҡ ботаҡтарына ла мул итеп ҡар ятҡан. Аласыҡтың ҡыйығы ғына күренеп тора.

Атайым аҡ ҡыптыр тунын кейеп, кәпәсенең ҡолаҡсындарын төшөрөп ала ла, ҡулына һоҫҡо көрәген тотоп, йыбанмай һәр бер буранлан, мул итеп ҡар яуғандан һуң баҡса аша берләм һуҡмаҡ тапап сыға торғайны. Аҡ ҡарға уйылып ҡалған бынау семәрле калуш эҙҙәре хас та атайымдыҡы кеүек. Баҡса рәшәткәһенең сосайып торған ҡаҙығына тотоноп һуҡмаҡҡа баҫыуым була, ниндәйҙер тылсымлы донъяның көсөргәнешле тулҡынына эләгәм. Ул, бер яҡтан, хәүефле, икенсе яҡтан, ҡыуаныслы һәм тулҡынландырғыс. Был тылсым ихтыярымды тулыһынса буйһондороп мине һуҡмаҡтан ситкә, баҡсаның эсенә әйҙәй. Унда ҡасандыр ҡартатайым бәүелеп уйнаған йыуан өйәңке. Билдән ҡар кисеп уға барам да ҡыҭыршы, сутырмаҡлы ҡабығына битемде терәйем, олононан ҡосаҡлайым. Уның ялбыр ботаҡтары араһына сумып, башында китап уҡырға ярата торғайным. Уны мин генә түгел, атайымдың тиҫтәләгән умартаһына геү килеп бал ташыған ҡорттар ҙа үҙ итә ине. Айырһалар, тап ошонда килеп ябалар.

Нескә тәлгәштәре боҙбармаҡтар менән осланған ҡарт өйәңке мине таный. Ҡолас етмәҫ олоно менән һиҙелер-һиҙелмәҫ сүгәләп ҡуя. Теҙләнер ҙә, тәлгәштәре менән мине тотош ҡаплап, ажғыр тормоштан ҡурсалар ине. Шуға ишаралай. Мин аңлайым. Йәш томаны ҡаплаған күҙҙәрем менән уның ҡыҭыршы олононан үҙем өсөн ҡәҙерле һыҙаттар эҙләйем. Уны ҡосаҡлап һыйынған килеш баҡсаның теге яғына күҙ ташлайым. Унда — туғандан да яҡын булып киткән күршеләребеҙҙең өйө.

Атайым мәрхүм булып, әсәйем ауырып киткәс, ни тиклем йәл булһа ла, өйҙө һаттыҡ беҙ. Шул ваҡыттарҙа нигеҙ юғалтыу хәсрәтенең ҡайһы рәүешле һыҙландырып елеккә төшкәнен үҙ башымдан үткәрҙем. Ныҡ ауыр кисерҙем. Ул әрнеү көндәлек мәшәҡәттәр, ҡаланың ығы-зығыһы ҡыҫымында төпкө аңға боҫа ла, төнгө һиллектә төшөмә инә. Ике төшөм ҡабат-ҡабат һыҙландырҙы. Береһе былай: күршегә инәм, урындыҡтары ситенә терәлеп, анау тәҙрәләренең тупһаһына эйәгемде һалам да үҙебеҙҙең өйгә ҡарап илайым. Төшөмдән буҫлығып

уянып китһәм, миндәрем еп-еүеш. Шуныһы сәйер, тәҙрә төбө лә, унда эйәгемде терәгән мин дә бер үк, ә тыштағы күренеш төштәр ҡабатланған һайын төрлө. Йә шул тәңгәлдә генә үҫеп ултырған муйылыбыҙ шау сәскәлә, йә уның япраҡтары ҡыҙылланған, йәки олоно билдән көрт аҫтында. Тап әлегесә...

Әлегесә... Кинәт башыма барып етә. Ни ғилләлә менәндер мин бит үткәнемә килеп юлыҡҡанмын. Мин хәтеремә, ваҡыт туҙаны баҫҡан көҙгөгә баҡҡандай, ҡарайым. Әгәр ҙә булғандарҙы, бер детален дә ҡалдырмай иҫкә төшөрһәм, улар йәнә ысынбарлыҡҡа әйләнә.

Ялан кәртә яғынан асырғанып һарыҡ баҡырғаны ишетелә. Моғайын, яңыраҡ ҡына бәрәсләгән дә, бәрәсе мейес араһында торалыр. Малға кискелеккә бесән һалынған. Ана, был яҡтараҡ әсәйемдең буралай ҡыҙыл һыйыры көйшәп ята. Мал, эйәһенә оҡшамаһа, харам була, тигән мәҡәлде раҫлап, әсәйемдең бөтә һыйырҙары ла сабыр, аҡыллы булды. Бишенселәрҙә уҡығанмындыр, әсәйем баҙарға шәл һатырға киткәс, һыйырҙы үҙем һауырға булдым. Ҡоймала эленеп торған һөт биҙрәһенең ситенә мул ғына ҡаймаҡ яғып, һыйыр янына сүгәләнем. Тулышҡан имсәктәре йәтеш кенә: тарткайным, зеңгерләп һөт сәптерҙе. Аҡыллы малҡай, минең беләк көсөмдө самалағандай, ныҡ итеп эйҙе, имсәккә ҡағылыр-ҡағылмаҫтан һөт үҙе ағып тора. Сүкәйеп аяғым талғас, тора һалып, бәләкәй ултырғысты эҙләп йөрөйөм. Шул саҡ күрше инәй килеп инде.

— Нишләп йөрөйһөң ул? — тип һорай.

— Ултырғыс эҙләйем.

— Күнәгеңде һыйыр аҫтында ҡалдырғанһың, — тип һуҡрана инәй. — Ырғыта тибә бит хәҙер.

— Нишләп типһен, иҫәүәнме әллә ул? — тип аптырайым. Ә малҡай сабыр ғына көрһөнөп, аяҡтарын һаҡ ҡына алмаш-тилмәш баҫа.

— Ҡуйсы-ҡуйсы, ошо күршенең һыйырҙары аҡыллы була, — тип инәйем үҙ һыйырын һауырға ҡайтып китә. — Минеке булһа, әллә ҡасан һөтлө күнәктең эсенә баҫып, ырғыта тибеп китер ине.

Тағы бер яғы йәтеш булды, беҙҙең малдар эҙләтеп йонсотманы. Көҙгөһөн баҡсалағы ике ҙур ағастан туҡтауһыҙ алма ҡойола, уны ауыл халҡы биҙрәләп ташый, компот, вареньелар яһала, тоҡлап-тоҡлап киптерелә, биҙрә-биҙрә ҡайнатмаға китә, ә инде ҡорт төшөп ергә

ҡойолғаны мал-тыуарҙың улағына түгелә. Шуға күрә тәмлетамаҡ һарыҡ-кәзә, көнө буйы үлән-мүлән ашамайбыҙ тип ауыҙҙарын ҡымтып йөрөгәндәй, леһерләшеп өйгә йүгерә. Улар артынан оло-ҡара караптай булып мылҡылдап, һыйыр елдерә. Хатта ҡапҡаны асырға ла кәрәкмәй, элгәсен тарбаҡ мөгөҙө менән һелкеп кенә ташлай.

Атайым, ғәҙәтенсә, ишек алдын тап-таҡыр итеп көрәгән.

Аҙ ғына утын да ярған. Ана бит, тауыҡ кетәгенең буйына өйөлгән утын өйөмөнөң бер яғына яңы ярылғандары өҫтәлгән. Дәртләнеп сыҡҡандыр ҙа оҙаҡ матала алмағандыр, сөнки һыуыҡ бабай битте ысынтылап семтей. Бындай мәлдә атайымдың танауы сыҙамай. Ҡырҡ икенсе йылда разведкала туңдырған ҡылыс танауы ғүмер буйы һыуыҡҡа биреште.

Ярған утынының бер аҙын мейес араһына һалып киптерергә өйгә ташыған. Ана тап-тобо ҡойолоп төшөп ҡалған.

Өйгә ынтылам да, сихырланған кеүек, тупһаға ҡарайым. Уның һәр бер еге таныш. Меңәр тапҡыр йыуғанымын, һөрткәнмен. Бынау эшләпәһе ҡыйышыраҡ ҡағылған ҡаҙауға йүкә йыуғыс эләгеп ҡаҡшата торғайны. Ә бынау таҡтаны, элеккеһе серегәс, атайым яңынан ҡатҡан. Ҡараштарым солан ишеген ҡапшай. Был һуңғы бынау икәнен тоям. Бында һәр бер йөй, элекке тотҡа, ҡаҙау урындары яҡындарымдың йөҙөнә йылдар һәм яҙмыш һынауҙары һалған йыйырсыҡтар кеүек һөйкөмлө һәм ғәзиз.

Ниндәйҙер көс юлымды быуа. Алдымдағы ишектең томанланып, күҙ алдымдан юғала барғанынан ҡотом осоп ҡулымды һонам, ҡытыршы таҡталарына усым тейгәс, эсемә йәнә йылы инә. Томан түгел, йәштәрем томалай. Яҙмышты артабан да һынап тоторға тәҡәтем ҡалмағанлыҡтан, баҙнатымды йыйып, тотҡаға үреләм дә һелкетә тартып асам. Беҙҙең солан бейек. Өй кеүек үк. Бары түбә таҡтаһы һалып йылытылмаған.

Һуғымға башмаҡ һуйғандар. Стенала бер нисә эйрәк түшкәһе эленеп тора. Бер-ике биҙрә һөт туңып ултыра. Әсәйемдең һыйыры һыуалған, күрәһең. Аяҡ аҫтында ятҡан селек һеперткегә абынып туҡтайым.

Танауыма йылы, ҡотло өй ипкене, тәмле аш еҫе бәрелә. Ишекте шым ғына асып индем дә, тыуған өйҙөң таныш хуш еҫтәренән башым әйләнеп, күңелем тулыу-

ҙан һушым быуылып, мөйөшкә һыйындым. Кейем элгестә атайымдың мал араһына кейә торған иҫке фуфайкаһы эленеп тора. Өй эсе ҡараңғы булһа ла, ут алмағандар. Әсәйем мейес тирәһендә шалтырай, ашҡа һуған турай, ахыры, мыш-мыш танау тартҡаны ишетелә. Күрмәһәм дә, әсәйем икәнен беләм. Сөнки бындай хуш еҫ тик ул бешергән аштан ғына сыға ала. Нисәмә йыл уларҙың таты тел осомда. Минең балаларым да шулай тәмле ашарға тейеш тип көн һайын тырыштырам, тик уға еткерә алғаным ғына юҡ.

Төпкө өйҙөң ишегенән был яҡҡа арты менән ултырған атайымдың арҡаһы күренә, ул, эйелеп, алдындағы радиоалғыста Мәскәүҙән «Һуңғы хәбәрҙәр» эҙләй. Тимәк, хәҙер киске алты.

Мейес араһында йылыға иҙрәп йоҡлаған һарыҡ бәрәсе тышта яр һалып баҡырған әсәһенең тауышын ишетептер, ялҡау ғына мыҡырлай. Ул әле асығып өлгөрмәгән, күрәһең.

— Беҙ ашап алайыҡ та, — ти уға әсәйем. Уның тауышын ишетеүҙән тамағыма төйөр тығыла. — Шунан һине имеҙербеҙ, юҡһа таңға тиклем асығаһың.

Тыным быуыла, шуға һулышты тәрән итеп алырға тырышам. Ишек төбөндә кемдеңдер һыңҡылдағанын абайлап, әсәйем усаҡ янынан үрелеп ҡарай.

— Балам, — ти ул. Тауышында ғәжәпләнеү. Уның һиҙгерлегенә хайран ҡалам. Өндәшмәйем, сөнки тамағымды ауырттырып килеп тығылған төйөрҙө йотоп ебәрергә әмәлем юҡ. «Эйе, мин» тигәнде белдереп, мөйөш ҡараңғылығынан тәҙрә яҡтыһына аҙымлайым. Һаман үҙемдең нисәнсе йылға юлыҡҡанымды төшөнөп етә алмайым. Әммә әсәйемдең өҫтөндәге кейеменән, һынының әле төҙ булыуынан, яулыҡ аҫтынан бөҫөлеңкерәп сыҡҡан сәстәренән уның ярайһы ғына йәш булғанын төшөнәм.

— Әбей, кем бар унда? — тип тауыш бирә атайым төпкө өйҙән.

— Ҡыҙыбыҙ ҡайтып төштө бит, бабай, — ти әсәйем ҡыуанып. — Бая бер автобус үтеп киткәйне шул. Байрамға ғына ҡайтып киткәс, берегеҙҙе лә көтмәй инек. — Унан аптырап һорап ҡуя: — Аһа, матур пальтоң ҡайҙа?

Атайым ыуаланып килеп урта ишеккә маңлайын бәреп ала. Ул арала әсәйем ут тоҡандырырға үрелә. Әммә яҡтыла барыһы ла юҡҡа сығыуҙан ҡотом осоп,

мин уның һонолған ҡулын тотам да, үкһеп илап, ҡосағына һыйынам.

— Ни булды, балам? — тип өҙгөләнә атайым.

Артабан да өндәшмәүемдең улар өсөн ғазап икәнен тойомлап:

— Бер ни ҙә булманы, — тип бышылдайым. — Бер ни ҙә булманы. Бары тик һағындым ғына...

— Ултырығыҙ, — тием мин, үҙемде мөмкин тиклем ҡулға алғас. Аптыраған икәүһен дә диванға ултыртҡандан һуң алдарына тубыҡланам. Өйҙә ҡараңғы. Усаҡтағы ҡуҙ емелдәүенән башҡа яҡтылыҡ юҡ. Улар минең сәйер ҡыланышымды аңламай. Минут һайын шомдары арта барғанын асыҡ тоям.

— Аптырамағыҙ ҙа, ҡурҡмағыҙ ҙа, йәме, — тием мин. — Бары мине генә тыңлағыҙ. Ниндәйҙер мөғжизә менән мин һеҙҙең янға киләсәктән килеп эләктем. Һағыныуҙарымдың сигенә еткәнгә шулай булғандыр. Шуға күрә кейемем дә башҡа.

Һеҙ алып кейҙергән матур пальто күптән туҙған инде. Минең иһә, ниндәй мөғжизә алып килгән, шул уҡ юл менән теләһә ҡайһы минутта кире китеүем ихтимал. Сөнки мине унда ла зарығып, мин һеҙҙе һағынған кеүек һағынып торған ике ғәзиз йән эйәһе — улым менән ҡыҙым бар.

Миңә текләгән дә ҡатҡандар. Бары тик, теләһә ҡайһы минутта китеүем бар, тигәндә ҡулдарыма икәүләшеп сытырман йәбешәләр ҙә, унда ике балам бар, тигәс, ҡысымдарын бушаталар.

Әсәйем тиҙерәк үҙенә килә:

— Ағайың менән апайыңдар ни хәлдә унда? — тип ашығып һорай. — Иҫән-амандармы?

Атайым баш ҡағып уның һорауын йөпләй.

— Аллаға шөкөр, — тием мин. — Үҙҙәре лә, ғаиләләре лә иҫән-аман. Харис армиянан ҡайтып кәләш алды. — Улар апайымдың иң ҙур улын ғына белергә тейеш. — Илсур менән Айбулатты һеҙ белмәйһегеҙ әле. Улар инде мәктәптә уҡып йөрөй.

Әсәйемдең йөҙөмдө күргеһе килә. Наҙлы ҡулдары менән битемдән һыйпай. Моғайын, уға артыҡ ҡартайып һәм йонсоп киткән кеүек күренәмдер.

— Усаҡтағы утты булһа ла ләүкетеп ебәрәйемме әллә? — ти ул ни өсөндөр бышылдап ҡына.

— Майшәм тоҡандырайыҡ, — ти атай.

— Утты яҡтыртһаҡ та бер нәмә лә булмаҫ, бәлки, — тип тәүәккәлләйем мин. — Күргәндәй булайыҡ.

Өй гөлтләп нурға тулғанға күҙ сағылып торған бер генә мәлгә улар мине килеп сытырман тота. Бер нәмә лә үҙгәрмәгәнен күреп, еңел тын алабыҙ.

— Балалар баҡсала ҡалды, — тием мин уларҙың өнһөҙ һорауҙарын аңлап.

— Барып алыр кешеләре бармы һуң? — тип ипләп кенә һорап ҡуя атайым.

— Аталары алыр, — тигәс, еңел һулайҙар.

— Кейәү арыу кешеме һуң? — тип һорай атайым. Күҙ алмаһылай балаһының яҙмышы ете ятҡа бәйләнгәнен атайҙар ауырыраҡ кисерә шул.

Мәскәүҙә дүртте һуға. Тимәк, бында алты.

— Нисәнсе йыл әле? — тип һорарға баҙнат итәм.

— Бер мең туғыҙ йөҙ етмеш һигеҙ.

— Һүндерәһеңме әллә радионды, — ти әсәйем. — Ларылдамаһын.

— Эй асыҡтым, — тием. — Өйрәк ите һалып талғын ғына утта быҡтырылған өйрәне һинең кеүек бер генә кеше лә бешерә белмәй, әсәй. Һинең кеүек мейес тултырып икмәк һала ла белмәй.

— Мәрфуға еңгәңдең икмәге нығыраҡ уңа, — ти әсәйем. Ул үтә шаштырып маҡтауға бер ваҡытта ла мохтаж булманы. Шуға хатта ошондай мәлдә лә дөрөҫләмәй булдыра алмай.

— Бына туралған ит һалып бешерелгән кәбеҫтә бәлеше, ни тиклем генә тырыштырһам да, һинеке кеүек тәмле килеп сыҡмай. Йоҡа ҡоймаҡ та... Ярай, ҡоймаҡты апайым тап һинең кеүек бешерә инде.

— Кәбеҫтәгә кишер менән һуған да һалаһығыҙмы һуң? — тип серен аса әсәйем.

Бисә-сәсә хәбәрен атайым сабыр ғына тыңлап тора.

— Донъяғыҙҙа ниндәй хәлдәр бар һуң? Тыныслыҡмы? Колхозды миллионлы бурысҡа батырып, талап байып ятҡан оятһыҙҙар менән үлгәнсе айҡашҡан ысын коммунистың донъя менән ҡыҙыҡһыныуы тәбиғи.

Кеше кешегә дуҫ, иптәш һәм туған, тигәнгә ысынтылап ышанған, ғәҙеллек өсөн йәнен бирергә әҙер булған атайымдың торғонлоҡ һаҙлығында ни тиклем тонсоғоп йәшәгәнен хәҙерге мин яҡшы төшөнәм.

— Беҙ бөтөнләй башҡа донъяла һәм башҡа илдә йәшәйбеҙ. Бөтә нәмәнең аҫты-өҫкә түңкәрелде. Беҙ хәҙер капитализм төҙөйбөҙ.

Урлашыуҙың бөтөн ил кимәлендә барғанын, ил талауҙың тамамланмай, яңы көс-ҡеүәт менән дауам иткәнен һөйләп, кәйефен ҡырмайым. Әммә ул күҙҙәремдән, барыһының да тиген генә түгел икәнен абайлап, һиҙеп ултыра.

Тыйнаҡ баҫалҡылыҡ менән:

— Йәшәрлекме һуң унда, һеҙҙең киләсәктә, балам? — тип һорай.

— Бығаса йәшәрлек ине, — тием мин. — Һүҙ азатлығы бар. Һулар һауа сафыраҡ кеүек. Йәнә, элекке кеүек алдашмайҙар. Ояthыҙ рәүештә бөтәһен дә асыҡтан-асыҡ һөйләйҙәр.

Тик бына магазиндарҙың бушап ҡалыуы ғына... Балаларҙы асыҡтырмаһаҡ ҡына ярар ине.

Ул үҙенсә, мин үҙемсә уйыбыҙға батабыҙ.

— Тик, — тием мин. — Тик мин һеҙҙе шул тиклем һағынам. Унда, киләсәктә мине һеҙҙең кеүек итеп, бары бар булғаным өсөн генә, йәненән дә артыҡ күреп, фиҙаҡәр итеп яратыусы юҡ.

— Унын байы һин үҙең хәҙер шулай яратаһың, — ти әсәйем. — Һин унда үҙең әсәйһең.

Һәм был мине үткәнем менән дә, киләсәгем менән дә яраштыра. Мин әсәймен. Был ысынбарлыҡ мине иң ләззәтле үткәндә лә тороп ҡалмаҫҡа мәжбүр итә.

Улар, ашауҙарын да онотоп, миңә танып та, танымай ҙа ҡарай.

Ә тышта, онотолоп китмәүҙе дәғүәләп, инә һарыҡ баҡыра, бында уға балаһы яуап бирә.

Солан ишеге шығырлай.

— Зариф ағайыңдар килергә тейеш ине.

Ике туған ағайымдың өс көн ҡырынмаған көләс йөҙөн күреп, эсем өҙөлә. Ә ул ғәҙәтенсә ларылдығын сығып, ҡолас йәйеп килә.

— Һауҙармы-шәптәрме, Өфө урынында торамы?

Мин килгән заманда уларҙың алты балаһының өсөһө юҡ. Йән атып торған төпсөктәренең әле Афған һуғышында йөрөп ятҡанын белмәүҙәре менән улар ниндәй бәхетле. Унын ҡайғыһынан еңгәм бер йылдан ауыр сиргә юлығасаҡ. Ябай ғына, шарылдаҡ ҡына күренгән ағайым, уны сабый бала кеүек ҡәҙерләп, ун йыл буйы ҡараясаҡ.

Еңгәмде зыяратҡа алып китер ваҡыт еткәс, оҙатырға килеүселәрҙең барыһы ла тышҡа сыҡты. Шул саҡ нимәләр алырға ҡабат индем. Ағайым, тубыҡланып еңгәмдең йөҙөн асҡан да, уның һаман йәш, һылыу йөҙөнә шул тиклем яратып теклә-гән.

Уларҙың бер-береһенә мөнәсәбәтен иҫкә төшөргән һайын: «Бар ул, бар ул донъяла ысын мөхәббәт!» — тип уйлаясаҡмын.

— Хат яҙмай, шилмалар, — тип геүләй ағайым. — Еңгәң менән шуға көйөнәбеҙ.

«Барыһы ла әле бик һәйбәт, — тип әйткем килһә лә, тыйылам. — Ваҡ-төйәккә көйөп ғүмерегеҙҙең иң бәхетле һуңғы йылына күләгә төшөрмәгеҙ».

Ни тиклем ҡыҫтаһаҡ та, улар оҙаҡ ултырмай. Хушлашып ҡалғанда ҡабат-ҡабат ингән икенсе төшөм хаҡында уйлайым.

Көҙгө бысраҡта уларҙың өйөнә ашҡынып барам да, мәтеһе әйләнеп ятҡан күтәрмәләренә башымды сүкеп, үкһей-үкһей илайым, имеш.

Ниндәйҙер эске һиҙенеү менән үҙемдең бындағы ваҡытым бөтөп барғанын тойомлайым.

— Миңә ҡабат китергә кәрәк, әсәй, — тием мин.

— Хәҙер, хәҙер, атайың инһен инде, — ти ул ыуаланып.

— Юҡ, юҡ, боросолма, уны күтәм әле, — тием ашыға-ашыға өҫтөмә кейенеп. Ә ул күҙ алдында юҡ булып ҡуйыуым ихтималынан ҡурҡып, күҙ ҙә йоммай миңә теклә-гән. Бына, ҡапыл урынынан ҡубып, аҡ таҫтамалға ураған күстәнәстәрен барлай башлай. Ул арала атайым килеп инә лә үҙе менән соланға әйҙәй.

— Ошоларҙы алып китергә урын булыр микән? — ти ул, ике һыйыр ботона, өс өйрәк түшкәһенә ымлап.

— Эй, әсәй-атай, — тием мин. — Машина менән барып етер ер түгел бит киләсәк. Мин бер генә нәмә лә алып китә алмайым шул.

— Уй Алла, — тип үкһей әсәйем, үкенеп. — Улай булмай инде, — ти ҙә алъяпҡыс кеҫәһенән ҙур бер алма сығарып ҡулыма тоттора. — Теге ашнаҡ эргәһендәге ҡышҡы алма быйыл алты бөртөк кенә алма бирҙе бит. Бына шуның береһен булһа ла балаларға күстәнәскә ал.

Алма ысынлап та ҙур. Бер яҡ битендә саҡ ҡына ороһо бар. Ваҡыт һәм арауыҡты оторға тырышып, уны пальтомдың кеҫәһенә йәшерәм.

— Балам, — тип өндәшә әсәйем. Унын тауышына тертләп, башымды ҡалҡытам да үҙемдең туҡталышта баҫып торғанымды күрәм.

Төшмө был, өнмө, аяҡ өҫтө һаташыумы, тип уйлайым ҡаланың шыҡһыҙ эңерендә иҫемә килеп. Йылға уртаһында суҡайып торған ҡая кеүек тротуар уртаһына баҫҡанмын. Оҙон автобустан бүҫелеп сыҡҡан күмәк халыҡ ағымы, миңә килеп еткәс, икегә айырыла ла йәнә ҡушыла. Һағыныуҙың сигенә етеп, һаташа башланым шикелле мин. Тик ҡулым менән кеҫәмдә тумпайып ятҡан алманы һәрмәйем. Бына ул — йоҙроҡ ҙурлыҡ, шыпшыма алма. Бер битендә бәләкәс кенә ҡытыршы ороһо бар. Мин уны сығарам да рәхәтләнеп еҫкәйем. Ул йыпйылы. Әйтерһең дә, әсәйемдең йылыһын һаҡлай. Мин был мөғжизәне өйөмә, инде һағынып өлгөргән балаларыма алып ҡайтырға ашығам. Тылсымым яй ғына килеп ҡунған ҡар бөртөгө кеүек ирей юҡҡа сыға.

Ерҙе йылы юрған кеүек ҡар ҡатламы сорнай. Ул киләһе яҙ шытып сығасаҡ орлоҡтарҙы һәләкәттән ҡурсалай. Ә күңелде яраларҙан бары һөйөү генә йолоп ҡала ала. Әҙәм балаһы иһә һәр саҡ бәхет артынан саба, фәҡәт һөйөү көҫәй. Улар етмәгәндә шым ғына иңрәп ғүмер итә, ниңә йәшәгәнен дә аңламай башлай. Әммә һауа еткән саҡта, уның барлығын абайламағандай, был мөҡәддәс тойғо солғанышында беҙ уның ҡөҙрәтен һанламайбыҙ икән. Бары тик юғалтҡас, тонсоға башлағас, тормош ҡапыл шыҡһыҙланып киткәс, юҡһынабыҙ.

Мин аңланым.

Балаларым мине әсәй тип ярата. Ирем — ҡатыным тип. Әхирәттәрем дуҫ, серҙәш булған өсөн. Мин күп ҡырлы аҫылташ кеүекмен. Уларҙың һәр береһенә бер ҡырым менән балҡыйым. Әммә, ошо ташты эшкәртеп балҡытҡан оҫта кеүек, барлығыма, булмышыма тотош хаталарымды, етешһеҙлектәремде, кескәй генә уңыштарымды ла ҙур итеп ҡабул иткән, мине хатта үҙемдең асыуымдан да ҡурсалаған һөйөү юҡ икән дә. Күңелем ана шул юҡлыҡтан нисәмә йыл инде ҡорошоп һыҡтай һәм ысынбарлыҡтан хәтирәләр юҫығына күскән ҡотло доньямды юҡһына. Ғүмеремдең уртаһына еткәс, бер миҙгелгә генә ҡабаттан табып юғалтҡас, әсә менән ата һөйөүенең нимә икәнен һәм етемлектең ғазабын аңлайым.

# ГҮЗӘЛ

Оҙон ҡамыштар уратып алған ҡараһыу йәшел күлдәргә оҡшаған күҙҙәре хайран уның. Улар ҡаҡса битенең яртыһын биләп тора һәм бер күреүҙән арбай. Уларға мауығып, Гүзәлдең артыҡ ябыҡлығына ла, үтә нәфис тиреһенең йәш ваҡыттағы һығылмалылығын бер ни тиклем юғалта, таушала башлағанына ла, күптән ҡыҙыл буяҡ күрмәгән нәҙек ирендәренең саҡ ҡына күкшелләнеп тороуына ла әһәмиәт бирмәйһең.

Ул, алдында ятҡан күрәҙәсе Таро кәрттәрен уйсан барлап, башҡа һыймаçлыҡ сәйер нәмәләр һөйләй. Мин ышанырға ла, ышанмаçҡа ла белмәйем, шул уҡ ваҡытта эстән генә, туҡтап ҡуя күрмәһен, тип хәүефләнеп йотлоҡҡанмын. Сөнки уның ауыҙынан сыҡҡан һәр хәбәр, хатта төптө уйҙырма булып тойолғаны ла, шундай мауыҡтырғыс яңғырай.

Хәйер, беҙҙең арала ул һәр саҡ үҙенең сәйерлеге менән айырылып торҙо. Мәçәлән, ошоғаса бер кем дә уның ниндәй килемгә йәшәгәнен теүәл генә белмәй. Гүзәлдең бер ҙә аҡсаға йонсоп йөрөгәне лә, шул уҡ ваҡытта торлап ҡына бер урында эшләгәне лә юҡ. Матди донъяға битараф, сәйергә һаналһа ла, ул атаһының Дим микрорайонындағы ғәҙәти өс бүлмәле фатирын, әллә ниндәй ҡатмарлы варианттар табып, Мәскәүҙән егерме-утыҙ ғына саҡрым йыраҡлыҡта, урман араһында урынлашҡан, һуңғы йылдарҙа миллионерҙарҙың күҙе төшкән ҡасабала ике бүлмәле фатирға алмаштырып алды. Ун йылға яҡын инде түшәктә ятҡан ауырыу әсәһен башкөллө шунда күсереп алып китте.

Әле беҙ йәйҙең иң йылы, иң матур сағында ана шунда, уның аулаҡ төйәгендә ултырабыҙ. Ул бөтә ишектәрҙе һәм тәҙрәләрҙе асып ҡуйған. Үтәнән-үтә иçкән рәхәт ел ебәк ҡормаларҙы саҡ-саҡ ҡына елберләтеп ала. Фатиры бары уға ғына хас нәзәкәтле зауыҡ менән йыһазландырылған. Хатта көнбағыш сәскәһе төшөрөлгән һары сарафанын да иҙәндәге әле үҙе аяҡ бөкләп ултырған зәңгәр келәмгә төç булһын өсөн махсус рәүештә кейгән кеүек.

Ул, оҙон нәфис бармаҡтарын оçта уйнатып, һаман кәрттәрен барлай, уларҙы үҙе генә аңлағанса теҙеп һала, ҡайһы ваҡыт хәбәрен бүлеп, оҙаҡ ҡына теклэп ултыра йәки бөтөнләй ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡандай иғтибарһыҙ

ғына аралаштыра. Ваҡыт-ваҡыт үрелеп, эргәләге йомшаҡ ҡәнәфиҙә иҙрәп ятҡан бесәйе менән булаша. Баһаһын, үҙен яратыуҙарын, ифрат та ҡәҙерле икәнен белгән бесәй иһә, һыңар күҙен аса биреп, хужабикәһенә ризаһыҙ ҡараш ташлай.

— Беҙҙең атай бит ул, — ти Гүзәл. — Атайҙың йәне уға күскән. — Шунан бесәйенең асыуланыуына ҡарамай һаман булышып, көләп ҡуя. — Кеше үлгәндән һуң, уның йәне нәҫелендә ул мәрхүм булғас тыуған йән эйәһенә күсә. Ә беҙҙең зат-зәүерҙә һуңғы биш йыл эсендә бер сабый ҙа тыуманы. Был бесәй иһә атайҙың йыллығын үткәргән көндө кискеһен беҙҙең өйгә үҙе килеп инде.

Мин бит уға тиклем бесәй яратмай торғайным. Бәләкәйҙән уларҙы енем кеүек күрәм. Ә ул минең өсөн иң ҡыйын көндәрҙең береһендә пәйҙә булды. Үҙемде иҫ китткес яңғыҙ һәм көрсөктә тойған сағымда. Аятҡа саҡырылған кешеләр таралышып, һауыт-һабаны йыуып бөтөп, арманһыҙ ултыра инем, ҡурҡыныс итеп ямғыр яуа башланы. Өйҙә бер үҙем. Мөйөштәге диванға йомарланып ятҡанмын да, йәшен ялтлап, күк дөһөрләгән һайын мендәр аҫтына башымды йәшереп, атайымды саҡырам. Эсем яныр бара, һис кенә лә сыҙарлыҡ түгел. Ҡайғы баҫыла, тиҙәр, тик уның әсеһе үткәс, түҙгеһеҙ һағыныу һағышы ябырыла. Шул саҡ йылы ғына бер нәмә килеп һыйынды. Йомшаҡ ҡына, йөнтәҫ. Нишләптер тертләмәнем. Күҙемде асып ҡараһам, бәләкәс кенә бесәй балаһы дерелдәп миңә йылышҡан. Үҙе шул тиклем йолҡош, ябыҡ, йонсоу. Уны үҙемә оҡшаттым. Ҡулыма алдым да, һыйпайым тип ҡараһам, йөнө ҡыймылдай. Асып ебәрһәм, шыр бет. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тамсы ла ерәнмәнем, киреһенсә, булмышыма нисектер рәхәт, һил булып китте, тәнемә йылы йүгерҙе.

Уны шунда уҡ ваннаға алып инеп, йылы һыуҙа йыуындырҙым. Бесәйҙәр һыу яратмай, тиҙәр. Ә бының йонсоуы шул тиклем үҙәгенә үткән булғандыр, күрәһең, кинәнә генә. Бесәйҙәрҙең йылмайғанын да шунда беренсе тапҡыр күрҙем. Йомшаҡ таҫтамал менән ҡоротоп, әсәйемдең дебет шәленә төрөп һалғайным, күҙемә шул тиклем яратып, аңлап ҡарай ҙа бер туҡтауһыҙ йылмая. Шул көндән алып ул беҙҙең бәләкәй генә ғаиләнең тулы хоҡуҡлы ағзаһына әйләнде.

Ә һиҙгерлегенә һушың китерлек, кәйефем юҡлығын әсәйем абайламай, ул иһә бындай мәлдә эргәмдән кит-

мәй. Ҡыуалаһаң да, мәҙәһыҙламайым, тигәндәй ситкәрәк барып ултыра ла, күҙҙәрен минән алмай. Ә күңелем көр саҡта, миңә бөтөнләй иғтибары юҡ. Хатта иркәләгәнемде лә йонсотоу кеүек ҡабул итә.

Гүзәл үҙенең ғаилә ҡормауына, балаһыҙлығына шул тиклем битараф. Ә мин ҡарап туймаҫлыҡ һылыу, аҡыллы, эшсән ҡыҙҙың ни өсөн яңғыҙ ҡалыуҙы хуп күреүен аңларға тырышам. Уның бәхетһеҙ мөхәббәт тарихы тураһында бер ваҡыт яҙа-йоҙа ишетеп тә ҡалғайным. Шуға күрә һаҡ ҡына: «Ейән-ейәнсәрҙәр һөйөргә әсәйең дә бик теләр ине», — тип әйтеп ҡуям.

Күңелең ятҡан, ғүмер юлын йәнәш атлап, һыйынышып үтерлек кешене табыуы, бәлки, ысынлап та еңел түгелдер. Әммә хәҙерге ваҡытта бик күп ҡатын-ҡыҙ, ирем юҡ, тип баш ҡатырып тормай, үҙенә һөйөнөс һәм иптәш булһын өсөн бәпәй табып ала. Шундай бер әхирәтем: «Бәхетте эҙләмәйҙәр, ә табалар», — тип ҡабатларға ярата, «табалар», тигәндә, бәпәйләүҙе күҙ уңында тота булыр.

Кәрттәрен барлаған Гүзәл үҙ алдына һөйләнгән кеүек кенә һүҙен башланы:

— Эргәмдә һәр ваҡыт егет-елән күп уралды.

— Әйтерең бармы, һиңә бит ҡарап туйып булмай торғайны, — тип ҡыҫтырмай түҙмәйем.

— Мәктәптә уҡығанда уҡ малай-шалай сәстән тартып булһа ла иғтибарымды яуларға маташа ине. Ни өсөндөр минең генә ғишыҡ-мишыҡҡа ҡыҙыҡһыныуым булманы. Ҙурая төшкәс, инде яңғыҙ йөрөү оят кеүек күренә башлағас, уныһына, быныһына күҙ һалам, ҡайһы берәүһе хатта оҡшай ҙа кеүек, тик күңелем: «Юҡ, ул түгел», — тип гел кире ҡағып килә. Әйтерһең дә, мин үҙемә яҙған кешене электән беләм. Бары ҡасандыр юғалтҡанмын да миллиондар араһынан шуны танырға, эҙләп табырға маташам.

Инде сабырлығын юйып, әсәйем дә: «Ниндәй кешеләрҙе һанға һуҡмаған булаһың, кемде көтәһең?» — тип хафалана башланы. Үҙем дә аптырайым, йәр булырҙайҙары ла бар бит инде, тик ҡайҙандыр беләм: миңә яҙған түгел.

Ул көндө ғүмерҙә лә онота алмам. Яҙҙың иң бысраҡ ваҡыты ине. Аҡ булырға тейешле ҡарына тиклем ҡап-

ҡара. Автобустан «Үҙәк баҙар» туҡталышында төшөп ҡалдым. Донъя шундай ҡаҡашып ҡатҡан һәм уны бер нисек тә таҙалап алып булырлыҡ түгел. Аҙым һайын һаҫыҡ асарбаҡтар осрай, хәйерселәр тора, иҫеректәр аунап ята. Аяҡ аҫтына баҫыр ер юҡ. Хатта күк тә зәңгәр түгел. Унда ла бысраҡ сепрәк йыртыҡтары кеүек киҫәк-киҫәк болоттар өҙөк-йолҡоҡ булып осоп йөрөй. Хәйер, күңелемдә лә шул уҡ хәл.

Шундай халәттә баҙар алдынан үтеп киттем. Мөйөштә ҙур йорт тора бит. Шуның эргәһенән боролайым ғына тигәйнем, донъяға көтмәгәндә балҡыш яғылды. Бер аяғым әле күләгәлә, теге бысраҡ яҡта. Ә икенсеһе менән, әйтерһең дә, алдан билдәләнгән бер һыҙыҡты үттем. Башымды аҫҡа эйеп китеп бара инем. Әле ҡалҡытып та ҡараманым, әммә күрәм: уң яҡтараҡ, йүкә ағасы төбөнән нур урғыла. Күҙемдең ҡырыйы менән һирпелеп кенә баҡтым шулай ҙа. Ысынлап та тора һәм минең яҡынлашыуымды көтә. Шул саҡ хәтеремдә ниҙер ялтлап китте: беләм, ул хәҙер яныма килә лә: «Унынсы трамвайҙың туҡталышы ҡайҙа?» — тип һорай. Һораманы. Тороп ҡалды. Ә мин урамдың теге яғына сығыр өсөн йәшел ут янғанды көтөп торам. Ә нур эркелә. Бына, ниһайәт: «Унынсы трамвайҙың туҡталышы ҡайҙа? Әйтә алмаҫһығыҙмы?» — тигән шундай таныш, ғәзиз тауыш яңғыраны. Шундай таныш, хатта эҫеле-һыуыҡлы булып киттем.

Мин үҙемдең яуабымды ла белә инем. Хәйер, ул да белә ине. Һәм минең яуабым, әйтерһең дә, пароль. Ул бер-беребеҙҙе таныу өсөн генә кәрәк. Йөрәгемдең дарҫлап тибеүенән, башыма ҡан һикереүҙән, тулҡынланыуҙан һәм ҡыуаныстан мин хатта уның йөҙөн йүнләп күрмәнем дә. Иң мөһиме, был ул ине. Был юлы ул ниндәй ҡиәфәттә ебәрелгән, исеме кем, ниндәй милләттән, хатта нисә йәштә — былар барыһы ла әһәмиәтһеҙ. Иң мөһиме — мин уны таптым. Яңы ғына шыҡһыҙлыҡтан шаҡрайтып ҡатырырлыҡ донъя ҡапыл ҡотайҙы. Күктең зәңгәрлегенән моң ағылды. Быны мин, ул ғына түгел, эргә-тирәлә мыжғып йөрөгән кешеләр ҙә тойҙо.

Уға яуап биргән саҡта ҡарашым шул тиклем сәйер тойолғандыр, моғайын, ә, бәлки, юҡтыр ҙа... Сөнки ул үҙе лә бына-бына ҡанатланып осоп китер кеүек ине.

Мин уға унынсы трамвайҙың ҡайһы ерҙә туҡтағанын күрһәттем. Уға саҡ ҡына атлап бараһы ла, ултырып та китәһе...

Ә мин үҙ юлымда булдым. Уны ҡабат нисек табырмын һуң, тигән уй башыма ла инеп сыҡманы. Был мәлдә уның ысынлап та был донъяла бар икәнен, хатта Өфөлә йөрөп ятыуын, уйҙырма ла, хыял да түгел икәнен белеү иң мөһиме ине. Ул, ниһайәт, ташты ла иретерлек итеп яратып ҡараған ҡуңыр күҙле, асҡаҡ аҡ йөҙлө, сандыр кәүҙәле — матди кәүҙәләнеш алған йән эйәһе. Ул, ысынлап та, был Ер йөҙөндә бар!

Ошо мөғжизә түгелме ни? Күҙ алдыңа килтер. Ғаләм икһеҙ-сикһеҙ. Әҙәмдең аҡылы ғына түгел, уйы менән хыялы ла етмәҫлек. Ваҡыттың да иге-сиге юҡ. Һәм бербереһенә тәғәйенләнгән кешеләр — беҙ икебеҙ — йыһандағы планеталар араһында бары тик Ерҙә, Ерҙәге бихисап ҡалаларҙың береһе Өфөлә, Өфөнөң бихисап урамдарының тап ошо ерендә осрашабыҙ. Бында бер ниндәй ҙә осраҡлыҡ юҡ. Бында миллиардтан бер генә мөмкинлек бар ине, һәм беҙ табыштыҡ. Күҙ алдына килтерә алаһыңмы?

Шул саҡ ул артымдан ҡыуып етте:

— Туҡтағыҙ, — ти ул. — Мин унынсы трамвайҙың ҡайҙа туҡтағанын беләм.

Ә мин уның тап ошо һүҙҙәрҙе әйтергә тейеш икәнен белгәнмен дә, шуға ла бәхетемдән осоп китмәй, йәки уны ҡабат юғалтыуҙан ҡотом осмай, тыныс ҡына китеп барам икән.

Уның күҙҙәрендә ашҡыныу ҙа, аяныс та бар. Ул үҙенең тағы, бәлки, йөҙөнсө йә меңенсе тапҡыр яңылышыуынан, минең ул көткән, ул эҙләгән, күңеле сарсаған кеше булмай ҡуйыуымдан ҡурҡа. Ә мин үҙемдең тап шул, ул көткән кеше икәнемде беләм. Шуға тыныс, хатта шаянмын.

— Ә мин һеҙҙең белгәнегеҙҙе беләм, — тип көләм.

Шул уҡ ваҡытта ул минең тап ул эҙләгән кеше булып, осраткас та юғалтып ҡуйыу ихтималынан да ҡурҡа. Ә миңә уның борсолған күҙҙәренә ҡарап тороу шул тиклем ҡыуаныс һәм әйтеп биргеһеҙ рәхәт.

Минең балҡышымдан ул да тоҡана.

— Ә мин минең белгәнемде белгәнегеҙҙе беләм, — тине ул. Икебеҙгә лә ҡыҙыҡ. Ҡыҙыҡ та, рәхәт тә.

Унының миңә ҡағылып ҡарағыһы килә. Шул саҡта бөтөн күҙәнәктәре мине таныр һәм инде был мине тапҡанына кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил булыр. Ҡарашынан шуларҙы уҡыйым. Миңә ҡулын һуҙған арала тартылған кереш кеүек көсөргәнештән булмышым зыңғырлап китә. Төнө буйы туңып сыҡҡандан һуң зарыҡтырып ҡалҡҡан ҡояштың тәүге нурын көтөп алған үлән ҡыяғы кеүекмен.

Артабан беҙ башыбыҙ һуҡҡан яҡҡа бергә киттек. Ни тиклем генә бәхетле булһам да, тойҙом: ҡулдарыбыҙ етәкләшкән мәлдә ҡотолғоһоҙлоҡтоң тимер бығауҙары икебеҙҙе бергә шартлатып ҡоршаны. Тойҙом, тик хатта шомланманым да.

Эйе, икебеҙ ҙә тойҙоҡ: былдай бәхет һәм былдай яратыу Ерҙә мөмкин түгел. Осрашҡандан һуң башҡаса айырылышманыҡ. Ниндәйҙер хәүеф һағалағанын һиҙгән өсөн мөмкин булғанда ла, хатта булмағанда ла бергә булырға тырыша, тырыша ғына түгел, атлыға инек.

Шулай ҙа хәүефте мин алданыраҡ шәйләнем. Беҙҙе ниндәйҙер ҡойон уртаһына йәки сөңгөлгә һөйрәтеп инеп барған дәһшәтле көстөң һулышын һиҙҙем. Тап ошо көс беҙҙе бер-беребеҙгә этәрә һәм, етәкләшеүебеҙ була, яңынан үҙенең ҡара упҡынына һура башлай.

Ниндәйҙер ҡөҙрәт аңғартты: бергә булһаҡ, беҙҙе һәләкәт көтә. Ҡушылһаҡ, ул ҡотолғоһоҙға әйләнәсәк. Ә беҙ ЗАГС-ҡа ғариза биргәнбеҙ. Никах балдаҡтары, туй күлдәге алынған. Атай-әсәйҙәребеҙ мәж килеп туйға әҙерләнә. Ә мин ҡара көйөп был һәләкәттән ҡотолоу юлын эҙләйем. Ниһайәт, таптым шикелле. Тойҙом. Бөтәһенән дә ҡасып Мәскәүгә киттем. Ни өсөн Мәскәүгә икәнен тәүҙә үҙем дә аңламаным. Унда бер кемем дә юҡ ине бит. Вокзалдан туп-тура ҡала ҡыҙырырға сығып киттем. Әйберемде һаҡлау камераһында ҡалдырҙым да.

Башым һуҡҡан яҡҡа, аяҡтарым ҡайҙа илтә, шунда йүнәлдем. Беренсе осраған медицина институтының ишеге алдына килеп баҫҡас, хатта аптыраманым да. Сөнки мине күптән үк бында тарта ине.

Минең һәр саҡ тап Мәскәүҙә һәм тап медицина институтында уҡығым килде. Әсәйемдең эргәһенән ебәргеһе килмәгәс, үҙебеҙҙәге мединститутҡа барырға уйлағайным. Аҡсаһыҙ тығылып та маташмағыҙ, тип күңелемде кире һүргәстәре, биология факультетына индем.

Бәлки, мине әле ана шул хыялым ғына алып килгәндер, тип уйлап, өҫкә күтәрелдем. Ни өсөндөр баҫҡыс-

тары яҡшы таныш ине — гүйә, мин уларҙан меңәр тапҡыр менеп-төшөп йөрөгәнмен. Өҫкә күтәрелдем. Өсөнсө ҡаттағы бер бүлмә алдына туҡтаным. Ишеккә «институт музейы» тип яҙылғайны. Асыҡ. Индем. Аяҡтарым туптура бер ҙурайтылған фотография ҡаршыһына илтеп баҫтырҙы. Үҙемде мин шунда уҡ таптым. Ә ул, ауыҙын ҡолағына тиклем йырып, артымда ғына баҫып тора. Фотография аҫтына: «1935 йылғы был сығарылыштан бер генә кеше лә тере ҡалманы. Барыһы ла Сталин лагерҙарында йәки Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында һәләк булды», — тип яҙылғайны.

Музей хеҙмәткәре, экспонаттарҙың үҙҙәре кеүек үк өлкән ҡатын фотолағы «мин»ең яҙмышымды белә ине. Бына нимә һөйләне ул миңә.

Беҙ «уның» менән бер төркөмдә уҡығанбыҙ. Дүртенсе курста саҡта өйләнешкәнбеҙ. Беҙҙең мөхәббәт хаҡында легендалар йөрөгән. Уға иҫ киткес талантлы хирург яҙмышы юрағандар. Бәхетебеҙгә хатта көнләшеүсе лә булмаған, сөнки беҙҙең мөнәсәбәттәр шул тиклем камил булған. Әммә 1936 йылда уны ҡулға алғандар. Күп тә үтмәй, мине лә. Бер төнгө допрос ваҡытында ул язаларҙы күтәрә алмайынса үлгән. Таңында мине лә камералағы һәндерәмдә үле килеш тапҡандар. Ни өсөндөр минең тәнем дә уныҡы кеүек үк күм-күк булған. Әйтерһең дә, уны типкеләгән итектәр мине лә изғылаған.

Музей хеҙмәткәре һөйләй, ә минең иҫемә төшә. Барса бәхет һәм һәммә ғазаптар.

Шул саҡ мин үҙемдең ни өсөн шул тиклем совет власын һөйһөнмәгәнемде аңланым. Һөйһөнмәү генә түгел, нәфрәтемде. Ә бит, ҡарап торһаң, быға бер ниндәй ҙә сәбәп юҡ. Әсәйем дә, атайым да ялҡынлы комсомол йәшлеге үткәргән. Атайым — партия ағзаһы. Олатай-өләсәйемдәр ҙә был режимдан артыҡ зыян күрмәгән: Себер ҡыуылмаған, төрмәлә ултырмаған. Ә миндә бәләкәйҙән үк, хатта октябрят сағымдан сәбәпһеҙ бер екһенеү бар ине. Мин тәүҙә бының сәбәбен мәктәпте яратмауымдан күрҙем. Ә бит отҡор ғына бала инем. Әлифбаны беренсе класҡа төшкәнсе үк үткәйнем. Ғөмүмән, уҡырға ярата инем. Ә бына мәктәптән тыш сараларҙан, «бисмилла»нан өркkән шайтан кеүек тайшандым. Ярай әле мин үҫеп еткәнсе партияның йоғонтоһо бөттө. Юғиһә был ҡараштарым йүнлегә килтермәҫ ине. Әле иһә ошо нәфрәттең инешен таптым: үткән тормошомдоң әрнеү-

ҙәре, төрмә ғазаптары, мәңгелектән һаркып сығып, кескәй булмышымды ағыулаған.

Ул көндө мәңгелек йәнем аяғымды Мәскәү буйлап бик оҙак йөрөттө. Элек йәшәгән өйөбөҙҙө барып таптым. Ни мөғжизә менәндер, ул тороп калған. Тәүге тапкыр үбешкән ағасыбыҙ төбөндә баҫып торҙом. Йәнем ғазаптан үрһәләнде. Шул тиклем бер-беребеҙгә атлыккас, һәм ашығып, баҫтырышып ергә тыуғас, — һуңғы үлем менән тыуым араһында бары утыҙ йыл тирәһе — тимәк, беҙ мәңгелек донъяла ни сәбәптәндер кауыша алмайбыҙ. Бәлки, бер-беребеҙгә самаһыҙ тартылыуыбыҙ гонаһтыр, шуның яҙаһын алыу өсөн кабат-кабат ебәреләбеҙҙер? Шуларҙы аңлай алмай баш ваттым, һәм ул сер бына-бына асылыр кеүек тойолдо.

Таңға табан Мәскәү йылғаһы буйына килеп сыктым. Аяғымда баҫып торор хәлем калмағайны. Бер эскәмйәлә йокомһорап киткәнмен. Шунда бер сәйер халәткә юлыктым. Төш тә кеүек, әммә ғәҙәти төш түгел. Хәтер йомғағым тағатыла ла быға са йәшәгән ғүмерҙәрем күҙ алдымдан үтә.

Үҙемдең гөл, уның ысык сағын, үҙемдең ком, уның диңгеҙ мәлен, иҫәпһеҙ-һанһыҙ табыу-юғалтыуҙарҙы сырамыттым. Тән бары кап, йәнгә вакытлы йорт икәнен тойҙом. Йәндәребеҙ һәр сак йәнәш, ерҙәге арауык улар өсөн һис каршылык түгел.

Шул сак карар иттем. Кемдер шыбырланы колағыма: әллә бөтә серҙәргә шаһит ай, әллә йондоҙло күктең көмбәҙе, бәлки, эргәлә генә ағып яткан йылғалыр. Тәндәребеҙҙең кауышыуынан тик бер генә тапкыр ваз кисә алһак, тәкдиребеҙҙе отасакбыҙ. Ниңә шулай тигән кәңәш булды? Бәлки, быға тиклем кисергән ғазаптарыбыҙ касандыр бер кылған гонаһ өсөн яза булғандыр ҙа, корбан туҫтағыбыҙ мөлдөрәмә тулғас, әшкәрткәндер мине бөйөк акыл, ни рәүешле индерергә яңы төҙәтмәләрҙе иҫке яҙмаларға?

Мин ышандым ошо әшкәртеүгә. Шуға күрә һөйгәнемдән касып киттем. Унан йәшерендем. Мәңгелек кауышыу хакына бер кыҫка ғына ғүмерҙе корбанға килтереү һис йәл түгел.

Ә ул билдәһеҙлектән ғазапланмаһын өсөн, башканы яраттым, тип алдаттым. Әлбиттә, ул быға ышанманы, әммә карарыма буйһонорға мәжбүр булды.

Гүзәл һөйләй, ә минең колағыма шиғыр ишетелә.

— Таш төрмәнең йәнәш камераларында ғүмерлеккә бикләп ҡуйылған ике тотҡон кеүек йәндәребеҙ. Төрмә — минең тәнем, йоҙаҡ — ихтыярым, рәхимһеҙ һаҡсылар — аҡылым.

Ҡауышыу көсәп, һөйгәне артынан атлыҡҡан йәнем әлеге яҙмышым менән булмышымдан биҙгән. Мөмкин булһа, ул мине күптән ташлап ҡасыр ине лә, ирек бирмәйем. Яҙмышта яҙылған бөтөн әрнеүҙәрҙе кисереп бөтөргә тейешлемен.

Ихтыярым — бығау, аҡылым уяу һәм рәхимһеҙ һаҡсы, әммә улар төштәремә хужа була алмай. Хатта ҡайһы ваҡыт миңә ысын тормошом төшөмә күскән кеүек күренә. Һағыныуымды уны төшөмдә күреп ҡандырам.

— Әлбиттә, мине, диуана, аҡылдан шашҡан, тип уйларға мөмкин, — ти Гүзәл, ҡарағусҡылланып, тонйорап киткән күҙҙәрен миңә төбәп. Байтаҡ өндәшмәй. Ҡулындағы күрәҙәсе таро кәрттәрен елпеүес кеүек итеп өҫтәлгә йәйеп һала. Тағы ҡулына ала. Уның оҙон, нәфис бармаҡлы матур ҡулдарының нәзәкәтле хәрәкәттәрен күҙәтеп ултырыу аңлатып бирмәҫлек рәхәтлек бирә.

— Мин унан сәйер сәләмдәр алам. Ошо матди донъяла ла.

Былтыр тыуған көнөм алдынан ете төн уртаһында уяндым. Мейемдә өйрөлгән һүҙҙәр теҙмәһе тынғы бирмәгәнгә. Ҡағыҙ менән ҡәләм алып яҙа башланым. Яҙғандарым хатта һүҙ ҙә түгел, тик хәрефтәр генә. Ул хәрефтәрҙе аҙаҡтан һүҙҙәргә, һөйләмдәргә саҡ айырып алдым. Ниһайәт, таңға табан уларҙың сәйер, шифырға бик оҡшап та етмәгән бер ижад емеше икәнен күрҙем. Был минең ижадым түгел икәне ап-асыҡ, сөнки ундағы образдар минеке түгел. Ғөмүмән, бәләкәйҙән хәбәргә оҫтамын, әммә яҙма телмәрем үҫешмәгән. Дөрөҫ, тәүҙә, әллә ысынлап та шағирлыҡ һәләте асылдымы, тип өмөтләнгәйнем. Яҙалар бит: кеше йәшәй-йәшәй ҙә ҡапыл унан шиғыр урғыла башлай... Әммә минең «шағирлыҡ» бер емеш менән сикләнде. Иң сәйере, ярты йылдан ҡулыма бығаса тотоп та ҡарамаған, хатта барлығын да белмәгән бер журнал килеп эләкте. Мәрәкә өсөн генә аҡтара башлағайным, унан үҙемдең көндәлегемә яҙылған юлдарҙы уҡыным. Тотош. Бер һүҙе лә үҙгәртелмәгән.

Ул журналды килтереп сығара һәм көндәлеген алып килә.

— Күрәһеңме. Авторҙың ул икәненә иманым камил. Ә был, тимәк, уның псевдонимы булып сыға. Тик был уның да берҙән-бер әҫәрелер, тип уйлайым. Һағыныу ғазабы менән түләп, йыһандан ялбарып алған аңлатма.

*Кем һин йәрем?*
*Сикһеҙ был йыһандың*
*башынан осона елә сабып*
*мин юллайым һине.*

*Ҡара ғаләм һипкелендә —*
*ят йондоҙҙа — килеп таптым бер сак.*
*Һин бер сәскә инең бәжеп барған.*
*Йәйғорло таңдың ҡәтрәһе — ысыҡ —*
*мин тажыңа тамдым —*
*киттең балҡып.*
*Шул күҙ асып йомған миҙгел ине*
*беҙгә яҙған бәхет.*

*Ниндәй миҙгел!*
*Уны татыу өсөн миллионынсы ҡабат*
*Әжәл күҙҙәренә еңмешләнеп,*
*тыҙрайып ҡарарға мин ризамын.*
*Тик ғәрәсәт*
*йәнә ала һине минән йолҡоп.*

*Яҙмыш мәрхәмәтле:*
*Йоҙроҡ хәтлем Ерҙә яралам да,*
*Әйләнәм дә һине килеп табам.*

*Бар донъяның уты*
*сарыф була мәллә мөхәббәттең*
*Һинең менән мине бер йән иткән*
*һөйөү тигән мөғжизәле ялҡынынан?*
*Юҡһа ниңә ғүмерһеҙ һуң беҙҙең бәхет?*

*Исемеңде соҡоп яҙҙым төрмә диуарына*
*һуңғы тапҡыр беҙҙе айырғанда*
*йыһан ҡоло йәлләт.*
*Хуш бул, йәнем!*
*Мин табырмын һине*
*Миллионынсы ҡабат.*

*Кем һин, йәрем?*
*Яҙмышыбыҙ утлы бер дүңгәләк,*
*ҡауышыу-юғалтыу ҡуласаһы.*
*Мин табам, ә тәҡдир йолҡоп ала,*
*йәнә бырактыра — шулай мәңге.*

*Ҡәһәрләнгән йәндәр —*
*ниндәй хата өсөн беҙ түләйбеҙ?*
*Бәлки, ундай бәхет ярамайҙыр?*
*Бәлки, ул тыйылған бер ләззәттер,*
*Ә беҙ сөңгөлөнә сумабыҙ ҙа юғалабыҙ...*
*Мәңгелектә йәнә ҡауышырға,*
*баҡыйлыҡта тағы осрашырға.*

*Был ғаләмдә? Бәлки, тегеһендә?*
*Ни айырма?!*
*Мин һәм һин барында —*
*Бары мөхәббәткә тоғро йәндәр.*

*Кем һин, йәрем?*

*Сабый йоҙроғолай ғына ошо Ерҙә*
*Аҙашмаҡсы булдың.*
*Яҙмыш түгел, һинең ихтыярың*
*Мине һинән үҙе йолҡоп алды.*

*Һин тәҡдирҙе шулай еңмәксеһең.*
*Дүңгәләкте шулай өҙмәксеһең.*
*Әжәлдән башҡараҡ яҙмышты һин*
*Һөйөү түләп һатып алмаҡсыһың?*

*Кем һин, йәрем?*

*Атлыға ла йәнем һинең янға,*
*Быялаға бәрелеп ҡанһыраған*
*аҡ күгәрсен кеүек тәнемә ҡайта.*
*Йәрем, йәнем...*
*Һин ҡайҙа — мин барыбер шундамын.*

«Һин ҡайҙа — мин барыбер шундамын». Күрәһеңме? Мин йәшәйем икән, ул да тере. Минең өсөн иң мөһиме — ошо. Бәлки, шулай беҙ яҙмыштың башҡа бер биҙәген туҡырбыҙ ҙа, фажиғәнән бәхет хасил булыр. Мин шуға ышанам.

— Ошолайтып ғазап эсендә йәшәгәнсе, бәхеткә йотолоп яңыу яҡшыраҡ түгелме ни? — тип тауыш бирә күрше бүлмәнән көндәренең яй, һүрән, һоро ағышынан, төҫһеҙләгәнән, ризыҡтың татһыҙлығынан йонсоған ауырыу әсәһе.

Гүзәл өндәшмәй. Ул тамаҡ аҫтын рәхәт итеп тырнауға кинәнеп мырлаған бесәйе менән мәшғүл. «Атаҡай»ҙың үткән айҙа күрше бесәйҙәре менән һуғышып ҡойроғон һындырып ҡайтҡаны тураһында һөйләргә тотона. Нисек итеп Мәскәү буйлап ветеринар-хирург эҙләп йөрөгән дә, тегеһе ҡанһыҙ бәндә булып сыҡҡан, бесәйҙе мәңгелеккә йоҡлатырға тәҡдим иткән.

— Ярай әле травмпунктта эшләгән әҙәм табиптары миһырбанлыраҡ булып сыҡты. Гипсты улар һалды, — ти ул.

Тауышында бер ниндәй ҙә болоҡһоу юҡ, ул тыныс, саҡ ҡына моңһоуыраҡ, бары шул ғына.

Бына ул уйсан күҙҙәрен күкрәп сәскә атып кинәнгән йәйле тышҡа төбәп шымды. Ә минең уға ышанғым килә. Күкрәктәге йөрәк, күҙҙәге йәш атылып сығырҙай булып теләйем быны. Уның хыялдарына, тойғоларына, һиҙемләүҙәренә ышанғым килә. Уның янында тормош бөтөнләй бүтән ҡиәфәттә. Тәҙрә төбөндә ҡыҙын ташлап киткеһе килмәгәнгә йәнен бесәйгә ҡундырған атаһы йәйге һауала кәйелгән ҡарлуғас балаларының сырылдашып осҡанын күҙәтә.

— Ямғыр яуыр, ахыры, — ти Гүзәл, күктә ҡулъяулыҡ ҡәҙәрле лә болот булмауға ҡарамаҫтан. — Ҡарлуғастар түбән оса башланы.

Ысынлап та, ярты сәғәт үтмәй, еләп килгән ҡара болот эҫегә йонсоп ятҡан ерҙе йомарт һуғарып, һауаны сафландырып китте.

Тын алыуы иркенәйеп, тирә-яҡ таҙарынып китеүҙән рухланып, тормоштоң гүзәллегенә инанам һәм мәңгелек ҡауышыу хаҡына айырылышыу ғазабын ҡурҡыуһыҙ һемерергә риза булған гүзәл Гүзәлдең хәҙер үк, ошо ерҙә, ошо ғүмерҙә бәхетле һәм мөхәббәтле булыуын ялбарам.

Бына әле лә. Һуңғы нөктәмде ҡуйыр алдынан төнгө ғаләмдең мең һипкелле һылыу һәм серле йөҙөнә төбәләм дә: «Ҡауышырға бер сара табығыҙ, ғашиҡ йәндәр. Зинһар өсөн, таба күрегеҙ бер әмәлде!» — тип һығынам.

«Ҡыйыулығың етеп хыяллანһаң, теләктәрең ысынлап та тормошҡа ашамы икән әллә ул?»

Эсенә һыймаған һөйөнөсө сыҙатманы, уны ғаләм менән уртаҡлашмау яҙыҡ булыр ине! Сыҡты ла, яҙғы донъяның тылсымына хайран ҡалып тыны быуылып торҙо.

Йондоҙҙар ҡул һоноп ҡына алмалы. Һандуғастар, моғайын, уларҙан ағылған нурға иләсләнгән. Аҡылдан шаштырырлыҡ итеп һайрайҙар. Шул ҡәҙәрле моңға түҙә алмай, йөрәккенәләре ярылып та ҡуймаç тимә! Алмағас сәскәһенең елдең иркәһенә лә ҡойолған нәфис аҡлығына семәрләнгән күтәрмәлә генә ултырып сыҙай алманы Зөбәйҙә. Ташҡын шауына табан атланы.

Яҙ һуңланы быйыл, ҡар яйлап ирене, йылға йылдағынан йыуаш шуға. Ышаныслы килеп басты Зөбәйҙә текә ярҙың тас башына. Ә былтыр ташҡындың иң шашҡан сағында тулҡындар ошонда килеп аяҡтарын ялап-ялап китә ине. Зөбәйҙә һиçкәнеп артҡа сигенеңкерәп ҡуйҙы...

* * *

...Тыҡрыҡ яғында ишетелгән тауышҡа һиçкәнеп артҡа сигенде Зөбәйҙә. Атаһы йәнә әсәһен иçереп йығылып ятып ҡалған еренән һөйрәкләп алып ҡайтып килә. Атаһының сабырлығына һушың китерлек: йән асыуы менән елтерәтеп алһа ала, тырнаҡ менән дә ҡағылмай. Төн тимәй, буран тимәй, ямғыр тимәй, ни тиклем арыһа ла, бер-бер хәл булып ҡуймаһын, тип, туптырлап эҙләргә сығып китә. Уҡытыусы башы менән иçерек бисәһен өçтөрәкләп, кеше күлдөрмәһен тип, балалар әсәләрен үҙҙәре эҙләй һалып ала торғайны. Әле мырҙалары күрше ауылда интернатта ятып уҡый, ә Зөбәйҙә бер нәмәгә лә эшкашмай ултыра.

— Алма кеүек балаң дөм һуҡыр булып ултырһын да, нисек йәнең әсемәһен? — тип шарылдап илай әсәһе. — Мин бит ҡайғымдан эсәм. Һин генә ул таш йөрәк. Аңлайһыңмы ни һин кеше хәлен?.. — Атаһы өндәшмәй. Ур-

тын сәйнәп түҙәлер, бахыр. Тыйыу күрмәгәс, әсәһе уның һайын ярһый:

— Һөйөклө балам көйөклө булыр, тип кем уйлаған?! Өс йәшендә ағып киткәнендә тотоп алмаған булһаң, бер илар ҙа онот булыр ине. Рәхәт тиһеңме инә кешегә балаһының ғүмер бақый зәғиф ултырғанын күреү?!

Көндән-көн доньяның томалана барыуына әрнегән ҡыҙының сей яраһына услап тоҙ һипкәнен, үҙ ҡулы менән ташҡынға этәргәнен аңламай ул.

«Был араҡы һөйләй, әсәм түгел, — тип уйлай Зөбәйҙә. — Әсәм улай ҡаты бәғерле түгел». Йәлләй уны Зөбәйҙә. Ярата ла, йәлләй ҙә... Һылыулығы әсәһенән күсһә лә, был яғы атаһынан, күрәһең. «Матур менән яҡшы саҡта кем яратмай, шәп булғас, һин йәмһеҙ менән насар саҡта яратып ҡара», — тип ауыҙҙарын ҡаплай ул ҡатынын битәрләй башлаһалар. Риза атаһы менән Зөбәйҙә. Тик әле әсәһенең һүҙҙәре күңеленә уйып инә: «Бер илар ҙа онот булыр инек!» Ә тулҡындар ялмап ялай, ҡуңалтаҡ килеш тишек ҡата кейгән аяҡтар уларҙағы боҙ һалҡынын тоя. Хатта ихтыяр ҙа кәрәкмәй. Уң аяҡты саҡ ҡына шылдыра баҫыу етә... Ә төн шундай йылы, яңы һауған һөт шикелле... Эргәләге талда бер һандуғас һайрай... Ус аяһылай ҡошсоҡто моңға мансыған донъяла аяуҙың йәшәүенә өмөттө өҙгө килмәй.

— Эй, Илаһым, ошо нурлы донъяңа һоҡланып йәшәһәм ине! — Ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ бала тулҡын теле ялаған урында баҫып торған ерендә тубыҡланды.

— Йәшә, теләгеңдә хаттин ашырҙай бер нәмә лә юҡ! — тип яуап ҡайтарҙы ғаләм.

Йыһандан эркелгән йылы ипкенгә рухланып киткән Зөбәйҙә, форсаты тейгәндә һорайым әле, моғайын, ауыҙыма һуҡмаҫтар, тигәндәй артабан тәүәккәлләне.

— Йәнә лә, — тине, үҙ хаяһыҙлығынан үҙе ояլғандай, тыны быуылып торҙо, — йәнә лә ошо нурлы-моңло донъяңда һөйөп-һөйөлөп йәшәһәм ине.

Бында ла баш китерлек бер ни ҙә юҡ ине ғаләм өсөн.

— Ошо мөхәббәттән бәхетле, оҙон ғүмерле балалар тыуһын ине, — тип өҫтәне Зөбәйҙә. Бынһында ул, үҙ әрһеҙлегенә һушы китеп, үҙе лә ишетмәҫлек итеп иренен генә йыбырлатты.

* * *

— Был ысынтылап кереште. — Гүзәлиә эшенән ҡара көйөп ҡайтып инде. — Тағы арттырҙы аренда хаҡын. Был бит үңәсеңде һығыу менән бер.

Яңы түрә менән ҡыҙы араһында көндән-көн ҡыҙа барған көрәште нисек баҫырға белмәй хафаға батҡан Хәнифә ханымдың башына келт итеп бер уй килде.

— Элек атайыңдар районҙарға сығып, айҙар буйы ауыл халҡын ҡабул итә торғайны. Шул тәжрибә бармы әле, юҡмы?

— Әсәй, һин мине ишетмәйһеңме әллә ул? — тип үсегеп китте Гүзәлиә. — Бында алыш «үләмме, ҡаламмы» тигән хәлгә барып етте. Ә һин хәтирәләргә бирелеп ултыраһың.

— Юҡ, һин үҙең мине тыңла, — тип ҡырт киҫте Хәнифә. — Ул алышығыҙҙың һинең бизнестың тонсоғоуы менән барып бөтөрө баштан уҡ билдәле ине бит инде.

— Әсәй, — тип хайран ҡалды ҡыҙы. — Нисек еңел генә әйтә алаһың? Улай булғас, мин ике-өс айҙан ыштанһыҙ ҡалам, ярты йылдан төрмәгә ултырам бит. Һин шуны аңлайһыңмы? Әле былай ҙа арендаға түләүҙән ҡалғаны кредит ҡаплауға китеп тик тора.

— Шуға күрә башты эшләтергә кәрәк, — тине Хәнифә тыныс ҡына. Ғәҙәти тормошта бошмаҫ кеүек күренгән әсәһенең иң ҡыйын, иң яуаплы мәлдәрҙә бысаҡ йөҙө кеүек үткер, салт булып киткәнен күргәне бар ине Гүзәлиәнең. Һағайып шымды. Ғауғалауҙан туҡтап, сәй ултырта башланы. Күҙҙәрендә алыҫлашып барған ямғыр болотондағылай ара-тирә йәшен былҡыуы дауам итһә лә...

— Һөйләштек бит инде мең ҡабат, — тип дауам итте Хәнифә ханым. — Түрәңдең өлөшкә ингеһе килә. Ә инде эшең бөтөнләй бармай бизнесыңды япһаң, миллион һумға алған уникаль аппаратураңды, кредитыңды ҡаплау өсөн, ярты хаҡына һатырға мәжбүр булһаң, — бына ҡайҙа уның өсөн байрам.

— Хайуан, — тине Гүзәлиә ҡулындағы сынаяҡты тишерҙәй итеп тызый-тызый һөртөп. — Һатырмын мин уға, көтөп торһон.

— Һатмай, атаң башына бараһыңмы? Йыландай телеңде сығарып, «ал», тип ялынып торорһоң.

— Һуң, халыҡҡа шул тиклем файҙалы, кәрәк бит ул аппарат.

— Уға күсһә, файҙаһыҙға әйләнәме ни? Шәп итеп рекламалап ебәрә, ҡулланыу даирәһен тағы ла ныҒыраҡ киңәйтә, уның мөмкинлектәре хаҡында ауырыуҙар ҙа, врачтар ҙа күберәк белә. Халыҡ нисек тә отолмай. Файҙаһы тағы ла ныҒыраҡ арта, баһаһы тағы ла ныҒыраҡ күтәрелә әле аппаратыңдың.

— Һине тыңлап торһаң, хас та шул хайуан өсөн ҡыуанҒандай һөйләйһең.

— Юҡ, мин һин килеп ҡапҡан хәлдең күләгәле яғын һүрәтләйем. Мәсьәләнең ҡара яғын. Әле һеҙҙең алыш шул юҫыҡта бара. Ҡараңғы яҡта һин еңеләһең. Андестанд?

Биш тел белеүеңдән, медицина фәндәре кандидаты булыуыңдан ни файҙа, тормошто белмәйһең, тип төрттөрөүе әсәһенең «төшөндөңмө» тигәнде инглизсәләүе.

— Их, атайым иҫән булһа, — тине Гүзәлиә төшөнкөлөккә бирелеп.

— Атайың да шул һинән йыраҡ китмәгән ине инде.

— Нисек китмәһен, ти?! Бөтөн теләгенә ирешкән, дан, рәхмәт, абруй ҡаҙанған профессор, халыҡ врачы.

— Ул бит яҡты яғы менән көслө ине, ҡыҙым.

— Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, үҙең әйтмешләй, миңә хәҙер нишләргә?

— Бөгөнгө көндә изгелеккә иң мохтаж, иң лайыҡ булған халыҡҡа изгелек эшләргә юлланаһың. Бер айға иң төпкөл районға командировка алаһың, аппаратураңды машинаға тейәйһең дә сауап йыйып ҡайтаһың. Ҡайтыуыңа рәхмәтле халыҡ гәзиткә яҙып ебәрә, үҙең дә бер-ике интервью бирерһең. Дауаханағыҙҙың, тимәк, түрәңдең дә абруйы арта.

— Хәҙерге заманда төкөрәләр һинең гәзитеңә, — тине Гүзәлиә.

— Төкөрмәҫтәр, маҡтау кемдең дә эсенә һары май кеүек ята ул. Бер ыңғайҙан, кешеләрҙең дә, ихлас яҡшылыҡтың әле лә барлығын күреп, күңелдәре күтәрелеп ҡалыр. Яҡты яҡ бына шулай була. Ә инде эшеңде белеп, яратып, урын-еренә еткереп башҡарғаныңды әйтмәһәң дә белеп торам. Атайыңдың ҡыҙы бит һин.

— Ә кредитты кем түләй?

— Ана, йыйылған пенсиямды ал... Унан кейәү ҙә ҡайтып төшөр Себеренән аҡсалы булып. Бер ҙә ярҙамһыҙ түгелһең әле.

* * *

— Ирек, Интернетҡа инһәң, минең фермамды асып, сусҡа менән ишәгемде генә ашатып сыҡ әле. Икенсе көн инде онотам, — тине Айбулат, иртәнге сәйен ашыҡ-бошоҡ шөптөрләтеп. — Иртәгә минең зачет. Көнө буйы китапханала ултырам, юғалтмағыҙ.

— Аһ-аһ, ул ни тигән ферма тағы, — тип аптыраны Мөғлифә әбей. — Сусҡаны ашат, тинесе...

Көлә-көлә виртуаль ферма тураһында аңлатырға тырышып ҡараныклар, күҙ алдына ла килтерә алманы.

— Ярар, өләсәй, мин һиңә күрһәтермен, — тине Ирек. Бер аҙҙан компьютерын тоҡандырып, әллә ниндәй төймәләргә баҫты ла, ғорурлыҡ менән артына боролдо.

— Кил әле, өләсәй, шәпме минең хужалыҡ?

Компьютер экранында мультфильмдағы кеүек матур ғына өй тора. Баҡса. Ишек алдында йәтеш кенә сусҡа йөрөй тәгәрмәләп. Ишәк тора көйшәнеп.

— Йәнле һүрәт кенә икән дә, — тип күңеле ҡайтты әбейҙең. — Ҡарт бәпестәр, мин уҡып ултыраһығыҙҙыр тигән булам. Ә һеҙ мультик уйнайһығыҙ. Шуның ни ҡыҙығын табаһығыҙ?

— Ҡыҙыҡ ул, өләсәй. Бына мин картуф ултырттым да, уны һатып, чипсы яһай торған завод алдым. Тормош тәжрибәһе туплайым. Ах, һин уны, минең баҡсаға инеп, ҡорт ебәреп сыҡҡан.

— Нимә эшләгән, нимә эшләгән? — Әбей тағы ла нығыраҡ аптырап китте.

— Класташ ҡыҙыҡайҙың да фермаһы бар. Ул инеп минең бер ананасымды урлаған, етмәһә, ҡорт ебәреп сыҡҡан. Хәҙер үҙенә сүп үләне сәсеп сығайыҡ әле.

— Ҡыҙ кешенең донъяһы матурыраҡ икән, ере лә, малы ла күберәк, — тине Мөғлифә әбей һоҡланып. — Ә нишләп һин ат алып ебәрмәйһең?

— Атты ысын аҡсаға ғына һатып алып була. Ерҙе лә... — Ейәне мауығып «Бәхетле фермер» тигән уйындың ҡағиҙәләрен аңлата башланы. Ә ҡырҡ йылдан ашыу

физика-математика уҡытыусыһы булып эшләгән өләсәй борсоуға ҡалды. Көнө буйы тик шул хаҡта ғына уйланы. Йөрөй-йөрөй ҙә һарыуы ҡайнап китә. Киске аш мәлендә саң ҡаҡты — тотош ғаилә табын артына йыйылғас, һүҙ башланы.

— Уйынығыҙ бик мәҙәк, мауыҡтырғыс, балалар, — тине Айбулат менән Ирекҡә алмаш-тилмәш ҡарап. Уҡытыусы бит, алыҫтанырак башланы. — Хыялығыҙ ҙа бик матур — «Бәхетле фермер». Тик уның бик хәүефле яғы бар. — Ҡыҙы балаларын яҡламаҡҡа ниҙер әйтмәксе булғайны, кейәүе аҡыллы, сабыр кеше, ҡарашы менән тыйҙы: һөйләп бөткәнде көт. — Һеҙ ул, нисек тинең, виртуаль бит әле, тормошоғоҙ менән әүрәп, ысын тормоштоң ҡыҙығын, тәмен юғалтыуығыҙ бар.

Элегерәк бер көләмәс була торғайны: имеш, беҙҙең кеше менән ҡытай кешеһе һөйләшә. Бына мин, ти урыҫ, ун дүртенсе майҙа картуф ултыртам да, ун бишенсе августа ҡаҙып алам. Ә мин, ти ҡытай, ун дүртенсе майҙа ултыртам, ун бишендә ҡаҙып алам. Нисек улай, тип хайран ҡала беҙҙең кеше. Шулай, ти ҡытай, кусать то хосется... Шул ҡытай хәҙер бөтөн донъяға нисек эшләргә һәм байырға икәнде күрһәтә.

Әле бында ла һеҙҙән иплэп кенә аҡса һура кемдер. Ярай, быныһы икенсе мәсьәлә. Шул ҡытай кеүек картуфығыҙҙы бер тәүлек эсендә үҫтереп һатып завод һынлы завод алып ебәргәс, һеҙ тормошта ла шулай еңел генә була тип күнегәһегеҙ. Башығыҙға шулай һеңә. Ә ҡыйынлыҡтарға осрау менән күңелегеҙ төшә. Ә бит физикалағы «ышҡылыу» законы кеүек, тормоштоң да шундай ҡанундары бар. Ҡаршылыҡһыҙ булмай. Ә һеҙҙең йәнә шул компьютерығыҙҙа рәхәт кенә йәшәгегеҙ килеп тик тора. Бына бит ул ниндәй ҡурҡыныс, балалар.

— Әсәй, — тине ҡыҙы. — Беҙ ҙә бит элек кино ҡарап, араларында йөрөгән кеүек хыялланып бер була инек.

— Бында икенсерәк, — тине кейәүе. — Ҡәйнәм дөрөҫ әйтә, компьютер уйындарында һин ысынлап та ҡатнаша алаһың, нимә эшләргә икәнен үҙең хәл итәһең. Һин үҙең режиссер кеүегерәк. Ысынлап та әүрәткес...

— Шулай, шулай, — тип улар менән ризалаша һалды ҡыҙы ла. — Етмәһә, күпме ваҡыттарын әрәм итәләр. Шуға теклэп ашауҙарын да онотталар. Хатта һин дә... — тип иренә лә төрттөрөп алырға онотманы.

— Аңлашылды, — тине Айбулат. — Әгәр теләһәгеҙ, мин һеҙгә хәҙер компьютер уйындарының файҙаһы һәм зыяны тураһында яҙылған тотош рефератымды уҡып сығам. Тик өләсәм бит хәбәрҙе икенсе маҡсат менән башланы. Шулай бит, өләс-көләс? — Бала сағында һәр йәйен өләсәһендә үткәргән Айбулат әбейҙең холҡон бик яҡшы белә.

— Дөрөҫ һиҙенәһең, — тип ҡәнәғәт йылмайҙы Мөғлифә әбей. — Әйҙә былай итегеҙ. Имтихандарығыҙҙы дәррәү генә биреп бөтөгөҙ ҙә, икәүләшеп ысын фермерға ярҙамға барығыҙ. Үҙегеҙ белеп тораһығыҙ: Ирназар ағайыңдың быйыл ҡыш буйы тибендәге йылҡыларын бүре баҫып интектерҙе. Әле айыу бер башмағының арҡа һөйәген һындыра һуҡҡан.

Айыу менән бүре, тигәс тә егеттәрҙең күҙҙәре һазлап китте. Әсәләренең һөрөмө ҡойола башлағайны, аталары йәнә ҡәйнәһен яҡланы.

— Нишләп ҡурҡаһың? Үҙебеҙҙе оноттоңмо? Шул бүреле урмандар аша күрше ауылға саңғы менән йөрөп уҡыныҡ. Бирешмәнек бит. Ә хәҙер һәр береһенең ҡулында мылтыҡ. Быйыл икегеҙҙең дә һуңғы каникул. Һиңә, Айбулат, икенсе йыл институтыңды бөтөрөргә, ә һиңә, Ирек, институтҡа инергә кәрәк буласаҡ. Әйҙә, рәхәтләнеп ҡалығыҙ, — тип малайҙарын дәртләндереп ебәрҙе атай кеше.

Ғаилә ҡоро шулай ҡарар ҡылды.

* * *

— Ғилмияза һәләк килештереп күҙелдерек кейеп ҡайтҡан... — Саҡ ҡына эсеүҙән туҡтап, өй-мөйөн таҙалап, йонсоғаны бөтөп алһа, әсәһе ғәләмәт көләс булып тора бер килке. Үҙ-үҙенә ихтирамы артып, кәйефе күтәрелеп китәлер. Ғәрәсәт кеүек өйрөлөп йөрөп донъя эшен бөтөрөп ташлай. Шаж-шож килеп бешеренә, тәмле еҫтәр өйгә түгел, ихатаға һыймай. Атаһы, бахыр, киткән була ирәйеп бер биш-алты көнгә. Күҙе күргәндә тормоштоң башҡа яҡтарына күберәк иғтибар иткәндер, ә хәҙер, көнө күңел күҙенә ҡалғас, тойғо-тоҫмөрҙәргә уға та һиҙгер Зөбәйҙә. Күп нәмәне әйткәндән түгел, ауыҙ эсендә аулап алып ҡалынғанынан самалай.

Әммә әле күҙелдерек тигәнгә ҡолағы ҡарпайҙы.

— Районға машина сыҡҡанмы әллә? — тип һорай атаһы, белмәй ҡалынған, тигән үкенес менән.

— Өфө һынлы Өфөнән күҙ врачы үҙе килгән, ти бит Көнсыуаҡҡа. Аҙнанан ашыу тикшереп ултыра, ти.

— Атай, алып бар! — Өҫтәл башында ғәҙәтенсә шым ғына ултырған ҡыҙының тауышында ярһыулы елкенеү ишетеп, атай кеше тетрәнеп китте.

«Нишләнең һин?» — тигәндәй ҡатынына күҙ ташланы.

— Атайың бер башмаҡтың аҡсаһын түгеп Өфөгә, профессорҙың үҙенә күрһәтеп алып ҡайтты бит, балам, — тип иренә ярҙамға ташланды ҡатын. — Ғалим башы менән: «Медицина әлегә ярҙамһыҙ. Был сирҙе дауалап булмай», — тигән дә баһаң.

— Әлегә... — тип һүҙ ҡыҫтырҙы төпсөк малай Сибәғәт.

— Нимә «әлегә»? — тине уҡыусыларының һәр һүҙенә иғтибар бирергә күнеккән аталары.

— Әлегә ярҙамһыҙ, тигән. Ә һеҙ барғанға инде өс йыл үтеп китте.

— Донъя хәҙер тиҙ үҙгәрә. Көндән-көн яңы технологиялар барлыҡҡа килеп тора инде былай, — тип ҡуйҙы атай кеше уйсан ғына.

Иренең белемсел булып бишенсе класс уҡыусыһы ыңғайына былай ҙа күңеле зәғиф балаға буш өмөт биреп ултырыуына йәне көйҙө лә китте әсәһененең.

— Ошо заманда ауылдан ауылға бушлай дауалап йөрөгән врачтың йүне барҙыр инде, — тип урынынан ук тороп китте.

Зөбәйҙә уларҙы ишетмәй ине. Атаһына өндәшкән минутынан алып, туҡтауһыҙ яуған ямғыр арҡаһында артыҡ ташып юлды өҙгән тау йылғалары хаҡында уйланы. Ана бит, әсәһе бер ыңғайҙан Сибәғәтте талауға күсте:

— Ултыраһың ҡыҫылып. Яҡшы булһаң, уҡыу ҡалдырып йөрөмәҫ инең. Исмаһам, һеҙ ошо төпкөлдә интекмәһен тип күпме аҡса түгелә.

— Һағындыралаһаң, — тип танау мыршылдатты малай.

— Ағайҙарың түҙәләһәң, баштарына аҡыл кергәс...

— Танауҙарына еҫ кергәс, тиген... Ҡыҙҙар артынан саба бит уларың.

Әсәһенең орошҡанына бошонған булып ултырған малай хихылдай-хихылдай сығып һыҙҙы. Һағыныуына сыҙар ине ул, компьютерға әүрәп алғайны, этенең көсөкләр ваҡыты яҡынлашҡайны бит. Шуға ла туғыҙынсы

майҙа өс көн ялды файҙаланып, сала-сарпы ылауға эләгеп ҡайтып төштө. Ярай ҡайтҡан, атаһы геологтарҙан айыу үтенә алмашып алып ҡалған овчарканың, ысынлап та, өс көсөгө бар. Ә затлы малға хужа йәһәт табыла — компьютер һынлы компьютерын йәлләмәгән йән дуҫы Илгизәргә инселәгәненә билге һалып, атай менән әсәйгә ныҡытып китергә кәрәк.

Иркә малайҙың нимә хәстәрләп йөрөгәнен ата менән әсә лә самалай. Тик, шул тиклем яуынлап китер ҙә юл бөтөнләй быуылып ҡалыр, тип кем уйлаған?

— Имгән сабыйға өҫтәп ашатма, тип күпме әйтәһең, — тип бурылдай әсәй. — Ҡоҫтораһың бит...

— Әсәң дөрөҫ әйтә, әрәм итеп ҡуйма көсөгөңдө, — тип йөпләй атай. Бындай көндәрҙә улар һәләк бер һүҙле.

Шым ғына мөйөшөнә барып һыйынып бәйләменә йәбешкән Зөбәйҙәнең уйы ауға эләккән ҡошсоҡ балаһы кеүек бәргесләнә. Бына апаһының ҡул эше эшләгәндә ыңғырап ҡына йырлап ултырыуынан йәм тапҡан Сибәғәт шым ғына килеп һыйынды. Бер ауылда булып та шундай мөһим яңылыҡты ишетмәй ҡайтҡанына үҙен сикһеҙ ғәйепле тойоуы.

— Китҡәндер инде ул, мырҙам, — тип яратып арҡаһынан һыйпаны апаһы унын кисерештәрен төшөнөп. «Кит инде, ултырам гонаһһыҙ сабыйҙы көйөккә төшөрөп».

— Беҙҙең юлды быуған Зәрбизә йылғаһы Көнсыуаҡта ташмаған тиһеңме? — ти малай.

Ә ямғыр һаман да ҡоторона. Зөбәйҙәгә ул тыпылдаған тамсылар һуңғы өмөттәрен йыуып алып киткән кеүек.

«Уңмаған юлды ҡыума. Ана, хатта тәбиғәт тә ҡаршы. Яҙмышым шулдыр», — тип үҙен өгөтләй. Күңгеһе килмәй.

Ҡустыһы апаһын аңлай. Йөрөй бирҙе лә йәнә килеп шыбырланы:

— Тау аша кәзә һуҡмағы бар ҙа баһа. Әйҙә шунан китәйек менгәшеп. Үҙем алып барам, ҡурҡмаһаң.

Йөрәге елкенеп китте лә...

— Бигерәк хәүефле бит ул юл, мырҙам. Әллә күпме араны упҡын ситләп барырға кәрәк.

Бөткән баш — бөткән, үҙ йәне һис тә йәл түгел. Тик ҡустыһын һәләк итеп ҡуйһа...

— Апай, беҙҙең малайҙар менән ул юлдан үҙебеҙҙе һынамаҡ өсөн әллә күпме йөрөгән бар, — ти ҡустыһы. — Ә бында ни, һинең хаҡҡа...

Шулай тине лә сығып юҡ булды. Байтаҡ йөрөп ҡайтты ла хәбәрен һалды.

— Саптарҙы эҙләп алып ҡайтып яҡынға тышаным. Иртән иртүк китәбеҙ. Әсәмдә беҙҙең ҡайғы булырлыҡ түгел — Ғилмиязаһының балы әсеп сыҡҡан. Атама, беҙҙе юғалтып йүгереклэй башлаһа, әйтер, Фаязға хәлде аңлаттым.

Әллә ҡайһы арала ҙурайып өлгөргән оя төбө ҡустыһының бөтәһен дә хәстәрләп өлгөрөүенә эй күңеле булды Зөбәйҙәнең. Тик күрше малайҙың лыбырлаҡлығына ишаралап:

— Фаязың бутканың майын алдан түгеп ҡуймаһа ярар ине, — тип хәүеф белдергәйне, Сибәғәте өлкәндәрсә:

— Берәй заман овчаркалы булғыһы килһә, түкмәҫ, — тип кенә ҡуйҙы.

* * *

Таң һарыһынан ҡуҙғалдылар. Мәңге китмәм тип килгәндер ямғыр — яуа. Шыптыр бөркәнделәр былай, өшөтмәй. Тик барыбер көндөң йонсоуы теңкәгә тейә. Икеһе лә өс йәш тулыр-тулмаҫтан эйәргә ултырған кешеләр — уларҙың төпкөлөндә һыбайлау берҙән-бер сара юл йөрөүгә, икеһе лә, әйтерһең, ат менән ҡуша тыуған. Саптар бейәләре һәләк сыҙам да, аҡыллы ла. Тик еүеш таштар тая. Ауыр барырға бахырсыҡ малҡайға. Етмәһә, был юлда осраған берҙән-бер шишмә лә ажғырған. Ә бит ҡайһы бер йылдарҙа ул бөтөнләй ҡороп ҡала. Шуны сыға алмай артыҡ оҙаҡ ҡыялдылар. Унан упҡын ситендәге ҡырлау һуҡмаҡҡа әллә нисәмә урында ләм шыуып төшкән. Уны услап тип әйтерлек таҙартып яңынан юл һалды мырҙаһы. Юл тигәнең ташҡа үлсәйем, Сибәғәткә күберәк атты етәкләп алдан барырға тура килде. Бик ҡурҡыныс урындарҙа тәүҙә апаһын етәкләп киң урынға сығара, унан атты әйҙәй. Шуға күрә, яҙғы көн ни тиклем генә оҙон булмаһын, яҡтыла барып өлгөрмәнеләр Көнсыуаҡҡа. Малай бик ҡәһәтләнгәйне, апаһы тыйҙы. Ҡара төндә ҡара урман эсендә нимә генә осрамаҫ! Бер мәл көртмәлегә килеп бик уңғас, икенсе көндө лә йыймаҡ булып атаһы менән бер мәмерйәлә ҡунғайнылар. Шуны эҙләп таптылар.

— Донъя ҡараңғы, тип ҡарғанғансы, исмаһам, бер сыра тоҡандыр, тип әйткән, ти, бер кеше. — Мыш-мыш килеп мәмерйә төбөндә усаҡ яғырға маташҡан Сибәғәт нисек тә апаһының күңелен күрергә тырышты.

— Ҡалай аҡылланғанһың һин, мырҙам, — Зөбәйҙә йәнә һоҡланмай сыҙаманы.

— Мин түгел, беҙҙең класс етәксеһе шулай тип ҡабатларға ярата, — тине малай. Кеше данын үҙенә алғыһы килмәү ҙә бик матур сифат. — Яҡтыра башлау менән китәбеҙ.

Бер-берееһенә һыйынып ҡына яттылар. Ылыҫты усаҡ урынына түшәгәс, бер ҙә өшөттөрмәй. Арманһыҙ булып арыған мырҙаһы яҫтап ятҡан эйәргә башын терәү менән онотолдо. Зөбәйҙә йоҡлай алманы. Уйламағаны ҡалманы таң атҡансы. Тик һоранып, зарланып ғаләмде борсорға баҙнат итмәне. Дебеттән шәл бәйләгән яҡтарҙан килен булып төшкән Гөльямал еңгәһе өйрәткән биҙәктәрҙе ҡабатлап ятты. Күҙлегә рәхәт ул эшкә өйрәнеүе, ә бына хәҙер башты күберәк эшкә егергә тура килә. Хәйер, Гөлнәфисә әбейе йыуата ул: «Беҙҙең төбәктең иң шәп тегеүсеһе тома һуҡыр була торғайны, — ти. — Элек трахома тигән ауырыу булып, шул арҡала күптәр күҙҙән яҙған. Тегенсе ҡыҙ бар тирә-яҡҡа сын яһау бүректәр теге кейҙерә торғайны. Усы менән башыңды һәрмәп кенә үлсәүен ала ла тап-таман ғына итеп оҫталай. Ата-инәһененең ишле ғаиләһе уның арҡаһында нык етеш йәшәне. Аслыҡтың нимә икәнен белмәнеләр, — тип ебәрә. — Һин дә тырыш. Файҙаһыҙ көйөккә көйөп көнөңдө үткәрмә, һөнәр өйрән».

Ҙур таяныс уның был һүҙҙәре Зөбәйҙәгә. Ҡайғылы уйҙарға үҙен баҫып алып китергә ирек бирмәҫ өсөн йә йырларға, йә бәйләм эшенең нескәлектәрен ҡабатларға ғәҙәтләнде. «Ғәҙәт — ул холоҡ, ә холоҡ — яҙмыш. Холҡоң һәйбәт булһа, яҙмышың да яҡшы була, тимәк». Быныһы ла Гөлнәфисә инәйенең һүҙе. Бәхетеңдең бер ни тиклем үҙеңдән дә торғанын һеңдерергә тырышып ятҡан көнө. «Яҡшы кешеләр бар ул донъяла», — шул һуңғы уйы менән йоҡоға талған. Һандуғас һайрағанға уянып китте. Төнмө, таңмы? Яңы ғына ҡайтҡан мәлдәрендә һандуғастар төндә лә һайрауҙан туҡтамайҙар.

Ҡустыһын уятырға уйланы ла йәлләне. Саҡ ҡына ял итә бирһен. Хәтәр юлда нык арылһа ла ҡурҡыныс.

Аҙым һайын хәүеф һағалай бит, тояҡ аҫтындағы ташҡа ла, сосайып торған ботаҡҡа ла иғтибар кәрәк.

Сос йоҡлай икән Сибәғәт. Апаһы ҡыбырлау менән күҙен асты. Иртә ине. Шулай ҙа ныҡ ашығып барҙылар. Барыбер өлгөрмәнеләр...

Артабан да көтөп ята алмай ине Гүзәлиә, ямғыр баҫылып, көн асылғанды. Хәҙерге космос заманында илле саҡрымлыҡ район үҙәгенә бара алмай юл бикләнеп тотҡарланғанынды нисек аңлатаһың?! Күрмәгәндең һис башына һыяһы түгел быңдай хәл. Шуға күрә, иң ҡурҡыныс урында йылғаны кисергә район үҙәгенән вездеход һөйләшеп, иртән иртүк юлға ҡуҙғалдылар.

Фельдшер апайҙың ишек алдынан ҡуҙғалған ят машинаны алыҫтан уҡ күрҙе Сибәғәт. «Өлгөрмәнек!» — тине. Әйтмәҫ ине, ауыҙынан яңылыш ысҡынды. Бер ҡараһаң, ара алыҫ та ҡалмаған. Тик алдағы йырын һис үтерлек түгел. Ә урауҙан байтаҡ. Ә машина выжлап инде ауыл осон сығып бара, хәҙер улар тәңгәленән елдереп үтәсәк. Сибәғәт үҙе лә һиҙмәҫтән:

— Апай, йәбеш! — тип ҡысҡырҙы. Тәрән йырын алдына килеп үрәпсегән атына ҡаты һыҙырҙы ла ҡурҡышынан сытырлатып күҙен йомдо. «Йә үләбеҙ, йә ҡалабыҙ». Әллә хужаларының тәрән фажиғәһен тойоп килгән аҡыллы малҡай тәненән һурылып сығырҙай бер ынтылды ла һикерҙе бит. Алғы тояҡтары менән генә тиерлек барып төштө арғы яҡҡа, арт һанын ниндәй ҡеүәт менән тартып алғандыр. Мәтәлләһәләр, өсәһе бер булып армытормо киләсәктәр ине. Имен ҡалғандарына ҡыуаныр ваҡыт түгел. Машина тиҙлеген арттыра бара. Малай һөрәнләйһөрәнләй ҡыялатып сапты. Эстәгеләр әллә абайламаны, әллә күрмәмешкә һалышты. Сараһыҙлыҡтан аҡылын юйғайны, ахыры, Сибәғәт: «Апай, ысҡындыр!» — тип ҡысҡырҙы ла эйәрҙән ҡапыл һикерҙе, тәгәрмәләп тәгәрмәс аҫтына тиерлек барып төштө.

Шофер егет ағарынып ҡатҡан да ҡалған. Гүзәлиә айбарлап тышҡа атылды, малайҙы йолҡоп тигәндәй ерҙән күтәрҙе:

— Нишләгәненде беләһеңме һин?

Ә тегеһендә ҡурҡыуҙың әҫәре лә юҡ, тик ашығыуҙан һаман тынын йыш ала:

— Апай, апайымды ҡара! — Гүзәлиә аңламаны. Был буталсыҡ һүҙҙәрҙе, тыныс мәлдә әйтелһә лә, төшөнөрлөк түгел.

— Нимә?

— Апайымдың күҙе күрмәй, апай. Ныҡ ашығып килдек, ҡара инде.

Гүзәлиәнең асыуы ташты. Нисә кешенең башына етә яҙҙы шаҡшы малай. Ул арала шоферға ла һушы ҡайтты. Бер-ике елгәрергә яҫҡанып килә. Әсәһенең ҡаны Гүзәлиәлә лә: башҡаларҙың ҡыҙыулығы уны һәр саҡ һыуындыра. Шоферҙан аралап, малайҙы артына ышыҡланы.

— Нишләп иртәрәк килмәнегеҙ һуң? — тип һораны тыныслана төшөп. Шул тиклем алыҫ юлға сыҡҡанда кире боролорға һис теләге юҡ. — Беҙҙе аша ауылда вездеход ҡаршы алырға тейеш. Ҡабаланабыҙ. Өфөгә алып килерһегеҙ, — тине ул кеҫәһенән визиткаһын эҙләп.

Шофер малайҙы эттән алып эткә һалып һүгә. Ауыл яғынан кешеләр йүгерешеп килә. Ҡым-ҡырыз...

Шул саҡ бөтәһе лә тынып торған саҡ ҡына арала:

— Уңмаған юлды ҡыумайыҡ, мырҙам. Ҡуй, ныҡышма, — тигән тауыш ишетелде. Ялыныу ҙа, ярһыу ҙа юҡ, шул тиклем үҙәккә үткес сабыр. Гүзәлиә аптырап һирпелеп баҡты — эйәрҙәге ҡыҙҙың һылыулығына иҫе китте. («Гүзәлиә тип исем ҡушҡан булғанһың, шулай гүзәл итеп тапмағанһың», — тиер ул әсәһенә Өфөгә ҡайтҡас.) Тонйорап торған күҙҙәрҙең һуҡырлығына ышанғы килмәй. Тик тәжрибәһе генә, ысынлап та, уларҙа нур юҡлығын һиҙҙертте.

Шоферҙы һуҡрандырып булһа ла кире боролорға тура килде. Йәтешләп ҡумтаға һалынған аппаратура ҡабаттан сығарылды. Ашыҡмай тикшерҙе. Оҙаҡ итеп уйланып ултырҙы. Тағы ҡараны. Кәнсәләргә барып, әллә кемгә шылтыратып кәңәшләште. Тағы ултырып уйланы. Шоферы инде көтөүҙән туҡтап, ултырғысына һуҙылып, серемгә китте. Медпункт фельдшеры самауыр ҡуя башланы.

Гүзәлиә шунан ғына бер ҡарарға килеп, ләм-мим өндәшмәй хөкөмөн көткән ҡыҙға, инде күҙенә түгел, йөҙөнә баҡты:

— Кил Өфөгә, — тине. — Булдырып ҡарайыҡ. — Шунан: — Ҡулдан килгәнде... — тип өҫтәне. — Килмәгәнде лә...

* * *

«Әҙерләнеп тор, — тигәйне киткән саҡта доктор. — Операцияға саҡырып хәбәр ебәрермен».

Ҡайтты ла көтә башланы Зөбәйҙә. Сабырлығын юйҙы, элек, моғайын, хәленә күнгәнгә сыҙаған. Үҙенә урын таба алманы, ары һуғылды, бире һуғылды. Бөтөнләй түҡәтһеҙ ҡалды. Үлем сигенә етте. Эсеп алдыниһә, әсәһе атаһы менән Сибәғәттән башлап алып китә лә докторҙы ла ҡушып бөтөн донъяға ҡарғыш яуҙыра.

— Буштың атаһы үлгән заманда кемдең кемдә ҡайғыһы булһын? Беҙ, ярлылар, кемгә кәрәк? — тип яраһына тоҙ һибә айыҡ сағында ла.

Ә Зөбәйҙә ашҡыныуын баҫа алмай, йәне-тәне менән үрһәләнә, мөмкин булһа, йәйәүләп сығып китергә әҙер.

Йәнә килеп ҡыҫылды Сибәғәт.

— Китербеҙ, апай, — тине. — Саптарға менгәшер ҙә китербеҙ. Элек кеше Петербурҙарға тиклем шулай йөрөгән, тип һөйләне тарих уҡытыусыһы. Хәҙер бит беҙҙең төбәп барырға кешебеҙ бар.

* * *

Хәнифә ханым хаҡ булған. Райондан йөрөп ҡайтҡан Гүзәлиәнең баҙары күтәрелде. Хатта ғүмере буйы матбуғатта ҡәләм тирбәткән Хәнифә үҙе лә был тиклемен көтмәгәйне. Гәзиттә мәҡәлә баҫылып та өлгөрмәне, бығаса талағы ташып йөрөгән түрәнең кәңәшмәнән ауыҙы йырылып ҡайтты. Донъя тар: хөкүмәттә эшләгән кемеһененңдер ҡайныһы рәхмәттәр уҡый икән. Гүзәлиәнең дауаһы килешкән. Хатта башҡа врачтар, шунһыҙ булмай, тип тәҡдим иткән операция ла кәрәкмәгән. Шунан таралып киткән яҡшы хәбәрҙе: «Бына, өлгө алығыҙ, нисек эшләргә кәрәк», — тип үҙе кеүек түрә-ҡара алдында хәбәр иткәндәр. Баш врачты аяҡ үрә баҫтырып маҡтағандар. Һаулыҡ һаҡлау министры аҙаҡ килеп ҡулын ҡыҫып киткән. Аппаратура менән ҡыҙыҡһынғандар.

Инде түрә Гүзәлиәгә үҙе үк ҙурыраҡ бүлмә биреп, клиенттарҙы күбәйтергә ярҙам итәсәген белдереп сығарған. Шулай итеп, Гүзәлиә, әсәһе әйтмешләй, яҡты яғы менән еңеп ҡуйҙы.

Зөбәйҙә тураһында онотманы ул. Кәрәкле кешеләр менән һөйләшеп, саҡ ҡына булһа ла өмөт барлығын асыҡланы. Бик ҡатмарлы операция кәрәк һәм уның да ярҙам итеү-итмәүе асыҡ түгел. Был операция әле махсус рәүештә әҙерлек алып ҡайтҡан бер генә кешенең дарманынан килә. Уның менән һөйләште лә сиратҡа яҙҙырҙы. Шунан шылтыратты район дауаханаһындағы күҙ врачына. «Фәләнсә көнгә килергә әҙерләнһен».

— Элемтә юҡ. Булыу менән хәбәр итербеҙ, — тине тегеһе.

— Әйттегеҙме? — тип тағы һорашты Гүзәлиә бер нисә көндән.

— Кеше аша әйттерҙек, инде барып еткәндер.

Тағы шылтыратты. Асығын ғына әйтә алманылар. Беләме ул бала, нисек килергә йыйына?

Аптырағас, министр урынбаҫары булып эшләгән курсташын район дауаханаһының баш врачы менән һөйләштерҙе.

Тегеһе ауылдың йәһәннәмдә икәнен һылтаулап, утыҙ өс йылға кисеп барырға кәрәк, тип баһаһын арттырмаҡсы ине, урынбаҫар һүҙҙе ҡыҫҡа тотто:

— Нишләп беҙҙең Өфө врачтары барып етә ала һеҙҙең ул төпкөлгә, ә һеҙ шунда йәшәп, бер ауырыуҙы алып килә алмайһығыҙ? Үҙең машина менән Өфөгә аҙна һайын йөрөйһөң, бер балаға эргәңдә урын таба алмайһыңмы ни? — тине лә трубканы ташлап уҡ ҡуйҙы.

* * *

— Атаң туғаны булһа ла шул тиклем тырыштырмаҫ. Үҙәккә үтте бит был күҙ врачы Ғизелхаҡтың ҡыҙын таптырып, — тип һуҡранып ҡайтып инде район дауаханаһының баш врачы. — Бөгөн министр урынбаҫарынан йөҙҙө йырттырҙы. Шоферҙы ебәрмәй булмай инде ул һуҡыр ҡыҙҙы алып килергә.

Шулай итеп илле-алла менән килеп юлыҡты Зөбәйҙә баш ҡалаға. Йәш организм сәләмәт. Операцияға оҙаҡ әҙерлектең кәрәге булманы. Тәғәйенләнгән ваҡытта яһанылар. Заманса ысул, заманса ҡорамалдар менән. Был эш яңы, шуға күрә хирург үҙе лә һәр пациенты өсөн борсола. Гүзәлиә иһә, үҙе ышандырып алып килгәнгә яуаплылыҡ тоямы, Зөбәйҙәне балаһылай күреп тулҡынлана. Хатта күҙҙәрҙәге бәйҙе иртәгә сисергә тигән төндә

Хәнифә ханым да йоҡламаны. Көндөҙ мәсеткә барып, бағышлап хәйер һалды, доға уҡытты. Барыһы ла Зөбәйҙәнең күҙе күрә башлаясағына шикләнмәне. Шул тиклем кеше яҡшылыҡ теләп, тырышып торғанда башҡаса булыу мөмкинме? Гүзәлиә хатта, ғүмерҙә ҡыланмағанынса, палатаға парикмахер танышын саҡырып, ҡыҙҙың сәсен матурлатты. Иртәгә көҙгөгә ҡараһын да үҙен матур итеп күрһен!

Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө икмәк, тиерһең, аптырағас. Мөғжизә, нисәмә кешенең ғәжиз булып көтөүенә ҡарамаҫтан, килеп сыҡманы.

Нисек, тип тын да алмай көтөп торған табиптарының күңелен күрер өсөн генә булһа ла, эйе, тип әйтерлек нур эҙләне Зөбәйҙә булмышында. Тик әллә һуңғы өмөтө өҙөлгәнгә, донъя тағы ла ҡуйыраҡ һәм дәһшәтлерәк ҡараңғылыҡҡа батҡайны.

Йәш коллегаһының уңышына һөйөнөргә теләп, юл ыңғайы һуғылған ҡарт профессорҙың:

— Ҡайһы бер осраҡтарҙа күреү һәләте яйлап ҡайта. Быныӊ хатта ике-өс ай үтеп китксәс тә булыуы ихтимал, — тигән һүҙҙәре һуңғы тапҡыр «Ҡотҡарығыҙ!» тип ҡысҡырып батып киткән кеше артынан һалам ырғытҡан һымаҡ ҡына яңғыраны.

* * *

Гүзәлиә Зөбәйҙәне өйөнә алып ҡайтты. Хәнифә ханым уның һәр бер туғанына тәғәйенләп күп итеп күстәнәс әҙерләне. Бер-ике генә кейеп һалған кейем-һалымды ла төйнәштерҙе. Аҡтарынған ваҡытта башына уй килде. «Был баланың күңелен нисек күтәрергә?» — тип өҙгөләнеп йөрөүенә яуап булды был. «Мин уға бәхетле күлдәгемде бүләк итәйем». Зөбәйҙәнең буй-һынын самаланы, тап-таман булырға тейеш. Буласаҡ ире, Гүзәлиәнең атаһы, менән бәхетле ҡауышыуҙарының иҫтәлеге, балалар йортонда үҫкән зарлы яҙмышының шау бәхеткә алып киткән боролошондағы маяҡ булып әллә нисәмә йылдар буйы һаҡлана ине был һаман да төҫөн ташламаған зәңгәр ебәк. Хатта уға ҡағылһаң ғына ла ҡотоң кире ҡайтҡан ҡомартҡы булып киткәнгәме, ни тиклем генә сумарт булмаһын, Гүзәлиәгә күлдәк йәл күренде.

— Мин күпме хыялландым кейергә, ярамаҙы. Әлисәгә һыймаҫ микән берәй заман? — тип ыңһырлау тауышы сығарғайны, әсәһе бүлдерҙе.

— Ун йәшендә утыҙ һигеҙенсе размер итек кейгән балаға был ярамай инде, ҡыҙым, ҡуй, йәлләмә, — тине. — Әсәһе лә, атаһы ла эре һөйәкле — кемгә тартһын? Ҡыҙыңдың шул күлдәккә ҡалған күңеле юҡ. Һеҙ башҡа менән бәхетле...

Өмөтө ҡыра һуғылған Зөбәйҙәне уйлап, Гүзәлиәгә ҡарунлығы өсөн нык оят булып китте. Аяҡ юллыҡ ҡына күрә башлаһа, аҡтыҡ ғүмерен септәгә төрөнөп үткәрергә лә риза булыр ине бит ул, бахыр.

— Хәҙер ындай ебәктәр юҡ, — тине Хәнифә ханым Зөбәйҙәгә күлдәкте кейҙереп. — Бына бит, үҙеңә үлсәп теккән төҫлө. Нисәмә йыл яңы хужаһын көтөп ятты. Гүзәлиә апайың, башта үҫеп буйға етәм дә кейәм, тип хыялланды — һыйманы. Имтиханға барыр булһа, их, шул күлдәк һыйһа, биш алып ҡайтыр инем, тип үкенер ине.

— Мине үҙеңә оҡшатып тапмағас ни! — тип һүҙ ташланы Гүзәлиә. — Шул тиклем тал сыбыҡтай буламы кеше?!

— Атайыңды нык ярата инем шул. Балам уға оҡшап тыуһын, тип теләнем, — тине әсәһе. — Ярар, һин был күлдәкте киймәһәң дә, гел генә бишкә уҡының.

— Уға тейеп кенә алһаң да ырыҫы күсә бит, әсәй.

— Бына ошо ҡомартҡыбыҙ һиңә яҙған, Зөбәйҙә. Шуға күрә унның зәңгәрлеген күреп тә ҡыуанырһың әле. Мин шуға бик нык ышанам.

Ни ғәләмәт, профессорҙың һүҙҙәре лә ялғай алмағайны Зөбәйҙәнең күҙендәге бәйҙе сисеү менән үлемесле һыҙландырып өҙөлгән өмөтөн. Ошо күлдәк күңеленә ҡот ҡайтарҙы.

* * *

— Ай-һай, йоҡо мискәләре! Тороғоҙ әле! — Атаһының ҡәнәғәт тауышына уянып китте Зөбәйҙә. «Нишләп күңеле көр?» — тип уйланы. Хәҙер бит уға күпселек мәғлүмәтте ҡолағы бирә: ҡыңғырау сыңлап китеүҙән төшөндө ҡыҙ. Аҙнанан ашыу юғалтып йөрөгән ҡолонло бейәһен табып алып ҡайтҡан, ахырыһы. «Бигерәк асҡаҡлап киткәнһегеҙ ҡыш буйы интернатта, ҡымыҙ яһап

эсә башлар кәрәк», — тип ултыра ине. Аласыҡтан ишек шығырлатып мырҙалары сыҡты, иһәннәшеп.

— Атағыҙ ни һан ер урап ҡайтты. Ҡояш дилбегә оҙонлоғо күтәрелгәнсе ятаһығыҙ. Төндә әҙерәк йөрөргә кәрәк. Ни тигән эш ул бер туҡтауһыҙ аша ауылға уйын тип сабыу? — тип йомшаҡ ҡына орошоуын дауам итте атай. — Бар, һыйырҙарҙы йәһәт кенә һауып ҡыуығыҙ. — Был ғаиләлә донъя ир-егеттәргә ҡарап тора шул — әсәһе йәнә әллә кемдә эсеп йығылып ҡалғанмы, таңдан уҡ сығып олаҡҡанмы?

— Сибәғәт, кил әле бында, — атаһының тауышында серле ауаздар яңғырағанға ҡыҙыҡһынып китте Зөбәйҙә — урмандан берәй тәмле нәмә алып ҡайтһа, «ҡуян күстәнәсе» бирергә шулай саҡыра. Урынынан ҡалҡа бирел эргәләге асыҡ тәҙрә яғына боролдо. Атаһы эйәренең ҡанъяғаһынан тоғон сисеп тора, быиа улына ҡуҙаҡлап йыйылған еләк тәлгәше тотторҙо. Еләге ҡып-ҡыҙыл, эре. — Торғас, апайыңа бирерһең.

— Шул хәҙәрлем булып еләк бешкәнме? — Малайҙың ауыҙы йырылды.

— Теге битләүҙә. Иртәгә үк барып йыйырһығыҙ. Бөгөн эш бар, — тине атаһы. — Тороп тор, мә, быныһын да. — Салт ҡыҙыл һабын сәскәләренән ҙур шәлкем яһаған. «Рәхмәт инде, атаҡайым, шул тиклем мәшәҡәтеңдә лә минең күңел тураһында онотмайһың!» Күңеле тулып шулайтып уйланы ла ҡайырылып ҡараған атаһының йөҙөн күреп, ҡойолоп төштө. Танымаған кеүек торҙо хатта. Асҡаҡ йөҙөндә ҡоро танау ғынаһы һерәйеп ҡалған, йонсоу, өлкәнһыу төҫ кергән... Маңлай күҙе күрмәй башлағас, бөтөн нәмәне күңел күҙе менән күрә ине Зөбәйҙә. Күҙле саҡта нисек хәтерендә ҡалған, шулай. Әле күргәндәрен: ҡыҙыл еләкте лә, сәскәләрҙе лә, ғәҙәтенсә, фаразлайымдыр тип ҡабул иткән. Әммә бит ул атаһын былай тип белмәй!

Әллә? Башына килгән уйынан тетрәнде лә күҙен йомдо. Йомдо ла ҡабат асырға ҡурҡып тик ултырҙы. Әммә йәне түҙмәй — һирпелеп баҡҡайны, артыҡ тәьҫирләнгән өсөнмөлөр күҙ алдары томан һымаҡ ап-аҡ булып торҙо бер аҙ. Шунан фотоһүрәт эшләгәндәгеләй яйлап ҡына асыҡлана-асыҡлана барҙы: ана, атаһы ҡыҙының хәләтен тойған шикелле, уның тәҙрәһенә ҡарап тора, ҡалай ҡартайып, ябығып киткән. «Күрәм?!» Донъяның ҡабат томаланып барыуынан ҡото осҡан Зөбәйҙә, йәнә йөрәге жыу итеп, битен ҡапланы. Шунан башына саҡ барып

етте: күҙ йәше икән дә һуң был, ҡыуаныс йәштәре... Һәрмәнеп барып сумаҙанын асты ла ебәк күлдәкте алып күҙенә япты. Ҡалһаң, һин генә һаҡлап алып ҡалырһың был мөғжизәне!

Бәхете эсенә һыймай урғылһа ла, бер кемгә лә өндәшә алманы Зөбәйҙә. Хазинаһын донъя күҙенән йәшергән ҡарундай... Юҡ, улай түгел, унын китмәҫкә килеүенә ышанып бөтмәгәнгә. Иртәнге тамаҡты эскәндә ул, тәғәм ризыҡ ҡаба алмай, барыһына ла йотлоғоп ҡарап тик ултырҙы. Атаһы мырҙаларын ҡорт ҡарарға алып киткәс, Зөбәйҙә зәңгәр ебәкте кейеп алды. Келәттән тырызын алып сыҡты. Әле ҡартатаһынан иҫән сағында эшләтеп алған бала саҡ тырызын. Көҙгөгә, инеп, үҙенә йәнә бер күҙ һалды: ятыраҡ ине унан ҡарап торған еткән ҡыҙ, сәйерерәк, әллә ниндәй эрерәкме, һынсылыраҡмы шунда. Тома үткәргән өс йыл эсендә ҡайһылай үҙгәргән. Моғайын, эстән сынығып, ихтыярының ҡатыуы йөҙөнә сыҡҡандыр. «Ҡыуаныс йомшартыр», — тине ҡыҙ, зәңгәр итәк менән йөҙөн ҡаплап. Унан шундай рәхәт хуш еҫ сыға.

«Итәк-митәген сәнскәккә эләктереп, бөргәк һырытып, затлы нәмәнең бәҫен бөтөрәһең, — тип һуҡраныр инде әсәһе күрһә. Тик Зөбәйҙәнең иң ғәзиз ере: мәсете лә, клубы ла, театры ла, концерты ла ошо ялан, иң яҡын дуҫы сәскә лә күбәләк — тап ошолай, матур булып барып урағыһы килде бәхетен уртаҡлашырға. Арманһыҙ булып еләк йыйырға түгел бит, ялан йәмен күреп... Күреп! Ҡайтырға.

* * *

— Әллеү! — Бинокль менән һауала кәйелгән бөркөттө күҙәтеп ятҡан Айбулат аяғын ҡырмыҫҡа тешләгәнгә һикереп китте. — Нимә эшһеҙ йөрөйһөң? — тип асыуһыҙ ғына алып ташланы ла тирә-яҡҡа күҙ һалды. Малдар һыулауҙа ята. Рәхәт. Ыбыр-сыбыр (ул ҡустыларын шулай атай) менән көтөүсе Сәйфулла олатай балыҡ ҡармаҡларға төшөп киткән. Ҡамасаулаусы юҡ. Ошондай файҙалы ла, рәхәт тә ял уйлап тапҡан өләсәһенә рәхмәт әйтеп бөтөрә алмай Айбулат. Көнө буйы һыйыр ҡойроғо артынан сабыу ҡайһы ваҡыт ялҡытып китһә лә, тәбиғәттең (һәм ниндәй тәбиғәттең бит әле!) ҡуйынында

йәшәү мауыҡтырғыс. Унан, аҙмы-күпме аҡсаһы ла буласаҡ, фермер ағаһына ла ярҙам, эшкә лә өйрәнәһең.

Егет биноклен йәнә һауаға тоҫҡарға ине, ҡашлаҡтағы сәйер йыбырлауға иғтибар итте. Әйтерһең дә, зәңгәр күктең бер кисәге өҙөлөп ергә төшкән. Эйелеп-эйелеп берәү ниҙер өҙә. «Еләккә иртәрәк бит әле», — тип уйланы ҡала егете. Берәй әбей-һәбей шифалы үләнмаҙар йыямы? Алыҫ булғас, асығы күренмәй. Биноклен борғослап алғас, зифа буй-һынды, бөгөрөнә төшкән толомдарҙы абайланы. Шул тиклем һылыу булып күҙ алдына килде ҡыҙ. Ҡулында тырыз, ахыры. Бына ул ҡырластан барған һуҡмаҡ буйлап китеп барҙы. Бер аҙҙан тотош күҙҙән юғалды.

— Ул ҡашлаҡта еләк иртә бешә, — тине Сәйфулла ҡарт, сәй артында Айбулат шул хаҡта һүҙ башлағас. — Был ауылда кемдең улай еткән ҡыҙы бар һуң? Ауылда ни ҡыҙҙар ҙа юҡ инде. Ғизелхаҡтың ғына...

— Уның ҡыҙы һуҡырҙаһаң, олатай, — тине Сәлим, фермер малайы, Айбулаттарҙың ике туғаны.

— Һуҡыр... Тома һуҡырмы? — тип тетрәнде Ирек. — Нишләп һуҡыр?

— Уны дауалап булмаймы ни? — Айбулатҡа ла ҡыйын булып китте.

— Уны кем генә хәстәрләһен инде? Әсәһе эсә, — тип вайымһыҙ ғына әйтеп ҡуйҙы Сәйфулла ҡарт. — Тау ашаһынан беҙҙең Бәрҙеғол да яҡын инде белгән кешегә. Тик унан яңғыҙ-ярым йөрөмәҫтәр ине.

— Бисура булғандыр ул, Айбулат ағай. Һине әүрәтергә итеп, юрый күҙеңә күренгән генәлер, — тине Сәлим шомло итеп.

— Ниндәй бисура, сәсе ҡара, ти ҙә баһа. Пәрей ҡыҙҙарының сәсе һары, күҙҙәре зәңгәр була, ти. — Сәйфулла ҡарт малайҙы ирештерҙе.

— Күҙе зәңгәр, тимәнем дә инде. Күлдәге зәңгәр ине, — тине Айбулат, инде нишләп был һүҙҙе башлағанына үкенә биреп.

— Ҡыҙҙар ни төҫ итеп кейә инде. — Иректең күҙҙәре янып китте. — Әйҙәгеҙ, беҙ ул ҡыҙҙы табайыҡ. Ҡыҙыҡ бит, операция «Зәңгәр».

— Эҙләгән һеҙ эҙләгеҙ инде, төнө буйы уйын тип сапҡан дәртлеләр, — тине Айбулат. Тик күңеленә ингәйне был ҡыҙ. Ниндәйҙер сәйер тойғо уянды, серле лә, аҙыраҡ шомлораҡ та. Юҡ, һуҡыр түгел ине был ҡыҙ,

бик ышаныслы атлап йөрөй ине. Эйелеп еләк сүпләне, сәскә йыйҙы, башында сәскәнән тажы ла бар һымаҡ...

Ә ыбыр-сыбырға етә ҡалды. Кискелеккә йәнә уйын тип сапҡанда, эш бөтөрөргә йыйынған кеүек ҡыландылар. Йәнәһе, ағаларына кәләш күҙләйҙәр, яҡшылыҡ ҡылалар.

— Ярар, ярар, төн һайын көтөүҙе олатай менән беҙ ҡарауыллайбыҙ. Ә төнгө смена өсөн икеләтә түләнә. Эш хаҡы иҫәпләгәндә бүрегеҙ олор әле, — тип ирештерҙе Айбулат.

— Һинең кеүек тыумаҫ борон ҡартайған... — тип үсекләштеләр ҙә Чапай кеүек елдерҙеләр егет йораттары.

Бер сәғәт тә үтмәгәндер, Сәлим таһырлап ҡайтып та етте.

— Айбулат ағай, тор, таптыҡ бит беҙ теге ҡыҙҙы. — Йоҡлап ҡына китеп бара ине, йәне көйөп китте егеттең.

— Йөрөмәгеҙ әле шаярып.

— Ысын да ул. Зәңгәр күлдәк. Сәсе лә ҡап-ҡара. Бик оҙон түгел түгелен. Ирек уны һағалап тороп ҡалды уйында. Мин һинең арттан саптым.

Бала-саға ыңғайына йөрөгәне өсөн үҙен әрләһә лә, эйәрергә тура килде Айбулатҡа. Берҙән, быныһы өҙмәй ҙә ҡуймай. Икенсенән, күңелдә көҙөк булып тормаһын әйҙә. Мажара лаһа.

Тик клубта магнитофондан ағылған көй аҫтына килештереп ҡыйшанлаған ҡыҙға ҡарап торҙо ла күңеле ҡайтты.

— Ул түгел, — тине. — Былдай ҡыҙҙар беҙҙең Өфөлә лә быуа быуырлыҡ.

* * *

Кистән оҙаҡ ҡына йоҡларға ҡурҡып ятҡайны Зөбәйҙә. Иртән тороуға мөғжизә бөтөп ҡуйһа! Күҙен асты ла көлөп ебәрҙе. Донъя нурлы һаман. Ана, өҫтәлдә атаһы алып ҡайтҡан һабын сәскәләре! Инде ҡыуанысын йәшерәһе түгел. Йәндәрен бирерҙәй булып йөрөгән ғәзиздәре менән уртаҡлашмау яҙыҡ. Һикереп тороп сәсен тараны ла зәңгәр күлдәгенә үрелде. Бөтөн матурлығында һөйөндөргөһө килде.

Ошонда ғына элгәйне ләһә кисә көндөҙ. Күренмәгәс, сумаҙанын аҡтарҙы, әсәһенең һандығына сумды. Зым-

зыя. Йөрәге жыу итеп китте. Тапмаһа, ҡараңғылыҡ яңынан йотор кеүек. Асырғанып, соланда ятҡан әсәһенә ҡысҡырҙы:

— Ҡайҙа күлдәк?

Тауышы ҡот осҡос булғандыр. Айнығып етмәһә лә, әсәһе һикереп торҙо, сәсе-башы туҙып.

— Ниндәй күлдәк? — Уянып етеү менән йөҙө үҙгәрҙе: бурҙың бүрке яна.

— Һин алғанһың, әсәй, ҡайҙа ҡуйҙың? — Бышылдап ҡына әйтте, һөрән кеүек ишетелде: — Уға тейгәнсе, йәнемде алһаңсы... — Шул тиклем ярһыу, нәфрәт ишетелде тауышында.

Ғәзиз балаһынан ғүмерҙә лә быны көтмәй ине әсә, ҡаушап төштө, хатта тана алманы.

— Бер литрға алмаштырҙыҡ, балам. Күрше ауылдың һатыусыһы Сара ҡыҙына тип алды. — Ҙур күҙҙәрен тонйоратып бер гонаһһыҙ кеүек йәлләтеп ҡарап тора, етмәһә, үҙе. — Баш төҙәттерергә минең сират ине...

«Нишләнең һин?» — тип әйтергә теләне Зөбәйҙә, быума тотҡан һымаҡ тыны быуылды. Ныҡ ярһығанғамы, күҙ алды ҡараңғыланғайны, ҡабат һуҡырайып барам икән тип ҡото осто ла, быуыны тотмайынса теҙләнде.

— Бер иҫке күлдәк тә булдымы мал, балам. Башмаҡты һатҡас, мин һиңә өр-яңыны алып бирәм, — әсәһе, янына ултырған да, сеңләй. Йылғалай аҡҡан күҙ йәше Зөбәйҙәнең битен еүешләй. — Бушҡа өмөтләндереп тәҡәтеңде ҡороттолар бит. Нервыларың ҡаҡшап бөткән, балам, — тип һамаҡлай үҙе.

Ҡайһылай ҡартайып киткән әсәһе лә. Күҙ нурҙары ҡайтҡас, Зөбәйҙәнең әле уға ошолай яҡындан ҡарарға форсаты сыҡмағайны. Күҙ төптәрен селтәрләп ваҡ ҡына йыйырсыҡтар ятҡан. Башҡа мәлдә ҡыҙының әллә ҡайһылай аша ҡараған күҙҙәре йотлоғоп текләүгә ҡото осто әсәнең. «Аҡылдан шашып баралыр бала!» — тигән уйҙан: «Ғизелхаҡ! — тип йән әсеүе менән ҡысҡырып ебәрҙе. — Биш ярты ла йәл түгел. Кире барып алырбыҙ, балам. Тыныслан!» — тип өҙгөләнде үҙе.

— Мин күрәм бит, әсәй! — тип бышылданы Зөбәйҙә. — Инде, әсәй, һиңә эсергә кәрәкмәй, ишетәһеңме? Әсәй, мин кисәнән бирле күрәм, — иркәләп, ағарған сикә сәстәрен һыйпаны. — Һине көйҙөрөп нисек ҡартайтҡанымды ла күрәм. Инде ҡайғырырға бер сәбәбең дә юҡ, әсәй.

Ҡай арала тупырлашып килеп инеп уратып баҫҡандар, атаһы менән мырҙаларына ҡалҡып баҡты: күҙ йәштәре субырлашып аға. Үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышана алмайҙар. Ҡатҡандар ҙа ҡыбырларға ла ҡурҡалар тылсым юғалыуҙан.

— Атай, — тип Зөбәйҙә көлөп һикереп тора. — Телеграмма һуҡ Гүзәлиә апайға, әсәһен алһын да тиҙерәк килеп етһен. Хирург ағайҙы ла ҡалдырмаһындар. Иң һимеҙ тәкәләрҙе һуяйыҡ. Иң матур еләклектәргә алып барайыҡ. — Һуҡырайғандан алып шымған Зөбәйҙәнең күңел быуаһы, гүйә, йырылған — бер туҡтамай һөйләгеһе килә. Уға хәҙер донъя шау мөғжизәнән генә яралған кеүек. Мөмкин булмаған бер генә лә нәмә юҡ кеүек. Әгәр ҙә донъя ошондай нурлы, ошондай яҡты, ошондай йәмле икән, һау кешенең тормошо гел ғәмәлгә ашҡан хыялдарынан ғына торорға тейеш!

* * *

Яҙғы ташҡынға ҡарап башынан кисkәндәрҙе хәтеренән үткәреп торған Зөбәйҙәнең арҡаһына дебет шәл килтереп япты уянып сыҡҡан Айбулат.

— Шул тиклем ярға яҡын баҫҡанһың. Ҡурҡтым. — Атаһының һүҙен ҡәүәтләгән кеүек, йөрәк аҫтында сабый ҙа тибешеп ҡуйҙы.

— Һандуғастар йоҡо бирмәй, — тип көлдө Зөбәйҙә. — Сабыйға ҡарында саҡтан уҡ классик музыка тыңлатырға кәрәк, тиһең бит үҙең. Донъялағы иң камил мондо ишетеп үҫһә, тағы ла файҙалыраҡтыр, тинем.

— Ысынлап та, бөгөн бигерәк шашҡандар. Симфония тиерһең, — тип һоҡланмай булдыра алманы Айбулат. — Тик әсәй кешегә йоҡларға ла кәрәк.

«Рәхмәт һиңә, ғаләм! Ихлас итеп теләһәң, хыялдарҙың ысынлап та тормошҡа ашҡанын хәҙер һәйбәт беләм!»

# Повестар



# ЙЫҺАН ЕРГӘ ТҮҢКӘРЕЛГӘН МӘЛДӘ

Фәнтәзи

*Сарсау — тәбиғәттә һыуҙың барлығына иң яҡшы дәлил.*

Ялан аяҡлап ағымға инеү менән Шаһиҙә был сәйер ҡара йылғаның терелеген тойҙо. Уның йылға тигәне аҡмай, ә майланған ҡайыш шикелле шылғаҡ, тығыҙ тәнле меңәрләгән йән эйәһе булып өҫкә ҡарай шыуыша. «Меңәрләгән йылан тиерһең»... Был ҡара ташҡын эсендә балтырҙарына тиклем батып торған ҡыҙ, яланғас тәненә ҡағылып йыбырлап үткән мәхлүктәрҙең ысынлап та йылан икәнен ҡапыл аңланы ла, ҡото осоп, сәстәре үрә ҡалҡҡанын тойҙо. Бөтөн ихтыярын йыйып, уңға-һулға ынтылып ҡараны — йәнле ташҡын тау битен тотош ҡаплап алғайны. Йыландарға баҫа-баҫа, эләгә-тәгәрәй аҫҡа йүгерҙе, осло ташҡа абынып ҡолап китте, ә мәхлүктәр ҡаршылыҡты абайламаны ла, һаман юғарыға ынтылды. Шаһиҙә уларҙың муйынынан, беләктәренән, бурбайҙарынан үрмәләүенән ытырғаныл, берәм-берәм алып ташларға теләй, тик улар туҡтауһыҙ ҡыжмырлап өҫтөнән шыуыша.

Имәнестән тәндәре ҡурышып, ите йырылып уянып китте ҡыҙ. Түшәгенән һикереп тороп утты ҡабыҙҙы.

— Төш кенә был, төш кенә, — тип ҡабатланы. Тағы шул төш. Сәғәткә ҡарамаһа ла белә — таңғы дүрт. Теп-теүәл ошо мәлдә килеп уяна ул төнгө йоҡоларын ғазапҡа әйләндергән был ҡурҡыныс ғәләмәттән.

Манма һыу булып уяна ла иҫ-аҡылына килә алмайынса ята, ә тәнендә, бының ябай бер төш кенә түгеллеген белдереп, түҙгеһеҙ әрнеүе тороп ҡала. Үткән йыл-

ғы сәйер сәфәренән йоғошло сир кеүек эйәртеп алып ҡайтты ул был аҙапты. Һәр төн һайын инмәй ул. Ҡайһы ваҡыт аҙна-ун көн, ҡасан айлап ваҡыт үтеп китә. Әммә онотмаһын, тынысланып китмәһен, тигәндәй, йәнә килә, тағы ҡабатлана.

Шаһиҙә, аш бүлмәһенә сығып, һыуытҡыстан тереһыу алып эсте. Ул әллә нисәмә йыл инде, һыуҙы туңдырып, ҡабат иреткәндән һуң ғына ҡуллана — сәләмәтлеккә шулай файҙалыраҡ. Шунан тәҙрә эргәһенә барып тышҡа күҙ һалды. Иртә яҙҙың һалҡын таңы һыҙыла ла башламаған. Ҡабат ятыуҙан фәтүә юҡ. Хәҙер уны үҙәктәрҙе өҙгөс һағыш биләп аласаҡ. Был төштән һуң баҫып алған һағыш томанын хатта маңлай күҙе менән күрә Шаһиҙә, быҫраҡ төҫтәге йәшкелт-һары һөрөм тамаҡтарҙы әсендереп алҡымынан ала.

Туғайҙан сәс толомона йәбешеп ҡайтҡан дегәнәккә оҡшаған был афәттең үҙенә тиктәҫкә тағылмағанын һиҙемләй ҡыҙ. Ғиллә уның шәхси ғазаптарында ғына түгел. Ихтимал, был ниндәйҙер ҙур бәләгә ишаралыр. Тик уның серенә нисек төшөнөргә? Авария ваҡытында бер туҡтамай балҡып торған ҡыҙыл утлы сигнал лампочкаһы кеүек ул. Сигнал бар, ә сәбәбен аңлау Шаһиҙә ихтыярында түгел. Серҙең асҡысы юҡ Шаһиҙәнең ҡулында. Тимәк, йомаҡты башҡа берәү сисергә тейеш. Кем ул? Ҡайҙа ул? Ҡыҙ шуны белә алмауынан ғәжиз.

Хәлен һөйләп кемгә генә мөрәжәғәт итеп ҡараманы. Бер кем белә алманы. Әллә белергә теләмәнеме?

«Нимә эшләргә тейешмен һуң мин? — тип һораны ҡыҙ тышҡы ҡараңғылыҡҡа текләп инде нисәнсе ҡат. — Исмаһам, ишара ғына бирһәгеҙсе!»

Тик яуап юҡ. Барыһы ла башҡа ваҡыттағыса: урам тын һәм буп-буш. Бөтә донъя таңғы, иң тәмле, иң ләҙҙәтле йоҡоға илергән.

Ҡабат ятыуҙың файҙаһыҙ икәнен белгәнлектән, Шаһиҙә ике биҙрә һалҡын һыу ағыҙып балконға тағы ла нығыраҡ һыуытырға ултыртты ла, әсенешле тойғоларға ҡаршы торорға тырышып, иртәнге зарядка яһарға тотондо.

* * *

Уяткыс сәғәттең һандуғас булып һайрауын — был мондо үткән яҙ, Дим һандуғастары айырыуса моңло һайрай, тигәс, махсус рәүештә барып үҙе яҙҙырып алғайны — матур төшөнөң дауамы итеп ҡабул итте Юламан. Бәләкәй саҡтағы кеүек иренен супылдатып икенсе ҡабырғаһына ғына әйләнеп ятты. Әммә сәғәттән дә алда уянған әсәһе аш бүлмәһендә тәмле еҫтәр сығара башлаған. Бына ул арҡаһынан һөйөп:

— Балам, тор, — тип уятып сыҡты. Ялҡаулыҡты еңеп, һикереп торорға тура килде.

Арлы-бирле йыуына һалып өҫтәл артына барып ултырған Юламан йылмайып ебәрҙе. Иртәнге тамаҡты әсәһе тап ул яратканса әҙерләгән, икмәккә мул ғына май яҡҡан, өҫтөнә ҡалын итеп колбаса, сыр һалған да микротулҡын мейесендә тотҡан. Телендә йоторлоҡ, кетерләп кенә тора. Бутербродты ауыҙ тултырып сәйнәй-сәйнәй:

— Әсәй, — тип өндәште егет.

Киптерелгән бөтнөк, ҡара ҡарағат япрағы һалып, шартына килтереп бешерелгән сәйҙе яһап торған әсәһе йылмайып улына ҡараны. Икәүһе араһында айырыуса бер яҡынлыҡ, йылылыҡ урынлашҡан ошо һил мәлде ярата ул. Шуға күрә таң тишегенән тороп, улына иртәнге сәйҙе тәмле итеп эсереп, оҙон эш көнөнә ыңғай ойотҡо һалып ебәрергә тырыша. Улы ла иркенәйеп, утыҙға етеп барғанын онотҡандай, иркәләнеп китә бындай саҡтарҙа.

— Әсәй, — тип ҡабатланы Юламан ризығын ҡәнәғәт ҡиәфәт менән кетерләтеп.

— Әү, балам!

— Һин минең үлеүемде теләмәйһең бит, шулаймы?

— Тәүбә, тиң. — Һис тә бындай һүҙҙәрҙе көтмәгән әсәһе ҡурҡып китте. Ағарынып ҡаршыһына килеп ултырҙы. — Нимә булды? Йә әле, һөйлә.

Нимә һөйләһен?..

Быға тиклем һиҙә ине Юламан: әлегә ул рухи донъяһы менән матди донъяны яраштырып, бер рәттән алып бара. Әммә килер бер көн, ул хеҙмәткә саҡырылған һалдат кеүек, бөтә эшен ташлап, үҙенә тәғәйенләнгән бурысты атҡара башларға тейеш буласаҡ. Әлегә ул уҡыусы ғына. Шулай ҙа һуңғы осорҙа уҡытыусыла-

рының ҡырҡа әүҙемләшеп киткәнен тоя. Башында һорау тыуып өлгөрөүе була, шунда уҡ яуабы ла табыла: әйтерһең дә, күҙгә күренмәгән остаз уның һәр уйын аулай.

Шулай ҙа ул әлегә юлының башында ғына тора, буғай. Бараһы яғына бороласан ғына, хатта тәүге аҙымын да яһамаған, сөнки күп нәмәләрҙә тик эске һиҙемләүенә таяна.

Бәләкәйҙән үк ул үҙен тормошта ниндәйҙер ҡеүәтле көс әйҙәп барғанын тойҙо. Дөрөҫөрәге, хатта тәүҙә әйҙәмәне лә был ҡөҙрәт, ә бары күҙәтте һәм кәрәк яҡҡа ыңғайлатты ғына. Йәне ни теләгәнен аңламай яфаланғанда, тап шул мәлендә генә кәрәк булған китапҡа килеп юлыға, алдындағы гәзит киҫәгендә, класташының дәфтәрендә үҙенә яуап булған һүҙҙәрҙе күҙе эләктерә, аяҡтары ҡайҙа кәрәк, шунда алып бара торғайны. Ҡай саҡ ошо халәтенән ялҡып, күңеленә ҡолаҡ һалмай башлай, алабарманлана, яҙмышын үҙ ҡулына алмаҡ була. Башта киләсәге ап-асыҡ, ҡояшлы һәм тап-таҡыр һымаҡ күренә. Әммә көтмәгәндә иҫкәртеү ала: берләм һуҡмаҡтан теҙелешеп һыуға төшөп барғанда ситкә тайпылған ҡаҙ бәпкәһенә сыбыҡ осо менән ҡағылған өләсәһе кеүек, күҙгә күренмәгән кемдер уны яңынан юлына ҡыуып индерә.

Йыш ҡына Юламан нимә менәндер мауығa ла тиҙ арала уңышҡа өлгәшеп ҡуя. Мәҫәлән, көтмәгәндә шахмат менән ҡыҙыҡһынып китте, ярыштарҙа ҡатнашып еңеп йөрөнө, шунан ҡапыл һыуынды. Үҫмер сағында йыр ансамбле ойошторҙо, үҙҙәренең микрорайонында ғына түгел, ҡалала танылыу яулай башлағайнылар, ташланы. Туғандары уның был ҡылығын хупламай, мауығып һыуыныуының сәбәбен бөтөн нәмәнең еңел бирелеүендә күрә шулай. Ә ул белә: ниндәйҙер бер мәлдә «етте!» тигән бойороҡ башында келт итеп ҡала, йә йөрәге тертләй. Ә инде киҫәмәһә, йә уңышҡа ҡанатланып, аҡсаға албырғап онотолһа, әйтерһең дә, уҫал көтөүсе ҡолағы төбөндә ҡайыш сыбыртҡыһын шартлата. Ҡай саҡ: «Бер нәмәгә лә әүрәмә, үҙеңде бер нәмәгә лә бәйләмә, ярамай һиңә!» — тигәндәй шундай килтереп һыҙыра — буйһонмаҫ ерендән буйһонорһоң.

Тормош уға нимә кәрәк, барыһын да бирә, тик дәрүишкә өлөш сығарғандай, иң кәрәген генә һәм бик-бик мохтаж саҡта. Тажикстандағы граждандар һуғышынан ҡасып бер ҡат күлдәк менән ҡыш йөҙөндә килеп

төшкән туғандарын һыйындырған әсәһенең тормош шарттары бик ауырайғас, мәҫәлән, Юламандың эштәре һәләк яйланып китте. Бер йыл эсендә әсәһен фатирлы итте. Яҫтап ятыр ҡаралды, һауыт-һаба йәтешләү менән, әйтерһең дә, кемдер тағы «етте», тине. Шул тиклем уңышлы барған эштән тота килеп баш тартырға көс таба алмай йөрөй ине, ике тапҡыр үлемдән мөғжизә менән генә ҡотолоп ҡалды. Тәүгеһен осраҡлыҡҡа юрағайны. Икенсе тапҡырында шикләнергә урын ҡалманы, ә өсөнсөһөндә шәфҡәткә өмөт бөтөнләй булмаясаҡ.

Ҡайһы берҙә үтә йыш туҡмала башлай. Шул саҡ остазының шыйыҡ сыбығынан өрккән шәкерт кеүек булып китә. Бөтә нәмәлә билдә, ишара эҙләй. Тирә-яғына ҡарана. Шик-шөбһәгә бата.

Нимәлә уның тәғәйенләнеше? Үтәргә тейешле бурысы ниҙә? Бәлки, уға бурыс йөкмәтеүселәр уның барлығы хаҡында күптән онотҡандыр. Паролде онотҡан һәм килгән һәр кешегә үҙәктән ебәрелгән элемтәсе йәки уны фашларға килгән провокатор тип өмөт аралаш хәүеф менән ҡараған резидент кеүек тоя башлағайны үҙен.

«Башҡалар нисек йәшәй һуң? Артыҡ баш ватмайҙар. Алдашҡандары, урлашҡандары бар. Өҙгөсләнәләр, бербереһенең йәндәрен ҡыялар. Бер ни булмай. Бәлки, минең ҡыйығым аушайғандыр, аҡылдан шашып барамдыр? Бәлки, барыһын да, бер хыялый әбейгә ышанып, уйлап ҡына сығарғанмындыр?» — тип эске һиҙемләүҙәренә тышҡы берҙән-бер раҫлауҙы, бәләкәй сағындағы ваҡиғаны иҫенә төшөрә. Ҡояшта ҡара янып, саңға батып урамда уйнап йөрөгәнендә бер диуана ҡарсыҡ уны тотоп алып: «Эй, малай, һин үҙеңдең Алланың һөйөклөһө булғаныңды беләһеңме? — тип һорағайны. — Бына күрәһеңме, маңлайыңда һыйыр ялаған кеүек урай, шул урайҙа йондоҙ кеүек миңең бар. — Шунан уның сәйер һүҙҙәренә аптырап, көлөмһөрәп торған Юламанға ҡапыл асыуланып: — Нимә ауыҙыңды йыраһың? Әллә Алланың ҡашҡа тәкәһе булыуы рәхәт тип уйлайһыңмы? Ул, ана, һине һайлап алып тамғаһын һалған инде. Кәрәк сағында йолҡоп алып ҡорбанға килтерәсәк», — тип төкөрөк сәсеп ҡысҡырҙы ла, үкһеп илай-илай китеп барҙы.

Әле иһә һөтлө сәйҙе балғалаҡ менән яй ғына болғатып ултыра бирҙе лә Юламан үҙенә текләп киткән әсәһенә:

— Донъяғыҙ бөтәйҙе, әлегә етеп торор, тип әйтелде, — тине.

Дариға әбей: «Кем әйтте? Ниңә?» — тип һорап маташманы, сөнки уның уйы ла әлеге шул хыялый ҡарсыҡтың күрәҙәлегенә барып тоташҡайны. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ниңәлер был балаһын, тыумаҫтан алда уҡ, хафаланыңҡырап көткәйне. Үҫә килә генә тынысланды. Сәләмәт, бөтөн ағзалары теүәл, аҡылы камил — тиҫтерҙәренән һис тә айырылып тормай. Артыҡ йомшаҡ күңелле булыуын ғына иҫәпкә алмағанда... Был йәһәттән инде харап — мөмкин булһа, ергә баҫып йөрөмәҫ ине. Морон төртөп сыҡҡан үлән, йыбырлаған ҡырмыҫҡа, геүләп тәҙрәгә бәрелгән күгәүен булһынмы, барыһын да йәлләй. «Бигерәк хисле, иптәштәре ҡаты ҡағылыр инде», тип борсолоңҡорағайны балалар баҡсаһына биргән саҡта. «Йылан да йылыға эйәләй», тигәндәй, әллә ниндәй һуғыш суҡмарҙарын да үҙенә мөкиббән итеп алғанын күргәс, тынысланды.

— Шулай булғас, мин бөгөндән был бизнесты ташлайым, — тип дауам итте Юламан. Әсәһенең хафалы йөҙөнә ҡарап өҫтәне: — Һин, әсәй, улай ҡурҡып китмә. Артыҡ бер ниндәй хәүеф тә юҡ. Миңә бер аҙ туҡтап, фекер туплап, уй төйнәп алырға ғына кәрәк.

Әгәр асылыуҙы үҙе кәрәк тапмаһа, улынан артыҡ һүҙ алып булмағанын белгән Дариға әбей төпсөшөп торманы.

— Улай булғас, нишләп таң тишегенән тороп ултырҙың һуң? — тип әйтеү менән сикләнде.

— Ҡариҙел буйынан йүгереп киләм, — тине Юламан аяғына кроссовкаларын кейә-кейә. Оҙаҡламай үҙенә сыныҡҡан, сыҙамлы тән кәрәк булырын һиҙенә ине ул.

Бесәйҙәр еҫен аңҡытҡан подъездан һуң айырыуса хуш еҫле тойолған яҙ һауаһын күкрәк тултырып һулап ишек төбөндә туҡталып торҙо егет. Бейек таш йорттарҙағы халыҡтың уянып, иртәнге ығы-зығы ҡуптарыуына, шап-шоп ишек ябыу, бала-сағаларҙы сырылдатыуға ярты сәғәттәй ваҡыт ҡалған. Юламан алда бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ ләззәтле көн көткәненә кинәнеп, быуындарын шытырлатҡансы рәхәтләнеп киреле лә томан араһына сумды. Йүгереп барышлай күҙ ҡырыйы менән шоколад төҫөндәге ун ике ҡатлы йорттоң эргәһендә һомғол буйлы бер ҡыҙ-ҡатындың биҙрә менән баш аша ҡойоноп торғанын абайлап: «Бына тағы бер хыялый», — тип уйланы эске бер ҡәнәғәтлек менән. Тәненә иғтибарлы булған, сәләмәтлеген ҡайғыртҡан көслө ихтыярлы кешеләргә һәр саҡ һоҡланып ҡарай ул.

* * *

Ошо көҙгә оҡшаған йонсоу яҙғы иртәлә Шаһиҙәнең тормошондағы быға саса осраҡлы тойолған ваҡиғалар сылбыры бергә уҡмашты ла яҙмышының сағыу биҙәге туҡыла башланы шикелле. Тик ул үҙе быны әлегә һиҙмәне. Өйөнән алып сыҡҡан йылыны мөмкин тиклем оҙаҡҡараҡ һаҡларға тырышып, әсе елгә арҡаһын ҡуйған килеш туҡталышта көшмөрәп баҫып тора ине:

— Сәләм, — тип өндәшкәнгә теләмәй генә һирпелеп баҡты.

— Бик иртә сисенеп ташлағанһың, — тине хеҙмәттәше Сәйҙә, һиҙрәгән джинсы балаҡтары аҫтынан боҫоп ҡына ҡарап торған туфлиҙарына ымлап. — Ер туң бит әле.

— Итегемдең табаны Һикәҙе буйындағы батҡаҡта айырылып тороп ҡалды, — тип яуапланы Шаһиҙә.

«Һиңә бынау ҡара яҙҙа шул төпкөлгә сығып китергә этем ҡушҡанмы?» — тип уйланы хеҙмәттәше уның тауышында үсегеү төҫмөрҙәре шәйләп. Тыштан белгертмәне.

— Эҙләп барған кешеңде осрата алдыңмы һуң? Ысынлап та шулай көслө экстрасенсмы? — тип ҡыҙыҡһынды. — Яҙырлыҡмы?

— Нәфсеһе аҙған, — тине Шаһиҙә йәне көйөп. — Һауаланған. Шуға күрә асылған һәләте үҫмәй, офоғо тар. Һөйләгәне аҡса ла үҙе ҡылған хикмәттәр. Уның нимәһен яҙаһың?

— Нишләп һорашыңҡырамай ҡутарылып сығып киттең һуң? Яҙмаһаң, йәнә командировка аҡсаңды тотоп алып ҡалалар инде. Былай ҙа «баш»тың һиңә талағы ташып йөрөй. — Хеҙмәттәшенең тауышында йәлләү ишетеп, Шаһиҙә тағы ла ныҒыраҡ үртәлде. — Тураһын әйткәнгә үпкәләмә, — тине Сәйҙә. — Үҙең беләһең, һөйләгәндәреңдең бөтәһенә лә мин дә ышанып етмәйем, тик, буш һүҙ, тип тә әйткем килмәй. Был донъяла нимә юҡ. Электрҙы тимерсыбыҡ аша алып килеп лампочканы яҡтыртҡансы уның барлығына кем ышанған?! Шуның кеүек инде.

«Томаналар, — тип уйланы Шаһиҙә. — Мәнфәғәтегеҙҙе ҡайғыртып йөрөгәнемдә аңларлыҡ та башығыҙ юҡ». Өндәшеүен өндәшмәне, асҡаҡ яңағының ҡыҫылып, ҡарашының зәһәрләнеүенән генә уйҙарын тойомлап булыр ине. Әңгәмәләше иһә үҙ хәбәре менән мауыҡҡайны.

— Һиңә һөйләргә тип кисә генә уйлап ҡуйғайным. — Күҙҙәре һаҙлап һүҙенең әрәсәһенә күсте. — Минең бер әхирәт әбейем бар. Нәҫелдәрендә борондан бағымсылар, күрәҙәселәр, имселәр булғанын һөйләп ала торғайны. Үҙендә һәләт юҡ. Ә быҙа олатаһы әүлиә булған. Һәләт өсөнсө быуында ҡабатлана икән. Ошоғаса быға иғтибар биреп еткермәй инем. Кисә бик һыҙланып барып индем. Йомошомдо йомошлап, ишек тотҡаһына тотонғайным, улы ҡайтты. Әсәһе менән байтаҡ ҡатнашһаҡ та, улын бер ҙә күрергә тура килмәгәйне. Эш кешеһе бит, бушамай. Килеп тә инде, йорт-ер болот араһынан ҡояш килеп сыҡҡан кеүек балҡып китте. Хатта аяҡ араһында буталып йөрөгән бесәйенә тиклем йылмайып ебәрҙе. Икмәктер бына, һис тә арттырмайым. Баш осома ҡулдарын ҡуйып, күҙемә текләп торғайны, һыҙланыуҙарымды һыпырып алдылармы ни! Ике-өс минут эсендә күңелемде үтәнән-үтә айҡап сыҡҡан кеүек булды. Иремдең эскәнен генә түгел, ниңә эскәненә хәтлем әйтеп бирҙе, — тине лә, — теге ир бит йәнә запойға китте, — тип эскесе абышҡаһына зарланырға тотондо.

Шаһиҙә ҡатындың зарҙарын артабан тыңлап тормаԫы, әле ишеткәндәре хаҡында уйланы. Ауыҙ һыуы ҡороп һөйләүенә ҡарағанда, ысынлап та, был егет Сәйҙәне хайран ҡалдырған. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына. Шаһиҙәнең күңеле келт итте. Ул күптән көткән ишара түгелме был? Тик ҡапылдан йөрәкһенеп китмәҫкә тырышты. Һуңғы ярты йыл эсендә өмөтләнеп тә, һиҫкәнеп тә, экстрасенстан экстрасенсҡа йөрөп тә арылды бит инде.

Башҡалар фекере менән иҫәпләшеп бармаһа ла, үҙен һуңғы осорҙа хыялыйға һанай башлауҙары ҡыуаныс түгел. Эштә «шиза» тип йөрөткәндәрен инде күптән белә. Етмәһә, эреле-ваҡлы түрәләрҙең — мөхәррир, яуаплы сәркәтип, урынбаҫарҙар ғына түгел, йүнләп һөйләм төҙөй белмәгән бүлек мөдиренә тиклем уға эшләмәҫкә сәбәп эҙләгән ялҡау тип ҡарауҙары ла ялҡытты.

Көн дә сыҡҡан гәзит бирән ҡорһаҡ әҙәм менән бер шул. Исмаһам, аҙна-ун көнгә бер тапҡыр ҙурыраҡ мәҡәлә яҙып бирмәһәң, быға са нисәмә йыл төпкә егелеп тартыуыңа ҡарамаҫтан, тиҙ генә иҫәптән төшөп ҡалаһың. Бүтәндәрҙең асыуы ҡабара башлай. Сөнки һин яҙып тултырырға тейеш булған тишекте башҡа берәүгә ямарға тура килә. Хәйер, Шаһиҙә ғәйеп тойғоһонан

йонсомай. Илке-һалҡы йөрөгән ялҡауҙар, аҙналап эшкә сыҡмай ятҡан иҫерек баштар, айҙың егерме көнөндә «балам ауырый» тип больница юлын тапаған әсәләр өсөн мейеһен етерлек серетте. Нисәмә йыл тырышты — рәхмәт әйтеүсе булманы. Әле ул выждан ғазаптарынан түгел, юҡ-барға бәйләнеп эштән ҡыҫҡартып ҡуйыу ихтималынан хәүефләнә. Ләззәт артынан сабып, матур кейенеп, тәмле ашап үҙҙәре кеүек үк томаналарҙы үрсетеүҙән башҡаны белмәгән вайымһыҙ бәндәләрҙең мәнфәғәтен ҡайғыртырға мәжбүр булыуына, ә уларҙың был хаҡта уйлап та бирмәүҙәренә үртәлә.

Үткән кесаҙнала командировка һорап инеүен иҫенә төшөрҙө. Мөхәррир бик дорфа ҡаршыланы. Ә бит кем? Бала-саға. Бынан бер нисә генә йыл элек МДУ-ның журналистика факультетынан практикаға ҡайтҡанында русса фекерләп, әпен-төпөн сыймаҡлап алып килгән мәҡәләләрен Шаһиҙәнең яңынан тиерлек яҙып биреп ултырғанын онотҡан.

— Апай, үпкәләмә, тик һин былтырҙан бирле әллә нишләнең. Һуң аңла: бөгөн ул ен-шайтандар менән экстрасенстарҙы яҙып тираж арттырып булмай. Уларға мода үтте. Әллә һин шул сихыр-михырҙарға ысынтылап ышанаһыңмы ул? — тип «әҙәмсә» һөйләшеп маташты ла, түрәләрсә ҡырт киҫте. — Ярар, ебәрәм. Тик, исмаһам, юл хаҡыңды ҡаплар өсөн мәктәптәнме, клубтанмы материал алып ҡайт.

Шаһиҙәнең башын текә тотоп, фашистар атырға алып китеп барған партизанка кеүек ғорур һәм буйһонмаҫ атлап сығып китеүенә, етәксе: «Был бит халыҡты ҡотҡарырға йөрөгәненә ысынлап та ышана», — тип баш сайҡап ултырып ҡалды.

Эйе, бер кем уртаҡлашмай Шаһиҙәнең хәүефен. Аптырағас, хатта хөкүмәт органдарында эшләгән бер танышына барып ҡараны. Тик инеү менән аңланы: майлы ҡоймаҡ кеүек ялпашҡан йөҙөн ҡәнәғәт балҡытып ултырған чиновник йоратында кеше ҡайғыһы юҡ. Тик бер килгәс, кире боролоп сығып китеп булмай бит инде. Әммә уныһы тыңлар-тыңламаҫ ултыра бирҙе лә тиктомалдан:

— Ҡәрендәш, һиңә тиҙерәк кейәүгә сығып бала табырға кәрәк, — тип бүлдерҙе. — Милләт мәнфәғәтен яҡлайым тип, юҡ-бар һөйләп, үҙеңде лә, кешене лә алдап

йөрөгәнсе, конкрет эш эшләргә, башҡорттоң иҫәбен арттырырға тотон, шунда...

Шунда ни булырын әйтеп бөтөрмәне, әммә Шаһиҙә бит яҙыу-һыҙыу кешеһе, тел төбөн тиҙ төшөндө:

— Шунда барлыҡ шөрөптәрең дә урынына ултырыр, тиергә итәһегеҙме?

Ҡасан ғына әле «милләт, суверенитет» тип бергәләшеп майҙандарға сыҡҡан, депутат булып үтһәм, халыҡ мәнфәғәтен яҡларға йәтеш була тип, маҡтатып яҙҙыртып йөрөгән кешенең тупһыҙлығына йәне көйөп урынынан ҡалҡынды ла, ҡапылдан нимә тип әйтергә белмәйенсә:

— Сәсен буяп йөрөгән ирҙең йүне буламы шул, — тип түрәнең үҙе кимәлендә йөҙ йыртып, шарт-шорт баҫып сығып китте.

Ярай, былар матди донъя кешеләре. Ә үҙҙәрен экстрасенс тип йөрөткәндәр һуң?

Иң тәүҙә ул үҙе былтыр һоҡланып гәзиттә яҙып сыҡҡан күрәҙәсе иргә барҙы.

— Миңә ундай хәбәр килгәне юҡ, — тине уныһы, йүнләп тыңлап та тормайынса. Ҡайҙалыр ашыға ине булһа кәрәк, өр-яңы машинаһының асҡысын ҡулында уйнатыпмы-уйната.

— Ниңә, минең аша ғына әйтелһә ярамаймы ни? — Гәзиттәге мәҡәләнән һуң уға клиенттарҙың күпләп ағылғанын, шуға күрә тиҙ арала байып киткәнен белгән Шаһиҙә уның илтифатһыҙлығына үртәлде.

— Башҡа берәй сығанаҡтан да ишара булырға тейеш. Юҡ икән, тимәк, йә һеҙ юҡҡа борсолоп йөрөйһөгөҙ, йәки ул эш минең көсөмдән килерлек түгел.

— Улай икән, — тине Шаһиҙә. Ныҡ үпкәләне. Үпкәләүенең, бәлки, урынһыҙ булыуын да белә, тик үҙен тыя алманы. Күңелендә төйөр ҡалды. Һаулыҡ һорашыр өсөн һуҙған ҡулын алмаған кеүек. Юҡ менән буламдыр, бушҡа шикләнәмдер, тигән өгөт менән хәүефен баҫырға ла маташты. Тик ил-көндә һәләкәт күбәйгән һайын, ғәйеп тойғоһо арта барҙы. Йәнтөйәк ҡотоноң кәмегәнен күҙәнәктәре менән һиҙҙе. Ә гәзиттән уны репортаж яҙырға тип, юрый үртәгән, көсһөҙләгән күҙенә төртөп күрһәткән кеүек, йә газ үткәргес шартлаған, йә автобус түңкәрелгән, йә самолет ҡолаған урынға юлланылар.

Шундай бер ваҡиғанан һуң, ҡыш йөҙөндә, алыҫ бер ҡалалағы бағымсы ҡатынға барып юлыҡты.

— Һәр кемгә үҙе күтәрә алырҙай ғына бирелер, аңларҙай күләмдә генә асылыр, — тине ул ҡатын. — Ысынлап та, был касафат хаҡында миңә хәбәр юҡ. Һин — илсеһең. Күңелеңә һалынған серле мәғлүмәт зиһенеңә лә асылмаған әле. Шуның өсөн уның айышына ла төшөнмәйһең, кемгә ебәрелгәнен дә белмәйһең. Тимәк, йә быға үҙеңдә берәй ҡаршылыҡ бар, йә мәле етмәгән, — тип кире борҙо. — Тәҡдиреңә яҙылған бурыс булһа, йәнә ишара алырһың. Илтифат итһәң, абайларһың да, аңларһың да, — тип өҫтәне. Башта был осрашыуҙан фәтүә тапмағандай булһа ла, буйтым файҙаһы тейҙе. Шаһиҙә байтаҡ тынысланып йөрөп алды, сабыр ғына көттө. Яҙға табан теге төш йәнә йышайғас, түҙмәй тағы сығып киткәйне аңлау эҙләп — буш ҡайтты.

Күңелһеҙ уйҙарына бирелеп, эшкә килеп еткәндәрен дә абайламай ҡалған. Хеҙмәттәше түләргә аҡсаһын әҙерләп, еңенән тартҡас ҡына һиҫкәнеп китте.

— Шул һөйләгән кешең менән мине таныштыра алмайһыңмы? — тине Шаһиҙә, автобустан төшөп бер аҙ бара биргәс. Уның көндән-көн сәйерерәк була барыуына хафаланған хеҙмәттәше:

— Һорармын. Бөгөн кискә инә һалып сығырмын да һиңә иртәгә әйтермен, — тип шунда уҡ ризалашты.

* * *

Икенсе көндө кис эштән һуң уҡ юлландылар. Хужабикәнең тыуған көнө лә икән, эре ҡыҙыл ләләләр һәм бер ҡап «Ҡош һөтө» кәнфите алдылар ҙа эйәртенешеп барып инделәр. Ҡабарып торған күгелйем аҡ сәстәрен оҙонса «карэ»ға ҡырҡтырған илгәҙәк әбей Сәйҙә менән сутырлашып ҡосаҡлашҡан арала, зал ишегендә буйсан, мыҡты кәүҙәле утыҙ йәштәр тирәһендәге егет пәйҙә булды. Ҡараштары осрашып та өлгөрмәне, Шаһиҙә тәненә меңдәрсә ваҡ энәләр килеп ҡаҙалғанын тойҙо, быуындары йомшарҙы, күҙ ҡабаҡтары ҡурғаштай ауырайҙы. Ниһайәт, ихтыярын туплап керпектәрен ҡалҡытҡайны, ҙур ҡуңыр күҙҙәр менән осрашты. Әйтерһең дә, томра көндә сарсап килеп тәрән ҡоҙоҡтоң бураһына килеп ҡапланды ла аҫҡа ҡараны. Тәрәндә ымһындырғыс саф һыу емелдәй. Уның тештәрҙе ҡамаштырырлыҡ һалҡын-

лығын бер уртлауың менән өр-яңынан тыуасағыңды беләһең, тик һонолоп алырға йыраҡ, ҡурҡыныс. Тының менән тартып алырҙай булып ынтылаһың, ҡарашыңды айырып алырға ихтыярың етмәйенсә, шул сөңгөлгә убылаһың...

Сәйҙә шылтыратып хеҙмәттәшен алып килергә рөхсәт һорағас та Юламан бының тиктәҫкә түгеллеген һиҙенгәйне. Шуға күрә Шаһиҙәгә айырым иғтибар менән ҡараны. Ни өсөн тап ул ебәрелгән? Ауыр ҡараш, кипкән әрмәнде тиреһе кеүек сөрөш, шыҡһыҙ күңел. Йылылығы, энергияһы юҡ кимәлендә. Ризаһыҙлыҡ менән бергә шик уянды: «Ысынлап та аралашсымы? Әгәр ысын икән, ни өсөн ул?» — тип баш ватты.

Шаһиҙә егеттең:

— Әйҙәгеҙ, бында үтегеҙ, — тип ике бүлмәле фатирҙың залына ҡарай ымлауына буйһоноп, бауланған шикелле шул яҡҡа атланы.

Күҙҙәренә үҙе хужа түгел ине. Йорт хужаһының ҡараштары уны ҡармаҡ кеүек эләктереп алған. Ҡыҙ уларҙың ихтыярына буйһоноп, күрһәткән урынға, стена буйына һыйынған әфлисун төҫөндәге шаян, сағыу диванға һоро тап булып килеп терәлде. Аяҡтары рәхәт итеп йәшел хәтфә кеүек ялбыр балаҫҡа сумды. Тирә-яғындағы иркенлектән бүлмәлә йыһаздың юҡ дәрәжәлә булыуын сырамытты. Уң ҡулдағы тар кәштәләрҙә — иҙәндән түшәмгә тиклем китап, китап, китап. Үҙенең, ниһайәт, дөрөҫ урынға килеп ингәненә ышанғыһы һәм шуны раҫлағыһы килде.

Хужа аяҡтарын салып уның ҡаршыһына балаҫҡа ултырҙы.

— Борсолмағыҙ, иркенләп урынлашығыҙ, — тип йылмайҙы, — шиге, тәбиғи ихласлығына бирешеп, томан кеүек таралғайны.

Шул саҡ ишек шаҡыныла́р:

— Был серле һөйләшеүегеҙҙе мин дә тыңлаһам булаМЫ? — тип Сәйҙәнең башы һонолдо. Һөҙлөккә төшкән ҡара тараҡандай булды хеҙмәттәшенең был әрһеҙлеге. Һирпеп кенә баҡҡан бер ҡарашында Шаһиҙәнең бөтөн ризаһыҙлығы сағылғайны. Ә егет, әйтерһең дә, быны абайламаны: — Була, нишләп булмаһын, үтегеҙ, — тип әйҙәләне.

— Ҡалай серле бында, — тине тирә-яғына ҡарана-ҡарана дивандың икенсе башына ҡунаҡлаған Сәйҙә. Юла-

ман баласта ултырған килеш үрелеп бәләкәй генә өстәл шәмен алды. Уны яктыһын кыялатып диван яғына төшерлөк итеп бороп, ут токандырзы. Шунан стена буйында һөйәлгән түңәрәк көзгөнө сак кына кыйшайтып, шәм яктыһын сағылдырырлык йәтешләне. Үзен арбалғандай күзәтеп ултырған Шаһизәнең караштарын йәнә ырғак кеүек эләктереп алды.

— Тыңлайым һеззе.

Сит колактарға тәғәйенләнмәгән хәбәрен был даирәнән алыс торған хеҙмәттәше алдында һөйләргә теләмәгән Шаһизә ирендәрен кымтыған килеш өнһөз калды. Әммә ихтыярын шакара һындырып алып барған көскә буйһонмаслык сараһы юк икәнен тойзо. «Низән башларға һуң? — тигәндәй эргәһендәге Сәйзәгә караш ташлағайны, аптырап китте: хеҙмәттәше дивандың аркаһына башын уңайлы ғына итеп терәгән дә рәхәтләнеп йокоға талған.

— Баштан башлағыз, — тине егет. — Бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләгез. Мин бер кайза ла ашыкмайым.

«Ашыкмайым!» Шаһизәгә капыл рәхәт булып китте. Был мәлдә уға тап ошо һүз кәрәк булған икән, сөнки әлегәсә ул мөрәжәғәт иткән кешеләр барыһы ла гел ашыға, йәки ашыккан булып кылана ине. Тимәк, Шаһизәнең хәбәрзәре уларзың колағына тәғәйенләнмәгән булған. Ниңә ул ошо ябай ғына дөрөслөктө аңламай, әрһезләшеп, был эшкә һис кысылыштары булмаған кешеләрзе какшатып йөрөгән һуң?

— Дөрөсөн генә әйткәндә, мин ул кисте Өфөлә булмаска тейеш инем, — тип башланы ул һүзен.

Бесән сабышырмын, еләк йыйырмын тип бер азнаға ял алғайны Шаһизә. Хәзер уйлап караһа, көлкө лә, кызғаныс та, куркыныс та... Ул көндө иртәнсәктән алып, нимә генә эшләһә лә, гел генә аркыры килеп торған.

Эшкә килешләй, юл сумкаһының бауы өзөлдө. Төшкөһөн кустәнәс алырға базарға сыккайны, меҥ һум аксаһын урлатып инде. Юллык аксаны үтескә алырға тура килде. Инде вокзалға төшөргә тип, лифтка ултырғайны, ут һүнде, илла-алла менән сыккансы, ярты сәғәт үтеп китте. Автобуска эләгә алмай, тукталышта байтак тороп ташланы, ни тиклем генә ыңғырлаһа ла, такси ялларға тура килде. Елдереп кенә барып етәм, тиһә, юлда — тығылыш. Ярай йырак түгел ине инде,

төшөп йүгереүҙән башҡа сараһы ҡалманы. Тик ни тиклем генә ашыҡмаһын, поездың ҡойроғон ғына күреп ҡалды. Әсәһенең «Уңмаған юлды ҡыума!» тигән мәҡәлен хәтерләп: «Бәлки, яҙмыш мине берәй ҡазанан ҡурсалайҙыр», — тип үҙен йыуатҡан булды. Уның уйҙарын раҫлаған һымаҡ, кемдер һуңғы вагондан аҡ яулығын болғап бара ине.

Иртәнге электричкаға төшөргә уйлап, вокзалға яҡынырак йәшәгән ағаларына йүнәлде. Бигүк кеше яратып бөтмәгән туғандары, бөгөн уны ниңәлер артыҡ ныҡ ҡыуанып ҡаршы алды.

Ишекте асҡан ағаһы:

— Бына бит ул, бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына, — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Аш бүлмәһе яғынан еңгәһенең:

— Теләгәнем ҡабул булды, Хоҙайым. Һине тыным менән тартып алырҙай булып ултыра инем, — тигән тауышы ишетелде.

— Һеҙ ултыраһығыҙмы ни юлымды быуып? Нимә булды? Шул тиклем ни кәрәгем тейҙе? — тип уның янына үтте Шаһиҙә. Алдына бер түгел, ике тас ҡуйып, аяҡтарын алмаш-тилмәш шуларға тығып ултырған еңгәһен күреп аптырап китте:

— Аһа, нишләнең ул?

— Шул тиклем теләгәйнем. Берәй яҡҡа китеп кенә бара күрмәһен инде, тип шул тиклем ялынғайным. — Еңгәһе уны ишетмәгәндәй, һамаҡлауын дауам итте. — Ҡыҙыҡай, яҙмышым һинең ҡулда. Ҡотҡар!

— Тороп тор әле, аңлатып һөйлә, — тип бүлдерҙе ағаһы ҡатынын. — Бәлки, ҡыуанып риза булыр. Журналист кешегә йәйҙең йәмле көнөндә шундай мауыҡтырғыс сәфәргә сығыу үҙе бер ғүмер ҙә инде.

— Улай көнөгөҙ миңә төшкән икән, иң тәүҙә берәр сынаҡ сәй эсерегеҙ, шунан әрәсәһен асыҡлап, бәйнә-бәйнә һөйләп бирерһегеҙ, — тине Шаһиҙә йәтешләп ултырып.

— Ун йыл ҡыялып, — тип һүҙ башланы еңгәһе, ағаһы Шаһиҙәнең алдына сәй яһап ултыртҡас.

— Ун биш, — тип төҙәтте ағаһы төрттөрөп.

— Ҡуй әле, кәзекләшмәй тороғоҙ, — тип ҡул һелтәне Шаһиҙә. — Ағай, етер һиңә.

— Ун биш йыл ыҙалана торғас, диссертациямды яҙып бөттөм. Хәҙер яҡларға ҡалды. Ә бит дуҫ бар, дошман

бар. Улары аяҡ салыу яғын ғына ҡарап тора. Шуға абруйлы кешеләргә мөмкин тиклем ярарға тырышып йөрөлгән көн. Ә мин, үҙең күреп тораһың, аяғымды ҡаймыҡтырҙым. Ярай һынмаған. Һеңере генә тартылған. Врач, аяҡты бер эҫе, бер һыуыҡ һыуҙа тотоуҙан башҡа әмәл юҡ, тип ҡайтарҙы. Ә миңә таңдан сит илдән килгән ғалимдар менән ун көнлөк оҙайлы сәфәргә сығып китергә кәрәк.

— Институтығыҙҙа һинән башҡа кеше бөткәнме ни?

— Йәй бит. Кем ялда, кем экспедицияла, кем вузда имтихан ала. Етмәһә, ҡунаҡтар минең фәнни етәксемә төбәп килгән. Шулай булғас, бер нисек тә уны ауыр хәлдә ҡалдыра алмайым.

* * *

Сит илдән килгән ғалимдар бишәү булып сыҡты. Шаһиҙәләр ҡунаҡхана янына килеп туҡтағанда, улар әйберҙәрен «Газель» машинаһына тейәп маташа ине инде. Йылмайышып ҡаршы алдылар. Еңгәһенең һылтыҡлауын күреп, борсолоштолар. Өсәүһе, ике ир һәм бер ҡатын, Шаһиҙә менән бик ихласлап килеп танышты. Ҡатын, Тома, тип күреште, ул төркисә һупалай, ә ирҙәрҙең береһе, Батр, тине, икенсеһе танау аҫтынан ғына мығырланы: Джон, тинеме, Донмы. Шаһиҙә сәфәр аҙағынаса уның теүәл генә исемен белә алманы. Икеһе лә ҡәҙимге генә русса һөйләшә. Ситтәрәк йөрөгән йәш кенә һылыу ҡыҙ яҡын килмәне, баш ҡағыу менән сикләнде. Бишенсеһен Шаһиҙә машинаға инеп ултырғас ҡына абайланы. Күҙҙәре ҡара сепрәк менән бәйләнгән асҡаҡ ҡына был ирҙе бөтәһе лә «өф» итеп тора. Шаһиҙә тәүҙә уны һуҡыр микән тип уйлағайны: күрә булып сыҡты. Һирәк-һаяҡ, үҙенә кәрәктә сепрәкте ек кеүек ара ҡалдырып ҡалҡытып ҡуя. Һаңғырау, тиер инең, өндәшкәнде ишетә, телһеҙ, тиер инең — ара-тирә һүҙ ҡата. Ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапмағас, йәнә сикләнде. Тик ауырыуға ла оҡшамаған, сымыры кәүҙәһенән көс-ҡеүәт ипкене бөркөлөп тора.

— Шулай итеп, беҙ Асылыкүлгә киттек. — Хәбәре ошо тәңгәлгә етеү менән Шаһиҙә, абынғандай, туҡтап ҡалды. Хәтерендә ала-сола, сала-сарпы күренештәр,

өҙөк-йыртыҡ һөйләшеүҙәр, ә тота килеп һөйләйем тиһәң, бер нәмә лә юҡ икән дә баһа.

— Юҡ, иң башта беҙ Торатауҙа булдыҡ. Унан Асылыкүлгә барғанды яҡшы хәтерләйем. Арҡайымда өс кис ҡундыҡ. Унда бронза дәүерендә үк ҡаҙылған ҡоҙоҡтоң һыуын эсерҙеләр теге асҡаҡ кешегә. Шүлгәнташта ике төнгә туҡталдыҡ. Әлеге лә баяғы, теге кеше мәмерйә эсендәге йәшел һыулы күлдә сума-сума бик оҙаҡ һыу инде. Әйтерһең, уның өтөп алған һалҡынлығын тойманы ла. Ә беҙ сайына һалып сыҡҡансы ҡалтырап төштөк.

Шунан Ирәмәлгә табан юлға сыҡтыҡ.

— Ҡайһы яҡтан менмәксе булдығыҙ? Төлөктәнме, Учалы яғынанмы?

— Учалы яғынандыр, моғайын, сөнки минең унда Төлөктән күтәрелгәнем бар. Дөрөҫөн әйткәндә, Ирәмәл тигән һүҙе генә булды, буғай.

Артабан Шаһиҙә бөтөнләй бер нәмә лә иҫләмәй булып сыҡты.

Ҡаршыһында Будда кеүек һис ҡымшанмай иғтибар менән тыңлап ултырған егет:

— Һуңғы барған урынығыҙҙан, ана шул күңелегеҙгә шом ойлаған ерҙән, берәй нәмә алып ҡайтманығыҙмы? — тип һораны.

— Юҡ, — тип баш сайҡаны Шаһиҙә.

— Ныҡлап уйлап ҡарағыҙ, шул ваҡытта кейгән кейемегеҙҙең кеҫәләрен аҡтарығыҙ. Бәлки, исмаһам, берәй үлән ҡыяғы, таш киҫәге, һис булмаһа, семтем тупраҡ ҡына булһа ла ҡайтмағанмы?

— Ярар, ҡарармын, — тине Шаһиҙә икеләнеп кенә.

— Ә күп нәмәне онотҡанығыҙға ҡайғырмағыҙ, — тип тынысландырҙы Юламан. Сәйер ҡунаҡтың алъюҫыҡҡа йөрөмәгәненә ышанып өлгөргәйне инде ул. — Күрәһең, һеҙ унда нимәгәлер шаһит булып, бик ныҡ тетрәнгәнһегеҙ. Шуға күрә аңығыҙ уны хәтерегеҙҙән ҡыҫырыҡлап сығарған. Йәки һеҙ оҙатып йөрөгән кешеләр ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе махсус рәүештә онотторғандыр.

— Хәҙер нимә эшләйбеҙ инде?

— Бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмай. Әгәр был серҙе беҙгә сисергә яҙған булһа, берәй әмәле мотлаҡ табылыр.

Икенсе кисте Шаһиҙә Юламандың усына сәүкә күкәйе ҙурлыҡ ҡына йомро аҡ таш һалды. Таштың ҡайнарлығы Юламандың ҡулын өтөп алғандай булды. Унан

ағылған ҡеүәтле энергияны тойҙо егет. Таш түгел, әйтерһең дә, донъя хәсрәтен үҙенә туплап һулҡылдаған йөрәк. Әгәр уның телен аңлай алһаң, ул Шаһиҙәгә ҡарағанда күберәк әйтер ине. Изге урындың ҡотон йыйған, ниндәйҙер бинахаҡҡа шаһит булған тауҙың бәләкәс кенә бер өлөшө булғаны шикһеҙ.

— Был ташты ҡайҙан тапҡанығыҙҙы иҫләмәйһегеҙме?

— Ул төндө мин теге ҡурҡыныс төштө беренсе тапҡыр күрҙем. Үҙемдең палаткала, йоҡо тоғом эсендә уянып китһәм, ҡулыма ошо ташты йомарлағанмын.

— Сер әҙәмдән юҡҡа ғына боҫмай, — тине Юламан, ташты ҡулында әйләндереп-тулғандырып ҡарай-ҡарай. — Тимәк, беҙ әлегә ул сергә лайыҡлы түгелбеҙ.

Егет шулай тип әйтеп тә бөтөрмәне, залдың бер мөйөшөндә ҡара һөрөм ҡуйыра башланы. Туғарланып-туғарланып күтәрелгән һайын тығыҙлана бара үҙе. Бына ул ҡап-ҡара ҡойҡа кеүек әшәке нәмәгә әйләнде лә иҙәнгә йәйелә башланы һәм улар ултырған яҡҡа шыуышты. Унан аңҡыған шом, шөбһә, ғазап менән дәһшәт егет менән ҡыҙҙың икеһен бер юлы биләп алды. Улар бармаҡ та ҡыбырлата алмайынса был тамуҡ киҫәүенә — уны башҡа бер нисек тә атап булмаҫ ине — текләгән килеш ҡатып ҡалды. Үлемесле ҡойҡа әсе ҡамыр кеүек ҡабарып, инде ярты бүлмәне биләне: ғәҙәтенсә иҙәндә аяҡ салып ултырған Юламанға тиклем килеп етте. Егет тын алыуы ауырлашҡанын, аңы томалана башлағанын тойҙо. Бармаҡтары хәлһеҙләнеп яҙылды ла, усына йомарлаған таш иҙәнгә тәгәрләп төштө. Шул саҡ инде теҙенә тиклем йәйелгән әшәке ыҫылдап артҡа сигенде һәм күҙ алдында кесерәйә барып пәйҙә булған мөйөшөнә һеңде.

— Нимә булды был? — тип бышылданы Шаһиҙә ҡурҡышынан ҡалтыранып.

— Белмәйем, — тине Юламан ташты үрелеп алып. — Тик бик хәтәр эшкә юлыҡҡанһың. — Егет «һин»гә күсте. — Быныһы раҫ. Беҙгә бик ҡурҡыныс көстәр ҡаршы тормаҡсы. — Ул ҡулындағы ташты инде иғтибар менән генә түгел, ихтирам менән ҡарай башланы. — Әкиәт яратаһыңмы? Иҫеңдәме: «Йомро-йомро йомғағым, ҡайҙа китеп юғалдың?» Беҙҙе ул серле урынға алып барасаҡ йомғаҡ ошо инде. Юлға әҙерлән — Торатау, Балҡантау, Шүлгән, Ирәмәл...

— Ни өсөн тура Ирәмәлдең үҙенә түгел?

— Белмәйем, — тине Юламан. — Күңелем һиҙә, тип кенә әйтһәм, ҡәнәғәтләндерәме?

— Ҡасан? — тип ҡыҙыҡһынды Шаһиҙә эштә йәнә һүҙ ишетәсәге хаҡында уйлап.

— Тиҙ түгел әле, — тине егет. — Миңә ҡырҡ көн ураҙа тоторға кәрәк. Сөнки был сәфәрҙең мотлаҡ шарты — йән менән тәндең паклығы.

* * *

Үҙенә табан ынтылған ҡара ҡойҡала төштәрендә ғазаплаған хәүеф менән хәсрәтте танығайны ҡыҙ. Һуңғы осорҙа баҫыла биреп торған дәһшәт ҡабат килеп алҡымынан алды. Тик был хаҡта Юламанға әйтеп биреүҙән Шаһиҙәне нимәлер тыйҙы. Сәйәхәткә сығып китергә лә һис тә күңеле тартманы, аяғы тышауланған һымаҡ булды. «Сисенгән һыуҙан таймаҫ», тигәндәй, үҙе ҡуптарған ғауға булғанға күрә генә, ихтыярһыҙҙан булһа ла эйәрергә тура килде.

Тәүге көндө шишмә буйындағы ағаслыҡҡа килеп туҡтанылар.

— Бына ошонда палатка ҡорҙолар, — тине Шаһиҙә тирәяғына ҡаранып. — Ә бында усаҡ яҡтыҡ, ҡаҙан аҫтыҡ.

Улар ҙа палатка ҡорҙолар. Усаҡ яғып, тағанға ҡоромло алюмин сәйнүк аҫтылар. Ялҡын бейегәнгә текләп ултырған Шаһиҙәнең бер мәл зиһене салтланып китте һәм үткән йылғы ваҡиғалар кинолағы кеүек күҙ алдына килә башланы.

— Беҙ бик боронғо данлы халыҡ, — ти Батр, сиғандарҙыҡы кеүек бөрмәс ҡара сәсле, ҡуйы һаҡаллы, төптән йыуан сыҡҡан мыҡты ир. Ул хәбәренән туҡтап, ҡулындағы таяғы менән ҡаҙан аҫтындағы торонбаштарҙы бутарға керешә. Әйтерһең, донъяла ошонан да мөһим эш булмағандай оҙаҡ маташа. Бер аҙҙан ҡаҙандан иҫерткес сәйер еҫ сыға башлай. Хуш еҫ, тип тә әйтеп булмай, һулап туйырға ла мөмкин түгел. — Бынан ике меңдән ашыу йылдар элек, тәүтөйәгебеҙҙән ҡапыл ҡуптарылып төньяҡҡа киткәнбеҙ. Гөрләп торған тәгәрмәс ҡалабыҙ торған да ҡалған. Ҡайнап ултырған ризыҡ

ҡалған ҡаҙандарҙа, мейестәрҙә икмәк бешеп ҡалған. Бар нәмәне ташлап, ҡырҙа уйнап йөрөгән балаларҙы юл ыңғайында күтәреп алып, көллө халыҡ ҡуҙғалған да киткән. Ни сәбәптән, ниңә шул тиклем ашығыс һәм әҙерлекһеҙ? Был — мәңгелек сер. Алға бер үҙәк өҙгөс һағыш әйҙәй ине, тип аңлата бер боронғо йыр ҡапыл сығып китеүебеҙҙең сәбәбен. Төндәрен ниндәй йондоҙҙарға ҡарап барғаныбыҙҙы бәйән иткән әкиәттәребеҙ һаҡланған. Шуларҙы ентекләп өйрәнеп, бөтөн мәғлүмәттәрҙе компьютер аша үткәргәндән һуң, ата-бабаларыбыҙҙың ошо яҡтан күскәнен асыҡланыҡ. Көйҙәребеҙҙә һеҙҙең көйҙәргә оҡшашлыҡ бар. Боронғо телебеҙгә яңғырашлы һүҙҙәр һеҙҙең ер-һыу атамаларында һаҡланған. Ауыҙ-тел ижадығыҙҙы өйрәнгәндән һуң инде, ғөмүмән, бер генә шигебеҙ ҙә ҡалманы. Тәүтөйәгебеҙ ошонда. Ул заманда халҡыбыҙ ишле, тамырҙарыбыҙ ҡеүәтле һәм тарбаҡлы булған. Бүтән бер ерҙә лә, һис ҡасан да тарихыбыҙ бындағылай шөһрәтле һәм яҙмышыбыҙ бәхетле булмаған.

— Өс-дүрт мең йыл эсендә кемдәр килеп, кемдәр китмәгән һуң?! Кемдәр ҡайҙа күсмәгән дә, ҡайҙа төйәкләнмәгән? — Шаһиҙәлә әллә ҡайҙан, быуаттар томанынан килеп сыҡҡан был ерҙәштәргә ҡарата ризаһыҙлыҡ уяна.

— Әммә һағыныу һағышы быуаттарҙан аша килә лә алҡымдан ала. — Батр усаҡ ялҡынына текләп ултыра бирә лә, тамаҡ төбөн дөңгөрләтеп ниндәйҙер ят йыр башлай. Сәйер был йыр: йырсы тиҙ-тиҙ генә һамаҡлап ала ла, төшөнкөлөк менән һуғарылған әсенешле моңға күсә. Йырҙан бигерәк, сеңләп һыҡтағанға тартым был. Шаһиҙә, тыны быуылып, һауа етмәй башлағас ҡына, үҙенең йыр ыңғайына тирбәлгән килеш һыңҡылдап илап ултырғанын абайлай.

Күҙе бәйләнгән ир хәбәрҙәргә ҡатнашмай, ашарға ла уға айырым әҙерләйҙәр. Ризыҡҡа ла оҡшамаған уға һонолған тәғәм. Ниндәйҙер сәйер еҫле шыйыҡса.

Ул һәр ваҡыт Шаһиҙәнең артына урынлаша. Ҡайһы ваҡыт ҡыҙ уның тишә яҙып ҡарағанын арҡаһы менән тоя, артына боролоп ҡарай ҙа ғәжәпләнә — асҡаҡтың күҙҙәре һаман да бәйләүес менән ҡапланған. Ҡайһы ваҡыт Шаһиҙәгә арҡаһын уйып алған һымаҡ булып китә. Арҡаһына тишек уйылған да, шул тишектән уның хәлен

һурып ултырған кеүек. «Артыҡ шикләнәм, шуға теләһә ниндәй гонаһ шомлоғо тойола башлай», — тип үҙен үҙе әрләй Шаһиҙә. Шулай ҙа был әҙәмгә мөмкин тиклем арҡаһы менән боролмаҫҡа тырыша.

— Ул шаман, — тип аңлата Батр. — Беҙҙең тәүтөйәктең үҙәген бары тик ул ғына билдәләй ала. Шуға күрә көс туплай. Уның энергетикаһы бик ҡеүәтле, шунлыҡтан барыбыҙға ла уның янында ҡыйын, һин быға ғәжәпләнмә.

«Кемдәргә килеп ҡаптым мин? — тип хафалана башлағайны Шаһиҙә. — Нимәгә килеп юлыҡтым?» Уйлай, ә нимә эшләргә белмәй. Кәңәшләшергә кешеһе лә юҡ бит исмаһам.

Бәләкәйҙән үҙенә бер төрлө, даланһыҙ булды инде ул. Өтәһе ут булһа, итәгеңә оҫҡон сәсрәтә, тигәндәй, бер генә сир-ҡаза ла уны ситләтеп үтмәне.

«Етемде кесерткән дә әсерәк саға, дегәнәгенә тиклем сысҡаҡ мал менән етем балаға һыра бит ул», — тип йәлләй торғайны өләсәһе уның яра-йәрәхәттәрен имләп, йыртылған кейемдәрен рәтләгәндә. Ә әсәһе: «Үҙе бит, һөйкөмһөҙләнеп, гел генә ғәҙеллек даулай ҙа йөрөй, әллә ниндәй бер бала булды инде», — тип ороша, ҡыҙының был холҡонан, гелән эләгешеп, тәмһеҙләшеп йөрөүенән йонсоп. Ысынлап та, бәлки, әрнеү-рәнйеүҙәр башҡаларға ла шул уҡ миҡдарҙа эләгәлер. Күңеле бөтөндәр уңышһыҙлыҡтарҙың хисабын айырым алып бармай. Ә Шаһиҙә, әйтерһең дә, яҙмышына үсекте. Хаҡ тип уйлаған бөтә нәмә өсөн дә бер туҡтамай айҡашты. Сөнки бәләкәс кенә ғәҙелһеҙлекте абайлаһа ла, йөрәге үрәпсеп, ите йырылып китер ине. Етмәһә, үтә шиксел булды. Кешегә ышанып бармай. Ә бына һиҙемләү ҡеүәте мул бирелгән. Ваҡиғаларға бер ниндәй ҙә йоғонто яһай алмаһа ла, камиллыҡҡа, ҡотҡа, рухҡа янаған ҡәтрә ҡәҙәре генә хилафты ла күңеле, зиһене менән генә түгел, тиреһе менән алдан тоя. Шул арҡала «мөхәббәтһеҙ» тигән ҡушамат та алып бөттө. «Бәлки, әлеге шул шикселлегем генәлер», — тип үҙен бында ла тынысландырырға маташты. Көн яҡтыһында, донъя матурлығына һуштары китеп, күтәренке кәйеф менән йөрөгән юлдаштарына ҡараһа, үҙенең хәүефтәре өсөн көлкө лә килеп китә хатта. Тик күңеле эстән генә һыҙа ла һыҙа.

* * *

Шаһиҙәнең һөйләгәндәрен ишеткәс, Юламан ҡыуанып китте. Тимәк, йөрөүҙәре алъюҫыҡҡа түгел. Сер йомғағы яйлап ҡына тағатыла башлаған икән, тимәк, фатиха бар.

Ай байтаҡҡа ҡалҡҡас, Юламан тороп кейенде лә Торатауға менеп китте. Ҡайһы тирәнән күтәрелергә көндөҙ үк самалап ҡуйғайны. Ай яҡтыһында аяҡ аҫты шәйләнә, шуға күрә ышаныслы атланы. Тик үҙенең мөмкинлеген артыҡ баһалап ташлаған булып сыҡты, бер аҙҙан, самаһыҙ ҡыҙыу барғанға күрә, ҡатыуы ҡаҙала башланы. «Торатауҙың сәменә тейҙем», — тип уйланы Юламан, аяҡтарының гер кеүек ауырая башлағанын тойоп.

Тирә-яғына ҡаранып, йәтеш урын эҙләне. Ай нурында көмөш кеүек йылтырап ятҡан киң йәйпәк таш янына барып тубыҡланды ла, сәждәгә йығылғандай, маңлайын терәне. Байтаҡ ятты. Күпмелер ваҡыттан һуң һулҡылдап-һулҡылдап килгән йылы ағым тойҙо: күҙгә күренмәгән ҡеүәт тамырҙары буйлап тәненә таралды. Тауҙың йоҡлап ятҡан баһадирҙыҡылай тәрән һулышын, олоғара йөрәгенең мөһабәт тибешен тойҙо. Лыпын ятты, тотош һеңерҙәй булып ергә ҡапланды, әйтерһең, күҙгә күренмәҫ бәһлеүән уны ҡайнар тыны менән тартып үҙенә сытырман ҡыҫты.

«Йоҡлайым да, был бары тик төштәр», — тип уйланы Юламан, ысынбарлыҡ менән хыялды айырып торған сикте юғалтып. Онотолдо. Күпме ятҡандыр, иҫенә килеп, аяҡ-ҡулын ҡыбырлатты, һикереп торҙо. Көнсығыш саҡ ҡына яҡтырып килгән кеүек, әммә таңға саҡлы йыраҡ әле.

Тәнендә шундай еңеллек. Бына-бына ҡағынып ҙа осоп китер кеүек. Күкрәк тултырып тын алды ла, ирекһеҙҙән ҡулдарын ҡанат кеүек итеп киреп ҡараны. Оса алырына ышаныуҙан. Шунан, тилелегенә көлә-кинәнә, юғарыға артыла башланы. Абынып эйелгәйне, күҙе ус аяһындай ғына ап-аҡ ташҡа төштө. «Һинең дә өҫкә үрмәләгең киләме?» — тип һораны егет. Өнһөҙ яуапты төшөнөп, һаҡ ҡына ҡулына алды. Тау башына менергә хыялланған таштар берәү генә түгел икән. Юламан барыһының да теләген ихтирам итте: юғарылыҡтың кешеләргә генә түгел, таштарға ла килешеүе ғәжәпме

ни? Бара-бара кеҫәләре, ҡосағы тулды. Бына бер мәл таштарҙың һәр береһе үҙ урынын табып тороп ҡала башланы. Иң тәүҙә тәүге ап-ағы суҡайып сығып торған аҡ таш аҫтына һыйынды. Моғайын, ҡасандыр уның бер киҫәге булған. Үргә менеп еткәнсе егеттең ҡулында бер нисә генә таш тороп ҡалды. Уларҙың һуңғыһы тауҙың иң бейек нөктәһендә урынын тапты. Был хикмәт — таштарҙың теләгеменән мауығып, Юламан юлдың текәлеген дә абайламай ҡалды: бөтөн булмышы менән сит ихтыярҙы үтәүгә бирелгәйне. Ә инде бурысын атҡарып бөткәндән һуң, тауҙың тас соңҡаһына менеп баҫып, тирә-яҡҡа ҡарап торҙо ла аяҡ салып ултырҙы.

Ул был мәлдә ниндәй эра, нисәнсе мең йыллыҡ, ҡайһы быуат — барыһын да оноттҡайны. Ул ошо ерҙең бер өлөшө ине. Сөнки тау унда туғанын таныны. Анау имән, бынау кейәү үләне кеүек ул да тамырланды был ҡукрәккә. Ул да үҙ ҡеүәте, үҙ энергияһы менән уртаҡлашты.

Тауға нисә миллион йәш? Ҡырмыҫҡаға ай-йыл, күбәләккә аҙна, ә бынау ысыҡҡа, ысыҡҡа һуң нисә сәғәт? Мәңгелеккә керпек елпеп алыр ара һыйынды. Ваҡыт буталды бөтөнләй. Ҡайһылай рәхәт...

Тап шул мәлдә айҙы ниҙер күләгәләгәне, тирә-яҡҡа дәһшәт тулғанын тойған Юламан күҙҙәрен асты ла ғәжәпләнеүҙән ҡатып ҡалды. Тулған айҙың йылҡылдап торған еҙ батмусын ярым ҡаплап осоп барған болотта ҡулдарын күкрәгенә ҡаушарған килеш Тамуҡ хакимы үҙе баҫып тора. Ул, арбап, ҡол итергә теләгәндәй, Юламанға тишеп текләгән. Егет был ҡарашҡа буйһоноп, үҙе лә аңғармаҫтан, яй ғына урынынан ҡалҡа башланы. Әммә, ни ҡылғанын абайлап, бөтөн көсөн тупланы ла эргәһендәге һандыҡ дәүмәле ташты ҡосаҡланы. Ә ҡеүәтле әйҙәү уның ихтыярын шаҡарып алып килә, һөйәктәрен шыҡырлатҡансы ҡайыра. Егет үҙенең бөтөн тәнендәге ҡот осҡос ауыртыныуға сыҙаманы, буйһондо, аяғүрә тороп, аяу ялбарғандай, ҡулын һондо. Тирә-яҡта ҡолаҡ тондорғос гөрһөлдәү яңғыраны. Хакимдың сираттағы еңеү тантанаһы һәм мыҫҡыллы көлөүе ине был. Юламан уға ҡарай бушлыҡҡа аҙымланы, шул саҡ йәнә, тап теге ваҡыттағы — бала сағындағыса — йәнә ярҙам килде. Һөйөүе баҫты яуызлыҡ менән уның араһына.

— Кит бынан, йәһәннәм киҫәүе, кит!

...Беренсе класта уҡыған сағы ине. Тәүге генә аҙна булғандыр. Мәктәп ихатаһынан сығып та өлгөрмәне, ҡаршыһына быҙау саҡлы бер ҡара эт һеләгәйен ағыҙып, ажғырып килеп баҫты. Күҙҙәренә ҡан һауған, осло теш-тәренән аяу көтөрмөн тимә. Малай хатта уның тынсыу һулышына тиклем һиҙҙе лә, ҡото осоп, ситкә тайшанды. Уның киҫкен хәрәкәтен эт янау кеүек ҡабул итте, ахыры, алға ынтылды. Малай салҡатан йығылды һәм күҙҙәрен сытырлатып йомоп, үткер тештәрҙең тәненә батҡанын көттө. Шул саҡ:

— Кит, яуыз, кит! — тигән талапсан тауыш яңғыраны. Ҡасан өлгөргәндер, эт менән малай араһында уның менән бер партала ултырған сибек кенә ҡыҙыҡай баҫып тора ине.

Аҡ алъяпҡыслы, аҡ таҫмалы ҡыҙыҡайҙың башҡа һыймаҫлыҡ ҡыйыулығы хатта эткә лә тәьҫир итте. Ул артҡа сигенде. Ҡыҙыҡай Юламанға торорға ярҙам итте, өҫ-башын ҡаҡҡылаганы, ҡулына портфелен килтереп тотторҙо. Шаңҡып ҡалған Юламан һаман да бер һүҙ ҙә әйтә алмай тик торҙо. Ғәжәпләнеүе йөҙөнә сыҡҡайны.

— Мин бит ауырыйым, шуға бер нәмәнән дә ҡурҡмайым, — тине ҡыҙыҡай ҡылығына аҡланған кеүек. Малай ҡыйыулыҡ менән ауырыу араһында ниндәй бәйләнеш барлығын аңламаны. Бары тик донъяның күҙ алдында яҡтырып, нурланып киткәнен генә шәйләне. Ә ҡыҙыҡай уның һоҡланыуы мөлдөрәмә тулып түгелгән ҡарашын тәбиғи тип тапты, ахыры, Юламандың ҡулына үҙенең сумкаһын да тотторҙо ла ырғый-һикерә алға атланы.

— Әйҙә, — тине ул һаман урынында ҡатып торған малайға боролоп. — Ҡайттыҡ. Һин бит беҙҙең урамда йәшәйһең.

Иң бәхетле ун бер йыл бына шулай үтте: ҡыҙыҡай ырғый-һикерә алдан атлай йәки кире йүгереп килеп Юламанды етәкләп ала. Ә Юламан ике портфелде, ике алмаш аяҡ кейеме һалынған моҡсайҙы тотоп арттан эйәрә. Ә күңелендә шундай бәхеткә лайыҡ булғанына ҡыуаныс йәйғоро. Малайҙарҙың «кейәү менән кәләш» тип үсекләүҙәре лә уларҙың йәненә теймәне.

— Мин һиңә беренсе дәрестә үк ғашиҡ булдым, сөнки һинең пеналың бигерәк матур ине, — тип шаярта торғайны ҡыҙ был ваҡыттарҙы иҫләгән саҡта. — Ә һин минең яғыма боролоп та ҡараманың, ҡалын тире. Бәхетемә, ярай теге ялбыр эт килеп сыҡты.

Араларына ел дә үтеп инерлек түгел ине. Тик аяуһыҙ сир улар араһына ҡыҙыҡай яралғы булған саҡта уҡ кергәйне шул.

...Ҡот осҡос көсөргәнештән күпмелер ваҡытҡа һушын юйып йығылған егет бер аҙҙан иҫенә килде. Башының сатнап килеүенә сыҙай алмай, маңлайын йәнә тауҙың түшенә терәне: изге тауҙың һулҡылдаған йөрәк тибешен ишетте. Хәтәрҙән ҡурҡып олатаһының йылы ҡуйынына һыйынған бәләкәй малай шикелле тынысланды. Оҙаҡламай алһыуланып йәйге таң да атты.

— Әлегә бында барыһы ла имен, — тине Юламан Шаһиҙәне уятып. — Торатауға янаған хәтәр әле төйөнләнә генә. Бөгөн иһә ары киттек. Тау беҙгә үҙенең фатихаһын бирҙе.

* * *

Көн артынан көн, аҙна артынан аҙна үтте. Балҡантауға ла менделәр, Асылыкүлдең тулҡындарынан да ярҙам һоранылар, Ирәмәлгә лә күтәрелделәр, Шүлгән мәмерйәһенә лә ялбарҙылар. Бер ниндәй ым да, ишара ла ала алманылар. Әкиәттәгеләй тиҫтәләрсә йылға кисеп, әллә күпме тауҙар аша үтеп, былтырғы сәйәхәтселәр ҡыланғандың барыһын да ҡабатлап, ниндәйҙер маңлай күҙе менән күреп тә булмаған билдәләр буйынса ошонда килеп туҡтанылар. Уларҙың юлы килеп текәлгән тау бик үк текә лә, эргә-тирәләгеләренән ҡалҡыуыраҡ та түгел ине.

Байтаҡ көндәр ил гиҙһәләр ҙә, улар үҙҙәренең нимә эшләргә тейешлеге хаҡында Өфөлә тәүләп осрашҡан кистәгенән күберәк беләләр инеме икән? Юҡ, тиер ине Юламан, әгәр уға ошо һорау бирелә ҡалһа.

Ниңә килде улар бында? Ни өсөн? Ысынлап та, ошонда килергә тейештәр инеме? Әллә берәй ерҙә аҙаштылармы? Ғөмүмән, ысынлап та берәй ергә барырға, нимәлер эшләргә йөкмәтелгән инеме уларға, әллә был ике хыялыйҙың көпә-көндөҙ һаташып йөрөүеме? Юламандың күңелен кимергән шик ҡорто үҫкәндән-үҫте. Тәбиғи йомоҡлоғо арҡаһында, ҡысҡырып һорамаһа ла, Шаһиҙәнең күңелен дә ошондай уҡ шикле уйҙар тырнай.

Хәйер, уға еңелерәк, бөтөн яуаплылыкты Юламанға алып барып туғарған да, берәй һөҙөмтә булһа, уңышты уртаҡлашырға әҙер, ә инде бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, еңелеүҙе тотош уға япһарырға ғына тора.

«Берәй билдә бирегеҙ! — тип ялынды егет күңеленән. — Дөрөҫ юлда булыуымды аңлатып ишара күндерегеҙ. Исмаһам, бағышланған булыуымды ғына булһа ла аңғартығыҙ». Егет үлемесле гонаһтарҙың береһе — күңел төшөнкөлөгөнә һәм өмөтһеҙлеккә батыуҙың сигенә еткәйне. Тау-таш араһында йөрөп ни тиклем генә арыған булһа ла, улар бында эңер ҡуйыра башлағас ҡына килеп палатка ҡорғайны, йоҡлап китә алманы. Йоҡо тоғон алып тышҡа сыҡты. Шуны аҫтына түшәп ятты ла йондоҙло күккә текләне. Донъя ғәҙәттәгесә серле һәм тылсым тулы. Тик Юламанға ғына ул серҙәрҙең береһен асырға кәрәклеге хаҡында ишара юҡ. Ғәмәлгә сәбәбе табылыр, ти торғандар. Һис кенә сәбәбе табылмай ыҙалата. Әллә ғәмәл тигәндәре юҡмы?

Ул таң һарыһында Шаһиҙәнең ҡағылыуына уянып китте. Ҡыҙҙың сырайында шөбһә, ғәжәпләнеү, шул уҡ ваҡытта ҡыуаныс ишараты...

— Мин төшөмдөң дауамын күрҙем, — ти ул. — Уянғас, палатканан сығып ҡарағайным — таныным. Был, ысынлап та, былтырғы урын. Тик палаткалар үткән йыл теге яҡҡараҡ уйһыуға ҡоролған булған. Эргә-тирәлә билбыуарҙан бесән, аяҡ аҫтында еләк, мең төрлө сәскә ине. Бынау йылғала сынаяҡ аҫты ҙурлыҡ эре аҡ томбойоҡтар сәскә атып ултыра ине. Быйыл бында уларҙың береһе лә юҡ. Ә миңә туҡтауһыҙ ингән төш гел генә ут көлтәһе менән өҙөлә ине. Имеш, мин түҙгеһеҙ ауыртыуҙан һушымды юғалтам. Ә был юлы...

Төшө шул тиклем асыҡ, сағыу, хатта Шаһиҙәгә уны һөйләгәндә, был бер ниндәй ҙә төш түгел, ә ысынбарлыҡтың үҙе кеүек тойола.

...Бына ул, күпмелер һушһыҙ ятҡандан һуң, күҙен аса: күктә йондоҙҙар емелдәй, уларҙың бөләңгертләнә башлауынан төндөң таңға ауышыуын белеп була. Иҫе ҡайтыу менән ул, тирә-яғында, өҫтөндә, аҫтында мыжғышҡан мәхлүктәрҙең йылан икәнен самалап, һикереп торҙо. Аяғы тайып, имәнес йомғаҡҡа таянды ла, ҡалҡа һалып, ҡайҙа баҫырға, нимә ҡылырға белмәйенсә тораташ шикелле ҡатты. Тик былай тороп аҡылдан шашырға мөмкин! Тере ағымдың тау битләп аҫҡа шылғанын абайлап, шулай уҡ аҫҡа ырғылды, аяғы ергә тейгән

урында тейҙе, теймәгәнендә — юҡ. Һөҙәгерәк ергә еткәс, ниһайәт, табаны аҫтында тупраҡ тойҙо. Уйһыуҙа ағарып торған палаткаларға илткән һуҡмаҡ һил. Был мәхшәрҙән ҡото алынған ҡыҙ тиҙ генә инеп йоҡо тоғона сумды ла ҡалтыранып тирә-йүнгә ҡолаҡ һалды. Бер аҙҙан ниндәйҙер кешеләрҙең мыңғырлап һөйләшкәне ишетелде. Шаһиҙә ярыҡтан ғына тышҡа күҙ ташланы: таңғы шәфәҡтең алһыу яҡтыһында ике ир берәүҙе мәйет кеүек күтәреп килә. Ирҙәрҙең береһе — Батр. Бына күрше палатканан ҡатын-ҡыҙҙар тауышы ишетелде. Шаһиҙә тышҡа тағы ла нығыраҡ һоноллдо. Ирҙәр балаҫҡа төрөлгән кәүҙәне ҡәҙерләп кенә ергә һалды.

«Әллә берәйһе үлгән инде», — тип шомланды ҡыҙ. Ул арала оҙон сәстәренә генә уранған һомғол буйлы шәпшәрә ҡыҙ йәнһеҙ кәүҙәгә ҡапланды. Башҡалар уларҙың икеһен бергә, мәйетте япҡандай, ап-аҡ япма менән бөркәне лә дүрт яҡтан аяҡтарын һалып ергә ултырҙы. Тын ҡалдылар. Тирә-яҡ та тын. Инде таң да тыуған, ә ҡоштар һаман һайрамай. Ҡояш бына-бына тау артынан былҡ итеп көлөп сығасаҡ, ә уларға мәҙхиә йырлай торған сиңерткәләр һаман өнһөҙ. Ысынлап та, ниҙер булған бөгәсә төн. Ниндәйҙер дәһшәтле тантана тетрәткән тәбиғәтте...

— Был төш түгел, — тине Юламан иғтибар менән тыңлап бөткәс. — Ҡунаҡтар хәтереңде тәфсилләп таҙартҡан, ниндәйҙер серҙе бик ныҡлап йәшергән. Әле аң йоҡлаған ваҡытта хәтирәләрең биктәрҙе үтеп төшөңә сыға. Тик нимәләр булған һуң бында? Шуныһын нисек белергә?

Тамаҡ ялғап алғандан һуң тауға менеп тирә-йүнде ентекләп тикшермәксе булдылар.

Салт аяҙ һоҡланғыс иртә. Мул төшкән ысыҡ кипмәҫтән үк ҡуҙғалдылар. Әммә тауҙың итәгенән өҫкә күтәрелеп тә өлгөрмәнеләр, киҫәк кенә болот әллә ҡайҙан килеп, тауҙың түбәһенә ялбыр малахай шикелле кейелде лә юл быуылды. Күҙ бәйләне. Аҡ томан шул ҡәҙәрем ҡуйы ине, улар хатта етәкләшкән ҡулдарын да күрмәне.

— Былай булмай. Муйынды һындырып ҡуйыуыбыҙ бар. Хоҙайҙың көнө бөгөн генә түгел. Төштөк аҫҡа, — тип әйтергә мәжбүр булды Юламан.

Ысыҡҡа еүешләнгән таш һәм ҡылған өҫтөнән тайып ҡоламаҫҡа тырышып, табандарын шылдырып, хатта ҡайһы берҙә арт һандары менән шыуышып саҡ төштөләр.

* * *

«Ниндәй сәйер урын», — тип уйлай Юламан, үҙҙәре палатка ҡорған аҡланды уратып аҡҡан тар, әммә ярайһы ғына тәрән, тоноҡ йылғаның тын ағышына бағып.

Шаһиҙә ҡыҙыл эҙерҙә йылғала һыу инә. Байып барған ҡояштың нурында уның һылыу кәүҙәһе әкиәт ҡыҙыныҡылай ялтырай. Ҡалын сәстәре Һыуһылыуҙың алтын сәстәре кеүек арҡаһын япҡан.

Ғәҙәтенсә аяҡ салып ултырған Юламан уны күрә лә, күрмәй ҙә, уйлай ҙа, уйламай ҙа.

— Һин бик матурһың, — ти ул көтмәгәндә. Ҡыҙ өндәшмәй. Егет уның арҡаһы көсөргәнеүҙән, һүҙҙең дауамын көткәнен шәйләй. — Хоҙай һиңә һоҡланып ҡарап туймаҫлыҡ буй-һын биргән. Һин уның ҡәҙерен беләһең. Ямғыр алып килгән болот кеүек ҡабарынҡы сәстәрең дә матур. Һин сәсеңде лә тәрбиәләйһең, әллә ниндәй бәлзәмдәр һөртөп үҫтерәһең. — Шаһиҙә һаман да боролмай. Юламандың бығаса ауыҙ асып әйтмәгән маҡтау һүҙҙәренең тиктәҫкә түгеллеген һиҙенгәндәй һағайған. — Тик ни өсөн шундай камил тәндә гел йәрәхәт менән ярғысланған ауырыу күңел? Ул, — егет үртәлеп сағыштырыу эҙләй, — ул бынау әрмәнде үләкһәһенең кипкән тиреһе кеүек, сутырмаҡлы, сөрөш. Ул шундай бәләкәс, тар. Һин кешелеккә мөхәббәт тураһында һөйләйһең. Әммә үҙеңдең ошо йәшеңә тиклем бер кемде лә яратып ҡарағаның юҡ.

Ҡыҙ өндәшмәй. Ул таҫтамалын тотҡан килеш торараташ кеүек ҡатҡан.

— Мин һине рәнйетергә теләмәйем. Мин һине ғәйепләргә лә маташмайым. Быны кәрәге лә юҡ. Мин аңларға теләйем. Ни өсөн? Беҙҙе яҙмышмы, осраҡмы бергә осраштырған һәм инде айға яҡын эйәртенешеп йөрөйбөҙ икән, бәлки, был юҡҡа түгелдер. Бәлки, һиңә ярҙам итеү минең көсөмдән киләлер. Ҡайҙан ул һиндә был рәнйеш, бәгереңде таштай ҡатырған асыу? Мин уны бөтөн булмышым менән һиҙәм.

Ҡыҙ бер нәмә лә өндәшмәне, яй ғына кейенде лә эргәләге сауҡалыҡҡа инеп юғалды. Бер ҡосаҡ ҡоро-һары йыйып алып төштө. Туҙын мул һалып бәләкәй генә усаҡ яҡты. Усаҡ янына сүгәләгән килеш, ҡымшанмай ҙа ултырған Юламанға ҡарамайынса:

— Боҙға һәм... — тип башланы Шаһиҙә, үҙе лә күтмәгәндә. Шунан ҡапыл ҡурҡҡан һымаҡ тынып ҡалды.

— Һәм... — Уның кеүек үк утҡа текләгән Юламан һаҡ ҡына артабан дауам итмәккә өндәне.

— Һәм дә ир менән ҡатынға рәнйейем мин.

...Сатлама ҡыш ине. Үҙе зәһәр, үҙе ап-аҡ йомшаҡ. Донъя шундай салт аҡ, әйтерһең, селтәрҙән биҙәнгән йәш кәләш.

Эңер яңы зәңгәрләнгән мәлдә тауҙан һырғалаҡ шыуа инек күмәкләп.

Рәйес тигән малай, атайымдың улы, ҡыҫҡа ғына пластмасс саңғыларын тағып килгән. Шул тиклем шәп шыуа. Минең шуға ҡаным ҡарая. Ҡалышмаҫҡа тырышам артынан. Ә ул, әйтерһең дә, ирештерә. Бөтәбеҙ ҙә шыуған түң аҫтында туҡтап тормай, урам аша үтеп, яр аҫтынан боҙға тиклем етә. Мин дә йән көсөмә уның ыңғайына шыуам, гүйә, уны ҡыуып етһәм, яҙмышымдағы яңылышлыҡ төҙәтеләсәк.

Берҙе шыуып төштөк, икене, өс... Ҡатыраҡ төштөммө, көтмәгәндә боҙ уйылып китте лә былҡ итеп һыуға сумдым. Рәйес артымдан шөңгөнө. Сылтырман — бәләкәй, әммә ағымы шәп тау йылғаһы — туңған ерендә туңған, ә ҡайһы бер урындары асыҡ. Тоям, ағым мине боҙ аҫтына һөйрәй. Шул саҡ атайымдың асырғанып текләгән ҡарашын күрҙем. Ул мәкегә атын һуғарырға төшкән. Хәҙер, хәҙер бер генә ынтылһа, икебеҙҙең береһен булһа ла тотоп алып ҡала. Шундай ҡырҡыу мәлдә, үлем менән йәшәү араһында, бер күҙ асып йоморлоҡ миҙгелдә, ышанаһыңмы, мейеһенән ялпылдап үтеп барған уйын абайланым мин күҙҙәрендә. Икеләнеүен күрҙем. Шунан ул малайын һайланы, уны эләктерҙе. Ысын. Ә мин, аҡайған күҙҙәремде уға текләп, боҙ аҫтына киттем. Байтаҡ аҡтым. Асыҡ ергә сыҡтым, йәнә боҙ аҫтына индем. Әллә нисә тапҡыр шулай. Байтаҡ барғас, бата-ҡалҡа килгән ҡыҙыл кәләпүшемдең суғынан һуҙлап ҡына кер сайҡарға төшкән ҡыҙҙар тотоп алған.

— Бата-ҡалҡа килгән ҡыҙыл кәләпүшеңдең суғынан... — тип уйсан ҡабатланы Юламан.

— Боҙ аҫтына инеп киткән саҡта тыуған шул рәнйеүем ғүмерлеккә тамға булып ҡалды. Нисәмә йыл үтте — онотолмай.

— Ә әсәйең? Әсәйеңдең бында ни ғәйебе?

— Балаһының атаһынан үҙен яраттыра алмағаны өсөн...

— Ә Рәйес, атайыңдың малайы?

— Ул икенсе ҡатындан. Минең атай, һәләк сибәр егет, армиянан моряк кейемдәре кейеп ҡайтҡас, бер юлы әллә нисәмә ҡыҙҙың башын әйләндергән. Ә икеһе, үрге урамдағы Гөлсөм менән — был Рәйестең әсәһе, арғы яҡтан Зәйнәп — быныһы минең әсәй, айырыуса тәүәккәл булып сыҡҡан. Һәр береһе үҙ алдына, шәп егетте тышап алмаҡсы булып тоҙаҡ ҡорған — ауырға ҡалғандар. Мәле етеп, мәсьәлә ғәләмгә билдәле булғас, минең атай Гөлсөмдө һайлаған.

Урынынан һикереп тороп киткән Шаһиҙә, йәнә бер ҡосаҡ сытыр алып килеп усаҡҡа һалды. Бер юлы шул тиклем ризыҡ өҫтәлгәнгә аҙап ҡалған ялҡын йыуашланды, бер аҙға бөтөнләй баҫылды. Унан ҡапыл ләүкеп тоҡанды ла, ҡурҡыныс сытырлап, шашып яна башланы.

— Шунан һуң айҙан ашыу ауырып яттым. Һыу ҙа йотмағанмын, һалҡын да теймәгән...

— Йәнең яраланған.

— Ҡотом осҡан, тинеләр. Өс тапҡыр ҡот ҡойҙорҙолар. Ә миңә шунда атайымдың тик бер тапҡыр ғына килеп: «Ҡыҙым, ғәфү ит мине», — тип әйтеүе етер ине, бәлки. Ул бит уйын аңлағанымды күрҙе теге саҡта.

Бер килке ялҡынға ҡарап ултырҙы ла, тәрән итеп һулыш алғандан һуң, еңел генә итеп һығымта яһап ҡуйҙы:

— Бына шунан һуң ҡалдым мин рухи ғәрип булып.

Юламан өндәшмәне, йыуатырға һүҙ тапманы, кәрәкһенмәне лә, сөнки тормошта бер нәмә лә үҙгәрешһеҙ тормай, яралар уңала, иҫкеһе урынына яңы тире үҫеп сыға. Ә Шаһиҙә күптән инде ҡыҙыл кәләпүшле бәләкәй ҡыҙсыҡ түгел. Был тормошта ун ике йәштән һуң һәр кем үҙен үҙе камиллаштыра ала һәм тейеш. «Эргәңдәге бер бөртөк кешене яратырға эшкинмәһәң, бөтөн донъяны һөйөргә маташып ҡолас киреүеңдән ни фәтүә?» — тип ҡабатланы эсенән генә. Ошо аяныс һығымта ни өсөндөр әле уның өсөн мөһимерәк ине.

* * *

«Ғүмеремдең һанаулы икәнен белгәнемдә миңә биш йәш ине. Үҙ-үҙемде иҫләй башлағандан алып мине йыл һайын шифаханаға ебәрә торғайнылар. Күнегеп бөткәнмен, кешегә лә тиҙ үк өйрәнеп алам. Яңы дуҫтарым менән сыр-сыу килеп уйнап йөрөй инем, әсәйем менән атайым хәл белергә килде. Мин туҡтауһыҙ шаярам, тотоп тыйырлыҡ түгел. Бер мәл әсәйемдең ҡулынан ысҡынып киттем дә пальма һауыты артына барып йәшендем. Шул саҡ эргәгә атайым менән врачым килеп туҡтаны.

— Ул бит һау-сәләмәт тиҫтерҙәренә ҡарағанда ла етеҙерәк, доктор, — тине атайым.

— Бәләкәй саҡта шулай, — тине профессор. Ул бик һәйбәт бабай була торғайны, әле һаман күҙ алдымда тора. — Тик ун йәштәргә етә башлағас, майы бөткән шәм кеүек һүнәләр.

Атайымдың башы һәленде. Бер ни ҙә әйтә алманы ул.

— Шуға күрә ҡыҙығыҙҙың йәшәүенең һәр минутын бүләк кеүек ҡабул итегеҙ, бергә булған ваҡытығыҙҙы байрамға әйләндерегеҙ. Мин һеҙгә шуны ғына кәңәш итә алам. — Доктор атайымдың көмрәйеп киткән арҡаһынан яратып һыйпаны ла ғәфү үтенеп китеп барҙы.

Хәҙер килеп аптырайым. Бәләкәй генә булһам да, докторҙың әйткәндәрен мин шунда уҡ аңланым. Әсәйем пальма һауыты артынан килеп тапҡан саҡта, мин һәр минутымдың бүләк икәнен яҡшы төшөнгән батыр ҡыҙыҡай инем. Быға тиклем мин ҡараңғыла яңғыҙ ҡалыуҙан да, өлкәндәрҙең асыуынан да, башҡа әллә күпме, әллә күпме нәмәләрҙән дә ҡурҡа инем. Ғүмеремдең һанаулы икәнен белеү ҡапыл мине ҡурҡыуһыҙ итте. Иртәгәмдең булмауы мине, әйтерһең дә, әлегә тере сағымда үлемһеҙгә әйләндерҙе. Минең хыялланырға ваҡытым юҡ, шуға күрә мин һәр хыялды ғәмәлгә әйләндерерлек итеп йәшәйем». Шулай тип аңлатҡайны Юламанға Һөйөүе тормоштоң һәр секундын байрамға әйләндереп йәшәй белеүенең серен бер ваҡыт.

* * *

«Изге тауға юл ни өсөн безгә ябыҡ икән? — тип баш ватты Юламан. — Ә ят халыҡтың илселәре, улар бит үҙҙәренә ни кәрәген бик һәйбәт белгәнгә оҡшаған. Шулай булғас, ни өсөн улар Шаһиҙәне үҙҙәре менән алып йөрөткән? Уйла, уйла, мейеңде ҡыбырлат!» — тип өгөтләне үҙен.

«Ҡарап тороуға үтә бейек тә кеүек түгелһең. Шулай мәкерлеһеңме ни, эй, тау?! — тип өндәште егет. — Сереңде нығыраҡ йәшерәһең. Ниңә? Ят бауырҙар һиңә яҡынырак инеме ни?»

Юламан был төндө ошо йылы ергә тамырланған кеүек ҡымшанмай үткәрҙе. Йылға ағышынан, ҡоштар тауышынан, йөрәгенең ҡағышынан, күктән, ерҙән, йондоҙ тәлгәшенән, япраҡтарҙың үҙ-ара бышылдашыуынан, ҡаршы яҡтағы тау битендә утлауҙа йөрөгән йылҡыларҙың муйынына тағылған ҡыңғырау сыңынан билдә, ишара эҙләне, көттө, сос һәм уяу булды. Ә төн, әйтерһең дә, уны юрый үсекләгән төҫлө, һис бер булмағанса һил ине. Хатта ел дә иҫмәне. Офоҡ ҡыҙылға мансылыу менән томбойоҡло йылғаның алһыу һыуына ҡойоноп сыҡты ла Шаһиҙәне уятты.

Йәнә ынтылдылар тауға. Һулыш иркен, тән шул тиклем еңел, күңел күтәренке. Бына оло-ҡара ҡояш йылҡылдап килеп ҡалҡты ла, бөтөн тирә-яҡҡа байрам төҫө бирҙе.

«Кисә мәле етмәгән булған икән шул», — тип кинәнде Юламан эргә-тирәһендәге тантаналы донъяға хайран ҡалып. Тәбиғәттең аяҙ көнгә был ҡәҙәр һөйөнгәнен күргәне юҡ ине әлегәсә. «Бына ошо инде ул билдә! — тип ҡыуанды. — Ыңғай билдә!»

Әммә шул саҡ, әйтерһең дә, ниндәйҙер тыйылған сикте боҙҙоламы ни, күк күкрәне. Баш осонда ҡояш балҡып торғанлыҡтан, йәшнәгәнен дә абайламағайнылар. Ҡул һуҙымындағы яулыҡ ҡәҙәре генә болот ҡапыл ҡабарынып тирә-яҡты дер һелкетә башланы. Күҙ менән ҡаш араһында көн ҡараңғыланды. Йәшен күк батшаһының ҡамсыһы кеүек оҙон булып ялтлай ҙа бер нисә секунд үтеүгә ҡурҡыныс итеп дөһөрләй.

— Йәшендең ҡап уртаһында ҡалдыҡ, — тип ҡысҡырҙы Юламан, ҡурҡышынан ҡолаҡтарын баҫып ергә сүгә-

ләгән Шаһиҙәгә. — Имен саҡта анау үҙәккә, ағаслыҡ араһына төшә һалыр кәрәк. — Әйтеп тә бөтмәне, эргәләге тәпәш кенә йыуантыҡ имәнде йәшен атты. Меҫкен ағас, утлы ҡылыс менән сабып төшөргәндәй, ҡап уртаға ярылды. Мосафирҙар аяҡ аҫтарында ут тоҡанған кеүек, йүгереп түгел, осоп, тәгәрмәләп үҙәккә табан ынтылды. Ә уларҙың тау башына менеүен теләмәгән ҡөҙрәт эйәһе, гүйә, сыбыртҡыһын шартлатып малдарын ҡыуалаған яуыз көтөүсе кеүек, ажарланып арттарынан баҫтыра ине.

Үҙәк буйлап аҫҡа байтаҡ йүгергәндән һуң, хәлдән тайып туҡтанылар. Аһылдашып торғандан һуң аптырап тирә-яҡты байҡанылар. Бында тып-тын.

— Тау үткәрмәй беҙҙе, шул ғына раҫ, — тине Юламан, бер ағас төбөнән сөптөрләп кенә урғылып сыҡҡан шишмәнең һыуын уртлағандан һуң бер йәйпәк ташҡа ултырып алғас.

Ул инде артабан нимә эшләргә лә белмәй ине.

— Аһа, Йыланлы үҙәктә нимә тип йөрөйһөгөҙ ул? Сағылып ҡуйһағыҙ нишләй? — тип һораны шул саҡ берәү. Тертләп ҡараһалар, эргәләрендә өҫтөнә брезент плащ, аяғына резина итек кейгән бер оҙон тороҡло егет баҫып тора.

— Ә һин һуң? — тип һорау менән яуап ҡайтарҙы Шаһиҙә ҡырыҫ ҡына. — Үҙең нишләп йөрөйһөң?

— Аһа, Шатморат мин. Йылан аулаусылаһаң, — тип ғәжәпләнде егет.

— Һинең Шатморат икәнеңде беҙ ҡайҙан белергә тейеш һуң? — тип уның үҙе кеүек үк һыңҡылдап һораны Юламан, көләмһерәп.

— Йыланлы үҙәктә минән башҡа кем йөрөһөн? Был тирәне туристар ҙа урап үтә. Көтөүселәр малы аҙашһа ла инмәй бында. — Егет ауыҙы ҡолағына еткәнсе йылмайҙы. Уның баҡыр төҫөнә инеп янған яғымлы йөҙөндә тигеҙ тештәре матур булып ялтырап китте. — Бына, — тип аяғы эргәһендә ятҡан киндер тоғон ҡалҡытып күрһәтте. Эсендә нимәлер ҡыбырлаша. Көндәр буйы япа-яңғыҙ тау-урман ҡыҙырған егеттең һөйләшкеһе килеп кенә тора, ахыры.

Юламандың:

— Шунан уларҙы нимә эшләтәһең? — тип ҡыҙыҡһыныуына:

— Итен бешереп һатам, — тип шаяртты. Тегеләрҙең йығылып ятҡан ағас олонона терәлергә самалауҙарына ҡысҡыра һалды:

— Уй, ултыра күрмәгеҙ! — Шунан, бәләһенән баш-аяҡ, тигәндәй аҫҡа әйҙәне. Юламанды етәкләп үк алды. — Һеҙҙе һил ергә апсығып ҡуймай булмай, — тип һөйләнде. — Апай, эйәр. Ситкә тайпылма, ошо һуҡмаҡ менән генә атла.

Аҫҡа, суйыр таштар өҫтөнән һикерә-һикерә сылтырап ағып ятҡан шишмә буйына төштөләр. Ситтәрәк, ҡарт имән төбөндә йәтеш кенә ҡыуыш. Тағы ла арыраҡ усаҡ урыны. Тағанға аҫылған күпте күргән ҡара сәйнүктең ҡыйшайған морононан боҫ бөркөлөп тора.

— Ултырышығыҙ, — тине егет күк һарыҡ йөнөнән баҫылған кейеҙ һөйрәп сығарып. — Был үҙәктә бит башҡа йылдары үткеһеҙ була торғайны. Йыландар бер-береһенә уралып, йомарланышып яталар ине. Шуға күрә кеше түгел, мал да инмәй унда, — тип ҡабатланы. — Ә һеҙ рәхәтләнеп йөрөп ятаһығыҙ.

— Әллә, берәү ҙә осраманысы, — тине Шаһиҙә.

— Ысынлап та, быйыл йылан нишләптер аҙ. Шулай ҙа, уйламаған ерҙән килеп сығалар. Ә сөрөк ағасҡа әллә нисәмәһе бер юлы күкәй һалырға ингән була.

— Ә шулай ҙа тотҡан йыландарыңды нимә эшләтәһең? — тип Юламандың һорауын ҡабатланы Шаһиҙә.

— Бизнес, — тип һуҙҙы егет көлөп. — Минең бизнес ул.

— Юҡ, һин, моғайын, шпиондыр, — тине Юламан егеткә һынап ҡарап. — ЦРУ, йә Моссад.

— Нишәп?

— Нишәп, нишәп, — тип үсекләне Юламан. — Күп һөйләгән булаһың да яуаптан ҡасаһың. Сер йәшерә беләһең.

— Унын ниндәй сере булһын инде. Һеҙ ҡырҙан килгәнгә генә белмәйһегеҙ. Йылан, баҡа тотоп йөрөгән кеше осрай икән, барыһы ла белеп тора: Шаһисолтан олатайҙың заказын үтәйбеҙ.

— Ә кем ул Шаһисолтан олатай?

— Бәй, һеҙ күктән төштөгөҙмө әллә? Беҙҙең данлыҡлы йылан арбаусыны ла белмәгән кеше бар икән дә баһа был донъяла!

— Алыҫтан килеүебеҙ шул. Шуға күрә томанабыҙ, — тине Юламан ғәфү үтенгәндәй. — Йылан күп тип беҙҙең

ҡотто алдың. Ә үҙең аҙна буйы йөрөп биш-алты йылан тоттоңмо?

— Әһә, һиңә! Теләһә ниндәй йылан кәрәкмәй шул олатайға. Йәше, төҫө, холҡо буйынса ниндәйе кәрәк, барыһын да әйтеп ебәрә. Ә теләһә ниндәй йылан өсөн бында ла килеп йөрөмәйем мин. Утыҙ саҡрымға. Үҙебеҙҙең тирәлә малай-шалай ҙа тотоп бирә уны.

— Холҡо, тиһең. Холҡон ҡайҙан беләһең? Ул олатайға йыландың холҡо нимәгә кәрәк?

— Йыландың да бирлеһе була, аҫтыртыны, яһилы. Өгөткә килгәне, килмәгәне.

— Уны ҡайҙан беләһең?

— Бына шуны белгән өсөн дә оҫта булам инде мин. Баҡа аулап йөрөмәйем бит, — тип йәнә тештәрен йылтыратты ла, итеген ҡабат кейеп, йыйына башланы. — Берәүҙе бая абайлай биргәйнем. Тотоп булһа, бөгөн ҡайтылыр.

* * *

— Шаһисолтан бабайға барабыҙ тиһегеҙ инде. Тау-таш араһынан шул тиклем араны ҡалайтып үтерһегеҙ икән һуң? Мин һыбай ғына килгәйнем бит әле, — тине Шатморат һунарын теүәлләгәс.

— Теге яҡтан машина юлы бар бит.

— Ул Өфө яғынан. Ә беҙҙең ауылға ныҡ урау була. Ярар, бер әмәлен табырға тырышырбыҙ. Йылҡы көтөүселәргә барып йәпәтникләнеп ҡарамағанда. — Егет елкәһен тырнап торҙо ла тишә ҡараны:

— Бер яртығыҙ бармы?

— Юҡ шул.

— Кеше ауылға валютаһыҙ киләме? Келтер-келтер арбала ғына барыр инегеҙ.

— Һөйләшеп ҡараһаҡ?

— Әхмәҙулла ағайҙың теше һыҙлай. Шатун айыу кеүек ажғырып йөрөй. Эргәһенә яҡын килерлек түгел.

— Теше һыҙлай, тип бая уҡ әйткән булһаңсы. — Юламан еңел һуланы. — Мәсьәлә хәл ителде былай булғас.

— Нишәп, әллә һин доктормы?

— Һинең олатаң йылан арбай белгән кеүек, мин теште арбай беләм.

— Һы! — тип ышанмайыраҡ ҡарап торҙо егет, унан артынан әйҙәп ҡул һелтәне. — Юлландыҡ, улайһа.

— Егеттәр, бөгөн китә күрмәгеҙ, — тип сат йәбеште икенсе көтөүсе, Юламан Әхмәҙулланы йоҡлатып һуҙып һалғас. — Иртән торһон, теше баҫылғанына тағы бер ышанайыҡ. Атыу аҙна буйы олоп үҙәккә үтте бит.

— Нишләп һуң ауылға ҡайтып врачҡа бармай? Аҡыл теше генә бит. Тамыры ла юҡ.

— Әллә ниндәй бер ҡурҡаҡ әҙәм инде. Айыуҙан ҡурҡмай, бүрене эшкә лә һанамай, ә теш врачынан ҡурҡа.

— Эйе, — тип хәбәргә ҡушылды Шатморат. — Хәнйәр менән айыуға һунарға йөрөй, суҡмар менән бүре һуғып ала. Ысын!

* * *

— Һин үҙең көслө бит, улым, шуны беләһеңме? — тип һораны Шаһисолтан ҡарт юлсыларға сәй эсереп хәл алдырғас. Улар Юламан менән икәүләшеп йәшелсә баҡсаһы эргәһендәге әүеҫлек аҫтына еләҫкә сығып ултырғайны.

— Шулаймы, олатай? — тип өмөт ҡатыш икеләнеп һораны егет. — Быға тиклем белгән кеүек инем, әле бөтөнләй шиккә баттым. Кемлегемде лә, нимә эшләп йөрөүемде лә аңламай башланым. Теге әкиәттәге «Бар шунда — белмәйем ҡайҙа, алып кил шуны — белмәйем ниҙе», тигән кеүек. Тик минең осраҡта хатта «бар, алып кил» тип тәғәйен генә ҡушыусы ла юҡ. Әллә бушты бушҡа ауҙарып йөрөлә? — тип зарланып ташланы.

— Тотош шик-шөбһәгә батып китмәҫ элек, исмаһам, беребеҙҙең кемлегебеҙҙе асыҡлайыҡ, улайһа, — тине ҡарт аҡыллы күҙҙәрен мөләйем емелдәтеп. — Мин — йылан арбаусы. Дүртенсе быуынмын. Был һәләт өләсәмдән күскән, уға үҙ олатаһынан, ул олатайға үҙ олатаһынан. Ни өсөндөр батшабикә быуын һайын түгел, быуын аша ғына рөхсәт итә, ти торғайны өләсәй. Бына минең улымда хатта ҡыҙыҡһыныу ғына ла юҡ, йыландан уттан ҡурҡҡан кеүек, шыр ебәрә. Ә ейәнем нишләп китер инде.

Шаһисолтан ҡарт байтаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы, шунан:

— Мин үҙем былай бәләкәйҙән үк алдым ишараны, — тип һөйләп алып китте. — Атайҙан йәшем дә тулмаҫ борон ҡалғанмын. Әсәм күрше ауылдағы өс балалы тол иргә сыҡҡас, өләсәм менән олатам мине ишле ғаиләгә бирергә йәлләп үҙҙәренә алып ҡалған. Шуға күрә мин һуғыш аҙабын артыҡ күрмәйенсә, рәхәтләнеп кәзә ҡымыҙы менән һыйланып үҫтем.

Бер ваҡыт бәпкә көтөп ултырһам, эргәмдә үҙәккә үткес ыҫылдау ишеттем. Боролоп ҡараһам, сабата дәүмәллек әрмәнде ҙур бер туҙбаш йыланды урта тирәһенән ҡабып алған да, тегенеһе йән әсеһе менән борғалана. Йүгереп барып әрмәндене тотоп алдым да, йыланын һелкетә тартып бер яҡҡа, үҙен икенсе яҡҡа елгәрҙем. Быны күреп ҡалған күрше инәй, уларҙың араһынан әллә нимә һамаҡлап өс-дүрт тапҡыр тегеләй-былай йүгереп үтте лә, арҡамдан тупылдатып һөйөп, өләсәйемә хәбәр һөйләргә инеп китте.

Аҙаҡ өләсәмдән һорап белдем: әрмәнденән йыланды ҡотҡарғас, шул ике аранан өс рәт үткән кеше баланан ҡотола алмай йонсоған ҡатынды һыйпаһа, тегенеһе еңел бушана икән.

Бер көн шулай олатама көтөүгә тамаҡ алып китеп барам. Һөҙәк кенә тауҙың битләүенә еткәйнем, түшәлеп ята ҡыҙыл еләк. Ашанды тәрәлгән төйөнсөгөмдө ҡуйып торҙом да, ятып алып һоғонам ғына. Таҡыяма ла йыям. Шунан, өләсәмә ҡайтышлай йыйырмын, таңдан сығып киткән олатамдың ҡорһағы асҡандыр, тип, төйөнсөгөм янына килһәм, уға ап-аҡ йылан башын һалып ятҡан. Мин яҡынайғас, ҡалҡып ҡараны. Тамсы ла ҡурҡмайымсы. Ыштан кеҫәмдә еңгәй бүләк иткән ҡайыулы ҡулъяулығым бар ине, шуны алдына түшәнем.

Өләсәйемдең: «Аҡ йыланға оҙаҡ тексәйеп торорға ярамай», — тип киҫәткәне бар ине. Төйөнсөктөң эргәһенән киткәнен көтөп йәнә еләк йыйырға тотондом. Боролоп ҡарарға баҙнат итмәй байтаҡ йөрөнөм. Ҡабат барып ҡараһам — киткән. Ҡулъяулыкҡка мөгөҙөн һалып ҡалдырған.

— Бәпесемде батшабикә бағышланы, — тип өләсәмдең ҡыуанғаны!

Саҡ ҡына ҙурая биргәс, мине ошолайтып өҙләргә өйрәтә башланы өләсәй. Бабай тамаҡ төбөн сайҡаған кеүек саҡ ҡына ғырылдатып алды ла бер мәл боғаҙында көмөш ҡыңғырауҙар сыңғырлай башланы.

— Йылан ишетмәй. Әммә ошолайтып өзләгәнде ярата. Флейта уйнап уны арбайҙар бит, шуның кеүек. Быны ғалимдар, һауала шундай вибрация барлыҡҡа килә лә үҙенә бер төрлө тирбәлеп йыланға йоғонто яһай, тип аңлата, — тине бабай. — Тора-бара өләсәм яйлап ҡына дауалау серҙәрен дә аса башланы. Тик үҙ алдыма дауалай башлағанға тиклем бик оҙаҡ батшабикәнең рөхсәтен көтөргә тура килде.

Хәрби хеҙмәттә инем. Өләсәм әжәл түшәгенә яткас, телеграмма ебәреп саҡыртып алдылар. Мәңгелек йортона китер алдынан өйөндә һуңғы төн ҡунғанда йыландарҙың тәҙрәнән килеп ҡарап торғанын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Өләсәм бит уларҙы усаллыҡ менән буйһондорманы, яҡшылыҡ менән хеҙмәт иттерҙе. Шуға күрә ҡайғырып хушлашҡандарҙыр, тип уйлайым.

Армияла санитар булдым. Ҡайтҡас, фельдшерлыҡҡа уҡып сыҡтым. Уҡығанда уҡ медицина кешенең тәнен тулыһынса белеп бөтөрә алмаясағын аңланым. Сөнки ул уны күңелдән айырып ҡарай. Ә бит әҙәм балаһы — бер бөтөн.

Йылан ағыуының шифаһын рәсми медицина күптән үк таныған. Ә бит йыландың тиреһенән алып мейеһенә тиклем барыһы ла шифалы. Бына мин быҡтырылған итен, тиреһен, төрлө ағзаларын, көлөн — бөтөнөһөн файҙаланам. Яман һүҙҙән, яман күҙҙән йылан башының төнәтмәһе килешә. Шешектән ҡара йыландың быҡтырылған итен биреп дауалайым. Тик бында иң мөһиме — тейешле йолаһын — арбауҙы, урын-еренә тиклем башҡарыу. Аңлауымса, арбауҙың төп тәғәйенләнеше — тирә-яҡ мөхиткә, кешенең тәбиғәтенә маҡсатлы йоғонто яһау, үҙ ихтыярына буйһондороу. Әммә был маҡсат бойомға ашһын өсөн арбау һүҙенең үтә ҡөҙрәтле булыуы фарыз.

*Эй, Тәңрем!*
*Барһың! Берһең!*
*Оҡшашың юҡтыр!*
*Ни бойорһаң — була,*
*Бойормаһаң — булмай! —*

тип башлайһың да, сиренә ҡарап дауам итәһең. Быуындан быуынға килгән йәшерен белем ана шунан ғибәрәт.

Тик табип ни тиклем көслө булмаһын, күп нәмә сирле кешенең үҙенә бәйләнгән. Йыш ҡына ул һауығыр өсөн булмышында нимәнелер төҙәтергә тейеш. Ситтән йоғонто яһап ҡына бөтөрөп булмай.

— Ә һин уны, сиренән дауалап булғанды йәки булмағанды, тиеүем, ҡайҙан беләһең, олатай?

— Йыландар батшаһы әйтә.

Юламан был һүҙҙәрҙе уйынмы-ысынмы тип ҡабул итергә лә белмәгәс, өндәшмәне.

— Был ҡарт әкиәт һөйләй, тип уйлап ҡуйҙыңмы? — Табип көлөмһөрәне. — Әммә башҡаларға хаҡ икәнен аңлатып булмаған нәмәләрҙең барлығын, ысын икәнен һин үҙең дә ишетеп кенә түгел, кисереп беләһең. Минең өсөн берҙән-бер дәлил — ауырыуҙы һауыҡтырыу. Һауыҡһалар ышаналар, ярҙам итә алмаһам, алдаҡсы, тиҙәр.

Ул кешенең сырхауы үҙәгенә үтеп, һуңғы өмөтөм, тип миңә килеп йығылыуы кәрәк. Әле миндә берәү дауалана. Уға яман шеш тигәндәр. Ә был — язва, ашҡаҙанында. Тәҡдир сире түгел. Яҙмышына төшкән ауырлыҡтар арҡаһында барлыҡҡа килгән.

— Ә тәҡдир ауырыуы тигәнең нимә була, олатай?

— Кешегә үҙгәрер өсөн мөмкинлек бирелә. Шул һынауҙы үткән сағында уның сәләмәтләнеүе, сафланыуы, яҙылып китеүе, юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеүе ихтимал. Һынауҙы тапшыра алмаһа, ситкә тайпылһа, был инде тәҡдиргә әйләнә. Ундай ауырыуҙы дауаларға маташыу, Аллаһы Тәғәләнең үҙенән дә өҫтөн булырға теләү ул. Бик ҙур гонаһ.

Ғөмүмән, миңә ышанысы юҡ икән, хатта иң көслө дарыу менән дә бер кемде лә һауыҡтырып булмай. Нисек дауалайым? Кешене бит мин ярым йоҡлатам, тотош түгел. Сөнки йылан, сирленең ауыҙынан инеп, уның эсен айҡап, бөтөн бысрағын ашап, артынан килеп сыҡһын өсөн кешенең ярым уяу булыуы кәрәк.

Кеше миңә башкөллө ышанһа, әйтерһең дә, дауамыма әйләнә. Йылан иһә уны минең кеүек ҡабул итә. Уны бит мин биш-алты көн алдан әҙерләй башлайым. Өгөтләйем, арбайым. Йылан һынлы йыланды минең хаҡыма йәнен фиҙа ҡылырға разый иттерер өсөн күпме ҡөҙрәт кәрәк, күҙ алдыңа килтереп ҡара әле.

Ул бит эстәге бөтөн сир-сырхауҙарҙы, әшәкене ашап сыға ла, сикһеҙ ғазапланып ятып үлә. Был һиңә юҡ-бар ғына түгел. Конға ике йән эйәһенең дә иң ғәзиз

хазинаһы — ғүмере ҡуйылған. Һәм шуларҙың береһе үҙ ихтыяры менән башҡа берәүҙең ғүмере хаҡына үҙенекенән ваз кисергә тейеш. Был һиңә шурум-бурум ғына түгел. Шуға күрә өс мәхлүктең: минең, сирлененң һәм йыландың бер-береһенә тулы ышанысы һәм бер бөтөнгә әйләнеүе кәрәк. Әллә йыланға үҙ йәне ғәзиз түгел тип уйлайһыңмы? — Ярар, улым, — тип урынынан ҡуҙғалды ҡарт. — Мин үҙемә өмөт бағлап ҡайҙан ҡайҙа килгән ауырыуҙарымды бағайым. Ә һин уйлан, фекер тупла. Күрәм, кәңәш-төңәш итәһеләребеҙ байтаҡ.

Табип төп йорттан ситтәрәк, сөптөрләп ағып ятҡан шишмә буйына эре, матур ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған ыҡсым ғына яңы йортҡа табан йүнәлде. Ишек тотҡаһына тотонған ерҙән артына боролоп, уйға батып ҡарап ҡалған Юламанға:

— Һин бит бында тиклем үҙ-үҙеңә ышанған өсөн килеп еттең, — тине лә эскә инеп китте.

— Дөм ҡараңғыла дауалай. Унда өсәү генәләр: йылан, ауырыу кеше лә олатай ғына. Ҡайһы ваҡыт өсәр-дүртәр сәғәт булып китә. — Һөйләшкеһе килеп, баянан бирле уранғылап йөрөгән Шатморат Юламандың эргәһенә килеп ултырҙы. Тик тыйнаҡ егет ҡунаҡтың гәп һатып ултырырҙай кәйефе юҡлығын тиҙ самаланы, эше барлығын иҫенә төшөргән булып китеп барҙы.

«Бында тиклем килеп еттем, — тип уйланы Юламан. — Ә бит теләһә ҡайһы урындан боролоп ҡайтырға ла һәүетемсә йәшәп китергә мөмкин булыр ине». Һәүетемсәме?

Урынынан тороп ихатанан сыҡты, берләм һуҡмаҡтан туғай юлы буйлап китте. Һулап туймаҫлыҡ хуш еҫле саф һауа, әкрен елдә ялҡау ғына шыбырлашҡан япраҡтар, сәскәлә безелдәшкән бал ҡорттары...

Ҡайһы ваҡыт уйҙарҙы артыҡ ҡамсылап ҡыуалай башлаһаң, улар көрсөккә инеп төкәлә. Шул хаҡта уйлап, Юламан бер аҙға йүгәнен һыпырып сәхрәгә сығарған йөк атылай үҙенә ихтыяр бирергә булды. Болон буйлап барған еренән ҡапыл йығылды ла, тумарлап-тумарлап аунап алды. Унан зәңгәр күккә, ап-аҡ болоттарға ҡарап ләззәткә бирелде. Күҙҙәре эленеп онотолғанмы, иренена үлән ҡыяғы ҡағылғанға иң татлы хәтирәһе алдына килде.

...Янында тубыҡланып ултырған Һөйөүе шаяртып үлән ҡыяғы менән уның битен, ирендәрен ҡытыҡлай. Башында аллы-гөллө болон сәскәләренән үрелгән таж.

һәр өҙөлгән сәскәнән ғәфү һорай-һорай, был тажды ҡыҙ үҙе үрҙе. Ғүмере һанаулы булғанға ул матурлыҡтың ҡәтрәһен дә ҡәҙерләй. Тик яратҡан Юламандың хәтерендә сәскә тажы кейгән гүзәлдәрҙең-гүзәле булып ҡалырға теләүе генә уға шул тиклем матурлыҡҡа ҡул һуҙырға баҙнат бирҙе. Ни генә тимә, ҡапма-ҡаршылыҡтан тыуылған ҡатын-ҡыҙ затынан бит әле ул да. Уның матурлыҡҡа матурлыҡты ҡушып, мауығып таж үргәнен күҙәтеп ятҡан егете донъя наҙынан иҙрәп киткән. Күкрәгендә һанаулы ғына тибешкә көйләнгән һауһыҙ йөрәк һулҡылдамаһа, ул хатта ошо ҡабатланғыһыҙ гүзәллекте лә йоҡлап исрафлай ала. Шулай тип уйлай булыр Һөйгәне. Ә Юламан уның матурлығына күҙе ҡамашыуҙан һәм йөрәгенә ҡан һауҙырған һағышын йәшерергә тырышып ҡына йоҡлағанға һалышҡан. Күҙҙәрен асһа, хәсрәте эркелер ҙә эргәһендәге бар йәмде көйҙөрөр.

Ә эргәләрендә тормош тантанаһы. Донъя нур менән моңға тыуылған. «Һин ҡотлоһоң, донъям, шунлыҡтан мәңгеһең. Шул ҡотоңдан миңә лә саҡ ҡына өлөш сығар. Ҡосағыңда тағы ла саҡ ҡына наҙланайым. Егетем хеҙмәтен тултырып ҡайтҡанын көтөп алырлыҡ ҡына ғүмер бирсе миңә». Һөйөүе йәшәйешкә шулай өндәшә. Ул ҡыйыу ҙа, сабыр ҙа. Шуға күрә тауышында берниндәй хәсрәт юҡ. Һоҡланыу һәм рәхмәт. «Шөкөрана яралғаныма һәм тыуғаныма, шөкөрана ошо матурлыҡты тойғаныма, ҡотоңа ҡойонғаныма, һөйөүгә тейенгәнемә», — тип һамаҡлай ҡыҙ. Юламан сыҙамай, керпектәре араһынан ғына һөҙөп донъяға рәхмәт яуҙырған Һөйгәненә ҡарай. Ә ул бар булмышы менән тормошҡа ғибәҙәт ҡыла. Нәфис кенә күгелйем ирендәре туҡтауһыҙ ҡыбырлай. Был күклек Юламандың ҡанһыраған йөрәген тағы ла нығыраҡ һыҙлатып, һуңғы сабырлығын йырта. Ул баш осонда ғына тамылйып бешкән еләкте өҙөп ала ла, уның алын һөйгән ирендәрендә мәңгелеккә ҡалдырырҙай теләк менән буяй. Йәнендә әрем әсеһе, ирендәрендә еләк тәме... Ялбарыуы бүтән Юламандың йәшәйешкә. «Йән алырға мотлаҡ кәрәк икән, минекен ал, уны ҡалдыр. Һис булмаһа, икебеҙҙе бергә һүндер». Олоғоһо килә күккә ҡарап, күңелендәге һөрөмгә тонсоғоп. Ә Һөйөүе күнгән.

— Күрәһеңме, йәнем, — ти ул күҙҙәрен балҡытып, — донъя ҡотҡа сумған.

— Юҡ, — тип баш сайҡай Юламан.

— Ни өсөн һуң һис кем тоймай күктән ямғыр кеүек бер туктауһыҙ яуып торған сикһеҙ бәрәкәтте? Бына бит ул — усты ҡуйһаң тула. Ни өсөн һуң уны бер кем күрмәй?

* * *

«Ни өсөн мин быға тиклем ҡолағым төбөндә ҡат-ҡат ҡабатланған был һүҙгә иғтибар итмәгәнмен? — тип ғәжәпләнеп һикереп тороп ултырҙы Юламан. «Былтыр бында ҡарап туйғыһыҙ матур ине. Быйыл ҡотһоҙ булғанға танымағанмын», — тине Шаһиҙә.

«Көндәр йылы, ямғыры ла ваҡытында яуа, тик әллә нимәгә тәбиғәттең ҡото юҡ. Хатта йыланына тиклем аҙайҙы», — тине Шатморат. Ҡот, ҡотһоҙ, ҡот юҡ.

Быуаттар төпкөлөнән тамырҙарын юллап йөрөгән былтырғы мосафирҙарҙың төп маҡсаты — ҡот булған бит. Улар мең йыл элек телдәрен дә, моңдарын да үҙҙәре менән алып китә алған, әммә йәнтөйәктең ҡото бында ҡалған.

Юламан эргә-тирәһендәге мөхиттең кәрәкле мәғлүмәт менән һуғарылғанын айырым-асыҡ тойҙо. Һәм бына ул мәғлүмәт уға иңә, аңында аңлайышлы фекер булып туҡыла бара. Уйҙарын Шаһисолтан олатай менән уртаҡлашмаҡсы булып ауыл яғына ыңғайлағайны, һелкетә баҫып килгән ҡарттың үҙен тап итте. Юлы алыҫҡа тоҫҡалғанға оҡшаған. Арҡаһына биштәр аҫып алған.

— Ялан күреп әйләнәйек булмаһа, — тине ҡарт. — Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эйәреп ҡуйыуы ла бар.

— Дөрөҫ, олатай, — тип ризалашты Юламан. Бер аҙ атлай биргәс, салт ҡына шишмә буйында ултырып алдылар. Шунда ғына егет үҙенең фаразы хаҡында һөйләп бирҙе.

— Фән нисек аңлата һуң быларҙы? — тип һораны мауығып тыңлаған бабай. — Һин үҙең нисек аңлайһың?

— Ерҙең күкрәгенән ҡалҡҡан энергия ҡайһы бер урындарҙа ҡеүәтлерәк була. Боронғолар, ни ғиллә менәндер, шул урындарҙы яҡшы белгән, уларҙы изге тип иҫәпләгән. Хәйер, улар, ысынлап та, изге инде.

Шул урында күҙгә күренмәҫ шифалы нур фонтан кеүек атып тора ла, алтын ямғыр кеүек тирә-яҡҡа яуа. Беҙ ана шул сихәтле нур аҫтында тереклек итәбеҙ.

— Ер ҡуйынынан атылған нур көлтәһенә ул бахыр бәндә балаһы ниндәй хилафлыҡ килтерә алыр икән? Шул минең башыма һыймай, — тине ҡарт уйсан ғына.

— Әллә, мин дә аптырайым. Баҫыуға ҡуйылған һуғарыу агрегатын күҙ алдына килтер, олатай. Ул бит һыуҙы, төҙөк сағында, һәр яҡҡа тигеҙ генә бөркөп тора. Ә шуны борғослап, һыу ағымын тик бер яҡҡа ғына тоҫҡап була.

— Шул рәүешле, ерҙең төйәгебеҙгә тигеҙ генә бөркөлөп торған бәрәкәтен үҙ илдәренә йүнәлтергә маташҡандыр теге шаман, тип уйлайһыңмы?

— Шулай түгелме икән, тип фаразлайым. Үҙегеҙ ҙә, быйыл ерҙең ҡото самалы, тип әйтеп тораһығыҙ. Шатморат та Йыланлы үҙәктә йылан аҙ быйыл, тип аптырай.

— Бик мөмкин, бик мөмкин. Тик ул килмешәктең шул ҡәҙәрлем ҡөҙрәте барлығына һуш китеп, аптырап ултырыла, — тип баш сайҡаны Шаһисолтан ҡарт. — Ә был ҡыҙ нимәләр һөйләй һуң?

— Бына шул-шул. Нимә булғанын бөтөнләй тиерлек хәтерләмәй. Дөрөҫөрәге, ҡәҙимге генә нәмәләрҙе: ҡайҙа барғандар, нимә тип һөйләшкәндәр, ни күргәндәр — сала-сарпы һөйләп бирә. Ә бына серле мәғлүмәт бирә алмай. Гипноз менән дә һөйләтеп ҡараным. Файҙаһы самалы. Ә бына төштәре сәйер, хатта хәүефле.

— Шул тиклем көслө сихырсыға хәтерҙән мәғлүмәт юйып ташлау бер ни тормай инде.

Һөйләшеп килә торғас, уҫаҡлыҡҡа инделәр. Саҡ ҡына елдә лә япраҡтары ҡалтырап шыбыр-шыбыр ниҙер һөйләгән кеүектәр. Ҡарт йыуантыҡ ҡына бер уҫаҡ төбөнә килеп ултырҙы, эргәһендәге төпһәгә Юламанды саҡырҙы.

— Күләгәлә ял итеп алайыҡ әле, улым.

Арҡаһын ағасҡа терәп ултырыу менән Юламандың умыртҡа бағанаһы буйлап шом йүгерҙе. Ялт итеп балҡып торған көләс көндән хәүеф еҫе аңҡыны. Ниндәйҙер вәхшәткә шаһит булғандай, күңеле тетрәнде.

— Әллә ниндәй бер ҡотһоҙ урынға килеп ултырҙыҡ шикелле, олатай, — тип әйтергә мәжбүр булды егет.

— Һиҙҙеңме? — тине ҡарт. Ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы ла дауам итте. — Тәбиғәттә бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмай.

Беҙҙең хис-тойғоларыбыҙ тураһында хәтирә, уларҙың эҙҙәре тороп ҡала. Бына ошо ағас төбөндә ҡышҡыһын бүре мышыны тамаҡлаған. Бисара хайуандың үлемесле ҡурҡыуы хәтирә булып ағаста һаҡланып ҡалған. Әле килеп уны ағас һиңә тапшырҙы.

Был ҡарт нимәгә ишаралай, тиһеңме? Шаһиҙәнең аңынан беҙгә кәрәкле мәғлүмәттәр, махсус рәүештә юйып ташланған осраҡта ла, ауранында ҡалған булырға тейеш. Нисек тә уларҙы шунан алыу сараһын күрергә кәрәк.

— Мейеһенән йыуылған, әммә ауранында ҡалған һәм төпкө аң уны ҡабаттан үҙенә һурып алыуы ихтимал, тиһең инде, — тип ҡабатланы егет.

— Тап шулай. Минең компьютерҙы белгән ейәнем әйтмешләй, кәрзингә ырғытылған мәғлүмәттәрҙе, кәрзин таҙартылғандан һуң да оҫталар компьютерҙың хәтеренән тартып алалар бит, бында ла шуның кеүек.

— Белмәгәнең юҡ, олатай, — тип һоҡланмай булдыра алманы Юламан. — Шунан, уны нисегерәк эшләйбеҙ инде?

— Кәңәшләшәйек хәҙер. Гипноздың тәрәнерәген ҡулланыу кәрәктер, бәлки.

— Олатай, унынына минең көсөм етмәй. Теге «Көлһылыу» әкиәтендәге өйрәнсек мөғжизәсе кеүек: «Мин әлегә тылсымсы түгелмен, тик өйрәнәм генә». — Юламан моңһоу йылмайҙы.

— Икәүләп тырыштырып ҡарайыҡ. Күбен белгәнһең бит инде.

* * *

Нимәлер уларға оҙаҡларға ярамағанын әшкәрткән, ә күҙгә күренмәгән сәғәт гелән текелдәп ашыҡтырып торған кеүек. Фараздарын Шаһиҙәгә һөйләп бирҙеләр. Ҡыҙ гипноз аҫтында тағы ла бер тапҡыр барыһын да иҫенә төшөрөп ҡарарға риза булды. Тик саҡ ҡына эште боҙманылар. Йылан арбаусылар тураһында һүҙ сыҡҡас, ҡарт көтмәгәндә өҙләп ебәрҙе. Ҡарттың тамаҡ төбөндә йөҙәрләгән шөңгөр зыңлағанын ишетеп Шаһиҙәнең бөтөн тәне тартыша башланы һәм ул һушынан яҙҙы. Ҡыҙҙы илла-алла менән саҡ тынысландырғас, бөгөнгә ял иттерергә булдылар, сөнки уның ҡалтыраныуы һаман да үтмәгәйне.

— Һиҙҙеңме, — тине ҡарт Шаһиҙәне йоҡларға оҙатҡас. — Бик оҫта йылан арбаусы булған араларында. Шаһиҙә шуның шаһиты булған. Күрҙеңме, нисек тәьҫир итә был моң уға?

Ярай, бөгөнгә беҙгә лә етер. Иртәгә саф баш менән тырыштырып ҡарарбыҙ. Мөҙҙәте етһә, беҙгә тәғәйен булһа, асылыр ул сер, бер ҡайҙа ла бармаҫ.

* * *

— Нимә күрәһең?

— Ҡыҙыл эңерҙә тау башына үрмәләйбеҙ. Мине күҙҙәрен ҡара сепрәк менән бәйләгән кеше етәкләп алған. Бармаҡтары ҡыпһыуыр кеүек көслө, аяуһыҙ ныҡ тота. Бына тауҙың түшенә күтәрелдек. Туҡтаныҡ. Унда тар ғына ек кеүек урын бар. Шуның эргәһенә килеп тубыҡланды ла күҙенең бәйен сисеп кеҫәһенә һалды. Шул еккә текләгән дә сәйер итеп йырлай. Йыр ҙа түгел был, ниндәйҙер ауаз, бик юғары тонда, мейене түҙгеһеҙ әсеттерә. Уй! — тип асырғанып ситкә тайшанды ҡыҙ.

— Ҡурҡма, был төш кенә, — тип тынысландырҙы Шаһисолтан ҡарт. — Мин һинең ҡулыңды тотоп торам. Нимә күрҙең?

— Яй ғына шыуышып ектән сыбар йылан сығып килә. Арбалғандай теге кешенең күҙенә текләгән. Йылан унан ҡурҡа. Башын ситкә борорға тырыша, утҡа өтөлгән кеүек туғарлана, ыҫылдай, тик был сихырсының күҙҙәре утлы ырғаҡ кеүек. Уй, — ҡыҙ тертләп ҡалтыранды.

— Нимә булды? — тип һораны Шаһисолтан.

— Сыбар йылан ҡотҡарыу ялбарған кеүек миңә ынтыла. Юҡ, юҡ, — тип башын сайҡап иламһырай Шаһиҙә.

— Тыныслан, тыныслан, ҡурҡма, — ти ҡарт. — Бына бит мин һинең ҡулыңдан тотоп торам. Ни булды?

— Усыңды ҡуй, тип бойора миңә сихырсы.

«Шаһиҙә уларға үткәргес булараҡ кәрәк булған, — тип төшөнә гипноз сеансын ситтән күҙәтеп торған Юламан. — Ата-бабалары был төйәкте Нух заманында уҡ ташлап киткәс, был халыҡтың энергетикаһы бүтән. Үтә нык һиҙгер йән эйәһе йылан ят бауырҙарға сер асмай».

— Әйткәнен тыңла, — ти Шаһисолтан ҡарт.

Ҡыҙ тубыҡланып усын ергә һала. Бөтөн тәне ҡалтырап, ирендәре ап-аҡ булһа ла, ҡурҡыуына баш булырға тырыша.

— Йыландың башы йәйпәк кенә. Ул үҙе лә ҡурҡа, — тип бышылдай ул. — Миңә һыйынырға теләй. Әйтерһең дә, мин уны уттан тартып алдым. Уның миңә рәхмәтен тоям. Сихырсының ҡарашы уға йәнә утлы уҡ кеүек килеп ҡаҙала. Яза дауам итә. Ул йыландан ниндәйҙер бер серҙе таптыра, буғай. Ә йылан йәшерә.

Йылан йән әсеһе менән туғарлана, ыҫылдай. Бына ул эсенә тын тултырылған шар кеүек бүртә башланы, түҙгеһеҙ ғазаптан үрһәләнеп ышылдай.

Йән әйәһенең шул тиклем яфаланыуын башҡаса ҡарап тора алмайым мин, — тип асырғанып ҡысҡырҙы Шаһиҙә йөҙөн ҡаплап. — Бына ул тын өрөлгән шар кеүек ҡабарҙы ла шартланы. Ә сихырсы уның эсенән әллә нимә эҙләгән кеүек. — Шаһисолтан ҡыҙҙы гипноздан сығарҙы ла әллә ниндәй хуш еҫле төнәтмә эсереп тынысландырҙы. Ул арала Юламан тышҡа сығып ултырғайны.

«Йылан килеп Шаһиҙәнең усына башын һалды. Ниңә уның усына?»

— Сөнки башҡалар ят бауыр, — тине уның янына сығып ултырған ҡарт. — Хатта йәшәү хаҡына ла асырға ризалатып булмаған серҙәр була. Шәхсән үҙеңде дөйөм мәнфәғәт өсөн ҡорбан итеү. Мин йыландарға әллә ниндәй юғары аң һәм юғары әхлаҡ һалырға тырышмайым. Үҙенең серҙәрен тәбиғәт ныҡ һаҡлай һәм уның һаҡлау саралары донъя яратылырҙан алда уҡ уйланылған. Шуға күрә лә камил тәбиғәт. Беҙҙең ата-бабаларҙың илаһы юҡҡа ғына тәбиғәт үҙе булмаған. Хәҙер беҙ мәжүсилек тип атаған дин төптө аңралыҡтан түгел.

Хоҙай алты көн эсендә был донъяны ятҡан да меңәр йылдар буйы аҡ болот өҫтөндә ата ялҡау кеүек ҡул ҡаушырып ултыра тиһеңме әллә — ул ижадын һәм эшен дауам итә. Беҙ барыбыҙ ҙа уның ҡоралы. Тимәк, тәбиғәт тә, беҙ ҙә Хоҙайҙың дауамы, бер күҙәнәге. Мин шулай итеп ҡарайым.

Мауығам да, ситкә китәм дә барам. Һинең кеүек тел төбөңдән үк аңлап торған аҡыллы әңгәмәләштәр күп түгел бит ул, — тип ҡуйҙы бабай. — Шаһиҙә ошо ерҙең энергетикаһы менән һуғарылған, шуға күрә йылан уға ғына асыла ала. Арбаусы бына шуның менән файҙаланған да инде.

— Тап шулай. Йылан шартлағандан һуң, уның эсен әйләндереп ентекләп тикшерҙе, нимәлер эҙләне, «ләззәт нөктәһе, ләззәт нөктәһе ҡасан?» — тип мығырлай-мығырлай тылсымлы карта ҡараған кеүек әйләндереп-тулғандырҙы, — ти бит Шаһиҙә.

— Ләззәт нөктәһе, ләззәт нөктәһе, — тип ҡабатланы Юламан. — Быны нисек аңларға? Нимәнең ләззәт нөктәһе?

Егет ҡартҡа һорау менән ҡараны. Бабайҙың ҡиәфәтенән уның нимәлер белгәнен шәйләгәйне.

— Был мажарала минең бурысым өзләү менән генә сикләнәме тиһәм... — Өндәшмәй уйлана биреп ултыра бирҙе Шаһисолтан. — Был тарихты бер матур әкиәткә һанап, нишләп ул был китапҡа яҙылған булды икән тип йөрөһәм... Йәл, ныҡлап иғтибар ҙа итмәгәнмен.

— Ниндәй тарих? Ниндәй китап?

— Аша ауылда бер бик уҡымышлы ҡарт була торғайны. Йөҙҙән ашыу йәш йәшәне. Балаларға күҙ тейгәндә, бүҫерҙән йонсоғанда доғаһы менән өшкөрөп биргән тоҙо бик килешә, ти торғайнылар. Бер барғанында мин дә өләсәмә эйәрҙем. Үҙҙәре ниндәйҙер ауырыу тураһында бик мауығып гәпләшкән арала, миңә китап ҡарарға рөхсәт иттеләр. Кәштәләге күп китаптар араһында ҡулдан яҙылған бер сәйер китап иғтибарымды йәлеп итте. Миңә ул ваҡытта ун ике йәштәр тирәһе ине. Олатамдан иҫке яҙыу танырға ҡәҙимге өйрәнгәйнем. Иҫке төркиҙә яҙылғаны, бик күп һандар, ниндәйҙер матдәләрҙең ҡатнашмалары тураһында һүҙ барғаны хәтеремдә ҡалған. Әле иҫкә алып ултырған тарих тигәнем генә әкиәткә оҡшағанға аңлайышлы ине. Шунлыҡтан уны башынан аҙағынаса уҡып өлгөрҙөм.

— Йә-йә, олатай, шунан, — тип түҙемһеҙләнде Юламан әкиәт таптырған бала кеүек.

— Бер заман Ер менән Күк бер-береһенә ғашиҡ булған, имеш. Тик ҡауышырға һис кенә лә әмәлдәре булмаған. Әгәр ҙә мәгәр хыялдары бойомға ашһа, донъяның аҫты-өҫкә әйләнер ине, ти. Тик ғашиҡтарҙың һағышы тотош донъяны ағыулаған, һыуҙар ыуға, һауа һөрөмгә әйләнә башлаған. Нишләһен инде Яратыусы, уларға йылына бер төндә бик аҙ ғына мәлгә булһа ла ҡауышырға форсат биргән.

Йыһандың ергә түңкәрелгән мәле — иң мөҡәддәс, иң изге ваҡыт. Ер менән күктең иң мөхәббәтле сағы.

Шаһитҡа, был хаҡта белеү ярамаған йән эйәһенә, ҡотолғоһоҙ әжәл янай. Сергә шаһит һәр кем был мөғжизә балҡышын күтәрә алмай йән бирә. Шунлыҡтан Ер менән Күк ҡауышҡан был мөҡәддәс төндә бөтә йән эйәләрен дә ҡаты йоҡо баҫа. Дошманлыҡ та, нәфсе лә, һөйөү ҙә — бер нәмә лә сыҙамай — бар тәбиғәт сабый йоҡоһона сума. Йыртҡыс ҡорбанын йыртҡыларға йөрөгән мәлендә, ғашиҡтар бер-береһенең иренenә үрелгән килеш йоҡоға тала... Ел иҫеүҙән, япраҡтар шыбырлауҙан, хатта йылға ла ағыуҙан туҡтап тора...

Танһығын ҡандырған Күк Ерҙең түшенән ҡубып, йәнә 365 көнгә хушлашҡан мәлдә, танһығы ҡанһа ла, һағыныуы бөтмәгән Ер һөйгәненән ысҡынырға теләмәгән ҡатын-ҡыҙ кеүек, бөтөн булмышы менән уға тартыла, артынан эйәрә. Ана шунда барлыҡҡа килгән энергияны, һөйөү ҡөҙрәтен ата-бабалар ер ҡото тип атаған, күрәһең.

— Бына ни өсөн ил ырыҫын ситкә ебәрмәгеҙ, тип әйтәләр икән, — тине Юламан. — Һәм шул төндө — Ер менән Күктең мөхәббәт төнөн — иң зирәк һәм һиҙгер йән эйәһе булараҡ, бары тик йыландар ғына белә, тимәк.

— Йыһан Ергә түңкәрелгән мәлде, — тип уға ҡушылды Шаһисолтан. — Мин дә шулай тип уйлайым, улан. Ғаләмдең ләззәт нөктәһе — бер генә мәл, беҙҙең күҙҙәрҙән йәшерелгән изге мәл.

— Ә, бәлки, был көн, был сәғәт, был минуттарҙы һанап сығара торған формула барҙыр һәм ул китапта яҙылғандыр?

— Уныһын хәҙер әйтә алмайым инде, хәтеремдә ҡалғандары бына шул.

— Ә ул китап ҡайҙа һуң? Шунан ҡарарға кәрәк. Ниндәйҙер һандар ҙа яҙылғайны, тиһең бит.

— Ул ҡарт байтаҡ йылдар элек вафат булған, тинеләр. Донъяларҙың ни хәлгә килгәнен, киләсәген белгәндер әүлиә булғас. Шуға күрә бөтөн китаптарын үҙе менән бергә ҡәбергә һалырға васыят иткән, тип һөйләгәндәре иҫемдә.

— Ниндәй вәхшилек! — тип әйтмәй сыҙаманы Юламан.

— Хөкөм итергә бер ваҡытта ла ашыҡма, улым, — тине һаҡ ҡына Шаһисолтан. — Әгәр ул китаптарҙа ошондай серҙәр йәшерелгән булһа, яуыз әҙәмдәрҙең ҡулына эләгеүҙән ҡурҡҡандыр. Тимәк, егетем, — әгәр ҙә әле

башҡа килгән фаразыбыҙ дөрөҫ икән, һин бына шул сихри мәлдә уяу булырға һәм бурысыңды атҡарырға тейешһең.

— Ҡасан? Ҡайҙа? Ниндәй бурыс? Бына шуларҙы белһәң икән ул.

— Мәле килеп еткәс, асылыр. Һиңә сабыр булырға ла һәр ваҡыт әҙер торорға кәрәк.

* * *

Ай юғарыға күтәрелгән һайын, ниндәйҙер көс Юламанды тауға һөйрәкләне. Егет ҡарышманы. Нисәмә ҡат килеп ҡаҡлыҡҡан биктәр бөгөн ни ғәллә менәндер асыҡ тора. Бына айҙың алтын дүңгәләге тауҙың тас башына килеп ҡунаҡланы. Юламан да, ҡанат ҡаҡҡан кеүек еңел генә, һис бер арыу-талыу тоймай уның артынан менеп етте. Ай нурына ҡойоноп, аяҡтарын салып ултырҙы ла тын ҡалды. Хатта һулышын да әкренәйтте. Бөтөн күңелен сәбәпһеҙ татлы ашҡыныу биләп алды. Ерҙән күккә ләззәт ҡалҡа, бөтөн тирә-яҡты сорнай, сихри моңға күмә. Был халәт яҡшы таныш Юламанға. Һөйөүе иҫән сағында ул донъяны тап ошолай тоя торғайны. Уларҙың донъяһы тап ошо нур менән һуғарылғайны.

«...Һин илама, зинһар. Былай ҙа ғүмеремдә теп-теүәл ике тапҡырға оҙонайттың,— тигәйне Һөйөүе. Ябыҡ йөҙөндә нурланып балҡып торған күҙҙәре генә ҡалғайны.— Мин бит һинең фәрештәң булырға тейеш инем. Керләнеп бөттөм дә, был вазифаға яраҡһыҙ булырмынмы икән инде?»

Ул фани донъяны Юламан армиянан урап ҡайтҡандың икенсе көнөндә ташлап китте. Һөйгәненең иҫәнимен тороп ҡалғанын үҙ күҙҙәре менән күреп китер өсөн генә аҡтыҡ көсөн туплап көтөп алғайны. Уны белгән барыһы ла ышана ине — араларында фәрештә йәшәне. Эйе, уны белгән бер кемдең дә быға шиге юҡ ине. Юламанға иһә шул сафлыҡтың һөйөүен татырға, уны яратырға насип булды. Бындай һөйөү өсөн ғазап менән генә түгел, йәне менән түләргә лә әҙер ине Юламан. Шуға бөгәсә төндә үҙенән нимә талап ителһә, шуны бирергә, йәнен дә, тәнен дә йәлләмәҫкә әҙер ине. Йәнен дәме?

Бына бер саҡ айҙың һипкел баҫҡан нурлы бите шәүлә менән ҡаплана башланы. Күк йөҙөндә болот әҫәре юҡ. Әйтерһең дә, уны ҡалын бәрхәт шаршау ҡаплай кеүек. Донъя әкрен генә тотош ҡараңғылыҡҡа сумды. Ерҙе үлемесле йоҡо баҫа башланы. Ул шул тиклем татлы ине, һис кенә лә түҙер әмәл юҡ. Юламан ни тиклем генә тырышһа ла, күҙ ҡабаҡтарының ҡурғаш кеүек ауырайғанын тойҙо. Һәр бер күҙәнәге аңдан бойороҡ көтөп тормай, ниндәйҙер тышҡы бер ихтыярға буйһоноп берәм-берәм сафтан сыға.

Бына бер саҡ зиһен дә сыҙаманы. Тик булмышының төпкөлөндә бер күҙәнәк кенә уяу ҡалды. Ҡалған. Сөнки тау ҡуйынынан нур көлтәһе күккә атылыу менән, ниндәйҙер ҡөҙрәт Юламанды шул яҡҡа ырғытты. Нимә эшләргә кәрәк икәнен дә белмәй ине егет. Шул саҡ күҙҙәре нур көлтәһен уртаға һындырған ниндәйҙер бер ҡаршылыҡты шәйләне. Үҙ-үҙен онотоп шунда, ялҡын уртаһына ташланды. Таш диуарға килеп ҡаҡлыҡҡандай булды. Ялҡын уны үтәнән-үтә көйҙөрә, сәсенең сытырлап янғанын тоя, түҙгеһеҙ ауыртыуҙан күҙ алдары томалана. Әммә ул тимер диуарҙы йән көсө менән ситкә этеүен белде, тырышлығының юҡҡа ғына булыуын башына ла килтермәне. Ялҡын эсендә йәнен фиҙа ҡылырға әҙер ине. Аҡтыҡ көсөн һалып ынтылғанда, диуарҙың шылғанын тойҙо.

Ниңәлер башына «Ерҙең космосынан рухи компоненттар таралып юғала бара, фәрештәләр менән эльфтар беҙҙе ташлап китә, донъялар араһындағы үткәүел тарайғандан-тарая», тигән уй килде. Фәрештәләр беҙҙе ташлап китә...

...Ҡәберҙән бөтәһе лә таралғас, Юламан ҡыҙыл балсыҡ өйөмөнә килеп йығылды. «Минең дә йәнемде ал, ҡомағай. Ғәҙеллектең әҫәре лә булмаған ҡотһоҙ донъяңдың кәрәге юҡ», — тип аҙарынып ҡысҡырҙы ул Хоҙайға, дымлы балсыҡҡа бармаҡтарын батырып. Шул саҡ ҡулы бер нәмәгә ҡағылды. Башын ҡалҡытып баҡҡайны — конверт. Һөйөүенең ҡулы менән яҙылған. Аптырап һикереп торған егет тирә-яғына ҡараны. Ағас ботағында ҡарҡылдап ҡуйған ҡарғанан башҡа йән эйәһе юҡ. Хатты Һөйөүенең үтенесе буйынса йыһан илсеһе үҙе килтереп ҡалдырғандай тойолдо. «Беҙ бит барыбыҙ ҙа мәңгелектә бергә буласаҡбыҙ, Юламаным. Барыбыҙ ҙа нурҙан туҡылырбыҙ. Шуға күрә һин минең арттан ашыҡма. Үҙеңдең

ерҙәге бурысыңды үтә: һинең өсөн йәнен дә йәлләмәгән бөрәүҙе бәхетле ит. Ул һиңә үҙең кеүек матур һәм аҡыллы балалар табыр. Ә мин һеҙҙең барығыҙҙы ла ҡурсаларшын, һеҙҙең фәрештәгеҙ булырмын. Миңә лә үҙ бурысымды үтәргә форсат бир».

Мәңгелектә ҡауышыр өсөн ерҙәге бурысын үтәргә йәнтәслим тырышты Юламан бығаса... Тырышҡайны. Ҡара упҡынға убылыр алдынан башында шул үкенесе һуңғы әрнеүе булып ялтлап үтте.

Шул саҡ үҙен нимәнеңдер көслө, әммә наҙлы итеп сорнағанын һәм ялҡын ҡуласаһынан йолҡоп алғанын тойҙо Юламан. Иҫен юйғанға тиклем ырыҫлыларҙың күмәклеген һәм үҙенең уларҙың береһе икәнен төшөнөп өлгөрҙө.

* * *

Шаһиҙә ниндәйҙер хәүеф тойоп, күҙен асып ебәрҙе, ни булғанын да аңламай, эргәһенә һалып ҡуйған кеҫә фонарен яҡтыртып тирә-яғына ҡаранды һәм ҡурҡышынан ҡысҡырып ебәрҙе: палатка тәҙрәһенән ике-өс йылан башын тығып тора ине.

Шаһиҙә, йоҡо тоғонан сығырға маташып, борһалана-борһалана палатканың икенсе яғына шылышты. Эскә килеп тулмағандармы тип ҡабаланып палатканың иҙәнен дә яҡтыртты. Яҡтыны ҡабаттан тәҙрәгә төбәгәндә, йыландар юҡ ине. «Аҡылдан шашырға мөмкин», — тип уйланы Шаһиҙә. Үрелеп сәғәтен алды: уныһы туҡтап ҡалғайны. Нығыраҡ уранып, яңынан ятып ҡарамаҡсы булды. Тик йоҡо осҡайны инде. Күңеле тынысланa алмайынса һертелдәп тик тора. Ниндәйҙер көс уны тышҡа һөйрәй, йыландарҙың тиктәҫкә генә йөрөмәгәнен, ниндәйҙер ҡурҡыныс янағанын аңғартырға маташҡандарын һиҙҙергән кеүек. Шаһиҙә тышҡа сыҡты. Күҙгә төртһәң дә күренмәҫ ҡараңғы төн. Ҡолаҡ ярғыс тынлыҡ. Ҡолағы тонғанмы әллә тип башын һелкеп алды: эш үҙендә түгел икәнен аңланы. Ҡоштар ҙа һайрамай, сиңерткәләр ҙә сырламай, хатта йылға ла сылтырамай, әйтерһең дә, ағыуынан туҡтап ҡалған. Шаһиҙә Юламандың тау битләүенә йүнәлгәнен белә ине. Бындай ваҡытта артынан эйәртмәй һәм янына килгәнде лә яратмай

ул. Әммә был юлы шөбһәһе еңде: ҡараңғылыҡҡа күнегә төшкән күҙҙәре менән һуҡмаҡты абайлап, тауға йүнәлде.

Шаһиҙә ғүмере буйы үҙен нимәгәлер әҙерләне: һәр иртә һайын боҙҙай һалҡын һыу менән баштан-аяҡ ҡойондо, йыл әйләнәһенә аҙналар буйы ураҙа тотто. Үҙенә ир-егет ҡулы ҡағылдырманы. Хатта битенән яңылыш ҡына үбеп алырға баҙнат иткән кешеһе лә юҡ ине өсөнсө тиҫтәһен ваҡлаған ҡыҙҙың. Ҡырыҫлығы, ажарлы эт кеүек, сафлығын һаҡланы. Әле иһә мөҙҙәт еткәнен шәйләне. Ул хәҙер тотош яҙмышын, булмышын үҙгәртеп ебәрерҙәй бер мөһим аҙымға тәүәккәлләргә тейеш.

Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй өҫкә йүгерҙе лә тубыҡтан тере ағымға барып керҙе. Йылан ағымы!!! Ҡапыл бөтәһе лә хәтеренә төштө. Күҙҙәрен ҡамаштырып өтөп алған нур көлтәһе... Бөтөн тәнен ялмап алған ут... Ҡурҡыныс сихырсының тауҙың түшендә ялпылдап янып ырһәләнеүе... Сәстәре болоттай туҙрап уға табан йүгергән һылыу... Уның түҙгеһеҙ ғазапҡа дусар булған януарҙай ҡысҡырып йығылыуы...

Ошолар күҙ алдынан үтеү менән, ниһайәт, үҙенең тәғәйенләнешен төшөндө ҡыҙ һәм ихтыяры нығынды. Әммә ләззәтле ойоу ағзаларынан земберләп үтеп хәлен алды, сихыр кеүек татлы йоҡо быуынһыҙ итте, ҡулдары һәленеп төштө, башы күкрәгенә һәленде. Тик ҡайҙалыр алыҫта, аңының төпкөлөндә һулҡылдап торған аяуһыҙ һыҙланыуҙың хәтирәһе генә был тылсымға тотош бирелергә лә йыһан наҙына сумырға ҡамасауланы. Шаһиҙә бөтөн ихтыярын туплап был мәкерле ләззәткә бирешмәҫ өсөн ҡыр талашты. Шул саҡ тау тетрәнеп ҡуйҙы һәм уның тас башынан нур фонтаны урғыла башланы. Фонтандың тап уртаһында Юламандың шәүләһен шәйләгән кеүек булды. Егет гүйә, үҙе ялҡынға әүерелгән дә, шул ут көлтәһендә ырһәләнә. Шаһиҙә йән көсөнә юғарыға табан ырғылды, тик йыландарға урала-тая мәтәлләп барып төштө. Сикәһе менән осло ташҡа төкөнөмө, һушынан яҙҙы. Башын ҡалҡытҡанда нур көлтәһе шиңгән, ә Юламан күренмәй ине. Ҡыҙ шөбһәгә батып, үҙ-үҙен белештермәйенсә, йәнә тороп йүгерҙе. Бына ул егет: бер ниндәй хәрәкәтһеҙ, һушһыҙ. Ялҡынланып яна, тик уны өткән ғәҙәти ут түгел. Әйтерһең дә ул үтәнән үтә, һәр бер сәс бөртөгөнә тиклем электр тоғы менән һуғарыл-

ған. Хатта ул өҫтөндә ятҡан таштар ҙа үтәнән-үтә нурланған. Тотош тау ҡеүәтле энергия менән һуғарылған.

Шаһиҙәнең башында бер генә уйы ла ҡалманы. Үҙе лә ҡалманы. Бөтөн йәнен-тәнен телеп үткән һыҙланыуҙан һушы алынып өнһөҙ-тынһыҙ ятҡан егеттең өҫтөнә ҡапланды ҡыҙ, уның ғазабын үҙенә алырға теләп. Шунда уҡ тәненә меңәрләгән энә ҡаҙалды, әммә: «Юғалттым!» — тигән йән аҙабы, тәндең ғазабына ҡарағанда мең мәртәбә көслөрәк ине. «Уныҡын түгел, минең йәнемде ал!» — тип донъя яңғыратып ҡысҡырҙы ҡыҙ. Тауышы сыҡманы. Ирендәре генә ҡыбырланы. Болот сәстәре электр сымы кеүек сытырланы.

* * *

Улар иҫенә килгәндә, мөҡәддәс ҡауышыуға шаһит булғанына ояլғандай офоҡ ут ҡыҙыл ине. Ә күктән ерҙе һуғарған ләйсән кеүек туҡтауһыҙ бәрәкәт, ҡот һибелә. Йәнтөйәктең ҡото...

## ЙӘШӘ, ЕГЕТ

> Йәшәү яҡшыраҡмы, үлемме — беҙ белмәйбеҙ. Шуға күрә тормошҡа артыҡ һоҡланырға ла, әжәл тураһындағы уйҙан тетрәнергә лә ярамай. Беҙгә уларҙың икеһенә лә бер төрлө ҡарарға кәрәк.
>
> *Махатма Ганди*

Ҡуласа тоташты.

— Are you an angel?* — тип һораны ҡыҙ ҡурғаш кеүек ауыр күҙ ҡабаҡтарын көс-хәл менән күтәреп.

Уның ҡарашында ҡурҡыу, ғәжәпләнеү, ҡыуанырға теләү тойғолары мөлдөрәне. Ҡыҙҙың, ниһайәт, аңына килеүенә шатланып киткән егет был сәйер һорауға

---

* Һеҙ фәрештәме?

ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙе. «Тәненә һылашып торған гидрокостюмлы фәрештәләр ҙә буламы икән ни? Хәйер, хәҙерге заман фәрештәләренең ҡиәфәтен кем белә?!» Моғайын, маңлайындағы фонарҙан ағылған яҡтылыҡ иҙгеләрҙең баш осонда һүрәтләнгән нимб һымаҡ күренәлер.

Иң мөһиме: мөғжизә булды. Инде бер кем дә өмөтләнмәгән мөғжизә бына ул — унын беләгендә ята. Етмәһә, һөйләшә лә әле. Күҙҙәре ҡабат йомолоуҙан һәм тәненең ауырайып китеүенән ҡыҙҙың йәнә һушын юғалтҡанын шәйләп:

— I am a man! A man only![*] — тиергә ашыҡты Айбулат. Йәнен алырға килгән Ғазраилға һанап, ысынтылап әрәм булып ҡуймаһын тағы. — Күҙеңде ас! Ташлап китмә, китә күрмә! Китһәң, кире ҡайтара алмам, — тине егет хафаланып. — Күҙемә ҡара, күҙемә! Ишетәһеңме!

Оҙон керпектәр яңынан ҡалҡты. Был юлы өмөт һәм ҡыуаныстан ҙур булып асылған күҙҙәргә ҡарап, егет тертләп китте лә башын сайҡап ҡуйҙы. Зиһенендә йәшен утылай уй ялтланы. Ни ғәләмәт?! Унын бит был күҙҙәрҙе ҡасандыр күргәне бар. Был ҡуңыр күҙ алмаларында крыжовник емешендәге кеүек йәшкелт һыҙаттарға тиклем таныш! Элекке тормошонан хәтеренә ҡан һауҙырып мисәтләнгән һуңғы күренеш!

Егеттең ҡолағында машина тәгәрмәстәренең ҡолаҡ ярғыс шығырлауы ишетелеп киткән кеүек булды. Бының булыуы мөмкин түгел, тик...

Нимәлер йәнен әрнетеп, семтеп алды, тик иҫтәлектәр юллар мәле түгел.

— What country are you from?[**] — Уйҙарынан арынып өсөн, бары ҡыҙҙың иғтибарын тотоп торор өсөн генә һораны. Ҡәҙимге бер һорау, ожмах ҡапҡаһы төбөндә ундайҙы биреп тормағандары раҫ.

— From Russia.[***] — Ҡыҙ үҙенең тереләгенә һәм балҡыу башлы был йән эйәһенең ғәҙәти әҙәм балаһы икәненә ышана башлағайны, ахыры. — Do you know Urals?[****] — тип шыбырланы ярғыланып кипкән ирендәр.

Ғәҙәти әҙәм балаһы сәйер генә көлөп ҡуйҙы:

---

[*] Мин кеше! Бары кеше генә!
[**] Һеҙ ниндәй илдән?
[***] Рәсәйҙән.
[****] Уралды беләһегеҙме?

— It is small world, isn't it?*

— What do you mean?**

Яҙмыш юлы туғарланып килде-килде лә бер ҡуласаға тоташты.

* * *

— Ҡара, нимә ҡылана әй! — Айбулат, Рияздың ҡаты терһәге төртөлгәнгә һиҫкәнеп, күҙен асты. Ҡайһы арала ҡараңғы ла төшкән. Нығ ҡына ойоп алған, күрәһең. Ә хеҙмәттәше биноклен күҙенә терәгән килеш донъяһын онотҡан. Ауыҙы ҡолағында үҙенең.

— Нимә бар унда шул тиклем? — Айбулат ялҡау ғына кирелде лә турайып ултырҙы. — Ауыҙ һыуың ҡойола бит...

— Мә! — тине тегеһе күҙҙәре һаҙлап. — Ҡара ла кире бир. Тиҙ бул!

Айбулат бинoклде машина эсенән үҙҙәре күҙәтеп ултырған фатирҙың балҡыу тәҙрәһенә табан йүнәлтте лә тертләп китте. Ғәжәйеп һылыу бер ҡыҙҙың һоҡланыулы ҡарашы менән осрашты ул. Балҡып, янып, үҙенә саҡырып торған матур күҙҙәр.

— Кем ул? — тине арҡалары семерләп киткән Айбулат. Биноклде ситкә күсерҙе.

— Әһә, оҡшанымы? — Рияз биноклде эләктереп тә алды. — Һуң шул Азалия бит инде, — тине ул шытырлатып чипсы ашай-ашай. — Сибәр шул, нишана. Ул буй-һын, ул түштәр.

Бары шунда ғына Айбулат ғәҙәттә тыныс, хатта үтә бошмаҫ хеҙмәттәшенең шул тиклем дәртләнгәненең сәбәбен аңлап ҡалды: ҡыҙ тәҙрә ҡаршыһында инәнән тыума килеш баҫып тора. Тулҡынланып тәнен япҡан оҙон сәстәрен болғап, ҡулдарын ҡанат кеүек елпеп, янбаштарын борғослап ниндәйҙер сәйер бейеү башҡара.

Айбулат уңайһыҙланып ҡарашын ситкә алды. Тик күҙҙәре, ихтыярына буйһонорға теләмәйенсә, ҡабат шул яҡҡа ҡайырҙы. Ул арала ҡыҙҙың артына бер дәү ир килеп баҫты ла, сәсенән умыра тартып аҫҡа һөйрәне.

---

* Был донъя тар, шулаймы?

** Бының менән нимә тип әйтмәксеһегеҙ?

— «Кактус» үҙе инде, — тип бышылданы Рияз, иргә ымлап.

Ҡатын йыландай борғоланып ирҙең муйынына һарылды, иренenə үрелде. Тегеһе быны шунда торған карауатҡамы, диванғамылыр төртөп йыҡты ла ауыр пәрҙәләрҙе тартып ҡуйҙы.

Айбулатҡа ошо тәҙрәнең ҡараңғыланыуынан яңы ғына балҡып торған донъя ҡотһоҙ ҡалғандай тойолдо.

— Ни өсөн егеттәрҙең бында дежурствоға атлығып торғанын аңланыңмы инде хәҙер? — тип хихылданы Рияз. — Һиңә ошо көнгә тиклем сират та теймәгәне тиктәҫкә түгел. Көн һайын ошолайтып стриптиз күрһәтеп ала беҙгә.

— Нишләп? Берәй нәмә һиҙенәләрме әллә? — Айбулатҡа йәнә һунарсы ҡомары ҡайтты.

— Юҡ та. Моғайын, киске дозаһын ҡаҙап ала ла шашып китәлер. Башҡа ваҡытта ул шәүлә һымаҡ йөрөй. Бахыр балаһына көн юҡ инде. Үгәй атаһы ла, «Кактус»ты әйтәм, этә лә төртә, быныһы ла бөтөн асыуын шуға төшөрә.

— Нисек инде балаһы? — тип ғәжәпләнде Айбулат. — Был бит әле үҙе бала ғына.

— Артыҡ бала ла түгел инде. Егерменән уҙған. Ун алты йәшендә үк тапһа... Шул саҡтан уҡ һеперелеп йөрөй башлаған инде, малай, ҡандай матурлығын әрәм итеп... — Рияз үкенгәндәй ауыр һулап ҡуйҙы. — Ярар, бөгөнгө тамаша тамам, инде берәй нәмә ҡапҡылап алырға ла була. Һиңә нимә алып киләйем? Бында яҡында ғына «Пышка» бар, ҡыҫтыбыйҙары тәмле.

— Үҙеңә нимә алһаң, миңә лә шуны...

Ул арала эргәнән селәүсен кеүек нескә генә егет менән ҡыҙ һөйрәлеп уҙҙы. Наркомандарҙы әллә ҡайҙан уҡ танып тора Айбулат. «Тегеләрҙең клиентураһы...» — тип һағайҙы. Ысынлап та былар күҙәтеү аҫтындағы подъезға йүнәлде. Домофондан оҙаҡ ҡына шылтыратһалар ҙа, ишек асыусы булмағас, мыштым ғына килеп, сибек кенә миләш төбөндәге эскәмйәгә терәлделәр.

— Сәйе бигерәк эҫе, тота һал, — тип килеп тә етте Рияз. — Мин һиңә лимон менән алдым.

— Тегеләр бит асмай, — тине Айбулат борсола төшөп. — Күрәһеңме, ана клиенттары көшмөрәп ултыра. Бәлки, берәй нимә һиҙәләрҙер шулай ҙа.

— Уларҙа хәҙер клиент ҡайғыһы тиһеңме? Рәхәтләнеп тумарлашалар инде. — Рияз, тәмле итеп көйшәй-көйшәй, эҫе сәйен шөптөрләтеп эсте. — «Кактус» һатыу менән артыҡ маташмай. Ҙурыраҡ партияларҙы һаҡлай ғына, күрәһең. Ныҡ яҡын таныштарына, бәлки, йәшереп кенә бирә башлағандарҙыр, әҙәмдең нәфсеһе тау һымаҡ ҡабарырға ғына тора бит. Үҙҙәренең энәгә ултырыуы ла әле яңы ғына, ахыры.

— Һатыусы үҙе «тырпая» башлаһа, бөттө инде. — Айбулат ҡул һелтәп ҡуйҙы.

Шунан йәнә шикләнеп: — Азалия тигәнең бит миңә туп-тура ҡараны. Әйтерһең дә күреп торған кеүек, — тип үҙенекен тылҡыны. Ҡатындың матур күҙҙәренең тылсымынан һаман ысҡына алмай, әллә ысҡынғыһы килмәй йонсоно егет.

— Ул бит үҙенең быялалағы сағылышына ҡарай, үҙенә үҙе һоҡлана... Теге Нәркәс тигән егет шикелле.

— Ниндәй егет? Нәркәс ҡыҙҙар исеме лә баһа, — тип сәйерһенде Айбулат.

— Теге әкиәттәгене әйтәм. Үҙенең матурлығына үҙе ғашиҡ булған да, һыуҙағы сағылышынан күҙен ала алмайынса һарыға һабышып үлгән, ти, бит бер егет. Аҙаҡтан шул урында һап-һары сәскәләр үҫеп сыҡҡан да, шуларҙы нәркәс сәскәләре тип әйтәләр, имеш.

— Һин шағир ҙа икәнһең. — Айбулат ҡарап тороуға тупһыҙ ғына күренгән хеҙмәттәшенә ғәжәпләнеп һирпелеп баҡты. «Әллә был наркоманкаға ғашиҡ булғанмы?» Күңелендә бер ваҡытта ла үҙен һиҙҙертмәгән көнсөллөк ғәләмәте ҡыбырлап ҡуйҙы. Тик быны иртәгә буласаҡ операцияның уңышлы үтеүе өсөн борсолоу тип уйлағыһы килде.

Һуғыш барған урындарҙа йыл ярымдан артыҡ хеҙмәт итеп ҡайтҡан Айбулат инде йылға яҡын наркотиктарға ҡаршы көрәш идаралығының оператив бүлексәһендә эшләп йөрөй. Ҡорбанын тәүлектәр буйы аңдып ята алғаны өсөн «Һеләүһен» тигән ҡушамат алды, аҙмы-күпме дан да ҡаҙанып өлгөрҙө. Ул ҡатнашҡан операцияларҙың береһенең дә тип әйтерлек уңышһыҙлыҡ менән бөткәне юҡ. Шуға күрә уға «даланлы» тиҙәр, хөрмәт менән ҡарайҙар. Шул уҡ ваҡытта ҡырыҫ холҡонан, ғәҙеллек тип үңәскә йәбешергә тороуынан шыртлаңҡырайҙар. Баштараҡ бер нисә тапҡыр командирҙары менән ҡаты ғына бәрелешеп алды шул, ҡайһы бер кеҫәләргә аҡҡан аҡса ағымын быуынҡыраны, ахыры. Әммә әлегә артыҡ бәй-

ләнмәйҙәр, бәлки, юғарыраҡ торған ҡайһы бер түрәләр шөһрәт балҡышы алтын ялтырауынан кәм йылытмай, тип теймәй торорға булғандыр. Айбулат килтергән данды оҫта файҙаланып, погондарына өҫтәлмә йондоҙсоҡ тағыусылар булды. «Һин йәш әле, өлгөрөрһөң, әйҙә был операцияға етәксе итеп фәләнден фамилияһын ҡуяйыҡ», йәнәһе. Айбулатты дан да, аҡса ла ҡыҙыҡһындырмай әлегә. Ул, моғайын, һаман да һуғыш һөрөмөнән айнып етмәгән. Башында икенсе бер бизмән эшләй. Ул йәшәһен өсөн ғүмерен фиҙа ҡылған кеше, әйтерһең дә уға көн һайын баһа ҡуя: йәшәргә лайыҡһыңмы, әллә лайыҡ түгелһеңме. Ә егет үҙе лә аңғармаҫтан был талапты башҡаларға ла күсерә. Шунлыҡтан уның янында еңел түгел. Етмәһә, бик үк һөйләшеп бармауын, эске тәкәбберлек, хатта әҙәмгә һанамау тип ҡабул итеп, үпкәләп йөрөүселәр бар. Тик оҙағыраҡ эшләгән һайын, уны дуҫ һанағандар ишәйә: талапсан булһа ла эскерле түгел, хәүеф янағанда башҡаларҙың артына боҫа торған холҡо юҡ, иң тәүҙә «амбразура»ға үҙе ташлана. Бына ошонoһо иң мөһиме. Бында ла бит шул уҡ һуғыштағы кеүек, йыш ҡына бысаҡ йоҙөнән йөрөйһөң. Наркобарондарҙың теш ҡайрауы арҡаһында, бер ни тиклем ҡаланан китеп торорға ла тура килде. Хабаровскиҙан ҡайтыуына ай тирәһе генә.

Әле хеҙмәттәше менән йәйҙең һуңғы йылы төндәренең береһендә наркотик һаҡлаусыларҙың фатирын күҙәтеп, машина эсендә ултырыуы. Дөрөҫөрәге, бындағы хәлдәрҙе үҙ күҙҙәре менән күреп баһалар өсөн Айбулат дежурствоға үҙе теләп яҙылды. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, иртәгә бында ҙур ғына партия наркотик килтерелергә тейеш. Бөгөн бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр булмаһа, иртәгә айҙан артыҡ аңдыған «кейек»тәр тоҙаҡҡа эләгәсәк.

Тары ярмалы ҡыҫтыбыйҙы тәмләп ашап ҡуйғандан һуң Рияз йәнә бинокленә тотондо. Теге наркомандар һаман ишек төбөндә тапана, шылтыраталар ҙа асыусы юҡ. Шул саҡ эргәләренән оҙон итәктәрен ялпылдатып, бер юлы ике кеҫә телефонынан һөйләшә-һөйләшә илле йәштәр тирәһендәге ҡатын уҙҙы. Уны күреү менән «сөрөк»тәрҙән елдәр иҫте.

— Азалияның әсәһе Хәтирә ханым. — «Ханым» һүҙендә ниндәйҙер мыҫҡыллау ишетелде. — Реклама агенты булып эшләй. Һөйләгәне аҡса ла аҡса. Күҙе урынында

ла аҡсалыр, моғайын. Өйөндә наркотиктар һатылғанын да, ҡыҙының энәлә ултырғанын да әллә белмәй, әллә белмәмешкә һалыша, — тип бурылданы Рияз.

Айбулат өндәшмәне. Кисә төндә туҙҙырған наркопритонды, ундағы мәхшәрҙе, ҡалалағы күренекле генә кешенең берҙән-бер балаһының шунда әҙәм мәсхәрәһе булып аунап ятҡанын күҙ алдына килтерҙе.

Иғлан ителмәгән был һуғыштың осо-ҡырыйы булырға оҡшамаған. Һуңғы осорҙа, айырыуса операцияларҙан һуң, Айбулатҡа үҙҙәре бушты-бушҡа бушатып йөрөгәндәй тойола башланы. Улар төн йоҡоларын, ғүмерҙәрен аямайынса ҡотҡарырға тырышҡан бәндәләрҙең һис кенә лә ҡотолорға теләге юҡ.

— Кисә оҙаҡ маташтығыҙмы? — тип һораны Рияз, Айбулаттың һаман ойоңҡорап ултырғанына ишаралап.

— Алыуы ҡыйын булманы. «Ҡабан» менән «Динамит»тың төнгө ун берҙә килере билдәле ине бит инде. Уларҙың елкәләренә ултырып тигәндәй бәреп индек. Алйып ятҡан бер иҫәрҙең бысаҡ һелтәп килеп сығыуын иҫәпкә алмағанда, майланғандай үтте. «Тауар»ҙы ла байтаҡ алдыҡ. Затлы ҡунаҡ килеүгә, «Ҡабан»ды әйтәм, әҙерләнгән булған инде. Тик был «барыга» УВД-лағы бер подполковниктың «һауын һыйыры» булып сыҡты. «Ситлек»кә килтереп бикләгәс: «Минең ишегемә майорҙар менән подполковниктар ҙа тырнаҡ осо менән генә сиртеп инә», — тип аҡырына башланы. Етмәһә, бер депуттатың малайы тырпайып ята. Уны аралайым тип атаһы килеп етте.

— Әй, уларына түрәләрҙең башы ауыртһын...

— Шулайын шулай ҙа, — тине Айбулат. — Тик, бер уйлап ҡараһаң, депутат та, улы ла йәл. Тере мәйет инде, оҙаҡҡа сыҙарлыҡ түгел, сереп бөтөп бара. Уны йонсотоп йөрөткәнсе, аяҡ һуҙғанға тиклем ата-инәһе үҙҙәре доза биреп тотһалар, мәрхәмәтлерәк булыр ине. Аҡсалары бар бит инде.

— Бәлки, дауалап булыр, тип өмөтләнәләрҙер.

Айбулат ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы.

— Өмөтһөҙ — шайтан... — тине Рияз. — Тайҙыҡ бынан. Алмаш килде.

Күҙәтеүҙән бушауҙарына, иртәгәге операцияла ҡатнашасаҡ бер нисә кешене начальникка саҡырҙылар.

— Оператив мәғлүмәттәр буйынса, «Кактус»ҡа килтереләсәк наркотиктарҙы зонала һатыр өсөн колонияға

индерергә йыйынғандары билдәле булды. Унда героиндың бер дозаһы ике-өс тапҡырға ҡимmәтерәк торғанын иҫәпкә алып, наркобарондар юл бер асылғанда күберәк индереп ҡалырға тырышасаҡ. Шуға күрә операцияның бик ҡатмарлы булыуы бар. Һәр кем үҙенең бурысына етди ҡараһын.

— Ә ниңә «зона»ға тапшырған ваҡытта алмайбыҙ? — тип һораны егеттәрҙең береһе.

— Ул каналды киләсәккә һаҡлайбыҙ. Ныҡлы контролдә тотҡанда, балыҡты тағы бер тапҡыр ҡаптырып булмаҫмы? — тине начальник. Һәр береһенең ҡасан нимә эшләргә тейешлеген ҡабаттан ентекләп тылҡығандан һуң, китергә рөхсәт булды. — Хәҙер ял итегеҙ.

Дөйөм ятаҡҡа ҡайтып барышлай Айбулат «Кактус»тың, йәғни Азалияның иренең, ни өсөндөр үҙен артыҡ иркен тотоуы, башҡа наркотик һатыусылар һымаҡ абай булмауы хаҡында хәүефләнеп уйланы. Үҙенең эҙенә баҫҡандарын һиҙеп, артын таҙартҡан да яңылыш юлдан ебәрергә итмәйме икән? Бәлки, артында бик ҙур чиндар ҡурсалап торалыр. Ә, бәлки, тәжрибәһеҙлеге арҡаһында вайымһыҙҙыр. Кешенең хатаһында өйрәнә алғандар һирәк. Бер нисә тапҡыр янһаң ғына һыуыҡ һыуҙы ла өрөп ҡаба башлайһың. Айбулат, үҙенә һөнәренең серҙәрен асып биреп, аҡыл өйрәткәндән һуң ҡайһылай шаңҡып йөрөгәнен иҫенә төшөрҙө.

...Эшкә яңыраҡ ҡына урынлашҡан ваҡыты. Дежурстwoһын тапшырып тора ине, хеҙмәттәштәренең береһе саҡырып алды.

— Данлыҡлы опер алдында хөрмәт менән башыңды эй! Бына кемгә тиңләшергә кәрәк беҙгә, — тип уйынлыысынлы һөйләнә-һөйләнә мыҡты кәүҙәле, асыҡ йөҙлө бер егет янына алып барҙы. Айбулат үҙенә-үҙе ышанмай күҙҙәрен селт-селт йомоп алды: ҡаршыһында бала саҡта бер ишек алдында уйнап үҫкән Марсель тора. Әле шул ваҡытта уҡ уның ҡушаматы «Бандюган» ине. Аҙаҡтан Айбулаттар яңы микрорайонға күсеп китте, тик ҡала бәләкәй бит, Марселдең наркомандар менән буталғанын, үҙе лә шаярып маташыуын ишеткеләгәне бар ине.

Яҡташы ҡосаҡ йәйеп килеп күреште лә:

— Нимә, «Атаҡ, Батима, һин дә былдамы ни?» тигән әбей һымаҡ күҙең шаҡмаҡланды? — тип шарҡылдап көлдө. — Ә мин һинең бындалыҡҡа аптыраным. Тәртипле

генә, моңһоу ғына әсәй малайы була торғайның, Хыялбай.

— Ҡушаматты ла онотмағанһың. — Айбулат ысынлап та ғәжәпләнде. Ғәҙәттә бит ҙурыраҡтар бәләкәйҙәргә иғтибар ҙа итмәй. Ә уларҙың йәш араһы өс-дүрт йыл тирәһе. Бала саҡ өсөн был — ҙур айырма.

— Эш буйынса килдем дә хәлеңде беләйем әле тинем.

— Һин дә Өфөләме, әллә үҙебеҙҙәме? — тип ҡыҙыҡһынды Айбулат.

— Үҙебеҙҙә, республикала иң күп наркота өйөрөлгән «мул» төбәкте ташлап, бында йөрөйҙәр тиме ни? Һеҙҙең бит бында бишегеҙгә бер һөйәк. Әйҙә, һин дә ҡайт, йөрөмә йонсоп. Өлгөрмәйбеҙ әй. Күрәһеңме, йә засадала, йә өҫтәл артында ултырыуҙан ҡорһаҡ үҫеп китте. — Марсель Айбулаттың мускулдары уйнап торған тығыҙ тәненә, һомғол һынына хуплап ҡарап алды.

— Кәзә кәбеҫтә баҡсаһына ингән, тип уйламаныңмы? — тине яҡташы тышҡа сыҡҡас, тәмәкеһен тоҡандырып.

— Юҡ, — тип ихлас яуапланы Айбулат. — Уйлап өлгөрмәнем. Унан, күрешмәгәнгә лә байтаҡ йылдар үтеп китте бит. Үҙгәрәбеҙ ҙә инде.

— Дөрөҫөн әйткәндә, әҙәм балаһының булмышы үҙгәрмәй ул, мырҙам, — тине Марсель етдиләнеп. — Штукатурканы алмаштырып була, ә асыл шул килеш ҡала. Йәшәй-йәшәй шуны һынайым. Минең юл билдәле ине бит инде: йә баррикаданың был яғында, йә теге яғында. Бер осор наркоман булыу хәтәр һаналды бит. Шунда аҙыраҡ тартыштырҙым — оҡшаманы. Ни өсөн тиһәң, миңә тормоштоң үҙе ҡыҙыҡ. Мин йәшәргә яратам. Иҫәр саҡта кеше ҡотороғона бирелеп кенә йөрөлгән. Хәҙер аңлайым: ата-әсәһе комбинатта эшләгән аҡсалыраҡ ғаиләләрҙең балаларын махсус рәүештә аулағандар. Ҡыҙғаныс, минең элекке дуҫтарҙың күбеһе баррикаданың теге яғында ҡалды. Байтағы күптән гүр эйәһе булды. Ҡайһы береһе һаман һөйрәлеп йөрөй. Ә миңә ул донъяны белеүем бик йәтеш булды. Элекке әшнәләрҙе туплап алғанмын да тыуған милиция мәнфәғәттәренә хеҙмәт иттерәм генә. Исмаһам, шулай булһа ла файҙалары тейһен ватаныбыҙға. Татыу йәшәйбеҙ.

— Нисек инде татыу? — тип ғәжәпләнде Айбулат.

— Һин был системала күпме эшләйһең әле? — Марсель һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы.

— Ике ай...

— Ике ай ғына булһа, ғәфү итәм... Шулай ҙа һиңә шәп кенә ликбез кәрәк, яҡташ мырҙа. Бушһыңдыр бит? — Айбулат баш ҡаҡты. — Бынан арыраҡ бер һырбар бар. Ҡара, уйламағандан шиғыр килеп сыҡты, — тип көлдө Марсель. — Һырбар бар — һыра бары. Алыҫыраҡ та, уның байы түрә-ғараның күҙенән аулаҡ.

Тыҡрыҡтан боролоп, оло урамға ғына сыҡҡайнылар, машина пипелдәткәне ишетелде. Айбулаттың ике туған ағаһы Иршат, ауыҙ йырып, ҡул болғап тора: эш буйынса килдем дә хәлеңде белергә булдым, йәнәһе. Ҡайһылай хәстәрлекле булып киткән бөтәһе лә.

— Бына ҡайҙа ул яҡташтар йыйыны, — тине Марсель, шау-гөр килеп һаулыҡ һорашҡас. — Бәхетлененең ҡунағы бер юлы. Әйҙәгеҙ, үҙем һыйлайым.

Оҙаҡ ултырып ташланылар ул кистә. Данлыҡлы опер йәш коллегаһына һөнәрҙең ҡолаҡтан ҡолаҡҡа, ҡолаҡтың да иң ышаныслыһына ғына тапшырыла килгән байтаҡ ҡына ҡиммәтле нескәлектәрен асып һалды.

— Үҙ биләмәмдә наркота һатҡандарҙы — мин уларҙы наркос, йәғни, мәҫәлән, наркосауҙагәр тип йөрөтәм — бөтәһен дә беләм. Тейешмен, эшем шул, — тип эре генә башланы ул. — Һатыусыны ғына түгел, алыусыларының да күбеһен йөҙгә үк танып торам. Уларҙың бит һәр береһе тип әйтерлек закон боҙоп иҫәптә тора, наркотаға бер туҡтауһыҙ аҡса кәрәк — артыңды таҙа тотормон тимә.

Ул сауҙагәр йораттарын ҡулға алыр өсөн бер нисә сәғәт етер ине. Тик миңә кем быны рөхсәт итһен? Прокуратура менән судҡа бит иҫбатлау кәрәк. Бик тырышһам, иҫбатлауын да булдырам мин уның. Сөнки, әйтәм бит, наркомандар менән татыу йәшәйем. Улар миңә һуңғы яңылыҡтарҙы ташып тора, шуға күрә ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә беләм, тигәндәй.

Быға тиклем үткән-һүткән официант ҡатындарҙы ҡарашы менән ҡапшап илтифатһыҙ ғына ултырған Иршат усы менән өҫтәлгә шапылдатып:

— Белгәс, ултырт һуң, дуҫ! Иртән подъезға сығырға имәнес бит, ҡайҙа ҡарама — шприц, — тип ҡысҡырып ҡуйҙы.

— Ярай һуң, атыу. Баш өҫтө, ханым-солтаным, телә-геңде үтәнек тә, береһен дә ҡалдырмай, һыпырып төрмәгә тыҡтыҡ, ти. Ә бит тәбиғәт бушлыҡты яратмай. Ҡулға алынған бер һатыусы урынына күҙ асып йомғансы икәү-өсәүһе барлыҡҡа килә.

Был — мәсьәләнең бер яғы. Икенсе яғы тағы ла хәтәрерәк: бер «соҡор» ҙа ҡалмаһа, наркомандар нимә эшләй? Бөтәһе бер юлы «тырпайыу»ҙан туҡтаймы?

— Таба алмаһа, этемә барһынмы? — тине Иршат вайымһыҙ ғына.

— Тот ҡапсығыңды. Улар бит ҡала буйлап, район буйлап, ил буйлап темеҫкенеп сығып китә. Яңы «соҡор» эҙләй, шыуышып булһа ла йөрөй, доза тапмайынса туҡтамай. Был — баҙар ҡануны: ихтыяж бар икән, тәҡдим буласаҡ. Тик ул ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү ни тиклем ҡыйыныраҡ булһа, наркотаның хаҡы ла шул тиклем арта. Төшөнәһеңме шуны? Наркоман таба ул аҡсаны, тапмай сараһы юҡ — берҙән-бер теләге, йәшәү маҡсаты — шул доза бит инде. Тик нисек таба? Пенсионерканың һуңғы аҡсаһын талап ала, өй баҫа, урлаша, үлтерә. Притон ябыу менән беҙ башҡа енәйәттәрҙе арттырабыҙ. Тик шул ғына.

Айбулат менән әле бер кем дә былай асыҡтан-асыҡ һөйләшкәне юҡ ине. Мәсьәләгә шулай ҡарарға ла мөмкин икәне уны бик ныҡ аптыратты.

— Абзый, һин миңә быларҙы нимә тип һөйләйһең? — тине ул нисек уйларға ла белмәйенсә. — Әгәр ҙә мин ошо һүҙҙәреңде берәй тейешле урында ысҡындырһам?

— Тормошто белһен яҡташ мырҙам, тип тырышып ятҡан көн, — тип үрелеп бармаҡ остары менән генә уның арҡаһынан ҡаҡҡан булды Марсель. — Ысҡындырһаң, абзыйың «бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп» була инде, наркостары менән бергә зәңгәр күкте шаҡмаҡ аша ғына күҙәтә башлай.

Ул арала официант һыра килтерҙе. Иршат сумкаһынан ҙур ғына киҫәк ҡаҡланған йылҡы ите сығарҙы.

— Мәсет янындағы бер киоскыла хәтәр тәмле билдәмә була. Өфөгә килгән һайын шунда барып урайым, — тип папирос ҡағыҙы һымаҡ үтә күренмәле генә телеп ултыртты ла береһен алып тел өҫтөнә һалды. — Хилүәт...

Ә Айбулат өс-дүрт кенә йәшкә өлкәнерәк был икәү янында үҙен бала-саға һымаҡ тойҙо, ишеткәндәрен ни-

сек ҡабул итергә белмәй аптырап ултыра бирҙе. Марселдең һөйләгәндәре менән ризалашҡыһы килмәһә лә, уны кире ҡағырлыҡ, бәхәсләшерлек дәлил тапманы әлегә.

Быларҙың ҡатлы-ҡатлы итеп, шартына килтереп һүгенә-һүгенә тоҙло-боросло көләмәстәр һиптергәнен тыңлар-тыңламаҫ ултырҙы ла һүҙҙе йәнә элеккегә борҙо.

— Тимәк, һин, притондар булырға тейеш, тиһең инде?

— Тейеш кенә түгел, яҡташ мырҙа, — тине Марсель ләззәтләнеп һыра һемерә-һемерә. — Кәрәк. Мотлаҡ кәрәк. Шуға күрә биләмәмдә һәр ваҡыт дүрт-биш притонды ҡанатым аҫтында тотам мин. Үҙемдекеләргә шик төшмәһен өсөн йәнә ике-өсөн ситтән генә күҙәтәм. Артыҡ шаша башлаһалар йәки яңылары барлыҡҡа килһә, уларын төрмәгә оҙатып, эшемде күрһәтәм. — Шунан бармағын янап йылмайып ҡуйҙы. — Һин уйлама, мырҙа, ҡулға эйәләштерелгән «ҡомаҡ»тан бик күп файҙа күрергә була, башың эшләһә.

— Мәҫәлән? — тип ихлас ҡыҙыҡһынып китте Иршат.

— Беренсенән, уларҙың бөтәһе лә минең йәшерен агент. Улар аша бөтөн яңылыҡты белеп тораһың. Шунһыҙ — ике ҡулһыҙ. — Ҡара, мин бит бөгөн тик шифыр менән һөйләшәм. Притон бит ул, культурно ғына итеп әйткәндә, наркомандарҙың аралашыу клубы. Әгәр ҙә шул клубтың хужаһы миңә тоғро икән, ә тоғро булмай ҡайҙа барһын, мин бит уны теләһә ҡасан юҡҡа сығара алам — ул наркомандарҙы ғына контролдә тоторға түгел, етдиерәк енәйәттәрҙе лә асырға ярҙам итә. Уларҙың клиенттары араһында беләһеңме ниндәй акулалар бар? Тимәк, наркос — минең иң яҡын ярҙамсым. Уң ҡулым тиһәң дә була.

— Фәстереңкерәмәйһеңме, абзый? — Айбулат тағы ла ныҡыраҡ уйға батты. — Ярай, бер файҙа — мәғлүмәт икән, ти. Шунан?

— Мәғлүмәт аҙмы һиңә? Мәғлүмәткә хужа булһаң, һин донъяға хужаһың, тиҙәрме? Дөрөҫ әйтәләр. Бына шуның өсөн дә иң шәп опер һаналам мин. Икенсенән, үҙ сауҙагәрем булмаһа, кәрәк ваҡытта ҡайҙан наркотик алам?

Был һүҙҙәрҙән Айбулат сәсәп китте, башҡалар ишетмәйме тигәндәй тирә-яғына ҡаранып алды. Эш көнө аҙағына яйлап тула башлаған был ҙур ғына зал. Ҡәҙимге гөжләп тора. Әгәр ҙә эргәһендә, ауыҙын йырып, ағаһы

ултырмаһа, Марселдең был лыбырлауын берәй мәкерле ауға эләктерергә маташыу түгелме, тип шикләнергә лә булыр ине.

— Беҙҙең эштә, беләһеңме, күпме наркота кәрәк? Миңә хәбәр ташыған наркомандарға нисек түләй тип уйлайһың? Улар бит күҙең матур тип кенә баш эйеп йөрөмәй. Дөрөҫ, хеҙмәттәшлек итеү хаҡына мин ҡасандыр уларҙы төрмәнән йолоп ҡалғанмын. Тик был серек йәндәр бит рәхмәт тигәнде белмәй ҙә, белергә лә теләмәй. Гел генә ҡурҡытыу ҙа бер-ике айҙан файҙа бирмәй башлай. Сыбыртҡы янында перәник тә булырға тейеш. Ә улар өсөн иң татлы перәник шул наркота инде. Башҡа кәрәктәрен әйтеп тә тормайым. Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың, тигәндәй, эшләй-эшләй үҙең төшөнөрһөң әле. Шулай итеп, тыуған илем һәм халҡым алдындағы бурысымды уңышлы атҡарып сығыр өсөн, минең мотлаҡ рәүештә наркота ала торған урыным булырға тейеш. Төшөндөңмө, яҡташ мырҙа?

— Ниндәй бысраҡҡа килеп юлыҡтым, тип көйөнөп киттеңме әллә, ҡустым, — тип һүҙгә ҡушылды Иршат ағаһы. — Башыңды ҡатырма, тормош ул — ормош, тип ҡара ла ҡуй.

— Ҡара әле, беҙҙең икебеҙҙә лә шәп шағир әрәм булып йөрөй бит, Иршат. Шәп әйттең! — тип хупланы Марсель. — Тормош ул — көрәш, тип тә өҫтәп ҡуйырға була. Сибәркәй, — тип ҡысҡырҙы ул эргәнән үтеп барған официантҡа. — Заказды ҡабатлайбыҙ. Егеттәр, иҫеғеҙҙә тотоғоҙ, үҙем түләйем.

— Аҡса ла алаһыңмы? — тип һораны Айбулат.

— Аҡса? — Опер күҙҙәрен ҡыҫа биреп көлөмһөрәп торҙо. Шунан Иршатҡа ҡарап:

— Яҡташ, ҡустыңды тот. «Һатлыҡ! Коррупционер! Беҙҙең сафтарҙа әүермән!» тип сығып сапмаһын. Тыныслан, мырҙа: алам. Аҙыраҡ үҙемә лә ҡалдырам, әлбиттә. Ас оперҙан файҙа юҡ. Засадала эсең аслыҡтан бығырлай башлаһа, нимә эшләрһең? — тип хахылданы ла етдиләнде. — Мин дә кеше бит, мырҙа, бисәм, балам бар. Кейем-һалымһыҙ ҙа йөрөп булмай. Йолҡош оперҙың абруйы буламы? Өлкәнәйгән һайын, дарыу-фәләндең дә кәрәге арта. Эшебеҙ нервный икәнен үҙең беләһең.

Тик ас тамағым, тыныс ҡолағым, тип быныһына ҡул һелтәргә лә булыр ине. Ә бит, үҙең белмәгән нимә бар, беҙҙең система дәүләт тарафынан уҙа барһа ҡырҡ

процентҡа тәьмин итеЛә, ҡалғанын үҙебеҙ табабыҙ. Ә мин ҡайҙан табырға тейеш? Күпме үҙ кеҫәмдән сығарайым? Шуның өсөн иң йәтеше, иң ғәҙеле лә тип әйтәйек — бер нисә наркосты ҡалпаҡ аҫтына алырға ла информация менән наркотанан башҡа, аҡса ла һауып торорға. Тир түгеп тапҡан малы түгел, журналистар дөрөҫ яҙа — үлем менән һатыу итәләр — әйҙә, уларға ҡаршы көрәшеп, көн-төн тир түккән милиция менән бүлешһендәр аҙыраҡ. Ә мин, үҙ сиратымда, уларҙың эше сәскә атһын өсөн хәстәрлек күрермен.

— Тимәк, ысын наркобарон һин үҙең инде, — тип һығымта яһаны уларҙы йотлоғоп тыңлап ултырған Иршат ихтирам менән.

Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәгән Айбулат урынынан уҡ тороп китте, нишләргә белмәй, ҡабат ултырҙы.

— Был бит коррупция, — тине ул асыу менән.

Ҡәнәғәт ҡиәфәт менән һыраға йомолған Марсель, себен ҡыуалаған шикелле, ҡул һелтәп ҡуйыу менән сикләнде.

— Юҡ, — тип үҙенекен тылҡыны Айбулат. — Әгәр ҙә һөйләгәндәрең дөрөҫ икән, беҙ бер ваҡытта ла был буҡ соҡоронан сыға алмаясаҡбыҙ.

— Аппетитты боҙма инде, мырҙа, — тине Иршат, әңгәмәне көлкөгә һабыштырырға тырышып. — Унан һин тиҙәккә икенсе төрлөрәк, тормошсаныраҡ ҡарап өйрән. Ул бик шәп ашлама ла бит әле.

Һауа етмәй башлағанын тойоп, Айбулат тышҡа сығып китте. Бер аҙ тора биреп кире ингәнендә Иршат ағаһы:

— Яҡташ-дуҫты тейешле ергә заявить итергә киттеңме әллә, тип шыртлаңҡырап ултырыла ине, — тип тупһыҙ шаяртып ҡаршыланы.

— Тимәк, — тине Айбулат уның һүҙҙәренә иғтибар итмәйенсә, — наркотик таралыуға ҡаршы көрәшеү һылтауы менән үҙ мәнфәғәтен ҡайырған теләһә ҡайһыбыҙҙы хәҙерҙән тотоп бикләһәләр ҙә була?

— Иң башлы һәм иң егәрлеләрҙе генә, — тип аныҡланы Марсель, һынсыл ҡарап. — Хәйер, дөрөҫ әйтәһең, сыпраңлай башлаған теләһә кемде, — тип өҫтәне.

Айбулат быны: «Һинең ише эш кешеләренең маҙаһына тейгәндәрҙе — иң беренсе сиратта», — тип аңланы.

Осрашыуҙың осраҡлы булмағанын, «идеалист» улын, исмаһам, саҡ ҡына ергә төшөрөп алырға кәрәклеген хәстәрләп атаһының махсус ойоштороғанын Айбулат ҡайһылыр арала төшөнгәйне инде. Аңланы ла эстән генә атаһына рәхмәт әйтеп ҡуйҙы. Ысынлап та, эшендә быға тиклем сәйерһенеп йөрөгән бик күп нәмәләргә күҙҙе асты был опер.

* * *

Дөйөм ятаҡтағы бүлмәһенә саҡ ҡайтып йығылһа ла, йоҡлап китә алманы Айбулат. Булмышындағы һиҙелер-һиҙелмәҫ үҙгәрешкә сәйерһенде: боҙ йөрәккә йылымыс тамсы тамып торған һымаҡ. Ихтыярын йыйып, тәҙрәләге наркоманканың һомғол һынын күҙ алдынан ҡыуҙы. Шул саҡ иртәгәге операция ваҡытында уның менән күҙмә-күҙ осрашыу ихтималынан елкенеп китте. Тороп уҡ ултырҙы. Арест ваҡытында үҙен нисек тотор? Төрмәгә ултыртһалар, нимә эшләр? Ә балаһы?

Быға тиклем Айбулаттың күңелендә наркомандарға ҡарата ытырғаныу ҡатыш ерәнеү, иң күп тигәндә лә, кәмһетеүле йәлләүҙән башҡа тойғо юҡ ине. Хәйер, бер йыл эсендә уларҙың төрлөһөн күрҙе. Хатта, теләһә кемдең наркоман булып китеүе мөмкин, тигән һығымтаға килде. Тик был упҡынға һәр кемдең үҙ юлы. Бәғзеләр беренсе тапҡыр ҡыҙыҡ өсөн генә татып ҡарай. Кемдер дуҫтарына эйәрә, уның да хәтәр булып ҡарағыһы килә. «Бер-ике тапҡырҙан нимә була, теләһәм, шунда уҡ туҡтайым», — тип үҙен үҙе алдай. Ҡайһы берәүҙәрен, үҙҙәренә ҡол итер өсөн, яуыз бәндәләр ҡурҡытып, мәжбүр итеп өйрәтеп ала. Бигерәк тә фәхишәләр араһында шундайҙар йыш ҡына осрай.

Наркомандар араһында тәрән белемле, фекерле, тормоштоң мәғәнәһен, үҙенең тәғәйенләнешен эҙләгән интеллектуалдарҙы ла осратҡыланы. Күңеле менән илаһилыҡҡа, юғарылыҡҡа олғашҡыһы килеп бер-ике-өс тапҡыр наркотик ҡулланып ҡараған да ғорур уйлы фәйләсуфтан сөрөк наркоманға әйләнгәнен абайламай ҙа ҡалған. Был Азалия шикелле, ятраҡан кешеһенә эйәреп, әүәсләнеп киткәндәр ҙә быуа быуырлыҡ.

Ғүмере ҡыҫҡа бахырҙарҙың. Бер нисә йыл эсендә был әҙәм аҡтыҡтары күҙ алдында тере килеш сереп бөтә. Притондарҙа аунап ятҡан, инде аяҡтарына ла баҫып тора алмаған имәнес заттарҙы, инде уларҙы кеше тип әйтерлек тә түгел, Айбулатҡа әллә күпме һөйрәкләп сығарырға тура килгәне бар.

Күп тә үтмәй, наркотикка күнеккән тәндең һәр бер күҙәнәге, доза талап итеп, дер һелкетә башлай. Инде ләззәт онотола, аҙға ғына булһа ла ғазаптан ҡотолоу өсөн кәрәк был ағыу. Ломканан арынам тип наркоман дуҫ тигәнен һатырға, ятҡанынан ваз кисергә, иң ғәзиз кешеләренең ғүмерен ҡыйырға әҙер. Был шарттарҙа наркомандарҙа әҙәмлек тигән нәмә бик тиҙ юҡҡа сыға. Уларҙағы хәйлә, мәкер, ике йөҙлөлөк, ҡанһыҙлыҡ һәм оятһыҙлыҡтан Айбулат баштараҡ шаңҡып ҡала торғайны. Тора-бара күнегә төштө, тик быға өйрәнһәң, наркотаға ҡаршы көрәшеп булмайҙыр ул. Еңеләһеңдер.

Ә был Азалия тигәндәре, тышҡы ҡиәфәтенә ҡарағанда, энәгә ныҡлап ултырып өлгөрмәгән булырға тейеш.

«Өңдәрен бик ваҡытлы туҙҙырабыҙ. Ихтыяры булһа, бәлки, туҡтар», — тип ниндәйҙер ҡәнәғәт өмөт менән уйланы Айбулат. Тынысланып ойоп барған саҡта бөгөнгө көндөң һуңғы күренеше булып, әлеге шул матур күҙҙәр һәм уларҙың балҡыу ҡарашы иҫенә төштө. «Шул күҙҙәрҙе үҙеңә һоҡландырып ҡарата алһаң ине ул...» — тигән теләк менән йоҡоға китте.

* * *

Икенсе көндө операцияны көтөлмәгән сәбәптәр арҡаһында иртәрәк башларға тура килде. Етмәһә, наркокурьерҙарҙың икеһе лә ҡоралланған булып сыҡты. Ишектән бәреп ингән ОМОН егеттәрен пуля менән ҡаршы алдылар. Айбулат килеп ингәндә, курьерҙарҙың береһе ҡанһырап иҙәндә ята, икенсеһе яраланған ҡулын ҡыҫып тотҡан килеш ванна ишегенән ынтылып һаман атырға маташа ине.

Уны ырғыта тибеп, тимер «беләҙек» кейҙергән арала төпкө бүлмәнән ҡолаҡ ярғыс сырылдау ишетелде. Өс бүлмәле фатирҙың ҡараңғы мөйөшөнән егеттәр «Кактус»ты һөйрәп сығарып маташа. Ә сәсе-башы туҙған

ҡатын, егеттәргә оса-ҡуна уны яҡлаша. Атыш, ҡан ҡойоштан ҡыҙышҡан Айбулат ҡатынды йән асыуы менән йолҡоп алды ла эргәләге диванға бәрҙе. Тегеһе һикереп тороп ырғырға ынтылған арала ҡулынан шаҡара тотоп, тимер беләҙек кейҙерҙе. Битендәге тырнаҡ эҙҙәренән ҡан һарҡып торған Рияз:

— Рәхмәт, туған, — тип терһәге менән төртөп үтте. Бары шул саҡта ғына Айбулат был албаҫтыла кисә икеһенең дә тыныслығын алған һылыуҙы таныны.

Тимер һалҡынлығын тойоу менән шымып ҡалған ҡатын, Айбулатҡа туп-тура ҡарап, оҙон бармаҡлы ҡулдарын һондо:

— Ҡотҡар, — тип бышылданы ул матур күҙҙәрен тонйоратып. Керпегенең осонда йәш тамсыһы дерелдәне, ә ҡарашында ялыныу ҙа, һоҡланыу ҙа, буйһоноу ҙа бар.

— Үәт әртис, — тип лысҡылдатып төкөрҙө быға шаһит булған Рияз. — Яңы ғына күҙҙе соҡоп алырға әҙер ине. Ҡотҡар, имеш.

Ул арала «ашығыс ярҙам» машинаһы килеп етте. Врачтар йән бирергә ятҡан курьер менән маташа башланы. Тентеүгә тотонған егеттәр, өйҙөң аҫтын-өҫкә әйләндереп, наркота эҙләй, икенселәр, курьерҙар алып килгәндәрен бүнәтәйҙәргә күрһәтеп, протокол тултыра. Начальство килеп тулды. Һәр ваҡыттағыса ҡым-ҡырыз. Ул арала фатирында нимәләр булып ятҡанын берәй күршеһе шылтыратып хәбәр иткәндер, күрәһең, күкле-йәшелле төҫкә кергән әсәй кеше — реклама агенты ҡайтып инде. Ошо мәшәҡәттәр араһында Айбулат: «Ҡотҡар мине», — тип бышылдаған сейә ҡыҙыл ирендәрҙе һәм мөлдөр күҙҙәрҙе бер генә минутҡа ла онотманы. Бөтөн тормошон аҫтын-өҫкә әйләндергән, ғәрәсәт шикелле ябырылған һәм тамуҡҡа бырғаған тойғоноң иң татлы һәм иң өмөтлө миҙгеле ошо булғанын ул әлегә аңламай ине.

* * *

Ҡайҙан эҙләргә? Кеҫәһендә күпме аҡса булыуына йәки һатырға алып сығып киткән әйбергә ҡарап, Азалияның ҡайһы притонға барып йығылырын самалай башлағайны инде Айбулат. Адрес буйлап сығып китте. Яҡын-тирәлә тапмағас, әшнәләренән һорашырға керешге.

Улар әле ҡасан ғына кәттә опер булып йөрөгән Айбулатҡа мыҫҡыллап «Көтөүсе» тигән ҡушамат таҡҡайны. Береһе:

— «Кармен» бөгөн күренмәне. Моғайын, ул Клавкала тырпаялыр, — тип әйтеп ҡалды.

Бынау ҡарлы ямғыр яуып торған йонсоу кистә ҡала ситендәге ярым емерек притонды эҙләп йөрөргә кемдең башына тай типкән? Таксистар тыңлап та тормай, ҡуҙғала ла китә. Шулай ҙа берәүҙе, икеләтә түләйем, тип саҡ өгөтләп ризалата алды Айбулат. Уның Азалияны бынан бер нисә тапҡыр табып алып ҡайтҡаны бар ине инде. Тик таксист хатта өсләтә хаҡҡа ла оло юлдан боролоп төшөргә теләмәне.

— Абзый, ун минут ҡына көтөп тор инде, — тип ялынды Айбулат өлкән генә был иргә. — Ҡатынымды хәҙер табып алып киләм.

Тегеһе алдан аҡсаһын түләтеп алды ла теләмәйенсә генә ризалашты.

— Ун минут, — тип ҡаты итеп әйтеп ҡалды. Ярым емерек өйҙәргә табан атлаған Айбулат, ҡараңғы булыуға ҡарамаҫтан, үҙенсәлекле еҫ буйынса, дезоморфин ҡайнатылған йортҡа туп-тура барып инде. Бензин, тоҙ кислотаһы, әллә ниндәй дарыуҙар һәм бер нисә ҡап шырпынан яһалған үлемесле ағыуға инде үҙҙәренә тотош ҡул һелтәгән наркомандар ғына ултыра. Ярты йыл эсендә кеше тереләй сереп бөтә, тигәндәрен ишеткәне бар ине Айбулаттың. Был көнгә төшкән бәндәләр менән инде бер кем дә ҡыҙыҡһынмай. Шуға күрә Клавка тигән ҡатындың «бизнес»ы гөрләй, өйөнән наркомандар тәүлек әйләнәһенә өҙөлмәй. Бер нимәнән дә ҡурҡмайҙар ҙа, ана, ишекте бикләп тә тормағандар.

Бысраҡ, тын алғыһыҙ һаҫыҡ, тараҡан... Ҡаҡашып бөткән иҫке диванда, доза көтөп, биш-алты наркоман ултыра. Мөйөштәге ерәнгес бысраҡ матраста үлем сигендә берәүһе ғырылдап ята. Хужабикә, плитә тирәһендә түҙемһеҙ тыпырлап, кәстрүлдә ҡайнап ултырған шыйыҡсаны болғата. Наркомандарҙың сабырһыҙ ҡыуаныс сыҡҡан йөҙҙәренә ҡарағанда «ағыу» бына-бына әҙер буласаҡ.

Притондың хужабикәһе Клава элек һатыуға ғына эшләй, тиҙәр ине, күм-күк аяҡтарына ҡарағанда, инде үҙе лә был ағыуға ныҡлап ултырған. Азалия күренмәгәс, Айбулат еңел һулап сығырға уйлағайны, төкәтмә яғында ниндәйҙер тауыш ишетелде. Ишекте асып, ҡараңғы

бүлмәне кеҫә фонары менән яҡтыртҡайны, бысраҡ карауатты дер һелкеткән дәү ирҙең түш аҫтында Азалияны таныны. Башына ҡан һикерҙе, булмышында йыртҡыс уянды. Бысраҡ һүгенеп, шөкәтһеҙ бәндәне иҙәнгә бырғағанын, Азалияны нисек һөйрәкләп тышҡа алып сыҡҡанын үҙе лә абайламай ҡалды — шул тиклем дә ҡыҙып була икән.

— Был урка миңә «ширка» алып бирәм тине. Һин бит минән аҡсаңды йәлләйһең, — тип туҡмалған көсөк шикелле сыйнаған ҡатынды ай-вайына ҡарамай таксиға табан өҫтөрәне егет.

— Был бит «ширка» ла түгел, дезоморфин. Әгәр ҙә үлгең килә икән, еңелерәк юл һайла, — тине ул асырғанып. Тегенеһе тағы ла нығыраҡ тыбырсына башлағас, һеңгәҙәткәнсе берҙе ҡундырып, күтәреп алырға тура килде.

Таксиға инеп ултырғас ҡына, Азалияның ысынлап та «ломка»нан дерелдәгәнен абайланы. Тегенеһе тештәрен шығырлатып: «Күрә алмайым һине, — тип ыҫылданы. — Был тиклем ғазаплағансы, муйынымдан һыҡ та үлтер». Нимә ҡылырға ла аптыраш бындай ваҡытта. Айбулат таксистан:

— Абзый, берәй йүнлерәк наркотик һатҡан ерҙе белмәйһеңме? — тип һорарға мәжбүр булды.

Уларҙың ҡыялыуына күҙгә аша имәнес менән ҡарап барған ир ашығып баш сайҡаны: «юҡ-юҡ». Кеҫәһендәге аҡсаны барлаған Айбулат, етерлек боло булмағанын самалап, Риязға шылтыратыуҙан башҡа сара тапманы.

— Бер генә доза табып бирә алмайһыңмы?

— Һин нимә, Айбулат? — Элекке хеҙмәттәшенең көйәләнеп киткәне тауышына уҡ сыҡты.

— Ҡурҡма, үҙемә түгел.

— Теге албаҫтығамы? Ярар улайһа, тырыштырырмын. Тапһам, үҙем алып килермен, һин ҡайҙа?

Дерелдәгән ҡулы менән венаһына «ширка» ебәргәндән һуң ирененә һиҙелер-һиҙелмәҫ йылмайыу ҡунған һөйгәне рәхмәтле наҙ менән:

— Мин һине яратам, — тип бышылдағас, Айбулаттың күҙенән йәше атылып сыҡты: ғәрлек йәше инеме, ҡаҡшаған нервыларымы, әллә күңеле сарсаған ошо өс һүҙҙе ишетеүҙәнме — үҙе лә белмәне.

«Һөйләшергә кәрәк», — тип һаман китмәйенсә уны подъезд эргәһендә көтөп торған Рияз эргәһенә сыҡты. Тегенеһе оҙон-оҙаҡҡа һуҙып торманы, арлы-бирле хәл-әхүәл һорашҡандан һуң, һөмһөрө ҡойолоп ҡараны ла:

— Һин, давай, берәй сараһын күр, туған, — тип өҙөп әйтте. — Алып барып бикләә лә дауалатып ҡара. Юҡһа, унан алда һин үҙең аяҡ һуҙаһың. — Нимә һөйләгәнен белә дуҫы: наркоманды һөйрәкләп сығарам тип айҡашып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән һәм шул уҡ һаҙлыҡта үҙе алданыраҡ тонсоҡҡандарҙы күреп йөрөйҙәр.

Айбулаттың өндәшмәй генә баш баҫып тороуын дөрөҫ аңлап:

— Аҡса менән ярҙам итербеҙ, — тип өҫтәне. — Егеттәр менән йыйнаштырырбыҙ. Ғүмер оҙон, ҡайтарырһың яйлап. Үҙең дә аҙыраҡ ҡыбырла.

Айбулаттың был хаҡта уйламаған көнө юҡ. Азалияның әсәһе менән бер нисә тапҡыр һөйләшергә маташып та ҡараны. Әленән-әле үҙе лә шешә ҡосаҡлап аунап алырға яратҡан ҡатын башта: «Берҙән-бер өмөтөбөҙ һин», — тип илай-илай рәхмәт уҡый ине. Бер көн килеп, бөтөн донъянан ваз кискән кеше һымаҡ, уны ҡыуаларға керешге:

— Тиҙерәк ҡас бынан, әсә балаһы. Ташла беҙҙе, үҙеңде генә һәләк итәһең бит.

— Нишләп улай тип әйтәһегеҙ? Балағыҙ ҙа инде ул һеҙҙең!

— Үҙәгемә үткәнгә әйтәм. Миллион тапҡыр өмөтләнеп, миллион тапҡыр алданғанға әйтәм. Төңөлөп бөткәнмен, йәнем ҡатҡан. Үтәнән үтә боҙоҡ бит ул. Һин шуны күрмәйһеңме ни? Аҙғынлыҡтың сигенә сыҡҡан.

— Боҙоҡто йүнәтеп булмаймы ни?! — тип ҡаршы төштө Айбулат эске ярһыу менән. Үҙенең һөйөүе әллә ниндәй мөғжизәләргә лә һәләтле булғанына ышана ине. — Тик наркотанан ғына айнытып алырға, асылына ҡайтарырға кәрәк.

Ул белә, индәйҙер мәлдә күптәр наркотиктан ҡотолорға тырышып ҡарай. Шунда яҡындарында таяныс тапһа, ысҡынып ҡалғандар ҙа бар. Әллә шул ваҡыты еткәйне, Азалия дауаланырға сағыштырмаса еңел риза булды.

— «Ломкаһы» үтеп киткәнсе килеп йөрөмә, — тине наркодиспансерҙа дауалаусы врач Айбулатҡа. — Әҙәм

ҡиәфәтенә инә башлаһа, саҡырырмын. Шул арала үҙеңде ҡара. Исмаһам, йоҡондо туйҙыр, тамағыңа аша. — Элек эш буйынса бер нисә тапҡыр күрешкәндәре бар ине, шуға күрә яҡын күреп, хәленә инеп һөйләште.

Аҙна тигәндә:

— Мейеһе сереп бөтмәгән был ҡыҙҙың. Бәлки, тормошҡа йәбешеп тә китер. Үҙен бик ярата, — тип шылтыратты. — Әлегә тәртипле йөрөй. Дауаланырға теләге лә юҡ түгел.

Өмөтлө һүҙҙәрҙән ҡанатланып елдереп килеп етте егет. Ысынлап та, ҡаршыһында бөтөнләй икенсе кеше тора тиерһең. Ҡара һөрөм йөҙө матурланған, ағарынып киткән. Үҙе лә наҙлы, иркә, һөйләгән һүҙенең дә мәғәнәһе бар.

— Мин яңынан икмәктең тәмен тоя башланым, — тигән булды. Уҡырға китап һораны. Балаһы менән ҡыҙыҡһынды. Эриканың алдынан төшмәүен, мәрәкә хәбәрҙәрен һөйләп көлдөрөп алды Айбулат. Үҙен татыу ғаиләнең башлығы итеп тойоу шул тиклем рәхәт булды егеткә.

— Минең бында ятҡанымды белеп, врачҡа Олегтан сәләм еткергәндәр. — Айбулат башта төрмәләге «Кактус» хаҡында һүҙ барғанын аңламай торҙо. Унан:

— Өйгә әсәйеңә лә шылтыратҡандар. Эриканың үгәй атайым төрмәнән ҡайтамы әллә, тип ҡото осҡан, — тип ҡаҙалыуҙан тыйыла алманы.

Киткәндә үҙенең аҡса эшләр өсөн таксислыкҡа яллан-ғанын, алыҫыраҡ рейстарға күберәк түләгәндәрен һөйләп, икенсе көндө килә алмаҫын әйткәйне, Азалияның күҙенә йәш тулды. Яратҡанының ысынтылап эҫенеп барыуын, йомшарыуын, тынысланыуын күреп, Айбулат наркодиспансерҙан үҙендә тауҙар аҡтарырҙай көс тойоп сыҡты.

Ә бер көндө йәнә һуңлабыраҡ ҡалғас:

— Көнө буйы тәҙрәнән күҙемде алмай һине көттөм, — тип күҙҙәре ҡыҙарып, бөтөнләй бойоғоп ҡаршы алды һөйгәне. — Мин аңлайым, һинең үҙ тормошоң. Ана бит, матур-матур ҡыҙҙар һинең тирәлә нисек өйрөлә, — тине ул эргәнән үтеп барған урта йәштәге йыуан ғына медсестра яғына ымлап.

— Һин нимә һөйләйһең, Азалия?! — Егет көлә-көлә уны ҡосағына ҡыҫты: аңланы һәм һөйөндө уның был ҡыланышына — ратһа кеше шәүләгә лә ҡыҙғана шул.

— Әгәр яратмайһың икән — ташла мине. Биографияңдан тулыһынса һыҙып ырғыт. Был ҡатынға бәйле бөтә нәмә хата ғына булған, тип әйт тә онот. Башҡа килмә! — Азалияның тиктомалдан үҙ-үҙен ярһыта барғанына ҡаушабыраҡ ҡалған Айбулат уның күҙҙәренән, сәстәренән иркәләп үбә-үбә:

— Мин һине әсәй кеше, көслө, тип иҫәпләһәм, һин үҙең әле бәп-бәләкәс бәпәй икәнһең. Һине нисек яратмайһың? Ҡара әле, һине яратмау мөмкинме һуң? — тип тағы әллә күпме наҙлы һүҙҙәр бышылданы. — Бына дауаланып бөтәрһөң дә, иң модалы кейемдәр һатылған магазинға барып, күңелеңә оҡшағандарын алырбыҙ. Шунда үҙеңдең ниндәй сибәр икәнеңде көҙгөнән күреп, танымай ҙа торорһоң әле.

— Миңә кейемдәр алырбыҙмы? Ысынлапмы? Алдамайһыңмы? — Азалия бала һымаҡ шатланды.

Бер көндө иһә, уны күҙҙәрен йылтыратып ҡаршы алды ла серле итеп:

— Ә беләһеңме, мин асҡыстың ҡайҙа ятҡанын беләм, — тип бышылданы.

— Ниндәй асҡыстың?

— Бында бит беҙ тиеләрҙең башына бер-бер яман уй килеп төшһә-фәлән тип тәҙрәләрҙе бикләп ҡуялар. Кисә коридорҙа йөрөп ятһам, дежур медсестраны әллә ҡайҙа саҡырҙылар. Ә уның өҫтәлендә телефон тора. Эй һинең менән һөйләшкем килеп китте лә... Шунан кире уйланым, йә рулдәһеңдер, тинем. Китәйем, тип боролһам, өҫтәлдә бер бәйләм асҡыс ята, һәр береһенә беҙҙең палаталарҙың һаны яҙылған — тәҙрә асҡыстары.

— Шунан? — Борсолоп урынынан тора башлаған Айбулатты еңенән сат йәбешеп туҡтатты:

— Юҡ-юҡ, һин әллә нимә уйлама тағы. Тәҙрәне асып рәхәтләнеп саф һауа еҫкәһәң, ҡояш байығанын ҡарап торһаң икән, тип кенә уйлағайным.

— Бынау һыуыҡта кеше тәҙрә асамы? — тип асыуланды егет. — Һин аңлайһыңмы һеҙҙең ул аңра медсестрағыҙға эләгәсәген?

— Юҡ-юҡ, бер кемгә лә әйтә күрмә. Минән башҡа бер кем бер нимә күрмәне. Һыуыҡ булһа ла матур бит. Ҡояш бата. Эшем эйәһе, һинең, исмаһам, ҡояшҡа ҡарағаның бармы? Мин үҙемдең төрмәмдә, һин үҙеңдең төрмәңдә, Олежек үҙенең төрмәһендә, — тине ул төшөнкө тауыш менән.

Айбулат бер нәмә лә өндәшмәне.

— Ҡара әле, — тине Азалия тәҙрәгә күрһәтеп. — Ҡояш үлә. Мин көн һайын ҡояш байышына ҡарайым да ҡарайым... Минең тәҙрә бит шул яҡҡа сыға. Ҡарайым да, бына тағы ҡояш үлә тип уйлайым. Ҡояшҡа ҡайһылай рәхәт. Ул көн һайын үлә. Уға ҡарап мин дә, ҡояш менән бергә үлһәң, ҡайһылай рәхәт булыр ине, тип уйлайым...

— Нишләп үлергә? — тине Айбулат эске ярһыу менән. — Киреһенсә, хәҙер дауаланып сығаһың да, бөтөнләй өр-яңы тормош башлап ебәрәбеҙ.

— Тағы ҡараңғы төшә, — тип дауам итте Азалия уны ишетмәгән кешеләй. — Бөтмәҫ-төкәнмәҫ оҙон төн башлана. Моғайын, мин бөгөн төндә ысынтылап аҡылдан шашырмын. Һин бар ҡайт инде, ял ит.

— Ошо хәлдә мин һине нисек ҡалдырып китәйем? — тип өҙгөләнде Айбулат уның өсөн йәнен бирерҙәй булып.

Ул әлегә тиклем былай Азалияның барлығын белмәй, бары тик ошондай матур тәндә күркәм йән дә булырға тейеш тип фараз ғына итә ине. Яңылышмағанына шатланып бөтә алманы, тағы ла нығыраҡ ғашиҡ булды.

Наркодиспансерҙан сыҡҡан саҡта врач: «Күнегелгән мөхитенән айырып алып китһәң, бәлки, дауаның файҙаһы тейер, — тип кәңәш бирҙе. — Тик, ни тиклем генә ҡыйын булмаһын, тураһын әйтәм. Был афәттән бөтөнләй ҡотолдоҡ, тип үҙ-үҙегеҙҙе алдамағыҙ. Наркомандың был юлға бер аҙнанан да, бер айҙан да, хатта бер йылдан һуң да яңынан ҡайтыуы ихтимал. «Әфиүн көтә белә», — тигән әйтемде ишеткәнең барҙыр. Шуға күрә киләсәккә ниәтеңде был ҡатын менән бәйләмәһәң, аҡыллыраҡ булыр».

— Мин хәҙер наркотикһыҙ ҙа йәшәй алам, — тип ҡултыҡлап алды уның врач менән һөйләшкәнен коридорҙа көтөп торған Азалия. — Инде хәҙер барыһы ла һинән тора.

— Минән генә тора икән, барыһы ла һәйбәт булыр, — тине Айбулат ышаныслы тауыш менән. Уның кәйефе ныҡ яҡшы ине. — Беҙ хәҙер Өфөнән күсеп китәбеҙ ҙә бөтөнләй икенсе тормош башлайбыҙ.

* * *

— Күҙ алдына килтерә алаһыңмы, ҡустым, өйләнәм. Мин — өйләнәм. — Иршаттың бәхете эсенә һыймай. Уның бары шул турала ғына һөйләгеһе килә. — Һин һора, һора минән, кемгә? — тиген. Һора инде! Күңелен күр ағайың ҡарттың!

— Кемгә? — тигән була Айбулат, әйтерһең, ағаһы буласаҡ кәләше тураһында әллә күпме ҡолаҡ итен ашамаған.

— Сәлимә Ғәлиева — Санъяр байҙың иркә ҡыҙы — минең кәләш. Был бит лоторейҙа миллион отҡандан да былайыраҡ. Оҙаҡламай мин ҡаланың беренсе байының уң ҡулы буласаҡмын. Малайҙары юҡ бит уның, ике ҡыҙ ғына.

— Фу-у, брак по расчету, — тип танауын сирҙы үҙенән башҡа ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙ хаҡында һөйләп ултырыуға йәне көйгән Азалия. — Суҡмар танау, бер мискәлер инде...

— Ну телеңә борос сәскере, сибәркәй, — тип шарҡылдап көлөп ебәрҙе Иршат. — Юҡ шул. Үҙе матур, үҙе аҡыллы, үҙе инсафлы — көмөш ҡалаҡҡа ғына һалып йоторлоҡ. Үҙе — саф. Хәҙерге заманда ундай ҡыҙҙар бармы, ғөмүмән? Хатта уға мин үҙем дә теймәйем. — тине ул ниндәйҙер эске баҫым менән. — Үҙемдеке. Минән бер ҡайҙа ла китмәй. Ниһайәт, миңә лә әҙәмсә ҡыланырға ваҡыт: никах, ЗАГС, туй һәм тәүге төн. Минең балаларҙың әсәһе пактан-пак, керһеҙ, хөрмәтле булырға тейеш, ҡустым. Үәт шулай....

— Ох-хо-хо! Бөтәгеҙгә лә принцесса кәрәк инде, һеҙ ир йораттарына, эйеме? — Азалия көлгән ыңғайға ултырғысын шыҙдырыңҡырап аңғармаҫтан ғына Иршаттың ботона ботон терәне. Элек булһа Айбулат һөйгәненең күңеле күтәренкелегенә, ағаһының уларҙы ихлас ҡабул итеүенә, ятҡан кешеһен оҡшатыуына ҡыуанған булыр ине, моғайын. Әммә Азалия менән аралашҡан һуңғы ике-өс ай эсендә ул аҙғынлыҡтың телен аңларға өйрәнгәйне инде. Ә былар икеһе бер телдә һөйләшә.

Был ҡалаға әллә ниндәй өмөттәр менән килеп төшкән Айбулат Азалияның үҙенә бик оҫта һәм нәзәкәтле булып тойолған ҡыланыштарын, Иршаттың яһалма хахылдауын һөмһөрө ҡойолоп ҡарап ултырҙы ла һыйлы

өҫтәлде түңкәрә һуғырға теләгенән саҡ-саҡ тыйылып, балконға сыҡты.

«Ҡыҙма, — тип өгөтләне ул үҙен. — Йомортҡанан йөй эҙләп ултырма. Былар барыһы ла көнсөллөгөң арҡаһында тыуған яман уйҙар ғына. Азалияны дауалар өсөн иң күп аҡсаны кем бирҙе? Әле бергәләп тормош башлап ебәрер өсөн фатирын тәҡдим итеп, йәшәгеҙ, тип тора».

Көплө балкондың тәҙрәһен асып, үпкәләрен көйҙөрөрҙәй һыуыҡ һауаны һуланы.

— Сибәр кәнтәй! — тине күп тә тормай тәмәкеһен тотоп килеп сыҡҡан ағаһы ауыҙын сәпелдәтеп. Айбулат өндәшмәне. Иршаттың шул булыр инде, уның маҡтауы ла, хурлауы ла бер тирәлә йөрөр. — Тик шуның арҡаһында тормошоңдо боҙоу... Юҡ, ҡустым, мин һинең турала юғарыраҡ фекерҙә инем.

Бер кем дә бит һине тыймай: файҙалан. Ире әле нисә йыл ултыра? Һигеҙ тинеңме? Йәшә һигеҙ йыл буйы, әгәр әҙәмсә йәшәй алһа. Йәшәгеһе килмәһә, ана бара юлы. Бындай бисәләрҙе эт типкеһендә тотһаң ғына ҡәҙерең була. Ә һинең яҡшылығың улар өсөн сүп тә түгел.

Айбулат беренсе тапҡыр күргәндәй ағаһының өрөлөп торған, майлы, хаяһыҙ ирендәренә ерәнеп ҡараны. Арттан килеп яурынынан ҡосаҡлаған йөнтәҫ ҡулын алып ташлағыһы килде — түҙҙе, ҡымшанманы.

Тәмәкеһен йотлоға-йотлоға һурған Иршат Айбулаттың сәйерһенеп ҡарауына:

— Ташлайым, — тип ҡомһоҙлоғонoң сәбәбен аңлатты. — Үәт әй, ышанаһыңмы-юҡмы, өлгөлө егеткә әйләнеп барам бит. Лайыҡлы булмай ярамай, ҡустым, шунһыҙ булмай. Сәлимәкәйгә тиң булыу еңел түгел. Шуға бөгөн һуңғы тапҡыр тартам да, фатирыбыҙға был һаҫыҡты алып инмәйем тип үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем. Үҙенә әйтмәнем әле. Әйҙә уға сюрприз булһын, минең Яңы йыл бүләге. Бай ҡыҙына нимә бүләк итергә лә белеп булмай, туған. Аптыраш.

«Ни өсөн ул һәр ваҡыт дөрөҫ эшләй? — тип уйланы Айбулат Иршатҡа танымағандай текләп ҡарап. — Ни өсөн ул һәр саҡ хаҡҡа сыға? Бына әле лә ул саф, тәртипле, аҡыллы, бай ҡыҙҙы ярата. Ә мин нишләп гел генә кәрәкмәгән яҡҡа тартылам?»

— Туй ҡасан тинең әле? — тип һораны ул һүҙ юҡта һүҙ булһын өсөн генә.

— Бишенсе ғинуарҙа. Мин 31 декабрҙә тип теләгәйнем дә, кире дүндерҙеләр. Яңы йыл ғаилә байрамы бит инде. Һәр кемдең үҙенең яҡындары менән генә ҡаршылағыһы килә. Һине туйға саҡыра алмайбыҙ инде, мырҙа. Атайың менән әсәйең дә, апайҙарың да була, — тип үкенгәндәй әйтеп ҡуйҙы.

Айбулат атаһының: «Әгәр ҙә ул наркоманка менән бәйләнәһең икән, башҡаса атайың менән әсәйең юҡ», — тип ҡыҙып, трубканы ташлағанын уйлап, баш сайҡаны.

Ул арала:

— Минең дә тартҡым килә. — Бөтөн тәнен уйнаҡлатып Азалия ла килеп сыҡты. — Яратмайым суфыйҙарҙы, — тине ул Айбулатты ирештереп. — Ир кеше эсә лә, тарта ла белергә тейеш.

— Тимәк, — Иршат тәмәке төпсөгөн һуңғы тапҡыр һурып, балкондан аҫҡа ташланы. — Бында һинән башҡа ир кеше юҡ. Мин дә иң һуңғы сигаретымды тартып бөттөм. Кәрәк булһа ал, ҡалғаны минән бүләк. — Ҡапты Азалияға тоттороҙо.

— Ҡарап ҡарарбыҙ, — тине Азалия. — Тик белеп тор. Алғанды мин кире ҡайтармайым.

* * *

Уларға хатта алдан килешеүҙең дә кәрәге булманы. Сәй әҙерләгән булып кухняла уралған арала Иршат Азалияның усына адрес яҙылған ҡағыҙ остоғо ғына йомдорҙо. Тегенеһе өҫтәл артына ултырыгу менән, Айбулатҡа Яңы йыл алдынан сәсенә прическа, тырнаҡтарына маникюр яһатҡыһы килеүен әйтеп, мыжый башлаған булды. Өфөлә уның артынан бауланғандай эйәреп йөрөүҙән биҙәр булған Айбулат Иршатҡа һораулы ҡараш ташланы. Азалия уның уйындағын аңлап, туҙынып үк киткән булды: «Ышанмайһың икән, ярар, Мәсекәй әбей кеүек лаулайып ултырырмын шунда», — тине ул, яңыяңы күкшеллеге үтеп, алы ҡайта башлаған иренен бүлтәйтеп. Айбулат өндәшмәне.

— Гел итәгеңә бәйләп ҡуя алмайһың бит инде, — тине Иршат ҡустыһына, икәүһе генә ҡалған мәлде файҙаланып. — Шаҡарып тотһаң да, сығынсылай башлар. Сыға һалып ҡына һатып алырға, наркота чупа-чупс түгел дә.

— Һөмһөрө ҡойолған Айбулаттың яурынына һуғып дәртләндерзе. — Ҡыуан, һинең өсөн матурланырға теләй бит.

Үзе күсенер өсөн алдан тултырып ҡуйған зур сумаҙанын тотоп ишек төбөнә баҫты:

— Мин киттем.

Кешене, аяҡ терәп ҡарышҡан кәзә тәкәһе кеүек һөйрәкләп, бәхеткә алып барып булмай. Айбулат көтөүсе булыуҙан арый башлағайны инде. Шуға күрә Ирштаттың әйткәндәре менән килеште лә, кеҫәһенән мең һум аҡса сығарып, диванда мыштайып ултырған Азалияға һондо.

— Ошо етәме?

Тегенеһе осоп килеп муйынына аҫылынды, битенән суп иттереп үбеп алды.

— Мин хәҙер, — тип ҡысҡырҙы ул.

Иршат яңы фатирының ишеген асып маташҡан арала Азалия елдереп килеп тә еткәйне. Улар сүлдә аҙналар буйына сарсап йөрөп бысраҡ күләүектең һыуына йомолған һымаҡ бер-береһенә ташландылар ҙа, юл ыңғайында уҡ бер-береһенең кейемен йолҡоп бырғай-бырғай йоҡо бүлмәһенә томоролдолар.

Азалия эстән генә Иршатты үҙенең сираттағы еңеүе тип тантана итте: «Ҡайҙа һинең саф, матур кәләшең?» Ә бер ваҡытта ла еңел табыштан баш тарта белмәгән Иршат, намыҫын тынысландырыр өсөн үҙен ҡотҡарыусы итеп күҙ алдына килтерҙе: «Наркоманкаһының кем икәнен күрһәтмәйенсә, айнымаҫ был ҡусты».

* * *

Тышта һалҡын, саҡ ҡына буран сығырға тора. Тәҙрә төбөнә килеп баҫҡан Айбулат Азалияның өй мөйөшөнән боролғанын ҡарап ҡалды. «Матурлыҡ салоны» бөтөнләй башҡа яҡта бит», — тип балконға сығып ҡысҡырырға ынтылды ла ҡапыл уның ҡайҙа ашыҡҡанын аңлап алды. Көнсөллөк түгел ине был, бары зиһене ялтлап китте. Ҡолағында Иршаттың:

«Мин киттем», — тип әйткәненә, Азалияның:

«Мин хәҙер», — тигән яуабы яңғыраны.

Башын һәлендергән килеш өҫтәл артында бер талай ултырҙы. Нимә эшләргә? Арттарынан тороп сабырға ла өҫтәренә барып инергәме? Эсендәге ялҡынға сыҙамай, һикереп торҙо, үҙенә урын таба алмайынса яраланған януар һымаҡ үрһәләнде. Үлемесле яраланып ҡанһыраған, әммә әле йәшәү кәре ҡайтмаған йыртҡыстай, тимер ситлек эсендәге арыҫлан һымаҡ бәргесләнде ул. Эсенә йыйылып килгән бөтөн асыуы ташып сыҡты. Торған һайын үҙен нығыраҡ ҡыҙҙырҙы. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ажғырып, бер бүлмәнән икенсеһенә атлыҡты. Һуҡыр шикелле йә ишеккә, йә стенаға төкөнө, осраған бер нәмәне тибеп осорҙо.

Ошо мәлдә ни барғанын белә ул, эске ҡарашы менән айырым-асыҡ күрә: Азалияның януарҙыҡылай һығылмалы, һылыу тәне ләззәттән туғарлана. Ҡолаҡтары уның татлы итеп ыңғырашҡанын ишетә. Ҡулдары эсбауырҙарынды көйҙөрөп алырлыҡ матур тәненең ебәк кеүек шымалығын һәм тығыҙлығын тоя. Ләззәт нөктәһенә яҡынлашҡас, осло тырнаҡтарын тәнгә батырып, дерелдәгәненә тиклем күҙ алдында. Был юлы тырнаҡтары Иршаттың тиреһенә бата...

Кәмһеткес һәм әрнеткес был күренеште ни тиклем тырышһа ла күҙ алдынан ҡыуып ебәрә алмай йонсой. Алмай һәм ошо тойғо менән артабан нисек йәшәргә лә белмәй.

Кисә өсәүләшеп осрашыуҙы байрам иткәндә үк барыһын да аңғарып ултырғайны бит ул. Азалияның, ниндәйҙер сәбәп табып, Иршат яғынараҡ шылып ултырыуы, ҡысҡырып көлөшкәндә онотолоп киткән булып ҡулына ҡағылыуы, ә тегеһенең һиҙҙермәҫкә тырышып мут ҡына бының аяғына баҫыуы, ялҡынлы ҡараштар, ботҡа-бот терәшеп алыуҙары... Был икәүҙең шунда уҡ уртаҡ тел тапҡанын һәм бының яҡшылыҡҡа килтермәйәсәген тойоп, эсе янып киткәйне. Зиһененең ниндәйҙер бер алыҫ төпкөлдә әллә нисәмә быуаттар элек мамонтҡа һунар иткән тәүбабаларының ярһыу сослоғо уянғайны: «Был минең һунар! Минеке!» — тигән тыйғыһыҙ асыу ҡанын ҡыҙҙырып, тамырҙарын көйҙөрөп үтте. Шунда дөбөршатыр өҫтәлде ауҙарып, ғауға ҡуптарһа, бәлки, дөрөҫөрәк булғандыр. Һис юғы был икәүгә уның ҡылығы аңлайышлыраҡ булыр ине. Ә уның йүләр тәрбиәһе еңде, тешен онтарҙай итеп ҡыҫып сыҙаны. Йәнәһе, ул юл менән яуланған һөйөүҙең кәрәге бармы миңә? Ғөмүмән,

бында һөйөүгә урын бармы? Бына шуның тураһында уйларға кәрәк ине, башың булһа.

Хәҙер күҙҙәренә туп-тура бәреп әйт, фашла: улар хатта кире ҡағып та маташмаясаҡ. Ағаһы: «Мин һиңә әйттем бит, иҫбатлайым, тинем. Бына раҫланым: был кәнтәй һинең тырнағыңа ла тормай», — тип үҙен ҡурсалаусы итеп күрһәтәсәк.

«Кем һинән һораны? — тип мығырлаған булыр Айбулат. — Миңә иҫбатлау кәрәкмәй, мин былай ҙа барыһын да беләм».

Ә Азалия ҡара күҙҙәрен тонйоратып көләмһөрәр ҙә, йомро яурындарын һелкетеп: «Эйе, мин шулай, — тиер. — Мин шулай. Мин насар! Мин аҙғын! Мин наркоман. Мин һинең саф тойғоларыңа лайыҡ түгел!» — Әммә «лайыҡ түгел» тигәне, «мохтаж түгел» булып яңғырар.

Һәм ул хаҡ! Йөҙ тапҡыр, мең тапҡыр хаҡ.

«Мин насармын, шуға күрә нимә теләһәм, шуны эшләй алам, ә һин мине яратмай ҡара. Булдыра алырһыңмы? Нимә, һинең үлеп яратыуың минең бысраҡлығымды ҡабул итергә лә етмәйме?»

Айбулат йәнә уның бысраҡ түгел, ә бары тик аҙашҡан йән булыуын, уны башҡа бер кемдең дә шул кимәлдә ярата алмаясағын иҫбатларға тотонор. Үҙенең бахырлығы өсөн үҙен күрә алмайынса, нәфрәтенең һөрөмөнә сәсәп, шул уҡ ваҡытта меҫкенлегенә күнеп... Тағы барыһы ла элеккесә дауам итер, тағы-тағы-тағы битенә төкөрөлөп, мыҫҡылға ҡалыуға ҡарамаҫтан.

Айбулат кисә, үҙенең көсһөҙлөгөнә лә, был мөхиттең ҡанундары буйынса йәшәй алмауына ла үртәлеп, балконға сығып киткәйне. Үҙенең эсмәгәненә һәм эсергә ратмағанына, тартмағанына һәм тартырға теләмәгәненә лә йәне көйҙө. Шулай булмаһа, иҫерер ҙә, ағаһының икмәк шүрлегенә менеп төшөр, Азалияның да күҙен күгәртеп ултыртыр ине. Улар уны тыйып алыр, өгөтләп тынысландырыр, эстән генә хуплар, хатта ихтирам итер һәм икенсе көнөнә көлә-көлә һөйләр ине. Әжәлдең күҙенә ҡараған, һуғыштың уртаһында йөрөп ҡайтҡан, үлем менән йәшәүҙең нимә икәнен төшөнгән кеше буларaҡ, уға ошо икәүҙе алдына тубыҡландырып, ҡоттарын алып ултыртыр өсөн ике минут ваҡыт етер ине. Етә, тик был уға ҡыҙыҡ түгел. Кәрәк түгел. Шулай булғас, атаһы хаҡ. Ҡайһы яҡтан ғына ҡараһаң да,

атаһының һүҙҙәре раҫҡа сыға: уға был тормошта гел генә еңелергә яҙған...

«Шунан, — тине атаһы бер мәлде. — Армияға барып нимә иҫбатланың? Бына тигән кешенең башына етеп ҡайттың». Һәм ул хаҡлы бит. Айбулат уға бер нәмә тип тә әйтә алманы. Тешен шығырлата ҡыҫып, йоҙроҡтарын тырнаҡтары усына ҡаҙалғансы йомоп саҡ сыҙаны, күсөргәнештән күҙҙәрендәге ҡан тамырҙары шартлап, күҙҙәренә ҡан һауып сыҡҡайны.

Эшкә ашмаған... Ник тыуҙым... Атаһы йыш ҡабатлай ине бындай һүҙҙәрҙе...

Айбулаттың сараһыҙлыҡтан бетон стеналарҙы этеп шылдырғыһы килде. Йоҙроҡтарын ҡанһыратҡансы стеналарҙы төйҙө, тик бер ниндәй ҙә ауыртыу тойманы. Йән әрнеүенән аңы томаланғайны. Тимәк, эш бында наркотикта ғына түгел. Эш бында хатта Азалияла ғына ла түгел. Эш унын үҙендә.

Донъя бысраҡ. Йәшәү — ситлек. Һәм ул, ниһайәт, үҙендә көс табырға ла был ситлекте емерергә тейеш. Тешләнергә лә теште онтаҡлағансы, йыртып асырға ла күкрәкте азатлыҡҡа осорорға был тынғылыҡ тапмаған бахыр йәнде. Барыбер илап ҡалыусы булмаҫ. Азалия, еңел һулап, иң яратҡан шөғөлөнә тотонор: рәхәтләнеп энәгә ултырыр. Ағаһын да намыҫы язалап тормаҫ: «Һеләгәй инең, һеләгәй булып ҡалдың», — тип кенә ҡуйыр. Атаһының тик нәфрәте артыр. Әсәһе... Айбулат әсәһе тураһында уйламаҫҡа тырышты. Әсәһенә оҡшап, ихтыярһыҙ Айбулат. Ә атаһы ғүмер буйы улының үҙе һымаҡ булыуын талап итте, шуға битәрләне. Бына ул тағы бер тапҡыр хаҡ булып сыҡты. Тағы ул еңде. Тик Айбулаттың атаһы кеүектәрҙе хаҡҡа сығарған донъяла башҡаса бер минут та торғоһо килмәй.

Ә Азалия... Ул инде барыһына ҡарағанда ла тиҙерәк онотасаҡ. Бер минутҡа ғына тағы берәүҙең унын матурлығы арҡаһында дөмөгөүенә ғорурлыҡ тойғоһо кисерер. Тағы бер яҙмышты емергәненә кинәнер ҙә, арзанлы мунсаҡты ваҡ-төйәк ҡумтаһына бырғағандай онотор...

Шул саҡ Айбулатта малайҙарса үс алыу теләге уянды. Ә ул белә Азалияның нимә өсөн ысынтылап йәш түгәсәген! Диван артынан кейем-һалым һалынған ауыр сумканы һелкетә тартып алды ла килтереп ваннаға

бушатты. Өҫтөнә бәҙрәфтә торған хлорҙы түңкәрҙе. Булды. Был донъяла башҡаса эше ҡалманы. Ул үҙе юҡ инде, бары эсе тулы ялҡын. Әрнеү... ошо әрнеүҙән ҡотолорға кәрәк.

Армияла саҡта Айбулат хеҙмәттәшен элмәктән төшөрөп алғайны. Сәйер тойолғайны һуғышта, үлем араһында йөрөгән кешенең китер өсөн элмәк һайлағаны. Әле бына шунда күргәндәренең кәрәге тейҙе. Билендәге ҡайышын алып батареяға бәйләне... Инде саҡ ҡына ихтыяр кәрәк. Китергә... Ҡотолорға... Уй түгел, ынтылыш, һуңғы теләк... Тыны быуылыуҙан күҙ алды томаланды... Тамағы ғырылданы... Ғырылданы:

— Йәшә, егет! — тине был ғырылдау. — Язаланма! Йәшә! Минең өсөн дә йәшә!

Башында яңғыраған был тауыштан йәшен атҡан һымаҡ булды. Ҡалтыранған ҡулы ҡайышты бушатты. Ярға ырғытылған балыҡ кеүек һауаға туя алмай ятты бер аҙ. «Үлә лә алмайһыңмы?» — тигән мыҫҡыллы уй килде. Йән әрнеүе ҡабат ҡайта башлағас, үҙенән-үҙе ҡурҡып батареяға бәйләнгән ҡайышҡа күҙ ташланы ла элгестәге курткаһын тартып алып тышҡа атылды.

* * *

Тәгәрмәстәрҙең ҡолаҡ ярғыс сыйылдауынан ул аңына килгәндәй булды. Башын күтәреп ҡарау менән урам уртаһында баҫып торғанын, өҫтөнә менеп килгән машинаны абайланы. Үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты бойорған берҙән-бер ҡотҡарғыс хәрәкәт эшләне утты-һыуҙы кискән тәне: бәрелешкә күҙ асып йомған ара ҡалғанда капотҡа һикерҙе. Алғы тәҙрәлә ҡото осоуҙан шарҙай асылған сағыу ҡуңыр күҙҙәргә текләне, уларҙың йәмйәшел һыҙаттарына тиклем (крыжовник емеше кеүек тигән уй тыуҙы зиһендә) күрҙе. Хәрәкәттәре лә, уйҙары ла яйлатылған кинокадрҙағы һымаҡ талғын ғына... Бына ул кәүҙәһенең тоҡ һымаҡ ауырайғанын һәм ҡаҡ асфальтҡа бәрелгәнен тойҙо.

Күҙен ҡабат асыу менән тағы ла шул уҡ күҙҙәр менән осрашты.

— Һеҙ тереме? — тигән борсоулы тауыш уны ысынбарлыҡҡа кире ҡайтарҙы. Әллә ҡайһы арала өймәкләшеп өлгөргән халыҡтың:

— Тере! Тере! Аллаға шөкөр! — тигәне ишетелде.

— Үлтеререгә кәрәк ине! — тине егет был һүҙҙәргә бөтөн әсенешен һалып. Ирекһеҙҙән ыңғырашып урынынан тороп баҫты. Башта сайҡалып китте.

— Ултырығыҙ машинаға, больницаға барырға кәрәк, — тип ыуаланып еңенә йәбешкән ҡыҙҙы тупаҫ итеп ситкә этте лә, маңлайынан күҙенә ағып төшкән ҡанды һыпырып тирә-яғына ҡаранып алды. Унан уратып алған кешеләр төркөмөн йырып, һылтыҡлай-һылтыҡлай өйҙәр араһына инеп юғалды.

Сәлимә башта егеттең артынан эйәрергә ынтылды. Шунан инде тарала башлаған кешеләр араһында нишләргә лә белмәйенсә аптырап тора бирҙе лә машинаһына ултырып яй ғына ҡуҙғалып китте. Өйөнә ҡайтып ингәндә атаһы ишек төбөндә кейенеп тора ине.

— Атай, — тине ҡыҙ. Эске ҡалтыраныуы тауышына сыҡҡанлыҡтан шымды.

— Нимә булды? — тине Саръян шөбһәләнеп.

— Мин кеше тапаттым.

— Ныҡмы? Ҡайҙа ул?

— Мин больницаға алып барайым тигәйнем, этеп ебәрҙе лә китеп барҙы.

Атаһы еңел һуланы, тунын ҡосаҡлаған килеш эргәлә торған кәнәфигә ултырҙы.

— Үҙ аяғында булғас, зарар юҡ, — тине. — Нисегерәк килеп сыҡты һуң?

Атаһының һалҡын ҡанлылығы Сәлимәне бер ни тиклем тынысландыра төштө. Ашыға-тотлоға өҙөп-йолҡоп һөйләп биргәндән һуң төшөнкө тауыш менән:

— Инде миңә нимә эшләргә инде? — тип һораны.

— Иҫерек түгел инеме?

— Һиҙелмәне.

— Бәлки, ошонон менән бөтөр. Иҫеңдә тот, иң мөһиме: ул — тере. Ҡалған бөтәһен дә төҙәтеп була. Хәйерле ҡаза булһын, — тип хас та ҡарттарса өҫтәп ҡуйғандан һуң, кейенә һалып, эшенә ашыҡты. — Нимә генә булһа ла миңә шылтыратып тораһың. Ишетәһеңме?

Өҫтәл йыйыштырып йөрөгән ерҙән йүгереп сығып ире менән ҡыҙын өндәшмәй генә тыңлап торған Хазина ханым валерианка алып килде.

— Эс, балам.

— Кәрәкмәй, әсәй. Тынысландым аҙыраҡ. Атайым дөрөҫ әйтә. Иң мөһиме — ул иҫән. Һин үҙең эс, ҡара әле, ҡулың ҡалтырап тора, — тип әсәһен ҡосаҡлап диванға ултыртты. — Үлде, тип ҡотом осто. Ул күҙен асҡансы, үлеп терелдем. Дөрөҫөрәге, үҙем үлһәм яҡшыраҡ булыр ине, тип уйланым.

Сәлимәнең шул арала әйтеп өлгөргән нәҙере иҫенә төштө: «Әгәр хәҙер күҙен асһа, башҡа бер ваҡытта ла юҡ-барға көймәйем». Әле шуны хәтергә төшөрөү менән, башын юғалтырлыҡ хәлгә еткергән «юҡ-бар»ҙы иҫләп йөҙө һөрөмләнде. Шул саҡ кеҫәһендә телефоны шылтыраны.

— Иршат беләме? — тип һораны ундағы көйҙән шылтыратыусыны таныған әсәһе. — Нисек һаман килеп етмәй әле ул?

— Белмәй, — тине ҡыҙ телефонынан симкаһын алып маташҡан килеш. — Эше ҡаты уның, минең ҡайғы түгел.

— Улай тимә, балам. Ирҙәрҙең шулай инде, иң тәүҙә — эш.

Ул арала Сәлимә, итеген дә сисеп тормайынса, шарт та шорт атлап бәҙрәфкә инде лә симканы унитазға ағыҙып ебәрҙе.

Һаман сынаяҡ тотҡан килеш торған Хазина, «быны нисек аңларға», тигән ҡиәфәт менән ҡыҙына аптырап ҡараны.

— Әллә врач саҡырайыҡмы? — тине ул, шөбһәһен йәшерергә тырышып. Сәлимә яуап ҡайтарып өлгөрмәне, өй телефоны зыңланы.

— Был миңә ул, әсәй. — Ҡыҙ ашығып трубканы алды. — Сәләм, — тине ниндәйҙер яһалма тауыш менән.

— Хәлдәр нисек, сепейем? — Теге остан, көр күңелле, шат тауыш ишетелде.

— Хатта шәп бит әле. Үҙем дә аптырайым. — Шунан әсенешле мыҫҡыл менән: — Бөттөгөҙҙәме ни? — тип өҫтәне.

— Бөтмәнем әле, — тине тауыш. Әммә һағайып өлгөргәйне инде. — Тағы рюкзак менән ике пакет ҡалды.

— Һин мине бик яҡшы аңланың. — Сәлимәнең тауышында боҙ һалҡынлығы ишетелде. — Мин бөтәһен дә

күрҙем. Ситтән ҡарап торһаң, мәрәкә икән, — тип өҫтәне ул көлөп, тик ҡыланышының яһалмалылығын үҙе лә абайланы: — Ерәнгес, әшәке, — тине.

Ул арала Иршат башын эшләтеп өлгөрҙө, ахыры:

— Нимә күрҙең? — тип аптырағанға һалышты ла рәхәтләнеп көлөп ебәргән кеше булды. — Һин бит дөрөҫ аңламағанһың. Ҡусты наркоманкаһы менән барып беҙҙең фатирҙы ҡарағыһы килгәс, асҡыс биргәйнем. Ул йүнһеҙҙәр беҙҙең карауатты «ҡотламаҡсы» булдымы икән?

— Әгәр борғоланып маташмаһаң, мин, бәлки, аңларға тырышыр инем, — тине Сәлимә.

— Аллаһи-валлаһи тейем, сепей. Теләйһеңме, мин һеҙҙе күҙләштерәм. — Иршат ысынтылап борсола башлағайны. Әммә тормошта һыуҙан гел генә ҡоро сығырға һәләте булғанлыҡтан, бирешергә һис тә иҫәбе юҡ. Айырыуса, ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһендә.

— Мәшәҡәтләнмә. Мин һине үҙ тиңеңде табыуың менән ысын күңелдән ҡотлайым. Урынды йыйыштырып тормағыҙ, хәҙер берәйһен иҙән йыуырға ебәрермен, сығарып ташлар, — тип өҫтәне ҡыҙ байҙарса тәкәбберлек менән. — Ә мин һинең башҡаса күҙемә салынмауыңды теләр инем.

— Ҡыҙыҡай, — аш бүлмәһенә сығып киткән әсәһе уның һөйләшкәнен ишетеп килеп етте. — Һин үҙеңдең нимә һөйләгәнеңде аңлайһыңмы?

Яурындарын һикертеп бүлмәһенә инеп китергә йыйынған Сәлимәне әсәһе башланғыс кластар уҡытыусыһының талапсан тауышы менән шып туҡтатты. Диванға барып ултырып, тыңлауһыҙ уҡыусыһын мөйөшкә оҙатҡан ишара менән ҡыҙын янына саҡырҙы. — Йә әҙәмсә аңлатаһың, йә атайыңа шылтыратам.

Институтҡа барышлай, Иршат күсеп килмәҫ элек тағы бер күҙ һалырға тип фатирҙарына ингәнен һәм унда күргәндәрен һөйләп биреүҙән башҡа сараһы ҡалманы Сәлимәнең.

— Хатта йоҡо бүлмәһенә барып етергә лә түҙемлектәре етмәгән, — тине ул ерәнеүе тауышына сығып. — Кейемдәрен ишек төбөндә үк сисеп ырғытҡандар. Иң ғәрләндергәне, балауыҙҙай һары иҙәнемдә аунап ятҡан бысраҡ трусик менән ҡасандыр аҡ төҫтә булған бюстгальтер. Әшәке... — Бер нәмә лә өндәшмәй тыңлаған әсәһенең ҡарашынан уйын аңлаған Сәлимә туҙып китте: — Белеп торам, «Әйттем бит мин һеҙгә. Баштан уҡ

оҡшамағайны, һиҙенеүем дөрөҫ булған», тип ултыраһың. Ҡыуан инде, ысынлап та, һин хаҡлы булып сыҡтың.

— Улай тип әйтергә йыйынмағайным. Атайың менән икәүләшеп уның ниндәй шәп кеше икәненә ышандырғайнығыҙ бит инде, — тине әсәһе. Һуңғы һүҙҙәре төрттөрөү кеүек яңғырағанын абайлап, йомшартырға тырышты. — Ә, бәлки, ысынлап та ул булмағандыр? Һине күрҙеләрме?

— Күрерлек түгелдәр ине, бүлмәнең ишеген асып ҡараным да, шартлатып ябып сығып киттем.

— Шул хәлеңдә рулгә ултырҙыңмы?

Сәлимә өндәшмәне.

— Туйҙы нимә эшләтәбеҙ инде? — тине әсәһе. — Ҡунаҡтарға нимә тип әйтәбеҙ?

— Туй булмай, кире уйланылар, тиерһегеҙ.

— Ә, бәлки, был яҡшыраҡтыр ҙа, — тине әсәһе еңел һулап. Тик хәҙер генә ул үҙенең бөтөн булмышы менән был туйға ҡаршы булғанын, ире менән ҡыҙының ихтыярына буйһоноп ҡына ризалашҡанын төшөндө. Оҡшамағайны был йүгерек ҡарашлы сос егет. Әсә күңеле барыбер һиҙә шул. Унан утыҙ йыл буйы мәктәптә балалар уҡытҡан уҡытыусының күҙе лә осло.

Хазина ҡыҙына борсоулы ҡараш ташланы ла урынынан торҙо: ҡыҙыулыҡ менән батырланып маташһа ла йән атып йөрөгән кешеңдән күңел ҡайтыу еңел түгел инде. Исмаһам, тынысландырғыс үләндәр бешереп, сәй эсерәйем, тип уйланы әсә үҙенең ярҙамһыҙлығына көйөнөп. Бәләкәй саҡта итәгеңә ултыртып йыуатаһың да һөйөп-һөйөп төшөрөп ебәрәһең. Ә хәҙер ут йотоп эргәһеңдә баҫып торһаң да, балаң урынына янып булмай.

Иршаттың хәҙер елдереп килеп етеүенә, кәрәк булһа, аяғын ҡосаҡлап инәлеренә тамсы ла шикләнмәне Сәлимә. Уны әсендерерлек, кәмһетерлек һүҙҙәр эҙләй-эҙләй мендәргә башын терәне. Көтөлмәгән тетрәнеүҙәре хәлен ярайһы алған икән; бәлки, әсәһе ай-вайына ҡуймай эсергән валерианка ла тәьҫир иткәндер, күҙе эленгән.

...Бына бер ваҡыт асфальтта ҡанһырап ятҡан егет яйғына ҡуҙғалып тора башланы ла уның өҫтөнә эйелде. Башынан аҡҡан ҡан Сәлимәнең битенә, ап-аҡ туй күлдәгенә тып-тып тама... Бына ул ҡан шаулап аҡҡан йылғаға әйләнде лә Сәлимәне ағыҙып алып китте. Оҙон итәге һыу төбөнә тарта. Ҡыҙ нисек тә ажар тулҡындарҙан ҡотолорға тырыша, әммә улар, сөмбәйгә әйләнеп,

Сәлимәне юнысҡы кеүек өйрөлтә, ҡотолғоһоҙ рәүештә аҫҡа һөйрәй.

— Әсәй! — тип ҡысҡырҙы Сәлимә, асырғанып. Унының ҡот осҡос тауышына әсәһе лә, ҡайтып ҡына торған атаһы ла йүгереп килеп инде. Һикереп тороп ултырған ҡыҙ ҡалтыранған ҡулдары менән битен-башын, өҫтөн һыпырҙы: бөтә ерҙә ҡан-ҡан, ҡан... Бер-бер артлы килеп бәргән ике бәлә эҙһеҙ үтмәгәйне: башын саңҡайтып һалып та, боҙ ҡуйып та танауынан киткән ҡанды туҡтата алмағас, «ашығыс ярҙам» саҡырҙылар. Йәш кенә врач егет, артыҡ ҡурҡыныс юҡлығын әйтеп, тынысландырғыс укол ҡаҙаны ла сығып китте.

Әле генә тормошо туй мәшәҡәттәре, киләсәккә яҡты хыялдар менән тулы ине. Шуларҙың барыһының да бер нисә сәғәт эсендә селпәрәмә килеп юҡҡа сығыуы Сәлимәнең башына һаман да ныҡлап барып етмәне. Үҙенең: «Ҡайҙа һуң был Иршат? Ҡасан килеп етә?» — тип уйлағанын абайлап ҡалды: һуңғы ярты йыл эсендә күләгәһе кеүек гелән янында булған кешеңде тиҙ генә онотоп булмаҫтыр ул. Баҫҡан эҙҙәреңә табынған, бәхетле буласаҡбыҙ, тип ҡабатлаған яҡыныңдың бергәләп тормош башларға аҙна ваҡыт ҡалғас, бер шапшаҡ фәхишә менән хыянат итеүе ҡайһылай ғәрлек. Үҙе, исмаһам, ғәйебен юйырға ла тырышмай, хатта килеп күҙгә лә күренмәй. «Бәлки, ул шылтыратҡандыр...» — тип уйланы Сәлимә, ҡыҙыулыҡ менән симкаһын ырғытҡаны иҫенә төшөп. Әсәһенән һорарға ынтылды ла тыйылды. Бая бит ҡайһылай ҡыуанып китте... Ҡыҙ уйын тамамлап өлгөрмәне, йоҡо дарыуы йоғонтоһонда күҙ ҡабаҡтары тағы йомолдо.

* * *

Ә Иршатта туй менән мөхәббәт ҡайғыһы юҡ ине был ваҡытта. Азалияны әпен-төпөн сығарып ебәргәс тә, карауатта ятҡан килеш кенә Сәлимәкәйгә шылтыратҡайны, баштан-аяҡ боҙло һыуға ҡойонғандай булды. Ҡыйын хәлдән нисегерәк ҡотолоу хаҡында баш ватып, үҙен һүгә-һүгә «енәйәт» эҙҙәрен бөтөрөү менән мәш килгән саҡта, Азалия шылтыратты. «Тиҙ генә ҡайтып ет!» — тип сәрелдәне ул. «Күпте күргән күн ҡата»ны

былай ҡурҡытыу өсөн ваҡиғаның бик етди булырға тейешлеген шунда уҡ аңланы Иршат. Бер нәмә лә һорашып тормайынса, шунда уҡ сығып йүгерҙе. Ниндәйҙер януар һиҙгерлеге менән аяҡ аҫтында ер убыла башлағанын тойҙо. Ишектән килеп инеү менән баҫты ла ҡатты. Аяҡ аҫты тулы быяла, көҙгө ватыҡтары, өйҙә емерелмәгән бер генә нәмә лә ҡалмаған. Ә Азалия ванна ситенә башын сүкеп хлорка ағартып тишкеләгән кейемдәре өҫтөндә йәш түгә, үҙе эт ашамаҫ һүҙҙәр менән Айбулатты һүгә. Был тиклем вәхшәтте ҡустыһының эшләй алыуына ышанғыһы килмәгән Иршат — бигерәк тә уны батареяға тағылған һалдат ҡайышы шиккә һалды — наркомафия ҡон ҡайтаралыр тигән ҡурҡыныс уйҙан эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

— Иң матур кейемдәремде, — тип бер илап, бер һүгенеп пыр туҙған Азалияны яурынынан тотоп дер һелкетте:

— Айбулатты күрҙеңме? Һин ҡайтҡанда өйҙә инеме? — тип һораша башланы.

— Юҡ, — тине тегеһе. — Ишек асыҡ тора ине.

Курткаһынан башҡа бөтә нәмәһе лә өйҙә. Хатта башына ла киймәгән. Тәүҙә бында аҫырға булғандар ҙа аҙаҡтан үҙҙәре менән алып киткәндәрме?

— Әшнәләреңдән бында килеүегеҙ хаҡында кемгә әйттең?

Үҙенә кәрәктә башы бик етеҙ эшләй Азалияның; хәлдәрҙең етдилеген самалау менән сеңләүенән шып туҡтаны. Наркота өсөн ире һигеҙ йылға төрмәгә ултыртылған, үҙе Айбулат арҡаһында шартлы срок менән саҡ ҡотолдо — юҡ, милиция күҙенә һис тә эләгергә ярамай уға.

— Миңә тиҙерәк ысҡынырға кәрәк бынан, — тине ул. Иршат нимә тиергә лә белмәй торҙо. Дөрөҫөн әйткәндә, был наркоманканың ҡиәфәтенән үк ҡоҫҡоһо килә башлағайны. Нимәгә уны күҙ көйөгө итеп бында тоторға. Кәрәк булһа, милиция уны Өфөлә лә «һә» тигәнсе таба... Азалия иһә, унын өндәшмәүен хуплауға һанап, әсәһенә шылтыратырға кереште.

Тегеһе такси алырға ла юлға сығырға ҡуйты.

— Һин сәс-башыңды рәтләргә «матурлыҡ салонына» барҙың. Бер нәмә лә күрмәнең дә, белмәнең дә. — Иршат кеҫәһенән өс мең аҡса сығарып бирҙе. — Бында берәй салонға инеп сыҡ. Алиби булһын. Милиция иртәме-һуңмы барыбер һиңә барып етәсәк.

Тегеһе ваннаға инеп, кейемдәренә һуңғы тапҡыр күҙ ташланы ла ике ҡулын кеҫәһенә тығып, ишек төбөнә килеп баҫты.

— Бир әле кисәге сигаретты, — тине, кеҫәләрен ҡармап, тартырға эҙләгән Иршат.

— Әйттем бит мин һиңә, — тине быныһы, зәһәр көлөп. — «Шиш» тигәнде беләһеңме? — Шуҡ малайҙарға оҡшап телен күрһәткән ыңғайға сығып та шылды.

Иршат иһә криминал менән бәйләнгәненә үҙен һүгә-һүгә — миндә йәшәп тороғоҙ тип кем телендә тартҡан инде — Айбулаттың атаһына шылтыратты:

— Әмирхан ағай, — тине ул. — Бында бик күңелһеҙ хәлдәр булып китте бит әле.

Тиҙ арала килеп еткән Әмирхан Фәтхи улы Иршаттың фатирындағы мәхшәрҙе күреү менән эштең хәүефленең аръяғында икәнен төшөнөп алды. Шунда уҡ милицияға, Айбулаттың элекке эш урынына, ҡалалағы бөтөн криминал авторитеттар менән таныш булған Марселгә хәбәр иттеләр. Тиҙ арала килеп еткән милиция фатирҙа бер сит кешенең дә эҙен тапманы. Күршекүләндән һорашып сыҡтылар. Дөбөр-шатырҙы ишетеүселәр бар, ә кемдеңдер килгән-киткәнен абайлаған кеше юҡ. Әйтерһең дә, шәүләләр килгән, шәүләләр ҡыйратҡан һәм шәүләләр Айбулатты юҡ иткән. Иң ҡурҡынысы һәм ауыры — билдәһеҙлек. Әгәр ҙә аҡса талап итер өсөн алып киткән булһалар, тиҙҙән тауыш бирерҙәр, ә бирмәһәләр?.. Әҙәм балаһының зымзыя юҡҡа сығыуы һуңғы йылдарҙа үтә йышайҙы.

* * *

Сәлимә уянып киткәндә, ҡышҡы ҡыҫҡа көн үтеп, ҡараңғы төшкән. Атаһы шым ғына телевизорҙан урындағы яңылыҡтарҙы ҡарай. Бына, диктор, байрамса тауышына хәүеф өҫтәне: «Ҡыҙғаныска ҡаршы тормош гел күңелле хәлдәрҙән генә тормай, — тине ул. Экранда бер йәш кенә егеттең фотоһы хасил булды. — Әгәр ҙә ошо кеше тураһында берәй мәғлүмәт белһәгеҙ, түбәндәге телефондарға шылтыратыуығыҙ һорала».

Башы әйләнә, тәне туҡмалған кеүек ауырта, шул уҡ ваҡытта үҙәккә үтеп асыҡтырған. Аш бүлмәһенә үтеп

барған Сәлимә тап шул ваҡытта экранға күҙ төшөрҙө лә туҡтап ҡалды.

— Атай, — тип бышылданы ул. Башы әйләнеп, сайҡалып ҡуйҙы. — Был бит теге, — тине. — Теге мин тапатҡан егет...

Ул арала диктор башҡа хәлдәргә күсте.

— Яңылышмайһыңмы? — тип һораны уны етәкләп алып килеп диванға ултыртҡан атаһы һаҡ ҡына. Ул ҡыҙының сәләмәтлеге өсөн ныҡлап борсола башлағайны.

— Ысынлап та ул. Әле генә төшөмә лә ингәйне. Онотορлоҡмо ни?!

Атаһы менән әсәһе мәғәнәле итеп бер-береһенә ҡарашып алды: врач саҡырырғамы, адвокатмы?

Уларҙың майлы арба кеүек келтерләп яйлы ғына барған етеш һәм бәхетле тормошо шулай хәүеф-хәтәргә батыр тип әле иртәнсәк кенә берәү ҙә башына ла индермәй ине бит.

— Хәҙер үк милицияға барабыҙ. — Таныш-белештәре аша мәғлүмәт йыйып өлгөргән ғаилә адвокаты тиҙ арала килеп етте. — Беренсенән, ул егет наркотиктарға ҡаршы көрәш системаһында эшләгән булған. Шуға күрә үс алыу маҡсаты менән наркомафия урламағанмы тигән версия бар, тиҙәр. Икенсенән, атаһы район администрацияһында ҙур ғына урын биләй. Ҡыҫҡаһы, власть кешеһе. Шунлыҡтан эҫе мәлендә эҙләргә тотоноуҙары ғәжәп түгел. Әйтеүегеҙсә, Сәлимәнең уны бәреп йыҡҡанын бик күптәр күргән. Яңылыҡтарҙы ҡарағандан һуң, бер нисә кеше быны мотлаҡ иҫенә төшөрөп шылтыратасаҡ. Әгәр ҙә шылтыратып өлгөрмәгән булһалар әле.

— Берәй ерҙә үлеп-фәлән ятһа, бәләһен Сәлимәгә япһарһалар, — тине әсә шөбһәләнеп.

— Әйҙә, ваҡытынан алда бөтөрөнмәйек, — тине Санъяр ашығып кейенә-кейенә.

Милицияға барып ҡайтҡандан һуң, Сәлимә интернеттан «Яңылыҡтар» сайтына инеп егеттең ата-әсәһенең телефонын алды. Ғәйеп тойғоһонан үҙенә һис урын таба алмай, әйләнә лә билдәһеҙлек эсендә өҙгөләнгән әсә хаҡында уйлай. «Бәлки, ярлы торһалар, аҡса бирербеҙ, бәлки, башҡа ярҙам кәрәктер...»

Телефонды алып, бер нисә тапҡыр шылтыратырға ынтылды. Ҡалтыранған тубыҡтарын тыя алмай йонсоно. Йүнләп һөйләшә алмаҫын белеп тора, хәҙер өндәшер ҙә,

йә илап ебәрер. Ә унда хәүеф-шөбһә былай ҙа баштан ашҡан. Иртәгә иртүк тороп барып әйләнеүҙән дә яҡшыһы булмаҫ. «Ҡыуһалар, сығырмын, әрләһәләр, тыңлармын. Һуғып үлтермәҫтәр әле», — тип уйланы. Бер ҡарарға килгәс, еңелерәк булып китте. Төнө буйы йоҡламаны. «Үлеп кенә ҡуймаһын, тиҙерәк табылһын инде», — тип һығынып сыҡты.

* * *

Йән әрнеүе түҙерлек түгел. Яурынының ауыртыуы ла ҡаймыҡтырған аяғының баҫҡан һайын һыҙлауы ла был әрнеүҙе баҫа алмай. Тубал кеүек гөжләп торған башын һәлендереп, һылтыҡлай-һылтыҡлай оло юл ситенән барҙы ла барҙы Айбулат. Кеше түгел ине инде ул, шалтыр-шолтор һөйәк тә һыҙланыу тултырылған тоҡ. Башынан аҡҡан ҡан һаман туҡтамайынса эйәге буйлап төшөп ҡуйынына тулды, әсәһе күк һарыҡ йөнөнән бәйләп биргән свитеры быҫраҡ ҡыҙыл төҫкә инде. Ә ул һаман барҙы, йәшәргә теләгәнгә түгел — бөтөн булмышы әжәл көҫәй ине — йәшәргә тейеш булған өсөн, аңһыҙтупһыҙ ихтыяр ҡалдығына буйһоноп атланы. Зәңгәр эңерҙә — әрнеүгә ағыулы һағыш ҡушылғандан тойҙо быны — ябалаҡлап ҡар яуа башланы. Баштан-аяҡ ҡар һырыны. Ҡан юғалтыуҙанмы, күңеле болғанып, башы әйләнде, шунлыҡтан бара-бара ла сайҡалып-сайҡалып китә. Ошо зәңгәрлек алдында ошо донъяның матурлығын һанламаған өсөн йәшәйештән ғәфү үтенгәндәй еүеш ҡарға тубыҡланды егет.

Алыҫ юлдан ҡайтып килгән Анатолий Кузнецовтың инде өсөнсө тәүлек йүнләп йоҡлағаны юҡ ине. Әйләнә лә юлдашһыҙ сығып киткәнгә үҙенең тетмәһен тетә — был рейсҡа икеләтә түләргә вәғәҙә биргәйнеләр шул — ҡар һыпырып алып битен ышҡый, тик күҙе йомолоп бара. Шуға күрә саҡ ҡына серем итергә булды. Яңы йылға мотлаҡ ҡайтып етәм, тип улына биргән вәғәҙәһен боҙһа боҙор инде... Юғиһә, бөтөнләй ҡайтып инмәүе бик мөмкин. Юл буйында кюветҡа морондары менән барып сумған йәки түңкәрелеп ятҡан, унда-бында ҡыйшайған фураларҙы күпме күреп үтте. Водителдәрҙең үҙ көстәренә артыҡ ныҡ ышанып, уяулыҡты юғалтып таш-

лауы, саманан тыш арыуы арҡаһында килеп сыға бит күп ҡазалар. Шулай ҙа махсус туҡталҡаға тиклем түҙгәндә яҡшы булыр ине: ни тиһәң дә, инеп ҡапҡылап алырға ла, тынысыраҡ йоҡларға ла йәтеш. Тик артабан сыҙамаҫын тойоп, юлдың ситенә ҡайырыла башланы. Шул саҡ — күҙенә күренәме тип торҙо башта — ҡар өйөмөмө алда, кешеме? Была өрәк яй ғына ауа башланы. Бер-ике минут ятһа, ҡар тотош күмә лә берәй тәгәрмәс аҫтында ҡалып һәләк була бит был бәндә. «Шунан бер ғәйепһеҙ беҙҙең брат водитель бәләгә тарый», — тип һуҡранды Анатолий. «Шул тиклем эсмәһә, хайуан», — тип һүгенә-һүгенә машинаһын туҡтатты. Башта нимә эшләргә белмәйенсә һуҙылыңҡыраны: ҡараңғы төшөп килгәндә бер иҫерек баш менән ҡыялып йөрөгөһө лә килмәй, әҙәм балаһын күрәләтә үлемгә тапшырып китеүе лә ҡыйын. Берәй машина килеп сыҡмаҫмы, тип көтөңкөрәне. Төшөп ҡарарға тура килде шулай ҙа. Ҡанға батҡан, ҡанлы сәстәре башына уҡмашып ҡатҡан, пульсын ҡапшап ҡараны — тере... Аңлашыла ни өсөн был әҙәмде быға тиклем бер кемдең дә туҡтап алмағаны. Кабина бысратып, тигәндәрҙер. Үлеп барған бәндә балаһы янында шулай уйлап торғанына оялыңҡыраны ла, ҡалайтаһың: нисәмә йыл оҙон юлда йөрөп, эт ҡайышына әйләнеп кителә. Иҫереккә оҡшамаған былай. Бик ныҡ туҡмалған булһа кәрәк. Йәш кенә егет. Кейеме лә арыу. Ҡар услап битенә ҡатҡан ҡанды һыпырҙы. Егет ыңғырашты. «Ғәфү итегеҙ, иптәш командир!» Ҡаҡса ғына күренһә лә, ауыр, ҡәһәрең...

— Нимәгә юлыҡтың һин, егет?! — Яңы йылға атаһынан бүләккә компьютер көткән ун ике йәшлек улы күҙ алдына килде ниңәлер. — Бына шулай итеп үҫтерәһең, үҫтерәһең дә... — тип һөйләнә-һөйләнә саҡ индереп ултыртты.

Йоҡо ҡайғыһы китте. Яңынан ҡуҙғалды: быны иҫәнаман берәй больницаға алып барып тапшырырға кәрәк имен саҡта.

— Иптәш командир! — Егет һатаашты. — Мин һеҙҙең ышанысығыҙҙы аҡлай алманым. Мин лайыҡ түгелмен һеҙгә.

«Идейный үҙе, етмәһә, лайыҡ түгел, имеш...» Шул ваҡыт кеҫә телефоны шылтыраны. Ҡатыны икән. Анатолий хәлде аңлата башлағайны:

— Һин гел берәй нәмәгә юлығыр ҙа йөрөрһөң, — тип бурылдарға керешеп китте.

— Больницаға ғына тапшырам да елдерәм. Кешене күрә тора ташлап китеп булмай ҙа инде.

Егет, больница һүҙен ишетеп, ыңғырашты, ҡыбырлап ҡуйҙы.

— Больница кәрәкмәй, — тип мығырланы ул. Бер аҙҙан тороп үк ултырҙы, баш-күҙен һыпырҙы. Аптырап тирә-яғына ҡараны: ҡайҙа, нимә, нисек икәнен аңламайыраҡ торҙо, ахыры.

— Оҙаҡламай Өфөгә етәбеҙ, — тине Анатолий унда боролоп инергә һис кенә лә теләге булмаһа ла. Тура Силәбе юлына төшһә, иртәгә төшкә нисек тә ҡайтып етелер ине.

— Мин иҫән-һау, — тине егет. — Бер ерем дә ауыртмай. Өфөнөң миңә кәрәге юҡ. Бер аҙ ял итәм дә төшөп ҡалырмын. Һеҙҙе мәшәҡәтләмәм, — тип өҙөк-өҙөк һөйләнде.

«Берәй криминал менән бәйләнгәндер, ахыры», — тип уйланы Анатолий.

— Мәйелең, кәрәкмәй икән, кәрәкмәй. Күпме теләйһең, шул тиклем бар әйҙә. Мәшәҡәтең юҡ. Тик, давай, анекдот һөйлә. Юҡһа, минең йоҡлап китеүем бар. Бына шунда булыр мәшәҡәт...

Егет өндәшмәне. Ыл ишетмәгәндер, тип уйланы Анатолий.

— Анекдотлыҡ кәйеф юҡ, — тине егет байтаҡ барғас. — Әйҙә йырлайыҡ. Тик икәүләп йырлайыҡ. — Анатолий биргән минераль һыулы шешәнән мул ғына уртланы ла һуҙып та ебәрҙе. Тауышы матур, яғымлы. Гел генә һуғыш йырҙары. Бер ни тиклем тынысланып, рухланып китте шикелле. Йөҙө асылды. Ҡарап торһаң, һәйбәт кенә кеше һымаҡ. Тик күҙҙәрендә генә хәүефле осҡондар ялтлап китә. Шауҡымлыға оҡшаған. Анатолий юлдашына ара-тирә күҙ һалып, һынап бара, үҙе лә ҡушылып йырлап ебәрә. Бер аҙ барғас, ашарға тәҡдим иткәйне, тегеһе баш тартты.

— Һин, егет, ҡанлы кейемеңде алмаштыр әле, — тине Анатолий. — ГАИ-фәлән осраһа, йә бәйләнә башларҙар. Ана, арттағы сумканан һоро свитерҙы алып кей. Быныңды пакетҡа һалып ал. Йылы әйбер бит. Моғайын, өләсәйең бәйләгәндер.

— Әсәй.

— Әсәйҙәрҙең ҡәҙерен белер кәрәк, туған. Улар кеүек беҙҙе башҡа бер кем дә яратмай, — тине шофер.

Өндәшмәй барҙылар. Айбулаттың йөҙө ҡабат һөрөмләнеүен абайлап, Анатолий йырларға ҡыйманы. Күмәк фуралар теҙелгән туҡталҡаға еткәс:

— Йоҡо баҫа, малай, — тине. — Таңға тиклем ял итеп алырға тура килер. Әҙәмсә ҡапҡылау ҙа зыян итмәҫ.

— Абзый, — тине егет. Бер килке өндәшмәй торҙо ла дауам итте: — Изгелегең өсөн рәхмәт. Мөмкин булһа, мин атлайым әле. — Шунан ниндәйҙер көсөргәнеш менән күкрәген ышҡыны, балаларса бер ҡатлылыҡ менән: — Яна, — тине. — Сыҙап булмай.

— Һуң... — Анатолий аңламаны. — Бер йөҙ грамм ғына һелтәрһең дә рәхәтләнеп йоҡларһың. Аҡсаң булмаһа, үҙем түләрмен. Кешенең кешегә шул тиклем генә ярҙамы тейергә тейеш тә инде. — Егеттең әллә ҡайһылай, тынғыһыҙ ҡарашын шәйләп шомланды ла ҡыҫтаманы шулай ҙа. — Мәйелең, — тип бик тиҙ ризалашты. — Ҡайҙа юл тотаһың һуң?

— Алыҫҡа, — тип ҡул һелтәне Айбулат. — Мөмкин тиклем алыҫҡараҡ.

— Ҡыуып етһәм, ултыртып алырмын. Ҡараңҡырап бар. Хәйерле юл, улайһа. Тороп тор әле, туҡта. Мә, башыңа бынау аламаны булһа ла кей. — Анатолий пакеттан бәйләнгән бер кәпәс алып һондо.

Атланы ла атланы Айбулат. Абынды, һөрлөктө, йығылды, ҡабат торҙо. Хәлдән тая башланы. Арыуы арткан һайын йән әрнеүе саҡ ҡына булһа ла баҫылғандай. Күпме барғанын да, ҡайҙа барғанын да белмәне. Күҙ ҡабаҡтары таш баулаған һымаҡ йомолдо. Бара, бара ла уянып китә. Уянып китә лә өҫтөнә һырыған ҡарҙан тағарынып ала. Эргәһенән бер нисә машина ла үтте, буғай, ул туҡтатманы, тегеләр туҡтаманы. Ярты сәғәт уҙҙымы, бишме, әллә тотош тәүлекме — белмәне лә, уйламаны ла.

* * *

Ауырыу әсәһенең хәлен белергә ҡайтҡан Иван Семенович Мироновты ашығыс рәүештә кире саҡырҙылар. Тауҙарҙа ҡар яман яуған да, лайғы шыуышып төшөп,

тотош бер ауылды һәләк иткән. Уларҙың ҡотҡарыусылар отряды киләһе таңдан да ҡалмай шунда осорға тейеш. Бындай мәлдә кеше ғүмеренең минуттар менән һаналғанын яҡшы белгәнлектән, Иван Семенович шунда уҡ юлға сыҡты. Элемтә яҡшы эшләгән түңдә машинаһын туҡтатып, үҙенең бөтә кешеләренә лә шылтыратып сыҡты. Ҡатынына әйберҙәрен әҙерләргә һәм тура самолетҡа килтереп еткерергә ҡушты. Ун биш йылдан ашыу МЧС-та эшләп, күнегеп бөтөлгән, ҡатыны ла иренең теләһә ҡайһы минутта урынынан ҡубыу ихтималына күнгән. Әйберҙәре лә һәр ваҡыт әҙер көйө ҡул аҫтында тора. Тик бына юлдың рәте юҡ, ҡар күп яуған. Етмәһә, моторҙың көйө китеп тороуына борсолдо, һаман ваҡыт табып берәй йүнлерәк машина алмаған өсөн үҙен әрләне.

Үс иткәндәй, барҙы-барҙы ла бер-ике сөскөрөп ҡуйғандан һуң, машинаһы ысынлап та һүнде. Кирегә китһә китә бит: тап телефон тотмай торған урында, соҡорҙа туҡтаған. Машиналар йөрөгән мәл дә түгел. Бындай ҡарҙа бишәр-алтышар булып эйәртенешкән фуралар ҙа, аулаҡҡа туҡтап, яҡтырғанды көтә. Тоҡандырырға маташып байтаҡ ҡыялғандан һуң, өмөтөн юйған Иван Семенович нишләргә белмәйенсә тышҡа сыҡты. Быны ҡалдырып, элемтә булған ергә тиклем атларға ла машина саҡырырғамы? Ҡайһы яҡҡа ыңғайлағанда тиҙерәк менеп етер? Шуны самалап, ҡараңғылап тора ине, юлдың теге яғында, урман ситендә генә ҡыбырлау шәйләне. Был ни ғәләмәт? Шатун айыумы, юғиһә? Әллә ҡар кешеһе тигәндәреме? Был ваҡытта әҙәм балаһы йөрөмәҫ. Шулай ҙа кеҫәһенән газ пистолетын ҡарманы ла һаҡ ҡына:

— Эй, туған! — тип тауыш бирҙе.

Бер ниндәй ҙә яуап булманы. Тағы бер ҡысҡырғандан һуң, Иван Семенович инде тәңгәлләшеп килгән кешегә табан йүнәлде: бер ҙә тиген түгел, бара-бара ла һөрләгөп китә был бәндә. Әллә иҫерек, әллә аяғөҫтө йоҡлай. Баштан-аяҡ ҡар һырыған сүмәләгә оҡшап тора үҙе. Йәнә өндәште, яуап булмағас, яҡын уҡ килде.

— Йоҡлайһыңмы әллә, эй? — тип яурынынан тотоп һелкеткәйне, шунда ғына тегенеһе һиҫкәнеп башын ҡалҡытты. Бер ни ҙә аңламайынса мәғәнәһеҙ һәм битараф текләне.

— Ярҙам кәрәк ине, туған, — тине Иван Семенович. — Мотор һүнде. Түбән табан сак ҡына этһәң, тоҡанырға тора. Йә, нисек? Маташып ҡарайбыҙмы? — Әйтте әйтеүен дә, аяғында сак баҫып торған был ҡараҫҡынан фәтүә булырына шикләнде.

Әҙәм өндәшеп торманы, туп-тура машинаға ынғайланы. Барып һөйәлде лә ҡатты.

«Бынан рәт сығырмы, юҡмы» тигәндәй һирпелеп бер ҡараны ла рулгә ултырҙы Иван Семенович. Егет асырғанып, һаман сыҡмаҫҡа тырышҡан, тормошҡа сат йәбешеп ятҡан йәненә ҡарышып, уны сығарырҙай итеп этте. Егет, йән көсөнә тешләнеп, һеңерҙәре өҙөлөрҙәй көсәнеп этеп ебәргәйне, машина ҡуҙғалды, мотор ҙа күңелле гөрөлдәп эшләп китте. «Кеүәт тә бар икән үҙеңдә», — тип һоҡланып уйланы Семеныч, ишекте асып:

— Ултыр әйҙә, — тип ҡысҡырҙы. — Һүнһә, тағы этерһең.

Элмәктән ҡотолоп, һыуыҡта ҡатып ятмаҫ бит инде. Айбулат шым ғына инеп ултырҙы.

— Алыҫҡамы? — тине күңелләнеп киткән Иван Семенович, егеткә һынсыл ҡараш ташлап.

— Алыҫҡа, — тине Айбулат.

— Нимәнән ҡасабыҙ? Закондanмы, мафиянанмы тигәндәй.

Айбулат ирен сите менән генә йылмайыу ишараты сығарҙы.

— Үҙемдән.

— Улай икән, — тиеүҙән башҡа һүҙ тапмай торҙо Иван Семенович. Егеттең мыҡты кәүҙәһенә күҙ һалып алғандан һуң уйсан ғына:

— Ә бит мин һиңә был эштә ярҙам итә алам, — тип ҡуйҙы.

— Ҡасырғамы ни? Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай, тигәнде ишеткәнегеҙ юҡмы ни?

Иван Семенович яуап ҡайтарманы. Үргә табан барған юлда ауыр ажғырған моторға ҡолаҡ һалып:

— Һүнеп кенә ҡуйма инде, ҡороғор, — тип һөйләнде. — Бында һүнһә, бөттөк. — Бер аҙ барғас, яңынан һынсыл ҡараш ташланы: — Минең ҡотҡарыусылар отрядына эшкә киләһеңме?

— Эш ауырмы?

— Гел генә бәлә-ҡазаның уртаһында, кеше ҡайғыһы араһында йөрөү еңелдән түгел. Беҙҙе бит бәлә булмаған

ергә саҡырмайҙар. Йыш ҡына башҡаларҙы ҡотҡарыу өсөн үҙеңде йәлләмәҫкә тура килә.

— Ауыр булһа, мин риза, — тине Айбулат уйлап та тормай.

«Ниндәй үсең бар һуң һинең үҙеңдә? — тигән уй килде Иван Семеновичтың башына. — Оксана Борисовнаға бер аҙ эшләп алырға тура килер, ахыры, һинең менән».

Үргә күтәрелеү менән кеҫә телефоны шылтыраны. Урынбаҫары шылтырата. Иван Семенович ҡаршыға машина ебәрергә ҡушты ла башҡа бойороҡтарын биреп бөткәндән һуң:

— Һин завхоздан бер ҡат кейем яҙҙырып ал әле, — тине. Айбулатҡа боролдо:

— Нисәнсе размер?

— Ҡырҡ һигеҙ.

— Аяҡ кейемең?

— Ҡырҡ ике.

— Ишеттеңме? — тине Семеныч телефонға. — Эйе, баштан-аяҡ. Костин урынына бер егет таптым. Үгеҙ кеүек көслө. Әйткәндәй, уның хәле нисек? Яҡшымы? Күңел тыныс, улайһа. Әҙер торoғоҙ. Аэропортта осрашҡанға тиклем.

— Тауҙарҙа бер ауыл лайғы аҫтында ҡалған, — тип аңлатты ул Айбулатҡа. — Һин хәҙер серем итеп ал, көс йый, унда ҡасан йоҡо эләгерен әйтеп булмай.

Бер тәүлек эсендә яҙмышының ҡырҡа үҙгәреүенә ышаныр-ышанмаҫ ултырған егеткә — улай ҙа була икән был донъяла — яҙмышын күнегелгәнсә командир ҡулына тапшырыуҙан еңел булып китте. Арыуының сигенә лә еткәйне. Хатта МЧС машинаһына күсеп ултырғанда ла йүнләп уяныrға өлгөрмәне. Аэропортка килеп еткәс кенә хәрбиҙәрсә һикереп торҙо.

— Элекке бысраҡ ҡабығыңды сисеп ырғыт та быларҙы кейеп ал. Яңы кейем, яңы сифат, яңы һөнәр. Мине ояҡҡа ҡалдырмаҫһың тип ышанам. — Иван Семенович шаяртыу ҡатыш янап ҡуйҙы: — Ҡара уны, егет, мин ҡыҙыу ул.

Уларҙы ғына көтөп торған самолет күтәрелеп тә китте.

* * *

Икенсе көндө Айбулаттың әсәһе, моңһоу ҡарашлы матур ҡатын, Сәлимәне асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы. Үҙен Айһылыу тип таныштырҙы. «Исеме есеменә ҡалай тап килә», — тип уйланы Сәлимә.

— Кисә кис милициянан шылтыратып һинең һөйләгәндәреңде әйттеләр. Шунан һуң ғына аҙыраҡ эсемә йылы инде. Һин уны иң һуңғы булып күргәнһең. Шуға күрә атаһы менән һиңә үҙебеҙ барып һорашырға тора инек, — тине хужабикә. — Артынан бер кем дә баҫтырмаған, үҙ аяғы менән тороп киткән — шуныһына ҡыуандыҡ. Юғиһә, нимә тип уйларға ла белмәй инек. Эше бик хәүефле ине, енәйәтселәр янағанлыҡтан, икенсе яҡҡа барып йәшәп тә ҡайтҡайны. Ул эшенән китеп, Өфөнән яңы ҡайтып төшкәйне. Ағаһының фатирында туҡтаны. Уныһы иртәнсәк сығып киткән. Кире ҡайтып инеүенә, өйҙөң аҫты-өҫкә килгән, бер-ике сәғәт элек иҫән-аман тороп ҡалған Айбулат юҡ.

Әсә бер генә минут та тик тора алмай, өйрөлөп сәй әҙерләргә тотоноп китте. «Эсе янғанын шулай баҫа, ахыры», — тип уйланы Сәлимә.

— Үс тотҡан бәндәләре аңдып килеп, берәй яҡҡа алып китергә маташты ла ысҡынып ҡастымы икән?

— Улай булһа, кеше араһынан китмәҫ, милицияның, «тиҙ ярҙам»дың килеүен көтөр ине, — тине Сәлимә.

— Беҙ ҙә шулай тип уйланыҡ. — Шул саҡ ҡыңғырау шылтыраны. — Ана атаһы ҡайтты, — Айһылыу ишеккә ашыҡты. — Яңылыҡ юҡмы? — тине түҙемһеҙләнеп.

— Булһа, шылтыратып әйтмәйбеҙме һуң инде, еңгә, — тине кемдер. Тауыш шул тиклем таныш... Сәлимә һағайып ҡолаҡ һалды.

— Берәйһе бармы әллә? — тине икенсе ир.

— Айбулатты тапатҡан ҡыҙыҡай үҙе килгән.

Кухня ишегендә илле йәштәрҙәге мөһабәт ир пәйҙә булды. Тулҡынланып киткән Сәлимә аяғына баҫты ла саҡ йығылмай ҡалды — хужаның артына Иршат килеп баҫты. Егет тә ҡаушап төштө. Аптырауҙан түп-түңәрәк булған күҙҙәре: «Ә һин бында нимә эшләйһең?» — тигәндәй тишеп ҡарай. Үҙ ҡайғыларына батҡан хужаларҙың йәштәрҙә эше юҡ ине. Шунлыҡтан уларҙың халәтен абайламанылар, буғай.

— Тағы ла бер тапҡыр бөтәһен дә һөйләп бирегеҙ әле, һеңлекәш. — Әмирхан Сәлимәнең ҡаршыһына килеп ултырҙы. — Бөтәһен дә үҙ ҡолағыбыҙ менән ишетке килә.

Нимә эшләһен Сәлимә, бөтәһен дә инде әллә нисәнсе тапҡыр ҡабаттан һөйләп бирергә тура килде.

— Ул юлға көтмәгәндә килеп сыҡты. Дөрөҫөрәге, ҡаршымда нисек пәйҙә булғанын күрмәй ҙә ҡалғанмын. Яҡын-тирәлә зебра ла, светофор ҙа юҡ. Ә ул һуҡыр кеше шикелле урамдың ҡап уртаһында тора. Тормозға баҫа һалдым, тик һуң ине. Барып бәрелдем инде, тип, ҡотом осоп күҙемде йомғанмын. Ә ул ҡапыл капотҡа һикерҙе. Быяла аша миңә текләп ҡарап торҙо ла әллә нисек итеп аунап, ергә ҡоланы. Йүгереп сыҡһам, асфальтта һушһыҙ ята, башынан ҡан аға. — Ни тиклем ҡыйын булмаһын, нисек булған, шулай һөйләргә тырышты. — Кеше йыйыла башланы. Кемдер «тиҙ ярҙам»ға шылтыратты. Бер аҙҙан ул күҙен асты ла яйлап ҡына тора башланы. «Әйҙәгеҙ, больницаға барайыҡ, ярағыҙҙы бәйләйек», — тиһәм дә, тыңламаны, кешеләрҙе йыра-йыра, урамдың икенсе яғына сыҡты ла өйҙәр араһына инеп юғалды.

— Берәйһенән ҡасып барғанға оҡшамағайнымы? Артынан баҫтырған йәки эҙәрләгән кеше күренмәнеме? — тине Әмирхан.

— Юҡ, — тине ҡыҙ. Келт итеп иҫенә килеп төшөүҙән тертләп китте. — Тик бер нәмә сәйер тойолдо. Күҙҙәрен асып ҡарағас, ҡыуанысымдан алйот кеүек: «Һеҙ тереме?» — тип һораным. Шул саҡ ул ныҡ асыуланып: «Үлтерергә кәрәк ине», — тине. Нишләптер тере ҡалғанына үкенгән һымаҡ тойолдо...

Тәҙрә янында торған Иршат әллә нисек ағарынып китте лә кеҫәһенән сигаретын һәрмәп лоджияға йүнәлде. Шул саҡ Сәлимә ниҙер аңлай башлағандай булды. Үҙенең фаразынан үҙе һиҫкәнеп тороп баҫты:

— Ярай, мин китәйем инде, — тине ул. — Ғәфү итегеҙ мине, зинһар. Ниндәй генә ярҙам кәрәк булһа ла әйтегеҙ. Дауаларға аҡса-фәләнме, башҡа нәмәме... Рөхсәт итһәгеҙ, мин үҙем дә хәл белешеп торор инем.

Кейенеп бөткәс, ишек төбөндә тапанды ла булмышынан яғымлылыҡ бөркөлөп торған был һылыу ҡатынды ниндәйҙер бер эске ярһыу менән ҡосаҡлап алды:

— Күңелем һиҙә, иҫән-аман ул, апай. Моғайын, берәй нәмәгә тетрәнгән дә, әлегә бер кемде лә күрергә теләг-

мәй генәлер. Асыуы баҫылғас, ҡайтып инер, — тине. — Яңы йыл ҡыуаныслы яңылыҡтар алып килһен. — Шунан ҡолағына ғына: — Бында бер ниндәй ҙә криминал түгел, ябай ғына бәхетһеҙ мөхәббәт булыуы ла мөмкин, — тип бышылданы.

Тышҡа сығыу менән түҙмәне ҡыҙ, Иршаттың кеҫә телефонына шылтыратты:

— Дөрөҫөн генә әйт әле, ағай кеше, — тине ул. — Һин кисә ошо ваҡытта ҡустыңдың һөйгәне менән ята инеңме?

— Аҡылдан шаша башланыңмы, дура! — Иршат екеренгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. «Әһә, ауыртҡан ереңә тейҙеме?!» — тип көлөмһөрәне Сәлимә. Шулай ҙа ауыҙынан үҙеңә ҡарата гел иркә һүҙҙәр генә сыҡҡанына күнеккән кешеңдән тупаҫлыҡ ишетеү ғәрлек ине. Яңағыңа шапылдатып һуҡҡан һымаҡ. «Белә бесәй кемдең итен ашағанды», — тип көлөмһөрәгән булды ла телефонын һүндерә һалды. «Ә бит яҙмыш мине ошондай намыҫһыҙ бәндәгә кейәүгә сығыуҙан үҙе ҡурсалаған», — тигән уй күңеленә йыуаныс бирҙе. Өҫтөнән тау төшкәндәй тойҙо. «Тик Айбулат ҡына иҫән булһын», — тип уйланы ул тормошона бәхетһеҙлек менән бергә килеп ингән бәхетһеҙ егет тураһында.

* * *

Әмирхан был ике йәштең араһында ниндәйҙер бәйләнеш барлығын шунда уҡ һиҙенде. Ҡыҙҙы күреү менән үк Иршаттың йөҙө боҙолғанын, өҫтәл артына килеп ултырғас та, арт һанына беҙ ҡаҙалғандай боршаңлауын, тартырға сығып китеүен — барыһын да иҫәпкә алды. Ҡыҙҙың: «Үлтерергә кәрәк ине, тип әйтте», — тип баҫым яһап ҡабатлауында ла кинәйә бар һымаҡ. Шуға күрә уның подъезд ишегенән сығыуын тәҙрә төбөнә баҫып ҡарап торҙо. Бына ҡыҙ былар яғына ҡараш ташланы ла кеҫә телефонын сығарып ҡолағына терәне. Шул саҡ лоджияла торған Иршаттың телефоны шылтыраны.

— Аҡылдан шаша башланыңмы, дура?! — тип екерҙе Иршат.

Тап шул ваҡытта был ҡыҙҙың исем-фамилияһының ҡайҙан шул тиклем таныш тойолғанын аңланы Әмирхан:

Сәлимә Ғәлиева — Саръян Ғәлиевтең ҡыҙы, буласаҡ килен бит. Иҫәр баш, нисек кисә үк иҫенә төшмәгән?!

Аш йылытып икеһен дә өҫтәлгә саҡырған ҡатыны иренең уйын белеп торғандай:

— Туйыбыҙҙың да көнө килеп етә бит әле, Иршат, — тип һораулы ҡараны.

— Туй ҡайғыһымы ни әле, еңгә? — Ҡәйнеше төшөнкө тауыш менән ҡул һелтәне. Шунан ҡапыл ашығып китте: — Ағай, әлегә йомошоң булмаһа, эшемә барып күҙ-ҡолаҡ булып килер инем.

— Йомошом бар, — тине Әмирхан. — Һин, әсәһе, яҡшылап беҙҙең тамаҡты туйҙыр ҙа...

Шундай мәлдә ауыҙға аш барамы. Унан-бынан ҡапҡыланылар ҙа машинаға сығып ултырҙылар.

— Әйҙә ҡабаттан фатирыңа барайыҡ әле, — тине Әмирхан ҡустыһына һынсыл ҡарап. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй, әллә Иршатҡа ғына шулай тойолдомо? — Минең башҡа бер уй килде.

Ә Иршат бөтәһен дә һөйләп бирергә әҙер ине. Алданған ҡатын-ҡыҙҙан да яһилы юҡ. Сәлимә, иртәмеһуңмы, барыбер уның Азалия менән шаярғаны тураһында килтереп еткерәсәк. Моғайын, Айбулат та ниҙер һиҙенгән. Иршат кисә үк, милиционерҙар сит кешеләрҙең эҙен тапмағас, өйҙө ул ҡыйратҡанына ышана башлағайны. Йыуаштан йыуан сыға. Әллә ҡайҙа, ҡанлы нөктәләрҙә, кеше үлтереп йөрөгән бәндәнең ҡулынан был ғына килмәҫ тимә.

Юлда барғанда һәр икеһе бер үк нәмә хаҡында уйланы.

Иршат атайһыҙ үҫте. Атайлы-олатайлы, ағайлы-ҡустылы малайҙарҙан үҙен иҫләй башлағандан алып үлә яҙып көнләшә торғайны. Бары тик ун йәштәр тирәһендә генә әсәһенең бер туған ҡустыһы Әмирхан ағаһына бауыр баҫты.

Апаһының ирһеҙ бала табып ултырыуына бик ныҡ ғәрләнгәйне Әмирхан. Әсәһе: «Һин атай урынында ҡалдың, балам. Төп таянысым һин», — тип үҙындырып үҫтергәнгә күрә, апаһының ояты өсөн үҙен ниндәйҙер кимәлдә яуаплы тойғандыр, бәлки. Рәнйетерлек һүҙҙәр әйтеп, бик ҡаты ҡағылды. Хатта бер килке тыуған йортҡа ҡайтмай ҙа йөрөнө. Әсәһе илап та, өгөтләп тә, асыуланып та ҡараны: «Бейә имсәгеләй ике генә бөртөкһөгөҙ. Бер-берегеҙгә терәк булырһығыҙ, тинем, үҙәгем

өҙөлөп асыҡҡанда ла ризыҡты үҙ ауыҙыма алмай, һеҙгә ҡаптырҙым, күҙ ҡарамдай аяп үҫтерҙем. Яңылышлығы өсөн ул яҙаһын алған инде, нишләп шул тиклем ҡаты бәғерлеһең?!» Йыландай телен сығарып ялынған әсәһе-нең ялбарыуына ла имшемәне улы.

Байтаҡ йылдар үткәс, апаһы ҡаты ауырыуға тарыны. Хирург таныш ине, хәлдең бик мөшкөл икәнен Әмирханға саҡырып аңлатты, ҡан тапшырырға бер нисә кеше табырға ла ҡушты. Операция өҫтәленә ятыр алдынан, «әллә үләм, әллә ҡалам» тигәндер инде, апаһы ҡустыһы-ның ҡулынан тотто ла күҙенә туп-тура ҡарап: «Ҡаҡма, туғаным, шул баланы. Уның был донъяла һинән башҡа күҙ терәп торорлоҡ бер кешеһе лә юҡ бит», — тип ялынды.

Бәләкәй саҡтан итәгенә тағылып, ҡайҙа барһа ла артынан эйәреп, әсәһенән ғәйре ошо апаһына һыйынып үҫкәйне Әмирхан. Уны бик ярата ине. Моғайын, шул ратҡанға күрә лә уның оятын хыянат һымаҡ ауыр ҡабул иткәндер, — апаһынан үҙе ғәфү һораны. Ысынлап та, былай ҙа бәхетһеҙ апаһын көйҙөргәненә үкенерлек хәлгә еткәйне инде ул. Шөкөр, апаһы иҫән ҡалды, оҙаҡ йылдар һыҙып ҡына ауырыһа ла һаман йөрөп ята.

Ә Әмирхан, элекке ҡатылығын юйыр өсөндөр, малайҙы үҙенә ныҡ яҡынайтты. Иршатты үҙҙәре әле йәшәп ятҡан ҡала мәктәбенә бирҙеләр. Малай интернатта ятып уҡыны, ә ял һайын йә Әмирхан ағаһы, ул бушамағанда Айһылыу еңгәһе килеп үҙҙәренә алып ҡайтыр булды. Бойороҡ көтөп, хужаһының күҙенә генә .ҡарап ултырған эт һымаҡ тоғро Иршатты яратмай мөмкин дә булмағандыр. Сос та, йылғыр ҙа. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Әмирхан үҙенең улы Айбулаттың шундай булыуын теләр ине. Бына тигән һунарсы ла, балыҡсы ла. Яралы ҡуянды сала алмай, йәлләп, күҙенән йәше ҡойолоп ултырған Айбулат түгел инде.

Ә Иршат Айбулатты, тыштан, мырҙам, тип өҙөлөп торған булһа ла, күңел төбөндә көндәш күрҙе. Аңһыҙ рәүештә лә, аңламай ҙа, атай кешегә уның улына ҡарағанда үҙенең шәберәк, тоғрораҡ, сосораҡ икәнен күрһәтергә, раҫларға әмәл сыҡҡанын аңдып ҡына йөрөнө. Уңайлы мәлде бер ваҡытта ла ысҡындырманы. Дүрт йәшкә өлкәнерәк тә булғас, Айбулаттың мәшәү, эшкә ашмаған, етмәһә, холоҡһоҙ икәнен күрһәтеү, ата менән ул араһына шына ҡағыу һис тә ҡыйын түгел, үҙенән-

үҙе шулай килеп сыҡҡан һымаҡ ине. Шул уҡ ваҡытта малай-шалай араһында Айбулатты һәр саҡ ҡурсалап йөрөттө, бер ҙә ел-ямғыр тейҙермәне.

Ә атай кеше Иршатты маҡтау, Иршатты үсендереүҙе үҙ улына йоғонто яһау, сәм уятыу сараһы итеп алған булғайны. Улының ярыш-көрәш юлына баҫырға теләмәүен дә ебегәнлек, ир булырға, әҙәм булырға теләмәү тип тағы ла ныҡыраҡ йәне көйөп китә. Айбулат, атаһының уны шулай һындырырға, ҡулға эйәләштерергә маташыуын тойоп, был йәмһеҙ уйынға ҡатнашыуҙан тайшана килде. Ә Әмирхан, үсеккән бала кеүек, Иршатҡа ҙурыраҡ «киҫәк» ташлай. Ул һәр ваҡыт малайҙарҙың күҙен ҡыҙҙырырлыҡ нәмәне берҙе генә ала ла, был әйбергә Айбулаттың лайыҡ түгеллеген раҫлағандан һуң, тартып алып Иршатҡа тоттороуҙан ниндәйҙер эске ләззәт кисерә торғайны.

Бер мәлде, Айбулаттың танауына еҫ инә башлаған саҡ ине, атай кеше командировканан бик матур күн куртка алып ҡайтты. Тап шул осорҙа класташ ҡыҙына күҙе төшөп йөрөй ине, әйбер тип иҫе китеп бармаған Айбулат был кейемгә бер ваҡытта ла булмағанса шатланды. Бер нисә көндән иһә, юҡтан ғына килеп сыҡҡан ыҙғыш арҡаһында, Әмирхан, шул куртканы улының өҫтөнән һелкетә систереп, Иршатҡа кейҙерҙе. Был, моғайын, үҫмерҙең күңелендә һуңғы тамсы булғандыр. Унда атаһына яҡынайыу, аңларға, тыңларға тырышыу ынтылышы бөтөнләй юҡҡа сыҡты.

Әмирхан иһә, ҡатынының йоғонтоһо аҫтында, ысынлап та был юлы артыҡ шаштырып ташлағанын аңлағайны. Ғәйебен юйырға теләп, улының ун биш йәшенә мотоцикл бүләк итте. Тик Айбулат ул саҡта теләһә ҡасан тартып алып булған матди әйберҙәрҙән ғәйре рухи азатлыҡ икәнен тойоп өлгөргәйне. Бүләкте тыныс ҡына ҡабул итеп алды ла: «Иршат менән икебеҙгә уртаҡ булһын», — тине. Ә инде Айбулат үҙ ихтыярын һәм теләктәрен ныҡыраҡ ҡурсалай башлағас, атай менән ул араһындағы мөнәсәбәт асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ төҫөн алды. Бары Иршат ҡына ҡайҙа кәрәк йомшартып, ҡайҙа кәрәк үҙенән өҫтәп, һәр икеһененң ишетергә теләгәндәрен һөйләп арала йөрөнө. Тора-бара өс ҡыҙ араһында берҙән-бер малайы үҫкән Әмирханда ла, ире менән улы араһында өҙгөләнгән әсәлә лә, Айбулаттың үҙендә лә:

«Әлдә Иршат бар, ул булмаһа, нишләр инек?» — тигән фекер нығынды.

Әмирхан ағаһы Иршатты армияға ебәрмәне, сөнки тап шул мәлдә етәксе урында эшләүе менән файҙаланып, бизнес асып ебәргәйне. Военком дуҫы менән әүештәүеш итеп, ҡустыһын алып ҡалыу бер нимә лә тормаҡы. Иршат шунда төпкә егелде, ситтән тороп уҡырға инде.

Ә нефть университетының беренсе курсында уҡығанда Айбулат үҙ теләге менән армияға китеп барҙы. Атаһы менән әсәһенә был хаҡта иртәнсәк юлға сығырға тигәндә генә хәбәр итте. Саҡ ҡына хеҙмәт итеү менән һуғышҡа барып эләкте. Йыл ярым буйы бер инеп, бер сығып тигәндәй, һуғышта йөрөнө, эстән дә, тыштан да ҡара көйөп ҡайтты ул. «Был минең юлым түгел», — тип ҡабат университетҡа барманы. Ике-өс ай буйына аңҡытиңке килеп йөрөгәндән һуң, контракт буйынса йәнә армияға китергә булды. Бер имшегән сағында Иршат ағаһына командирының, уны ҡотҡарам тип, бик ҡаты яраланыуы һәм госпиталгә алып барып өлгөрмәүҙәре тураһында һөйләп һалғайны. «Ике балаһы ҡалған», — тине әсенеп. Иршат шул көндө үк мул ғына аҡса алып килде. «Беҙҙең ғаиләнән командирыңдың ғаиләһенә ярҙам да, рәхмәт тә булһын», — тине. «Беҙҙең ғаилә» тип туғанлыҡ хистәренә баҫым яһап әйтте. Ҡотолғоһоҙ ҡайғы менән ғәйеп тойғоһон матди юҫыҡҡа күсереү мөмкинлеген башына ла индермәгән Айбулатҡа был бер аҙ еңеллек килтерҙе, буғай. «Һин был донъя кешеһе шул», — тине ул ағаһының ҡулын ҡыҫып. Үҙе лә ай һайын аҡса күсерә башланы.

Айбулаттың эшкә инеүе Әмирханһыҙ булманы, әлбиттә. «Әйҙә ҡотҡарһын донъяны, изгелек ҡылһын Алла бәндәһе, — тип үҙенең ҡыҫылышы барлығын күрһәтмәй генә, әлеге лә баяғы, шул Иршат аша наркотиктарға ҡаршы көрәш идаралығына урынлаштырҙы. — Һуғыш кәрәк булғас, йөрөһөн шунда». Бик мауығып, бөтөн донъяны паклаған кешеләй йөрөп ятҡан була ине, бер наркоманканың ҡармағына барып ҡапҡансы. Шундайыраҡ берәй нәмә килеп сығасағын белә ине Әмирхан: «Сусҡа бысраҡ таба!» Аптыраманы ул, әммә бик ҡаты туҙынды. Тәүҙә үҙе шылтыратып һүкте, шунан: «Әгәр ҙә ташламай икән, атаһы ла, әсәһе лә юҡ», — тип Иршат

аша ла еткерҙе. «Нык ҡыҙған, малай. Күҙемә күренмәһен, йә үлтерә һуғып ҡуйырмын, тип әйтә».

Айбулат Иршатҡа әйтеп бөтөргөһөҙ рәхмәтле ине. Азалияны дауаларға аҡсаның да күбеһен ул бирҙе, фатирында йәшәп торорға ла үҙе тәҡдим итте.

Быяла ярсыҡтарына баҫа-баҫа тәҙрәһе имен ҡалған берҙән-бер бүлмә — кухняға инеп, һыныҡ ултырғыстарға терәлгәс, Әмирхан Иршатҡа туп-тура ҡарап:

— Башла! — тине.

Иршат был ваҡытта нимә һөйләргә, нисек һөйләргә тотош уйлап ҡуйғайны, әҙер ине. Алдаманы ул, саҡ ҡына үҙгәртеңкерәп, барыһын да һөйләп бирҙе.

Айбулаттың, наркоманкаһын алып, Иршаттың фатирына йәшәргә килеүен ишеткәс, Әмирхандың үҙенең башына ла ошондай уҡ уй килгәйне. Хатта бер тапҡыр: «Биҙҙер һине уны», — тип ауыҙын аса һалып та ҡуйғайны. Оҙаҡламай өйләнәм, тип дәртләнеп йөрөгән ҡустыһын рәнйетеү ихтималын уйлап ҡына биҙҙереү ысулын әйтеп еткермәй тыйылды. Әле иһә Иршатты тыңлап ултыра торғас:

— Оҫта, — тип ҡуйҙы, ирекһеҙҙән, һоҡланып.

— Мин ул кәнтәйҙең һинең тырнағыңа ла тормауын иҫбат итә алам, тинем. Ул бит бөтәһен дә белеп, үҙе риза булып тороп ҡалғайны.

— Риза булып ҡалғас, ниңә аулаҡҡа саҡырҙың һуң? Яңы ояңды бысратыуҙан да ҡурҡмағанһың. Ҡустыңа яҡшылыҡ ҡылып ятҡаныңда, буласаҡ кәләшең килеп баҫты ла изге ниәтеңде аңламайынса, ғауға ҡуптарып, бөтә эште боҙҙо инде, шулаймы?

— Һинең кеүек тәжрибәле кешегә аңлатып тороуҙың да кәрәге... — тип Әмирхандың үҙе кеүек үк уҫал кинәйә менән яуап ҡайтарҙы Иршат, йәне көйөп. «Ҡайһылай суфый булып ҡыланмаҡ!»

«Йылан! — Әмирхан ҡустыһына беренсе тапҡыр күргәндәй иғтибар менән ҡараны. — Ҡуйыныма һыйындырып, иркәләп үҫтергән йылан!»

— Донъяңды ғына емереү аҙ. Шунда башыңды ла вата һуғырға кәрәк ине. Ярай ҡул аҫтына эләкмәгәнһең. — Әмирхан ғүмер буйына, үҙе лә төшөнмәйенсә, улының ихтирамын көҫәгәнен, шул ихтирамды яулай алмағанлыҡтан һындырырға, буйһондорорға маташҡанын аңланы. Ә Иршатты бары үҙе нисек кәрәк таба, шулай

файҙаланған һәм әле килеп ҡустыһы, үҙен эшкә һанамаған өсөн Айбулатты мыҫҡыл итеп, уның атаһынан үс ала. Атайһыҙ малайҙың ата менән улдан көнләшеүе, үҙе кисергән кәмһенеү өсөн ҡон ҡайтарыуы был. Иршат ғүмер буйы Айбулаттан тартып алғанды эткә ташлағандай үҙенә ырғытмайынса, үҙенә тәғәйенләп алыуҙарын теләр ине. Һуңғы осорҙа яҙмышының, ниһайәт, үҙенә мәрхәмәтле яғы менән бороლғанына бәхетле ине Иршат. Ғорур ҙа ине — ҡаланың иң бай һәм сибәр ҡыҙҙарының береһе — уның кәләше, туй бүләгенә — байҙар йортонда фатир, иң шәп ресторанда — туй. Иң мөһиме — былар барыһы ла яратып бирелә, яратҡан өсөн бирелә. Үҙе яратамы, яратмаймы, был уй Иршаттың башына инеп тә сыҡмай — башҡаса булыуы мөмкинме һуң, — уны, уны! — шундай ҡыҙ ярата! Иҫеңде алырлыҡ хайраны бына нимәлә бит!

Әле иһә барыһы ла юҡҡа сыҡты.

Ағаһы ла, ҡустыһы ла кеше мөнәсәбәттәре, хис-тойғолар хаҡында артыҡ баш вата торған заттан булмаһа ла, әле шуларҙы бөтөн әселегендә тойоп, бер-береһенә нәфрәт менән тексәйҙе.

— Күҙемә күренмәй тор, — тине Әмирхан быяла ватыҡтарына баҫа-баҫа ишеккә табан атлағанда, хас та этен тибеп осорған хужа һымаҡ, һәм артынан ишекте ябып та тормайынса сығып китте.

Машинаһына инеп ултырҙы ла, башын рулгә терәп, күҙен йомдо. Бармаҡ ҡыбырлатырлыҡ та хәле ҡалмағанын һиҙҙе. Айбулат һуғышта йөрөгәндә лә, госпиталдә ятҡанда ла был тиклем өҙгөләнмәгән һымаҡ ине. Гел генә йөрәге һыҙлап йөрөгән дә, тиҫкәрелегенә барып, хатта үҙенә лә танырға ирек кенә бирмәгән булған. Тик нишләптер әле бигерәк ауыр: улын башҡаса бер ваҡытта ла күрә алмаҫ һымаҡ. Әйтерһең дә, йөрәген һурып алғандар ҙа, урыны ҡәбер соҡоро ише өңрәйеп тороп ҡалған. «Тигенгә түгел был», — тигән шөбһәһенен өркөтөр өсөн ашығып машинаһын тоҡандырҙы. Мәңгегә юғалтҡандыр һымаҡ.

Уйынан бөгөлөп төштө. Ҡуҙғалып киткән ерҙә ҡабат туҡтаны.

*Ҡаҙ бәпкәләрeләй һары икән,*
*Теҙелеп-теҙелеп һыуҙарға бара икән,*
*Йөрәк башҡайына ҡан һауҙырып,*
*Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән.*

«Атайыңдың иң ятаҡан йыры. Шуны йырлап, күңелен бушатыр, йыуаныс табыр ине», — ти торғайны ике бала менән йәшләй генә яңғыҙ тороп ҡалған әсәһе. Он тарттырырға киткән еренән машиналары аварияға осрап һәләк булған ирен ғүмере буйы һағынып йәшәне ул. «Юҡ-барға үпкәләп, оҙатмай ҙа тороп ҡалғайным», — тип ҡабат-ҡабат үкенеп һөйләр ине. Әмирханға ла шулай үкенергә яҙғанмы икән ни?

Йыр тағы ла нығыраҡ әрнетеп ебәрҙе йәнен, — ҡайһылай ғазаплы был билдәһеҙлек. Аллаға ла, муллаға ла ышанмаған ҡаты заттарҙан Әмирхан. Әммә әле бер өмөтлө һүҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер ине. Үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр инанысы булмағанға әсенде. «Иң ҡайғылы мәлдәремдә Аллаға һыйындым», — ти торғайны әсәһе. — Бер терәкһеҙ йәшәй алмай кеше».

Машинаһын тоҡандырып мәсет юлына бороддо ир. Иҙәненә йомшаҡ келәм түшәлгән ҡотло бинала бер кеше лә юҡ. Халыҡ Яңы йыл ҡаршыларға әҙерлек менән мәшғүл. Бәләкәй генә тәҙрәнән ҡояш нуры ағылған урынға килеп, тубыҡланып ултырҙы ла шымды. Ҡалайтырға, нимә әйтергә, нисек доға ҡылырға? — «Һин Үҙең бөтәһен дә беләһең бит инде, Хоҙай, — тип өндәште ябай ғына итеп. — Улымдың ғүмерен һаҡла».

Тере килеш барып тапһа, быға тиклем күрһәткән бөтә ыҙалары өсөн дә ғәфү үтенеп, улының күңелен яулар өсөн бөтәһен дә эшләр ине Әмирхан. «Ғәҙел бала ул Айбулат, — тине ата кеше Хоҙайға. — Күңеле матур униң». Әллә үҙ-үҙе менән ғүмеренә беренсе тапҡыр мутлашмай һөйләштеме? Ҡолағында һаман йыр өйөрөлдө: «Йөрәк башҡайына ҡан һауҙырған...»

Тап ошо минутта Себерҙәге ҡалаларҙың береһендә йөгөн бушатҡандан һуң өйө янына килеп туҡтаған Анатолий Кузнецов кабинаһының иҙәнендә аяҡ аҫтында аунап ятҡан кеҫә телефоны табып алды. «Моғайын, теге егеттекелер», — тип уйланы ул зарядкаһы бөткән «Самсунг»ты әйләндереп-тулғандырып ҡарап. Күрәһең, ҡанлы кейемен алмаштырғанда төшкәндер. Ҡанлы свитер һалынған пакетты ла ташларғамы, ташламаҫҡамы, тип тотоп торҙо ла ҡабат төрөп тыҡты. «Әсәй бәйләне», — тигәйне. Бынау байрам көндө улының ҡайҙалығын да белмәйенсә ут йотоп ултырған әсәне күҙ алдына килтерҙе Анатолий. Ҡаршыһына йүгереп сыҡҡан улына тотторҙо: «Ошоға ярайлы берәй зарядка юҡмы? Теле-

фоны аша хужаһын эҙләп ҡарарға кәрәк». Яурынын иҙеп килгән ауыр уйҙарынан миктәп, артабан ултырырға ла тороп китергә лә көс таба алмаған Әмирхандың кеҫә телефоны шылтыраны. Ҡалтыранған ҡулы менән кеҫәһенән һәрмәп ала һалды — бәлки, ниһайәт, бер хәбәр барҙыр... Урынбаҫары хәл белеп кенә шылтырата. Ҡыш бабайҙың барлығына ышанғыһы килгән, тик тағы алданған бала һымаҡ үсегеү тойғоһо менән ҡабаланып урынынан торҙо, буш өмөтө өсөн оят та, ғәрлек тә булып китте. Машинаһына сығып ултырҙы ла, байрам булһа ла, эшенә юлланды, бына ҡайҙа үҙен көслө, аҡыллы һәм ышанысты тоя ул.

— Теге телефон терелеү менән туҡтауһыҙ шылтырай башланы, — тип ҡаршыланы ҡатыны эшен бөтөрөп ингән Анатолийҙы. — Яуап ҡайтарылмаған звоноктар тураһында хәбәрҙәр килә.

Телефон номерҙары араһынан «әсәй» тип һаҡланғанына ҡарап уйлана биреп торҙо Анатолий. Нимә тип әйтергә? Нисек йыуатырға? Ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәшен күтәрә алмаған ир исемлекте артабан ҡараны. Әһә, бына «атай» тигәне бар.

Кабинетына саҡ өҫтөрәлеп инеп, өҫтәл артына тоҡ һымаҡ барып ултырған Әмирхан был юлы шылтыраған телефонына иғтибар итмәне. Донъялағы тик бер генә тауышты ишетергә теләр ине ул әле. Тик улы имен мәлдәрҙә лә артыҡ шылтыратып бармай ине. Шуға күрә шом баҫҡан күңеленең бер яҡшылыҡҡа ла өмөтө юҡ. Бәләгә батҡанды белмәгән берәйһе етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлайҙыр. Тора биргәс, телефон ҡабаттан шылтыраны, оҙаҡ...

Аллы ла йөрәге өҙөлөп төшөрҙәй булып ҡалтыранды:

— Айбулат, — тип ҡысҡырҙы ул.

— Отец, — тине таныш түгел тауыш. — Отец, һеҙ борсолмағыҙ, — тип әйтергә ашыҡты. — Һеҙҙең номер шулай тип һаҡланған. Телефонын юғалтып киткәндә ул иҫәнаман ине. Ул бирешерлек егет түгел...

Әмирхан бер һүҙ ҙә әйтә алманы, күкрәк тәңгәленән ниндәйҙер көс дер һелкетеүҙән һулышын ала алмай торҙо. Һыңҡылдап илағанын аңламаны ул башта, күптән инде үкһегәне булмаған икән. «Мин хәҙер, туҡтап торорғоҙ», — тип ҡабатланы ул тыйыла алмайынса.

Анатолий бар белгәнен һөйләп биргәндән һуң, оҙаҡламай тағы юлға сығасағын һәм бер ыңғайҙан уларға һуғылып, әйберҙәрҙе ҡалдырып китә алғанын әйтте.

— Рәхмәт, бик ҙур рәхмәт һеҙгә, туған, — тине Әмирхан.

«Рәхмәт, Хоҙайым, — тине ул күңеленән. — Һыйындырҙың, рәхмәт». Ҡапыл үҙгәреп киткән һәм уға быға тиклем билдәһеҙ булған мөҡәддәслек-ҡөҙрәт, мәғәнәбәйләнештәр, тәрәнлек-миһырбан менән асылған донъяға танымайынса, тәжрибәһеҙ сабый күҙе менән ҡараны.

* * *

Самолет килеп төшөү менән урындағы МЧС-тың уларҙы көтөп торған вертолетына күсеп ултырҙылар. Өҫтән ҡарағанда тауҙар зәңгәрһыу боҙлоҡтары менән аҡ елкәндәрен күтәргән караптарға оҡшап китә. Ҡаялар, йырындар, йылғаларҙың үҙәнендә ятҡан ҙур-ҙур таштар, тарлауыҡтар... Үҙеңде был мөһабәтлек алдында кеcһеҙ һәм ярҙамһыҙ итеп тояһың.

Бәләгә тарыған ауылға килеп еткәс, Айбулат ҡояшта емелдәп ятҡан аҡлыҡҡа, зәп-зәңгәр күк һәм ғорур тауҙарға ҡарап тын ала алмай торҙо, башы әйләнеп китте. Тау һауаһына организм күнегергә лә тейеш шул.

Уларҙы ҡаршылаған кешеләрҙең өнһеҙлөгө һәм ҡара һөрөм баҫҡан йөҙҙәр был аҡлыҡ эсендә, кәфенгә төрөлгән мәйет һымаҡ, бөткөһөҙ хәсрәт ятҡанын иҫкә төшөрҙө. Тәбиғәттең — үҙ ҡанундары. Тау башынан төшкән ҡар ишелмәһен — лайғыны һул яҡтан көткәндәр. Ә ул уңдан ауған һәм ярты ауыл ҡар аҫтында ҡалған. Ул шул тиклем ҡеүәтле булған, бетондан төҙөлгән ике-өс ҡатлы йорттарҙы ҡатырғалай емергән. Иң ҡыҙғанысы: тап шул ваҡытта мәктәптә шыршы байрамы барған. Унда йыйылған балалар, уҡытыусылар, ата-әсәләр — барыһы ла ҡар аҫтында ҡалған. Иң беренсе бурыс — уларҙы ҡаҙып сығарыу.

Мәктәп урынында башҡа ҡалаларҙан килгән ике отряд эшкә тотонғайны инде. Ҡайһы берәүҙәр өҫкө яҡтан аҡтара башлаған. Ә былай эшләүҙең төптө дөрөҫ булмағанын уйлап, Иван Семенович эште дөйөм план буйынса ойошторорға тәҡдим итте. Иң элек шыршы торған спорт залына үтеп инергә кәрәк. Сөнки күбеһе

шунда йыйылған булған. Иҫән ҡалған ата-әсәләр ярҙамы менән уның теүәл генә урынын билдәләнеләр ҙә, төп көстө шунда ҡуйҙылар. Икешәрләп эшләйҙәр. Берәү со-ҡоп алға бара һәм ҡарҙы плащ-палаткаға тултыра, икен-сеһе һөйрәп сығарып түгә. Утыҙ минут эшләйҙәр ҙә, утыҙ минут ял.

Ике сәғәт самаһы ҡаҙығандан һуң ғына берәүҙе таптылар. Йәш кенә ҡыҙ, башланғыс кластар уҡытыусыһы, тинеләр. Врач ни тиклем генә тырышып ҡараһа ла, уның тере түгел икәнен раҫлауҙан уҙа алманы. Тәжрибәһеҙ-лектәндер, Айбулат быға тиклем ҡар аҫтында ҡалған кешеләрҙең тере булмаҫҡа ла мөмкин икәнен бөтөнләй уйламаған, тереләрҙе эҙләгән. Әле иһә йәш кенә ҡыҙ-ҙың йәнһеҙ кәүҙәһенә тетрәнеп ҡарап торҙо. Ирендә-ренә буялған ҡыҙыл буяҡ та бөтмәгән, бөҙрә сәстәрендә аҡ ҡар емелдәй, ҡурсаҡ һымаҡ йылмая биреп ята. Һу-ғышта ла ул тап ошоға күнегә алманы: кеше әле генә бар ине, бына юҡ. Тәмәкеһе һаман көйрәп ята, ә ул үҙе һүнгән.

Фажиғәнең бөтөн аянысы Айбулаттың башына әле генә барып етте. Ҡаҙырға уның сираты булһа ла, ситкә барҙы ла башын баҫып ултырҙы. Һәр нәмәгә күҙ-ҡолаҡ булырға өлгөргән Иван Семенович, яңы егеткә күҙ һалып, ҡараңҡырап йөрөй ине. Һәләкәт урындарында эшләгәндә иң ҡыйыны — кешеләргә төшкән ҡайғы менән осрашыу. Быны һәр кем кисерә алмай, йыш ҡына имәндәй ныҡ ирҙәр бөгөлөп төшә, психолог ярҙамына мохтаж була. Әле лә отрядтың психотерапевын саҡы-рырға тура килмәгәйе...

Ә Айбулат башын ҡосаҡлаған да саҡ ҡына сайҡала биреп ултыра. Һуғышта үлем менән күҙмә-күҙ ҡалған саҡта булмыштың аң етмәҫ тәрәнлегенән ниндәйҙер ҡырағай көс, януар зирәклеге ҡалҡып сыҡҡанын тойға-ны бар ине уның. Әле йәнә шул халәткә инергә тырыш-ты, үҙен ярҙамға мохтаж йәндәрҙең тулҡынына көйлән-гән антенна итеп күҙ алдына килтерҙе. Ултыра биргәс, Айбулат үҙен ниндәйҙер аңлашылмаған тауыштан терт-ләгән болан шикелле тойҙо. Ундай ваҡытта болан тотош ҡолаҡҡа әүерелә, нервылары көсөргәнештән йәйә кере-шеләй тартыла, тәне дерелдәй. Әйтерһең дә һәр бер кү-ҙәнәге йәшәү тулҡындарын аулауға көйләнә. Айбулат-тың да күҙҙәре, сәстәре, тиреһе, аяҡтары, бармаҡтары, һәр бер күҙәнәге антеннаға әйләнде. Егет, ниндәйҙер

бер көскә буйһоноп, урынынан ҡалҡты. Быға тиклем соҡоған урынға барманы, ҡулын алға һоноп, бөтөнләй икенсе яҡҡа йүнәлде.

— Бында класс бүлмәләре булған. Ә балалар барыһы ла шыршы ҡуйылған спорт залында ине, — тине кемдер уның еңенән тартып. Айбулат уға иҫерек кешеләй бер нимә лә аңламай текләп торҙо ла яңы урында ҡаҙа башланы.

Тора-бара егеттең ныҡышмаллығы, арыу-талыуҙы белмәй ирлән кеүек өңөп барыуы тағы бер нисә кешегә тәьҫир итте. Улар үҙ сираттарында ял итер урынға, Айбулатҡа ярҙам итергә тотондо. Ике сәғәт самаһы ҡаҙығас, ҡар ауырлығынан емерелгән өрлөккә барып төртөлдөләр. Түшәм таҡталарын күтәрҙеләр. Уның аҫтында нисектер теүәл ҡалған шкафтың ишектәрен әрсәләп асып ебәргәйнеләр, бер-береһенә һыйынып йомарланған ике малай ята. Тереләр!

Ҡыуаныслы хәбәр ҡолаҡтан ҡолаҡҡа таралды, балаларҙың әсәләре йүгереп килде. Был табыш ҡайғылы өнһөҙлөккә сумған ауылға тереһыу һипкәндәй аҙыраҡ йән индерҙе. Өмөттө терелтте. Ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, был тәүге һәм һуңғы ҡыуаныс булды. Ул арала башҡалар спорт залына барып еткәйне. Унан бер-бер артлы өнһөҙйәнһеҙ кәүҙәләрҙе сығара башланылар.

...Ҡар бөртөктәре, күбәләктәр, ҡуяндар, үрмәксекеше, Мальвина, Пьеро, Буратино... «Өлгөрмәнем, — тип бышылданы Айбулат, был ҡайғылы сылбырға баҫып, мәйеттәрҙе ҡулдан-ҡулға тапшырып, өҫкә сығарғанда. — Өлгөрмәнем, өлгөрмәнем, өлгөрмәнем», — тип йыбырланы ирене.

Йылдан ашыу һуғышта, унан наркомандар араһында айҡашып йөрөгән Айбулат әҙәм балаларының, асылда, ниндәй саф һәм гүзәл булғанын бөтөнләй онотҡан булған. «Был ғәҙел түгел, ғәҙел түгел!» — тигән өнһөҙ оран алҡымына килеп тығылды ла ул шартлауҙан ҡурҡып, ярҙам һорағандай тирә-яғына ҡараны: барыһы ла башын баҫҡан, ирендәрен ҡымтыған — ҡайғынан ҡатып ҡалған йөҙҙәр.

— Яңы егетте сылбырҙан сығарығыҙ, — тине тәжрибәле ҡотҡарыусыларҙың береһе Иван Семеновичҡа. — Тәүге тапҡырға артыҡ күп булыр...

Кемдеңдер яурынынан килеп ҡосаҡлағанға, айныған-дай булды Айбулат: бәләкәс кенә, йомшаҡ ҡына ҡул, хас та әсәһенеке һымаҡ.

— Ниндәй доға уҡыйһың, Айбулат? — тине отрядтың психотерапевы Оксана Борисовна, егетте ситкәрәк әйҙәп. Ә ул уның һүҙҙәрен аңламайынса зарлы сараһыҙлыҡ менән күҙҙәрен тултырып ҡараған да киткән. Ирендәре һаман:

— Өлгөрмәнем, өлгөрмәнем, — тип йыбырлауын дауам итте.

— Һин өлгөрә алмай инең.

— Өлгөрмәнем, өлгөрмәнем...

— Тыңла мине, егет, — тине психотерапевт янына килеп баҫҡан Иван Семенович. — Беҙ өлгөрә алмай инек!

— Өлгөрә ала инек, — тип ҡарышлашты егет. — Әгәр ҙә мин тиҙерәк емерһәм, тиҙерәк йүгерһәм, үҙемде йәлләп, юл ситендә аунап ятмаһам, машинаны тиҙерәк тоҡандырыр инек тә, самолетҡа алданыраҡ килеп етер инек. Беҙ әллә нисәмә сәғәтте бушҡа әрәм иттек.

— Әгәр ҙә һин артабан да ҡотҡарыусы булып эшләргә теләйһең икән, ҡолағыңа бер нәмәне киртеп ҡуй! — тине Иван Семенович асыулы итеп. — Бер ваҡытта ла Аллалыҡҡа дәғүә итмә. Беҙ бары тик кеше генә. Кеше генә! Был бисаралар бер нисә минут эсендә һәләк булған. Хатта ошо мәктәптең эргәһендә баҫып торған булһаҡ та, беҙ уларҙы ҡотҡарып өлгөрә алмаҫ инек.

* * *

Айбулат, ҡотҡарыусылар отрядына эшкә урынлашып, тауҙарҙа йәшәргә тороп ҡалды. Ниһайәт, үҙенең урынын тапҡанын аңланы ул. Бында ла һин һәр ваҡыт йәшәү менән үлем сигенән йөрөйһөң, әжәл менән баҫтырыш уйнайһың, тик был уйын адреналин хаҡына ла, һуғыштағы һымаҡ башҡаларҙың йәнен ҡыйыу өсөн дә түгел, икенсе кешенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалыу өсөн көрәш. Ә был йәшәүгә бөтөнләй икенсе төрлө мәғәнә бирә. Һин бында тәбиғәттең алдында үҙеңдең кешелегеңде һынайһың.

Һуңғы егерме йыл эсендә быйылғы һымаҡ ҡарҙың булғаны юҡ ине, тиҙәр. Ысынлап та, март буйы яуҙы ла яуҙы. Апрель башланыуға ҡарамаҫтан, һаман да туҡтарға иҫәбе юҡ. Шул арҡала ҡар лайғыларының хәүефе көндән-көн арта бара. Лайғыға ҡаршы көрәш хеҙмәтенән килеп, бер нисә тапҡыр атып та киттеләр, артыҡ файҙаһы булманы. Иҫкәртеүгә ҡолаҡ һалмаған бер нисә саңғысы ҡар аҫтында ҡалып һәләк булды.

Көн оҙоно аэросанала турбазаларҙы һәм альпинистар лагерҙарын урап сыҡҡан Айбулат ҡотҡарыу пунктында бер яңғыҙы. Еүеш кейемдәрен киптерергә элеп ҡуйғандан һуң, рацияға ҡолаҡ һала-һала сәй эсергә ултырҙы. Иптәштәре өсәр кешенән торған ике төркөмгә бүленеп, тауҙан төшөп килгән альпинистар командаһына ҡаршы киткән. Бер альпинистың һуңғы базала йөрәк өйәнәге тотҡан. Тотош команда, түбәгә күтәрелеүҙән баш тартып, кире боролорға ҡарар иткән. Ҡалын ҡарҙы күкрәк тәңгәленән кисеп барырға тура килә, юл бик ауыр. Төнгө сәғәт ун икеләр тирәһендә уларға ҡаршы барған бер төркөмдән: «Ҡар аҫтында ҡалдыҡ, — тигән хәбәр килде. — Ҡаҙып сығабыҙ». Ун минут тирәһе үткәс: «Тағы бер лайғы ҡапланы. Бер кем дә йәрәхәтләнмәне, тик баштан-аяҡ һыуландыҡ», — тинеләр. Бындай һалҡын елдә еүеш кейем менән артабан барыу үлемгә бәрәбәр. Шуға күрә отряд етәксеһе уларға базаға ҡайтырға ҡушты. Айбулат сәй менән ҡоро кейем алып хеҙмәттәштәренә ҡаршы барырға йыйына башлағайны, бер радиоһәүәҫкәр шылтыратты.

— Аня Соколова тигән ҡыҙ, ярҙам һорап, элемтәгә сыҡты, — тине ул.

— Кем-кем? — тип ҡабатланы Айбулат ишеткәненә ышана алмайынса.

— Аня, Мәскәүҙән. Рациямдың батареяһы ултыра, бәйләнешкә башҡа сыға алмаясаҡмын, тине.

— Аня Соколова? Уның ҡайҙан рацияһы булһын?

Радиоһәүәҫкәр нисек эфирҙа эҙләнеп ултырғанын һәм «Ярҙам итегеҙ, ярҙам итегеҙ, мин Аня Соколова!» тигәнде ишетеп бәйләнешкә сыҡҡанын мөмкин тиклем тәфсирләп һөйләп сыҡты.

Саңғы шыуырға килгән бер төркөм Мәскәү студенттарының береһе, ҡар аҫтында ҡалып юғалған ҡыҙ ине был. Уны өс көн буйы арманһыҙ булып эҙләнеләр, ахыр сиктә, артабан дауам итеүҙең файҙаһы юҡлығын

күреп, туктағайнылар. Иптәштәренең кайтып киткәненә лә ике көн инде. Юғалғандан һуң биш көндән артык вакыт үткән, ә был шарттарҙа кар аҫтында калған кешенең тере калыуы башка һыйырлык түгел.

Айбулат кыуаныслы хәбәрҙе етәксеһенә еткерҙе лә: «Хәҙер миңә нимә эшләргә?» — тип һораны.

Кире боролған хеҙмәттәштәре кайтып йыйылырға һәм ике-өс сәғәт булһа ла ял итеп алырға тейеш. Ә тауҙарҙа йыш кына йәшәү менән үлем араһы бер нисә минут һәм бер стакан эҫе сәйгә бәйләнгән була. Шуға күрә Айбулат Мәскәү кыҙын коткарырға таңды ла көтмәйенсә сығырға рөхсәт һораны. Үҙе якшы белгән урындарҙы төндә үтһә, сак кына булһа ла вакытты оторға мөмкин буласак.

Шул тиклем көслө яуа, кул һуҙымында бер ни күренмәй. Бындай буранда маңлай фонарының бер ниндәй ҙә фәтүәһе юк. Был йырында Айбулат һәр бер ташты, боҙлоктағы һәр ярыкты, кеҫәләрҙе белә ине лә ул. Тик әле буран бөтә ерҙе танымаҫлык итеп үҙгәрткән, һукмак ошонда булырға тейеш тип, ышанып, өрпәк кар каплаған упкынға осоуың да бар.

Радиоһәүәҫкәрҙән хәбәр килгәндә киске туғыҙҙар ине. Сығыр алдынан Айбулат журналға үҙ кулы менән: егерме бер сәғәт ун минутта куҙғалдым, тип яҙып китте. Тимәк, карҙы күкрәге менән йырып, аяғы-кулы менән ишеп, һәрмәнеп барыуына өс сәғәттән ашыу. Армияла ук һынағаны бар, арыуыңдың сигенә етә башлаһаң, аң томалана башлай, аңра һымак вайымһыҙға әйләнәһең. Абайламай аяк шылдырырға ла ярамаған урындарҙа был бик хәүефле. Шуға күрә туктап ял алырға ышығырак урын самалап бара ине, уң аяғы менән кар каплаған ярыкка эләкте. Хәлдең шәптән түгеллеген шунда ук шәйләп калды: уң аяғы менән уң кулы бер ниндәй ҙә терәк тапмайынса аҫылынып калды. «Шул ғына етмәгәйне!» — тип уйланы ул, кыбырларға ла куркып. Күҙҙәрен генә йөрөтөп, сак кына һулдарак асык урын абайланы. Зәңгәр боҙ сукайып сыккан, ахыры, ышаныслы булһа ярар ине. Иплэп кенә һелтәнеп уң кулы менән боҙкырккысының сукышын шунда каҙаны. Шунан ашыкмай ғына ярыктан сыкты. Был юлы ла Хоҙай араланы. Әммә артабан яҙмышты һынарға ярамай, ял кәрәк, ял. Бәләкәс кенә иғтибарһыҙлыктан да, күҙ асып йомған арала, ҙур фажиғә ки-

леп сығыуы бик мөмкин Айбулат үҙенең ғәйебе арҡаһында бер юлы ике тәжрибәле ҡотҡарыусының башына етә яҙғанын иҫенә төшөрҙө.

...Юғалған альпинистың иҫән-аман бөтөнләй икенсе яҡтан табылыуын ишетеп, арманһыҙ булып базаға ҡайтып баралар ине. Юл ыңғайында ҡуналҡаға туҡтаған альпинистар төркөмөнә тап булдылар. Уларҙың фонарҙарының яҡтыһын күреп, ҡаршыға ике альпинист термос менән сәй тотоп сыҡҡайны. Лагерҙың яҡынлығынан, эҫе сәйҙән иркенләп киткән Айбулат йәтешерәк ултырмаҡсы булып ҡуҙғалды ла ҡапыл тайып китте. Үҙе артынан бер бәйҙә булған хеҙмәттәшен дә өҫтөрәне. Уның артынан өсөнсөләре лә шыуып китте. Өсәүләшеп, баш китерлек бейек боҙ диуар менән барып бөткән боҙлоҡ буйлап, аҫҡа атылдылар. Ярай әле араларында иң өлкән һәм тәжрибәле етәкселәре, сәйгә ынтылғанға тиклем станция эшләп, бауының осон шунда беркеткән булған икән. Егерме метр тирәһе осоп барғандан һуң, уларҙы шул бау туҡтатты. Бәхеткә күрә, бер кем дә йәрәхәтләнмәне. Тик Айбулаттың һыңар бейәләйе юғалғайны. Лагерға барып еткәнсе ҡулы ныҡ ҡына өшөп өлгөргәйне. Тауҙарҙа алған бөткөһөҙ һабаҡтарының береһе — бер минутҡа ла сослоҡто юғалтырға ярамай тигән ҡағиҙәне саҡ ҡына өшөгәндә лә иҫ белмәй башлаған бармағы иҫкә төшөрөп тора.

Кәрнизгә ул таң атҡас, ҡалҡып килгән ҡояш күкте ғәжәйеп төҫтәргә буяған мәлдә менеп етте. Буран туҡтаны. Тирә-яҡта һиллек һәм сафлыҡ. Әйтерһең дә, Ер яңы ғына яралған һәм тотош ғаләм уға тын да алмайынса ҡарап тора. Әммә хискә бирелеп торорға ваҡыт юҡ. Билдәһеҙлек эсендә ас һәм яланғас ятҡан бисара ҡыҙ өсөн һәр минуты һанаулы. Арҡанан йәтеш кенә итеп шыуып төшкәндән һуң, байтаҡ ҡына уйһыулыҡтан атланы.

Уны тәүге ҡар ташҡыны ҡыуып етеп ялмап алған саҡта төш еткәйне. Лайғы төшкәнде Айбулаттың ситтән ҡарап торғаны бар, тик быға тиклем көслө ағымға эләккәне юҡ ине. Тиҙ генә самалап, уң яҡҡа йүгерә башланы. Тик, өлгөрмәйәсәген аңлап, туҡтаны ла ҡар ҡыҫымына ҡаршы торорға маташты. Аяғы-ҡулы менән ишә-ишә өҫтә ҡалырға тырышты. Әммә тағы ла көслөрәк ағым уны баштан-аяҡ ҡапланы. Еүеш ҡар өйөмө уны шаҡарған саҡта башына: «Бөттөм!» — тигән уй

килде. Нисектер үкенесеһеҙ, ҡурҡыуһыҙ, хатта, бәлки, ниндәйҙер еңеллек тойғоһо менән уйланы. Шул саҡ икенсе, көслөрәк ағым ҡыуып етеп, уны ситкәрәк бырғаны. Айбулат, уйлап та тормаҫтан, башын курткаһы менән ҡаплап өлгөрҙө, тәне, тап инструкцияла яҙылғанса, тын алырға урын ҡалдырырлыҡ итеп бөгәрләнде. Хәҙер бөтөн көсөңдө йыйып ҡыбырлай башларға, ҡарҙан әрсәләнергә кәрәк. Егет иһә көтмәгәндә килгән ялға ҡыуанғандай, ҡуҙғалырға көс тә, теләк тә таба алмайынса ята бирҙе. Үҙенең тәҡәтһеҙ арығаны һәр бер күҙәнәгенә барып етте. Һуңғы икһеҙ-сикһеҙ дүрт йыл эсендә ул йәшәмәгән дә, «кәрәк», тигән дә, ырғып торған: армияла ла, наркоконтролдә лә, бында ла — кәрәк тигән дә алға ташланған. Ике йыл буйы һуғыш, бысраҡ, ҡан, үлем һәм арыу. Йәнә ике йыл: наркотиктар, бысраҡ, һаҫыҡ, мәкер, әшәкелек, үлем һәм арыу. «Миңә егерме дүрт йәш. Ә мин инде йөҙ йәшлек ҡарттан да ныҕыраҡ туҙғанмын. Ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләмәнемме ни?» Кемдәндер, үҙенәнме, командирынанмы, Аллананмы: «Етмәнеме әле? — тип һораны Айбулат. Ыңғай яуапҡа ныҡ өмөтләнеп, бармағын да ҡыбырлатҡыһы килмәйенсә үтенде. — Ҡайһылай уңайлы. Хатта ҡәбер ҙә ҡаҙырға кәрәкмәй. Бәлки, еткәндер?»

Ул ҡотҡарырға өлгөргәндәрҙең иҫәбен алып барманы, был ғәҙел булмаҫ ине. Ҡотҡарыу — ул һәр саҡ тотош коллектив эше. Ә ҡотҡарып өлгөрмәгәндәре — дүртәү — өлгөрмәгәндәре йәки ҡулында һулышы өҙөлгәндәр...

Хәҙер был ҡыҙыҡай — нисек әле уның исеме? — иҫенә төшөрә алманы — бишенсе буласаҡ. Был аяуһыҙ арифметика уның томаланып барған зиһененә уҡ һымаҡ ҡаҙалды. Әрнеү нөктәһендә, әйтерһең дә, бөтөн ғаләм бер төйөнгә йомарланды — ғәҙел түгел, ғәҙел түгел йәшәгеһе килгән йәндең өҙөлөүе — егет ошо ризаһыҙлыҡҡа ихтыярын төйнәне, ҡарҙан әрсәләнергә тотондо. Сығыу менән тирә-яғына ҡараны. Мәскәү ҡыҙының тап ошо тирәлә бәйләнешкә сыҡҡанын белә ине ул. Ҡыуанысҡа күрә, ташҡын уны кәрәк яҡҡа бырғап киткән. Был да ыңғай билдә. Фәрештәһе һаҡлай, ахыры, был Аня тигән — исеме тағы иҫкә төштө — ҡыҙҙы.

Ҡайһы яҡҡа йүнәлергә белмәй, ултырып әйләнә-тирәһенә баҡты. Шул саҡ һул яғында, алыҫта ниндәйҙер бер тимергә бәйләнгән ҡыҙыл сепрәкте абайлап ҡалды. Ҡыҙ, моғайын, ҡарҙан ҡыуыш соҡоп инеп ултырған да, быны ҡотҡарыусылары күрһен өсөн ҡаҙап ҡуйған.

...Сәйер итеп, йылыны һаҡлап түгел, мәйет шикелле ятҡан. Зәңгәр комбинезоны ниндәйҙер ҡәҙерле, ғәзиз төҫтө хәтерләтте. Ниңә икәнен уйлап торорға форсаты юҡ ине. Күҙҙәре йомоҡ. «Өлгөрмәнем!» — тигән борсолоу урғылып мейеһендә мөлкөлдәп торһа ла, аңын биләргә ирек бирмәне. Бындай ваҡытта инструкцияны теүәл үтәүҙән дә яҡшыһы юҡ. Йәрәхәтләнгәне тойолмай, пульсы бар...

Йылытырға кәрәк ине. Урап һалырға йоҡо тоғон сығарҙы.

Бит тирәһе ап-аҡ, йоҡа ғына. Нык ҡымтылған нәҙек ирендәре күкшел. Йөҙ һыҙаты шундай нәфис. Йоҡоға талған әкиәт ҡыҙы...

Йомшаҡ диванында телевизор ҡарап, оҙон тырнаҡтарын бояп ултырыр урынға, был аяуһыҙ тауҙарҙа нимә эҙләй ошондай фәрештә кеүек заттар? Ярылған ирендәрен саҡ ҡына йылымыс сәй менән еүешләткәс, ҡыҙыҡай күҙҙәрен асты ла: әй был донъяның мөғжизәһе! — йылмайырға маташты.

Күҙҙәре әйтеп бөтөргөһөҙ зәңгәр. Ниндәйҙер ғәзиз зәңгәрлек. Күпме ҡыуаныс, тантана, наҙ балҡышы был күҙҙәрҙә. Ошо миҙгел өсөн генә булһа ла йәшәргә, тауҙар артылырға, йәнеңде ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырға мөмкин. Ул тыңлауһыҙ ирендәрен ҡыбырлатып нимәлер әйтергә маташа. Хәйер, Айбулат уның нимә әйтергә теләгәнен былай ҙа белә: «Мин ышандым, мине табыуығыҙға тамсы ла шикләнмәнем...»

Тауҙа ниндәй генә ҡуналҡаларға туҡталмайһың. Йыш ҡына артыҡ һайланыу форсаты юҡ, ҡараңғылыҡ менән хәүеф ҡайҙа туҡтата, шунда ҡалырға тура килә. Ҡаяла тигеҙ генә урынды табып палатка ҡуя алһаң, төндө уңайлы итеп, ҡырын ятып үткәрергә була. Әгәр ҙә кәштә һымаҡ тар урын булһа, таң атҡансы ултырып та сығаһың. Егерме сантиметр тирәһе генә һикәлтәлә баҫып та төн үткәрергә тура килгәне бар Айбулаттың. Ә бер тапҡыр страховка ебендә аяғын элмәккә терәп бауланған килеш көттө таңдың атҡанын, хатта күпмелер йоҡлап алырға ла өлгөрҙө.

Был ғына түгел, юғарылағы ҡуналҡалар йылыға һәм һыуыҡҡа ла айырып йөрөтөлә. Йылыһы уның бына әлеге һымаҡ: баш осонда ҡар ҡыуышлығы, эргәңдә примус гөжләй, уның өҫтөндәге кәстрүлдә ирегән ҡарҙан

сәй ҡайнап сыға. Аҫтыңа йомшаҡ каремат түшәгәнһең, мамыҡ йоҡо тоғона төрөнгәнһең. Хилүәт! Тышта һыуыҡ, ел ыжғыра, ә һиңә бер ҡайҙа ла ашығырға кәрәкмәй инде. Ярҙамыңа мохтаж йән эйәһе эргәңдә, ул иҫән-аман. Базала ла барыһы ла имен. Ҡайтып еткәндәр, ял итеп алғас, уларҙы ҡаршы алырға сығасаҡтар. Ошо йәннәт түгелме ни?!

Тамаҡ туйҙырып алғас, бөтөнләй хәл инеп киткән, ҡыуаныстан күҙҙәре емелдәп торған Аня яңғыҙлыҡтан шул тиклем ялҡҡан, күрәһең, бытырлығын сығып хәбәр һөйләй. Айбулат уны тыңларға тырыша ла ҡайһы мәлдә ойоп онотолоп китә. Шулай булһа ла, ҡыҙыҡайҙың рәхмәтле һоҡланыу менән ҡараштарын унан айырып ала алмағанын һиҙә. Ҡыҙыҡ был донъя. Инкубатор себештәре йомортҡанан сығыу менән күҙҙәренә эленгән иң тәүге йыбырлаған нәмәне әсәләре тип ҡабул итә, тигәнде уҡығаны бар ине. Шуның кеүек, үҙҙәрен әжәл тырнағынан тартып алған ҡотҡарыусыларға бауыр баҫа һәм ғашиҡ була, тиҙәр ҡотолоп ҡалыусы ҡыҙҙар.

Айбулат йоҡо аралаш был күҙҙәрҙең сәйер зәңгәрлегенең ниңә шулай таныш һәм ғәзиз икәнен төшөндө — күк умырзая, әсәһе яратҡан яҙ сәскәһе.

— Күҙҙәреңдең төҫө — күк умырзаяға — рустар уны сон-трава тип атай — оҡшаған, — тине егет ҡыҙға. — Минең әле бер ваҡытта ла быңдай күҙҙәрҙе күргәнем юҡ.

— Был донъяға улар тик бер пар ғына бирелгән, — тип көлдө ҡыҙ. — Мин уларҙы саҡ эләктереп өлгөрҙөм. — Тауышы ла матур — көмөш шөңгөр.

— Әсәйемдең иң яратҡан сәскәләре. — Айбулаттың дүртенсе кластар тирәһендә уҡығанда өләсәһенә яҙғы каникулға ҡайтҡас, ауыл эргәһендә зәңгәрлеккә сумған тотош яланды табып, әсәһенә бүләк иткәне иҫенә төштө. — Аҡ ҡылғанға һыйынып үҫкән зәңгәр умырзаялар.

Ҡәҙимге ял иткәйне, тороп ултырҙы ла ҡыҙҙы күреү менән үк башында тыуған һорауын бирҙе:

— Һинең һымаҡ фәрештәләй саф һәм бәхетле заттарҙы был хәүефле тауҙарға нимә өҫтөрәп алып килә?

— Яратыу, әлбиттә, — тине ҡыҙ саҡ ҡына ла уйлап тормайынса. — Минең бит бында тәүгә килеүем түгел. Атайым менән әсәйемә эйәрә ала башлағандан бирле йөрөйөм. Ҡайһы бер түбәләргә лә күтәрелгәнем бар.

Тәжрибәм бар. Шуға күрә лайғы аҫтында ҡалғас, ҡурҡманым мин. Был дәһшәтле көстөң ҡосағында булыу һәм тере ҡалыу шул тиклем тетрәткес тойғо булды. Мин үҙемдә әйтеп биргеһеҙ бәхетле тойҙом. Тик тағы ла бер лайғы аҫтында ҡалыу ихтималы ҙур икәнен дә яҡшы беләм инем. Тиҙерәк ул тирәнән китергә тырыштым. Ныҡ һыуланғанмын, рюкзагым юҡ, йәһәтерәк иптәштәремде табырға кәрәк ине. Уларҙың мине эҙләгәненә һәм тиҙ арала табып аласағына тамсы ла шикләнмәнем.

Ул көлөп ебәрҙе:

— Беҙҙең өйҙә әле ниндәй байрам икәнен һин хатта күҙ алдыңа ла килтерә алмайһың. Их, хәҙер шым ғына барып, ситтән генә ҡарап торһаң икән ул. Мин бит табылдым. Һин улар өсөн иң-иң ҡәҙерле кеше буласаҡһың. Минән ҡала, әлбиттә, — тип балаларса бер ҡатлылыҡ менән аныҡлап ҡуйҙы ул.

— Шуға күрә һеҙгә ҡаршы бармаҡсы булдым, — тип артабан дауам итте. — Ҡайһы арала мин аҙашҡанмын, бөтөнләй икенсе яҡҡа киткәнмен? Һаман да аңлап етмәйем. Туҡтамай барҙым да барҙым. Туҡтаһам, туңып ҡалырмын, тип ҡурҡтым. Күпме барғанмындыр, боҙлоҡҡа килеп сыҡҡанмын. Тауҙың был яғында ышығыраҡ ине. Ҡар ҙа яуыуҙан туҡтаны. Болоттар таралып китте лә, көтмәгәндә туп-тумалаҡ, ҙур ай килеп сыҡты. Мин хайран матурлыҡ эсендә баҫып торғанымды күрҙем. Көмөш нурға ҡойонған зәңгәрһыу аҡлыҡ әллә ниндәй төҫтәргә инеп емелдәй башланы. Тирә-яҡ тылсымға әйләнде, бындай гүзәллек һәм серҙе минең фантастик киноларҙа ла күргәнем юҡ. Мин шунда тауҙарҙың йондоҙҙар менән шыбырлашҡанын ишеттем...

Арыуымды ла, өшөүемде лә оноттом. Мин юҡҡа сыҡтым был матурлыҡ алдында, шунлыҡтан үҙем менән бергә асығыу ҙа, арыу ҙа, өшөү ҙә юҡ булды.

— Әҙәм балаһына ғүмеренең сигенә тиклем ҡыуанып иҫләргә ошо ла таман булыр ине, — тине Аня. — Ә миңә... Беләһеңме артабан нимә булды?

— Ҡаршыңа рация һалынған рюкзак тотоп, ҡар кешеһе килеп сыҡты, — тип шаяртты Айбулат.

— Их һин, материалист, — тип ҡул һелтәне Аня. — Аяҡ аҫтында ер тетрәгәндәй булды ла йөҙәрләгән тонналыҡ боҙ ҡаялар, эргәләге йырынға ауып, аҫҡа шыуа башланы.

— Боҙ шарлауығы! — тине Айбулат. Тәбиғәттең матур ҙа, ҡурҡыныс та был күренеше, ысынлап та, ғәжәйеп бер нәмә. — Даланың бар шул. Ул урынға әллә нисәмә тапҡыр барғаным булһа ла, уның «аҡҡанына» бер ҙә тура килгәнем юҡ.

— Шунан һуң һин тауҙарҙың да мине ятраҡанына шикләнергә баҙнат итерһеңме? — тине Аня тантана менән.

— Ә ҡайҙа төн үткәрҙең? Нисек таң атҡансы туңып ҡалманың? Әллә Һыуыҡ бабай ҙа һине яратамы? Теге әкиәттәге кеүек, иҫеңдәме: «Тепло ли тебе красна-девица?» Ә ул боҙбармаҡҡа әйләнеп барһа ла: «Тепло, тепло, Мороз батюшка».

— Аңшайып ҡарап торғанымда, сираттағы гөрһөлдәүҙән яңылыш тайып киткәнмен. Әллә күпме шыуып барғандан һуң, өрпәк ҡар тулған бер кеҫәгә барып сумдым. Боҙ йылға бынан да яҡшы күренә ине. Шунда йомарланып ятҡан килеш, шоколад һура-һура йоҡлап киткәнмен. Мин бит тәмлетамаҡ. Кеҫәмдә гел генә шоколад, киптерелгән емеш йөрөтәм.

— Саҡ ҡына ла ҡурҡманыңмы?

— Матурлыҡҡа шул тиклем арбалғайным. Ҡурҡманым. Иртән тороуыма һеҙҙең килеп табырығыҙға ышандым.

Рюкзакты мин икенсе көндө кис кенә таптым бит. Әйткәндәй, кемдеке икән ул? Рәхмәт әйтеп, хужаһына кире ҡайтарырмын әле. Ул бит мине үлемдән ҡотҡарҙы. Бына, күрәһеңме, ниндәй шәп йоҡо тоҡо.

Унда хатта рация ла булғас, ысынлап та, фәрештәмдең мине нык һаҡлағанын аңланым. Шулай ҙа рация менән оҙаҡ мәшәҡәтләнергә тура килде. Еүешләнгәйне ул, киптереп, һүтеп, яңынан йыйырға тура килде.

— Унығын ҡайҙан беләһең инде?

— Һуң мин бит радиотехника факультетында уҡыйым.

Палатканың мөйөшөндә ҡыҙыҡай, донъяға ғашиҡ ҡыҙыҡай түгел, Һөйөү үҙе ултыра ине. Быны Айбулат тирә-яҡты, хатта йәнһеҙ әйберҙәрҙе лә ҡотҡа һуғарған шифалы ипкендән тойҙо. Нисәмә йылдар буйына бөтәшә алмайынса, эренләп, сереп бөткән йән йәрәхәттәренең уңалып бөтәйеүенән, саф, сәләмәт, бөтөн халәткә ҡайтыуынан тойҙо егет был нурҙың шифаһын. Бөйөк тауҙар ҡуйынындағы ҡар ҡыуышына, ҡоро спирт ялҡынына һәм һулышҡа йылынған ошо тар ғына урынға тотош бала сағы иң наҙлы тойғо һәм кисерештәре менән килеп тулды. Гүйә, өләсәһе, әсәһе, һеңлеләре — барыһы ла бында. Айбулат атаһының тубығына ҡунаҡлаған да

арҡаһы менән уның күкрәгендә дөпөлдәп һуҡҡан ҙур йөрәген тоя. Уны барыһы ла бер ниндәй шарт та, талап та ҡуймайынса бары бар булғаны өсөн генә ярата. Ҡасан ошо халәтен юғалтҡан, үҙенә бикләнгән, донъяның миһырбанынан ваз кисеп, энәләрен тырпайтҡан һуң Айбулат? Ҡасан ул үҙ тормошо менән йәшәүҙән туҡтап, хөкөм итеүсегә, кеше бәхетен ҡурсалаусыға әйләнгән?

Ҡасан ул үҙенең өҫтөнә күтәрә алмаҫтай йөк артмаҡлаған? Ни өсөн ул ғүмер буйы әсәһен бәхетһеҙ тип уйлаған һәм уның бәхете өсөн үҙен яуаплы итеп тойған? Кешегә кеше бәхетте тоттора аламы һуң? Һәр кемдең бәхете үҙенсә бит. Нишләп ул атаһы менән әсәһе араһына судья рәүешендә килеп ҡыҫылған? Башҡаларҙы хөкөм итеү хоҡуғын ҡайҙан алған ул?

...Айбулатҡа дүрт йәштәр булғандыр. Әсәһе яңы тыуған бәпәй менән дауаханала ята ине. Алырға башҡа кеше булмаған, күрәһең, тәрбиәсе уны атаһының эшенә алып килеп ҡалдырҙы. Шунда атаһының әсәһенә тоғро түгеллеген күрҙе малай. Ни булғанын аңламаһа ла, атаһының бер ят апай менән танауға танау терәп, ҡулға-ҡул тотоношоп тороуында ниндәйҙер хилаф барлығын аңланы ул. Теге апайҙың уңайһыҙланып китеүенән, атаһының күҙҙәре йүгергеләүҙән, өйгә ҡайтышлай туңдырма алып биреүенән күңелендә борсолоу тойғоһо уянғайны. «Әсәйем туңдырма ашарға ҡушманы», — тине ул. «Ә беҙ әсәйеңә әйтмәҫбеҙ, — тине атаһы. — Егеттәрҙең ҡыҙҙарға әйтмәй торған серҙәре лә булырға тейеш». «Тамағым ауыртһа, ул барыбер белә», — тип ҡарышлашты Айбулат.

«Ҡайһылай яман булғанмын», — тип көлөмһөрәп ҡуйҙы әле егет. — Өйрәтеп ҡуйғандар, тиерһең. Бала бер нимә лә аңламай, тип әйтеп ҡара инде шунан».

Атаһына ышанмау, уның йәшәй белеү, донъя көтөү тигән ике, хатта өс, дүрт йөҙләлөк талап иткән принциптары менән килешергә теләмәү, моғайын, аңына ана шул ваҡытта уҡ инеп ултырған. Айбулат, үҙе лә иҫәп бирмәҫтән, гел генә атаһына ҡаршы көрәшә ине булһа кәрәк. Көрәшә лә, һәр ваҡыт еңелә.

Ә бит уға ла ошо ҡыҙ кеүек һөйөү генә булырға кәрәк булған да, ә ул Алла булырға теләгәнме?

Быға тиклем ундай мөмкинлектең барлығын да белмәгән Айбулаттың әле яратылғыһы һәм яратҡыһы түгел, һөйөүҙең үҙенә әүерелгеһе килде. Яратыуы менән тау-

ҙарҙың мәрхәмәтен ҡаҙанған ошо ҡаҡса ғына һылыу һымаҡ.

— Һинең берәй ваҡыт ятратканың бармы? — тип һораны Аня, эҫе сәй һалынған тимер көрөшкәне услаған килеш, уның уйҙарын аңлаған һымаҡ.

«Ысынлап та, бармы? Уны элмәккә алып барып индергән кисерештәрҙе ятратыу тип атап буламы?»

— Белмәйем, — тине Айбулат. — Ятратыу булдымы был?

...Мин үҙемдең быға тиклем ғорурланып йөрөгән бөтә принциптарымды ла онотторм. Был, моғайын, эске тәкәбберлегем өсөн ғәҙел яза булғандыр. Быға тиклем башҡаларҙы боҙоҡлоҡта, ихтыярһыҙлыҡта, йомшаҡлыҡта ғәйепләгән булһам, шуларҙың барыһына ла үҙем барып сумдым. Тормош мине һынап ҡарарға уйлағайны, ул һынауҙы үтә алманым. Үҙем кәмһетеп ҡараған наркомандарҙан бер ерем дә артыҡ түгел ине. Уларҙың көҫәгәне героин булһа, минеке — Азалия.

Айбулаттың башына яңы барып етте. Хәйер, оҙон-оҙаҡ айҙар эсендә был хаҡта һөйләргә генә түгел, уйларға ла үҙенә беренсе тапҡыр рөхсәт иткәйне.

Ул шул ҡатынға эйә булырға, уны үҙенсә әүәләргә, уны бәхетле итергә теләгән. Ә бит ул үҙе бәхетле булмаған. Үҙең бәхетле булмай тороп, нисек кешене бәхетле итергә мөмкин? Үҙе ауырыу булған килеш, башҡаларҙы дауаларға маташҡан. — Был Айбулат өсөн асыш булды.

— Азалияны төрмәнән алып ҡалыр өсөн мин дуҫтарымды ла законды боҙорға мәжбүр иттем. Беҙ ҡайһы бер факттарҙы үҙгәртеп, судта Азалияны шаһит итеп кенә үткәрҙек. Әгәр ҙә шулай килеп сыҡмаһа, мин хатта судьяға ришүәт бирергә лә әҙер инем. Әлбиттә, былардан һуң эшемдә ҡала алманым. Ҡыуғандарын көтөп тормайынса, үҙем китә һалдым. Хәйер, наркоманка «Кармен» артынан көтөүсе кеүек эйәреп, уны притондарҙан һөйрәкләп йөрөгән кешенең етди эшкә хәле лә, ваҡыты ла ҡалмай ине. Был да тәкәбберлегемдән инде, йәнәһе, мин көслө, мин кешене үҙгәртә алам, ятратыуым менән һауыҡтырам.

Ниңәлер Азалияның әсәһе менән һүҙ көрәштергәне хәтеренә төштө Айбулаттың. Ҡыҙы менән йонсоп бөткән ҡатын уға:

— Һин миңә йәлһең, егет. Ул үҙенең бәхетен тапҡан, ошондай тормош уның аҙғын булмышына бик ҡулай, —

тигәйне. — Мин уның өсөн нимәләр генә эшләмәнем. Уны музыка мәктәбенә йөрөттөм, бейейем, тине, унда биреп ҡараным. Модель булам, тине. Ул мәктәпкә лә яҙылды. Тик артабан уны һыра һемереп, тәмәке тартып торған хулигандар ныҡыраҡ үҙенә тартҡанын үҙе лә, мин дә аңлап тынысландыҡ. Ҡайҙа ғына уҡытырға индереп ҡараманым, әллә нисәмә аборт яһатыр өсөн генә лә күпме, күпме аҡса түктем...

— Аҡса, аҡса... — тип йәне көйөп уны бүлдергәйне Айбулат. — Тимәк, һеҙ уның күңеленә юл таба алмағанһығыҙ.

— Бармы икән һуң унда күңел тигән нәмә, — тигәйне әсәй кеше ауыр һулап.

— Мин бер ваҡыт Ницшеның — ул шундай бик аҡыллы немец философы, тик аҙаҡтан аҡылынан шашҡан — бер фекерен оҡшатҡайным. Теүәл генә хәтерләмәйем, тик мәғәнәһе шундай: «Хазина эҙләгән саҡта тап хазина булмаған ерҙә оҙағыраҡ туҡталаһың, шул урынды тәрән ҡаҙаһың. Был аңлашыла: хазина бар икән, ҡаҙаһың да табаһың бит инде. Ә булмаған ерҙә барҙыр, барҙыр, барҙыр тип һаман соҡойһоң, хәлдән таяһың. Хатта ҡул һелтәп киткән осраҡта ла: «Ә, бәлки, булғандыр», тигән өмөтлө үкенес ҡала һәм был ғүмерлеккә, — тип әсенеш менән өҫтәне ул.

Базанан бәйләнешкә инеп хәл һораштылар. Аняның атаһының самолет менән юлға сығыуын хәбәр иттеләр. Аняның балалар һымаҡ сәпәкәйләп ҡыуаныуына рәхәтләнеп ҡарап ултырған Айбулатҡа ҡапыл эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Нишләптер тап ошо мәлдә үҙе ҡылған золом аңына бөтөн тәрәнлегендә барып етте.

Өс ай ваҡыт эсендә нисек һуң ул бер тапҡыр ҙа шылтыратып әсәһе менән һөйләшмәне! Ғәйеп тойғоһонан башына ут ҡапҡан һымаҡ булды. Түҙмәйенсә, егеттәр аша сәләм тапшырырғамы, тип елкенеп китте бер аҙ. Тыйылды: «Төнгө телефон шылтыраУҙан ҡотом алынған», — тигәйне әсәһе ул армиянан ҡайтҡас. — Яман хәбәр гелән төндә йөрөй». Таң атыу менән егеттәрҙең инде ял иткән төркөмө уларға ҡаршы юлға сығасаҡ. Уҙа барһа, бер һигеҙ сәғәттән улар базаға ҡайтып етер. Шул уйынан тынысланды бер аҙ. Бесәй балаһы һымаҡ йомарланып, йылы һаҡлар өсөн Айбулатҡа һыйынып йоҡлап киткән Аняның нәфис танауына сыҡҡан өс бөртөк

тир тамсыһын бармағы менән һаҡ ҡына һөртөп алды. Шундайын ләззәтле, рәхәт наҙ ҡунды күңеленә. Был сафлыҡ янында үҙен мең йәшәр ҡарт итеп тойҙо.

— Атайҙарса наҙ, — тип мығырланы ул йоҡо аралаш. Һуңғы йылдарҙа беренсе тапҡыр күкрәк тәңгәлендә әсеттереп өтөп торған утты тоймай йоҡлап китте егет.

— Әсәй, — тине Айбулат икенсе көндө кис. — Хәлдәрегеҙ нисек? — Иртәнсәк кенә ул яһаған һөтлө сәйҙе һемереп эсеп эшенә сығып киткән дә, шунан шылтырата, тиерһең.

— Айбулат, балам, — тине әсәһе. — Һинең дә тауышыңды ишетер көнөбөҙ бар икән.

— Ғәфү итегеҙ инде мине, әсәй.

— Үҙең кисер, улым. Үҙ балаһының күңелен тоймаған ата-әсәгә шул кәрәк. Беҙ һинең хәлеңде белешеп торабыҙ. Оксана Борисовна һинең ул яҡтарҙа тороп ҡалғанынды командировкаһынан ҡайтып төшкәс тә шылтыратып һөйләне. Шунан һин ҡотҡарған ике баланың әсәләренән хат менән фотоһүрәт килеп төштө. Атайың шунда уҡ янына барып ҡайтырға дәрт иткәйне, тыйҙым. Кәрәк тапҡас, үҙең саҡырырһың.

— Йәйгеһен килерһегеҙ, әсәй. — Айбулат яурынынан тау төшкән һымаҡ еңел һуланы. Нишләп ошоға тиклем һөйрәп йөрөгән ул донъяға булған сикһеҙ рәнйешен.

— Иҫән-һау йөрө, улым. Әсәйеңдең бөтөн үтенесе шул.

— Мөмкинме миңә лә һөйләшергә, — тине ситтән генә умырзая күҙҙәрен емелдәтеп ҡарап ултырған Аня. — Минең дә уларға рәхмәт әйткем килә.

— Исмаһам, йәшәүҙең ҡәҙерен белгән кешеләргә ярҙам итә башлағаныңа ҡыуанам, Айбулат, — тине Әмирхан Аня менән һөйләшкәндән һуң.

Моғайын, элек булһа, улы был һүҙҙәрҙе төрттөрөү тип ҡабул итер ине. Әле уларҙың ғәҙеллеген аңларлыҡ ине. Ихлас күңелдән:

— Рәхмәт, атай, — тине. — Мин үҙем дә ҡыуанам.

* * *

Вертолетта тағы бер тапҡыр өйрөлөп ҡарап сыҡҡандан һуң, Айбулат үҙенә боролоп баҡҡан пилотҡа, базаға әйләнеп ҡайтырға кәрәклеген белдереп, баш ҡаҡ-

бик ихтимал. Кеше алдында үлем дә артыҡ ҡурҡыныс түгел, тиҙәр бит.

— Йәшәгем килмәй, — тине егет ишетелер-ишетелмәҫ. Русса әйтте. «Үлергә теләгән кеше күптән аҫта ятыр ине, — тип уйланы Айбулат. — Йәшәге килмәү менән үлем бер булһа икән. Әллә үлеүе еңел тип уйлағайныңмы?»

— Йәшәргә теләмәгәндәргә көс әрәм итмәйем, — тине ул һалҡын ҡырыҫлыҡ менән. Егет өндәшмәне. — Моғайын, һине ҡотҡарырлыҡ та түгелдер, — тип дауам итте Айбулат. — Һикәлтә икебеҙҙе күтәрмәй. Тик, ошо бауҙы берәй ереңә эләктергәндә, мәйетеңде алып сығып атайыңа тапшырырға мөмкин булыр ине. — Егет һаман өндәшмәне, ҡыбырламаны ла.

— Берәй ереӊ һынмағанмы? — тип һораны Айбулат, бауҙа ҡабаттан түбәнәйеп.

— Аяҡтарымды тоймайым. — Ярайһы ғына русса һөйләшә икән. Айбулат, аҫылынып торған килеш, егеттең ҡултыҡ аҫтынан бау үткәрҙе. Боҙбармаҡтай ҡатып ҡалған егет ҡарышманы. Айбулат ҡабат күтәрелә башлағас, күҙҙәрен ҡалҡытып, артынан ҡарап ҡалырға маташты. Юҡ, бер ҙә үлгеһе килмәй егеттең.

Иркенгә сығарып һалғандан һуң, бөтә ағзаларын да ҡапшап ҡарап сыҡты. Сыйылған, һыҙырылған урындарын иҫәпкә алмағанда, етди яралары юҡ һымаҡ. Моғайын, ул бер кәштәнән икенсеһенә нисектер шыуып төшкән. Хатта был ярыҡҡа ла ул, ҡолап төшөргә маташып, үҙе барып ҡыҫылған, тик аҫҡа төшөп китергә арҡаһындағы рюкзагы ирек бирмәгән.

Табылдыға, Айтуған уға шулай тип исем атаны, термостан эҫе сәй һалып эсергән арала егеттәрҙең бер төркөмө бәйләнешкә сыҡты. Был эшендә иң яраҡкан, бөтөн арыу-талыуҙарҙы, хәүеф-хәтәрҙәрҙе онотторған һүҙҙе әйтте Айбулат:

— Табылды. Тере. Хатта һалҡын да алдырмаған шикелле.

Ул бынан йыраҡ түгел төн үткәрерлек ҡыуышлыҡ барлығын белә ине. Кәңәшләшкәндән һуң, хеҙмәттәштәре махсус сана — акья менән уларҙы иртәнсәк килеп алырға булды. Тауҙарҙа ҡараңғы ҡапыл төшә. Кешеләр барыһы ла хәлдән тайып арыған. Ашығыс ярҙам кәрәкмәй икән, бер төндө бында үткәреүҙән зарар юҡ.

Ышыҡҡа палатка ҡороп, примус тоҡандырырға уйланы ла шырпыһын сығарғайны, дым тартҡан. Кәпәсен сисеп бер нисәһен киптерергә сәс араһына ҡыҫтырҙы.

Бында тиҙерәк кибә, бала сактан ук һынағаны бар. Тик Дааңды һөйрәкләп кара тиргә батканға, башы еүеш, шунлыктан бер нисә шырпыны:

— Бәлки, һинең сәсең корорактыр, — тип егеткә һондо. Эҫе сәйле көрөшкәне услап һеңгәҙәгәндәй ултырған теге, иң ауырткан еренә кағылған һымак, әллә нисек үрһәләнеп китте:

— Ә минең сәсем юк, — тине ул ғәрсел тантана менән, кәпәсен һелкетә тартып, яп-ялтыр башын күрһәтте. Уның был ишараһына башта аптырап калған Айбулат капыл егеттең тормош менән ни сәбәптән хушлашырға йөрөгәнен төшөнгән кеүек булды:

— Һин ошоноң аркаһындамы әллә? — тине лә малайҙарса уҫал шуклык менән сәп иттереп уның ялтыр башына һуғып алды: — Ошоноң аркаһында... Ха-ха-ха! — Һуңғы тәүлектең бөтөн көсөргәнеше ыскынып киткән һымак, тыйыла алмайынса шаркылдап көлә башланы. — Шул аркала, шул аркала, — тине ул һаман йылына алмайынса калтыранған егетте төйгөсләй-төйгөсләй.

Ә егет тәүҙә аптырап, унан куркып, унан асыуланып ултырҙы ла, ирекһеҙҙән, һыңкылдап уға кушылды: әллә иланы, әллә көлдө, әллә илай-көлдө.

— Ғәфү ит, — тине Айбулат, арып туктағас. — Тик минең көлөргә тулы хокуғым бар.

Даан уға һораулы карашы.

— Беренсенән, һин алйотто икенсе көн инде нисәмә кеше эҙләй. Инде хәлдән тайып, өмөттө өҙә башлағайнык. Шуның өсөн мин һинән рәхәтләнеп үсемде алам. Икенсенән, — ул әйтергәме-юкмы тигәндәй туктап торҙо. — Икенсенән, минең үҙемдең дә аҫылынып карағаным бар.

— Һин?

— Мин, бер кыҙ аркаһында.

— Һин? Бер кыҙ аркаһында?

— Нимә тутыйғош шикелле кабатлайһың?

Йөҙө елгә карайған, күҙҙәрендә шаян оскондар һикерешеп тора, мыкты кәүҙәле, көслө егет сибек, йәлләүес, етмәһә, пеләш Дааңға ысын мәғәнәһендә супермен һымак күренә ине.

— Йәшәүҙән туйһаң, үлер өсөн һәр вакыт берәй сәбәп табырға була — тине Айбулат, сәс араһынан шырпы алып, примус токандыра-токандыра. Шырпыға һәм сәсенә күрһәтеп: — Күрәһеңме, кайһылай файҙалы нәмә, — тип ирештерҙе ул егетте. — Ә һин нимә эшләйһең инде? —

Шунан ауыҙ йырып үҙ һорауына үҙе яуапланы: — Шырпыңды ҡорола тоторға тырышаһың, бик шәп зажигалка йөрөтәһең инде.

— Ул — рус ҡыҙы, — тине Даан көтмәгәндә.

— Әһә, бына ни өсөн һин түбәһенә баҫып һикерер өсөн беҙҙең тауҙарҙы һайланың инде.

— Ә мин уға шулай тип хат яҙҙым. Хәҙер, минең үлмәгәнемде белһә, ебегән, хатта әҙәмсә үлергә лә ҡулынан килмәгән, тип көләсәк.

— Уға тиклем беҙ үҙебеҙ көлөп туймағанбыҙ бит әле, — тине Айбулат. — Ә нишләп, һин һикерҙең дә инде. Шундай бейеклектән һикереп, иҫән ҡалыр өсөн, белмәйем, нисә ҡатлы күлдәк кейеп тыуырға кәрәктер.

— Шулай тип уйлайһыңмы?

— Уйламайым, beләм. Ә инде һинең тере ҡалыуыңа ни тиклем шатланғанымды әйтеп бөтөрөрлөк түгел. — Айбулат Даанға атаһының күҙ төбөндә йылтыраған йәштәре хаҡында өндәшмәне. — Мин бит үҙем — үлгәндән һуң йәшәп ятҡан бәхетле берәүмен. Йә, ниндәй ҡыҙ һине шулай бейек тауға үрмәләргә мәжбүр иткән? Исмаһам, шул хөрмәткә лайыҡмы?

Даан Лариса менән Интернетта танышҡанын, йыл буйы матур-матур мөхәббәт хаттары алышҡанын, бары тик шул хаттар менән йәшәгәнен, рус телен шулар аша өйрәнгәнен һөйләне. Бөтәһе лә яйлы ғына барғанда, ҡыҙ үҙенең Голландияны күрергә хыялланғанын әйтә. Уны ҡунаҡҡа саҡырыуҙан башҡа сара ҡалмай.

— Уны үҙем генә ҡаршыларға ҡурҡтым. Аэропортҡа атайым менән бергә барҙыҡ. Ул фотографияһындағыға ҡарағанда ла матурыраҡ булып сыҡты. Үҙе алсаҡ. Юл буйы атайым менән һөйләшеп килделәр, ә мин сысҡан һымаҡ боҫоп шым ғына ултырҙым. Тәүҙә атайымдарға барып төштөк. Әсәйем матур итеп өҫтәл әҙерләгәйне. Мул итеп. Һеҙҙең Рәсәйҙә ҡунаҡтарҙы нисек ҡаршылауығыҙ тураһында күп уҡығайным.

Аҙаҡтан минең фатирға киттек. Мин бер нисә йыл инде айырым йәшәйем. Университетта уҡып йөрөһәм дә, кистәрен эшләгәс, аҡсам етә.

Йортобоҙ ҙа, фатирым да Ларисаға бик оҡшаны. Эсемә саҡ ҡына йылы инде. Тик үбешә башлағайныҡ, башымдағы парик ҡыйшайҙы ла ҡуйҙы. — Егеттең тауышы сыйылдап китеүҙән был ваҡиғаның уның өсөн һаман да тетрәнеү икәнен аңланы Айбулат. Ә егет үҙенән үс алған һымаҡ ҡаһармандарса дауам итте: — Күҙ алды-

ңа килтерәһеңме, йоҡлаған саҡта ҡыйшайһа нишләрмен, иртәнсәк нисек алдараҡ уянырға, тип баш вата инем. Ә ул ҡосаҡлашҡас та ҡыйшайҙы.

— Ә быны күреп Лариса нимә эшләне?

— Мин шул тиклем ҡаушаным, парикты башымдан йолҡоп алып иҙәнгә бәрҙем дә Ларисаның алдына лап итеп тубыҡланып илап ебәрҙем.

Айбулат был күренеште шул тиклем асыҡ күҙ алдына килтерҙе, түҙмәйенсә тағы ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Ә ул? — тине ул күҙ йәштәрен һөртә-һөртә.

— Улмы? Ул — рус ҡыҙҙары шул тиклем яҡшы күңелле — аптырап ҡарап тора бирҙе лә эргәмә ултырып миңә ҡушылды. Ҡосаҡлашып иланыҡ-иланыҡ та яратыша башланыҡ. Иҫ киткес матур төн үткәрҙек беҙ. Икенсе көндө төшкә табан атайым менән әсәйем килде. Бергәләшеп Ларисаға Амстердамды күрһәттек, ресторанда ултырҙыҡ. Уға күп итеп бүләктәр алдыҡ. Тик күреп йөрөнөм, атайым уға миңә ҡарағанда нығыраҡ оҡшаны.

— Ҡыҫҡаһы, һин ҡайтҡас, уға ысын тамуҡ ойошторҙоң инде, шулаймы?

— Эйе, мин уға бөтәһен дә күргәнемде әйттем. Ул мине тағы йыуатты, беҙ тағы ҡосаҡлашып илаштыҡ. Тағы иҫ киткес төн үткәрҙек. Мин иртәнсәк тороп эшкә киттем. Ул тороуға, бер кәрзин сәскә ебәрҙем. Ә эштән ҡайтыуыма, Лариса ҡасып киткәйне инде. Иң ҡыйыны... — Даан хәтирәләренә сумғайны, ирекһеҙҙән, үкһеп ҡуйҙы.

— Затлы әйберҙәрҙе урлап алып киткәнме? — Айбулат һағайып ҡуйҙы.

— Киреһенсә, — тине Даан. — Улай булһа, миңә еңелерәк булыр ине. Ул хатта бүләктәрҙе лә ҡалдырған. — Егет бер аҙ өндәшмәй торҙо. — Мин шул тиклем депрессияға киттем. Шунда уҡ үҙ-үҙемә ҡул һалырға теләнем. Тик нисек китергә генә белмәй аптырандым. Аҫылынһаң, имәнес. Венаны ҡырҡһаң, артыҡ күп ҡан. Юғары ҡаттан ырғыһаң, кеше күп күрә. Үҙем йәмһеҙ булғас, исмаһам, китеүем матур булһын ине. Шул саҡ, үҙе лә белмәйенсә, атайым ярҙам итте, үҙе менән тауҙарға саҡырҙы...

— Һәм һин сабыр итеп торҙоң, — тине Айбулат. — Быныһын дөрөҫ эшләгәнһең. Ғөмүмән, үлемде мөмкин тиклем кисектереп тороу яҡшы.

— Ә хәҙер нисек йәшәргә? — тине Даан. — Мин бит уны һаман онота алманым. Мин уны һаман яратам.

— Мин дә бит мөхәббәт ҡорбаны. Һиңә ҡарағанда ҡартыраҡ ҡорбан булғанға, мәсьәләне тәрәнерәк күрәм. Ҡыҙыҡмы һиңә минең фекерем? — Үҙен ғазаптарға һалған, йәшәүҙән ваз кисергә мәжбүр иткән тойғоһона Айбулаттың көләп ҡарауы, хатта был миһырбанлы көләү булһа ла, Даанға оҡшай ҙа, оҡшап та етмәй ине. Өндәшмәй генә баш ҡаҡты.

— Һин бит уны яратмайһың, егет. — Даан ҡаршы әйтергә уйлап ауыҙ асты. — Туҡта, мин һөйләп бөтәм дә, шунан бәхәс ҡорорһоң. Проблема һинең уны яратыу-яратмауыңда ла түгел. Төп сәбәп — һинең үҙеңде үҙең яратмауыңда, ҡабул итмәүеңдә. Һин, Рәсәйҙән килеп төшкән был һылыу ҡыҙ һиңә үҙеңде яратырға ярҙам итер, тип өмөтләндең. Шул уҡ ваҡытта үҙеңде бер кемдең дә ярата алмаясағына ике йөҙ процентҡа ышана инең. Шуға күрә һин был ҡыҙға үҙеңде яратып ҡарарға мөмкинлек тә бирмәнең. Уның бер генә шансы ла юҡ ине һине бәхетле итергә. Аңлайһыңмы?

— Аңлап етмәйем, — тип маңлайын ышҡыны Даан. — Аңламаным, тик әлегә бәхәсләшкем килмәй. Бәлки, тора-бара төшөнөрмөн дә. Ә һин?

— О-о-о, мин баштан уҡ бер ниндәй шанс та булмаған вариант һайлап алдым, — Айбулат яңы ғына асыш яһаған һымаҡ утҡа текләп торҙо. — Үлмәй ҡалай яҡшы иттең әле, егет, — тине ул Даанға боролоп. — Һиңә ҡарап үҙемде аңлап ултырам. Минең осраҡта, бәхет, ғөмүмән, мөмкин булмаған.

Ул кисергәндәрен, инде комедия ҡараған һымаҡ, яңынан күҙ алдынан үткәрҙе.

— ...Мин ятҡаным менән иң яҡын ағайымды етәкләштереп тигәндәй тумарлашырға сығарып ебәрҙем. Үҙем аҫылынып үлергә булып киттем. Тик һин париғыңды иҙәнгә бырғаған ише, миңә лә шундай бер мәрәкә кәрәк ине. Сөнки минең һөйгән йәремде үлеп кенә илатып була торған түгел. Ә минең мотлаҡ илатҡым килде. Исмаһам, бер тапҡыр...

— Нимә эшләнең инде?

— Уның бөтә ятҡан кейемдәрен ваннаға һалдым да өҫтөнә хлорка ҡойҙом. Был минең яҡты донъяла иң һуңғы ләззәтем булырға тейеш ине. — Айбулат көләп ҡуйҙы. — Ә бит бахырсыҡ Азалияның миндә бер генә эше лә юҡ ине. Уға үҙ тамуғы баштан ашҡайны. Ә мин, ҡотҡарыусыңмын тигән булып, үҙемде илаһтай тойоп,

уға үҙ тамуғымды йөкмәтергә маташҡанмын. Күкрәгендә үҙ тамуғын йөрөткән алланы күҙ алдына килтерә алаһыңмы?

— Ә ни өсөн һин үҙеңде һөйөүгә лайыҡ түгелмен тип уйлағанһың? — Даандың өндәшмәй тыңлауынан Айбулат, бәлки, русса аңлап та етмәйҙер, ти ине. Сос егет икән, йәш булһа ла, мәсьәләнең әрәсәһен бик тиҙ эләктереп алған.

— Ә һин һуң? — тине Айбулат. — Сәс ҡойолоуы сәбәп түгел. Кемдең генә сәсе ҡойолмай? Беҙҙә, киреһенсә, бик күп ирҙәр йәй булһа, баштарын тап-таҡыр итеп ҡырып йөрөй.

— Беҙҙә лә бар ундайҙар... — тип әйтергә мәжбүр булды Даан.

— Тимәк, үҙеңде бөтөрәм, тиһәң, сәбәп етерлек. Ә асылда — һәр кемдең үҙ тараҡаны.

— Ә кем һине ҡотҡарып алып ҡалды?

— Командир, — тине Айбулат. — Тик быныһы бөтөнләй башҡа тарих. Әйҙә беҙ йоҡларға тырышып ҡарайыҡ. Зыярат итеп үтә ныҡ хәүефле урын һайлағанһың. Беҙгә иртәгә бик күп көс кәрәк буласаҡ.

— Ә ағайыңа рәхмәт әйттеңме?

«Мине ағайым ҡотҡарманы», — тиергә итте Айбулат. Даан яңылыш аңланы, тип уйланы. Аңлатып торорға иренде. — Юҡ, әйтмәнем, — тиеү менән сикләнде.

Үҙенең иһә әле быға тиклем бер ваҡытта ла Иршат тураһында ныҡлап уйлағаны юҡ ине. Үҙен уйламаҫҡа мәжбүр иткәйне. Ә бит, ысынлап та, Айбулат үҙ теләге менән барып ҡапҡан «Азалия» тигән тоҙаҡтан уны тап Иршат ағаһы ысҡындырған. Үҙ бәхетен түләп, йолоп алған.

Әсәһенең әйтеүенән Иршаттың Себер сығып киткәнен белә. Ә уға кейәүгә барыуҙан баш тартҡан һөйгән ҡыҙы ҡайҙалыр сит илдә уҡып йөрөй, имеш. Быны бит нисәмә яҙмышты емереүгә сәбәп булған тик бер яҙмышты төҙәтергә теләгән Айбулат.

* * *

Күпме яҙмышты емергән...

— Йоҡо алмай, — тине Даан. Ул үҙен ағаһына килеп һыйынған малай һымаҡ тойҙо. Тик бәләкәй һәм көсһөҙ

булыуы уны инде ғазапламай, сөнки тиҙҙән шулай уҡ ҙур, көслө буласағына ышана. — Һин һуғышта ҡатнаштыңмы?

— Ҡатнаштым.

— Ҡайһылай бәхетлеһең! Ниндәй мауыҡтырғыс тормош менән йәшәйһең.

— Минең һуғыш ветераны ҡартатайым: күрмәгәндең күргеһе килә, күргәндең ҡосҡоһо килә, тип ҡабатлай торғайны. Һуғыштың ниндәй ҡыҙығы булһын? — Ул бая ҡоро-һары үлән яндырған усаҡтың көлөн аҡтарҙы ла:

— Их, утын булһа, — тип ҡуйҙы. Ҡараштары бында түгел, ҡайҙалыр хәтер төптәрен аҡтара ине булһа кәрәк.

...Улар егерме биш кеше ине. Баштан-аяҡ ҡоралланған егерме биш егет бүре һымаҡ ажғырып торған дошман өҫтөнә, тауҙарҙағы нығытмаға көтөлмәгән яҡтан һөжүм итте. Дошманды ошонан бәреп сығарырға ла кискә тиклем, төп көстәр ярҙамға килгәнсе, тотоп торорға бойороҡ бирелгәйне.

— Нығытманы һаҡлаусылар күмәк түгел ине. Башҡаларының задание буйынса киткән ваҡытын тап иткәнбеҙ. Ҡапыл һөжүм итеүебеҙ ҙә ярҙам итте. Был таш диуарҙы юғалтыуһыҙ алдыҡ. Тик ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡандай булдыҡ. Бөтөн тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренеп торған урын, ысынлап та, ифрат уңайлы. Был нөктәне ҡулда тотаһың икән, әллә ҡайҙан-ҡайҙа нимәләр булып ятҡанына тулыһынса хәбәрҙарһың. Шунлыҡтан уны кире ҡайтарыр өсөн дошман үҙенең бөтөн көсөн ташланы.

Боеприпас етерлек булғанда, нығытманы тотоу ҡыйын булмаҫ ине. Тик алыш барышында ике кешебеҙ ауыр яраланды, өсәү һәләк булды. Кискә табан беҙҙе бынан сығарыу йәки ярҙам ебәреү командованиеның планында баштан уҡ булмағанын, дошмандың көсөн тотоп торор өсөн манёвр ғына икәнен командир аңлағандыр, күрәһең. Сираттағы һөжүмдә кире ҡаҡҡас, ниндәйҙер мәлдә ул сигенергә бойороҡ биргән. Атыш ҡыҙыуында мин уны ишетмәгәнмен. Һуғыш барғанда ул шулай була: иң беренсе ҡурҡыу уяна. Шуны еңеп үткәреп ебәрә алһаң, ауыҙыңда ҡан тәме тойһың, ҡайҙандыр тыныслыҡ килә, гүйә, ҡеүәт өҫтәлә. Баш компьютер һымаҡ эшләй. Әйтерһең дә, һуғышҡа көйләнгән роботһың. Минең шул яғым насар: артыҡ мауығып китәм дә,

алдымдағы дошмандан башҡа бөтә нәмәне лә онотам. Ҡанда — адреналин, кәйеф күтәренке.

Икенсе ташҡын ябырылғанға тиклем иптәштәрем йәшерен һуҡмаҡҡа барып етеп өлгөргән. Минең йәнә ата башлағанымды ишетеп, командир ҡабаттан боролоп килгән. Ул килмәҫкә тейеш ине. Өс яралыны йөкмәп алған ун туғыҙ кешене хәүеф аҫтына ҡуйып, берәү өсөн туҡталырға тейеш түгел ине ул. Һәләк булған иптәшемдең «калаш»ын алғайным. Бер юлы өсәүҙе аяҡтан йығып, ҡәнәғәт торһам, үҙемде әйҙәп ҡысҡырғанды ишеттем. Артынан йүгерҙем. Инде хәүефле урындан ысҡындыҡ тигәндә, ул яраланды. Пуля үпкәһен үтәнән-үтә тишеп үткәйне. Ҡан урғыла. Санитар уны бер нисек тә туҡтата алмай. Ул арала беҙҙең һаман да тере икәнебеҙҙе төшөнгән командование, ниһайәт, вертолет ебәрҙе. Яралыларыбыҙҙы тиҙ генә тейәнек тә күтәрелдек. Санитар әллә ниндәй уколдар яһай, мин бинтты йомарлап тотҡанмын да, командирҙың яраһын усым менән баҫып барам. Базаға етәрәк командир иҫенә килде. Мин, быны күреп, тыйыла алмай илап ебәрҙем.

Шул хәлендә лә һалдатын йәлләп ята ине, аҡтыҡ көсөнә:

— Йәшә, егет, — тип ғырылданы. — Һу...ғыш... — тип әйтергә теләгәйне, тамағынан да ҡан китте. Беҙ уны госпиталгә алып барып өлгөрә алманыҡ.

— Йәшә, егет! — тип уйсан ғына ҡабатланы Даан.

— Нисек уйлайһың? — тип һораны голланд егете иртәнсәк. — Мин һинең һымаҡ була алырмынмы?

Әйберҙәрҙе йыйып, ҡуҙғалырға әҙерләнгән Айбулат аңламай уға боролоп ҡараны:

— Ниндәй мәғәнәлә?

— Һинең һымаҡ ҡотҡарыусы? — Егеттең тауышындағы тантаналы һоҡланыуҙан Айбулатҡа уңайһыҙ булып китте.

— Үҙең нисек уйлайһың? — тине ул көләмһерәп. — Парикты сисеп, ваннаға бырғаныҡ...

— Өҫтөнә хлорка ҡойҙоҡ, — тип дауам итте Даан.

— Хлорка ҡойҙоҡ. Бөттө. Киттек артабан. Тере кешенең ҡулынан килмәгән нәмә һирәк.

* * *

Тәбиғәттең ысын мөғжизәһе был тарлауыҡ. Урыны-урыны менән туғыҙар ҡатлы йорт бейеклегендәге таш ярҙар аҫтынан урғылып-шашып тау йылғаһы аға. Һыу спорты менән шөғөлләнеүселәр донъяның төрлө тарафтарынан йыйыла был урынға. Шул уҡ ваҡытта башыңды күтәреп ҡараһаң, кәпәсең осоп төшөрлөк таш диуарҙар ҡаяға үрмәләү менән мауыҡҡандар өсөн дә ылыҡтырғыс. Айбулат бында ныҡлап альпинизм менән мауығып киткән Дааның саҡырыуы буйынса ике аҙнаға ял алып килеп төшкәйне. Яңы ерҙәр күреү, шул уҡ ваҡытта оҫталығыңды ла арттырыу, етмәһә, дуҫтарың менән аралашыу — ысын мәғәнәһендә хыял. Башта сынаяҡ аҫты һымаҡ тип-тигеҙ Голландиянан килгән ҡаяға үрмәләүселәр, тропиктан саңғы ярышына ҡатнашырға йыйыныусылар һымаҡ, мәрәкә тойолһа ла, был егеттәрҙең ысын мәғәнәһендә маһирлығын күреп, һоҡланырға тура килде. Айбулат уҙа барһа бер йыл эсендә киң яурынлы, мускулдары уйнап торған, үҙ-үҙенә һәм донъяға ышаныс менән балҡыған Даанға яратып ҡараны. Ана бит хатта таҡыр башы ла нур сәсә һымаҡ.

— Әгәр ҙә ниндәйҙер ғилләә менән сәсем үҫеп сыҡһа ла, уны яп-ялтыр итеп ҡырып ташлар инем хәҙер, — тип көлдө Даан аэропортта осрашҡанда уҡ. Улар башҡаса элеккеләр тураһында һүҙ ҡуйыртып та торманы. Эшкә голландтарса төпсөрлөк менән тотонған Даанда Айбулат өсөн һәр ваҡыт файҙалы яңылыҡтар күп була. Тауҙар ҡырыҫ. Уларҙың ҡанундары йыш ҡына ҡан менән яҙыла. Шуға күрә ҡотҡарыу эшендә тәжрибәһе артҡан һайын Айбулат үҙенә оҫталыҡ етмәгәнен нығыраҡ тоя, хатта үҙенең эшен эстән генә алабарман үҙешмәкәрлек тип һанай башланы. Быға тиклем уға даланы ярҙам итеп килә килеүен. Тик кеше ғүмере өсөн яуаплылыҡ алаһың икән, даланға ғына ышаныуҙан туҡтарға ваҡыт.

Әле лә улар көндөҙгө күнекмәнән һуң яр буйына төшөп ултырҙы. Милли холоҡ-ҡылыҡ тураһында һүҙ сыҡҡас, Айбулат үҙенең аңламын:

— Һеҙ, голландтар, һикерер алдынан ете ҡат үлсәйһегеҙ, ә беҙ, тәүҙә ҡарап та тормай ырғыйбыҙ ҙа, тубыҡтан йә билдән барып батҡас, ах, мин ҡайҙа килеп эләктем һуң әле, тип ҡарана башлайбыҙ, ахыры, — тип шаярыу ҡатыш әйтеп ҡуйҙы.

— Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мине үлемдән һин ҡотҡарҙың, — тине Даан уйсан ғына. — Ҡотҡарҙың ғына түгел, яңынан тыуҙырҙың, тип әйтергә була. Тимәк, һеҙ башҡа сифаттарығыҙ менән көслө.

— Әйттең тағы: яңынан тыуҙырҙың, — тип ҡул һелтәне Айбулат. — Һин улайтып мине гонаһҡа батырма инде.

Ни тиклем генә киң ҡарашлы, заманса булырға тырышмаһын, Айбулат Голландиялағы бер енесле никахтарҙы ҡабул итә алмай ине. Уның әле тап шуға кинәйәләүен һүҙһеҙ аңлап, икеһе лә көлөп ебәрҙе. Ир-егеттәр араһындағы саф дуҫлыҡты иң изге тойғоларҙан һанаған Айбулат өсөн Амстердам урамында үбешеп торған йәки ғашиҡтарса етәкләшеп йөрөп ятҡан ир-ат бер ғазапҡа әйләнде. Шуға күрә ул, Даанды ҡотҡарған саҡта ныҡ ҡына ҡаймыҡтырған аяғы төҙәлеп етеү менән үк, үҙенең тауҙарына ашығып ҡайтып киткәйне.

Егерме биш йәшенә был донъяның быҫрағынан ғарҡ булған Айбулат өсөн мөһим ине был паклыҡ. Тауҙарҙа яралған дуҫлыҡ тап шулай булырға тейеш, тип иҫәпләй ул. Шунлыҡтан бер төркөм дуҫтары менән ике көндән килеп төшөргә тейешле Аняны ла түҙемһеҙлек менән көтә.

Тик Алланы көлдөргөң килһә, уға үҙеңдең пландарыңды һөйлә, тип дөрөҫ әйтәләр. Был яҡтар өсөн бөтөнләй ваҡытһыҙ яуған ҡойма ямғыр уларға бөтөнләй икенсе мәшәҡәт алып килде. Бер сәғәт эсендә ташып күтәрелгән йылғанан ҡасып уларға лагерҙарын бөтөнләй икенсе урынға күсерергә тура килде. Өҫ-баштарын алмаштырып саҡ ҡына ялға туҡтағайнылар, фажиғә тураһында хәбәр алдылар. Йылға буйлап катамарандарҙа ағып килгән халыҡ-ара студенттар отряды һәләкәткә осраған. Айбулаттар һәләкәт урынына иң яҡында урынлашҡан булып сыҡты. Урындағы ҡотҡарыусылар килеп өлгөргәнгә тиклем үк, уларҙың күбеһен табып, яраланғандарына медицина ярҙамы күрһәтеп, йылытып, палаткалар ҡороп бирҙеләр. Үтә ныҡ яраланғандары булмағанға, был эште ойоштороу тәжрибәле Айбулат өсөн артыҡ ҡыйын булманы. Тик ни тиклем генә тырышһалар ҙа, ун ике кешелек отрядтың биш ағзаһын таба алманылар. Икенсе көндө иртәнсәк кенә килеп төшкән ҡотҡарыу отряды йылға түбәнендә тағы ла ике кешене тапты. Йәшәү менән үлем сигендәге был икәүҙе шунда уҡ вертолетта яҡындағы дауаханаға оҙаттылар. Ә өс кеше — отряд етәксеһе Бобби Хилл менән тағы бер егет һәм ҡыҙ зым-зыя

юҡҡа сыҡты. Инде яңынан үҙ ағышына ҡайтып барған йылғаны буйҙан-буйға вертолеттан ҡарап сығыу һөҙөмтә бирмәне. Ҡараңғы төшөп эҙләүҙе туҡтатҡандан һуң, етәксеһе кәңәшмәгә йыйҙы. Артабан эҙләү файҙаһыҙ, тип белдереү етәкселәр өсөн һәр ваҡыт ғазаплы. Быға са өмөт осҡоно емелдәһә, һин ҡарарың менән шуны һүндерәһең. «Бәлки, терелер әле», — тигән өмөткә, «юҡ», тип хөкөм сығараһың. Етәксенең кәңәшмәгә, яҙмыш ҡушыуы буйынса, баштан алып, был эштең уртаһында ҡайнаған Айбулат менән Дааңды ла саҡырыуы, моғайын, шул ауыр мәлдә ниндәйҙер бәләкәй генә таяныс көҫәү булғандыр.

— Ҡыҙғаныска ҡаршы, был бисараларҙың бер ваҡытта ла табылмауы ихтимал, — тине етәксе. — Белгестәр хәбәр итеүенсә, йылғаның ошо урынында ҡыуышлыҡ бар. — Ул картала лагерҙан йыраҡ булмаған бер урынды төртөп күрһәтте. — Урғылып-ташып аҡҡан йылға ошонда ҡаҙан кеүек ҡайнап тора ла һыуы яртылашҡа кәмеп, йыуашайып артабан ағыла.

— Иң мәкерле урын, — тип һүҙгә ҡушылды тәжрибәле ҡотҡарыусыларҙың береһе. — Мәйеттәрҙең табылмауының сәбәбе ошондалыр, тип уйлайым.

— Ни өсөн мәкерле? — тип һораны инглизсә һөйләшеүҙең айышын үтә төшөнөп етә алмай ултырған Айбулат.

— Ошо тирәлә һыу аҫтында ҡыуышлыҡ бар. Һыу буранкаға ҡойған һымаҡ өйөрөлөп тора ла аҫҡа тарта. Йылға булып ер аҫтынан байтаҡ ҡына ағып барғандан һуң, бөтөнләй икенсе урындан килеп сыға.

— Һеҙ һалсыларҙы ошонда һыу һурып алғандыр, тимәксеһегеҙме? — тип аныҡланы Даан.

— Ундай хәлдәр булғылаған.

— Ә уны тикшереп булмаймы ни бер нисек тә? — тип һүҙгә ҡушылды Айбулат.

— Арала берәй камикадзе табылһа, була...

Айбулаттың алабарманлығын бер көн эсендә абайлап өлгөргән етәксе бер ниндәй бәхәскә урын ҡалдырмаҫлыҡ ҡатылыҡ менән:

— Бер кемдең дә ғүмерен күрәләтә хәүеф аҫтына ҡуйырға ризалығым юҡ һәм булмаясаҡ та. Был турала башҡаса һүҙ ҡуйыртмайбыҙ, — тип өҙә әйтте.

Шулай ҙа эҙләү эштәрен йылғаның ер өҫтөнә килеп сыҡҡан яғында дауам итергә кәрәк тигән фекергә кил-

деләр. Шунда уҡ ул тирәләге ҡотҡарыусылар менән бәйләнешкә инелде. Студенттарҙың тере икәненә инде бер кем дә ышанмай, һүҙ тик мәйеттәрҙе табыу хаҡында ғына барҙы.

«Әгәр ҙә һыу һурып алған булһа һәм ҡыуышлыҡҡа сығарып бырғаһа, был американдарҙың берәйһенең әле һаман тере булыуы ла бар бит. Тереләй ерләнеп, ләхет эсендә һушына килгән кеше кеүек ятһа?» Күҙ алдына килгән күренештән Айбулаттың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

Көнө буйы аяғөҫтө йөрөп, ныҡ арытылһа ла бындай ауыр тойғо менән йоҡларға ятыу һис мөмкин түгел.

Айбулат, күшеккән ҡошсоҡтар шикелле көшмөрәшеп, усаҡ тирәләй ултырған студенттар эргәһенә йүнәлгән Даан артынан эйәрҙе. Бер ҡара егет, гитараһын сиртеп, ярым бышылдап тиерлек моңло йыр йырлай. Уларҙың кәңәшмәнән сыҡҡанын белгәнлектән, студенттар ниндәйҙер өмөт менән боролоп көтөп алды. Туҡталған йырсыға «дауам ит» тип ымланы Айбулат. Йырсы туҡтағас, үҙен үҙе ҡосаҡлаған килеш сайҡала биреп ултырған бер ҡыҙ күҙ йәштәр аша:

— Сальма үҙенә бер төрлө ине. Беҙ әле лә бергә, тик, асылда, барыбыҙ ҙа яңғыҙ. Ә ул беҙҙе бергә туплай белә торғайны. Ҡояшҡа ҡыҙынырға сыҡҡан һымаҡ, бөтәбеҙ ҙә уның йылыһына йыйыла инек. Сальма булһа берәй нәмә уйлап табыр ине, — тине. Уға бер кем дә ҡаршы төшмәне. — Сальма булғанда, беҙ берҙәм инек. Ә хәҙер һәр беребеҙ айырым, үҙ-үҙебеҙҙең ҡурҡыу, хәсрәтҡайғыларыбыҙ менән ҡалдыҡ. Әгәр ул булһа, барыбыҙға ла йыуатырлыҡ һүҙ табыр, йылытыр ине.

— Юҡ, беҙ бөтәбеҙ ҙә һәйбәт кешеләр, — тине бәйләнгән ҡулын аҫып алған ҡаҡса ғына бер егет. — Тик һәр беребеҙ үҙ-үҙебеҙҙе ҡосаҡлап, йылыға сарсап ултырабыҙ.

— Нур, ҡояш нуры — бына кем ул Сальма Гали, — тип ҡысҡырып ҡуйҙы йырлаған егет.

«Быныһы, моғайын, шағирҙарылыр инде», — тип уйланы Айбулат. Нишләптер был һүҙҙәр барыһы ла уға нисектер ялтырауыҡлыраҡ, яһалмараҡ ишетелде. Бәлки, ят телдә булғанға шулай тойолғандыр. Даанға етәкселәре Бобтың ҡатыны ауырлы булғанын, бына-бына тәүге балалары тыуырға тейешлеген һөйләй башлаған студент-

тарҙы ҡалдырып, палаткаларына йүнәлде. Колағында һаман юғалған ҡыҙҙың сәйер исеме яңғыраны:

«Сальма Гали, Сальма...»

Башын эйеп, палаткаға сумам тигән ерҙә кинәт бер ҡарарға килеп, һынын турайтты ла ҡыуышлыҡ тураһында әйткән ҡотҡарыусыны эҙләп китте Айбулат.

— Кешенең тере булып, ярҙам көтөп ятыуы мөмкинме? — тип туп-тура һораны ул. Тегеһе лә шул хаҡта уйлаған булғандыр, күрәһең, аптыраманы:

— Теоретик яҡтан мөмкин. Ә былай шанс миллионға бер кимәлендә.

— Ундай хәлдең булғаны бар, тип һөйләйҙәр. — Эргәһендә ултырған хеҙмәттәше баҙнатһыҙ ғына һүҙгә ҡушылды. — Ысынлап та, ҙур ғына ҡыуышлыҡ бар һәм уны спелеологтар килеп, тикшереп, картаһын эшләп тә киткән, тиҙәр.

— Тимәк, ул картаны табып була.

— Була, нишләп булмаһын. Беҙҙең мөмкинлектәр менән... Тик йәшәүҙән туйғандар бармы?

«Спелеологтар инеп, тикшереп йөрөгән икән, нишләп мин инә алмаҫҡа тейеш?» Айбулат Дааңды тәржемә итергә саҡырып алды ла инде ныҡлы тәҡдим менән яңынан етәксе янына инделәр.

— Ошо урынды ныҡлап ҡарамай китһәк, ғүмеребеҙҙең аҙағына тиклем йән тынысլығы тапмаясаҡбыҙ.

— Ярай, — тине өлкән йәштәге, моңһоу ҡарашлы ир бер аҙ өндәшмәй торғандан һуң. — Техник яғын ентекләп уйлағыҙ. Был, әлбиттә, мөғжизәгә өмөтләнеү, — тип өҫтәне.

— Тормошта мөғжизә беҙ уйлағанға ҡарағанда йышыраҡ осрай, тип үҙегеҙ бит беҙҙе дәртләндерергә ятаһығыҙ, — тине унын отрядынан бер егет.

— Кем тәүәккәлләй?

— Тәҡдим кемдеке — шул инде, — тине Айбулат. Был дөрөҫ ине. Унын алабарман фекере өсөн кем ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйырға тейеш? Еңел һуланы. Бер ҡарарға килгәс, яурынынан таш төшкәндәй булды.

— Операцияны секундына тиклем иҫәпләп, һәр бер деталде ҡат-ҡат уйлап, ентекләп әҙерләйһегеҙ ҙә миңә инәһегеҙ, — тине етәксе. Ул, телефондан шылтыратып, һыу аҫты мәмерйәһенең картаһын юллай башлағайны инде.

Мөғжизә булды. Мөғжизә яр ситендәге ялпаҡ таш өҫтөндә ята ине. Ниндәйҙер ғиллә менән тулҡын уны шунда сығарып ташлағанмы, әллә ул үҙе шыуышып сығырға көс тапҡанмы?

Башта Айбулат уны бысраҡ, еүеш сепрәк өйөмөнә оҡшатҡайны. Яҡыныраҡ килгәс, кәүҙәнең нисектер иләмһеҙ ҡайырылып, уңайһыҙ ятыуынан мәйеттер тип һиҫкәнде. Муйынындағы пульсын ҡапшай һалды ла эсенә йылы йүгерҙе: саҡ-саҡ ҡына булһа ла һиҙелә. Һаҡ ҡына юғарыраҡ, мәмерйәнең төпкө яғынараҡ өҫтөрәне.

Өҫтәгеләргә алдан һөйләшелгәнсә хәбәр ебәрҙе. Әгәр ҙә мөғжизә булһа, бауҙы өс мәртәбә тартырға. Тегеләр ышанмайынса тағы ҡабатлатты.

Өҫкә сығарыуҙы хәстәрләгәнгә тиклем, Айбулаттың ҡулынан килгән берҙән-бер сара — ҡыҙҙы саҡ ҡына булһа ла йылытыу. Ҡаҡса ғына һомғол һынды ҡосағына алды ла шымды. Уға ваҡыт туҡтаған һымаҡ тойолдо. Бигерәк мыштырлайлар, тип уйланы егет. Мыштырламайҙар, әлбиттә, тик был таш ҡапсыҡ өҫкә баҫып, емерелеп килгән һымаҡ.

Ҡыҙ ыңғырашты. Елегенә үткән һыуыҡтан ҡаҡшаған тәне тере йәндең йылыһын тойҙо, күрәһең. Күҙҙәрен асырға маташты, тик ҡабаҡтары күтәргеһеҙ ауыр булғанлыҡтан, керпектәре араһынан ғына һөҙөп баҡты. Баш осонда балҡып торған нур көлтәһен күргәс, күм-күк ирендәрен саҡ ҡыбырҙатып:

— Are you an angel? — тип һораны.

Маңлай фонарын изгеләр һәм фәрештәләрҙең нимбына оҡшатып, уны Ғазраил тип ҡабул итеүҙәре тәүгә түгел: Айбулат көлөмһөрәне.

Тик ҡыҙҙың тәне ауырайып, күҙҙәре әйләнеп барыуынан ҡабат һушын юғалтыуын шәйләп:

— I am a man! A man only! — тиергә ашыҡты. Йәнен алырға килгән Ғазраилға һанап, ысынлап та, әрәм булып ҡуймаһын тағы. — Күҙеңде ас! Ташлап китмә, китә күрмә! Китһәң, кире ҡайтара алмам, — тине егет хафаланып. — Күҙемә ҡара, күҙемә! Ишетәһеңме!

Оҙон керпектәр яңынан күтәрелде. Был ғәжәп, өмөт, ҡурҡыу һәм ҡыуаныс, йәнә тағы әллә күпме хис-тойғоларҙы туплаған ҡараш менән осрашып, егет тертләп китте лә башын сайҡап ҡуйҙы. Ни ғәләмәт! Уның бит

был күҙҙәрҙе ҡасандыр күргәне бар. Был ҡуңыр күҙҙәрҙең ҡараһындағы йәшкелт һыҙаттарына тиклем таныш! Улар хәтергә көйҙөргөс мөһөр кеүек баҫылған! Бының булыуы мөмкин түгел, тик... Нимәлер йәнен әрнетеп, семтеп алды, тик иҫтәлектәр юллар мәле түгел.

— What country are you from? — Нимә тип әйтергә белмәгән өсөн, бары ҡыҙҙың иғтибарын тотоп торор өсөн генә һораны. Ҡәҙимге бер һорау, ожмах ҡапҡаһы төбөндә уны биреп тормағандары раҫ.

— From Russia. — Ул үҙенең тере икәненә һәм балҡыу башлы был йән эйәһенең ғәҙәти әҙәм балаһы икәненә ышана башлағайны, ниһайәт. — Do you know Urals?

Ғәҙәти әҙәм балаһы сәйер генә көлөп ҡуйҙы: «Бына һин ниндәй икәнһең, Сальма. Сальма Гали!»

— It is small world, isn't it? — тине.

— What do you mean?

Егет яуап ҡайтарып өлгөрмәне: өҫтән уларҙы тартып сығарырға әҙерлектең тамамланыуын белдерҙеләр.

— Ваҡыт, — тине Айбулат башҡортсалап. Урынынан тора башланы.

— Ниндәй ваҡыт? — тине ҡыҙ хәүефләнеп. — Нимәгә ваҡыт?! — Хәлһеҙ ҡулдарына әллә ҡайҙан көс ҡунды: егеткә йәбеште. — Ташлама, ташлап китмә!

— Йәшәргә ваҡыт! — тине Айбулат. — Йәшәргә, яратырға һәм яратылырға, матур-матур балалар табырға ваҡыт, Сәлимә һылыу!

Тоташты ҡуласа.

# Эсселар



# МИН ЯРАТКАН АМСТЕРДАМ

Өфөмдөң халыҡ-ара аэропортының өҫкө ҡатында тәҙрәнән мине оҙатырға килгән балаларыма һәм туғандарыма ҡарап торам. Тәҙрә быялалары ҡалын, шуға күрә улар тауышымды ишетмәй. Ә мин, әле бында булһам да, ил сиген үткән тип иҫәпләнәм, сөнки бер нисә минуттан «Люфтһанзе» самолеты Майндағы Франкфуртҡа алып осасаҡ. Ҡыҙым ауырлы ҡатындарға ғына хас ғорур һынын ҡайҡайтып нимәлер һөйләй. Уға ҡарайым да эсем яна. Бәпестең мин өйҙә саҡта тыуғанын бик көткәйнек тә, аҡыллы сабый: «Ваҡытымды үҙем беләм», — тигәндер, беҙ ҡабалана тип кенә ашыҡманы.

Кемдеңдер: «Хыялдарығыҙ менән абай булығыҙ. Уларҙың тормошҡа ашыу ихтималы бар», — тигән һүҙҙәре иҫемә төшә. Ҡайҙан килә ул хыялдар, ҡайҙан? Бәлки, уларҙы киләсәк ебәрәлер? Нисек кенә булмаһын, тормошомдоң көрсөккә килеп терәлгән бер дәүерендә йыуатҡыс һәм әйҙәүсе булып әллә ҡайҙан килеп инде ул башҡа — Амстердам. Хәйер, донъя гиҙеүҙең хәҙерге заманда бер ҡыйынлығы ла юҡ. Бары аҡсаң ғына булһын. Тик хыялымды фантастика дәрәжәһенә күтәргән бер әтнәкәһе бар ине. Көнбайыш Европаны турист булып түгел, тиңдәр араһында тиң, йәғни студент булып йәшәп ҡарағы килде. Ә бишенсе тиҫтәне ҡыуып барғанда кем ул мөмкинлекте бирһен? Әммә хыял тыуҙы, уны ғәмәлгә ашырыуҙы ғаләмгә оҙаттым һәм, ни өсөндөр, тормошҡа ашырына шикләнмәнем. Дуҫтар «Амстердамға барһам, ҡунаҡҡа килерһегеҙ», «Мин Амстердамға киткәс, белерһегеҙ әле» кеүек уйынлы-ысынлы һүҙҙәремдән көлөп, «Мадам из Амстердам» тигән ҡушамат та таҡты. Был бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән хыял барыһы, хатта үҙем өсөн дә сәйер ине. Әммә ете йыл эсендә ул тора-бара ниндәйҙер һыҙаттар ала башланы, мөмкинлек-

тәр барлығы билдәле булды һәм, ниһайәт, бойомға ашты. Бөтәһе лә хәл ителгәс, һуңғы имтиханды бирер алдынан, Санкт-Петербургта боронғо йәһүд телен бергә өйрәнгән хеҙмәттәшем, икенсе бер проекттың тәржемәсеһе тап булды. Голландияға уҡырға китеүемде белеп, үҙе бармағанға бик көйөндө һәм етәкселеккә ныҡ асыуланды. «Уларҙың бер ғәйебе лә юҡ, — тинем. — Был минең хыялым ине». «Нишләп миңә улай хыялланырға мөмкин икәнен әйтмәнең?» — тип ул тағы ла нығыраҡ ҡыҙып киткәйне.

Хәйер, көрсөк тураһында юҡҡа ғына иҫкә алманым. Бер мәл тормошомда быға тиклем эшләгән хаталар, яңылыш ҡабул ителгән ҡарарҙар, уйламай яһаған аҙымдар сисеп булмаҫтай тойолған төйөнгә уҡмашты ла алҡымыма тығылды, әйтерһең, һулар һауаға тотош юл ябылды. Тап шул ваҡытта, ул ҡыйынлыҡтар ҡайҙалыр баш етмәҫлек яҡҡа ҡасып китһәң генә ҡотолорлоҡ тойолғанға күрә тыуғандыр ул хыял. Тик ул бары шул ҡыйынлыҡтарҙы хәл иткәндән һуң ғына ҡабул ҡылынды. Әйтерһең дә, Хоҙай: «Афарин, булдырҙың. Бына шуның өсөн һиңә бүләк», — тигән кеүек булды. Ә миңә хәҙер инде был бүләк бик кәрәкмәй ҙә кеүек ине. Әммә тап шул ауырлыҡтарҙы үткән саҡта Амстердамға барырлыҡ кимәлгә еткәнмен һәм унда көткән һынауҙарҙы күтәрерлек көстө туплағанмын, ахыры. Был минең өсөн бик ҙур һабаҡ булды. Тимәк, берәй ҡаршылыҡ осраһа, уның алдында бөгөлөргә, урап үтергә, тайшанырға, абайламамыш булырға түгел, тәүәккәлләргә лә, зиһенде эшкә егеп, мәсьәләне сисергә тотонорға кәрәк. Юғиһә, ул барыбер ҡабат-ҡабат ҡалҡасаҡ. Шулай уҡ, ауырлыҡтарҙы яҙмыш беҙҙе һындырыу, язалау өсөн түгел, һынау һәм сыныҡтырыу өсөн ебәргәненә ышандым. «Проблемалар юҡ, ыңғай һәм кире ситуациялар ғына бар, һәм уларға яуап ғаләмдә күптән әҙер», — тип юҡҡа ғына әйтмәй бит аҡыллы кешеләр.

Һәм бына 2008 йылдың 4 ғинуарында, иртә таңда аэропорттың юғары ҡатынан аҫҡа ҡарап эстән генә йән яҡындарым менән хушлашам: каникулға ҡайтып булырмы-юҡмы — икеле, ә бер йыл ваҡыт аҙ түгел.

## ХЫЯЛҒА ИЛТКӘН ЮЛ

Был юлда осраған етди ҡаршылыҡтарҙың береһе тел булды.

Беҙҙең быуындағы бик күптәргә сит телдәрҙе ныҡлап өйрәнеү форсаты бала саҡта теймәне. Хәйер, «тимер ҡоршау» артында йәшәгәндә уның кәрәге лә бик юҡ кеүек ине. Беҙҙең Иҙәштә немец теле бишенсе класта ғына бер аҙ инеп алды. Ә Өфөгә 1-се һанлы мәктәп-интернатҡа уҡырға килгәс, уның ҡайғыһы булманы, сөнки математика иҫ киткес ауыр бирелде. Университетта инде өсөнсө курсҡа тиклем уҡытылған немец телен йүнләп өйрәнмәгәнгә үҙем ғәйепле. Хатта халыҡ-ара студенттар отряды составында айҙан ашыу ГДР-ҙа эшләп ҡайтыуым да был телде өйрәнергә теләк уята алманы. Хәҙер аңлайым, немец теле — минең тел- түгел. Ә бына инглиз теленә тартылыш ҙур, әммә өйрәнер өсөн мотив, этәргес сәбәп булмаған. Боронғо йәһүд телен өйрәнә башлау менән үк инглиз теленең кәрәге сыҡты: бик күп һүҙлектәр, тәфсирҙәр рус телендә юҡ ине. Осрағанда тел өйрәнер өсөн дәреслектәр, китаптар йыям, кассеталар һатып алам, һәм... телде нисек еңел һәм тиҙ өйрәнергә тигән мәҡәләләр уҡыйым. Бына шулай үҙ-үҙемде алдау менән — йәнәһе, бына, сит телгә табан тағы бер аҙым яһалды — өс-дүрт йыл ваҡытты әрәм иткәнмен. Хәтеремдә, Санкт-Петербургта инглиз әкиәттәре китабы һатып алғайным. Самолет күткәндә шуны килтереп сығарҙым. Астым да һүҙлекһеҙ-ниһеҙ уҡый башланым. Башта бер ни ҙә аңламаным: аҡ ҡағыҙ битен семәрләгән латин хәрефтәренә текләгән килеш ултырҙым. Артабан яйлап ҡына «ҡуйы томан» араһына инеп киткәнмен. Бына бер мәл саҡ-саҡ ҡына нимәлер шәйләнә, аңлашыла башланы. Әкиәттәрҙең бит бар халыҡтарҙа ла бер ни тиклем оҡшашлыҡтары бар. Тора-бара мауығып киттем, аҙағын белер өсөн ҡат-ҡат уҡыйым. Өфөгә килеп төшкәндә бер нисә әкиәттең осона сыҡҡайным һәм башымда саф инглиз телендә бер нисә һүҙ өйөрөлөп йөрөй ине инде. Баҡһаң, үҙем дә аңламайынса, сит телдәр өйрәнеүҙең иң ырамлы юлдарының береһенә баҫҡанмын. Айырым һүҙҙәрҙе тутыйғош кеүек ҡабатлап ятлағанға ҡарағанда, уларҙы һөйләм эсендә хәтергә һеңдереү күпкә отошлораҡ. Әгәр ҙә

уҡыған тексың ҡыҙыҡ булһа, бының өсөн артыҡ көсөргәнеш кәрәкмәй. Әлбиттә, бында минең ғүмер буйы һүҙ менән эш иткәнемдә һәм тәржемә менән шөғөлләнгәнемдә лә күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Егерме йыл буйы көндөкөн-көнгә нимәләр тәржемә итәһең икән (ике телле булғанлыҡтан, беҙ, аҙ һанлы милләт вәкилдәре, күбебеҙ шулай эшләргә мәжбүр, ә был бына ниндәй плюс икән!) — ике-өс һүҙ таныш булһа, тотош һөйләмде аңлап була. Тағы ла бер ыңғай нәмә: икенсе телде белһәң, өсөнсө, бишенсе, егерменсе телде өйрәнеү торған һайын еңеләрәк була бара. Быны: «Баламдың теле русса ғына асылһын. Уның башын бутап, туған телде өйрәтеп тормайым», — тип нык яңылышыусылар өсөн юл ыңғайында ғына, әммә махсус рәүештә, һыҙыҡ аҫтына алып әйтәм. Мейеһе һығылмалы, хәтере саф ваҡытта сабый телдәрҙе тәбиғи рәүештә, бер ниндәй көсөргәнешһеҙ, уйын һымаҡ өйрәнә һәм хатта ике телгә, мәҫәлән, башҡорт һәм рус — башҡа телдәрҙе өҫтәһәң дә «эһ» тә итмәй. Ә ни өсөн туған телде белеү отошлораҡ? Сөнки, мәҫәлән, инглиз йәки француз телен өйрәнергә рус теле аша тотонһаң, икенсе бер ҡыйынлыҡҡа тап киләһең. Ситкә китеү булһа ла, туҡталайым. Инглиз телен өйрәнә башлаған ейәнсәрем дәрестән «фәнк ю» (рәхмәт), тип ҡайтҡан. «Нишләп «ф» менән әйтәһең, һин бит «ҫ» хәрефен әйтә беләһең», — тим. Ысынлап та, инглиз телендә һөйләшкән рустарҙың акценты шунда уҡ ҡолаҡҡа ташлана, ғәҙәттә, улар «сэнк ю», тиҙәр. Һуңғы ваҡыттарҙа, был акцент артыҡ ҡолаҡҡа бәрелмәһен өсөн, тимәк, «ф» тип әйттерә башлағандар. Күрәһегеҙме, иң кәрәкле бер инглиз һүҙен әйтер өсөн өс башҡорт өнө ярҙамға килә. Беҙҙең «ө, ә»-ләр — немец телен, «ғ» француз телен өйрәнгәндә кәрәк. Ә инде, ғәрәп йәки төрки — төрөк, әзери, үзбәк, ҡаҙаҡ, хатта яҡут, сыуаш һәм башҡа бик-бик күп телдәр хаҡында әйтеп тораһы юҡ. Әммә артикуляцион, йәғни ауыҙ-тел аппаратының һығылмалығының мөһимлеге быының менән генә сикләнмәй. Күренекле ғалим һәм полиглот (тиҫтәнән ашыу тел белгән) Валерий Куринский, телмәр аппаратының хәрәкәттәрен күнектереү ярҙамында сит телдәрҙе өйрәнеү ысын мәғәнәһендә оҫталыҡҡа килтерә, тип раҫлай. Уның бөтөн донъяла танылыу яулаған автодидактика ысулы тап ана шул хәрәкәттәргә иғтибар итеү һәм уларҙы күнектереүгә бәйләнгән.

Ни өсөн тел мәсьәләһенә шул тиклем ентекле туктальгуымдың сәбәптәрен тағы бер тапкыр кабатлайым. Кем менән генә һөйләшмә, улар араһында йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә бар, артабанғы үҫешкә камасаулаған иң төп кәртәләрҙең береһе булып тел өйрәнеү тора. Ә инде ғүмер буйы башкорт мәҙәниәте йәки матбуғатында эшләп тә, үҙҙәренә икмәк табырға ярҙам иткән башкорт телен йүнләп өйрәнә алмағандар тураһында һүҙ ҙә юк.

Ә хәҙер яңынан инглиз теленә һәм ураү юлыма әйләнеп кайтайык. Был телдәге иң ҙур кыйынлыктарҙың береһенә бик тиҙ барып төртөлдөм. Көләмәстәгесә әйтһәк, «Манчестер» тип яҙылғанды «Ливерпуль» тип укырға кәрәклеген белмәйем. Шуға күрә «инглиз теле фәләнсә сәғәттә» тигән рекламалар йоғонтоһонда курсҡа яҙылырға булдым. Тик был миңә тағы ла бер тапкыр ни тиклем наҙан икәнемде күреп күңелемде төшөрөргә һәм эшкә ашмағанлығыма инанырға ғына булышлык итте (ошо ике кире һығымта яһар өсөн күпме акса сығарып һалғанымды «ләм-мим»). Әммә бер файҙаһы тейҙе, айҙан ашыу әҙәм көлкөһө булып ултырыу, ниһайәт, сәмемде уятты. Ә сәм, әгәр ҙә ул дөрөҫ якка йүнәлтелһә, ракета яғыулығына тиң. Ялкау ғына кыбырлап йөрөгән сакта, берәүҙең арттан елле генә итеп типкәне кеүек.

Изге Яҙмаларҙы башкорт теленә тәржемә итеү буйынса туранан-тура етәксем булған Томас Каут (уның тураһында һүҙ алдарак буласак әле) иң кәрәк вакытта баһалап бөткөһөҙ киммәтле кәңәш бирҙе: «Беләһеңме, — тине ул. — Үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм. — Ә тиҫтәләгән тел белгән кеше буларак, уның былай тип әйтергә тулы хокуғы бар. — Һиңә укытыусы табырға кәрәк. Тик ул, бәхәсһеҙ, абруйға эйә һәм бик талапсан өлкән кеше булырға тейеш. Йәш булһа, дәрес әҙерләмәҫ өсөн сәбәп эҙләй башлаған сағында ул бер нисек тә оялта алмаҫ. Ә әҙәм балаһына үҙ ялкаулығын аклар өсөн сәбәп табыуы һис тә кыйын түгел.

Был һүҙҙәр фәрештәнең «амин» тигән сағына тура килде, ахыры. Ун-ун биш көн тигәндә улар тура мәғәнәһендә матдиләште. Һикһән бер йәше менән барған Лина Рәхим кыҙы Смакова — оҙак йылдар Өфө нефть институтында эшләгән иҫ киткес һәләтле укытыусы. Хаклы ялға сыккандан һуң репетиторлык менән шөғөлләнә, укыусылары донъяның бик күп абруйлы вуздарында укып йөрөй. Торғаны бер хазина. Тик иң шәп

уҡытыусының да бер етешһеҙлеге була: белемдә башыңды ярып, әҙер генә итеп һала алмай.

Дер ҡалтырап беренсе дәрескә килдем: минең менән шөғөлләнергә риза булырмы-юҡмы? Иң тәүҙә бер-ике ябай ғына һөйләмде ҡысҡырып уҡытып ҡараны. Сал сәстәренең үрә торғанын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Шулай ҙа йөҙөнә сығарманы. Ә тәржемәмдә ишеткәс, күңелләнде: «Һүҙ байлығы бар. Кәмендә мең һүҙҙер, моғайын». Тимәк, туҡтауһыҙ художестволы әҫәрҙәр уҡып маташыуым бушҡа китмәгән. Шулай итеп, аҙнаһына өс тапҡыр икешәр сәғәт шөғөлләнә башланыҡ. Ваҡыт тар булғанлыҡтан, грамматикаға артыҡ иғтибар юҡ. Иң мөһиме, дөрөҫ уҡырға, аңларға һәм ҡабаттан һөйләп бирергә тейешмен.

Ул мәлдә әле «Ватандаш» журналында эшләп йөрөйөм. Көҙгө матбуғатҡа яҙылыу ваҡытында командировкалар күбәйеп китте. Бер көндө дәрескә йүнләп әҙерләнмәй барҙым. Ыҡ-мыҡ. Ә уҡытыусым, ауырыңҡырап тороуына ҡарамаҫтан, бөхтә итеп кейенгән, сәсен матурлап тараған, килешле итеп төҙәнергә лә көс тапҡан. Тәүҙәрәк ул хатта йылмайырға ла тырышты, әммә торабара йөҙө һөрөмләнә төштө, аҙаҡтан бөтөнләй ҡарайҙы. Өндәшмәне. Илла-алла менән дәресте осланыҡ. Уҡытыусым һыҙланған ҡулдары менән өҫтәлгә таянып, шешенгән аяҡтарына саҡ-саҡ тороп баҫты. Ғәҙәттәгесә, килешелгән сумманы өҫтәлгә һалдым. «Гөлсирә, — тине ул боҙ һалҡынлығы менән. — Аҡсағыҙҙы алығыҙ, мин бөгөн уларға лайыҡ түгелмен». Сикәгә сәпәһәләр ҙә былай ҡыйын булмаҫ ине. Командировканан һуң ҡайтҡанымды, ҡан баҫымымдың күтәрелгәнен һөйләп, һаман аҡланып маташам. Ә ул тораташ кеүек баҫҡан да тиҙерәк йыйынып сығып китеүемде көтә. Абайламағанында аҡсаны эргәләге тумбочканың өҫтөндә ятҡан дәфтәр араһына тығам.

— Әгәр ҙә аҡсағыҙҙы алып китмәһәгеҙ, башҡаса килеп йөрөмәһәгеҙ ҙә була.

Бындай тәрбиәнән һуң башҡа бер ваҡытта ла дәрескә әҙерләнмәй килергә баҙнат итмәүемде әйтеп тә тораһы юҡ.

Ошонан һуң балаларым:

— Берәү булһа, аҡсам йәл, тип уҡыр ине, әсәйем, уҡытыусым аҡсамды алмай ҡуйыр, тип ҡурҡып уҡый, — тип шаярта торғайны. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, Лина Рәхим

ҡыҙы минең менән теп-теүәл бер йыл шөғөлләнде һәм шул ваҡыт эсендә телде 10—15 йыл буйы өйрәнгән кешеләр өсөн дә ауыр ғына булған TOEFL имтиханына әҙерләне. Уның ни тиклем фиҙаҡәр һәм яуаплы уҡытыусы булғанына тағы бер генә миҫал килтерәм.

Киске алтыға дәрескә киләм, ул өҫтәл әҙерләп көтөп тора. Унан һигеҙгә тиклем уҡыйбыҙ. Сәй эсәбеҙ ҙә тағы унға, ун бергә тиклем шөғөлләнәбеҙ. Йыш ҡына ҡайтырға сыҡҡанымда ун икенселәр киткән була. Бер төндө, ул үҙен айырыуса насар тойғанлыҡтан, бик борсолоп ҡайттым. Иртәнсәк эшкә кейенеп маташҡанда шылтыратты:

— Кисә ниндәй теманы аңламағанығыҙҙы асыҡланым. Киләһе дәрескә тиклем уны үҙләштерергә кәрәк. Шуның өсөн мин һеҙгә махсус һорауҙар һәм миҫалдар әҙерләнем. Нисек һеҙгә тапшырырға? — тине ул.

— Эшкә барып етеү менән һеҙгә шылтыратырмын. Телефондан әйтеп яҙҙырырһығыҙ, — тинем.

Бер килке өндәшмәй торҙо, шунан:

— Унда бит 145 һөйләм, — тип һушты алды. Ҡасан яҙып өлгөргән? Тимәк, төнөн бөтөнләй йоҡламаған. Шундай уҡытыусы булғанда нисек ялҡауланаһың инде?! Тырышам, ауыр-ауыр текстарҙы аңлайым, тәржемә итәм, иншалар яҙам, тик һөйләшә белмәйем — аҡыллы эт кеүек, һәм бер ваҡытта ла белмәм һымаҡ. Дәрес иртәрәк бөткән көндәрҙә, һәләтһеҙлегем өсөн ғәрләнеп, Дан Бульварынан Сипайловоға тиклем илай-илай ҡайтҡаным хәтерҙә.

Бына шундай көйөнөстәр һәм ара-тирә ҡыуаныстар менән 2007 йылдың ноябрь аҙағы килеп етте һәм Санкт-Петербургтан иҫән-аман ғына имтихан тапшырып ҡайттым. Ә бит май айында имтихан тапшырып ҡарағандан һуң беҙҙең проектта мөхәррир булып эшләгән, күптән түгел генә Амстердамда уҡып ҡайтҡан Питер егете Александр Сизиков: «Әгәр был ғына белемегеҙ менән барһағыҙ, һеҙгә әҙәм түҙгеһеҙ ауыр буласаҡ», — тип киҫәткәйне. TOEFL-ды бирә алғас, аҙыраҡ тынысльҡ килде. Инде Амстердамға юл асылғайны: билеттар алынған, виза кеҫәлә. Голландияның Библия йәмғиәте йыл һайын донъялағы өс кешегә биргән грант буйынса Амстердам Ирекле университетының Әҙәбиәт һәм сәнғәт факультетына, Библияны тәржемә итеүселәр бүлегенә уҡырға барам.

## НИ ӨСӨН?

Минән йыш ҡына: «Ни өсөн Библияны тәржемә итәһең?» — тип һорайҙар.

Бында бер һүҙ менән генә яуап биреүе ҡыйын. Әсәйемдең атаһы — Бохарала белем алған, Октябрь революцияһына тиклем үҙ мәхәлләһе булған мулла. Совет власына бөтөн малын, байлығын тапшырып, бер атын һәм оҙон арбаһын ғына үҙенә ҡалдырған. Шул арбаға берәһенән береһе бәләкәй ун дүрт балаһын теҙеп ултыртып, шуларҙы астан үлтермәҫ өсөн урындан урынға күсә торғас, Советтар Союзының яртыһын урап сыҡҡан. Аҙаҡтан ул яңы төҙөлөп ятҡан Октябрьский ҡалаһында төпләнгән. Ғүмеренең ахырына тиклем эргәләге Төрөкмән ауылы мәсетенә йөрөнө. Һирәк-һаяҡ булһа ла беҙҙең Иҙәшкә килгәнендә, ауыл халҡы өйҙән өйгә йөрөтөп, аят уҡытып ҡалыр ине. Мирхәбиб бабайымдың ауыҙынан атабыҙ Әҙәм, әсәбеҙ Һауа, Ибраһим ғәләйһиссәләмдәр тураһындағы ҡиссаларҙы тәүләп ишеткәнем хәтеремдә. Ул ваҡытта миңә биш-алты йәш булғандыр.

«Башҡортостан» гәзитендә эшләп йөрөгәндә шағир Ихсан ағай Әхтәмйәнов боронғо бер китап бүләк итте. Ул ғәрәп хәрефтәре менән иҫке төрки телендә яҙылғайны. Ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, уның тәүге бер нисә бите юҡ ине. Яйлап ҡына уҡый башлағас, мин унда мулла бабайым һөйләгән ҡиссаларҙы таныным. Был үткән быуаттың 90-сы йылдары башында булды. Шуны хәҙерге башҡортсаға ауҙарып, матур итеп балалар өсөн нәшер итке килде. Бер абруйлы ғына дин әһеленә мөрәжәғәт иткәс, ул: «Һәй, еврейҙәр бит улар!» — тип ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы. Пәйғәмбәрҙәр хаҡында шулай илтифатһыҙ ғына мөнәсәбәттән шаҡ ҡатып йөрөгәнем иҫемдә. Ә инде Рәсәй Библия йәмғиәтенең Санкт-Петербургтағы бүлексәһе Библияны башҡорт теленә тәржемә итеү өсөн тәржемәселәр төркөмө йыйғас, беренсе тапҡыр Тәүратты асып ҡараным һәм уның иң тәүге китабы булған «Башланмыш»та тағы шул уҡ ҡиссаларҙы күрҙем.

Тормошома ҡырҡа үҙгәреш индергән өсөн ихлас күңелемдән рәхмәт әйтмәй үтһәм, яҡты иҫтәлегенә хыянат булыр: был проектҡа өлкән яҙыусыбыҙ Әмир ағай Гәрәев йәлеп иткәйне.

«Библияны донъялағы төрлө телдәргә тәржемә итеү буйынса халыҡ-ара проект бар. Аллаһ Раббының: «Бөтөн телдәрҙә лә һөйләшермен», — тигән һүҙҙәре менән рухланып, уны хатта бик аҙ һанлы милләттәрҙең теленә лә тәржемә итәләр. Бына шул проектта Иҫке Ғәһедте башҡортсаға тәржемә итеү ҙә ҡарала. Шул эш менән шөғөлләнер өсөн Рәсәй Библия йәмғиәте ижади төркөм туплай», — тине ул иң башта.

Диндәрҙән, ә инде Библияны әйтеп тә тораһы юҡ, ғәйәт алыҫ кеше булараҡ, артыҡ уйлап тормайынса: «Ә быны башҡортҡа ни кәрәге бар?» — тип һорағаным хәтеремдә. Әмир ағай миңә, Ибраһим ғәләйһиссәләм диндәре тип аталған өс дин — иудаизм, христиан дине һәм исламдың инеше берлеге хаҡында тотош бер лекция һөйләне. «Алла бер, тип әйткәндәренә иғтибар иткәнең бармы? Бар. Ә ни өсөн икәнен уйлағаның юҡмы? Беҙ бер Аллаға инанабыҙ, пәйғәмбәрҙәребеҙ бер үк һәм диндәребеҙҙең инеше лә бер. Өс дин — шул бер Аллаға алып барған өс юл. Донъяла диндәрҙе бер-береһенә һөскөртөп, халыҡтар араһында дошманлыҡ утын ләүкетеп ебәрергә ынтылған көстәр әүҙемләшеп торған заманда тәржемәсе ниндәйҙер кимәлдә дуҫлыҡ илсеһе булып тора, дуҫлыҡ күперҙәре һала», — тип шиғриәтле итеп әйтеп биргәнен иҫләйем. Эйе, тап ошо һүҙҙәр менән әйткәне, «дуҫлыҡ күпере» тип бер нисә тапҡыр ҡабатлауынан уның да был мәсьәлә тураһында уйланғаны һәм ойоштороу эшенә аңлы рәүештә, выжданы менән килешеп тотонғаны күренә ине.

Тик минең Алла һәм дин мәсьәләләре менән артыҡ мауыҡмағанымды абайлағас, ул икенсе дәлил килтерҙе: «Донъялағы иң бөйөк ижадсыларҙы — рәссам, композитор, әҙиптәрҙе меңдәрсә йылдар дауамында ижадҡа илһамландырған бөйөк китаптарҙың береһен үҙ телеңдә яңғыратҡың килмәҫ инеме ни?» — тип һораны.

Шулай итеп, Әмир ағай тәҡдим иткән бер нисә тиҫтә кеше араһынан артабанғы эшкә унлаған тәржемәсе һайлап алдылар һәм тәржемә эшенең нескәлектәрен өйрәтер өсөн Санкт-Петербургка ебәрҙеләр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ул тәүге сәфәрҙә Әмир ағай ҡатнаша алманы, сөнки көтмәгәндә дауаханаға эләккәйне.

Санкт-Петербургтағы тәүге семинарҙан ҡайтҡас, миңә Ҡөрьәндең башҡортсаға тәржемәһен мөхәррирләгән арҙаҡлы журналист Дәүләткирәй Дәүләтбай улы Мәһәҙиев шылтыратты. Ул минең еҙнәй, ғүмерем буйы журналистикала остазым да, таянысым да булған бик яҡын рухташ кешем. Ул минең был эшкә тотоноуыма ризаһыҙлығын белдерҙе: «Балдыҙ, гонаһынан ҡурҡмайһыңмы?» — тип һораны. «Еҙнәй, әйҙә һәр кемебеҙ үҙ гонаһы тураһында уйлаһын. Мин үҙемдеке өсөн нисек тә үҙем яуап бирермен», — тип бик тупаҫ яуап ҡайтарғанымды әле лә оялып иҫемә төшөрәм. Нисек кенә булмаһын, был һөйләшеү миндә ғәйәт ауыр тәьҫир ҡалдырҙы һәм эсем бошоп шул турала Әмир ағай менән һөйләшкәйнем. Шул ваҡытта ул: «Ҡөрьән»дең башҡортсаға тәржемәһен мөхәррирләгән кеше булараҡ, Дәүләткирәй һәйбәт белергә тейеш. «Әл-Бәҡара» сүрәһенең 87-се аятында: «Хаҡтыр, беҙ Мусаға китап (Тәүратты) иңдерҙек. Шунан һуң беҙ бер-бер артлы тағы пәйғәмбәрҙәр күндерҙек. Мәрйәм улы Ғайсаға мөғжизәләр ҡеүәте (Инжилды) бирҙек», — тип әйтелә». «Әлү-Ғимран» сүрәһенең өсөнсө аятында ла Мөхәммәткә: «Һиңә ҡәҙәр иңдерелгәндәрҙе раҫлап, Ул һиңә китап иңдерҙе, һәм Әт-Тәүратты һәм Әл-Инжилды иңдерҙе», — тип әйтелә», — тип, үҙенең һәр эшкә лә төптән уйлап, аҡыл һәм намыҫ менән тотонғанын тағы бер тапҡыр раҫлап ҡуйҙы.

Ысынлап та, Алланың кеше менән мөнәсәбәтен сағылдырған һәм, бынан әллә нисәмә быуат элек үк яҙылыуына ҡарамаҫтан, миллиондарса кешеләрҙең ҡулынан төшмәй уҡылған, бөгөнгө көндә 2036 тел һәм ләһжәгә, шул иҫәптән ғәрәп, төрөк, татар телдәренә лә ауҙарылған икән, ни өсөн ул башҡорт телендә яңғырамаҫҡа тейеш? Мин дин белгесе түгел, ә тәржемәсе. Шуға күрә төрлө конфессияларҙың быуаттарға һуҙылған ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәренән ситтә торам. Был минең бурысыма инмәй. Шулай ҙа бер нәмәне әйтмәй булдыра алмайым: ҡайһы ваҡыт ысын мәғәнәһендә ҡан ҡойошҡа әйләнеп киткән был бәхәстәрҙе ҡуйыртыусылар диндәрҙең Бер һәм Бар Аллаға алып барыусы юл, ә пәйғәмбәрҙәрҙең шул юлға әйҙәүселәр икәнен һәм хатта Алланың үҙен дә онотоп ебәрә кеүек миңә.

## ҺАУМЫ, АМСТЕРДАМ!

Самолет Өфөнән 8 сәғәт 40 минутта күтәрелде. Һамарҙа бик күп халыҡ ултырҙы. Башлыса, бала-сағалылар. Европаға каникулға китеп баралар. Юғарынан Рәсәйҙең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәре үҙәккә үткес һалҡын кеүек күренә. Эргәмдә ултырған утыҙ йәштәрҙәге егет сит илдәргә бик йыш оса икән. Үҙен бик ышаныслы тота. Мине: «Европа аэропорттарында бөтәһе лә бик уңайлы, борсолмағыҙ», — тип тынысландырҙы.

Майндағы Франфурктҡа (Германия) 10 сәғәт 50 минутта килеп төштөк. Амстердамға самолет 12 сәғәт 40 минутта буласаҡ.

Яңғыҙлыҡтың һәм телһеҙлектең еңел түгеллеген бында килеп төшөү менән үк тойҙом. Олоғара бина, мыжғып торған ғәм халыҡ, күпме лөғәт һәм тел, әммә был ятлыҡта инглиз теленән башҡа ҡолаҡҡа ятышлы бер генәһен дә ишетмәйем. Ошонда ике илдең сиген үтергә тейешмен, башта Рәсәйҙән Германияға инергә, унан Голландияға сығырға. Уйымда дәреслектәрҙәге «Аэропортта», «Паспорт контроле» кеүек темаларҙы ҡабатлайым. Өфөлә 28 градус һыуыҡ булып ҡалғайны, бында йылы. Ҡар бөтөнләй юҡ. Самолеттан аҫҡа ҡараһаң, йәм-йәшел баҫыуҙар.

Аэропорт ни тиклем генә ҙур булмаһын, бөтә нәмә лә ғәйәт уңайлы һәм уйлап ойошторолған. Амстердам самолетын мәшәҡәтһеҙ генә көтөп алдым. Ә унда нисәмә ай буйы хатлашып, танышып бөткән Анни де Йонг ҡаршы аласаҡ та дөйөм ятаҡҡа алып барып урынлаштырасаҡ.

Амстердамдың «Схипхол» аэропорты айырыуса уңайлы икән. Унда ла, бында ла хәрәкәт итеүсе юлдар, йомшаҡ ҡына тәгәрләгән арбаға багажыңды һалып алаһың да, тирә-яғыңдағы бөткөһөҙ кафеларға, магазиндарға ҡарана-ҡарана атлай бирәһең. Иң мөһиме, кәрәк ереңә барыу өсөн баш ватаһы юҡ — бөтә кеше лә аңларлыҡ итеп, ҡайҙа йүнәлергә уҡтар менән күрһәтеп ҡуйылған.

Багажымды тәгәрләтеп килеп сығыуға, исемем яҙылған плакат тотоп торған, һөйкөмлө сырайлы, буйсан ҡатынды күреп ҡалдым. Ҡаршыһына барып баҫыуым булды:

— О, Хулсира, — тип ҡосаҡлап алды (Голланд телендә «г» шулайыраҡ яңғырай).

Эскә йылы инеп китте, апайым кеүек күреп һыйындым. Алға китеп булһа ла әйтәйем, бер йыл буйына бауыр баҫыр яҡыным, хәстәрлекле дуҫым булды ул. Донъяла яҡшы кешеләр күп барыбер, тигән ҡыуаныслы фекеремә тағы бер раҫлау. Ҡаҡса ғына Анни үҙе менән сағыштырғанда ныҡ ҙур күренгән, беҙҙең «Газель» кеүегерәк машинала килгән. Оҫта һәм ышаныслы йөрөтә. Аэропорттан сығып оло юлға төшөүгә саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем — беҙгә табан бер самолет елдереп килә. Баҡһаң, һауаға күтәрелгән самолеттар оло юлдың өҫтөнән генә үтә икән. Бына ҡайҙа күренә ул ер наҡыҫлығы.

Анни йылмая-йылмая миңә ҡарап ала. Ә мин Томастың икенсе алтын кәңәшен ҡуллана башлайым. «Әгәр ҙә телде тиҙерәк өйрәнергә, кешеләр менән аралашырға һәм тормошҡа яраҡлашырға теләһәң, оялма. Дөрөҫмө-түгелме, уйлап торма: ауыҙың бер туҡтауһыҙ йыбырлаһын: «бла-бла-бла».

Бер нисә минут эсендә быйылғы ҡыштың һыуыҡлығын, Рәсәйҙә Яңы йыл байрам итеүҙең рәт-сиратын, ейәнсәремдең тыуырға өлгөрмәй ҡалғанын — барыһын да һөйләп ташланым. Үҙем һөйләйем, үҙем аптырайым: аңлай ҙа баһа был мине. Анни ҙа үҙенең ире менән әле беҙ үтеп барған Һаарлемда йәшәгәнен, берҙән-бер улдары икенсе ҡалала эшләгәнен, инде утыҙҙы үткән булһа ла һаман өйләнмәгәнен һәм үҙҙәренең дә ейән-ейәнсәрҙәр һөйөргә хыялланғанын һөйләй. Тирә-яғыма ҡарайым: ҡала әкиәттәге кеүек матур, боронғо өйҙәр, ҡайҙа ҡарама велосипедта елдергән кешеләр.

Амстердамға етәрәк баш осонан ике аҡҡош осоп үтте. Һәйбәткә юраным. Анни йылмайып ҡуйҙы: бындағы канал һәм йылға-күлдәрҙә аҡҡош-ҡаҙҙар, өйрәктәр, аҡсарлаҡтар мыжғып йөрөй икән. Ара-тирә хатта селәндәр ҙә осрай. Мин быны бара биреү менән үк абайланым. Каналдарҙа һимеҙ-һимеҙ аҡ ҡаҙҙар суптырлашып йөрөй.

— Хужалары бармы? — тип ҡыҙыҡһынам ҡаҙ ите яратҡан кеше булараҡ.

— Юҡ, — тип көлә. — Дөйөм матурлыҡ өсөн. Дәүләт һағы аҫтында.

Йәм-йәшел булып ҡурпыланып ултырған баҫыуҙар күҙҙе ҡыуандыра. Улар бер-береһенән канал менән генә

айырылған һәм ара-тирә һыйыр, һарыҡ көтөүҙәре утлап йөрөй. «Әгәр ҙә дәүләт мөмкинлек бирһә, голланд фермерҙары бөтөн Европаны һөт аҫтында ҡалдырыр ине», — тип уҡығаным иҫемә төшә. Йыл әйләнәһендә йәм-йәшел ҡурпы ашаған мал һөттө күп бирәлер инде. Ел тирмәндәре өйөрөлә. Ҡайҙа ҡарама — бөхтәлек. Ус аяһы ғына ергә лә кешенең хәстәрлекле ҡулы тейгән.

Ғөмүмән, алға китеп булһа ла әйтәйем: голландтарҙың өйҙәре, ишек алдары һәр ваҡыт шау сәскәлә, тәҙрәләре шул тиклем таҙа, хатта быяла торғаны күренмәй. Гүйә, улар һәр ваҡыт ҡунаҡ ҡаршыларға әҙер. Шул уҡ ваҡытта ни ғәжәп: уларҙың нимәлер эшләп, йыйыштырып йөрөгәнен күрмәнем. «Һеҙҙең, моғайын, төндә шым ғына килеп бөтөн эшегеҙҙе бөтөрөп киткән тылсымлы йән эйәләрегеҙ барҙыр», — тип шаярттым бер мәл. Хужалар ҡәнәғәт көлдөләр генә.

Бында бер ҡаланың ҡайҙа бөтөп, икенсеһе башланғанын да абайлауы еңелдән түгел. Ниндәйҙер мәлдә Амстердамға килеп кергәнбеҙ. Урам буйлап бер аҙ бара биргәс, дүрт ҡатлы ыҡсым ғына бина алдына килеп туҡтаныҡ. Анни ишекте үҙ асҡысы менән асып инде лә лифтта өсөнсө ҡатҡа күтәрелдек. Бер стенаһының яртыһы тотош быяланан булған ыҡсым ғына бүлмә. Өҫтәл, карауат. Ап-аҡ ҡына кейем шкафы. Һап-һары пластик ултырғыстар. Йәтеш кенә һыуыткыс менән электр плитаһы. Микротулҡын мейесе. Ике йылытҡыс батарея, йылылыҡты көйләп тә була. Анни иҙәндә торған бер нисә йәшникте асты: бында түшәк-яҫтыҡ, аҙна-ун көнгә етерлек ризыҡ, көнкүреш кәрәк-яраҡтары, ҡайһы бер дәреслектәр. Барыһын да алдан хәстәрләгән, хатта һауыт-һаба йыуа торған шыйыҡсаһына тиклем бар. Велосипед та бирәсәктәр. Дөйөм ятаҡтың беренсе ҡатында велосипед ҡуя торған махсус бүлмәләр бар. «Голландияла велосипедһыҙ — ике ҡулһыҙ, — тине Анни. — Юл сығымдары ла аҙыраҡ китә, сәләмәтлек өсөн дә бик файҙалы».

Ятаҡтағы йәшәү ҡағиҙәләре менән таныштырып, конвертка һалынған бер айлыҡ стипендиямды — 400 евро — тотторғандан һуң, иркенәйеп киткән мине Анни шаҡ ҡатырҙы: «Банкта үҙеңә иҫәп-хисап кенәгәһе асырһың, киләһе айҙан аҡса шунда күсер. Дүшәмбе көндө университетҡа бараһың, иртәнге сәғәт унға. Уҡыу тураһындағы бөтә мәғлүмәттәр ҙә унда. Үҙең танышаһың,

белешәһең. Өс көн эсендә полиция идаралығына барып теркәләһең, ярты йылға граждандыҡ хоҡуҡтары алыр өсөн иммиграция һәм граждандыҡ хоҡуҡтары биреү министрлығына барып ҡағыҙҙар тултыраһың (икенсе ярты йылда йәнә ғариза бирергә кәрәк), ятаҡхананың баш офисында ғаризаңа ҡул ҡуйырға кәрәк булыр, — тип теҙеп китте лә бараһы урындарҙың оҙон исемлеген тотторҙо. — Берәй нәмә аңлашылмаһа, электрон почтама хат яҙырһың. Мин бер аҙна-ун көндән велосипед алып килермен». Уның икенсе ҡалала йәшәгәнен белһәм дә, күберәккә өмөтләнгәйнем. Рәсми урындарға эйәртеп йөрөр, ҡала менән таныштырыр, университетка алып барыр һ. б. Шулай итеп, голландтарға хас сифаттарҙың береһе менән осраштым: улар үҙҙәренә тәғәйен бурысты урын-еренә еткереп, бик яуаплы итеп башҡара, әммә артығын эшләмәй. Уларҙа үтә ҡурсалау, һинең проблемаларыңды үҙ өҫтәренә алыу юҡ: бәләкәй түгелһең, бирешмәҫһең. Һәр кем үҙенең йөгөн үҙе күтәрергә тейеш. Шуға күрә, ауыр сумка һөйрәп китеп барһаң да, беҙҙәге кеүек ярҙам тәҡдим итеүсе юҡ: үҙ самаңды белергә кәрәк ине — бары шул ғына. Һәр кем кешегә һалышырға түгел, үҙен үҙе хәстәрләргә тейеш.

Был ҡағиҙәне шунда уҡ үҙләштерҙем: алсаҡ йылмайып тороуына ҡарамаҫтан, мыжыу, ялыныу йәки йәлләтергә тырышыуҙан фәтүә сыҡмаясаҡ. Рәхмәт әйтеп хушлашҡанда ҡышҡы көндөң эңере төшөп килә ине.

Анни сығып китеү менән аптырап ҡалдым. Нимә эшләргә? Иң беренсе иҫән-аман килеп етеүемде белдереп балаларға шылтыратырға, ҡыҙымдың хәлен белергә кәрәк. Бының өсөн кеҫә телефонына нисек урындағы симка алырға? Скайпҡа инер өсөн интернетҡа нисек тоташырға? Быларын хәҙер үк хәл итергә кәрәк. Ә университетты нисек табырмын, полицияға ҡалай барырмын?

Коридорға сыҡтым. Бер кем дә юҡ. Беренсе ҡатҡа төшөр өсөн лифт саҡырҙым. Ишеге асылды, төрлө төймәләренә баҫып ҡарайым — йөрөмәй. Кире сыҡтым. Баҫҡыс буйлап төшөргә булдым: ишеге бикле. Саша Сизиковтың икенсе киҫәтеүе: «Мотлаҡ рәүештә мәҙәни шок буласаҡ!» — тигәне иҫемә төштө. Ул саҡта: «Ниңә, беҙ ҙә джунглиҙан сыҡмаған!» — тип уйлап ҡуйғайным. Бына нимәләр хаҡында иҫкәрткән икән, йәш булһа ла, үҙ башынан үткәргән шул. Торлағымды ҡарап сыҡтым. Ишектән ингәс, бәләкәс кенә солан. Уң яҡта минеке

шикелле тағы бар булмә. Душ менән бәҙрәф уртаҡ. Күршем йүнле булһа ғына ярар ине. Бөтә өмөт унда. Көтәм. Бер мәлде тышҡы ишектә йоҙаҡтың шылтырап асылғаны ишетелде. Түҙмәнем, атылып килеп сыҡтым. Ишектә бәләкәс кенә буйлы ҡыҙыҡай баҫып тора. Башына, маңлайына ныҡ төшөрөп, ҙур өпрөйлө бәйләнгән кәпәс кейгән, муйынына оҙон шарф ураған, өҫтөндә үҙенә мул плащ-пальто, аяғында йылы итек. Ныҡ өшөгән. Нәркәстәр, тағы ла әллә ниндәй ҡыуаҡтар сәскә атып ултырған Амстердамда кеше шул тиклем дә өшөр икән.

Ул миңә аптырап ҡарай.

— Һай (сәләм)! — тим. — Мин яңы күршең булам.

Ул көлөп ебәрә. Танышабыҙ. Нани... Мине ҡурсалаусы фәрештә кеүек шунда уҡ ҡанаты аҫтына алған, Амстердамдағы иң ҡатмарлы тәүге көндәремә ҡот индергән Нани Маһарани. Индонезиянан (бына ниңә шул тиклем өшөгән икән. «Әле минең тыуған илемдә утыҙ градус эҫелек», — ти ул). Врач-генетик, сентябрҙән бирле аспирантурала уҡый һәм университеттың медицина үҙәгендәге бер лабораторияла эшләп тә йөрөй.

Башҡорт балы һәм сәксәк менән сәй эсеп бүлмәмде ҡотларға саҡырам. Йылмайып килеп тә инде, хәүефтәремде таратып та ебәрҙе. Иртәгә уның ял көнө. Бергәләшеп минең йомоштарымды үтәрбеҙ, университетҡа ла юл өйрәтер. Ноутбутын алып инә һалып, интернетҡа тоташырға минең исемдән ғариза ебәрҙе. Тиҙ генә яҙып, мин дә балаларыма хат юлланым. Виртуаль почта йәшнигемде асһам, унда улым Ренаттан ике хат тора. Әйтеп биргеһеҙ рәхәт булып китте.

Ул арала Нани ни өсөн шул тиклем шатланғанын аңлата: айға яҡын был бүлмә буш торған һәм ул кем килер тип борсолған. Бигерәк тә берәй егетте урынлаштырыуҙарынан ҡурҡҡан. «Күрше блокта шулай, — ти ул. — Ә һеҙ минең әсәйемә оҡшап тораһығыҙ».

Индонезия — донъялағы иң ҙур мосолман илдәренең береһе. Тышҡы яҡтан динилеге күҙгә ташланып бармаһа ла, Нани ысын мәғәнәһендә иманлы ҡыҙ. Бик тыйнаҡ кейенә, хәләл ризыҡ ашай, баҫалҡы, әхлаҡи йәһәттән үҙенә ифрат талапсан һәм пак. Быға уның иҫ киткес белемле булыуын, тырышлығын һәм ярҙамсыллығын да өҫтәһәң, ошондай күршең булыуға ҡыуанып бөтөрлөк түгел.

Анни ҡулланыу урындарының уртаҡлығы өсөн ғәфү үтенеп: «Бында хата киткән, бер аҙҙан һине ҙурыраҡ бүлмәгә күсерербеҙ», — тип киткәйне (ысынлап та шулай булды). Ә әлеге кистә Хоҙайға ошо хата өсөн ҡат-ҡат рәхмәт әйтеп йоҡлап киттем: «Шуныһына тиклем хәстәрләгәнһең. Күршем булмаһа, әле нимә эшләр инем?»

Иртәнсәк уянып тышҡа күҙ һалғайным, шаҡ ҡаттым. Мин ҡайҙа, Амстердамдамы, әллә Стамбулдамы? Урамда оҙон, киң ҡара кейем кейгән, хиджаб уранған ҡатын-ҡыҙҙар. Балаҡлы аҡ ыштан һәм оҙон киң күлдәк өҫтөнән сапан кеүек нәмә ябынған ир-егеттәр. Әйтерһең дә, бер төн эсендә ниндәйҙер тылсым мине бөтөнләй икенсе илгә алып барып ҡуйған. Шөбһәмде таратып, бик матур трамвай уҙып китте. Ул арала Нани килеп инде. Был микрорайонда күберәк төрөктәр йәшәй икән. Яҡында ғына бер ҡулайлаштырылған бинала мәсет бар. Бик күп магазиндар төрөктәрҙеке. Нани, башлыса, хәләл ризыҡты уларҙан һатып ала, хәйер, ундай ризыҡ супермаркеттарҙа ла һатыла. Һөйләшеп торған арала баштан-аяҡ ҡара пәрәнжә бөркәнгән бер ҡатын велосипедта үтеп китте, алдан да, арттан да берәр бала ултыртып алған. «Быны нишләп полиция туҡтатмай икән? — тигән уй килде. — Балаларын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя ла баһа был...»

Шул саҡ Томастың өсөнсө кәңәше иҫкә төшә: «Сит илгә килгәнһең икән, баһаларыңды ситкәрәк ҡуйып тор. Бөтә нәмәнең дә һинеңсә булмауына иғтибар итә башлаһаң, йәшәүе бик ҡыйынға тура киләсәк».

Шул ваҡыт ҡолаҡ ярғыс сирена яңғыраны, йүгерешеп коридорға сыҡтыҡ. Беҙҙән башҡа ла байтаҡ кеше бар. Йылмайышып һаулашыуҙарына ҡарағанда, хәүефләнмәйҙәр. Баҡһаң, янғын хәүефһеҙлеге сигнализацияһы икән. Саҡ ҡына төтөн еҫенә лә эшләй башлай. Нани көлә: «Ул бында бик һиҙгер. Яңы килгән сағым ине — микротулҡын мейесенә тауыҡ йылытырға ҡуйғанмын да, онотҡанмын. Бер ваҡыт геүелдәй башламаһынмы. Хатта янғын һүндереүселәр килеп етте». Был юлы эш улай тәрәнгә китмәне. Бүлмәгә кире ҡайттыҡ. Бына ни өсөн электр плиткаһы өҫтөндә: «Ҡәҙерле ҡунаҡ! Ашнаҡсы булып уйнаған сағыңда бик иғтибарлы бул!» — тип яҙып ҡуйылған икән.

Нани көнкүрештең ваҡ-төйәк, әммә мөһим нәмәләре менән таныштырыуын дауам итә: дөйөм ятаҡҡа һәр кем

үҙ асҡысы менән асып инә. Лифт тейешле ҡатҡа тәғәйен асҡысты тыҡҡанда ғына ҡуҙғала һәм һин тик үҙеңдең ҡатыңа ғына бара алаһың. Был дөйөм ятаҡ: сит кеше үҙе теләгән ерҙә иркенләп йөрөй алмаһын өсөн, әлеге шул хәүефһеҙлек ҡағиҙәһе буйынса шулай уйланылған. Бүлмә ишеге менән дә һаҡ булырға кәрәк, сыҡҡаныңда ишекте ябыу өсөн асҡыс кәрәкмәй. Тик ишек артыңдан шунда уҡ бикләнә һәм, асҡысың юҡ икән, инә алмайһың. Шуның өсөн бер секундҡа сыҡҡанда ла уны үҙеңдән ҡалдырма. Голландтар бөтә нәмәне лә тәфсирләп, кешегә уңайлы булырлыҡ итеп эшләй. Был ҡағиҙә миңә йыл буйына ярҙам итте: берәй нәмәне эшләүе уңайһыҙ икән, тимәк, мин яңылышам.

Кейенеп урамға сығабыҙ һәм Нани юл ыңғайында күрһәтеп бара. Минераль һыу һәм һөт ризыҡтары һалынған пластик шешәләрҙе аҡсаға супермаркетҡа тапшыралар, ә быяла һауыттарҙы махсус контейнерҙарға ташлар алдынан таҙартып йыуырға кәрәк. Ҡағыҙ өсөн икенсе контейнер ҡуйылған. Кейем-һалымды ла ишек алдында торған олоғара йәшел контейнерға һалырға кәрәк. Бына ҡайҙа һәм нисек йыйыла икән аҙаҡтан беҙҙең «секонд-һенд»тарҙа «Европанан килгән кейем» тип маҡтап-маҡтап һатыла торған әйберҙәр!

Автобус, трамвай һәм метрола йөрөр өсөн «стриппен-карт», йәғни, беҙҙеңсә, абонемент алдыҡ. Льгота менән ун ике йәшкә тиклемге балалар һәм 65 йәштән үткән өлкәндәр генә файҙалана. Ултырғанда 1 стрипа һәм, ҡайҙа барғаныңа ҡарап, һәр зона өсөн 1 стрипа түләргә кәрәк. Һәр туҡталышта карта бар, шунда ҡайҙа барғаныңды ҡарайһың (ҡалала 2—3 зона) йәки водителгә туҡталышыңдың исемен әйтәһең дә үҙе мисәт ҡуя. Трамвай, автобус йөрөтөүселәрҙең иғтибарлығына һушың китерлек, һәр һорауыңа итәғәтле яуап. Нани бер урынға нисек барырға һорағайны, водитель ҡайҙалыр шылтыратып, белешкәндән һуң, киләһе туҡталышта беҙҙе төшөрөп, ниндәй автобусҡа ултырырға кәрәклеген тылҡып китте.

Иң уңайлыһы — айлыҡ билет. Ул 63 евро тора һәм Үҙәк вокзал янында һатыла. «Транспорт, ысынлап та, арзан түгел, — тип уйлап ҡуям. — Мөмкин тиклем тиҙерәк велосипедта йөрөй башларға кәрәк». Арзан түгел, тик бик уңайлы, сәғәт кеүек теүәл йөрөй. Һиңә кәрәкле

маршруттың нисә минутта килгәнен өйөңдән Интернет аша ҡарап та сыға алаһың.

Ашамлыҡ, Өфөләге менән сағыштырғанда, арзан да, артыҡ ҡиммәт тә түгел.

Супермаркет алдындағы баҙарҙа йөрөгәндә Нани миңә ярлы студент халҡы өсөн бик әһәмиәтле бер серҙе асты. Йәкшәмбе һәм дүшәмбе баҙар эшләмәй. Шуға күрә шәмбелә кискә табан һатыусылар йәшелсә-емеште бик арзанға, ҡайһы ваҡыт хатта бушҡа ла биреп китә икән. Үҙ һүҙҙәрен раҫлап, Нани емеш һатҡан урында туҡтаны: «For free! For free!» — тип ҡысҡырған һатыусынан бушҡа бер рюкзак манго алып киттек.

Шул уҡ ваҡытта, нимәләр алырға теләһәм, сумманы 36-ға ҡабатлайым да, юҡ, әлегә алмайым, тип китәм. Ә Наниға тағы ла ҡыйыныраҡ, уларҙа 1 евро 1000 рупияға тиң. Фәнни етәксеһе: «Бигерәк ябыҡһың, бында саҡта ашаңҡыра, — ти икән. — Хеҙмәт хаҡыңды рупияға әйләндер ҙә ни тиклем юғары икәнен күреп аша».

— Әгәр ҙә рупияға әйләндерә башлаһам, бөтөнләй ашауҙан туҡтаясаҡмын, — тип көлә Нани. — Бында хеҙмәт хаҡы ҙур, тик бөтә нәмә лә ҡиммәт. Мәҫәлән, бүлмәм өсөн айына бер миллион рупия түләйем. Атайым менән әсәйем иһә: «Бер миллион торған бүлмә ниндәй булырға тейеш һуң?» — тип аптырай.

## УНИВЕРСИТЕТ

Дүшәмбе етте. Ял көнө Нани мине университетҡа алып барып күрһәтеп, маршрутын матур итеп һыҙып биргәйне инде. Дөйөм ятаҡтан метрола алты туҡталыш, йәйәү атларға йыбанһаң, трамвайға күсеп ултырып тағы бер туҡталыш барырға була.

Университеттың фойеһына килеп инеү менән танауға тәмле ҡәһүә еҫе бәрелә. Иртәне кофенан башлау голландтар өсөн йола кимәлендә. Ҡырмыҫҡа иләүендәге кеүек мыжғып торған халыҡ, һәр береһенең тиерлек ҡулында боҫо борҡоп торған ҡәһүәле стакан. Ун дүртенсе ҡатҡа күтәрелеп, кәрәкле бүлмәне таптым. Ярты сәғәт бар. Тәҙрә төбөнә барып баҫтым — университет биләмәһе ус төбөндәгеләй күренә. Бына медицина үҙәгенең башына бәләкәс кенә һары вертолет төшөп

ултырҙы ла унан носилка менән кемделер сығарҙылар. Тимәк, тиҙ ярҙам вертолеты.

Бер нисә минуттан ике кеше шәп-шәп атлап килде лә миңә кәрәк бүлмә ишегенә туҡылдатты. Эскә инеп тә киттеләр. Моғайын, һабаҡташтарымдыр, тип арттарынан ашыҡтым. Ҙур бүлмәнең иң түптәге өҫтәле эргәһендә баҫып торған ҡаҡса ғына, оҙон буйлы ҡатын инеүселәргә ҡарап низер һөйләй. Исем-фамилиямды әйттем. Джанет Дайк, беҙҙең университеттағы куратор. Һөйләгәненән бер нәмә лә аңламайым. Борсолоуҙан, көйөнөстән үҙемде ҡапыл ҡуйы томан эсендә кеүек тойҙом. Һабаҡташтар уға рәхмәт әйтеп һаубуллашты ла сығыу яғына ыңғайланы. Арттарынан ашыҡтым. Коридорҙа туҡтанылар, бер-береһенә ҡарашып низер һөйләшәләр. Уларға ҡарағанмын да, хәҙер ул мәлде иҫкә төшөрһәм, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та булып китә: береһенең ҡатын-ҡыҙ, икенсеһенең бик һәйбәт кеше икәнен генә тойҙом.. Шул саҡ уларҙың beләктәренән эләктергәнмен дә: «Зинһар өсөн, мине ташламағыҙ!» — тигәнмен. Рәхмәт яуһын, ташламанылар. Һабаҡташтарымдың береһе үҙен Анни-Мари, икенсеһе Джозеф тип таныштырҙы. Үҙ-ара французса һөйләшәләр. Дайктың һөйләгәндәрен улар ҙа ныҡлап аңлап етмәгән. Әгәр ҙә шулай булһа, нисек уҡырбыҙ, тип аптырашыуҙары икән. «Ул сығышы менән АҠШ-тан. Инглиз теле уның өсөн туған тел, шуға күрә уны аңлауы ҡыйын», — ти Джозеф. Ул бынан туғыҙ йыл элек ошо уҡ факультетта уҡыған. Хәҙер иһә белемен тәрәнәйтергә килгән. Шуға күрә бында күп нәмә уға таныш. Артынан эйәреп, төрлө бүлмәләргә йөрөйбөҙ, исемлектәргә яҙылабыҙ, ҡултамғалар ҡуябыҙ. Бына, ниһайәт, китапханаға барып керҙек. Уҡыусы билеты алыр өсөн, әлбиттә, адресың кәрәк. Ә мин уны иҫләмәйем. «Икенсе юлы килермен», — тип боролмаҡсымын, китапханасы иһә ярҙам итеү әмәлен эҙләй, ваҡытлы билет тултырып бирә. Ҡайҙа барма, голландтар, ысынлап та, ҡулдарынан килгәндең барыһын да эшләй. Бының өсөн рәхмәт тә, беҙҙәгесә «бер һауыт менән бер тауыҡ» та өмөт итмәй. Әммә бер ергә лә артҡы ишектән, ришүәт биреп йәки танышлыҡты файҙаланып инермен тимә. «Dat kan niet» («Был мөмкин түгел») тип әйтәләр икән, тимәк, ысынлап та мөмкин түгел. Бына ошо асыҡлыҡ менән ғәҙеллек тормошто әйтеп биргеһеҙ еңеләйтә, шул уҡ ваҡытта уларға бер-береһенә ышаныс һәм ихтирам

менән ҡарарға мөмкинлек бирә. Университеттағы тәүге көндә үк бына шуның матур һөҙөмтәһен күрҙем, артабан мэрияға, полицияға һәм башҡа урындарға барғанда ла шуға ҡат-ҡат инандым. Өҫтәүенә, улар шул тиклем ихтирамлы. Былдай мөнәсәбәткә күнекмәгәнлектән, ҡайһы берҙә хатта күҙгә йәш тулып китә. Ә, бәлки, ят ерҙә күңел нескәргәнгәлер...

Амстердам Ирекле университеты — VU («фу» тигән кеүек яңғырай һәм уны тәүге тапҡыр Наниҙың ауыҙынан ишеткәс, бик мәрәкә тойолғайны) — беренсе башлап ишектәрен 1880 йылда асҡан. «Ирекле» һүҙе «дәүләт һәм сиркәү йоғонтоһонан тулыһынса азат» тигәнде аңлата. Бында, ысынлап та, фекер азатлығы йәшәй һәм ул хатта аудиторияларҙың штукатурканан азат кирбес стеналарынан да аңҡып торған һымаҡ. Буйһоноуҙы өнәп етмәгән рухым өсөн Голландияның ер йөҙөндә минең өсөн иң ҡулай урын булғаны һәм был йәһәттән күңелдең бында ашҡынып яңылышмағаны һәр лекция һәм дәрес һайын ныҒыраҡ аңлашыла барҙы. Голландтар өсөн: «Мин һинең фекереңде уртаҡлашмайым, әммә уны әйтә алыу хоҡуғың булһын өсөн ғүмеремде лә бирергә әҙермен», — тигән һүҙҙәре матурлыҡ өсөн түгел, ысынбарлыҡ. Шуға күрә улар һинең донъяға ҡайһы ваҡыт бөтөнләй башҡаса ҡарағаныңды шәхси рәнйетеү тип ҡабул итмәй, тура һүҙгә үпкәләү баштарына ла инеп сыҡмай, әммә үҙеңә лә күҙеңде сәсрәткәнсе туп-тура әйтеүҙәре мөмкин.

Университеттың егерме факультетында донъяның төрлө тарафтарынан ун туғыҙ мең тирәһе студент уҡый. Ул Нидерландтың иң йылдам үҫешкән эшлекле үҙәгендә, тимер-бетон һәм быяланан төҙөлгән мөһабәт, заманса биналар араһында тора.

Бында курс тотош бер уҡыу программаһы буйынса уҡымай. Бер нисә мотлаҡ предмет бар. Ҡалғанын, маҡсатыңа ҡарап, үҙең һайлап алаһың. Март аҙағында боронғо йәһүд теленең тәүге баҫҡысынан имтихан биргәндән һуң, мәҫәлән, Анни-Мари менән Джозеф боронғо грек телен өйрәнәсәк. Ә минең эшемдә ул тел кәрәкмәй. Шуға күрә «Мәҙәни антропология» (ул беҙҙәге этнографияға тап килә шикелле), «Лингвистик антропология», «Библия тексы һәм компьютер» тигән дәрестәргә йөрөйәсәкмен. Әгәр ҙә имтиханды яҡшы биреп,

уларҙы белгәнемдә раҫлаһам, сентябрҙән «Теология», «Экзегетика», «Тәржемә оҫталығы»н өйрәнәсәкмен.

Дәрестәр аҙнаға дүрт көн, икешәр пар. Бер юлы бик ҙур күләм материал үтәләр. Студент, нигеҙҙә, белемде үҙ аллы үҙләштерергә, берәй нәмә аңлашылмағанда ғына уҡытыусыға мөрәжәғәт итергә тейеш.

## УҠЫТЫУСЫЛАР

Шишәмбенән алып боронғо йәһүд теле буйынса дәрестәр башланды. Тәүге уҡытыусыбыҙ Маргарет Фолмер — утыҙ биш йәштәр тирәһендәге асыҡ йөҙлө, алсаҡ ҡатын. Инглиз теле — уның өсөн дә сит тел. Шуға күрә сағыштырмаса ябай, беҙ аңларлыҡ итеп һөйләшә. Беренсе дәрестә үк йәһүд телен башҡа һабаҡташтарыма ҡарағанда яҡшыраҡ белеүем асыҡланды. Әлегә уҡытыусы һөйләгәндәрҙең барыһы ла таныш. Был инглиз телен уларҙан насарыраҡ белгәнемде бер ни тиклем ҡаплар тигән өмөттәмен.

Маргарет — бында уҡытыусыларға ябай ғына итеп исеме менән өндәшәләр, тиңдәш кеүек ҡарайҙар һәм йәш айырмаһы ла, дәрәжә лә иҫәпкә алынмай, — Гаагала йәшәй. Башта поезд менән, ә вокзалдан университетҡа тиклем велосипедта килә. Йәтеш кенә, йыйып ҡуймалы транспорт сараһы. Ныҡ йыйнаҡ булғанлыҡтан урлатыуы еңел, күрәһең, — уҡытыусыбыҙ уны аудиторияға индереп ҡуя.

Уҡытыусыбыҙҙың бите уттай янып, сәстәре елдә туҙырап, йөҙөнән йәшлек һәм сәләмәт дәрт бөркөлөп йылмайып килеп инеүе шунда уҡ кәйефтәрҙе күтәреп ебәрә. Ғөмүмән, Амстердамда иң матур күренеш — велосипедта елдергән голланд ҡатын-ҡыҙҙары һымаҡ күренә миңә. Улар спорт менән шөғөлләнгән үҫмерҙәрҙеке кеүегерәк кейемдә артыҡ күрә, үтә биҙәнеү ҙә хупланмай. Хәйер, еүеш климатлы Голландияла артыҡ биҙәнеп тә булмайҙыр. Уйламағанда яуып киткән ямғыр, еүеш һауа бөтөн буяуҙарҙы йыуасаҡ, ә бөҙрәләткән сәстәрҙе барыбер көслө ел тағатып бөтәсәк. Шуға улар тәбиғи һәм сәләмәт матурлыҡҡа өҫтөнлөк бирә. Йәмһеҙ булһаң да ҡырын ҡарамайҙар. Быныһы юл ыңғайында ғына.

Велосипед беҙ уҡыған арала тыйнаҡ ҡына булып стена буйында тора. Урамда йышыраҡ иҫкергән, әрһеҙ-

ләнеп бөткәндәрен күргәнгә, ара-тирә ялтлап торған «тимер юрға»ға күҙ төшөрөп алабыҙ. Бер көндө Анни-Мари түҙмәне, маҡтап ҡуйҙы. «Эйе, велосипедым булғанға бик ҡыуанам. Мин уны былтыр һатып алғайным. Шунан бирле рәхәтләнәм. Үҙеңде шул тиклем ирекле тояһың, ултырҙың да теләгән яғыңа киттең дә барҙың, бер нәмәгә лә бәйле түгелһең», — ти уҡытыусы. Ә бит ул машина тураһында түгел, беҙҙә лә һәр бер малайҙыҡы булған ҡәҙимге велосипед хаҡында әйтә. Нисектер бында барыһы ла ябай, уңайлы, уйланылған. Әллә кем булып күренергә ынтылыш юҡ. Университет уҡытыусыһының (!) велосипед тураһында шулай ҡыуанып һөйләүе башта бик мәрәкә тойолғайны. Бер көндө Голландия королеваһының ғаиләһе менән Гаагала йәшәгәне тураһында һүҙ сыҡты. Шул саҡ Маргарет ғәҙәти генә: «Ҡайһы берҙә юлда велосипедта китеп барған принцессаларҙы ла осратырға була», — тип әйтеп ҡуйҙы.

Доктор Лоуренс де Вриз беҙҙе тәржемә теорияһы һәм практикаһына, лингвистикаға, Джозеф менән Анни-Мариҙы грек теленә, ә мине «Мәҙәни антропология» һәм «Лингвистик антропология» буйынса уҡыта. Профессор минән өс-дүрт йәшкә генә өлкән. Бөтөн донъяға танылған ғалим. Ирекле университетта ғына түгел, Лейден университетының Көньяҡ-Көнсығыш Азия һәм Океанияла йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү бүлегендә лә эшләй. Ғәжәйеп кеше. Лекцияларҙа йыш ҡына үҙенең тормошонан миҫалдар килтерә һәм Папуа — Яңы Гвинеялағы ҡәбиләләрҙе һағынып һөйләй. Ул университетты тамамлағандан һуң, 1970 йылдарҙың урталарында Яңы Гвинеяның көнсығышындағы Папуала йәшәгән ҡәбиләләрҙең телдәрен һәм йолаларын өйрәнергә барған. Был ҡәбиләләрҙең күбеһе ул ваҡытта яңы-яңы ғына тәүге аҡ кешеләр менән осраша һәм донъяла үҙҙәренән башҡа ла тормош барлығын белә башлаған булған. Хатта бөгөнгө көндә лә унда кеше ашау йолаһы һаҡланғанын иҫкә төшөрһәк, егеттең донъяны танып-белеү өсөн ниндәй хәүефле юл һайлағанын саҡ ҡына булһа ла күҙ алдына килтерергә була. Шулай итеп, икенсе тиҫтәһен саҡ тултырған Лоуренс коровай тигән халыҡ араһында йәшәй башлай.

«Коровайҙарҙы икенсе төрлө «ағас башында йәшәүселәр» тип йөрөтәләр, — тип һөйләй доктор. — Ғәҙәттә,

өйҙәрен 6—25 метр бейеклеккә ҡоралар, ә инде тирә-яҡта дошмандары күбәйә башлаһа, 50-шәр метрға ла менеп китәләр. Әлбиттә, бындай «оялар»ға уҡ та етмәй, дошман да еңел генә менә алмай. Етмәһә, тирә-яҡта үткеһеҙ һаҙлыҡтар күп булғанлыҡтан, аҫта себен-серәкәй, йыландар мыжғып йөрөй. Түҙгеһеҙ эҫе. Ә өҫтә еләҫ, себен бөтөнләй тиерлек юҡ. Өйҙәре 8—10 кеше йәшәрлек ҙурлыҡта була. Ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар ҡәтғи рәүештә айырым ҡуна. Ҡулланғандары таш балта, һөйәк бысаҡ, ағас сүкеш, һәм, әлбиттә, ирҙәрҙең ҡулынан уҡ-һаҙаҡ төшмәй. Бер «оя»ны ырыу ағзалары күмәкләшеп аҙнаға яҡын ҡора. Миңә лә шулай итеп эшләп бирҙеләр». Бына шунда Лоуренс артабан үҙенең кәләшен дә алып килә. Ҡыҙҙары тыуа. Шундағы баласаға менән ялан аяҡ йөрөп үҫкән ул ҡыҙ хәҙергә тиклем аяҡ кейемен яратмай икән. «Минең балаларға шул тиклем наҙ һәм һөйөү менән ҡараған башҡа халыҡтарҙы күргәнем юҡ», — ти Вриз коровайҙар тураһында. Балалары күмәк, тик тормош шарттары ауыр, медицина ярҙамы булмағанлыҡтан улар күп үлә.

Лоуренс уларҙың телдәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, донъяға ҡараштарын өйрәнә һәм бер нисә ғилми хеҙмәт яҙа. Коровай телендә хисап бары тик йөҙгә тиклем генә һәм ул тән ағзаларына бәйләнгән: бөтә бармаҡтар, терһәк, яурын, күкрәк, эс һ. б. Тәндең бөтөн өлөштәре лә һаналып бөткәс, хисап та тамам була.

Профессор был халыҡтың ихласлығы, йомартлығы һәм намыҫлылығы хаҡында һоҡланып һөйләй. «Донъяла уларҙай пак һәм саф күңелле кешеләрҙе осратҡаным юҡ», — ти ул. Беҙҙең өсөн был ғәжәп. Кеше ашаусыларҙың нисек пак булыуы мөмкин?

Коровай халҡы, башлыса, саго пальмаһынан алынған ризыҡ — саго менән туҡлана. Ҡатын-ҡыҙҙар ашарға яраҡлы үлән, тамыр, емеш, төрлө бөжәктәрҙең ҡарышлауыҡтарын йыя. Организм өсөн кәрәкле протеин, нигеҙҙә, ана шул ҡарышлауыҡтарҙан инә. Ирҙәр һунарсылыҡ итә һәм ҡырағай сусҡа, казуар тигән ҡош, башҡа төрлө ҡош-ҡорт, йылан аулай. Ҡырағай сусҡа эләкһә инде ҙур байрам. Бына шундай шарттарҙа иткә мөнәсәбәт бөтөнләй башҡа. «Улар бит яуызлыҡтан, ҡомһоҙлоҡтан ашамай, — ти Вриз. — Был ярлыҡты уларға беҙ тағабыҙ. Ә уларҙың уйынса: «Затлы ризыҡты нишләп әрәм итергә?!» — Доктор көлөп ҡуя. Коровайҙарҙы ул ысынлап

һағына һәм ундағы тормошо тураһында һәр саҡ еңелсә юмор менән, уйынлы-ысынлы һөйләй. «Ә һеҙҙе нисек ашамай ҡалдырҙылар һуң?» — тип шулай уҡ шаярыу ҡатыш һорап ҡуя берәүебеҙ. «Мин бит сыр ашап үҫкән кеше. Уларға минең, ғөмүмән, ит-һөт ризығы менән туҡланған кешеләрҙең еҫе оҡшамай. Йәнә лә улар мине тылсымсы тип уйлай торғайны.

Улар тәбиғәт балалары һәм бөтә нәмәне лә тәбиғи ҡабул итә. Ирҙәр йән ерҙәрен генә япраҡ, йәки сәтләүек ҡабығының яртыһы менән ҡаплап ҡуя. Ҡатын-ҡыҙҙар ағас ҡайырыһынан һәм саго епсәләренән әтмәләнгән ҡыҫҡа итәк кейә. Шуға күрә минең кейем эсендә нимә йәшергәнем улар өсөн башта бер йомаҡ кеүек булды. Ҡатын-ҡыҙҙар матурлыҡ өсөн танауҙарына ярғанат ҡанаттарының кимерсәген кейҙерә, муйындарына эт тешенән теҙелгән мунсаҡ таға. Мунсаҡтарын аҙаҡтан ҡыҙҙарына мираҫ итеп ҡалдыра. Ә ирҙәрҙең муйынсалары ҡырағай суҫҡа тешенән теҙелгән».

Бер заман гел бер төрлө ризыҡҡа йонсоған Лоуренс ҙур ерҙән тауыҡ һоратып алып үрсетергә булып китә. Тик ситән кеүек әтмәләнгән кәртә эсенән тауыҡтар бер-бер артлы юғала башлай. Берәйһе урлай, тиер инең, коровайҙарҙа кеше әйберенә рөхсәтһеҙ тейеү ғәҙәте бөтөнләй юҡ. Бер нисә төн һағалап, бурҙы эләктерәләр: ул йыуан питон булып сыға.

Тәржемә теорияһын өйрәнгәндә профессор бик күп миҫалдарҙы коровай теленән килтерә һәм хатта яҙмаһы, әҙәбиәте булмаған, тәүтормош кимәлендә ғүмер иткән кешеләрҙең теленә лә ҡатмарлы төшөнсәләрҙе тәржемә итергә мөмкин, тип иҫбатлай.

Доктор Джанет Дайк тыумышы менән АҠШ-тан. Әсәһе әле лә шунда йәшәй. Атаһы миссионер булғанлыҡтан, Мексиканың көньяғындағы Чьяпаста, джунглиҙа йәшәгән ҡәбиләләр араһында үҫкән. Америка Ҡушма Штаттарында һәм Канадала белем алғандан һуң, Африка ҡитғаһында урынлашҡан Эритрея илендә, Афар сүллегендә йәшәгән халыҡтың телен өйрәнгән. Нидерланд короллегенә күсеп килгәндән һуң, семит телдәре буйынса махсуслашҡан. Боронғо иврит буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған. Ғәрәп телен дә бик яҡшы белә.

Ул беҙҙе икенсе семестрҙа боронғо йәһүд теленән уҡытты һәм тәржемә серҙәренә өйрәтте.

Профессор Епп Талстра. Томас Каут: «Әгәр ҙә ысын ғалим менән танышырға теләһәң, мотлаҡ рәүештә доктор Талстраның дәрестәренә йөрөргә тырыш», — тигәйне. Сағыштырмаса өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, «Библияны тәфсирләүҙә традицион һәм яңыса алымдар» тигән заманса йүнәлештә эшләй һәм боронғо текстарҙы компьютер ярҙамында анализлай. Дәрестәрҙә профессор аңлайышлы һәм бөтәһе лә ап-асыҡ тойолған теҡсҡа бөтөнләй яңыса ҡарашы менән шаҡ ҡатырып ҡуя торғайны. Башта уның теге йәки был фекерен ҡабул итеүе лә ҡыйын, әммә тора-бара, ысынлап та, шулай ҙа баһа, быны мин нисек абайламағанмын, тип ҡуяһың.

Әммә беҙҙе иң тәүҙә бөтөн донъяла үҙенең төплө фәнни эштәре менән танылған ғалимдың ябайлығы һәм уҡыусыларының һәр бер ҙурмы-бәләкәйме табышына, хатта фекерләргә тырышып эҙләнеүенә генә лә ихлас ҡыуана белеүе һоҡландырҙы. Шул уҡ ваҡытта ул ҡайһы бер һорауҙарыбыҙға яуап бирә алмағанда эскерһеҙ ихласлыҡ менән: «Ә быныһын белмәйем. Уға яуапты һеҙ үҙегеҙ табырһығыҙ, тип өмөтләнәм. Беҙ бит һеҙҙе шуның өсөн уҡытабыҙ, белемебеҙ менән уртаҡлашабыҙ», — тип ҡуя. Семинарҙарҙа һәр ваҡыт бик ҡатмарлы мәсьәләләргә бәхәстәр ойоштороп ебәрә һәм үҙе лә был хаҡта беренсе тапҡыр ишеткәндәй мауығып китә. Беҙҙән бер нисә йыл алдараҡ уҡыған студенттарҙың береһе профессорҙың өйөнә ҡунаҡҡа барғандарын һөйләгәйне. «Ике ҡатлы матур һәм затлы ла, уңайлы ла итеп йыйыштырылған йортонда улы менән генә йәшәй. Ҡатыны бер нисә йыл элек вафат булғас, бөтөн хужалыҡ эштәрен үҙҙәре башҡара. Беҙҙе үҙ ҡулдары менән бешереп, бик матур итеп һыйланы. Һуңлап киткәс, бер нисәбеҙҙе метроға оҙатып ҡуйырға булды. Уның университетҡа һәр ваҡыт велосипедта йөрөгәнен белгәс, машинаһы бар тип уйламағанбыҙ ҙа. Гаражынан затлы машинаһын сығарып, беҙҙе ултыртып алды. Ғәҙәттә, уны күрше илдәргә йөрөгәндә генә файҙаланам, Амстердамда һәм яҡын-тирәләге бәләкәй ҡалаларға велосипедта йөрөүе йәтешерәк, тип аңлатты».

Ысынлап та, Амстердамда байҙар менән ярлылар араһындағы айырма беренсе ҡарашҡа күҙгә ташланып һәм байҙарҙың үҙҙәрен тотошонан күренеп тормай.

Байлыҡ туплау голландтарҙың иң яратҡан шөғөлө тиҙәр, был илдә оҙаҡ йәшәгәндәр. Протестант дине буйынса ла аҡса йыйыу — бик яҡшы эш, ә туҙҙырыу гонаһ һанала. Әммә күпме аҡсаң бар, уны үҙең генә беләһең. Сөнки байлыҡ менән маҡтаныу тәрбиәһеҙлек һанала. Кешенең кеҫәһендәге аҡсаны һанау ҙа хупланмай. Матур йәшәргә, яҡшы сифатлы әйберҙәр һатып алырға теләк ғәйеп түгел. Тик артыҡ хаттин ашыу шулай уҡ зауыҡһыҙлыҡ тип иҫәпләнә. Кейемгә лә ҡараш шулай уҡ. Туристар күп йөрөгән урындарҙа үтә модалы кейенгән, өҫтө-өҫтөнә алтын таҡҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрһәм, былар, моғайын, беҙҙең Рәсәйҙәндер, тип уйлай һәм һирәк яңылыша торғайным. Улай ялтырауыҡлы һәм бай итеп бында күберәк Африканан килгән ҡатын-ҡыҙҙар ғына кейенә.

Эвелин ван Стаалдюин-Сулман — теология докторы, профессор Талстраның иң яратҡан уҡыусыларының береһе. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, тәрән белеме менән фәндә абруй ҡаҙанып өлгөргән. Ул беҙҙе икенсе семестрҙа «Боронғо Ғәһедтең экзегетикаһы»нан уҡытты. Бик ныҡ талапсан булды.

## ҺАБАҠТАШТАР

Университетта тотороҡло ғына төркөмдәр юҡ. Һәр кем үҙенә ҡулай фәндәрҙе һайлап алғас, төрлө кешеләр менән уҡырға тура килә. Ниндәйҙер предметты ай ярым — ике ай уҡыйһың да, зачет йәки имтихан тапшырып теүәлләйһең. Шуға күрә йыл буйы яңғыҙ йөрөүең дә бик ихтимал. Был йәһәттән уңдым. Анни-Мари, Джозеф — бер команда булып алдыҡ. Анни-Мари тыумышы менән Франциянан. Оҙаҡ йылдар инде Африканың Буркина-Фасо тигән бәләкәй генә илендә Библияны тәржемә итеү проектында эшләй. Ун йылға яҡын бер төпкөл, электр ҙа, телефон бәйләнеше лә булмаған ауылда йәшәгән. «Яҡын-тирәлә минән башҡа аҡ тәнле кеше юҡ. Тәүге ваҡыттараҡ балалар ҡыҙыҡ күреп: «Аҡ! Аҡ! Аҡ!» — тип артымдан эләкләп баҫтыра торғайны. Ә бер мал аҡ тәнле кешене быға тиклем күргәне булмаған бер ҡарт, миңә тап булғас, ҡурҡышынан һуштан яҙып йығылды», —

тип мәрәкә итеп һөйләй. Анни-Мари ғәйәт дини кеше, тормошон тотош Раббыға бағышлаған. Холҡо саҡматаштай ҡаты, тотороҡло. Башта был миңә сәйерерәк тойолғайны. Яңғыҙлыҡ, хәүеф һәм һынауҙарҙан торған миссионер тормошо уны шулай сыныҡтырғанын торабара ғына аңланым. Башта ул бер голланд ғаиләһендә фатирҙа йәшәне. Йорттарын бөтөнләй тиерлек йылытмайҙар, йылылыҡ 17—19 градустан юғары күтәрелмәй икән. Температура йыш ҡына 40—45 градус эҫелеккә барып еткән Буркинанан килгән кеше өсөн был бик ауыр һынау. Һынауҙар минең тормошта ла осрап торҙо. Сөнки дини, мәҙәни һәм башҡа айырмалыҡтар үҙен һиҙҙермәй ҡалмай. Шулай бер көн университеттан гәпләшеп сығып киләбеҙ. Стенаға йога тураһында белдереү эленгән. Голланд телендә булғас, төшөнөп етмәйенсә Анни-Мариҙан һорай ҡуйҙым.

— Был бит йога, — тине ул.

— Эйе, — тинем. — Сәләмәтлек өсөн бик файҙалы нәмә, шуға күрә бик ҡыҙыҡһынам.

Ул барған ерендә шып туҡтаны:

— Был бит йога, — тип ҡабатланы. — Тотош философия, донъяға ҡараш, дин. — Шул саҡ ҡапыл нимәнелер аңлағандай: — Һин кем? — тип һораны.

Ысынлап та, мин кем һуң? Мәҙәниәте һәм тарихи яҙмышы буйынса халҡым ислам диненә ҡарай. Әммә үҙеңде мосолман тип әйтер өсөн һин ислам ҡағиҙәләре буйынса йәшәргә тейешһең.

— Христиан түгелме?

— Юҡ, — тинем.

Әйтерһең дә, арабыҙға тимер шаршау шауҙырлап төштө, боҙ диуар ҡалҡты. Итәғәтле итеп һаубуллаштыҡ, тик алдымда бер минут элек кенә йылылыҡ бөркөп торған Анни-Мари түгел ине инде. Өшөмәһен тип, үҙемдең бер ваҡытта ла ҡалдырмай торған дебет шәлемде биреп торғайным. Икенсе көндө: «Дуҫтарым ҡалын юрған килтерҙе», — тип шәлде кире бирҙе. Бәлки, ысынлап та шулай булғандыр. Ә мин быны, христиан булмаған кешенән бер нәмә лә кәрәкмәй, тигәндәй аңлап, ысын мәғәнәһендә фажиғә, күңел фажиғәһе кеүек ҡабул иттем.

Тап шул осорҙа университеттың беренсе ҡатында «Ибраһим балалары» тигән фотокүргәҙмә бара ине. Талантлы фотограф барыһы ла Ибраһим пәйғәмбәрҙән

таралған йәһүдиҙәр, христиандар һәм мосолмандар араһында барған дошманлыҡ, нәфрәт, күрә алмаусанлыҡ ваҡиғаларын тетрәткес итеп тотоп алған. Бер үк Аллаға инанған һәм һәр береһе Ҡөҙрәтлененең мәрхәмәтенә бары тик үҙҙәре генә лайыҡ һәм хаҡ тип һанаған, шуны иҫбатлар өсөн бер-береһен үлтерергә лә әҙер булғандарҙың ошо ялтыр фотоһүрәттәрҙән дә бөркөлөп торған нәфрәте мине бөтөнләй күңел төшөнкөлөгөнә килтергәйне. Ә инде Анни-Мари менән ошо ерлектә аңлашмау алдында бөтөнләй юғалып ҡалдым. Әгәр ҙә былай булһа, оҙон йыл буйына нисек йәшәргә? Шулай аҙна-ун көн үтте. Һүҙ ҡатыр әҙәм юҡ. Ғүмер буйы кеше араһында ҡайнап өйрәнгән минең өсөн был түҙгеһеҙ. Ярай әле Скайп аша көн һайын балаларым менән һөйләшеп торам.

Бер көндө университеттың фойеһынан сығып килә инем, быяла ишектең теге яғында баҫып торған йәш кенә вьетнам ҡыҙы матур итеп йылмайҙы. Ирекһеҙҙән, мин дә яуап ҡайтарҙым. Бер секундтан ишек асылды ла, күңелебеҙгә бер-беребеҙҙең йылмайыуын алып, үҙ юлыбыҙ менән киттек. Тик ошонан һуң ҡапыл тыныслыҡ килде. Үҙ эсеңә бикләнәһең икән, һин яңғыҙ, ә йөҙөңә йылмайыу ҡунһа, башҡаларҙың да күңеле тартыла.

Ҡайтһам, Библия ойошмаһының былтырғы грант эйәһе, Тайвань ҡыҙы Анжелдан хат килгән. Уҡыу программаһы тураһында һөйләп, үҙенең тәжрибәһе менән уртаҡлашҡыһы килә. Осрашыуға Анни-Мари менән бергәләп килеүебеҙҙе теләй. Йәкшәмбе көндө икәүләшеп Анжел йөрөгән сиркәүгә киттек. Сиркәү бик үҙенсәлекле, заманса булып сыҡты. Пастор гитарала уйнай, башҡалар ҡушылып йырлай, бейеүселәр ҙә бар. Шым ғына һабаҡташымды күҙәтәм. Ул да аптырабыраҡ ҡалған.

Аҙаҡтан бергә сыҡтыҡ та, тышта Анжелды көтөп торабыҙ.

— Ә Христос һинең өсөн кем? — тип һораны ҡапыл Анни-Мари. — Кемгә ышанаһың?

— Бер Аллаға инанам. Ә Ғайса — пәйғәмбәр.

— Әгәр ҙә Иисус һинең өсөн пәйғәмбәр генә икән, үҙеңде кем ҡотҡарырына өмөтләнәһең.

— Үлгәндән һуңмы?

— Эйе, йәнеңде кем ҡотҡарыр?

— Ул турала уйлағаным юҡ. Мин үҙемә бәләкәй генә маҡсат ҡуйғанмын. Эргәмдәге кешеләргә минең янда

рәхәт булһа, шул етә. Мин кешеләрҙе яратам. Ә бит һеҙ «Алла Ул — яратыу» тиһегеҙ.

Анни-Мари байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Нимә уйлағандыр, башын ҡалҡытып һүҙ ҡатҡанда арабыҙҙағы боҙ диуары юҡ ине.

Шулай итеп, йомарт күңелле, кеше тураһында хәстәрлекле — һүҙ менән түгел, эш менән ярҙам итергә әҙер торған, көслө ихтыярлы дуҫым йыл буйына ныҡлы терәк булды.

Джозеф Африканың Того тигән иленән. Моба ҡәбиләһенән сыҡҡан, йәшләй генә ата-әсәнән етем ҡалып, туғандарына үҙе терәк булған, үҙенә үҙе юл ярған. Үҙенең тәрән белеме менән ҡайһы ваҡыт аптыратып та ҡуя. Социаль фәндәр, немец әҙәбиәте буйынса магистр, педагогика һәм практик лингвистика буйынса бакалавр, хәҙер теология буйынса мастер дәрәжәһе алырға килгән. Ун ике телдә иркен һөйләшә. Ишле нәҫел-нәсәбенең генә түгел, халҡының да терәге булып тора. Анни-Мари менән улар электән таныш. «Уның менән урамдан барһаң, минут һайын туҡтаталар, кәңәш, ярҙам һорайҙар, — тип һөйләй Анни-Мари. — Тыуған ауылында башланғыс мәктәп һалдырған һәм биш йыл буйы уҡытыусыға үҙе хеҙмәт хаҡы түләп торған. Халҡының ауыҙ-тел ижадын йыйып, эшкәртеп, әллә нисә китап сығарған».

Джозеф бик төплө белемле, шул уҡ ваҡытта донъяға философик күҙлектән ҡарай. Христиан диненә бары тик егермене үткәс кенә килгәнлектән, минең Аллаға, диндәргә ҡағылышлы ҡайһы бер ҡатмарлы һорауҙарым уның өсөн бик аңлайышлы.

Янг Пак — Көньяҡ Кореянан. Бында ул, беҙҙеңсә әйткәндә, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙа. Зөлкифел пәйғәмбәр китабының бары бер генә бүлеге буйынса ғына ла шул тиклем төплө тикшеренеүҙәр үткәргән. Профессор Талстра уны бик ихтирам итә һәм һәр фекеренә ҡолаҡ һала.

Иоһан Лене — Албаниянан. Ғәжәйеп талантлы егет. Йәш кенә булһа ла, бик төплө белемле һәм фекерле. Джанет Дайк ҡайһы ваҡыт үҙе урынына лекциялар, докладтар һөйләргә уны ҡуя торғайны.

Анне-Мике Снелл — беҙҙең менән сентябрь айында ғына уҡый башланы. Алтмыш биш йәшендә боронғо йәһүд телен өйрәнә башлаған. Хаҡлы ялға сыҡҡансы

Парижда ЮНЕСКО штаб-квартираһында эшләгән. Әллә күпме тел белә. Донъялағы иң гүзәл, иң матур ил Голландия тип исәпләй. Шуға күрә беҙҙең барыбыҙға ла бер ни тиклем йәлләп ҡарай. Мәҫәлән, беҙҙең сәйәсмәндәрҙе һанап китә лә: «Һеҙ Рәсәйҙә нисек йәшәйһегеҙ ул? — тип ғәжәпләнә. «Беҙ бит сәйәсәт менән дә, сәйәсмәндәр менән дә йәшәмәйбеҙ. Үҙебеҙҙең туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ менән икһеҙ-сикһеҙ иркенлектә, матур тәбиғәт ҡосағында йәшәйбеҙ», — тип яуаплайым. «Ә Голландияла нимә оҡшай?» «Юлдар, тәртип, сәскәләр», — тип һанап китәм. «Һәм ашамлыҡ», — тип өҫтәй ул. «Тик ашамлыҡ түгел, — тип ҡаршы төшәм. — Беҙ тәбиғи шарттарҙа үҫкән тәмле ризыҡ ашайбыҙ».

Тағы ла бер курсташымды гел күҙ алдына килтерәм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер ай самаһы ғына бергә уҡығас, уның исеме лә хәтерҙә ҡалмаған. Әммә ни өсөндөр гел күҙ алдына килә. Дәрес башланып бер нисә минут үткәс, аудиторияның ишеге асылып китте лә урта буйлы, мыҡты кәүҙәле бер егет килеп инде. Эвелиндан голландса нимәлер һораны. Уҡытыусыбыҙ ихлас баш ҡағып инергә әйҙәне. Нимә тураһындалыр гәпләшә-гәпләшә егет урта рәттәге буш урынға ултырҙы. Эргәлә ултырған һабаҡташтарҙың береһе, минең аңламауым өсөн ғәфү үтенгәндәй, күптәр ихлас ҡушылып киткән был әңгәмәнең йөкмәткеһен ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе. Һуңғы осорҙа иртәнге поездар ун-ун биш минутҡа һуңлай башлаған да, тимер юлдағы тәртипһеҙлеккә зарланалар икән. Егет үҙен таныштырып исемен әйтте. Ул ябай ғына кейенгән, етен сәстәре мәрәкә булып тырпайып тора. Ә бында егеттәр сәстәренә гель һөртөп, уларҙың һәр бер бөртөгөн яйға һалып йөрөргә ярата.

Бына ул рюкзагынан бутерброд, термос сығарып ҡуйҙы ла, эҫе ҡәһүә һалып, тәмле итеп ашай-ашай Эвелиндың һөйләгәнен мауығып тыңлай башланы. Мин ғәжәпһенеп башҡаларға күҙ һалам. Уның был ҡыланышына бер кем дә иғтибар итмәне. Тәүге осрашыу шулай булды. Бер көндө Эвелин парлап эшләргә ҡушты. Беҙ шул егет менән бергә тура килдек. Башҡалар таҡта янында сығыш яһаған арала, бер аҙ һөйләшеп алырға форсат тыуҙы. Һөнәре буйынса инженер-механик икән. Йыл һайын ике-өс ай ваҡытын Бразилияла үткәрә. Ундағы иң ярлы бер төбәккә бара ла йәштәргә машина

йүнәтергә өйрәтә. Теләгәндәргә уҡыу-яҙыу дәрестәре лә бирә. «Ҡайһы ваҡыт класымда йөҙҙән ашыу бала йыйылып китә. Уларҙа белемгә ынтылыш шул тиклем ҙур. Библия буйынса ла бик күп һорау бирәләр. Шуға мин Изге Яҙмалар буйынса ла белемемде арттырырға булдым», — тине ул. Ярлы илдәргә барып бушлай ярҙам итеүҙе бәхеткә һанаған был егет үҙенең ихласлығы менән күңелемә инеп ҡалды.

## УҠЫУ

Тәржемәсегә ике телде белеү генә етмәйме ни, ни өсөн уға мәҙәни йәки лингвистик антропология тигән һорау тыуырға мөмкин. Тик тәржемә — ул ҡатмарлы ғына түгел, күп яҡлы хеҙмәт. Ғәҙәттә, бер телдән икенсе телгә auҙарыу, тип һөйләһәк тә, эш бер телдең һүҙе урынына икенсе телдең һүҙен ҡуйыу менән генә сикләнмәй. Тәржемәлә ике төрлө мәҙәниәт, төрлө шәхестәр, төрлөсә фекер йөрөтөү, төрлө әҙәбиәттәр, төрлө замандар, төрлө үҫеш кимәле, йолалар, йәғни донъяны бөтөнләй башҡаса ҡабул итеүҙәр осраша.

Профессор Лоуренс де Вриз үҙенең тәржемә оҫталығына арналған тәүге лекцияһын «эгоцентризм» тигән һүҙҙән башланы. «Эгоцентризм», йәғни кеше был донъяның үҙәгендә үҙен, ғаиләһен һәм халҡын ҡуя һәм донъяға үҙ ҡарашын иң дөрөҫө тип ҡабул итә. Уның өсөн үҙе тотҡан йолалар, ул ашаған ризыҡ, тормош рәүеше генә дөрөҫ кеүек. Тик донъя күп ҡырлы һәм төрлө ерҙә төрлөсә тормош шарттары. Кемгәлер сәйер тойолған ғәҙәт йәки ризыҡ, шул төбәктә йәшәгәндәр өсөн үлем менән йәшәү кимәлендә мөһим һәм берҙәнбер дөрөҫ сара булыуы ихтимал. Мәҫәлән, беҙгә ҡарышлауыҡ ашау ерәнгес тойола, ә итһеҙ йонсоған коровайҙарға ул — протеин сығанағы. Шуға күрә тәржемәсе өсөн иң мөһим нәмәләрҙең береһе — эш барышында «эгоцентризм» тигән нәмәне ситкә ҡуйып тороу.

Йәки бер үк төрлө аталған нәмәләр ысынбарлыҡта бөтөнләй башҡаса булыуы итималлығын онотмау мөһим. Миҫал өсөн Иҫке Ғәһедтәге жанр үҙенсәлектәрен алайыҡ. Бында бик күп китаптар, айырыуса Зәбүр, шиғыр менән яҙылған. Әммә боронғо йәһүд әҙәбиәтендәге шиғ-

риәт менән бөгөнгө башҡорт шиғриәте араһындағы айырма ер менән күк араһындағы кеүек. Шуға күрә уны беҙ бөгөнгө шиғыр һымаҡ тәржемә итәбеҙ икән, беҙ оригиналға ҡарата хилафлыҡ ҡылабыҙ.

Тәржемәсе эш барышында төрлө ҡыйынлыҡтар менән осраша. Шулар араһында тормош-көнкүреш үҙенсәлектәре, йолалар, ғаилә төрҙәре айырыуса ҡатмарлы, ваҡыт-ваҡыт баш ҡатырғыс булып китә. Хәтерләйһегеҙме, «Евгений Онегин»ында Пушкин (рус тәржемәһенең үҫешендә бөйөк шағирҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ): «Тик «пантолон» һәм «фрак», «жилет» — бөтә был һүҙҙәр русса юҡ», тип яҙа. Сөнки ул кейемдәр Рәсәйгә французлдарҙан килгән һәм исемдәре менән бергә беҙҙең тормошҡа инеп киткән.

Чукот яҙыусыһы Юрий Рытхэу үҙенең Пушкин шиғриәте менән иң башлап мәктәптә уҡытыусыһының тәржемәһендә танышыуы хаҡында яҙа: «Бөгөлө йәйәгә оҡшап торған яр буйында олононан нарта табаны яһай торған йәшел ағас тора. Был ағасҡа аҡса яһай торған металдан — беҙҙең мәктәп директорының да ике теше шунан яһалған — сылбыр эленгән. Был ағас тирәләй көндөҙ ҙә, төндә лә эткә оҡшаған, тик бәләкәйерәк һәм сосораҡ бер йәнлек йөрөй. Был йәнлек уҡымышлы, һөйләшә лә белә». Был мәрәкә миҫалдан Пушкиндың ниндәй әҫәре тураһында һүҙ барғанын аңлағанһығыҙҙыр, моғайын.

Американың күренекле тикшеренеүсеһе Юджин Вайда үҙенең хеҙмәтендә тәржемәсе осраған бер ҡатмарлы хәлде миҫалға килтерә. Джунглиҙа «Инжил»ды шунда йәшәгән бер ҡәбилә теленә ауҙарған тәржемәсе үҙенең хеҙмәт емешенең йоғонтоһон тикшереп ҡарамаҡсы була. Ҡәбилә ағзаларына уҡыр өсөн «Инжил»дағы тетрәндергес ваҡиғаларҙың береһен һайлай. Әҙәм балаларының гонаһын ярлыҡар өсөн Алланың үҙенең берҙән-бер улын ҡорбан итеүе тураһындағы тарихты уҡый ул. Тыңлаусылар бер-береһенә ҡарашып мыҫҡыллы көлөшә башлағас, аптырап ҡала. Баҡһаң, был ҡәбиләлә группалы никах икән. Был осраҡта баланың атаһын билдәләү мөмкин түгел. Шуға күрә ир кешенең иң яҡын туғаны үҙ балаһы түгел, ә ҡыҙ туғанының улы һанала. Шунлыҡтан тыңлаусылар: «Ҡалай хәйләкәр һеҙҙең Аллағыҙ! Улын ҡорбан иткән, имеш. Улын ни уны кем дә бирә. Ә бына

ҡыҙ ҡәрҙәшенең улын — ике туған ҡустыһын — биргеһе килмәҫ ине, моғайын!» — тиҙәр. Ҡаушап ҡалған тәржемәсе әллә Ғайса пәйғәмбәрҙе Алланың ике туған ҡустыһы тип атарғамы икән, тип баш вата. Әлбиттә, былай эшләргә уға бер кем дә рөхсәт итмәй. Әммә был — бер үк фактың төрлө мәҙәниәттәрҙә бөтөнләй башҡаса ҡабул ителеү ихтималына сағыу миҫал.

Хатта бер телдә һөйләшкәндә лә, беҙ бер үк һүҙҙе төрлөсә аңлап, төрлө мәғәнә һалып, бер-беребеҙҙе яңылыш аңлауыбыҙ бар. Ә инде телдәр аша сағылған донъя картиналарының тап килмәүе, тормош-көнкүрештең, ысынбарлығыбыҙҙың башҡа булыуы мәсьәләне тағы ла ныҡыраҡ ҡатмарлаштырып ебәрә. Һәр халыҡ үҙе өсөн әһәмиәтле булған нәмәләргә айырыуса ныҡ иғтибар иткән. Мәҫәлән, эскимостарҙа ҡарҙың әллә нисәмә исеме бар. Ә беҙҙә аттарҙың төҫөнә ҡағылышлы терминология бик бай.

Йәнә бер миҫал: йәһүд телендәге «лев» тигән һүҙ һүҙлектәрҙә «йөрәк» тип алынған. Орган булараҡ, ысынлап та һәр халыҡта ла йөрәк — йөрәк инде ул. Әммә беҙҙең телдә, аңламда йөрәк шулай уҡ хис-тойғолар һаҡланған урын кеүек ныҡынған. Һөйөү, йәки нәфрәт йөрәктә, тибеҙ. Ә боронғо йәһүдтәр хис-тойғоно бауыр, ә аҡылды йөрәк менән бәйләгән.

Шуға күрә тәржемәсе башҡа мәҙәниәттең факттары менән таныш булырға һәм белемен, тәржемәһен уҡыусыларға аңлайышлы итер өсөн файҙаланырға тейеш.

Беҙ йыш ҡына «Алла ҡоло» тигән һүҙбәйләнеште ҡулланабыҙ. Шуға күрә мин оригиналда был һүҙҙәр осраған һәр осраҡты шулай тәржемә итеүҙә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәй инем. Әммә йәһүд теленән беҙ «ҡол» тип тәржемә иткән был һүҙҙең төп мәғәнәһе «хеҙмәт». Консультант минән башҡортса «ҡол» һүҙенең мәғәнәһен һорай. «Ҡол, әлбиттә, ирекһеҙ булған йән эйәһе», — тип яуаплайым. Әммә ҡайһы бер урындарҙа кеше Аллаға йәки батшаға «мин ҡолоң» тип мөрәжәғәт иткән саҡта, үҙенең уға буйһоноуын күҙ уңында тотмай. Бында төп маҡсат — Алланы, батшаны, хужаһын ҙурлау, хөрмәтләүен күрһәтеү. Мәҫәлән, Корея телендә ҙурлау, хөрмәтләү терминологияһы бик ныҡ үҫешкән һәм тиҫтәнән ашыу кимәлде тәшкил итә. Йәғни был телдә һөйләшеүселәр Аллаға — бер, батшаға — икенсе, хужаға —

өсөнсө, атайға дүртенсе һ. б. төрлө мөрәжәғәт итә. Ә беҙҙең телдә был юҡ. Шулай булғас, нишләргә? «Ҙурлағанда йә шул затты күтәрәһең, йәки үҙеңде түбәнерәк төшөрәһәң», — ти консультант. Бына шул саҡта ғына мин үҙемдең байтаҡ ваҡыттар буйы яңылыш тәржемә иткәнемде аңлайым. Ә нисек дөрөҫ була һуң? Шул саҡ телебеҙҙә, бигерәк тә боронғо әҙәбиәттә осраған «мин фәҡирең» тигән һүҙбәйләнеш иҫкә төштө. Был миҫалды мин, тәржемәсенең нисек бөтөнләй көтмәгән, тышҡы яҡтан еңел генә күренгән урындарҙа ла абыныу ихтималын күрһәтер өсөн генә иҫкә алдым.

Ә инде һәйбәт тәржемә итеү өсөн боронғо Израилдең тарихын, йәһүдтәрҙең йолаларын, донъяға ҡараштарын төплө белеү кәрәклеген әйтеп тә торорға кәрәкмәйҙер. Йәки бынан әллә нисәмә йыл элек Зөлкифел, Ильяс йәки башҡа пәйғәмбәрҙәрҙең теге йәки был нәмә хаҡында һөйләгәндә ниҙәр уйлап янғанын, ни рәүешле һәм кемде иҫкәртергә теләгәндәрен, нимәләрҙе күҙ уңында тотҡанын аңлар өсөн бик күп баш ватырға тура килә. Бына шуға күрә лә тәржемәсегә тәрән белем кәрәк.

## АМСТЕРДАМ

Амстердам бик тиҙ арбап ала. Төндәрен баш ҡаланың 1200-ҙән ашыу күпере бәләкәс кенә фонарҙәр менән яҡтыртыла, был тирә-яҡҡа тылсымлы әкиәт күренеше бирә. Ә томанлы иртәләрҙә ҡала биләүенән ҡотолған сабый кеүек яйлап ҡына асыла ла бөтөн матурлығында күҙ алдыңа килеп баҫа. Боронғо йорттар, уларҙың ҡайһы береһенә 1625, 1654, 1698 тигән келәймә һуғылған, быуаттарҙың эҙен һаҡлаған таш урамдар, тулы һыулы каналдар, яратып тәрбиәләнгән парктар — барыһы ла уға ҡабатланмаҫ бер күркәмлек бирә. Һыуҙа туристар ултырған кәмәләр һәм бәләкәй генә теплоходтар йөҙә, һыу өҫтөндә фонарҙәр яҡтыһы сағыла, һәр ерҙә музыка яңғырай. Тормош түгел, ә тотош бер байрам кеүек.

Ҡала тышҡы ҡиәфәте менән генә түгел, йөкмәткеһе менән дә ылыҡтырғыс. Бөтөн донъяға танылған музейҙар араһында Рембрандтың йорт-музейын һәм Ван Гогтың музейын ғына әйтеү ҙә етә. Амстердамда Рембрандтың егерме ике һәм Ван Гогтың дүрт меңдән ашыу

картинаһы һаҡлана. Ҡаланың иң иҫке өлөшө — Дам майҙаны. Амстердам ошонан башланған. 1270 йылда тап ошонда иң беренсе плотина төҙөлгән. Ҡаланың исеме лә ошонан килеп сыҡҡан — Амстердам «Амстель йылғаһында төҙөлгән дамба» тигәнде аңлата.

Дамда һәр саҡ халыҡ мыжғып тора. Майҙандың көнбайышында король һарайы урынлашҡан. Бында рәсми рәүештә королева Беатрикс йәшәй һәм уны файҙаланған өсөн йылына бер евро түләй тип һанала.

Амстердамдың Үҙәк китапханаһы Европалағы иң ҙур китапхана иҫәпләнә. Уның ун ҡатында бер мең ике йөҙ урын, уларҙың алты йөҙө компьютерлаштырылған һәм Интернетҡа тоташтырылған. Фойела торған пианинола теләгән һәр кеше утыҙ минут буйы бушлай уйнай ала. Шуға күрә бында һәр ваҡыт музыка ишетелә, пианино бер ваҡытта ла тын тормай. Ошонда уҡ лекция һәм күргәҙмә залдары, Китапхана музейы, ике мең велосипед ҡуйырлыҡ урын бар. Етенсе ҡатта ресторан, уның террасаларынан иҫ киткес матур күренеш асыла. Ғөмүмән, бинаның көньяҡ стенаһы тотош быяланан тора һәм матурлыҡ менән һоҡланыр өсөн махсус урындар эшләнгән. Китап алыу һәм кире ҡайтарыу тулыһынса автоматлаштырылған.

Был китапханаға күренекле ғалимәбеҙ, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Фәнүзә апай Нәҙершина өс телдә — башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә нәшер ителгән «Урал батыр» эпосын һәм Салауат Юлаевҡа арналған энциклопедияны бүләк итеп ебәргәйне. Китаптарҙы ҡыуанып ҡабул иттеләр һәм рәхмәт әйтеп ҡалдылар.

Үҙәк вокзал үҙенең архитектура йәһәтенән матурлығы менән генә түгел, ғәйәт уңайлы булыуы менән дә айырылып тора. Ул 1881—1889 йылдарҙа төҙөлгән. Һаҙмат Амстердам ерендә төҙөлөш алып барыу еңелдән булмаған, әлбиттә. Вокзалды урынлаштырыу өсөн өс яһалма утрау яһарға тура килгән. Нигеҙен һалғанда сереməһен өсөн һәр береһен үгеҙ тиреһенә урап 8 687 ағас бағана ҡаҡҡандар.

Ҡаланы беренсе тапҡыр яҡшылап Бонндан килеп төшкән Томас Каут күрһәтте. Үҙәк вокзал тирәһенә күтәрелгәс, танауыма сәйер, әммә шул тиклем таныш еҫ бәрелде. Бала саҡтың еҫе. Үҙем дә һиҙмәй, тәрән итеп

һулыш алғанмын, күрәһең, Томас йылмая биреп: «Марихуана еҫе шәйләнәме?» — тип ҡуйҙы. Ул ваҡытта беҙ янынан үтеп барған бер кафеның вывескаһына ишараланы. Унда киндер япрағы төшөрөлгән. Шунда ғына был еҫтең ҡайҙан таныш булғанын һәм күңелемә ниңә яҡынлығын аңланым. Бәләкәй саҡта беҙ баҫыу ситтәрендә күпләп үҫкән киндер орлоғон һуғып ала ла, ҡаҙанда ҡурып, шәкәр ҡушып хәлүә яһап ашай торғайныҡ. Көҙгө муллыҡ, өлгөргән ашлыҡ, саҡ ҡына һулып кибә башлаған киндер япрағынан ошондай еҫ сыға торғайны. Аллаға шөкөр, беҙҙә үҫкән киндер башҡа һәм был афәт беҙгә таныш түгел ине.

Амстердам тип әйтеү менән күптәр наркомания, проституция, гомосексуализм кеүек социаль бәләләр тураһында иҫенә төшөрә. Мин яратҡан Амстердам һәм минең һәм һабаҡташтарымдың тормошо Амстердамдың был яғы менән бөтөнләй осрашмаһа ла, ошо илдә йәшәп ҡарамаған кешеләр өсөн сәйер, аңлайышһыҙ күренгән, нисек кенә булмаһын, ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан был мәсьәләләрҙе урап үтмәҫкә булдым.

Ысынлап та, был йәһәттән голландтарҙың сәйәсәте үҙенсәлекле — мөмкин тиклем күберәк рөхсәт итергә һәм аҙыраҡ тыйырға. Был аңлашыла ла, Голландия — борондан уҡ үҙенең ирекле фекер йөрөтөүе менән дан алған ил.

Элек-электән Амстердам бойондороҡһоҙҙар, сиркәү менән борсаҡтары бешмәгән дин әһелдәре, үҙ һүҙен бирергә теләмәгән ғалимдар, телен тыймаған яҙыусылар һәм философтарға һыйыныу урыны булған. Ә инде бөтөн Европала тыйылған китаптарҙы баҫтырып сығарыу Амстердам нәшриәттәре өсөн, гүйә, намыҫ эше булып торған.

Амстердам халҡы нимә теләй, шуны эшләп өйрәнгән. Сөнки башҡаларҙың теләгенә һәм донъяға ҡарашына аңлап, һис булмаһа түҙеп ҡарау — бөгөнгө көндә башҡа илдәрҙә лә модаға инеп барған толерантлыҡ — уларҙа үҙҙәренең теләктәренә лә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу сифатын формалаштырған. Шуға күрә башҡа милләттәр, халыҡтар, башҡа тормош рәүеше менән иҫәпләшмәү, үҙеңдекен генә алға һөрөү был ҡалала әҙәпһеҙлек, хатта шаҡшылыҡ кеүек ҡабул ителә. Әммә әҙәпһеҙҙәргә лә түҙеп ҡарайҙар. «Политкорректлылыҡ» — был бөгөнгө Көнбайыш Европала иң киң ҡулланылған һүҙ-

ҙең ҡоро ауаз ғына булмауын үҙ елкәмдә татыным. Профессор Вриз менән тәүге осрашыуҙа Амстердамда голландтарҙы бары тик университетта ғына күреүемә аптырап: «Үҙ илегеҙҙә үҙегеҙ аҙсылыҡҡа ҡалып барыуығыҙға хәүефләнмәйһегеҙме?» — тип һораным. Белербелмәҫ инглиз теләндә, ныҡ хисле итеп һөйләүемдән ул нимә һәм нисек аңлағандыр. Тик байтаҡ ваҡыт ул миңә бер ни тиклем ҡурҡыу ҡатыш, өнәмәй ҡарап йөрөнө. Лекциялар ваҡытында тоталитаризм, фашизм тураһында һөйләй ҙә, миңә ҡарай, Рәсәй тарихынан миҫалдар килтерә. Һабаҡташтарым минең бер нисек тә фашист була алмауым, Уралда йәшәгән аҙ һанлы милләт вәкиленән икәнемде һөйләгәс кенә ҡарашы имшене.

Хәйер, ситкәрәк киттем.

Голландияла, ысынлап та, еңел наркотиктар: киндерҙән эшләнгән марихуана менән гашиш ҡулланыу рәсми рәүештә рөхсәт ителгән. 1970 йылдарҙа донъяла йылданйыл ҡурҡынысыраҡ була барған был бәләгә ҡаршы тороуҙың тәү ҡарашҡа сәйер юлын һайлағанда голланд властары «бер нисә ҡуяндың ҡойроғон бер юлы тоторға» ниәтләгән. Марихуана менән гашиш махсус лицензия алған магазиндарҙа һатылһа, йәштәр уны эҙләп енәйәтселәргә мөрәжәғәт итмәй. Кафе-шоптарҙа асыҡтан-асыҡ осраша һәм аралаша алғанлыҡтан, уларҙың героин һәм кокаин кеүек ауыр наркотиктар ҡулланыусылар менән юлдары киҫешмәй. Еңел наркотиктарҙың сағыштырмаса арзан булыуы йәш наркомандар араһында тарала башлаған урлашыу, кеше талау кеүек енәйәттәргә сик ҡуясаҡ — ҡарарҙы бына шулай итеп нигеҙләйҙәр.

Амстердамдан йыраҡ түгел иҫ киткес матур Волендам тигән балыҡсылар ауылы бар. Голландияла, ғөмүмән, бөтә ерҙә лә бөхтәлек һәм таҙалыҡ булһа, Волендам был йәһәттән бөтәһенә лә өлгө булырлыҡ. Унда барып, гөл-сәскәгә күмелгән урамдар буйлап йөрөү үҙе бер зауыҡ. Шуға күрә, буш ваҡытым булғанда, диңгеҙ буйына теҙелгән өйҙәрҙең балҡып торған тәҙрәләренә ҡарап, шунда йәшәгән кешеләрҙең яҙмышын күҙ алдына килтереп йөрөргә әүәҫ инем. Бер мәлде автобуста йәнәш ултырған урта йәштәрҙәге бер кеше менән һөйләшеп киттек. Лукас һоҡланыуымды саҡ ҡына уйлана биреп тыңланы ла көтмәгәндә:

— Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, шул балҡыу тәҙрәләрҙең артында ҡайһы ваҡыт йән өшөткөс фажиғәләр бар шул, — тип ҡуйҙы. Шунан Волендам кеүек етеш, һил һәм күркәм ауыл-ҡасабаларҙа йәштәр араһында наркомания бик юғары кимәлдә булғанын һөйләп китте. Әйткәндәй, социаль проблемалар менән шөғөлләнгән әңгәмәләшем ҡасандыр үҙенең дә еңел наркотиктар менән шаярғанын, ә инде улар рөхсәт ителгәс, ташлағанын һөйләп алды.

— Изге яҙмаларҙа «Урлап эскән һыу татлыраҡ, йәшереп ашаған икмәк тәмлерәк», — тип бушҡа әйтелмәгән бит, — тине ул. — Тыйылмағас, ҡыҙығы бөттө. Минең ҡорҙаштарҙың күбеһе шулай эшләне, — тип үҙенең дәүләт сәйәсәтен хуплағанын белдерҙе һәм һандар килтереп фекерен иҫбатланы. Статистика буйынса Голландияла наркомандар һаны Франция, Бельгия һәм Германияла-ғыға ҡарағанда түбәнерәк. «Ауыр» наркотиктар ҡулланғандар өсөн айырым дәүләт программаһы эшләй. Наркоман булып теркәлгән һәм ундай препараттарға көн һайын мохтажлыҡ кисерә икән, уны ... бушлай бирәләр. Был ундай наркомандар урамға кеше таларға сығып китмәһен өсөн махсус рәүештә эшләнә. Шуға күрә башҡа илдәрҙең күп наркомандары бында ағыла. Теләктәре булғанда улар хатта дауалана ла ала. Хәйер, энәлә ултырған кешенең һауығыры шикле. Ундайҙар бик оҙаҡ йәшәмәй. Ә дәүләт уларға, йәмғиәттең башҡа ағзаларын мөмкин тиклем борсомай, тыныс ҡына был донъянан китергә ярҙам итә. «Әгәр ҙә һин был ағыуҙан баш тартырға һәм дауаланырға, яңы тормош башларға теләмәйһең икән — ал, тик үҙеңә үпкәлә», — тигән кеүек. Тәү ҡарашҡа барыһын да күҙ уңында тоторға тырышалар. Әммә яуызлыҡ, әгәр ҙә уйламаған ерҙән бүҫеп килеп сыҡмаһа, яуызлыҡ та булмаҫ ине. Шул уҡ Лукас һөйләүенсә, 70-се йылдарҙа «еңел» наркотик тип иҫәпләнгән киндерҙә алйыҡтыс матдә тик 3—3,5 процент ҡына булһа, һуңғы йылдарҙа Голландия селекционерҙары киндерҙең составында был матдә ун тапҡырға артыҡ булған яңы сортын килтереп сығарған. Белгестәр: «Бындай киндер ҡулланыусыларҙың кимәле күпкә артты. Хәҙер психикалары боҙолған йәш наркомандарҙы йыш осратырға була. Ялҡау, бер ниндәй ҡарар ҡабул итергә лә, өҫтәренә яуаплылыҡ алырға ла теләмәгән, иртән тороп эшкә тотоноу урынына карауатта марихуана тартып ятыуҙы артыҡ күргән тотош быуын үҫә», — тип саң һуға.

Закон буйынса Голландияның һәр гражданы шәхси ҡулланыу өсөн 5 төп киндер үҫтерә ала. Тик күпләп үҫтереп, итәк аҫтынан ғына ҙур-ҙур табыш алып ятыусылар йылдан-йыл күбәйә. Былар барыһы ла күрше илдәргә: «Голландия Көнбайыш Европаның наркотиктар буйынса баш ҡалаһына әйләнде», — тип белдерергә сәбәп булып тора.

Шулай ҙа, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Амстердамда «нормаль» кешенең юлы наркомандар менән киҫешмәй. Бер йыл йәшәп, Үҙәк вокзал тирәһендәге киндер еҫе аңҡып торған урамдарҙа күпме йөрөһәм дә — Европалағы иң заманса йыһазландырылған ҡала китапханаһына китап йәки төрлө нәфис фильмлы дисктар алырға йыш бара торғайным — бары өс наркоманды осраттым тип әйтә алам.

Бер мәлде парк аша ҡайтып барғанда әлеге лә баяғы таныш киндер еҫен тойҙом. Яй ғына алдан атлап, тарта-тарта китеп барған ике егет үтә шәп кәйефле, артыҡ ныҡ шарҡылдап көлә ине. Уларҙың ниндәй хәлдә икәне шунан аңлашылды. Икенсе тапҡырында дуҫтар менән Үҙәк вокзал эргәһендәге бер ҡытай ресторанына барырға булдыҡ. Эҙләйбеҙ-эҙләйбеҙ, табып булмай. Һораштырабыҙ — барыһы ла туристар. Тирә-яғыма боролоп, Амстердам кешеһен ҡарайым. Бына алтмыш йәштәр тирәһендәге өлкән генә ир бағанаға бәйләп ҡуйылған велосипедын ысҡындырып маташа. «Ғәфү итегеҙ», — тип өндәштем. Һорауымды әйтеп тә өлгөрмәнем, ҡарашын абайлап, телемде тешләнем. Ул бер аҙ аҫҡа эйелгән килеш боролған да балҡып торған күкшел күҙҙәре менән миңә текләгән. Ҡарашында шундай һоҡланыу, хатта хайран ҡалыу: әйтерһең дә, ул һирәк осрай торған ғәжәйеп бер сәскәме, әллә һуштарҙы алырлыҡ башҡа берәй гүзәллекме күрә! Тиҙ генә боролоп иптәштәрем артынан йүгерҙем. Беҙ әйләнеп ҡарағанда ул һаман да шулай уҡ хайран булып баҫып тороуын дауам итә ине. Был хәлендә ул нисек велосипед менән ҡайтып еткәндер. Хәйер, голланд полицияһының бер шәп сифаты бар: ҡарайһың, улар бер ерҙә лә күренмәй. Ә кеше саҡ ҡына тәртип боҙҙомо, ер аҫтынан ҡалҡҡан кеүек пәйҙә була.

Һүҙ сыҡҡанда йылға бер тапҡыр ике иҫеректе осратҡанымды ла һөйләп китәйем. Ҡараңғы төшөп барғанда ҡала ситендәге метро станцияһында торам. Перрон буш тиерлек, минән башҡа тағы ике ҡатын ғына бар. Шул

саҡ ҡаршы яҡтағы перронға 30—35 йәштәрҙәге ир менән ҡатын килеп баҫты. Ҙур эт эйәртеп алғандар. Ҡулдарында банкалы һыра. Күҙелдәре көрләгә хахылдап көләүҙәренән һәм сайҡалып-сайҡалып китеүҙәренән күренә. Шул саҡ алдарына бөхтә итеп кейенгән, оҙон буйлы, ҡара тәнле полицейский килеп баҫты. Машинала үтеп барышлай быларҙы ҡайҙан күреп ҡалған? Ҡапыл шымып ҡалған икәүгә бармаҡ янап бер нисә һүҙ әйтеүе булды, сәрхүштәр бөршәйә биреп өйҙәргә ҡарай елдерҙе. Теге ҡатындар менән бер-беребеҙгә ҡараштыҡ. Түҙмәнем: «Шул тиклем ҡурҡытырлыҡ нимә әйтә ала һуң ул?» — тип ҡыҙыҡһындым.

«Штраф, — тип яуапланы ҡатындарҙың өлкәнерәге. — Йәмәғәтселек урынында алкоголле һауытты асыҡ килеш тотоп тороу — 50 евро, тыйылған урында эт менән йөрөү (морондоҡһоҙ) — 75 евро, иҫерек килеш йәмғиәт тәртибен боҙоу — 130 евро, төндә йәмғиәт урындарында шаулашыу — 75 евро». — Шул даирәлә эшләгән булдымы, шартлатып әйтеп бирҙе. Хәйер, голландтар законды ла яҡшы белә, иҫәп-хисапты ла бик ярата. Ысынлап та, бындай хәлдә, еңел ҡотолдом, тип тороп йүгерерһең дә.

Голландиялағы рөхсәттәр бының менән генә сикләнмәй....

2000 йылдан алып Нидерландта рәсми рәүештә фәхешханалар асырға рөхсәт ителгән. Был илдә үҙ тәндәре менән аҡса эшләгән ирҙәр һәм ҡатындар башҡа һөнәр эйәләре менән тигеҙ хоҡуҡ алған. Улар ҡаҙнаға һалым түләй, медицина страховкаһына, өҫтәлмә пенсияға һәм йыл һайын ял алырға хоҡуҡлы, үҙҙәренең профсоюздары бар. Был — голландтарҙың тормошҡа әхлаҡи күҙлектән һәм тейеш тигән иллюзия менән түгел, ә файҙаны алға ҡуйып ҡарауҙарының һөҙөмтәһе. Фәхеш һәр бер йәмғиәттә булған, бар һәм буласаҡ, тимәк, уны контролгә алырға һәм килем сығанағына әйләндерергә кәрәк, йәнәһе. Был дәүләткә лә, йәмғиәткә лә, «һөнәр эйәләре»нә лә уңайлы.

Минең һунарға сыҡҡан был төр туташтарҙы Өфөлә лә осратҡаным бар. Парижда ла көпә-көндөҙ үткән-һүткән ир-егеттәргә бәйләнгәндәрен күрергә тура килде. Ә Амстердамда уларҙы үҙҙәренең «эш» урындарында — «Ҡыҙыл фонарь» кварталында, быяла витрина аша ғына күрергә мөмкин. Әгәр ҙә бик ҡыҙыҡһынһаң. Беҙ был кварталға Амстердамға килеүебеҙгә аҙна-ун көн тигәндә

Анни-Мари менән осраҡлы ғына барып сыҡтыҡ. Инглиз теләндә китаптар һатылған ниндәйҙер магазинды эҙләй инек булһа кәрәк. Ҙур быяла витриналы бер йорт. Һәр тәҙрәлә эске кейем генә кейгән ҡыҙҙар баҫҡан, ҡайһы береһе кеҫә телефонынан һөйләшә, ултырып торғандары ла бар. Тәү ҡарашҡа ҡатын-ҡыҙҙар өсөн эске кейем һатылған магазин витринаһы тип уйларға мөмкин. Тирә-яҡта туристар мыжғып тора. Шул ваҡыт эргәбеҙҙән бер төркөм япон туристары үтеп китеп бара. Уларҙың бер-береһенә терһәк менән төртөшөп хихылдашыуынан ғына беҙ бөтөн донъяға даны таралған урамға килеп ингәнебеҙҙе аңланыҡ. Ә инде был ҡыҫҡа ғына урамдың мөйөшөнән боролоуыбыҙ булды, ғәҙәти йорттар, шунда уҡ балалар баҡсаһы күренде.

Шулай ҙа ҡабул ителеүгә ете йыл үткәндә, Амстердамдың мэры был закондың хата булғанын таный. Шуға күрә Ҡыҙыл фонарле кварталда байтаҡ ҡына фәхешханалар ябыла һәм бында «Бөтөн донъя мода үҙәге» булдырырға ниәтләйҙәр.

Ғөмүмән, үҙҙәренең иле һәм уның абруйы тураһында уйлаған кешеләргә Амстердамдың был даны оҡшап етмәй. Шуға күрә 2011 йылдан башлап кафе-шоптарҙа сит ил туристарына наркотиктар ҙа һатылмай башлаған. Бары тик, документ күрһәткән осраҡта, күрше Германия һәм Бельгия граждандарына ғына ташлама яһала.

Голландияла «бөтөн планетала иң алдан» барған тағы ике мәсьәлә бар. Бында 2001 йылда донъяла иң беренсе булып бер енес кешеләренең никахы законлаштырылған. Хәҙер ике ир йәки ике ҡатын бер-береһе менән никахҡа керә һәм тулы хоҡуҡлы ғаилә булып иҫәпләнә. Уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа бала алырға ла мөмкин. Статистика буйынса бында йыл һайын 75 меңдән ашыу никах теркәлһә, уларҙың яҡынса 1 мең дә 400-ө бер енесле кешеләрҙең никахы.

Голландия шулай уҡ беренсе булып эвтаназияны законлаштырған. Йәғни, врачтар үлемесле сирҙән ғазапланған ауырыуға, уның үҙенең үтенесе буйынса, яҡты донъянан китергә ярҙам итергә хоҡуҡлы. Әммә закон эвтаназияға рөхсәт алыу өсөн бик ҡаты талаптар ҡуя. Был рөхсәт бары тик махсус комиссия тарафынан ғына бирелә.

Амстердамдың православие сиркәүендә Нидерландта оҙаҡ йылдар йәшәгән бер рус егете менән һөйләшеп

киттек. Унын фекерҙәре миңә ифрат ҡыҙыҡ тойолғас, яҙып ҡуйғанмын. «Голландия көнбайыш донъяһында иң прогрессив илдәрҙең береһе», — тине ул. Шунан: «Голландтарҙың наркомания, проституция кеүек социаль аномалияларға мөнәсәбәтен уларҙы ялтыр кәнфит ҡағыҙына төрөп ҡуйыу менән сағыштырырға мөмкин. Йәки, гүйә, моллюск тәненә эләккән ҡом — ҡотолоп булмай икән проблеманан, ынйыы яһарға тура киләсәк, — тип дауам итте. — Шлюздарҙы асып дамбаға баҫымды кәметкән һәм һәләкәткә юл ҡуймаған шикелле, улар кешеләргә әхлаҡһыҙлыҡ ҡылырға билдәле бер ҡыҫымда рөхсәт итеп, йәмғиәтте боҙоҡлоҡ упҡынына сумыуҙан һаҡлай. Золомдо бөтөнләй юҡ итеү мөмкин түгел икән, уға бер ни тиклем хоҡуҡ бирелә (әгәр ҙә ул башҡалар өсөн бик нык хәүефле булмаһа). Был золом йәмғиәттә үҙенә берәй ышыҡ таба һәм шунда көн итә. Бындай эксперименттарҙы тотороҡло һәм консерватив йәмғиәттәр генә эшләй ала. Ә Нидерланд — тап шундай ил».

Был егет менән һөйләшеү миңә Голландияға башҡасараҡ күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте. Шулай уҡ профессор Вриз да үҙенең бер лекцияһында: Роттердамдың социология профессоры Ван Доорндың «Толерантлыҡ — тактика булараҡ» тигән бер хеҙмәтен иҫкә алғайны. «Голлантарҙың бик күп нәмәгә түҙеп ҡарауҙарын сит ил кешеләре аңлап етмәй. Улар уны «күңел киңлеге» тип баһалап йә самаһыҙ һоҡлана, йәки «бер ҡатлылыҡ», «еңел уйлау» тип ҡоттары оса. Был Нидерландтың тарихын белмәүҙән килә. Ә бит быуаттар буйы ҡала аҡһөйәктәре һәм король ғаиләһе республиканса кәйефле йәмғиәт менән, хакимдар «башбаштаҡ» ябай халыҡ менән, либералдар ортодокстар һәм сектанттар менән бик прагматик рәүештә мөғәмәлә иткән. Бында һүҙ «тынысландырыу сәйәсәте» тураһында бара. Был сәйәсәт төпсөрләп иҫәпләнгән ҡара аҡылға, барыһының да мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп махсус рәүештә төҙөшкән үҙ-ара тыныслыҡ тураһындағы килешеүгә нигеҙләнгән. Был килешеү, беренсенән, хөкүмәт менән йәмғәтселек араһында, икенсенән, хөкүмәт күҙәтеүе аҫтында йәмғиәттәге үҙ-ара көрәшеүсе төркөмдәр араһында ныҡлы тора», — тигән фекер бар ине унда.

## КЛИМАТ

«Февраль.
Амстердамда эңер.
Ҡоя ямғыр.
Нәркәстәрҙең һары тажын йыуа».

Ҡыш булһа ла йылы. Ҡайһы бер көндәрҙә температура ун градусҡа тиклем күтәрелә. Канал һәм йылға буйҙарында крокустар, нәркәстәр, үгәй инә сәскәләре үҫә. Мәңге йәшел һәм хатта һалҡындарҙан һуң да япраҡ ҡоймаған ағастар һәм ҡыуаҡтар күп.

Голландияла — диңгеҙ климаты, ҡәҙимге йомшаҡ, беҙҙәге кеүек йә үтә эҫе, йә самаһыҙ һыуыҡ түгел. Ямғырлы һәм болотло көндәр күберәк тойолдо. Шуға күрәлер, саҡ ҡына ҡояш йылтырай башлаһа, урындағы халыҡ баҫып торған ерендә ултыра һалып, берәй күтәрмәме, эскәмйәме, әллә хатта тротуармы — битен йылы нурҙар яғына бора һала.

Көҙгөһөн йыш ҡына көслө елдәр иҫә, ҡайһы ваҡыт дауыллап та ала. Бындай мәлдә велосипедта булһаң, хәлдән таяһың инде. Йыш ҡына ҡарлы ямғыр яуа, шуға күрә тыштан һыу үтмәҫлек комбинезон кейәһең дә, университетҡа барғас, өҫ кейемен алмаштырып алырға тура килә.

Ил бик бәләкәй булғас, халыҡ ныҡ тығыҙ ултырған. Шунлыҡтан, бында тәбиғи урмандар, айырыуса илдең урта өлөшөндә, ҡалмаған тиерлек. Әммә йәнлектәрҙең ҡайһы бер төрҙәре кеше менән «арҡаға арҡа» терәп тигәндәй йәшәргә өйрәнеп алған. Утрехҡа барғанда бер урында ҡырағай тауыҡтар күреп аптырағайныҡ. Өйрәк, ҡаҙ, аҡҡоштар тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Бер мәлде беҙҙең дөйөм ятаҡ эргәһендәге ҡыуаҡлыҡҡа инә өйрәк йомортҡа һала башланы. Ата өйрәк менән эйәртенешеп яҡындағы каналдан байтаҡ ҡына күтәреләләр ҙә, инәлек ниндәйҙер сәнскеле ҡыуаҡ аҫтына сума. Ә ата өйрәк, шунда уҡ сыр-сыу килеп уйнап йөрөгән балаларҙан тамсы ла ҡурҡмайынса, торатуар ситендә көтөп тора. Шунан, эште бөтөрҙөк бөгөнгә, тигәндәй, эшлекле ҡиәфәт менән йәнә һыуға китәләр. Бер нисә көндән тағы киләләр. Былар барыһы ла минең дүртенсе ҡатта мөйөштә урынлашҡан бүлмәмдән ап-асыҡ күренеп

тора. Тик ул йомортҡаларҙы баҫып сығарырға насип булдымы-юҡмы, шуныһын ғына күрмәнем.

Университет эргәһендәге бер күлдә бер нисә селән йәшәй. Велосипедта парктан китеп барһаң, эшлекле ҡиәфәт менән ҡыҫҡа тәпәйҙәрен мәрәкә йыбырлатып терпеләр ары-бире юрғалай. Ә инде һәр төрлө ҡуяндар тураһында әйтеп тә тормайым. Урындағы фермерҙар дөйәғоштар, тауис ҡоштар һәм боландар үрсетә.

Ә инде сәскә үҫтереүҙә голландтарға тиң халыҡ донъяла юҡтыр. Мин Амстердам буйлап бер ниндәй маҡсатһыҙ, баш һуҡҡан яҡҡа сығып китергә ярата торғайным. Аҙашып әллә ҡайҙа, шәхси өйҙәр араһына барып сығаһың да хайран ҡалып йөрөйһөң. Ус аяһындай ғына ерҙә лә ниндәй генә үҫемлектәр үҫмәй. Миҙгеленә күрә төрлөсә: яҙ бер, йәй икенсе, көҙ өсөнсө төрлө сәскәләр, хатта ҡыш та төҫ ташламаған әллә ниндәй үҫемлектәр. Ә инде ҡырағай виноградтың таш стеналар буйлап бишалты ҡаттан да юғарыраҡ үрмәләп менеүенә инде һушың китерлек. Бер көндө Үҙәк китапхананан үҙемдең ятаҡҡа тиклем алты сәғәт ҡайттым һәм бер генә минутҡа ла күңелһеҙ булманы, бер генә йәмһеҙ урын осраманы. Хәйер, ялҡауланмаһаң, олоғара баҡсасылыҡ үҙәктәрендә йәнең теләгән үҫемлектән башлап, эскәмйә, фонарҙәр, фонтандар, шарлауыҡтар яһар өсөн барыһы ла бар. Ә был егәрле халыҡ, уларҙы ҡулланып, әллә ниндәй дизайндар уйлап сығара, бер кемде лә ҡабатламаҫ хазиналар эшләп ҡуя.

## ВЕЛОСИПЕД

Әйтеүҙәренсә, Амстердамда 400 меңдән ашыу, йәғни, бында үҫкән ағастарҙан ике тапҡырға күберәк велосипед иҫәпләнә, тиҙәр. Бөтә ерҙә лә уларҙы ҡалдырыр өсөн тәғәйен урындар бар. Тик урын етмәй, шуға күрә, ҡайҙа ғына ҡарама, ҡоймамы ул, ағасмы, велосипед бәйләп ҡуйылған. Александр Сизиков: «Велосипед урлау — Амстердамда милли спорт кимәлендә. Шуға күрә уны бер генә минутҡа ла йоҙаҡһыҙ ҡалдырма, — тип киҫәткәйне инде. — Йоҙаҡтар ҡайһы ваҡыт велосипедтың үҙенән ҡимmәтерәк тора», — тигәс, хатта үҙем менән елле генә бер бик тә алып килдем.

Велосипед юлдары, ғәҙәттә, ҡыҙыл төҫтә, махсус светофорҙар бар. Ғөмүмән, велосипедтағы кеше юлда иң төп фигура. Мәҫәлән, шоферҙар йәйәүлене туҡтап үткәреп ебәрә. Ә бына велосипедтағы кешене йәйәүлеләр ҙә үткәрергә тейеш, сөнки уға артабан йөрөп китеү һәм тиҙлек йыйыу ҡыйын булыр ине.

Бына Анни миңә йәтеш кенә велосипед алып килде. Былтыр унда Тайвань ҡыҙы Анжел йөрөгән. Тәү ҡараш-ҡа бик бәләкәй күренгәйне — шуға күрә эстән генә: «Һаумы, бәләкәй пони!» — тип иҫәнләштем. Ул бында, ноутбугымдан ҡала, иң яҡын ярҙамсыма әйләнергә тейеш. Бәләкәй саҡта велосипедта йөрөргә ярата торғайным. Шуның кәрәге тейҙе, бер белгән онотолмай икән. Тик машиналарҙан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡам һәм Амстердамдың ҡайһы бер тар урамдарынан, иҫәпһеҙ-һанһыҙ баҫмаларынан нисек үтеремде күҙ алдына ла килтерә алмайым. Баштараҡ хәүефле урындарҙа төшөп йәйәү барырмын, тип үҙемде тынысландырҙым.

Килгәс тә Амстердамдың велосипедсылар өсөн махсус картаһын һатып алғайным. Ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, картаны артыҡ уҡый белмәгәнлектән, тәүҙә иң ябай марштутты һайланым. Ике ҙур юлды, ике күперҙе иллаалла менән ҡарана-ҡарана сыҡҡас, ысынлап та, ҡала ситенә килеп юлыҡтым. Бына ҡайҙа ул рәхәтлек! Бер яҡтан канал, икенсе яҡтан туғайлыҡ, ә велосипед юлы шундай шыма: алдыңа ҡып-ҡыҙыл атлас таҫма тәгәрәткәндәрме ни. Кеше үтә күп түгел. Бер нисә кеше роликлы коньки кейеп алған. Уларҙың тиҙлеге минең велосипедтыҡына ҡарағанда ла шәберәк — елдерешеп үтеп киттеләр. Унан да, бынан да юлдан төрлө төҫтәге һәм төрлө ҙурлыҡтағы йорт ҡуяндары елдереп үтеп китә. Балалары бигерәк тә ирмәк. Каналдарҙа аҡҡоштар йөҙә. (Яҙ көнө бер тапҡыр, ышанырһығыҙмы-юҡмы, ике аҡҡоштоң ун бер бәпкәһен һананым. Был күренешкә шул тиклем хайран ҡалғанмын: яурынымда фотоаппаратым барлығы улар күҙҙән юғалғас ҡына иҫемә төштө.) Бара биргәс, инвалид коляскаһындағы бер ҡатынды ҡыуып еттем. Юл буйында туҡтаған. Яйлай биреп, һораулы ҡарашыма: «О'кей!» — тине. Ҡулында китап күреп аңланым, бер аҙ тын алырға туҡтаған. Голландияла ундайҙар йыш осрай. Бөтә ерҙә лә уңайлы пандустар, автобустарға инеү ҙә яйлы. Ә бит юл һалғанда, баҫҡыстар эшләгәндә инвалидтарҙы иҫкә тотоу өсөн артыҡ сығым-

дар ҙа, хатта дәүләт программаһы ла түгел, ә донъяла һауһыҙ кешеләр ҙә барлығын сак кына иҫтә тотоу ғына кәрәк, тип уйлайым. Хәйер, ас ҡәҙерен туҡ белмәй инде. Бара биргәс, матур күл буйына килеп сыҡтым. Бер нисә урында шулай уҡ инвалид коляскалары тора. Бер әбей аҫтына ниҙер түшәп, аяғын һоноп ултырған да битен ҡояшҡа төбәгән. Картәләнгән болондарҙа бер нисә ат йөрөй. Картанан күренеүенсә, бында йыраҡ түгел ипподром булырға тейеш. Күл буйлап бара торғас, бик матур ҡаласыҡҡа килеп сыҡтым. Бер йорт күлдең эсендә үк тора. Дөрөҫөрәге, һал кеүек нәмә өҫтөндә йәтеш кенә өй. Голландияла, айырыуса Амстердамда ер ҡиммәт һәм һалым ҙур булғанлыҡтан ҡайһы бер кешеләр өйҙәрен канал, йылға, күл өҫтөнә һала. Бында ла бәләкәс кенә таҡта иҙәнле ишек алды. Шунда уҡ бер нисә ҡыуаҡ роза сәскәһе. Велосипеды һөйәп ҡуйылған. Бына асыҡ тәҙрәнән ҡул һоноллдо ла һыу өҫтөнә ҡармаҡ ырғытты. Артабан ни булырын ҡыҙыҡһынып күҙәтә башланым, юл ситендәге үләнгә барып ултырҙым. Бер нисә минут үтеме-юҡмы — бер табалыҡ балыҡ тотоп, ҡул яңынан юҡ булды. Бына шулай эштәр!

Көндәрҙән-бер көн был юлдың Һаарлемға барғанын белеп ҡалдым. Анни ниндәйҙер ҡағыҙҙарға ҡултамға ҡуйырға саҡырғайны, сюрприз эшләмәксе булдым. Киттем велосипедта. Барам-барам да берәйһенән юл һорайым. Юл тип-тигеҙ. Ғөмүмән, Голландияла ландшафт тип-тигеҙ, шуға күрә бында велосипедта йөрөүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ.

Бер мәлде әкиәткә килеп юлыҡтыммы тип торам. Ике яҡтан да һуҙылып киткән сәскә баҫыуҙары. Гиацинттар, ләлә-тюльпандар (был март айында булған хәл), ниндәй генә төҫтәр юҡ. Голландтарҙың ярата һәм ятҡанын аҡсаға әйләндерә белеүенә асыҡ дәлил был ләлә баҫыуҙары. Александр Дюма үҙенең «Ҡара ләлә» тигән романында бына нимә тип яҙа әле мин китеп барған ҡала тураһында: «Һаарлем үҙенең Голландияла иң күләгәле, йәмле булыуы менән тулыһынса ғорурлана алған матур ҡала.

Башҡалар үҙҙәренең арсеналдары, верфтәре, магазин һәм баҙарҙары менән дан ҡаҙанырға тырышҡанда, Һаарлем Берләшкән провинциялар араһында үҙенең ялбыр өйәнкеләре, зифа тирәктәре, тарбаҡ имән, хуш еҫле йүкә һәм бөҙрә каштан аллеялары менән күркәм ине.

Һаарлем күршеһе Лейден менән батшаларса мәғрур Амстердам — береһе фән ҡалаһы, икенсеһе сауҙа буйынса баш ҡалаға әйләнергә ынтылғанын күреп, ер эшкәртеү, дөрөҫөрәге, баҡсалар үҫтереү үҙәгенә әүрелергә ҡарар итте. Ысынлап та, баҡсасылар өсөн ул елдәрҙән ышыҡланған, ҡояш яҡшы йылытҡан булараҡ, диңгеҙ елдәре ыжғырған йәки тигеҙлектә ҡояштан өтөлгән башҡа ҡалаларҙан күпкә уңайлыраҡ.

Шулай итеп, Һаарлемда тыныс холоҡло, ергә тартылған кешеләр төйәкләнгән. Ә Амстердамда һәм Роттердамда тынғыһыҙ, йылдам, сәйәхәт һәм алыш-биреш яратҡандар, Гаагала сәйәсмәндәр, йәмәғәт эшмәкәрҙәре йәшәй ине. Лейденды фән ҡалаһы тигәйнек. Ә Һаарлем нәзәкәтле, нәфис нәмәләргә — музыка, живопись, емеш баҡсалары, аллеялар, сәскә түтәлдәренә күңел һалды. Һаарлем һушы китеп сәскәләргә, улар араһында айырыуса лаләләргә ғашиҡ булды. Әле 1673 йылдың 15 майында Һаарлем бер ниндәй тапһыҙ, кәмселекһеҙ ҡап-ҡара лалә сәскәһе үҫтергән кешегә тәғәйенләнгән 100 мең флорин аҡсаны тапшырыу тантанаһына әҙерләнә ине».

Бына ниндәй ҡала ул Һаарлем!

Ҡала буйлап байтаҡ аҙашып йөрөгәндән һуң — хатта бер нисә тапҡыр оҙата биреп тә ҡуйҙылар — Анниҙың офисы алдына килеп туҡтаным. Шаҡ ҡатты: «Мин эшләгән тиҫтәләгән йыл эсендә бары тик ике генә студент Амстердамдан велосипедта килде: береһе Саша Сизиков, икенсеһе һин», — тине. Уҡыған сағында беҙҙең проекттың мөхәррире Александрға иң күбе 24 йәш булғанын уйлап, эстән генә маһайып ҡуйҙым.

Инде миңә Амстердамдың икенсе яғында урынлашҡан университетҡа ла тәүәккәлләргә мөмкин. Ә был, ҡурҡҡан эш хәйерле була тигәндәй, йәтеш кенә булып сыҡты. Ятаҡтан сығыу менән бер нисә урамды үткәс тә парк башлана. Егерме минут тирәһе шул парктан барғас, тар ғына урамға килеп сығаһың. Ул түбән төшә. Бер баҫма, ике тоннель үткәндән һуң икенсе ҙур парк. Ул паркты сығыуға университеттың биналары күренеп тора. Шәмбе һәм йәкшәмбе көндө барып урап ҡайттым. Һәүетемсә генә барғанда юлға, бер яҡҡа барғанда, 40—45 минут. Дүшәмбе көн тәүәккәлләнем. Арҡала — 4 килограмлыҡ ноутбук һәм бер нисә ҡалын ғына китап һалынған рюкзак. Университет алдына елдереп килеп туҡтайһың да, велосипедыңды ныҡ ҡына сылбыр менән махсус

урынға йоҙаҡлап, килеп инәһең. Лифтта кеше һәр көн күп була. Көтөп торһаң, һуңлауың да бик мөмкин. Шуға дәрес буласаҡ 11-се йәки 14-се ҡатҡа баҫҡыс буйлап елдереп менеп китәһең. Бына ҡайҙа ул спорт. Юҡҡа ғына голландтарҙы донъялағы иң сәләмәт һәм спорт яратҡан милләт тимәйҙәр икән. Тимер атҡа, дөрөҫөрәге, кишер төҫөндәге «пониға» атланып алғас, урындағы халыҡ һәм уның ҡылыҡ-холоҡтары менән тағы ла яҡындараҡ танышырға форсат тыуҙы. Университеттан ҡайтып киләм, арытылған, шуға күрә көсөргәнеш талап иткән теге тар урам буйлап яй ғына менеп киләм. Ҡаршыға төшөп килгән ике машинаны күреп, уттан ҡурҡҡандай, ситтәге тротуарға сыҡтым. Шулай ҙа велосипедымдан төшмәйем, ниңәлер ҡурҡҡанымды таныу ғәрлек кеүек. Ҡаршымда ҙур ғына эт етәкләгән ҡатын тора. Эт миңә шул тиклем аптырап ҡарай. Бик яҡын килгәс тә ситкә атланы. Ә ҡатын тораташ кеүек ҡатҡан. Мин абайлап өлгөргәнсе нисектер этеп ҡолатты. «Ғәфү итегеҙ», — тинем велосипедымды торғоҙа-торғоҙа. Күҙенең уғы булһа, атып үлтерерҙәй итеп зәһәр ҡарап тора. «Велосипед өсөн урам айырым, — ти ул. — Ә бынан балалар, ҡарттар һәм эттәр генә йөрөй». Үҙемдең сит илдән килгәнемде, велосипедҡа яңы ғына ултырғанымды, машиналарҙан ҡурҡҡанымды һөйләп бирәм. Бер аҙ имшей төшә. «Был урамда машиналар үҙҙәре һинән ҡурҡырға тейеш», — тип ул миңә байтаҡ ҡына файҙалы кәңәштәр бирә. Ысынлап та, Голландия урамдарында велосипедҡа машиналар ҙа, йәйәүлеләр ҙә юл бирергә тейеш икән. Әлбиттә, улар тейешле урында йөрөгәндә. Мин уға ҡат-ҡат рәхмәтемде әйтәм, ниһайәт, йөҙөнә йылмайыу ҡуна. Йылы итеп хушлашабыҙ, әммә ул үҙ юлына китер алдынан ҡаты итеп тағы бер тапҡыр: «Был юл балалар, ҡарттар һәм эттәр өсөн!» — тип ҡабатлай.

Голландтар үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәшә һәм уны һаҡлай белеүе менән айырылып тора. Был, моғайын, үҙҙәренең баһаһын белеүҙән дә киләлер. Барыһы ла иң талапсан ҡағиҙәләрҙе лә — тәртипкә ҡағылһынмы ул, көндәлек тормошҡамы — ҡаты һаҡлай. Башҡаларҙан да шуны талап итә. Шул уҡ ваҡытта балаларса бер ҡатлылыҡ менән, бөтә донъяла ла шулай икәненә ышана. Улай булмағанын аңлата башлаһаң, ысынтылап аптырайҙар: ҡағиҙә буйынса йәшәү бөтәһенә лә уңайлы бит, йәнәһе.

Тағы ла бер нәмәгә иғтибар иттем: берәй тәртипһеҙлеккә осраһаҡ, мәҫәлән, иҫерек күршеләр маҙаға тейһә, беҙ үҙебеҙ әрләшергә китәбеҙ. Ә улар һәр кем үҙ эшен башҡарырға тейеш тип иҫәпләй һәм полицияға шылтырата. Бер мәлде күл буйына барған матур юлда йәш кенә малай-шалай мотоциклда йөрөргә әүәҫләнеп алды. Икешәрләп ултырып алалар ҙа юғары тиҙлектә ҡыуалар, тайшанып өлгөрәһеңме-юҡмы. Дәрестәрҙән ялҡып, күҙ арып киткәндә көн һайын сығып ураһам да, хәүефле була башлағанлыҡтан (бер йылға килеп имгәнеп ятып булмай бит инде), был рәхәттән баш тартырға булдым. Шулай ҙа аҙна самаһы үткәс, сыҙаманым: сыҡһам, мотоцикл әҫәре юҡ. Уңайын тура килтереп, берәүгә ҡәнәғәтлегемде белдерҙем. «Полицияға шылтыратырға тура килде, — тине ул. — Закон бөтәһе өсөн дә бер». Ысынлап та уңайлы.

Бында берәй яҡҡа барам тиһәң, һис тә икеләнмәй сығып китергә мөмкин. Боролоштар, юлдың ҡайҙа алып барып сығарыры юл ыңғайында бағаналарға эленгән карталарҙан ус төбөндәгеләй күренеп тора. Шулай ҙа ҡайһы ваҡыт буталып та кителә. Бер көндө бөтөнләй аҙашҡанмын. Велосипедта ҡаршыма килгән бер өлкән генә ҡарттан һорарға тура килде. Ул ошонан да мөһимерәк эше булмаған кеүек ихлас итеп өйрәтте лә боролошҡа тиклем оҙатып ҡуйырға булды. Һөйләшеп киттек. «Илегеҙ шундай матур», — тиеүемә ҡаршы: «Ә миңә оҡшамай», — тип яуапланы. Бара биргәс: «Миңә Урал оҡшай», — тип хыялланған кеүек әйтеп ҡуйҙы. Аптырап киттем, сөнки Уралдан ғына түгел, хатта Рәсәйҙән икәнемде лә әйтмәгәйнем. «Унда булғанығыҙ бармы әллә?» — тип һораным. «Юҡ, күптән түгел ҡышҡы Урал буйлап саналарҙа сәйәхәт тураһында телевизорҙан ҙур тапшырыу булды. Бына ҡайҙа ул ысын матурлыҡ!»

«Уралда йәшәгән ҡарттарҙың теләһә ҡайһыһы һеҙҙең менән шатлана-шатлана алмашырға риза булыр ине», — тип әйтергә йыйындым да туҡтала ҡуйҙым. Ауылдағы өйөн ташлап хатта ҡалалағы балаларына ла күсеп килергә теләмәгән, тыуған төйәгенән айырылғас, толҡа таба алмаған инәй-олатайҙар иҫкә килеп төштө. Боролошҡа етәрәк алсаҡ күңелле бабай хәйерле юл теләп тороп ҡалды, ә мин уның янынан Тыуған илемә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо менән киттем.

## ҺОҠЛАНҒЫС ТА, СӘЙЕР ҘӘ...

Голланд халҡы төрлө телдәрҙә һөйләшә. Инглиз телен әйтеп тә тораһы юҡ. Ә инде был телдә ҡыйынһынныбыраҡ ҡалғаныңды абайлау менән испан, француз, португал тип тиҫтәләрсә телдәрҙе һанап китәләр. Бер нисә кеше рус телендә һөйләшеп ҡарап, белемдәренең кимәлен самалар өсөн үҙҙәре университетта мине килеп тапҡайны. Кинотеатрҙарҙа барған сит ил киноларын да тәржемә итмәйҙәр, улар субтитрҙар менән бара. Быны уларҙың донъяның төрлө тарафтары менән сауҙа итеүҙәре, туристарҙың күплеге менән дә аңлатырға мөмкин булыр ине. Шулай ҙа төп сәбәп уларҙың донъяға асыҡ булыуы һәм киң күңеллелегендәлер, тим. Алсаҡлыҡтары йорт тәҙрәләренән дә күренеп торған кеүек миңә. Хатта боронғо йорттарҙа ла тәҙрәләр ҙур, улар үтә күренмәле ҡормалар менән генә ҡапланған.

Голландтар һыуыҡҡа бик сыҙам. Ноябрҙә университетҡа китеп барам. Ҡарлы ямғыр яуа, әсе ел. Ныҡ итеп кейенгәнмен. Эргәмдә өлкән генә бер ҡарсыҡ, аяғында еп носки менән туфли, башы яланғас. Миңә ҡарап йылмайған булды ла: «Һалҡынса», — тип ҡуйҙы. Мин һалҡын Рәсәйҙән килеп, ҡыпыштай кейенгәнмен. Өйҙәрендә лә, экономия тип, ныҡлап йылытмайҙар. Йоҡо бүлмәһендә, ғөмүмән, 19 градус йылылыҡ булһа, эҫе тип зарланғандарын ишеткәнем булды. Башта был мине ныҡ ғәжәпләндерә ине. Аҙаҡтан, улар беҙҙең кеүек температураның шул тиклем айырмаһынан (йәйгеһен — 30 градус эҫелек, ҡыш — 30 градус һыуыҡлыҡ) йонсомағанға күрә шулайҙыр, тип һығымта яһап тынысландым.

Бында йәш буйынса ла, төҫ буйынса ла, кейем буйынса ла дискриминация юҡ. Улар хатта һинең аҡылыңа ла ҡарамайҙар. Бары кеше булғаның өсөн генә лә ихтирам итәләр. Был ныҡ рәхәт һәм ошо рәхәткә тиҙ өйрәнәһең икән. Үҙебегә кире ҡайтҡас, миңә иң ҡыйыны шуны юғалтыу булды.

Голландтарҙың иҫәпселлеге инде үҙе бер лаҡап. Күршеләре улар тураһында бына ҡайһылай әсе көлә. «Бельгияны үтеп, Голландияға килеп ингәнеңде нисек белергә?» — тип һорай, ти, берәү. «Әгәр ҙә һыйырҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда матурыраҡ була башлаһа һәм кер бауҙарында

йыуып ҡуйылған бәҙрәф ҡағыҙҙары кибеп торһа, Голландия булыр», — тип яуаплай икенсеһе.

Бөтә таныштарымдың да ихлас һәм ярҙамсыл булғанын күргәс, башта мин был лаҡаптарҙы ишетеп ышанмағайным. Аҙаҡтан уларҙың ҡайһы бер сәйер күренгән ҡылыҡтарын аңлай башланым. Мәҫәлән, бер көндө күрше ҡалала йәшәгән дуҫыма ҡунаҡҡа йыйынам. «Хәҙер юлға сығам», — тип шылтыратҡас, ул: «Һин беҙҙең менән киске аш ашайһыңмы?» — тип һораны. Ҡунырға барырға йыйынғас, был бик сәйер тойолдо. Юл буйы шул турала уйлап, ҡылтая биреп барып керҙем. Уның һәйбәт кеше икәнен белгәнгә күрә, күңелдә төйөн ҡалдырмаҫҡа була, туп-тура һораным. «Бәлки, һин өйҙә ашап өлгөргәнһеңдер. Ә мин, һиңә лә иҫәпләп әҙерләһәм, мине рәнйетмәҫкә була ашарһың да, үҙеңә ҡыйын булыр, фигураң боҙолор. Ашамаһаң, ул ризыҡты ташларға тура килер, тип уйланым», — тип ябай ғына аңлатып бирҙе. Ысынлап та, бында ҡалған ашты ҡабат йылыта торған ғәҙәт юҡ, ташлайҙар. Минең фигурамды ҡайғыртыуы ла раҫ. Шулай итеп, дуҫымдың был һорауында ҡарунлыҡтың бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ икәнен белеп тынысландым.

Икенсе тапҡыр былай булды. Октябрь аҙаҡтарында бик ҡаты ауырып киттем. Дөйөм ятаҡта бер яңғыҙым. Был ваҡытта дуҫым Нани уҡыуын тамамлап, Индонезияһына ҡайтып киткәйне инде. Балалар менән һөйләшер өсөн компьютер тоҡандырырға ла көсөм юҡ. Телефондан хәлемде белешеп торған ҡыҙым Анни де Йонгка хат яҙған. «Әсәйем ауырый, тик бер кемде лә борсорға теләмәй». Анни телефондан шылтыратып һорашты ла, был — грипп, тигән һығымтаға килде. «Һут, төрлө үләндәрең бармы?» — тип һорай. Бар. Әйтергә кәрәк, был илдә рецептһыҙ бер дарыу ҙа һатылмай. Кураторым: «Мин үҙем дә үткән аҙнала тап һинең кеүек ауырыным. Врач саҡыртҡайным, ул дарыу эсмәҫкә ҡушты. Бөтә ул, ятып ҡына тор. Иртәгә тағы шылтыратырмын», — тиеү менән сикләнде. Төндә температурам тағы ла нығыраҡ күтәрелгәс, Анни-Мариға шылтыраттым. Уларҙың дөйөм ятағы университет эргәһендә, байтаҡ алыҫ. Метро туҡтар ваҡыт етеп килә. Икенсе көндө иртәнге сәғәт туғыҙҙа Джозеф менән икәүләшеп Африканан алып килгән әллә ниндәй дарыуҙарын, емеш-еләк, һуттар тотоп ишегем төбөндә торалар ине инде. Сәй эсеп, һөйләшеп ултыра

биргәс, хәлемдең еңеләйгәнен тойҙом. Улар ҡайтырға йыйынғанда: «Былдай ваҡытта Африкала беҙ кешене яңғыҙ ҡалдырмайбыҙ. Алып ҡайтып ҡарайбыҙ. Тик бында ундай мөмкинлегебеҙ юҡ», — тип ғәфү үтенделәр. Аҙаҡтан Анниға был хаҡта һөйләгәс: «Дуҫтарың иҫ киткес һәйбәт. Бәхетең бар», — тип һоҡланды. Ә Анни-Мари иһә: «Беҙ — ғәҙәти. Ә улар үҙҙәре йылымыс», — тип комментарий бирҙе.

Уларҙың ныҡ иҫәпсел булыуын күрһәткән тағы бер күренеш. Бында, ҡайҙа ҡарама, иҫке әйберҙәрҙе һаталар. Ә королеваларының тыуған көнөнә арналған байрамда тотош ил шундай баҙарға әйләнә. Балалар — иҫке уйынсыҡтарын, өлкәндәр өйҙә кәрәкмәгән бөтә әйберҙәрен сығара. Ҡайһы бер нәмәләренә ҡарап: «Быны нимә тип ташламай һаҡлайҙар икән?» — тип аптырарлыҡ. Күпме генә һаталарҙыр, ҡараңғы, әммә бөтәһе лә ғәйәт ҡәнәғәт булып таралыша. Әйткәндәй, был көндө иҫке-моҫҡо ғына һатмайҙар, кем ниндәй һөнәре бар, шуны эшкә егә. Кемдер йырлай, кемдер фокус күрһәтә, һүрәт төшөрөп һата. Бер дүрт йәштәр тирәһендәге малайҙың мәғәнәле ҡарап тапанғанына иғтибар иттем, быяла шешә онтап һалған да, йәнәһе, шуның өҫтөнән ялан аяҡлап йөрөп ята. Эргәһендәге эшләпәгә бер нисә цент ташлағас, ҡыуанғаны! Минеңсә, был байрам балаларға аҡса эшләргә өйрәтеүе менән ҡиммәт. Голландтарҙың сауҙаға маһирлығы, бәлки, бына ошо бәләкәй саҡта эшләп тапҡан тиндәрҙән башланалыр.

Көнкүрештәге ҡаты тәртип һәм ябайлыҡ — протестант диненең йоғонтоһо. Шул уҡ ваҡытта бында милли берҙәмлек бик көслө. Компромисс — бөтәһе өсөн дә файҙалы һәм асыҡ маҡсаттарға ирешеү — был бәләкәс кенә илдә тереклек итеү, уны һыу аҫтына ҡалдырмау өсөн туҡтауһыҙ көрәш, һыуҙы ҡоротоп, биләмәләрҙе киңәйтеү өсөн кәрәк. Былар барыһы ла үҙ-ара ярҙамлашып һәм килешеп эшләүһеҙ мөмкин түгел, әлбиттә.

Голландияла «Кешелекле социализм», тип әйтергә мөмкин. Бында һалымдар бик юғары — байҙар байлыҡтарын ярлылар менән бүлешә. Әлбиттә, улар ыңғырашмай ҡалмайҙыр, әммә социаль ризаһыҙлыҡ тыуҙырып, бунттан ҡурҡып йәшәгәнсе, ярлыларҙы аҫрау хәйерлерәк тип иҫәпләйҙәр, күрәһең.

Шул уҡ ваҡытта социаль контроль көслө, йәғни күршеләр ҙә, урындағы хәүефһеҙлек органдары ла һәр кемдең талап ителгән «ҡыҫымда» йәшәүен күҙәтә.

Мәҫәлән, Рәсәйҙә йыш булған бер танышым беҙҙең подъездарҙағы бысрыҡлыҡ тураһында һүҙ ҡуҙғалғас: «Ә беҙ бит тәртипте үҙебеҙ хәстәрләйбеҙ. Үҙебеҙ подъезд йәки эргә-тирәне алмашлап йыйыштырабыҙ. Кем дә булһа был тәртипте боҙа ҡалһа, дөйөм талапҡа буйһонмай башлаһа, ул беҙҙең арала йәшәй алмаясаҡ һәм тиҙҙән үҙе китергә мәжбүр буласаҡ», — тигәйне. Икенсе берәү Амстердам үҙәгендәге бер күркәм йортта рус ғаиләһенең йәшәй башлағаны, әммә уның алдын матур тота, сәскәләр үҫтерә алмағандары өсөн китергә мәжбүр булғандары тураһында һөйләгәйне.

## СӘФӘРҘӘР

Анни-Мари Франциянан машинаһын алып килде. Йыл буйына уның был йәтеш кенә «авто»һында ҡайҙарға ғына барманыҡ: Утрехтты, Роттердамды, Гааганы барып күрҙек.

Гаагала иң хәтерҙә ҡалғаны: Мадюродам — кескәй генә Голландия тап һинең аяҡ аҫтыңда йәйрәп ята. Үҙеңде ысын мәғәнәһендә лилипуттар илендәге Гулливер итеп тояһың. Иң тәүҙә уның бәләкәйлегенә аптырайһың, тик ҡарай башлаһаң, әллә нисәмә сәғәттең үтеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Бөтә макеттар ҙа 1:25 күләмендә эшләнгән. Шуныһы ҡыҙыҡ, бында бөтә нәмә лә сәғәт кеүек эшләп тора: тимер юлдарынан уйынсыҡ поездар елдерә. Йылға уртаһында янып киткән кораблгә янғын һүндереүсе катер ашыға. Деталдәрҙә лә хайран ҡалдырғыс теүәллек. Рембрандт музейының бер тәҙрәһенән үрелеп ҡараһаң, стенала эленеп торған «Төнгө ҡарауыл» картинаһын күрәһең.

## АУЫЛ

«Голланд ауылына барғыбыҙ киләме? — тип һораны бер көн Анни-Мари. — Африкала танышҡан бер дуҫым әле әсәһе янына ҡайтҡан. Ул мине үҙҙәренең фермаһы-

на саҡыра. Дуҫтарымды ла алып килергә рөхсәт һораным. Тик... — тине лә миңә ҡараны. — Улар сусҡа үрсетә. Һин унда барырға теләрһеңме?»

«Борсолма, теләрмен», — тинем.

Шәмбе көндө иртән сығып киттек. Голландия үлсәмдәре буйынса байтаҡ ҡына барырға тура килде. Матур-матур ҡалалар, ауылдар эргәһенән үтәбеҙ. Барып етәрәк кенә бүләк тураһында онотҡаныбыҙ башыбыҙға барып етте.

Юл буйындағы бер баҡсасылыҡ магазинына туҡтап, шау сәскәлә ултырған матур гөл һатып алдыҡ. Голландтар гөлдән туймай ул.

Бына бер мәл урман эсендә урынлашҡан ыҡсым ғына ауылға барып индек.

Анни-Мариҙың дуҫының исеме Элс, Элс ван дер Веккен. Ул 1997 йылда Буркина-Фасоға киткән. Алты йыл бәләкәс кенә ауылда шәфҡәт туташы булып эшләгән. Унан Африканың көнбайышындағы Гвинея Республикаһына күскән. Уның баш ҡалаһы Конакри эргәһендәге ауылда шулай уҡ шәфҡәт туташы булып эшләй. Әле һаулығын нығытырға һәм әсәһенең хәлен белергә ҡайтҡан. Ныҡлап сәләмәтләнеп бөтмәһә лә, кире Африкаға атлыға. Үҙен унда бәхетлерәк тоя. Әсәһе лә унда бер нисә тапҡыр барып, ҡыҙының һәйбәт кешеләр араһында йәшәгәнен, унда хөрмәт ҡаҙанғанын күреп ҡыуанып ҡайтҡан.

Ихаталарына тотош таш түшәлгән, ҡайҙа ҡарама сәскәләр үҫкән ике ҡатлы күркәм йорт алдына килеп туҡтаныҡ. Оҙон буйлы, асыҡ йөҙлө Элс йүгереп сығып ҡаршы алды. Шунда уҡ өҫтәл артына саҡырҙы. Мул итеп әҙерләнгән. «Африка тәрбиәһе», — тип ҡуйҙы Анни-Мари шым ғына. Табын артында Буркинала бер-береһенең ауылына ҡунаҡҡа йөрөшкәндәрен хәтерләп, бер ваҡиғаны һөйләп көлөшөп алдылар.

Бер мәл террасала ултырһалар, ыҫылдаған тауыш ишетеп ҡалалар. Йылан ишек төбөнә үк килеп еткән дә, былар ярҙам һорап ҡысҡырғансы, өйгә инеп тә юғалған. Ҡыҙҙарҙың тауышына ҡара сорнай малайҙар менән үҫмерҙәр таяҡтар тотоп йүгерешеп килеп етә. «Аҡ»тарға үҙҙәренең батырлығын, йыландан тамсы ла ҡурҡмағандарын күрһәтер өсөн эй елдерешеп йөрөгән булалар. Ниһайәт, өлкәндәрҙән берәүһе йыланды табып үлтерә.

Тамаҡ туйҙырғандан һуң хужалыҡты ҡарарға сыҡтыҡ. Элстың ағаһы ҙур тракторға картуф сәскес тағып, эргәләге баҫыуға төшөргә йөрөй. Алыҫ түгел ике йөҙ илле баш сусҡа торған ҙур һарай. «Еҫ бар инде ул», — тип ҡат-ҡат ғәфү үтенһәләр ҙә, ул-был һиҙелмәй. «Зинһар, мине аңлағыҙ. Аҙбарға һеҙҙе индерә алмайым. Сусҡалар бит бала кеүек, инфекция йоғорға ғына тора», — тине хужа. Тәҙрәнән генә ҡараныҡ. Эш тулыһынса компьютерлаштырылған. Күпме һыу, күпме ризыҡ, витамин бирергә — барыһы ла хисаплы. Ҡомһоҙораҡтар артығын һорай башлаһа ла, компьютер рөхсәт итмәһә, ашау юҡ. «Их, миңә лә шундай бер компьютер кәрәк ине», — тип ҡуйҙым. Рәхәтләнеп көлдөләр.

Сусҡанан башҡа, бер нисә гектар ерҙәре бар. Күбеһендә картуф үҫтерәләр. Асылда, Элстың ағаһы яңғыҙ эшләй, ҡайһы берҙә генә ҡатыны менән әле мәктәптә уҡыған улдары ярҙамлаша. «Дөрөҫөн әйткәндә, эш үҙемә лә етмәй. Сусҡаны тағы ла күберәк тоторға булыр ине, — ти ул төҙөлә башланған яңы аҙбар яғына ымлап. — Хөкүмәт киңәйеп китергә рөхсәт итмәй. Шуға күрә ҡайһы бер таныштарым Канадаға китеп эш башланы».

Урманға сығып ураныҡ. Шунда ауылды уратып алған тимерсыбыҡҡа иғтибар иттем. Ҡабан сусҡалары килеп йонсота икән. Ҡайһы бер көндө иң матур сәскәләреңде ауҙарып, ишек алдын болартып сығып китәләр, тип зарландылар. Шул тәртипһеҙҙәрҙе саҡ ҡына булһа ла өркөтөр өсөн тимерсыбыҡ аша көсһөҙ генә ток ебәрелгән.

Был ҡунаҡсыл ғаиләлә тағы ла бер нисә сәғәт булғандан һуң, рәхмәт әйтеп хушлаштыҡ. Ә был юлдарҙы яҙғанда Анни-Мариҙан хат алдым. Ул: «Әсәһе ауырып киткәс, Элсҡа ҡайтырға тура килде. Европалағы тормошҡа өйрәнеп китә алмай ыҙалай», — тип яҙған.

## ФРИЗЛАНД

Фризланд — Нидерландтың төньяғындағы провинция. Уйһыулыҡта ята. Ерҙәренең бер өлөшө диңгеҙ кимәленән күпкә түбән һәм провинция биләмәләренең яртыһын тиерлек кеше диңгеҙҙән яулап алған, киптерелгән ерҙәр. Беҙ бында көнө буйы велосипедта йөрөнөк. Танһығыбыҙ ҡанғансы, аяҡтан йығылғансы. Ысынлап та бында ысын

ауылдар, хатта тиҙәк еҫе аңҡып тора. Баҫыуҙарын мул итеп ашлағандар. Ҡайҙа ҡарама, фриз һыйырҙары рәхәтләнеп утлап йөрөй.

Борон-борондан бында фриздар йәшәгән. Улар үҙҙәренең үҙенсәлекле мәҙәниәтен һаман да һаҡлай. Үҙ баһаларын бик яҡшы белгән халыҡ. 1345 йылдағы бер алышта голланд феодалдарын еңгәндәре менән әлегә тиклем ғорурланалар һәм йыл һайын шул көндө байрам итәләр. Ваҡыт-ваҡыт бойондороҡһоҙ, үҙаллы йәшәү тураһында ла һөйләп алалар. Елкән спорты ныҡ үҫешкән, үҙенсәлекле кәмәләрҙә ярыштар үткәрелә, һайғау менән һикереү, ҡош йоморҡкаларын эҙләү кеүек мәҙәктәр бар. Бында айырыуса Германиянан килеп күп ял итәләр. Фрисландтың һигеҙ ҡалаһы аша конькиҙа йүгереүселәрҙең марафоны ныҡ популяр.

Ғәжәйеп матур тәбиғәт: Фриз күлдәре, төньяҡта боронғо замоктар, дамбалар, көньяҡ-көнсығышта Фриз урманы.

## ГЕРМАНИЯ: БОНН

Немецтарҙы, ғәҙәттә, һыҡмырыраҡ, иҫәпсел, һалҡын, тәкәббер тип күҙ алдына килтерһәк, Томас Каут — шуларҙың тап киреһе. Хәйер, был халыҡҡа хас теүәллек, таҙалыҡ унда ла баштан ашҡан, өҫтәүенә, йомарт, ҡунаҡсыл, кешелекле һәм ихлас. Тағы ла унда ҙур милләт вәкилдәренә хас эрелек юҡ. Мәҫәлән, аҙ һанлы милләттәрҙең тәржемәселәрен боронғо йәһүд теленә өйрәтеү — Рәсәй Библия йәмғиәтенең тарихында булмаған хәл. Был — Берләшкән Библия йәмғиәттәренең милли проекттарға консультанты доктор Томас Кауттың тәҡдиме һәм тырышлығы менән ойошторолған. Шуға күрә беҙҙе Изге Яҙмаларҙың күп өлөшө яҙылған боронғо йәһүд телендә уҡыттылар ҙа инде. Ҡырҡ биш йәшкә етеп барған бер осетин, ике бүрәт, ике башҡорттоң был телде үҙләштерә алырына ҡайһы берәүҙәр бик ныҡ шикләнгәндер, күрәһең. Хатта йәһүд теле теорияһынан уҡытыусыбыҙ асыҡтан-асыҡ: «Һеҙ, ысынлап та, үҙегеҙҙең телегеҙгә Библия кеүек бөйөк китапты оригиналдан туранан-тура тәржемә итә алырығыҙға ышанаһығыҙмы? Минеңсә, был — авантюра», — тип ҡабатлай ине. Бындайҙар байтаҡ булған-

дыр һәм Томастың мажаһына ярайһы ғына тейгәндер, күрәһең. Сөнки беҙҙең биш кешенән торған төркөм беренсе имтиханды бик яҡшы тапшырғас, ул бала кеүек ҡыуанды. Хатта ресторанға алып китте. Артабан был матур йолаға әйләнде. Шуға күрә мин Санкт-Петербург рестарандарын Өфөнөкөләргә ҡарағанда яҡшыраҡ беләм. Баҡһаң, ресторан алҡынғансы ашап-эсеп түгел, ә дуҫтарың менән һәүетемсә һөйләшеп, иркенләп ял итеп була торған урын икән.

Томас Каут теология докторы, күренекле ғалим, шағир. Австралияла йәшәгән осоронда булған ваҡиғаларға нигеҙләнеп яҙылған «Ҡара аҡҡош көнө» романын әҙәбиәт һөйөүселәр ныҡ яратып ҡаршы алды.

Томаста минең өсөн иң ғәжәбе — уның тәрән белемле, донъяға айыҡ ҡарашлы, хатта бер аҙ скептик кешенең бар булмышы менән Аллаға инаныуы булды. Ул ғәйәт тәрән фекерле, бар нәмәгә лә тәнҡит күҙлегенән ҡарай, эшкә килгәндә инде, хатта аяуһыҙ тип әйтергә мөмкин, сөнки бер ниндәй ҙә ташламаға урын ҡалдырмай. Кешеләрҙе милләтенә һәм диненә түгел, рух яҡынлығына, күңеленә һәм выжданына ҡарап айыра. Ошо йылдар эсендә беҙ, тәржемәселәр, уны хәстәрлекле етәксе итеп тә, ғәҙеллек өсөн теләһә ҡайһы минутта ең һыҙғанып көрәшергә һәм ярҙамға килергә әҙер торған ғәҙел хеҙмәттәш итеп тә белә алдыҡ.

Һәм бына мин Боннға, Томас Каутҡа һәм уның ғаиләһенә ҡунаҡҡа китеп барам.

Амстердамдан Базелгә барған поезға ултырҙым. Был ҡала ун туғыҙынсы быуаттағы рус әҙәбиәте классикаһын, Тургеневты, Достоевскийҙы хәтергә төшөрҙө.

Бер станцияла вагонға күңелле геүләшеп 40-лаған — «әбей-бабайҙар» тип әйтергә тел әйләнмәй — хаҡлы ялдағы өлкәндәр килеп тулды. Моғайын, бергәләшеп ялға китеп баралар ҙыр, әйберҙәре күп — хәтәр ҙур ҡупшы сумаҙандар. Араларында хәрбиҙәргә оҡшап, туп-тура һынлы, йәш сырайлыһы етәкселәрелер, күрәһең, барыһына ла ярҙам итеп, хәстәрләп урынлаштырҙы. Телдәрендә Швейцария, Базель... Күңелдәре күтәренке. Сын яһауҙан кейенгәндәр. Зәңгәрһыу-аҡ йәки аҡһыл шәмәхә сәстәренә, әйтерһең дә, яңы ғына парикмахер тарағы ҡағылған. Ҡулдарында маникюр. Европала өлкән йәштәгеләр үҙ ҡәҙерҙәрен белә. Ҡиммәтле кейем-һалым магазиндарында башлыса уларҙы осратаһың. Беҙҙә бит әбейҙәр, ҡар-

тайғас, яраған инде, үлһәң, әрәм булып ҡала, тип үҙе үҙенән яңы кейем йәлләй. Ә былар, бер нисә әхирәт йыйылышып киләләр ҙә, сыуылдашып береһен, икенсеһен, өсөнсөһөн кейеп ҡарайҙар. Һатыусылар ҙа улар янында өйрөлөшөп йөрөй, һатып алһындар тип кенә түгел, ысынлап та килешкән, зауыҡлы әйберҙәр булһын, тип тырыша. Шундай магазиндарҙың береһе беҙҙең университет эргәһендә генә урынлашҡан. Бер нәмә лә һатып алмаһам да, унда инеп, ысынлап та сифатлы һәм зауыҡлы әйберҙәр ҡарарға һәм ошо матур, бәхетле ҡартайып килгән кешеләрҙе күҙәтергә яратам. Бер мәлде костюм һайлаған өлкән йәштәге бер ханым фекеремде һораны. Һөйләшеп киттек. Ул уйҙарымды аңлаған һымаҡ: «Йәш ваҡытта былай ҙа матурһың. Ә өлкәнәйгәс, үҙеңде нығыраҡ ҡарарға тура килә. Тешһеҙ ауыҙың, сөрөш-мөрөш битең менән донъяның йәмен ебәреп йөрөргә ярамай бит инде, — тине. — Мин хәҙер иренемде буямайынса хатта бәҙрәфкә лә бармайым», — тип шаяртты. Ғәҙеллек өсөн әйтергә кәрәк, улар, әлбиттә, аҡсалы ла, социаль йәһәттән дә яҡлаулыраҡ. Шунан, Рәсәй ҡарттарынан айырмалы рәүештә, етеп бөткән бала-сағаларын ғүмер буйы үҙ елкәләрендә аҫрамайҙар. Бында балалар бәлиғ булыу менән итәктән төшә. Ғәҙәттә... Тормош булғас, әлбиттә, төрлөһө барҙыр. Хәйер, ситкәрәк киттем.

Юл буйы тышҡа түгел, уларға ҡарап барҙым. Ҡаршымдағы бер парға иғтибар иттем. 70—75 йәштәрҙәге был икәү етәкләшеп кенә ултырғандар ҙа һүҙһеҙ генә тәҙрәгә ҡарап киләләр. Ара-тирә бер-береһенә ҡарашып ниҙер һөйләшеп алалар. Ҡараштарында — ихтирам һәм яратыу. Әйткәндәй, Голландияла бындай парҙарға йыш ҡына иғтибар иткәнем бар. Өлкәнәйгәнсе һаҡланып ҡалған матур тойғоларҙан һис тә оялмай һәм бер-береһенең ҡәҙерен аңлап ҡалған ғүмерҙе бәхетле итеп йәшәй белгән был кешеләргә ысын мәғәнәһендә тәрән ихтирам уяна. Бер бөҙрә сәсле ханым ныҡ йор һүҙлелер, күрәһең, ул ауыҙын асып берәй нәмә әйтеүе була, геүләшеп көләләр. Голланд телен аңламайым, шуға күрә тирә-яҡта һөйләшкәндәрен тыңларға яратам. Бында үҙенә күрә бер ылыҡтырғыс тылсым бар. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен түгел, ә эске моңон, һөйләшеүселәрҙең интонацияһын тыңлайһың да уларҙың яҙмышын, үҙ-ара мөнәсәбәтен, әле нимә хаҡында һөйләшкәндәрен фараз итәһең.

Бер мәл хатта ҡыҙыҡ хәл булды: ике йәш кенә ир менән ҡатын ниҙер һөйләшеп бара, тауыштары йомшаҡ, ылыҡтырғыс, әллә ниндәй серле нәмә хаҡында гәпләшәләр һымаҡ. Шул саҡ улар ҡапыл төрөксәгә күсте һәм тылсым юғалды — был икәү сығымдарын һанап, әрләшеп китеп барған булып сыҡты.

Шулай итеп, юлда бер нисә сәғәт барған һиҙелмәй ҙә ҡалды.

Бонноға бара торған электричкаға ултырыр өсөн Дюссельдорфта төшөп ҡалдым. Ә улар, ҡартлыҡтың да шатлыҡ була алғанын раҫлағандай, күңелле сөкөрләшеп юлдарын дауам итте.

Ун биш минуттан Бонноға барған электр поезына ултырҙым һәм ярты сәғәт тигәндә килеп тә еттем. Томас перронда көтөп тора ине инде. Иң башта ул үҙенең офисына алып барҙы. Бөтөн стеналары китаптар менән тулы ҙур булмаған бүлмәлә минең уҡыуым һәм тәржемәләр тураһында һөйләшкәндән һуң ул өйөнә, төшкө аш һәм танышыу мәжлесенә саҡырҙы.

— Катя бешеренеп тороп ҡалды, — тине ул. Томас менән Катяның өс балаһы бар. Бруно, Леонард һәм Тамара... Ул саҡта барыһы ла уҡыусылар ине. Ҡунаҡ килеү хөрмәтенә бөтәһе лә йыйылған. Ҡунаҡ бүлмәһе лә, зал да, китапхана ла, ашхана ла бурысын үтәгән беренсе ҡаттағы ҙур бүлмә зауыҡлы ла, ҡотло ла, йәмле лә. Бөтә ерҙә лә уңған һәм аҡыллы хужабикәнең хәстәрлекле ҡулы күренә. Катя, сәстәренә сал төшә башлаған, оҙон, зифа буйлы, аҡыллы ҡарашлы ҡатын, етеҙ өйрөлөп өҫтәл әҙерләй. Шул арала аяҡ аҫтында уралған йөнтәҫ бесәйгә лә наҙын бүлеп өлгөрә.

Катя менән Томас сағыштырмаса өлкәнәйгәс — бигерәк тә беҙҙең Рәсәй ҡарашынса — табышҡан. Яңғыҙлыҡтың да, бәхет көҫәүҙең дә тәмен татып, үҙ-үҙҙәрен һынап һәм был тормоштан нимә теләгәндәрен, нимәнең ҡиммәт икәнен аңлап өйләнешкәнгә күрәлер, бер-береһен ғәйәт ихтирам итәләр һәм ҡәҙерләйҙәр. Бер ваҡыт Томас: «Яңғыҙ ҙа бәхетле була алған, «самодостаточный» (ғәфү итегеҙ, тап уның һүҙен ҡулланғы килә) ике кешенең союзы ғына ысын мәғәнәһендә ныҡ һәм бәхетле була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күпселек үҙ-үҙен бәхетле итә алмаған, йәм тапмаған, үҙ комплекстарын, етешһеҙлектәрен башҡа кеше иҫәбенә хәл итеп, башҡаны ыҙалауҙан ләззәт табыр өсөн ҡушыла», — тигәйне. Был мине тәрән уйға һалды. Ул бит ысынлап та хаҡ. Беҙ, мәҫәлән,

көнләшеү — ул яратыу, тип үҙебеҙҙе тынысландырырға тырышабыҙ. Хатта тағы ла ҡырағайыраҡ: «Яратҡанға туҡмай» һ. б. тигән кеүегерәк фекерҙәбеҙ. Ә бит хәҙерге донъяла, ысынлап та, татыу ғаилә ҡороу өсөн бер-береңә ихтирамға нигеҙләнгән партнерлыҡ мөнәсәбәттәре мөһим.

Һүҙ ыңғайында Томастың һөйөү тураһында мине бик нык уйға һалған бер фекерен дә хәтергә төшөргөм килә. «Беҙ йыш ҡына һөйөүҙе тойғо тип ҡабул итәбеҙ. Тойғо һүнгәс, һөйөү үтә, тип иҫәпләйбеҙ. Ә был бит дөрөҫ түгел. Һөйөү ул — эш. Тормош иптәшеңде яратырға теләйһең икән, һин уны бәхетле итер өсөн нимәлер эшләргә тейешһең», — тине һәм Инжилдан ниндәйҙер юлдар уҡыны.

Бына шундай тәрән тойғоларға һәм айыҡ аҡылға нигеҙләнгән был ғаиләнең ысынлап та бәхетле йәшәгәне балаларҙан күренеп тора. Ғәҙәттә, мин балаларҙың ата-әсәләренә ихтирамы бармы-юҡмы икәнен уларҙың ҡунаҡтарына булған мөнәсәбәтенән һынайым. Етеш йәшәгән, ярты донъяны гиҙеп сыҡҡан ун ете, ун биш йәшлек немец егеттәре өсөн ҡайҙандыр алыҫ Уралдан килгән башҡорт тәржемәсеһе кем генә инде тип ҡарарға мөмкин. Ә улар ихлас итеп бер табында ултыра, ысынлап та ҡыҙыҡһыныуҙары ярылып ятҡан һорауҙар бирә, үҙҙәренең хыял-ынтылыштарын һөйләй, һәүетемсә әңгәмәлә ҡатнаша. Иркә генә төпсөк ҡыҙ Тамара ятҡан бесәйен тубығына һалып, үҙенең мәктәп хәлдәрен һөйләй. Был атайыңдың тормошон, һөнәрен, ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм булмышын, дуҫтарын ысын күңелдән хөрмәт иткәндә генә шулай була.

Аҙаҡтан Томас мине ҡала күрһәтергә алып китте. Юл ыңғайында әйберҙәремде ҡунаҡханала ҡалдырҙыҡ.

Бонн 1949 йылда Көнбайыш Германияның баш ҡалаһы булып китә. 1991 йылда ҡала был дәрәжәне Берлинға бирә.

Бонн университетында Генрих Гейне, Карл Маркс уҡыған.

Бонн үҙенең университеты менән ғорурлана һәм тыныс ҡала тигән данын һаҡлай. Бында йорттар, күпселектә, бейек түгел, йыш ҡына черепица менән ябылған. Ҙур балкондар күп, ҡыйыҡта бәләкәс кенә баҡсалар үҫтерергә яраталар. Урамдарға таш түшәлгән, был үҙенә күрә бер күркәмлек бирә.

Боннда 1770 йылда бөйөк композитор Бетховен тыуған. Ул йорт һәм йәш Людвиг органда уйнарға йөрөгән сиркәү һаман да бар. Ҡалала боронғо биналарҙың күркәмлеге, тарих һулышы, бөйөк ваҡиғалар тураһындағы хәтирәләр хас та ауылдағыса һиллек менән йәнәш йәшәй.

Бына Бетховендың һәйкәле. Яҡында ғына Рейн йылғаһынан, уттарын йылҡылдатып, туристар ултырған теплоход үтеп бара. Эргәләге концерт залынан ниндәйҙер аһәңле музыка яңғырай. Шунда ғына Томастың ни өсөн шул тиклем классик музыкаға мөкиббәнлеген һәм Санкт-Петербургҡа килгән һайын Мариинский театрындағы һәр премьераны ҡарап ҡалырға тырышҡанын аңлайым.

Оҙон булһа ла, һөйләйем әле. Уның опера тыңлауы бик үҙенсәлекле. Тамаша башланыу менән күҙен йома һәм тик ҡолаҡҡа ғына әйләнә. Декорациялар, артистарҙың хәрәкәттәре операның асылы булған музыканан айыра, ти ул. Ҡайһы мәлдәрҙә уның ойоп киткәнен абайлайһың. Тимәк, сәхнәлә һандуғастай талпынған йырсының артыҡ һәләте юҡ. Ә инде талантлы йырсы ауыҙын асыу була, Томас һиҫкәнеп китә, бөтөн булмышы менән көй артынан эйәрә, ария тамамланыу менән: «Браво! Браво!» — тип моң эйәһен алҡышҡа күмә. Уның хатта театрҙа ла шул тиклем тәбиғи булып ҡалыуы беҙгә башта сәйер тойола торғайны, аҙаҡтан иһә үҙебеҙгә лә күсте. Үҙ-үҙең булып ҡала алған өсөн дә Томас янында һәр ваҡыт күңелгә һил, тыныс.

Ресторандар теҙелеп киткән сауҙа майҙанына килеп еткәс, ул ҡапҡылап алырға тәҡдим итте. Асыҡмаған булһам да, немец аштарын тәмләп ҡарағым килгәнлектән, ҡыуанып риза булдым. Голландияла беҙ йышыраҡ йә ҡытай, япон йәки Индонезия ресторандарына йөрөйбөҙ. Тик һуңғы ваҡытта экзотиканан ялҡыуымды һәм Европа кухняһына өҫтөнлөк биргәнемде тоя башланым. Шәмбе кис булғанға күрәме, халыҡ күп. Шаулашып дуҫтар күрешә, менюҙан геүләшеп ризыҡ һайлай, шарап тәмләй. Минең ғәҙәти тормошом өсөн ят шарттарҙа кешеләрҙе күҙәтеү ныҡ мауыҡтырғыс. Официанттар ел кеүек етеҙ йөрөй, шул уҡ ваҡытта йөҙҙәрендә ихтирам яҙылған. Беҙҙә улар, ғәҙәттә, кешеһенә ҡарап хеҙмәтләндерә. Танауҙары нисектер кеҫәңдәге аҡсаңдың күләмен дә, социаль статусыңды ла бик тиҙ һиҙеп ала. Был ни өсөндөр бигерәк тә Питерҙа күҙгә ташлана. «Донъялағы

бер генә ерҙә лә «дамочка» тигән һүҙҙе бындағылай һине кәмһетерлек итеп әйтә белмәйҙәр», — тип әсенеү ҡатыш шаяртып әйткәйне бер дуҫым. Шул уҡ ваҡытта байҙар һәм власть кешеләре алдында улар лакейҙарса ялағай, хатта үҙҙәрен кәмһетеүҙән дә тартынмайҙар. Былар барыһы ла һүҙҙәрҙән түгел, ҡараштан, һын-ҡиәфәттән күҙгә ташланып тора. Ә Көнбайышта улар үҙ баһаларын белә, шул уҡ ваҡытта уларҙың үҙ-үҙҙәрен ихтирам итеүе һинең иҫәбеңә түгел, шуға күрә лә кәмһетмәй. Ни өсөн шулай — миңә ҡайһы ваҡытта хатта яуап та тапҡанмын кеүек тойола. Тик был турала башҡа берәй ваҡытта. Менюҙан Боннса бешерелгән картуф менән колбаса һайлайым. Томас үҙенең йәш сағында Австралияла йәшәгәнен һәм шул осорҙағы хәлдәргә нигеҙләнгән «Ҡара аҡҡош көнө» романын тамамлағанын һөйләй. Ул — ысын мәғәнәһендә, бөтөн булмышы менән яҙыусы. Ижад хаҡында һүҙ сыҡҡанда күҙҙәре балҡып, йөҙө үҙгәреп китә. Рәсәйҙең үҙ туған телдәрендә яҙышҡан яҙыусыларының хикәйә һәм шиғырҙарын немец теленә ауҙарып, бер йыйынтыҡ туплап нәшер итергә ниәтләүе менән уртаҡлаша.

Тәмле итеп тамаҡ туйҙырғандан һуң яңынан төнгө ҡалаға сығабыҙ. Бетховендың һәйкәле янында торған саҡта һүҙ талант, ижад һәм шөһрәткә күсә. Томас ҡасандыр: «Кешеләрҙең тарих китабында теркәлеүҙең ҡыҙығын күрмәйем. Мөмкин булһа, мин Раббының исемлегендә булырға теләр инем», — тигәйне. Ваҡытында йәнгә тейгән, ә хәҙер мәрәкә тойолған ваҡиға келт итеп хәтергә килеп төштө. Төштө лә уйландырҙы. Бер заман мин эшләгән ойошманың юбилейы айҡанлы коллективта күптәрҙе төрлө почетлы исемдәргә тәҡдим иттеләр. Нимәлер эләгеренә шик һәм битарафлыҡ менән ҡараһам да, хеҙмәттәштәр исемлеккә индергәс, ҡарышып ҡыланманым. Байрам гөрләп үтте. Әлбиттә, бүләкләнеүселәр араһында мин юҡ инем. Өмөтләнеп көтмәгәнгә, быны бер ҡыйынлығы ла булманы. Йыллап ваҡыт үткәс, барыһы ла онотолғас, ни өсөндөр етәксе мине саҡырып алды. «Һин, моғайын, үпкәләп йөрөйһөңдөр, — тип һүҙ башланы ул аптыратып. — Беҙ бик тырыштырҙыҡ. Тик һинең исемеңде, лайыҡ түгел әле, тип юғарынан кире борҙолар». «Ярар, ярар, мин ышанам», — тип баш ҡаҡтым. Вайымһыҙлығым уға ни өсөндөр оҡшаманы. «Ышанмайһыңмы? Бына беҙ һиңә наград а ҡағыҙы ла тултыр-

ғайнык», — тип кулыма тотторҙо. Нимәләр яҙылған икән тип ҡыҙыҡһынып ҡарай башлағайным, етәксенең ҡултамғаһы торорға тейеш урын буш. «Улар мин лайыҡлы булмағанға түгел, ә һеҙҙең ҡултамғағыҙ ҡуйылмағанға кире ҡайтарғандарҙыр ул, моғайын, — тинем көләмһерәп. — Ағай, һеҙ борсолмағыҙ. Бирмәҫкә ҡулығыҙҙан килгән саҡта, миңә бер нәмә лә эләкмәйәсәген яҡшы беләм. Тик Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң бит. Ул миңә башҡа яҡтарҙан бирһен». Ысынлап та, ул кеше ошо матур ҡаланы, ошо тәьҫораттарҙы, сәйәхәттәрҙе бүләк итә алыр инеме?

Ул арала ҡунаҡханаға килеп еттек. Был боронғо йорттоң ишеген асҡыс менән үҙем асып индем дә өсөнсө ҡаттағы бүлмәмә йүнәлдем. Боронғолоҡҡа хәҙерге заман ҡаҙаныштарын үткәндәрҙең аһәңен боҙмаҫлыҡ ҡына итеп индергәндәр. Стеналарҙа ниндәйҙер Ганс исемле малайҙың, бәлки, бынан йөҙ йыл электер йыйған күбәләктәр коллекцияһы эленгән. Ҡайҙа ул малай? Бәлки, ул әллә Беренсе, әллә Икенсе Донъя һуғышында Рәсәйҙең икһеҙ-сикһеҙ ҡарлы яландарында ятып ҡалғандыр, кем белә? Ярым ҡараңғы коридорҙан бүлмәмә табан атлағанда ошондай моңһоу уй килде. Яҡтылыҡ минән бер аҙым алда ғына тоҡана ла, алға атлау менән арттағы ут һүнә. Шулай ут сылбыры бер янып, бер һүнеп ишегемә тиклем оҙата. Бүлмә бәләкәй һәм йәмле. Ныҡ арытылған булһа ла, ҡыҙыҡһынып телевизор тоҡандырам. Бите бешкән алма кеүек алланып торған һылыу немец ҡыҙы һыйыр һауа, һөттө сепараттан үткәрә һәм ниндәйҙер механизмды ҡулы менән өйрөлдөрөп, май бешергә өйрәтә. Ванна бүлмәһендә уңайлы душ кабинаһы. Стенала мәрәкә картина эленеп тора: бәләкәй кенә негр ҡыҙыҡайы аяҡ ослап көҙгөгә үрелгән дә ҡапҡара битенә пудра һөртөп маташа. Стенаға эленгән яҙыуға күҙем төшә: «Ҡәҙерле ҡунаҡ! Моғайын, һеҙ ҙә беҙҙең тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл мөнәсәбәтебеҙҙе уртаҡлашырһығыҙ. Шуға күрә таҫтамалығыҙҙы иҙәнгә ташламаһағыҙ, ә сөйгә элеп ҡуйһағыҙ, һеҙгә рәхмәтле булыр инек». Уртаҡлашам. Европаның байтаҡ ҡунаҡханаларында күрергә була бындай мөрәжәғәтте.

Иртәнге тамаҡты ҡунаҡханала ашайым. Ашханаға төшөү менән аптырап ҡалам. Ҙур залдың уртаһында олоғара түңәрәк өҫтәл. Унда нимә генә юҡ. Йәшелсә, емешеләктең муллығы шунда уҡ күҙгә ташлана: ананас,

мангонан алып ҡара бөрләгәнгә тиклем бар. Ныҡлабыраҡ эҙләһәң, ҡош һөтөн дә табырға булалыр. Урта ҡул һаналған ҡунаҡханалағы был муллыҡҡа һоҡланып өҫтәл артына ултырыуым була, официант килеп етә: «Сәйме, кофемы? Ниндәй төрө?» һ. б. Ҡунаҡ һыйлай белә немец халҡы! Сәғәт унға Томас килеп етә. Шәмбе көн булыуға ҡарамаҫтан, беҙ көн оҙоно эшләргә тейешбеҙ. Шулай ҙа мин кейем-һалым магазиндарына йөрөр өсөн бер-ике сәғәт ваҡыт һорайым.

Мәңге йәшел ҡыуаҡтар ултыртылған, стеналарына ҡырағай виноград һабаҡтары үрмәләгән матур өйҙәр эргәһенән үргә табан күтәрелгән тын урам буйлап шым ғына барабыҙ. Томас ауыҙ эсенән генә ниҙер көйләйме, һөйләнәме. Йөҙөнән уға илһам килгәнен шәйләйем. Ижадсы өсөн татлыларҙан-татлы булған был мәлдәрҙе үҙемдең дә кисергәнем бар. Ишекте асып инеү менән ул өҫтәленә табан йүнәлә һәм миңә урын күрһәтеп: «Ғәфү ит, ун ғына минут», — тип ҡәләменә тотона. Бер нисә минуттан ул бына әллә нисәмә көн инде яҙған сонетының әле генә тыуған һуңғы юлдарын уҡып күрһәтә. Ҡәнәғәтлек менән балҡып торған илһамлы йөҙөнә ҡарап: «Томас, һин ҡалай бәхетле», — тип әйтеп ҡуям. «Эйе, — ти ул уйсан тыйнаҡлыҡ менән. — Шөкөр, Хоҙай мине ярата».

Йәкшәмбе көндө иртән Томастың ғаиләһе менән сиркәүгә юлланабыҙ. Оҙаҡ йылдар унда хеҙмәт иткән руханиҙы хаҡлы ялға оҙаталар. Был тантанала балалар өсәүһе лә ҡатнаша, ә Томас телмәр һөйләргә тейеш. Ярты сәғәттән һуң Катя менән шым ғына сығып китәбеҙ. Ул мине машинала вокзалға алып барырға һәм поезға ултыртып ебәрергә тейеш.

Барып етеү менән сәйер хәлгә юлығабыҙ, электр поезы егерме минутҡа һуңлаясаҡ, тип иғлан итәләр. Катя мауығып үҙенең эшен һөйләй. Ул үҙҙәренең өйөндә балалар баҡсаһы асҡан һәм унда биш бала йөрөй. Ҡарап тороуға бер ни тиклем һалҡын тойолған сабыр ҡатындың балалар тураһында һөйләгәндә күҙҙәре балҡып китә. «Тормошта һәр кем үҙе яратҡан эш менән шөғөлләнергә тейеш, — ти Катя. — Шул уҡ ваҡытта мин, әсәй буларак, балаларымды ла күҙ-колаҡһыҙ ҡалдырырға теләмәҫ инем. Ә былай, һәр ваҡыт өйҙәмен, ә эшем өйгә килә. Өҫтәүенә, ғаилә бюджетына аҡса ла». Катяның атаһы бөтөн донъяла танылыу алған юрист, халыҡ-

ара хоҡуҡ тураһында унан да төплөрәк белгән кеше һирәк, тиҙәр. Уға донъялағы ҙур-ҙур сәйәсмәндәр, хатта ил етәкселәре кәңәш һорап мөрәжәғәт итә. Ә әсәһе — яҙыусы. Уларҙың ғаиләһендә рус әҙәбиәте культы. Юҡҡа ғына улар яратҡан ҡыҙҙарына Катя тип исем ҡушмаған икән, тип уйлап ҡуям. Ниһайәт, перронға поезд килеп туҡтай. Күңелдә хәүеф: «Дюссельдорфҡа ваҡытында барып етеп, Амстердам поезына өлгөрөп булырмы-юҡмы?» «Поезда иғлан итәсәктәр», — тип тынысландырып, ҡул болғап тороп ҡала ҡунаҡсыл Катя.

## ДЮССЕЛЬДОРФ: ЛИГИЯ

Катяға әйтеүе рәхәт. Немецтар, француздар кеүек үк, күберәк үҙ телдәрендә һөйләшә. Шуға күрә ҡолағымды ҡарпайтып барам һәм иғлан-фәлән булған һайын: «Нимә тип әйтте?» — тигәндәй, тирә-яҡҡа һораулы ҡарайым. Эргәмдә ултырған бер ҡыҙ түҙмәне: «Ҡайҙа бараһығыҙ?» — тип ҡыҙыҡһынды. Уның да минең кеүек үк Амстердам поезына ашығыуын белгәс, тынысландым. Ул арала Амстердам поезының беҙҙе көтәсәге һәм йәнәш перронда торасағы тураһында немец, артабан инглиз телендә иғлан булды. Сығырға ла йүгерергә тип ишек төбөнә барып баҫабыҙ. Сығып та өлгөрәбеҙ, поезыбыҙ ҡуҙғалып та китә. Европала ла шулай булыуы мөмкин икәненә шаҡ ҡатып тороуыма, эргәмдәге ҡыҙҙың: «Башҡа һыймаҫлыҡ! Был ниндәй тәртипһеҙлек!» — тип асыуланғанын ишетәм. Беҙҙең кеүектәр ун бишләгән кеше икән. Улар перронда йөрөгән тимер юл хеҙмәткәрен уратып ала. Немец телендә ҡыҙып-ҡыҙып нимәлер һөйләйҙәр. Ә ул битараф ҡына яурынын һикертеп вокзалдың билеттар һатыла торған яғына ҡул һелтәй. Йәтеш кенә ҡул сумкаһын тәгәрләтеп, шул яҡҡа ашыҡҡан юлдашымдың артынан ҡалмайым. Үҙем: «Эй, Хоҙайым, хәстәрлегең өсөн рәхмәт инде», — тип ҡабатлайым. Ул арала эргәбеҙгә бер ҡыҙ килеп, юлдашымдан: «Һеҙ Эфиопиянан түгелме?» — тип һорай. Һөйләшеү голландса дауам иткәнлектән, башҡаһын аңламайым. Был ҡыҙ ҙа беҙҙең арттан эйәрә. Бына төркөмөбөҙ ниндәйҙер касса алдында туҡтала һәм тағы ла ҡыҙыбыраҡ шаулаша. Мин инде бөтөнләй тынысланып, ситтәрәк баҫып торам.

Яныма яңы юлдаш та килә. Көтәбеҙ. Бына һуңлағандар төркөмө асыулы ҡиәфәт менән таралыша башлай. Эргәмә килгән юлдашымдың борсоулы йөҙөнә ҡарап һорайым: «Киләһе поезд ҡасан була һуң?» Рәсәй ҡиңлектәренә күнеккәнлектән, миндә: «Амстердамға киләһе поезд иртәгә генә буламы икән?» — тигән уй тыуа. «Тағы ла өс сәғәт көтөргә кәрәк!» — тигән төшөнкө яуапты ишетеп көлөп ебәрәм. Ул аптырап ҡарай. «Мин Рәсәйҙән, шуға күрә мажара яратам. Ниңә көйөнөргә? Әле көн үҙәге генә. Донъялағы иң уңайлы вокзалдарҙың береһенең эсендә торабыҙ. Эргәлә генә күркәм ҡала. Әгәр ҙә яҙмыш беҙ өсәүҙе осраштырған икән, ҡабат үҙ юлыбыҙға киткәнгә тиклем рәхәтләнеп, танышып, һөйләшеп ҡалайыҡ. Йәшерен-батырыны юҡ, һеҙ икегеҙ ҙә миңә ныҡ оҡшайһығыҙ. Моғайын, был өс сәғәт беҙгә етмәй ҙә ҡалыр әле», — тип оҙон итеп һөйләп ташлайым. Бындай яуапты көтмәгәйне, ахыры, юлдашым көлөп ебәрҙе һәм инглиз телен бик үк белмәгән икенсеһенә аңлатып бирҙе. Ул да ризалашып йылмайҙы. Эйәртенешеп яҡындағы кафеға табан йүнәлдек.

— Лигия, — тип таныштырҙы юлдашым үҙен. Ул Гаагала йәшәй һәм Бонндағы дуҫтарына танго бейер өсөн ял көндәренә генә килгән. Икенсе юлдашыбыҙ Африканың Эфиопия эргәһендәге Эритрея тигән иленән. Ундағы хәрби болғаныштан Голландияға килеп һыйынған ҡасҡын. Германиялағы дуҫтарына православие сиркәүендә бергәләшеп доға ҡылыр өсөн килгән. Алыҫ Африка ҡыҙының Германия һынлы Германияға рус сиркәүе эҙләп килеүе сәйер тойолдо. Ныҡ һорағым килде, тыйылдым.

Ҡыҙҙар икеһе лә ҡарап туймаҫлыҡ һылыу. Африкалыларҙың төрлөһө була. Быларҙың йөҙҙәре ҡап-ҡара түгел. Бөрмәс сәстәре матур итеп йыйып ҡуйылған. Лигия — Голландия гражданкаһы. Ошонда тыуып үҫкән. Атаһы менән әсәһе алыҫ Африка эргәһендәге бер бәләкәй генә утрауҙан. Атаһы оҫта балыҡсы булған һәм етешерәк тормош эҙләп, алтмышынсы йылдарҙа уҡ Голландияға килгән. «Үҙе бер генә хәреф танымаһа ла, беҙҙе, өс балаһын да уҡытам тип тырышты. Ҡайһы ваҡыт, тиҫтерҙәрем уйнап йөрөгәндә, үҙемдең өҫтәлмә дәрестәргә йөрөргә тейешлегемә ризаһыҙлыҡ белдерһәм, һин үҙеңдең ни тиклем бәхетле икәнеңде аңламайһың, тип башымдан һыйпай торғайны. Иҫ киткес оҫта бейеүсе ине. Мин әле бәләкәй генәмен, ул мине аяғына баҫтыра

ла, аяҡтарын күсереп, бейеү хәрәкәттәренә өйрәтә. Тангоны яратыу ҙа атайымдан», — тип һөйләй Лигия.

Ул атаһының хыялын тормошҡа ашырған. Биш-алты телдә еңел аралаша. Голландияла университет тамамлаған, АҠШ-та бизнесҡа өйрәнгән.

— Минән йыш ҡына, һин Эфиопиянан түгелһеңме, тип һорайҙар. Ҡайһы ваҡыт, эреләнеп, йәшереп маташаһың, тип әрләп китәләр, — тип көлә Лигия. Ул Голландияның артта ҡалған илдәргә ярҙам итеүсе бер хөкүмәт учреждениеһында эшләй. Улар ярлы илдәрҙә бизнес менән шөғөлләнергә, үҙ эшен башлап ебәрергә теләгән кешеләрҙе табып, аҡса менән ярҙам итә. Лигия шул аҡсаның ысынлап та дөрөҫ файҙаланыламы-юҡмы икәнен тикшерер өсөн командировкаларға йөрөй. Шуға күрә Африканың төрлө илдәренә йыш бара.

— Бына был официант ҡыҙ ҙа Эфиопиянан булырға тейеш, — тиҙәр улар бер ҡыҙҙы ҡараштары менән оҙатып. Икенсе тапҡыр беҙҙең менән тәңгәлләшкәндә туҡтатып һорайҙар. Тегеһе раҫлап баш ҡаға. Шунан миңә аңлаталар: Эфиопия ҡатын-ҡыҙҙары еңел һөйәкле, нәфис һәм нәзәкәтле була икән. Ысынлап та, улар икеһе лә ғәйәт талантлы скульпторҙың ҡулдары яратып әүәләгән иҫ киткес нәфис статуэтканы хәтерләтә. Йөҙ һыҙаттары ла нәфис.

Өҫтәлебеҙгә ҡәһүә менән печенье килтереп ултырталар. Эритрея ҡыҙы сумкаһынан пирожкиҙар килтереп сығара: «Дуҫтарымдың күстәнәсенән ауыҙ итегеҙ», — ти ул. Арабыҙҙа иң ярлыһы булһа ла, иң йомарты шикелле ул. Хәйер, аслыҡтың нимә икәнен үҙ елкәһендә татығанлығы тернәксел дә, хәстәрлекле лә итә, күрәһең. Илдәрендә хәрбиҙәр хөкөм һөрөүен, өлкән ағаһының үлтерелеүен, кесеһенең хәбәрһеҙ юғалыуын һөйләй. Кеҫәһенән әсәһенең фотоһын сығара. Моңһоу ҡарашлы, ҡыҙы кеүек үк нәфис һәм һылыу ҡатын бәләкәй генә өйҙөң тупһаһында ултыра. «Әсәйем һаулыҡҡа туймай. Тик яңғыҙ, ярҙамһыҙ ҡалһа ла, минең кире ҡайтыуымды теләмәй. Бер ҡотолғас, бында эш табырға тырыш, тип яҙа», — ти ул. Әле ҡасҡындар өсөн махсус лагерҙа йәшәй һәм эшкә урынлашыр өсөн мотлаҡ кәрәк булған голланд телен өйрәнә. Һөйләшеп ултырған арала, ҡапыл ағарынып китеп, Лигияға һыйыныр ға теләгәндәй ынтыла: «Милитари», — тип бышылдай ул. Эргәнән үтеп барған хәрби кейемле ике егеттең беҙҙә эше лә юҡ. Тик

ошо хәлдән һуң ғына был ҡыҙҙың һөйләгәндәренең ни тиклем ҙур фажиғә икәне һәм ҡурҡыуының ҡайһылай тәрән һеңгәне башыма барып етә.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин сит илгә бәхет эҙләп сығып китеү яҡлы түгелмен. Һәр кем үҙ илендә бәхетле һәм етеш тормош ҡорорға тейеш тигән фекерҙәмен. Көнбайыш Европа илдәренең эмигранттар менән тулы булыуы, шул арҡала беҙ һоҡланған һәм ниндәйҙер кимәлдә өлгө алырға ынтылған ҡалаларҙың йөҙө тотошлай үҙгәреүен хупламай инем. Бер мосолман иленең лидеры Көнбайыш Европа илдәренә: «Беҙ һеҙҙе бер пуляһыҙ, бары тик ҡатындарыбыҙҙың аналыҡтары менән генә еңәсәкбеҙ», — тип янап әйткән һүҙҙәренең ғәмәлгә аша барыуы шул уҡ Голландияла аҙым һайын күҙгә ташлана. 2007 йылда Лондонда тыуған балаларға ҡушылған исемдәр араһында иң йыш теркәлгәне Мөхәммәд булыу ҙа шул хаҡта һөйләй. Бер ваҡыт профессор Вриз минән: «Ни өсөн һин беҙҙең өсөн үҙебеҙҙән дә нығыраҡ борсолаһың?» — тип һорағайны. «Минең әле бер йәше лә тулмаған ейәнсәремдең дә Европаны ошондай уҡ күркәм, таҙа һәм азат фекерле, киң ҡарашлы итеп күреүен теләр инем», — тип яуап биргәйнем.

Үҙем йәшәгән микрорайонда урамдарҙың кис еткәнсе сүп-сарға күмелеүе, телефон будкаларының гел ярылып торған быялаһын алмаштырып өлгөрмәүҙәре, төрөк магазиндарында, йөҙөмә ҡарап, голланд түгеллегемде белгән ир-аттың яулыҡ ябынып йөрөмәүемә ризаһыҙлыҡ белдереүе, хатта Амстердамда үҙ ҡағиҙәләрен көсләп тағырға маташыуы хәүефемдең буш түгеллегенә дәлил ине. Әммә Лигия һәм хәрби кейем күргән һайын йөҙө ҡасҡан Эритрея һылыуы менән танышыу мәсьәләнең мин уйлағанса ябай ғына түгеллеген күрһәтте. Алға китеп булһа ла әйтәйем, Лигия мине үҙенең университетта эшләгән бер дуҫы менән таныштырҙы. Ул тап Африканан һәм Азиянан килгән йәштәрҙе голланд тормошона һәм мәҙәниәтенә яраҡлаштырыу менән шөғөлләнә. «Бер нисә йылдан беҙ демографик көрсөккә килеп төртөләсәкбеҙ: ҡартайыуыбыҙға, беҙҙе ҡарарлыҡ йәштәр етмәйәсәк. Шуға күрә алдан уҡ ҡайғыртырға тура килә», — тине ул. Урындағы халыҡтың һуңлап ғаилә ҡороуы, бары тик бер-ике бала менән генә сикләнеүе, индивидуализм, бер енесле никахтар — быларҙың барыһы ла уйланырға мәжбүр итә.

Әлегә беҙ һаман Дюссельдорф вокзалында ултырабыҙ. Һөйләшеп туйып та өлгөрмәнек, Амстердамға барасаҡ сираттағы поездың ваҡыты етте. Беҙ инде таныштар ғына түгел, дуҫтар булып бергә урынлаштыҡ.

Эритрея ҡыҙының яҙмышы нисек булғандыр, башҡаса уның менән осрашырға форсат теймәне. Ихлас, алсаҡ һәм нескә күңелле булыуына ҡарап, ул мотлаҡ бәхеткә лайыҡ, тип уйлап ҡуям. Ә Лигия менән осраштырған ул миҙгелде далан тип ҡабул итәм, сөнки ул Голландиялағы иң яҡын дуҫтарымдың береһенә әйләнде. Беҙ ҡалған өс ай ярым эсендә велосипедта ярты Голландияны урап сыҡтыҡ. Быға тиклем тормош юлымда тап булған ҡатын-ҡыҙҙар араһында иң һөйкөмләләрҙең береһе тип уйлаған был көслө рухлы, аҡыллы, ярҙамсыл һәм тоғро йөрәкле дуҫым берәй мәл беҙҙең өйөбөҙҙә лә ҡунаҡ булыр әле тигән хыялым бар.

## ГЕРМАНИЯ: ГОХ

— Әгәр ҙә күрмәй ҡайтып китһәң, әсәйем мине ғәфү итмәйәсәк.

Декабрь баштарында Томастан шундай хат килеп төштө. Аптырап ҡалдым. Бармаһаң да ҡыйын, сөнки был турала һөйләшеү килгәнемдән алып барҙы, тик йә минең ваҡыт юҡ, йә Томастың форсаты теймәй. Барам, тиһәң, бер аҙнанан минең ике имтихан. Ул арала ҡыҙым менән ейәнсәрем килеп төшә. Инде Парижға билет алып, ҡунаҡхана табып ҡуйғанбыҙ. Раштыуа алдынан Парижда туристар айырыуса күп була, арзан хаҡҡа йәшәр урын табыу еңел эш түгел. Унан өлкән кешене мәшәҡәтләү ҙә уңайһыҙ.

— Бер ниндәй ҙә мәшәҡәт түгел, — тине Томас. — Әсәйемдең өйө ҙур, ул яңғыҙы ғына йәшәй. Ҡунаҡтарҙы бик ярата.

Имтихандан һуң Парижға тиклем өс көн бар ине — киттек. Фрау Гертруд йәшәгән Гох тигән ҡала Голландияның сигендә генә урынлашҡан. Йәй көнө Томас:

— Һин унда велосипед менән дә бара алаһың, — тип шаярткайны. Шулай ҙа тимер юл менән барыу байтаҡ ваҡыт алды. Тәүҙә Дюссельдорфҡа барып төштөк. Унда беҙҙе Томас көтөп тора ине инде. Бергәләшеп электрич-

каға ултырҙыҡ та Гохҡа юлландыҡ. Вагондар бик уңайлы, йылы, йомшаҡ. Кеше лә күп түгел. Шуға күрә, ун бер айлыҡ ҡына булһа ла, бала менән йөрөүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ. Юл буйында матур пейзаж, бөхтә ауылдар — хәйер, уларҙы ауыл тип әйтергә лә тел әйләнмәй — тороп ҡала. Томастан әсәһенең хәлен һорашам.

— Һәйбәт, — ти ул. — Тик быйыл яҙ ҡолап, ҡулын ауырттырғайны, шунан бирле ҡурҡа.

Ләйлә менән бер-беребеҙгә ҡарашып ҡуйҙыҡ: йөрөргә лә ҡурҡҡан өлкән кешене йонсотоп, йәш бала менән беҙҙе нишләп ҡунаҡҡа алып китеп бара икән?

Томас тәҙрәгә ҡарап бер аҙ уйланып барҙы ла:

— Шулай ҙа уға өс тәгәрмәсле велосипед алып бирергә кәрәк булыр, моғайын, — тип ҡуйҙы.

Ҡысҡырып көлөп ебәрҙек. Баҡһаң, һикһән алты йәшлек фрау Гертруд велосипедта йөрөргә ауырһына икән. Томасҡа көлөүебеҙҙең сәбәбен аңлатҡас: «Ә ниңә, сәләмәт булып ҡартайырға ла мөмкин бит», — тип ҡуйҙы.

Бына Гохҡа ла килеп төштөк. Уға ете йөҙ йылдан ашыу. Шунда уҡ бик күп боронғо йорттар барлығы күҙгә ташланды.

Ике ҡатлы матур кирбес йорт алдына килеп етеүебеҙгә ишектән һомғол буйлы, матур ғына бер ханым — эйе, әбей, тип әйтергә тел әйләнмәй — йүгереп килеп сыҡты. Ҡулдарын йәйә биреп, ихлас йылмайып, бар булмышы менән балҡып тора. Туп-тура һынлы, ҡаҡса кәүҙәһенә ифрат та килешле алһыу йөн кофта менән һорғолт салбар кейгән. Ләйлә уға һоҡланып ҡараны ла ишектән инешләй:

— Әсәй, һикһән алты йәшеңдә һинең дә шулай булыуыңды теләр инем, — тип шыбырлап өлгөрҙө.

— Йортто һуғыштан һуң ирем менән бергәләп төҙөнөк, — тип һөйләй фрау Гертруд. — Ғаиләбеҙ ҙур, биш бала. Һәр береһенең үҙенә бүлмә булһын, ванна айырым, душ айырым булһын тинек. Аҫта ҙур подвал.

Ирем врач ине. Үҙенең практикаһы булды. Шуға күрә йорттоң икенсе яғын ул ауырыуҙар ҡабул итә алырлыҡ итеп һалдыҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик иртә китте. Ә унын алдан уйлай белеүе миңә ғүмер буйы ярҙам итә. Иремдең ҡабул итеү кабинетын инде нисәмә йыл буйы врачтарға арендаға бирәм. Әле лә пенсияға ғына йәшәү ауырға төшөр ине. Өлкәнәйгәс, сәләмәтлектә һиплəү өсөн сығым бик күп кәрәк, — тип һөйләй ул

стеналарында балалар төшөргән һүрәттәр эленгән ҙур йортто күрһәткәндә. Ул үҙе ғүмер буйы немец, инглиз телдәре һәм әҙәбиәттәре уҡытыусыһы булып эшләгән. Хаҡлы ялға сыҡҡас, күптәнге хыялына тотонған: төрлө скульптуралар яһай. Ҙур ҡунаҡ бүлмәһенең киң тәҙрә төптәрен ул яһаған вазалар, тәрилкәләр биҙәй. Ләйләнең бөҙрә яллы матур ат һынына ҡыҙығып ҡарағанын күреп, Томас ҙур ғорурлыҡ менән: «Әсәйемдең ижады», — тип ҡуйҙы. Эреле-ваҡлы скульптуралар өй артындағы ҙур булмаған баҡсаны ла биҙәй.

Ул арала хужабикәнең заказы буйынса күрше кондитер магазинынан яңы ғына мейестән сыҡҡан тәмле-тәмле булкалар, пирожныйҙар килтерҙеләр. Голландтарҙан айырмалы рәүештә, немецтар тәмле итеп йәшәргә ярата. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа матур, затлы кейенә.

Өйҙә, ғәҙәттә, тик ҙур ҡунаҡ залы ғына йылытыла икән. Камилә өсөн бер йоҡо бүлмәһен йылыттылар. Ә былай йоҡо тәмле һәм сәләмәт булһын өсөн бүлмәлә йылылыҡ 19 градустан юғары булмаҫҡа тейеш, тиҙәр. Әммә юрғандың йомшаҡ, еңел һәм йылы булыуына аптырарлыҡ: ҡаҙ мамығы тултырып эшләнгән.

Ҡаланы күреп, магазиндарҙа йөрөп ҡайттыҡ. Раштыуа алдынан ул айырыуса матур. Байрам хөрмәтенә әйберҙәрҙең хаҡын төшөргәндәр. Шуға күрә, Томасты көттөрөүе уңайһыҙыраҡ булһа ла, ваҡ-төйәк кейем ҡараштырыуҙан тыйыла алманыҡ.

Ҡайтыуыбыҙға хужабикә тәмле итеп аш бешереп ҡуйған. Юл ыңғайында Томас: «Был ҡалала минең иң яратҡан кондитер магазины, — тип бер урынға алып инде. — Беҙ бәләкәй саҡта уны класташымдың атаһы тота ине. Хәҙер класташым үҙе хужа. Һеҙ минең бала сағымдың тәмен мотлаҡ татып ҡарарға тейешһегеҙ», — тип әллә ниндәй тәм-томдар алып бөттө. Ҡунаҡ бүлмәһендәге түңәрәк өҫтәл тулы ризыҡ. Тирәләп ҡуйылған йомшаҡ кәнәфиҙәргә уңайлы итеп ултырыштыҡ. Беҙҙең килеүгә арналған мәжлес башланды. Томас махсус рәүештә Бонндан уҡ алып килгән яҡшы француз шарабын асты. Хужабикә тубығын япҡан кешмир юрған кеүек бер нәмәне күрһәтте:

— Ошо өйҙә, — тине ул, — минең унан да йыш тотонған бер генә әйбер ҙә юҡ. — Ғәжәпләнеп ҡарайым, нимә һуң был: ялпылдап ҡабарып киткән дебет шәлгә тыш-

лыҡ кейҙереп алған икән. — Ҡағылған һайын һиңә рәхмәт уҡыйым. Килеүең менән өсөн ҙур ҡыуаныс.

Бынан бер нисә йыл элек килгәнендә Томас бик ҡайғылы ине. Яман шеш сиренән һеңлеһе вафат булған.

«Әсәйемә инсульт булды, больницала ятып ҡалды», — тине ул. Көн һайын шылтыратып хәлен белеп тора. Ҡайғылы әсәнең саҡ ҡына булһа ла күңелен күргем килеп, үҙебеҙҙең Ейәнсура шәлен ебәрҙем. Икенсе йылды килгәнендә Томас әсәһенән сәләм тапшырҙы. «Оҙаҡламай Амстердамға уҡырға киләсәгеңде әйткәс, ҡунаҡҡа саҡырып ҡалды», — тигәйне. Ул заманда минең был хыял алыҫ йондоҙ кеүек бөләңгерт кенә ине. Ә бит ысынлап та осрашырға яҙған.

— Бында килеүемә, моғайын, һеҙҙең дә хәйер-доғаларығыҙ булышлыҡ иткәндер.

Өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, фрау Гертрудтың күңеле ғәжәп йәш. Йомшаҡ ҡаласты уртаға бүлеп, йоҡа ғына май яғып, өҫтөнә джем һалып, бәләкәс-бәләкәс кенә тешләп ашай. Һәр хәрәкәтендә тормоштан ләззәт алыуы, ризыҡтың да, матурлыҡтың да тәмен белеүе күренеп тора. Бөтә нәмәне лә ҡыҙыҡһынып тыңлай, шаяртыуға рәхәтләнеп, күҙенән йәштәр сыҡҡансы ҡысҡырып көлә. Уға КГБ-нан алып Ейәнсура кәзәләрен нисек тарауҙарына тиклем бирҙәй мауыҡтырғыс. Әңгәмә башлыса инглиз теләндә бара. Аңлашылмаған саҡта Томас тиҙ генә немец теленә күсеп ала. «Мутти, мутти (әсәкәйем)», — ти ул әсәһенә яратып. Бер ҡараһаң, ете ят кешеләр, алыҫ ил, ә үҙ туғандарың янында ултырғандай рәхәт.

Был кистә оҙаҡ ултырҙыҡ, ике шешә затлы француз шарабын бушаттыҡ. Барыбыҙ ҙа әҙәбиәт һөйөүселәр булғанлыҡтан, Һетенан алып (беҙҙең Гете тиеүебеҙ уларға ҡыҙыҡ), Чехов, Шаламов, Достоевский һәм дөйөм таныштарыбыҙ: милли проекттарҙа эшләгән Осетия, Бурятия, Сыуашстан тәржемәселәренең ижадтары тураһында һөйләшеп бөттөк. Шунда бер нәмәгә иғтибар иттем: ни тиклем һуң булһа ла, уның сырайында арыу ғәләмәте юҡ, фрау Гертруд саҡ ҡынаға, бер минут-минут ярымға күҙен йома ла, шул арала тәрән итеп йоҡлап өлгөрә. Унан тағы әллә нисә сәғәт ял иткән кеүек уяна.

Шул ултырғанда 75 йәшендә үҙенән ике йәшкә йәшерәк һеңлеһе менән Францияның көньяғы буйлап

бер аҙнаға яҡын велосипедта сәйәхәт иткәндәрен һөйләп алды.

— Әле ул саҡта ныҡ йәш инем, бер тамсы ла арыу юҡ, — ти ул. Шул арала Томас уны инде рулдә ташларға кәрәк, тип өгөтләй. «Нимәгә һиңә машина, такси саҡыртһаң, күпкә арзанырак буласаҡ». Тик фрауҙың бер ҙә ризалашҡыһы килмәй. «Таксиҙы көтәһең, көтәһең, ә ул кәрәк ваҡытта килмәй ҙә ҡуя», — тип ҡаршы төшә. Уның һис тә ҡартайырға һәм бирешергә теләге юҡ.

Алға китеп булһа ла әйтәйем, 2011 йылдың авгусында фрау Гертрудты 89 йәше тулыу менән ҡотланылар. Ә мин был юлдарҙы яҙғанда Томас менән скайп аша хәбәрләштем дә әсәһенең хәлен белештем.

— Дөйөм алғанда, яҡшы, — тине ул. — Йога менән шөғөлләнә. Һаман да шәп. Тик аяҡтарының элекке көсө юҡ инде. — Шунан башын артҡа ташлап рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе: — Кисә шылтыратты, — тине ул күҙ йәштәрен һөртә-һөртә. — Өс тәгәрмәсле велосипедында тиҙлекте самаһыҙ арттырып ебәргән өсөн полицейский туҡтатып иҫкәрмә яһаған.

Бына һиңә 89 йәшлек фрау Гертруд. Афарин!

## ПАРИЖ

Париж беҙҙең күңелдә ат уйнатып, еңеүсе булып килеп ингән башҡорт ғәскәрҙәре тураһындағы тарих менән бергә йәшәйҙер һымаҡ миңә. Атайым һөйләүенсә, беҙҙең Ғайсар олатай 1812 йылғы Наполеон һуғышында ҡатнашҡан. Бер мәлде ҡырҙағы туҡталҡала төндә ял итеп яталар икән. Шул ваҡыт ул шым ғына килеп һөжүм итергә йыйынған французлдарҙың ат тояҡтары тауышын ишетеп ҡала. Иптәштәрен: «Не шуми, не греми, враг идет», — тип киҫәтеп сыға. Ошо төнгө алышта улар бик күп дошманды ҡырып һала һәм байтаҡ ҡоралды ҡулға төшөрә. Уяулығы өсөн Ғайсар олатай алтын миҙалға лайыҡ була. Ысынмы-бушмы, бына шундай иҫтәлек бар.

Тора-бара Париж беҙҙең күңелгә Тургенев, Толстой һәм башҡа классиктарҙың әҫәрҙәре аша тағы ла нығыраҡ һеңә.

Шуға күрә Анни-Мари, май айында Париж каштандары сәскә атҡанда унда ҡунаҡҡа барырбыҙ, тигәс, бик ныҡ ҡыуанғайным. Тик башта уның, шунан минең имтихандар күсерелде лә (профессор Вриз үҙенең коровайҙарына ашыға ине) был сәфәр килеп сыҡманы. Ә июндә мин ейәнсәремде күрергә ашҡынып, тиҙерәк ҡайтып киттем. Шулай ҙа, яҙған ризыҡ теште һындырып керә, тигәндәй, Парижға бер түгел, ике тапҡыр барырға насип булды.

Август аҙағында балаларыма үҙем яратҡан Амстердамды күрһәтһәң ине тигән ниәтемдең беренсе өлөшө тормошҡа ашты — улым Ренат менән кейәүем Айрат килеп төштө. Йәштәр хәҙерге тормошҡа нығыраҡ яраҡлашҡан шул. Өс-дүрт көн эсендә Голландияның байтаҡ урындарын йөрөп күргәндән һуң — уларға ла бәләкәй ҡала-ауылдары ныҡ оҡшаны — Парижға юл тотточ. Улар Интернет аша поезға арзаныраҡ билет та, Францияның баш ҡалаһында барып төшөргә осһоҙ ғына ҡунаҡхана ла тапҡайны инде.

Амстердамдан Парижға тиклем тиҙ йөрөшлө поезда дүрт кенә сәғәт. Тәҙрәнән ҡарап барһаң, сиктәр булмағас, ҡасан бер ил тамамланып, икенсеһе башланғанын тәү ҡарашҡа абайларлыҡ та түгел. Әммә бара-бара бөхтә, таҙа, йыйнаҡ Голландиянан һуң штукатуры ҡуба башлаған өйҙәрҙән, фермаларҙың ялт итеп тормауынан Бельгияға ингәнеңде самалайһың. Ә инде Францияға яҡынлашҡан һайын, «минең бит был ерҙәрҙә булғаным бар», тигән тойғо уяна. Сүп үләне баҫҡан баҫыуҙар, төҙәтеүгә мохтаж юлдарға ҡарап бара торғас, был «дежавю»ҙың сере асыла. Баҡһаң, ни яғы менәндер Франция беҙҙең Рәсәйҙе хәтерләтә икән. Парижға килеп ингәс, поезд байтаҡ ҡына ҡаланың ярлы кварталдары аша барҙы. Шул саҡта ирекһеҙҙән башҡа: «Бына ошондай йорттарҙың береһендә Марина Цветаева ла йонсоп йәшәгәндер инде», — тигән уй килде. Тимер юл вокзалына килеп туҡтаныҡ. Елле-ямғырлы Амстердамдан һуң бында ысын йәй. Егеттәр ҡунаҡханаға юлды ла алдан уҡ Интернеттан ҡарап өйрәнгән. Туп-тура барып, метроға төштөк. Париждың бысраҡ баҫҡыслы, бер яҡҡа ғына асыла торған буяуҙары ҡупҡан ишекле, ҡурҡыныс шығырлап билетыңды ялмап алған һәм нишләптер эҫе итеп шунда уҡ төкөргән автоматлы метроһы менән сағыш-

тырғанда беҙҙең Мәскәү йәки Санкт-Петербург метролары батша һарайына оҡшаған: киң, таҙа, мәрмәр.

Тар ғына тыҡрыҡта урынлашҡан ҡунаҡханабыҙҙы барып таптыҡ. Хаҡына күрә яраған: таҙа, өс карауат, кейем шкафы, душ. Ҡайтып йығылырға булһа, шул. Париж буйлап сығып киттек. Уңдан да, һулдан да матур-матур йорттар. Һәр береһе архитектура ҡомартҡыһы. Тимер ҡоймаларҙағы биҙәктәргә сәғәттәр буйы һоҡланып ҡарап торорлоҡ. Тик ҡайҙа баҡма, шунда әлеге лә баяғы хәстәрлектең юҡлығы күренеп тора. Исмаһам, саңын һөртөп алыуҙы көткән тәҙрәләр, күптән йүнәтеү күрмәгән урамдар. Шул урамдарҙан машиналар менән ярышып велосипедсылар елдереп үтә. Парижда велосипедта йөрөү өсөн камикадзе булырға кәрәк. Бына Рудольф Нуриевтың етеҙ аяҡтары тапап йөрөгән баҫҡыстарға, Париж опера театрына барып еттек. Янында ауылым ағастарын хәтерләтеп, моңһоу тәлгәштәрен мөлдөр һыуға һуҙып өйәңкеләр үҫкән Сена йылғаһы ярына төштөк. Ниһайәт, Луврҙы килеп таптыҡ. Халыҡ күп, һәр кешене ентекләп тикшерәләр. Шулай ҙа сират бик тиҙ етте.

Луврҙа минең айырыуса «Мона Лиза»ны күргем килгәйне. Ҡарап тороуға бик үк ҙур булмаған был картинаның серен асырға теләп кем генә башын ватмаған! Әле лә тап уның алдында халыҡ бик күп. Бер экскурсия китһә, икенсеһе килеп баҫа. Ниндәй генә тел һәм лөғәтте ишетмәҫһең. Һәр кем уның эргәһенән уйсанланыбыраҡ, ғәмлерәк киткәндәй тойолдо миңә. Даһи Леонардо да Винчи бында ҡатын-ҡыҙ рәүешендә үҙен төшөргән тигән фараздар ҙа бар. Мона Лизаның тышҡы матурлығы түгел (матурлыҡ мәсьәләһендә һәр кемдең үҙ зауығы), ә эске булмышы арбай. Һәр кем уның үҙенә ҡарағанда эволюция баҫҡысында күпкә юғарыраҡ булғанын төпкө аң менән һиҙә лә, күңелендә һағыш, ҡаушау, көнләшеү кеүек тойғолар уяна, һәм булмышыбыҙ мәңгелектең үҙе менән осрашыуҙан тетрәнә, имеш. Булыуы бик мөмкин.

Тик Луврҙа бер нәмә кәйефте ҡырҙы: экспонаттар аҫтындағы яҙыуҙар тик француз телендә генә. Француздарҙың бары үҙҙәренең телен генә һанлағаны күптән билдәле. Ун һигеҙенсе быуаттарҙа хатта башҡа телдәрҙән тәржемә иткән саҡта, тәржемәсенең әҫәргә үҙенән өҫтәп, биҙәкләп ебәреүе талап ителгән. Тупаҫ һәм ҡырағай телдәрҙә бөтә донъяла зауыҡтың өлгөһө булып

торған француздарҙың ихтыяжына яуап бирерлек итеп нәзәкәтле һәм оҫта яҙып булмай, йәнәһе.

Луврҙан арманһыҙ булып сыҡҡас — ундағы байлыҡты, йыл буйына көн һайын йөрөһәң дә, ҡарап бөтөрлөк түгел — каштандар аҫтында ултырып ҡапҡылап алдыҡ. Унан Сена буйынан яй ғына атлап Нотр-Дамды эҙләп киттек. Ул үҙенең матурлығы һәм үҙенсәлеге менән бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Ҡараңғы төшөп, урам фонарҙары яна башлағас, тирә-яҡҡа әкиәт төҫө инде. Урам музыканттары унда ла, бында ла ниндәй генә ҡоралдарҙа уйнамай. Бер яҡтан аккордеонда «Подмосковные вечера»ны һыҙҙырғандары ишетелеп ҡалды. Ул арала алыҫтан Эйфель башняһының зәңгәр уттары һауаны ярып ялпылданы. Аяҡта саҡ баҫып торһаҡ та, киттек. Килгәс-килгәс, Париждың символын күрмәй булмай инде. Был башняның открыткаларын һәм фотоларын миллион тапҡыр күрелһә лә, ҡоролманың мөһабәт, шул уҡ ваҡытта, гүйә, селтәр кеүек еңел тойолоуы шаҡ ҡатыра. Ә бит заманында күптәр был башняны төҙөүгә ҡаршы булған. Тәнҡитселәр араһында мәшһүр Мопассан да булған. Яҙыусы үҙе көн һайын тиерлек башнялағы ресторанға йөрөргә әүәҫ икән. Бер ваҡыт унан: «Һеҙ бит башняны яратмайһығыҙ, нишләп бында ашарға киләһегеҙ?» — тип һорағандар. «Олоғара Парижда был хәшәрәт күренмәгән берҙән-бер урын ошонда булғас, нишләйем һуң?» — тип тапҡыр яуаплаған Мопассан. Аҫтан ҡарағанда, елһеҙ көндә лә саҡ ҡына тирбәлеп торған иң юғары нөктәнән Париж ус төбөндәгеләй күренә.

Икенсе көндө, Париждың үҙенә килеп йоҡлап ятыу енәйәт кеүек тойолһа ла, аяҡты ҡыбырлатыр хәлдә түгел инек. Эргәләге бистрола данлыҡлы француз круассанына ҡушып эҫе шоколад эскәндән һуң вокзалға юлландыҡ. Аяҡ аҫтында һаман да әлеге шул төҙәтеү талап иткән тротуарҙар, туҙан һәм сүп-сар булғандыр. Әммә миллиондар өсөн алыҫтағы йондоҙ һымаҡ арбап торған был ҡала (Парижға барырға ла, унан һуң үлһәң дә була!) ысынлап та ниндәйҙер бер мәлдә үҙенең тылсымы менән арбап алған. Ҡасан, нисек шулай булған? Тиҙ йөрөшлө поезд Брюсселгә ҡарай елдергәндә шул хаҡта уйлап барҙым. Шул саҡ Луврҙа күргән ун етенсе быуаттағы король һарайы һылыуҙарының портреттары күҙ алдыма килеп баҫты. Ул осорҙа аҡһөйәк ханымдар баштарына ысын мәғәнәһендә сәнғәт әҫәре

тип атарлыҡ прическалар яһап йөрөгән. Селтәрҙәр, таҫмалар, ҡош ҡауырһындары менән биҙәлгән бейек каркаслы был прическаларҙа хатта халыҡ-ара хәлдәр, техника һәм фән ҡаҙаныштары ла сағылған һәм улар ниндәй генә рәүештә булмаған! Мәҫәлән, ҙур оя, оя эсендә карета, карета өҫтөндә төрлө емеш-еләк, сәскәләр тултырылған кәрзин. Быңдай прическаларҙы яһар өсөн оҫта парикмахерҙар яртышар көн сарыф иткән. Бик мәшәҡәтле булған һәм ҡимmәткә төшкәнлектән, ханымдарға ултырып ҡына йоҡларға тура килгән. Ә бының өсөн махсус ултырғыстар уйлап сығарғандар. Бына бит нисек: матурлыҡ ҡорбан талап итеп кенә ҡалмай, прогресҡа ла булышлыҡ яһай. Хәҙерге лак урынына йомортҡа ағы, пудра урынына он һәм мул итеп һарыҡ майы ҡулланғанлыҡтан, сәстә бөрсә менән бет күпләп үрсегән. Иң кәрәкмәгән мәлдә генә ҡыймылдап сығып килгән һәм ҡысыттырып маҙаға тейгән был бөжәктәрҙе төртөп индереп ебәрер өсөн алтындан йәки көмөштән махсус таяҡсалар эшләгәндәр, уларҙы аҫылташтар менән биҙәп, муйынға тағып йөрөткәндәр. Ә бөгөнгө көндә лә бөтөн донъяла дан тотҡан француз хушбуйҙары рәхәт тормоштан килеп сыҡҡан тиһегеҙме? Тир еҫе сыҡмаһын өсөн уны күпләп файҙаланырға тура килгән. Әммә бөжәктәр мыжғып, хуш еҫтәре тын алғыһыҙ булып борҡоп торһа ла, һылыу һылыу инде: таҫмалар, семәрҙәр, селтәрҙәр, ҡатмарҙар менән биҙәлгән хайран ҡулдәктәр кейгән был ханымдарҙың портреттарынан күҙҙе айырып алырлыҡ түгел. Уларҙан король һарайы, балдар, кешелек тарихына йоғонто яһаған әллә ниндәй интригалар ипкене килә, улар тормошто серлерәк, ылыҡтырғысыраҡ итә һәм ихтыярһыҙҙан ошо тылсымға әсирләнәһең. Парижды бына шул һарай һылыуҙарына оҡшаттым.

Ә икенсе тапҡыр Парижға егерменсе декабрҙә ҡыҙым Ләйлә, ун бер айлыҡ ҡына ейәнсәрем Камилә менән өсәүләшеп барҙыҡ. Бәләкәй бала булғас, был юлы мулдан тотондоҡ, беренсе класлы вагонға ултырҙыҡ. Бында инде үҙеңде самолетта кеүек хис итәһең. Таҙа, иркен, иртәнге аш менән һыйланылар, хатта Камиләгә лә махсус меню тәҡдим иттеләр. Теләһәң, компьютерың менән Интернетҡа тоташып эшләп барырға ла мөмкин.

Беҙ иртәнге ун икеләргә барып төшкәндә ҡышҡы Париж томан эсенән саҡ сығып килә ине. Вокзал

алдындағы майҙансыҡта матрастарында теҙелешеп ятҡан бомждар ҡәнәғәт киреләшеп саҡ-саҡ ҡуҙғала, гүйә, түшәктәренә ҡәһүә килтергәнде көтә. Оҙон итәктәрен елберләтеп, сиған ҡатындары һырып алды. «Инглизсә һөйләшәһегеҙме?» — тип үткән береһенә сат йәбешәләр. Бындай тәртипһеҙлектәрҙе күҙ алдына ла килтереп булмаған Амстердамға күнегеп өлгөргән Ләйлә аптырап ҡалды. Айрат кейәү Өфөнән Интернет аша ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан арыу ғына ҡунаҡханала урын биләп ҡуйғайны. Такси алып шунда йүнәлдек. Яҡты, ҙур, иркен, тик ванна бүлмәһе генә ҡот осҡос һыуыҡ. Шул арала сыуылдашып ике йыйыштырыусы ҡатын килеп инде. Русса һөйләшәләр. Танышып киттек. Ҡаҙағстанда йәшәгән хохлушкалар. Алты йылдан ашыу Парижда эшләйҙәр икән. Мәрәкә булып ҡалды. Сәй ҡайнатып, Ләйлә тиҙ генә эргәләге кафенан алып ингән Париж тәм-томдары менән сәй эстек. Унан яҡын-тирәгә сығып әйләндек. Ҡайҙалыр Камиләгә һалҡын алдырғанбыҙ. Эргәләге дарыуханаға индек. Бәхеткә күрә, Францияла дарыуҙар беҙҙәге кеүек үк рецептһыҙ ҙа һатыла. Тик минең нимә теләгәнемде аңлаусы юҡ. Ярай әле французса ла, инглизсә лә яҡшы белгән Корея егете ярҙамға килде.

Икенсе көндө Ләйлә Парижда иң күргеһе килгән урынға — Дисней-Лэндҡа китте. Беҙ Камилә менән бүлмәлә тороп ҡалдыҡ. Тәҙрәнән ҡарап торабыҙ. Тышта һалҡын. Урамда йыуан бүрбайын һығып торған ҡара селтәр ойоҡ кейгән һәм ярым шәрә тәнен ҡыҫҡа ғына аҡ төлкө туны ябынған бер ҡыҙ арлы-бирле йөрөй. Үткән-һүткән ир-егеттәргә бәйләнә. Быны уға тап шулай кейенгән икенсеһе ҡушылды. Баҡһаң, Париж фәхишәләренең ҡышҡы униформаһы шундай икән.

Һәр кем үҙенең балаһын йәлләй тигәндәй, ҡыҙымдың Париж буйлап бер яңғыҙы йөрөргә мәжбүр булғаны өсөн эсем боша. Ә ул үҙенең йүткергән балаһы өсөн хәүефләнә. Шулай ҙа бөтөнләй башҡа соборҙы Нотр-Дам тип уйлап яңылышҡас, ҡала күрергә бергәләшеп сыҡтыҡ. Әлбиттә, был Парижның йөҙөк ҡашы булған ҡорамды күрмәй ҡайтыу ярамай. Уны яйлап ҡарап сығыуыбыҙға, Эйфель уттарын тоҡандырҙы. Ул бына ғына торған кеүек тә, бала менән барғансы байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Етмәһә, Париж баланы арбаға ултыртып көнө буйы йөрөтөрҙәй уңайлы урамдары һәм транспорты

булған Голландия түгел. Шуға күрә Ләйләнең ауыҙынан да: «Их, үҙебеҙҙең Амстердам!» — тигән һүҙҙәр сыға башланы. Ә инде барып еткәс, Раштыуаны һәм Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнеп биҙәнгән төнгө Парижды ҡарамай китеү тағы йәл. Сират ҙур булыуға ҡарамаҫтан, Ләйлә башняға менергә булды. Аҫта ел булғанлыҡтан, Камилә менән мин дә икенсе ҡатҡа күтәрелдем. Матурлыҡ ҡайғыһы юҡ, имгән баланың асығырын онотоп ташлағанбыҙ. Ашарға бер нимә лә юҡ. Эргә-тирәләге бәләкәй генә магазиндарҙа тик сувенирҙар ғына һатыла. Өс-дүрт бала эйәрткән итальян ҡатынының ҡулында оҙон батон күреп, тәүәккәлләнем. «Синьора, ҡайҙан алдығыҙ?» — тип һорайым. Ул аптырап ҡарай. Балалары һорауымды үҙ телдәренә тәржемә итә. Бәпестең асыҡҡанын, ә эргәлә ризыҡ һатылмағанын әйткәс, ул көләп ебәрә һәм мул ғына итеп икмәк һындырып бирә. Ул арала төнгө Париждың гүзәллегенә хайран булған ҡыҙым да килеп төшә һәм беҙ, тағы ла бында килергә насип булыуын теләп, ҡунаҡханабыҙға юлланабыҙ.

Тағы ла бер нисә көндән йәнә самолетка, инде йәнтөйәккә: Амстердам — Франкфурт, Франкфурт — Өфөгә йүнәләбеҙ.

Яңы йыл алдынан ҡайтып төштөк. Парижда ейәнсәремде елдән һаҡлайым тип үҙем ныҡ һалҡын тейҙергәнмен. Туғандар менән дуҫтар сәләмләп шылтырата, ә минең һөйләшергә тауыш юҡ. Һораған бер кешегә:

— Эйфель башняһында үтәнән-үтә ел һуҡҡан, — тип аңлатам.

Бер мәлде балалар:

— Әсәй, үҙеңдең маҡтанған кеүек һөйләгәнеңде абайламайһыңмы? — тигәненә аптырап киттем. Париж, Брюссель, Амстердам, Бонн... Бөтәһе лә ҡул һуҙымында ғына булыуына күнегелгән һәм барыһы ла ғәҙәти кеүек. Уның нимәһенә маҡтанаһың?!

Бер көндө Зөһрә Бураҡаева:

— Ҡалай һиңә рәхәт, Гөлсирә апай — Эйфелдә һалҡын тейҙергәнһең. Ә бында бер бысраҡ туҡталышта өшөп тораһың да, шулай уҡ ауырыйһың, — тип шаяртҡас ҡына башҡа барып етте. Рәхәтләнеп көлдөк.

Бына шулай итеп Европа тураһындағы хыял тормошҡа ашты.

## ҺУҢҒЫ ҺҮҘ УРЫНЫНА

Амстердамдан ҡайтыуыма өс йыл тигәндә генә был яҙмаларға тотоноуым сәйер тойолор. Миңә ғәйәт ныҡ йоғонто яһаған, уйландырған, тәрән тәьҫораттар ҡалдырған был бер йыл ваҡытты әле саҡ-саҡ һағыныу һәм әрнеүһеҙ иҫкә алырҙай хәлгә килдем. Сәбәп бары шул ғына. Нидерландтағы матди кимәл дә, магазиндар ҙа, рәхәт тормош та һағындырмай мине. Киреһенсә, йәннәттең бер ҡайҙа ла булмағанын, үҙебеҙҙең бер кемдән дә кәм түгеллегебеҙҙе, беҙ генә Европаға түгел, Европаның да беҙҙең ихласлыҡҡа, алсаҡлыҡҡа, күңел йылыбыҙға мохтаж икәнен белеү ифрат файҙалы булды. Беҙ күп йәһәттән байыраҡбыҙ, тәмлерәк һәм күберәк ашайбыҙ, ризығыбыҙҙан тәбиғи тәм китмәгән әле, йылыраҡ яғылған өйҙәрҙә йәшәйбеҙ, иркенерәк яландарҙа йөрөйбөҙ, ҡалыныраҡ урмандарҙы гиҙәбеҙ, бары тик шуның ҡәҙерен генә аңлап етмәйбеҙ. Артыҡ күп зарланып, тормошобоҙҙоң йәмен китәрәбеҙ, үҙебеҙҙе һәм шуның арҡаһында бер-беребеҙҙе ихтирам итмәйбеҙ. Балаларыбыҙҙың, ҡарттарыбыҙҙың һәм һауһыҙҙарыбыҙҙың ҡәҙерен белмәй, үҙебеҙҙең баһабыҙҙы төшөрәбеҙ. Иң мөһиме — үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы белмәйбеҙ һәм уға эйә булыу мөмкинлегенә хатта ышанмайбыҙ ҙа. Тик был инде бөтөнләй икенсе тема.

Ә һағышымдың сәбәбе ябай ғына.

Унда, бөтөн донъянан йыйылған һабаҡташтарым араһында Ер шарының шул тиклем бәләкәй, ә донъяның ҙур, шау-шыулы, әммә бары бер ауыл икәнен тойҙом. Барыһы ла яҡын, асыҡ, барыһы ла ус төбөндә. Бына ғына Париж, бына Брюссель, унда Кельн. Донъяның һәр тарафы шар асыҡ: Африкала, Японияла, Индонезияла, Албанияла — һәр яҡта дуҫтар. Һәм, быны тағы ла ҡабатлағым килә, йәшеңә лә, төҫөңә лә, кейемеңә лә, хатта аҡылыңа, холҡоңа, белемеңә лә ҡарамаған, ә бары тик кеше булғаның өсөн генә ихтирам иткән голландтар араһында үҙеңде кеше итеп тойоу шул тиклем рәхәт булған. Шул юҡһындыра, үҙебеҙҙә лә шуны булдырғы һәм бәхетле, ҡәнәғәт йәшәге килә. Ә теләк бар икән — булыр. Мин үҙебеҙҙең ихтыярға ла, аҡылға ла, күңел байлығыбыҙға ла ышанам.

* * *

*«1981 йылдың йәйен Айги ғаиләһе менән Мәскәү өлкәһендәге Каменищево ауылында үткәрҙе. Бер көндө беҙ ағайым менән кырҙар гиҙеп йөрөгәндә аръяғында урман башланған ауылға килеп сыктык. Көтмәгәндә Гена:*

*— О-о-о! — тип кыскырып куйҙы ла тораташтай катып калды. Үҙе урман яғына караған. Ул яктан ергә йылышып кына килгән томан ауылға шыуыша. Бына ул юлында урам буйында ултырған бураны осратып икегә айырылды ла, бер өлөшө бер, икенсеһе икенсе яктан килеп сыкты.*

*— Хәҙер мин һиңә шиғырҙарҙың нисек тыуыуын һөйләйем, — тине ағайым.*

*— Юк-юк, кәрәкмәй, — тип каршы төштөм. — Минең өсөн шиғриәт ул — сер. Миңә ул серҙе асып һалыуҙарын теләмәйем.*

*— Куркма, — тине Гена. — Мин сак кына һөйләйем.*

*Ә үҙе төпсөрләп аңлата башланы.*

*— Шиғырҙы бер вакытта ла уйлап сығармайһың. Ул тыуа. Ә ул тыуһын өсөн этәргес көс кәрәк. Был көстөң ниндәйҙер бер һүҙ, ел иҫеүе, берәйһенең сырайы, кемдеңдер тауышы булыуы ихтимал. Әле бында шундай көс ул — томан. Тик томан таралыр ҙа юкка сығыр. Уны нисектер туктатырға кәрәк. Шиғыр яҙырға теләйһең икән, уның матур булыуы ғына етмәй. Был томанды нимә менәндер бәйләргә кәрәк. Бәйләүселәр бында беҙ икәү: ағай менән һеңле. Тимәк, беҙ уны кеше йылыһы, кеше һөйөүе менән бәйләйбеҙ. Ә беҙҙең икебеҙҙе — әсәйебеҙ бәйләй. Тимәк, бында әсәйебеҙҙең образы кәрәк. Бына шиғыр әҙер!*

*Был шиғырын ағайым миңә арнаны. Минең бер вакытта ла уның үҙ шиғырҙары менән мактанғанын, ғорурланғанын ишеткәнем булманы. Ғәҙәттә ул: «Һәйбәт шиғыр», — ти торғайны. 2006 йылда, вафатынан алда, беҙ был ауылды һәм ошо шиғырҙы хәтергә төшөрҙөк. Шунда ул: «Был — гениаль шиғыр. Хәҙер мин улай яҙа алмайым», — тине».*

Ева Лисина

## Поле: Туман

Сестре Еве

*А сердце проваливается! — вдруг —*
*представляются мне состоянья тумана:*
*определенья — как счастье и горе просты:*
*туман — лишь «люблю»:*
*задевает он сруб — («душу б отдал за это!»):*
*жнивье увлажняет — («оплакиваю»):*
*стелется — («плачу... — как будто прощаюсь*
*всю жизнь*
*я с Родимой и Нищей в родимо-печальном*
*ее одеяньи:*
*всегда — навсегда — домотканом:*
*с болью оплакивая*
*уже навсегда — в состоянии этом»):*
*«плачу» — (и стелется — так же родимо —*
*и одиноко — туман).*

*1981*

# РУХ ЮЛЫНАН СӘФӘР ҠЫЛҒАН ӨС ЙӘН

## «Ул — шиғриәттең үҙе»: Геннадий

Күренекле сыуаш яҙыусыһы Ева Николаевна Лисина менән беренсе тапҡыр 2000 йылдарҙың башында Санкт-Петербургта осраштыҡ. Уртаҡ дуҫтарыбыҙҙың береһе уның менән таныштырғанда ниндәйҙер бер эске күтәренкелек һәм тулҡынланыу менән:

— Геннадий Айгиҙың бер туған һеңлеһе, — тип баҫым яһаны. Был шундай итеп әйтелде: әҙәбиәт донъяһы менән әҙме-күпме хәбәрҙар кешенең Айгиҙы белмәү ихтималы дуҫымдың башына ла инеп сыҡманы. Әммә, уңайһыҙ булһа ла, әйтәйем, ул ваҡытта мин Айги тураһында бер нәмә лә белмәй инем. Шулай ҙа фамилияһын ҡайҙалыр күргәндәймен. Аҙаҡтан уны күренекле яҙыу-

сыбыҙ, үләндәр менән дауалаусы һәм дарыу үләндәренең шифаһы тураһында береһенән-береһе файҙалыраҡ китаптар яҙған Рим Ахмедовтың интервьюһында осратҡаным иҫемә төштө.

Бөгөнгө француз әҙәбиәтендәге иң абруйлы шағирҙарҙың береһе Жак Рубо үҙенең 1990 йылдың июнендә «Монд» гәзитендә баҫылған мәҡәләһендә Геннадий Айгиҙы «Рус шиғриәтендәге иң үҙенсәлекле һәм донъялағы иң ғәҙәттән тыш тауыш» тип атай. Француз шағиры үҙенең баһаһында яңғыҙ түгел. XX быуаттың мәшһүр әҙәбиәт һәм тел белгесе Роман Якобсон әле 1972 йылда уҡ уны «хәҙерге заман рус авангардының ғәҙәттән тыш үҙенсәлекле шағиры» тип ҡылыҡһырлаған. Ә француз философы Ален Балью 1989 йылда яҙылған «Философия манифесы» тигән хеҙмәтендә мәшһүр шағирҙарҙы бына шундай тәртиптә һанап сыға: Гельдерлин, Малларме, Рембо, Тракль, Пессоа, Мандельштам һәм Целан. Уның фекере буйынса шағирҙар быуаты ошолар менән тамамлана. Әммә 2005 йылда ул был исемлеккә Айгиҙы ла өҫтәй.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сит илдәрҙә күптән үк танылыу яулаған сыуаш шағиры Рәсәйҙә әлегә тиклем киң ҡатлам уҡыусыларға билдәле түгел.

Геннадий Айги 1934 йылда Сыуашстандың Шаймурзино ауылында тыуған.

Айги фамилия ла, псевдоним да түгел, уларҙың ырыу атамаһы. «Олатайым Андрей ошо исем аҫтында билдәле булған, — ти шағир үҙе бер интервьюһында. — Һәйбәт урында ер бирмәгәс, бер кемгә лә кәрәкмәгән ташландыҡ ҡышлаҡта беҙҙең яҡтарҙа тәүгеләрҙән булып баҡса үҫтергән кеше ул. Шул хаҡта хатта 1919 йылда бер журналда яҙып та сыҡҡандар. Был урынды һаман да «Айги түңе» тип йөрөтәләр. Ә «хайхи» сыуаш телендә «ана теге» — «тот самый» тигәнде аңлата. Олаталарының береһе был һүҙҙәге беренсе хәрефте ни өсөндөр төшөрөп ҡалдырған, шулай итеп Айхи-Айги булып киткән».

1969 йылға тиклем Геннадий Николаевич атаһына урыҫлаштырыу ваҡытында бирелгән фамилияһы буйынса Лисин булып йөрөй.

«Атайым рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ине. Пушкинды сыуаш теленә тәржемә иткән. Үҙе лә шиғырҙар яҙған, хатта ҡайһы бер әҫәрҙәре уҡыу китаптарына ла индерелгән. Атайымдың Пушкин шиғырҙарын сыуаш-

салап ҡысҡырып йырлап ебәргәне хәтеремдә. Көйҙәре лә үҙенеке булғандыр, сөнки уларҙы башҡа бер ваҡытта ла ишетмәнем. Ҡайһы берҙә ул Крыловтың шиғырҙарын ҡысҡырып уҡый, Лермонтовтың шиғырҙары йырлай ине.

Мин тыуғанда атайым Беренсе Май исемендәге холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт лагерында ултырған булған. Уҡытыусы атайымды, аҙаҡтан ғәйепте берәүгә ауҙарырға мөмкин булһын өсөн, бөтөп барған бер колхозға рәйес итеп билдәләгәндәр. Колхоз тарҡалғас, уны хөкөм иткәндәр. Ун ай тотҡандан һуң уны сығарғандар, әммә, аҡыллы кеше булараҡ, ул былдай осорҙа икенсе тапҡыр ҡулға алыуҙары ҡотолғоһоҙ икәнен яҡшы төшөнгән. Шуға күрә 1940 йылда яңы баҫып алынған фин ерҙәренә күсергә мөмкинлек сыҡҡас, беҙ шунда киттек. Атайым унда (Сыуашстандан!) үҙенең бай китапханаһын алып барғайны. Һуғыш башланғас, был китаптар тулыһынса юҡҡа сыҡты. Ул миңә иҫтәлеккә бары тик бер генә китапты — мәшһүр «Калевала»ны — алды. Мин бик оҙаҡ йылдар донъяла иң яҡшы нәмә ул — китаптар, иң етди шөғөл — китап яҙыу тип ышандым. Моғайын, шуға күрә лә шиғыр яҙамдыр, тип уйлайым».

Туғыҙ йәшендә етем ҡалған Гена атайһыҙлыҡтың бөтөн аянысын татый. «Минең быуын атайһыҙ үҫте. Ауылыбыҙҙа 200 йорт бар ине. Һуғыштан 200-ҙән ашыу ир-егет әйләнеп ҡайта алманы. Ҡайтҡандарының бер өлөшө — быны мин шаһит булараҡ раҫлай алам — артабан колхоз һәм ауыл мафияһының ядроһы булып ойошто. Уларҙың йәбере һәм аяуһыҙлығы ҡатын-ҡыҙҙарға, уларҙың нәфислегенә һәм мөләйемлегенә ҡаршы йүнәлгәйне, — ти Айги үҙенең инглиз телендә нәшер ителгән бер китабына яҙған баш һүҙендә. — Йәшләй генә вафат булған әсәйем әлегә тиклем миңә бер изгелек нуры һымаҡ тойола. Минең өсөн халыҡ та — әсәйем һәм әсәйемдең күргән ғазаптары».

Ева Николаевнаның һуғыш йылдарындағы ас балаларға арналған китабы, был хаҡта яҙылған иң һәйбәт әҫәрҙәрҙең береһе булараҡ, донъяның бик күп телдәренә тәржемә ителгән. Был ғаиләнең шул йылдарҙа ни тиклем йотлоҡтан интеккәне Айгиҙың «Аслыҡ. 1947 йыл» тигән ҡыҫҡа ғына әҫәрендә лә тетрәндергес булып күҙ алдына баҫа.

«Ас кеше — һәр саҡ ас йөрөһә — ул бер йылғамы, әллә ике, өс йылға йәки тағы ла күберәккә һуҙыламы — үҙенең ашағыһы килгәнен дә аңламай башлай. Һәр

ваҡыт шулай булыр һымаҡ йәшәй бирә. Әммә берҙәнбер көн уға үлтереп ашағыһы килгәнен аңлатырлыҡ берәй ваҡиға була. Асығыуымдың икенсеме, өсөнсөмө йәйендә минең менән дә шулай булды», — тип яҙа шағир. Аслыҡтан шешенеп үлгән кешенең мәйетенә ҡарап, ун өс йәшлек малай быны нимә тоя: «Йөҙө картуфҡа — шыма, яңы ғына әрселгән, тап-таҙа булып яҡтырып торған, саҡ-саҡ ҡына һыуынған картуфҡа — оҡшағайны. Һәм минең *сыҙап тороп булмаҫлыҡ рәүештә ашағым килде.* Ынтылып алырға, яйлап ҡына тоҙларға ла. *Ошо* картуфты, ашҡаҙан өсөн күркәм рәхәтлекте. *Ошоно* — тоҙлап — *ашарға,* тап *ошоно. Ашарға».*

Бик иртә уҡырға өйрәнгән Гена алты йәшендә тәүге хикәйәһен яҙа. Атаһы улының был ынтылышына бик етди ҡарай һәм ололап, ҙур ихтирам менән әңгәмәләшә. «Һин яҙырһың, тик был ифрат ауыр юл. Был юлда дөрөҫлөктө эҙләргә, дөрөҫлөктө яратырға һәм уға тоғро булырға кәрәк. Бик ҙур белем һәм мәҙәниәт кәрәк», — ти ул. Бәләкәс кенә булһа ла, был һөйләшеү малайҙың күңеленә ғүмерлеккә һеңеп ҡала.

Ә ун биш йәшендә Геннадийҙың шиғырҙары тәүге тапҡыр ваҡытлы матбуғатта донъя күрә. Шул уҡ 1949 йылда үҫмер И. Я. Яковлев исемендәге педагогия училищеһына уҡырға инә. Киләһе йылына күренекле шағир Педер Хузангай менән таныша. Үҫмерҙең һәләтен күреп, Хузангай уға, училищены тамамлағандан һуң, Мәскәүҙәге М. Горький исемендәге әҙәбиәт институтына барырға кәңәш итә. 1953 йылда Геннадий әҙәбиәт институтына уҡырға инә һәм Переделкинола беҙгә башлыса Рәми Ғариповтың көндәлектәренән таныш булған студенттар ятағында йәшәй башлай. Улар Рим Ахмедов менән бер бүлмәгә урынлаша. «Әгәр ҙә Рим булмаһа, Гена ул йылдарҙа астан үлер ине, моғайын, — тип һөйләй Ева Николаевна. — Сөнки ашарға хәстәрләү, юҡты бар итеү ағайыма бөтөнләй хас түгел ине. Нимә бар, шуның менән мөрхәтһенә, бер нәмә лә булмаһа, көндәр буйына ас ултыра торған, ижадҡа мөкиббән киткән зат ине ул». Минеңсә иһә, егеттең был холҡона ас йөрөргә күнеккән һәм аслыҡ түгел, ә туҡлыҡ ғәҙәттән тыш хәл булған ярлы тормош сәбәпсе булғандыр. Ә заманына күрә етеш, һәр хәлдә, атайлы ғаиләлә тәрбиәләнгән Рим бөтмөр ҙә, хәстәрлекле лә, йомарт та, һәм, иң мөһиме, ысын мәғәнәһендәге дуҫ була. «Беҙ ғүмер буйына Римгә рәхмәтлебеҙ. Әсәйем Римде айырыуса ярата торғайны.

Уҡыған йылдарҙа ул беҙгә ике тапҡыр килде, береһендә Генаһыҙ ғына. Шул саҡтағы мәрәкә хәл иҫемдә ҡалған. Рим үҙенең йәтеш кенә яҙыу машинкаһын алып килгәйне. Аҡланға барып — хозур урында ижад итергә уйлағандыр инде — нимәлер баҫа башлаған. Ә беҙҙең ауылдың ғүмерҙә ундай нәмәне күрмәгән бер кешеһе уны радиотапшырғыс аша мәғлүмәт тапшырып ултырған шпион тип уйлаған. Римдең бәхетенә күрә генә ҡулындағы һәнәген елгәрмәгән. Йүгереп ҡайтып ауыл Советы рәйесен алып килһә, ярай әле тегеһе: «Һуң был бит Хведустең улына килгән ҡунаҡ егет», — тип танып ҡалған».

Студент йылдарында йәш сыуаш шағирының яҙмышына баһалап бөткөһөҙ ҙур йоғонто яһаған әһәмиәтле ваҡиға була. Ул мәшһүр шағир Борис Пастернак менән таныша. «Пастернак Переделкинола йәшәй ине, — тип хәтерләй Айги. — Тик уның менән танышырға башыма ла инеп сыҡманы, сөнки минең өсөн ул Блок, Лермонтов йәки Пушкин һымаҡ ине. Көтмәгәндә уның дуҫтары араһына килеп эләктем һәм уны күрә, һөйләшә, аралаша башланым. Был мөмкинлек шул тиклем тетрәткес һәм мөҡәддәс булды. Донъялағы мин тере килеш күргән иң ҙур шағир — быны бик яҡшы аңлай торғайным, — минең менән һөйләшә. Мин Пастернакка ысын мәғәнәһендә хайран инем. Әйткәндәй, был һоҡланыу ғүмерлеккә һаҡланды.

Хәтеремдә, 1956 йылдың майы ине. Илаһ күреп табынған кешем менән тәүге осрашыуҙан Рим менән икәүләп йәшәгән бүлмәбеҙгә төн уртаһы уҙғас ҡына ҡайтып индем. Түҙемһеҙлек менән көтөп торған дуҫым:

— Һин нәмә, ҡайтышлай иланыңмы әллә? — тип аптырап китте. — Битең бит еп-еүеш.

— Иланым да... Борис Леонидовичтың үпкәне лә — барыһы ла бергә, — тип яуапланым мин тәьҫирләнеп».

Геннадий институтта күренекле «Гренада» шиғырының авторы Михаил Светловтың ижади семинарында шөғөлләнә. Светлов башта сыуаш егетендә һәләт осҡондарын абайламай. Әммә «Завязь» тигән поэмаһын уҡығандан һуң фекерен ҡырҡа үҙгәртә.

Геннадийҙы 1958 йылдың мартында, диплом алырға бер нисә генә ай ҡалғас, «социалистик реализм нигеҙҙәрен емереүсе дошмандарса китап яҙған өсөн» тигән формулировка менән комсомолдан сығаралар һәм әҙәбиәт институтынан ҡыуалар. Михаил Светловтың: «Баланы нисек ҡыҙылса менән ауырыуҙан тыяһың? Нишләп һеҙ

миҫалға уның айырым шиғырҙарын ғына килтерәһегеҙ? «Ҡул», «Атай» шиғырҙарын ҡарағыҙ. Мин Лисинды ташлар, тип уйламағыҙ. Уны һәр ваҡыт күҙ уңымда тотасаҡмын. Әйҙәгеҙ, мин уның өсөн яуаплылыҡты тулыһынса үҙ өҫтөмә алам», — тип яҡлашыуы ла файҙа бирмәй.

Егет Мәскәүҙә пропискаһыҙ, тимәк, эшһеҙ ҙә, торлаҡһыҙ ҙа тороп ҡала. Сыуашстанға ла ҡайта алмай. Сөнки Нобель премияһы бирелеү айҡанлы Пастернакты эҙәрләү айырыуса көсәйә, уның дуҫтарына, ҡатнашҡан кешеләренә баҫым арта. Геннадий Лисин хаҡында ла мәғлүмәт туплана. Бында бер сәбәп егеттең мәшһүр шағир менән тығыҙ аралашыуы булһа, икенсеһе — етдиерәк. Геннадий шул йылдарҙа коммунистик ҡараштары өсөн үҙ илендә төрмәлә ултырған, ысҡынғас, Советтар Союзына килеп һыйынған төрөк шағиры Назым Хикмәт менән дуҫлашып китә. «Ул ҙур шағир, һәм мин уны ныҡ ярата торғайным, — тип хәтерләй Айги. — 1956 йылда Назым шиғырҙарымды Варшаваға шиғриәт симпозиумына алып китте. Шунда ул үҙенсә яҡшылыҡ теләп: «Бөтәһе лә Советтар Союзында шиғриәт юҡ тип иҫәпләй. Ә бит ул бына, бар», — тип белдерә лә һүҙҙәрен иҫбатлар өсөн минең шиғырҙарҙы уҡый. Шиғырҙарҙы оҡшаталар, тик уларҙы совет шиғыры тип ҡабул итмәйҙәр. Тап шунан һуң минең менән органдар ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы ла инде. Ә Борис Леонидович институттан ҡыуылыуымды үҙенә һөжүм итеүгә бәйләп, бик ауыр алды. Мин иһә: «Был — яҙмыштың дөрөҫ йүнәлеше. Күптән үк шул юҫыҡта барам бит инде, шуға күрә нисектер тынысмын», — тинем».

Егеткә алыҫ Иркутск ҡалаһына китергә тура килә һәм уларға башҡаса осрашырға насип булмай.

Шулай ҙа яҙмыштың баһалап бөткөһөҙ бүләге генә түгел, хәстәрлеге лә булған был дуҫлыҡ (бөтөн донъяла шөһрәт ҡаҙанған етмеш йәшлек оло шағир, Нобель премияһы лауреаты менән кисә генә ауылдан сыҡҡан егерме ике йәшлек сыуаш егете араһындағы мөнәсәбәтте шулай атап булһа) Айгиға артабанғы аяуһыҙ һәм ҡатмарлы ижади тормошонда ғүмергә етерлек таяныс була. «Борис Леонидовичтың вафатынан һуң үткән ғәҙәттән тыш ауыр, (шулай ҙа инде түҙерлек) сирек быуат эсендә йыш ҡына уйлай торғайным: Пастернак совет тормошона ярты быуат буйы нисек түҙҙе икән? Уның сыҙамлығы — минең өсөн ысын мәғәнәһендә йомаҡ. Бөтә нәмәгә лә түҙеүе һәм еңеп сығыуының бер сере ошондалыр, мо-

ғайын: ул ысын даһиҙарға хас булғанса һоҡлана белә ине. Минут һайын: япраҡ ҡойолғанға, бала йылмайғанға — һәр нәмәгә — мыжыҡ ямғырға, һөйләшеп торған кешеһенә, үҙе әйтмешләй, бөтәһе-бөтәһенә — тормошҡа, ғаләмгә, үҙенең шиғри «донъяны ижад итеүенә» — һоҡланыу ҡеүәһенә эйә ине ул». Остазының был һәләте Айгиҙың үҙенә лә хас, был уның әҫәрҙәрендә асыҡ күренә.

Бер йылдан һуң Геннадий институтты тамамлап сыға, тик дипломды шағир түгел, тәржемәсе булараҡ яҡлай.

Шул йылдың көҙөндә уға Сыуашстанға ҡайтырға тура килә. Һеңлеһе менән бергә улар йылға яҡын үлемесле ауырып, түшәккә йығылған әсәләрен ҡарай.

*Не снимая платка с головы,*
*умирает мама,*
*и единственный раз*
*я плачу от жалкого вида*
*ее домотканого платья.*

*О, как тихи снега,*
*словно их выровняли*
*крылья вчерашнего демона.*

*О, как богаты сугробы,*
*как будто под ними —*
*горы языческих*
*жертвоприношений.*

*А снежинки*
*все несут и несут на землю*
*иероглифы бога...*

Шағир «Үлем» тип аталған был шиғырын 1960 йылдың ҡышында яҙған.

Урындағы район башҡарма комитетының сессияһында егерме өс йәшлек егетте «дошман элементы» тип иғлан итәләр, ә органдар рәсми күҙәтеү аҫтына ала. «Өйөбөҙҙөң ҡаршыһындағы йорттоң ҡапҡаһы төбөндә һәр ваҡыт ике кеше ултырҙы. Бер көндө урам яҡҡа тапсыҡ йыйырға сыҡтым. Ҡараһам, ҡапҡабыҙға эре итеп: «Хведусь үлде», — тип яҙып ҡуйғандар. Әллә нишләп китһәм дә, үҙемде ҡулға алдым, күрмәмешкә һалышып инеп киттем. Был тиклем хаслыҡты ауылдаштарыбыҙҙан бер кем дә эшләй алмаҫ ине». Ул саҡтарҙы һөйләгәндә Ева Николаевнаның күҙенә йәш тула.

1960 йылдың июнендә Геннадий Мәскәүҙән: «Классик вафат булды», — тигән телеграмма ала. «Әсәйем, наҙан ғына крәстиән ҡатыны, минең ысын мәғәнәһендә рухташ дуҫым булды. Мин уға Пастернак тураһында йыш һөйләй торғайным. Шуға күрә шағирҙың тормошондағы әһәмиәтен яҡшы аңлай ине.

— Уны ерләгәндә һин мотлаҡ булырға тейешһең, — тине әсәйем. — Бар. Ышан, мин һин ҡайтҡансы үлмәй торормон.

Төн етте. Мин баҫыу аша тимер юл станцияһына йүгерҙем. Тирә-йүнде ай яҡтырта. Ҡапыл телеграмманы тағы бер тапҡыр уҡып сығырға булдым. Унда: «Шишәмбе көндө ерләйбеҙ», — тип яҙылғайны. Пастернакты өс көн элек ҡуйғайнылар инде. Әсәйем унын вафатынан һуң бары тик ике аҙна ғына йәшәне. Бына шулай — бер-бер артлы килгән икеләтә ҡайғынан — йәшлегем тамам булды», — тип яҙа Айги.

«Әсәйемде ерләгәндән һуң, Гена шунда уҡ китеп барҙы. Мин быны башта аңламаным, бик үпкәләнем. Ә был яҙмыштың ҡурсалауы булған. Икенсе көндө уны ҡулға алырға килделәр. Әгәр шул саҡта эләктергән булһалар, ағайым башҡа ысҡына алмаҫ ине», — тип хәтерләй Ева Николаевна.

Юллыҡ аҡсаһы булмағанлыҡтан, егет Чебоксарға бара һәм Яҙыусылар союзына инә. Ә союздағы кеше уға: «Шундай-шундай ерҙә шиғырҙарыңды яратҡан бер ҡыҙ йәшәй, һине бик тә күргеһе килә», — тип адрес тоттора. Йәшлек бит инде. Бер нәмә лә уйламайынса барып кергән егетте шунда уҡ ҡулға алалар. Баҡһаң, ул кешенең ҡатыны КГБ-ла эшләгән булған икән.

«Генаны КПЗ-ға бикләйҙәр, «ауылда теркәүһеҙ йәшәгәне һәм берәҙәк тормош рәүеше алып барғаны өсөн» тигән ғәйеп тағалар. Унан тәүҙә һорау алған тәфтишсе эш көнө бөткәндән һуң ҡайтып китә. Икенсеһе өлкән генә сыуаш кешеһе була. Гена уға: «Мин ауырыу әсәйемде ҡарарға ҡайттым. Ул бер йылға яҡын үлем хәлендә ятты. Әле генә ерләнек», — тип аңлатып бирә. Тәфтишсе Борис Пастернак тураһында һорашып: «Ысынлап та арыу кешеме?» — тип ҡыҙыҡһына. «Алтын кеше», — тип яуап ҡайтара Гена. «Бына нәмә, егет, — ти был. — Әйҙә, килешәйек. Мин һине күрмәнем дә, белмәнем дә. Ә һин бөгөн үк Сыуашстандан сығып китәһең».

Йәшлек — тилелек. Ағайым: «Иртәгә Огодуйҙа (сыуаштарҙың һабантуй кеүек байрамы. — *Г. Ғ.*) булып китер-

мен тигәйнем», — тип үкенә. «Һин һаман да үҙеңә ниндәй ҡурҡыныс янағанын аңлап етмәйһең икән әле!» — тип асыулана тәфтишсе».

Шулай итеп Геннадий шул үк төндә вагон башына ултырып, Мәскәүгә ҡарай юлға сыға.

Теркәлергә торлаҡ та, тимәк, эш тә юҡ. Ашарға — аҡса, йәшәргә урын юҡ. Егет хәйерсе хәлендә йылға яҡын (әйтеүе генә еңел — оҙон бер йыл!) йәшәй, төндәрен йә вокзалдарҙа, йә Главпочтампт бинаһында ҡунып йөрөй.

«Мин үлемесле хәлдә ҡалдым: мотлаҡ үҙемә рухи туғандар табырға тейеш инем. Тәбиғи, улар әҙәбиәт институтында юҡ ине һәм, ғөмүмән, уларҙың донъяла бармы, булһалар, ҡайҙа булыуҙары ихтимал икәнен дә белмәнем». Шул саҡ Геннадий үҙе кеүек үк рәсми ойошмалар тарафынан эҙәрләнгән, подпольела ижад иткән йәштәр менән таныша.

«Был мөғжизә булды, — тип хәтерләй шағир. — Һәм минең ғүмеремде лә, ижадымды ла һаҡлап алып ҡалды. Улар мине үҙҙәренекеләй яҡын күрҙе, шиғырҙарымды рус шиғриәте итеп ҡабул итте. Минең «рус түгеллегем» улар өсөн әһәмиәтле түгел ине.

1959 йылда мин даһи дәрәжәһендәге талантлы шәхес, музыкант һәм композитор Андрей Волконский менән дуҫлаштым. Ул миндәге насар зауыҡ тигән нәмәне тамырынан йолҡоп ташланы. Был йәһәттән ул иҫ киткес аяуһыҙ була торғайны. Уның абстракт сәнғәт буйынса ғәйәт бай энциклопедик һүҙлектәре бар ине. Волконскийҙа беренсе тапҡыр Веберҙы, Шенбергты ишеттем. Ә Веберҙы тәүге тапҡыр тыңлау — ул Марсҡа барып әләгеүгә бәрәбәр. Күңелдә ғәжәйеп кисерештәр уяна: тауыш менән шундай нәмәләр ҙә эшләп булғанын белә башлайһың».

Волконский аша Геннадий «Чапаев» фильмын ҡуйыусыларҙың береһенең улы Александр Васильев менән яҡынлаша. Ғәжәйеп талантлы рәссамдар Владимир Яковлев, Игорь Вулох, Евгений Кроповницкий, шағир Всеволод Некрасовтар менән дуҫлашып китә. Уларға фажиғәле яңғырашлы, тетрәндергес әҫәрҙәр яҙған Стас Красовицкий тигән шағир ҡушыла. «Стастың шиғырҙарын беҙ рухты нығытыусы доға һымаҡ ҡабатлай торғайныҡ. Ғөмүмән, ул осорҙа беҙ тик шиғыр менән генә һөйләшә инек, буғай».

Бында Айгиҙың иҫән-аман ҡалыуына булышлыҡ иткән һәм формалашыуына ҙур йоғонто яһаған ижадсы-

ларҙың тик бер нисәүһен генә иҫкә алдым. Улар иһә күп кенә һәм барыһы ла иҫ киткес киң эрудициялы, тәрән фекерле, шул уҡ ваҡытта буйһонмаҫ рухлы шәхестәр.

Дуҫтар табыла. Был, әлбиттә, иң мөһиме. Тик бына бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар. Документтарын ҡарап, комсомолдан ҡыуылғанын күрәләр ҙә баш тарталар. «Бер көндө химия заводына барҙым. Хеҙмәт кенәгәһен һоранылар. «Кенәгәм юҡ, — тип яуапланым. — Бына был бар». — Дипломымды бирҙем. «Һеҙ нимә, көләһегеҙме әллә?! Юғары белемегеҙ бар бит!» «Эйе, — тинем. — Тик мин яҙыусы һәм тормошҡа яҡыныраҡ булғым килә!» «Ярай, улайһа, — тинеләр. — Тормошҡа яҡын булырһың».

Волконский менән осрашҡас, һүҙ артынан һүҙ сығып, химзаводҡа эшкә урынлашҡанын әйтә. Композитор ҡаҡса ғына кәүҙәле, йонсоу, тире лә һөйәк Геннадийға беренсе тапҡыр күргәндәй ҡарап тора ла: «Һин нәмә! Аҡылдан шаштыңмы әллә?! Үләһең бит унда, — тип ҡысҡырып ебәрә. — Мин хәҙер һине бикләп ҡуям да эшкә урынлаштырмай тороп сығармайым».

Бөтөн таныштарҙы эшкә егеп, егетте Владимир Маяковский музейына урынлаштыралар. «Был икенсе мөғжизә булды. Сөнки үҙемде тыуған йортҡа ҡайтҡан кеүек тойҙом. Әҙәм балаһына, айырыуса йәш саҡта, фекерҙәштәр генә түгел, ғөмүмән, кешеләр менән көндәлек бәйләнеш, уларҙың ҡыуаныс һәм хәсрәттәрен белеү, үҙеңдең уларға, уларҙың һиңә кәрәклеген тойоу мотлаҡ. Ә музейҙа шиғриәткә мөкиббән булған, бөтөн яңылыҡҡа ихлас ҡыуанған һоҡланғыс кешеләр эшләй ине».

Ғөмүмән, Маяковский шағирҙың яҙмышында ғәйәт әһәмиәтле урын алып тора, хатта уның шағир булараҡ формалашыуы тап уға бәйләнгән, тип әйтергә мөмкин. «Беҙҙең төпкөлдә китап табыуы ҡыйын ине. Үҫмер сағымда уҡ үҙебеҙҙә булған бөтөн нәмәне уҡып бөткәнлектән, үҙем кеүек китап ене ҡағылғандарҙы эҙләп тирә-яҡ ауылдарҙы ҡыҙыра башланым. Шул саҡ бер класташым Маяковскийҙың шиғыр китабын алып килде. Шулай итеп мин Мәскәүгә егерменсе быуат шағирҙарынан тик Маяковскийҙы ғына белеп килеп төштөм. Уны иҫем китеп ярата торғайным. Оҙаҡ йылдар үҙемдең яҙыу алымымды боҙоп, Маяковский кеүек яҙып маташтым», — тип хәтерләй шағир.

Тап ошо йылдарҙа Айги рус телендә яҙыуға күсә. Үҙе әйтеүенсә, был ҡарарға килеүендә Борис Пастернактың йоғонтоһо ҙур. «Завязь» тип аталған поэмамдың ҡарала-

ма тәржемәһен уҡығанда, ул минән: «Сыуашса ла шулай яңғыраймы? — тип һораны. — Сәйер. Мин уҡыған саҡта нисектер русса яңғыраш ишетәм». Икенсе юлы ул: «Һеҙҙең русса яҙып ҡарағанығыҙ юҡмы?» — тип һораны. «Юҡ, — тип яуапланым. — Тик руссаға тәржемә иткәндә ҡайһы бер табыштарҙы күрһәтеп була. Сөнки, әгәр ҙә матурлыҡ ысын икән, ул бит телгә генә бәйләнмәгән». «Мин һеҙҙә рус телендә яҙыуға һәләт күрәм. Һеҙгә ныҡ ҡына уйланырға ла барыбер һайларға тура киләсәк — сыуаш теле менән ҡалырғамы әллә руссаға күсергәме».

Минең рус теленә күсеүем бик ғазаплы булды, — тип хәтерләй шағир. — Русса яҙа башланым, тик «сыуаш телен бер ваҡытта ла ташламаясаҡмын, был минең бурысым», тип ант иттем. Һәм ғүмерем буйы рус һәм көнбайыш шиғриәтен сыуашсаға тәржемә итәм».

Уға ҡала тормошо, Көнбайыш философияһы ҙур йоғонто яһай. Француз телен өйрәнергә тотона. 1968 йылда сыуаш телендә XV—XX быуаттарҙағы француз шиғриәтенең антологияһын — Франсуа Вийондан алып бөгөнгө көнгә тиклем 77 авторҙың шиғырҙарын — нәшер итә. Уны баҫып сығарырға: «Бындай антология башҡа бер генә телдә лә юҡ», — тип Илья Эренбург ярҙамға килә. Был йыйынтыҡ өсөн Айги 1972 йылда Францияның «Әҙәбиәт һәм сәнғәт ордены командоры» титулына лайыҡ була. Артабан шағир сыуаш телендә поляк һәм венгр шиғриәттәренең антологияһын әҙерләй. Боронғо замандарҙан алып бөгөнгө көндәргә тиклемге сыуаш шиғриәтенең антологияһын төҙөп, уға ифрат тәрән ентекле баш һүҙ яҙа. Был антология әлеге көндә инглиз, француз, венгр, итальян һәм швед телдәрендә донъя күргән.

Ә үҙенең рус телендә ижад иткән шиғырҙарының бер генә юлы ла СССР-ҙа нәшер ителмәй. Уның байы китаптары сит илдәрҙә сыға башлай. 1962 йылдан шиғырҙарының тәржемәләре матбуғатта, 1967 йылдан китап булып Чехословакия, ГФР, Швейцария, Франция, Англия, Польша, Венгрия, Югославия, Голландия, Швеция, Дания, Финляндия, Болгария, Төркиә, Японияла баҫыла. «Тимер ҡоршау» емерелгәндән һуң шағир сит илдәргә сыға ала башлай һәм шул ваҡыттан бирле бик күп шиғри фестивалдәрҙә, симпозиумдарҙа ҡатнаша.

Рәсәйҙә тәүге шиғри йыйынтығы Евгений Евтушенконың баш һүҙе менән 1991 йылда нәшер ителә.

«Сыуашстан уны иң башта ситкә тибәрҙе, шул уҡ ваҡытта иң беренсе булып ҡабат үҙ ҡосағына алды», — ти хәҙер яҡташтары. Ысынлап та, 1990 йылда Айги Сыуашстандың Константин Иванов исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты була, ә 1994 йылда сыуаш халыҡ шағиры исеменә лайыҡ тип табыла. 1997 йылда дәүләт университетының почетлы докторы итеп иғлан ителә.

Шағирҙың башҡа наградалары араһында Германияның Петрарка исемендәге, француз академияһының П. Дефей исемендәге, Рәсәйҙең Крученых исемендәге премиялары, Венгрия Мәҙәниәт министрлығының «Андре Ади иҫтәлегенә» миҙалы, Македониялағы шиғриәт фестиваленең «Алтын таж»ы, Италияның Казер исемендәге шиғриәт премиялары бар. Ул — Борис Пастернак һәм Андрей Белый премияларының беренсе лауреаты.

Айги ижадының үҙенсәлеге һәм ҡиммәте нимәлә? Ни өсөн бик күп әҙәбиәт һөйөүселәр уның шиғырҙарын аңлауы ҡыйын тип иҫәпләй? Әлбиттә, был бик ҡатмарлы һорауҙар һәм уларға теүәл генә яуап биреү мөмкин дә түгелдер. Мин дә Айгиҙы үҙемсә аңларға тырыштым һәм, йәшерен-батырын түгел, был еңелдән булманы. Әле һеҙҙең менән үҙемдең фараздарымды уртаҡлашҡым килә.

Яҙыусы булараҡ, мин үҙемдең мөмкинлегемдән нимә килгәнен, ә нимәне һүҙ менән әйтеп бирә алмағанымды асыҡ самалайым һәм шул сиктә үтергә хатта маташып та ҡарамайым. Артабан — тынлыҡ. Эйе, ул сиктең аръяғында тынлыҡ ята. Тик тынлыҡ — ул бушлыҡ түгел. Ул йәшәйеш һәм уның һуты менән һуғарылған, нурҙан туҡылған. Һәм ул тынлыҡ һин үҙең дә тын булғанда ғына үҙенә үткәрә, ә үҙе беҙгә ғүмерҙең һәр миҙгелендә һарҡып һеңә. Бына ошо донъяның күпселеген тәшкил иткән — ҡояш тын ғына ҡалҡа, сәскәләр тын ғына ата, ҡарҙар тын ғына яуа — тынлыҡ биләмәһен һүрәтләү өсөн зиһенем дә, телем дә зәғиф. Быны беләм һәм күнгәнмен. Бына шуны белеүем һәм күнеүем менән мин — ғәҙәти — даһи Айгиҙан айырылып торам да инде. Ә ул ана шул биләмәне — тынлыҡ-мәңгелекте һүрәтләргә, сағылдырырға баҙнат итә. Уның башбаштаҡ ҡыйыулығы, хыялый алабарманлығы шундалыр ҙа.

«Минең шундай йылдарым булды — ағастар менән аралашырға тырышып ҡараным. Һин унда тәрәнәйәһең, тәрәнәйәһең, ағастарҙың да һиңә яуап биреүен теләйһең, тик улар яуап ҡайтармай, сөнки унда ишетеү һәлә-

те юҡ, һүҙҙәр юҡ — һәм бына ошо һүҙҙәрҙең юҡлығына, өнһөҙлөккә төшөп батырға мөмкин», — ти шағир.

Айгиҙың «Алыҫҡараҡ — ҡарҙар араһына» тигән китабы бар. Ҡарҙар араһына — өнһөҙлөккә. Һәм мәңгелеккә. Сөнки шағир фекеренсә, «шиғриәт тә ҡар кеүек мәңгелек». Ә мистиктар, беҙҙең үҙәгебеҙҙә, асылыбыҙҙа — тынлыҡ, тип раҫлай. «Һәр ваҡыт бытырлап торған аҡылды саҡ ҡына булһа ла туҡтатып тороу оҫталығына өйрәнеп, үҙеңдең тәрәнлегеңә ирешһәң, ул тынлыҡта Алла менән осрашаһың, — тиҙәр улар. — Алла һинең менән тынлыҡ теле аша һөйләшә». Моғайын, Геннадий Айги ана шул тәрәнлеккә үтә алған. Моғайын, ул шул тәрәнлекме, юғарылыҡмы — һүҙ рухиәт тураһында барғанда, ҡайһыһының теүәлерәк икәнен нисек беләһең — пәйғәмбәрҙәр генә өлгәшә торған нөктәгә яҡынлашҡан. Уның, «шағир — ул өлгөрөп етмәгән пәйғәмбәр», тип әйтеүе юҡҡа түгел.

Күрәһең, шуныһы менән дә ул күптәрҙең зитына тейәлер: ни өсөн башҡалар, булмай, тип күнгәндә, ул һаман ныҡыша? Хәйер, хәҙер авангард тигән келәймә баҫылғандар уға тиклем дә байтаҡ булған һәм Айги үҙен Велимир Хлебников, Владимир Маяковский, Казимир Малевичтарҙың эҙләнеүҙәрен дауам итеүсе тип иҫәпләй.

Айги ирекле, беҙҙеңсә әйткәндә, аҡ шиғыр менән яҙа. Быңдай шиғырҙы күптәр классик шиғыр менән сағыштырғанда етди ҡабул итмәй, сәйер тип һанай. Ә бит классик шиғырҙы яңыртыу ихтыяжы тураһында А. С. Пушкин 1833 йылда уҡ бына нимә тип яҙған: «Ваҡыт үтеү менән беҙ аҡ шиғырға мөрәжәғәт итербеҙ, тип уйлайым. Рус телендә рифма бик аҙ һәм уның һәр береһе үҙ артынан икенсеһен өҫтөрәп сығара».

Ә Айги үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында был турала: «Классик шиғыр бөгөнгө рус шиғриәтендә быға тиклем булмаған кризис кисерә, — тип яҙа. — Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ул Пастернак, Заболоцкий һәм Ахматова шиғырҙарының эске — мәғәнәүи әһәмиәте арҡаһында ғына тере ине. Әле иһә уртаса шағирҙарҙың интонацияһын бер-береһенән саҡ-саҡ айыраһың. Классик формалағы шиғырҙар хәҙер бер үк йырға (тураһын әйтмәй булмай — эстрада йырына) оҡшаған».

Тимәк, сәнғәттә ниндәйҙер мәл етә: ғәҙәти тел — ысул — алым менән донъяны сағылдырыу, һүрәтләү — быға тиклем ижад иткәндәрҙе ҡабатламайынса — мөмкин булмай башлай. Һүрәтләүҙең яңы ысул-алымдарын — яңы

тел уйлап сығарырға ихтыяж тыуа. Был йәһәттән һынлы сәнғәт әҙәбиәттән һәр ваҡыт алдараҡ бара, тип иҫәпләй белгестәр.

«Сәнғәттең һәр төрө лә иң беренсе сиратта үҙе өсөн иң әһәмиәтле булған нәмә: үҙенең һүрәтләү сараларын үҫтереү һәм һәр ваҡыт эшлекле хәлдә тотоу менән мәшғүл. Рифмалы, дөрөҫ үлсәмле шиғырҙар яҙған сағымда мин йыш ҡына үҙем яратҡан, оҡшатҡан берәйһен ҡабатлағанымды тоя торғайным. Шул саҡта, 1960 йылда ҙур ҡыйынлыҡ менән — барыбер тәүәккәлләргә кәрәк ине — рус телендә яҙыуға һәм ирекле шиғырға күстем.

Минең өсөн ирекле шиғыр нәмә? Мин рифмаламайым. Ә бына ритм өҫтөндә эшләүҙе иһә бик мөһим тип табам. Шиғыр бит ирекле — ә ирек менән идара итеү ифрат ҡыйын. Ритмдың ирекле булыуы бик ҙур хеҙмәт һалыуҙы талап итә. Ритмик конструкциялар һәм комбинациялар, ритмик һыҙыҡтар — барыһы ла төпсөрлө хеҙмәт. Яҙған ваҡытта минең өсөн ритм иң төп хәстәрлеккә әйләнә», — ти шағир.

В. Маяковский музейында эшләгән ваҡытта ул Казимир Малевичтың теоретик хеҙмәттәрен ентекләп өйрәнә башлай. Быны эҙләнеү һуҡмағынан һәрмәнеп кенә килгән кешенең аяҡты ышаныслы терәрлек юлға сығыуы менән сағыштырырға мөмкин.

Айгиҙың «Һуҙынҡы өндөң тынлығы» тигән бары бер генә өн-хәреф — «а»-нан торған шиғыры бар. Уны Казимир Малевичтың мәшһүр «Ҡара квадрат»ы кеүек төрлөсә аңларға һәм аңлатырға мөмкин. Шағирҙың ижадын өйрәнеүселәрҙең береһе Владимир Новиков әйтеүенсә: «а» — ул тынлыҡтағы беренсе тауыш, донъя яратылмышының иң тәүге минуты... Ә, бәлки, сабыйҙың тәүге ауазы, кеше телмәренең тәүге рәүешелер».

Айги иғтибарлы уҡыусыһына — хатта ижадташына тиергә була — тынлыҡты, өнһөҙлөктө бирә һәм һин уны үҙең нимәгә бай, шуның менән тултыраһың, ә, бәлки, тынлыҡ һине, һин мохтаж булған нәмә менән тултыралыр. Айгисылар (хәҙер шундай термин да бар) уның ижадында бына нәмә таба һәм айгисы булмағандар тапмай, күрмәй һәм тоймайҙыр. Эйе, «а» өнө һәр ваҡыт булған һәм бар. Әммә тынлыҡ та мәңге булған бит. Тик беҙ уға тиклем ошо мәңгелек өн «а»-ның шуға ишек булғанын белмәгәнбеҙ. Ә Айги уны асыңҡыраны ла беҙҙе тынлыҡҡа етәкләп алып инде.

«Шиғриәт тә, фән кеүек үк, фундаменталь һәм дөйөм ҡулланыу өсөн була. Фундаменталь шиғриәт үҙенең ижади-серле бурыстарын хәл итеү менән мәшғүл. Ҡулланыу шиғриәте сәйәси-публицистик, мәғлүмәт биреү, һүрәтләү, әхлаҡ-мәғрифәт, дини һәм башҡа мәсьәләләрҙе хеҙмәтләндерә. Шиғриәттең был ике төрө йә бәхәсләшеп, йә бер-береһенә йоғонто яһап үҫешә-үҫешә йәнәш йәшәй. Айгиҙың ижады уның дөйөм ҡулланыу өсөн яҙылған шиғырҙары бөтөнләй булмауы менән ғәҙәттән тыш, шуға күрә уға тәбиғи рәүештә тулыһынса эстетик азатлыҡ хас», — тип яҙа тәнҡитсе Владимир Новиков «Шағирҙан ҙурыраҡ» тигән мәҡәләһендә.

Айги шиғриәтте иң беренсе сиратта һөйөү тип аталған энергияны һаҡлауҙың һәм артабан тапшырыуҙың рухи практикаһы тип иҫәпләй: «Минеңсә, — ти ул, — шиғриәт булдыра алған берҙән-бер нәмә — ҡышҡы һалҡын күк аҫтында кеше йылыһын һаҡлау. Быының өсөн шағирҙың үҙендә лә шул йылы булырға, һәм ул уны бер нәмәгә ҡарамай һаҡларға тейеш. Бәлки, был йылы бөтөнләй аҙ, йылымыс ҡыналыр. Әммә ул булмаһа, кеше лә юҡ. Ҡасандар: «Шиғриәттең изге уты», — тигәндәр. Бөгөнгө көндә, шиғриәткә ҡағылышлы, исмаһам, йылы тип кенә әйтһәк тә яҡшы». «Шаймурзино ауылынан сыҡҡан Айги беҙгә донъя шиғриәтен асты һәм үҙе лә донъя кимәлендәге шағирға әйләнде», — ти уның тураһында яҡташы Атнер Хузангай.

Яҡташыбыҙ, ғәжәйеп талантлы шағирә, педагогия фәндәре кандидаты Лилиә Сәғиҙуллина был үҙенсәлекле шағир ижады менән тәүләп танышҡандан һуң алған тәьҫораттары тураһында бына нимә яҙа: «Геннадий Айги менән осрашыу күпмелер дәрәжәлә сит планета вәкиле менән осрашыуҙы хәтерләтә. Хәйер, һәр автор үҙ донъяһын тыуҙыра икән, был ғәжәйеп хәл түгел, ә тәбиғи күренеш булараҡ ҡабул ителергә тейеш. Әммә бындай осрашыуҙарҙың һирәк күҙәтелеүе: «Мин тыуҙырҙым!..» — тигән донъяларҙың йыш ҡына клон кеүек бер-береһенә оҡшаш һәм икенсел булыуында, ахыры. Яңы мәғәнәләр һәм яңы формаларға һыуһап йөрөйһөң-йөрөйһөң дә булғанына хушланып йәшәй башлайһың. Һәм, беренсе ҡарашҡа, кинәт, инде көтмәгәндә — көткән осрашыу. Танымау, таныған, аңламау, күнегелгән танышыраҡ донъяларға тартылыу, аҡрынлап үҙ өҫтөңдә эшләү һәм ҡатмарлы, ауыр аңлашыу. Бәлки, аңлашыу тип әйтеү дөрөҫ

тә булмаҫ — был әле Айги тигән йыһандың ишек тотҡаһына тотоноу ғына.

Айги шиғриәте предметлы шиғриәт булыуҙан бигерәк (ә Айги эмотизмды белдереүсе киҫәксәләрҙән тыш исем һәм ҡылым формалары менән иркен эш итә), ишаралар, сигналдар, символдар шиғриәте тиергә була. Күренеш, хәл-ғәмәл туранан-тура аталған осраҡта ла, ул шиғри контекста алмаштарға өҫтөнлөк бирә, шул нигеҙҙә әйтелеп бөтмәгәнлек, билдәһеҙлек, сер барлыҡҡа килә.

Шиғри туҡыманы ҡатмарландырыусы тағы бер алым күҙгә бәрелеп тора. Шиғриәт, Мандельштамса әйтһәк, төшөрөп ҡалдырылған быуындарҙа «йәшәй». Ул йыш ҡына, мәҫәлән, М. Цветаева ижадында, поэтик синтаксис үҙенсәлеге аша ла сағыла. Айги был идея-позицияларҙы үҫтерә, киңәйтә. Уның шиғри сылбырындағы күҙгә күренгән быуындар һаны күңел күҙе менән генә табыла һәм торғоҙола торғандарынан күпкә аҙыраҡ. Шағирҙың «М. К.» исемле шиғырындағы ҡатын-ҡыз образы нәҡ шундай шиғриәт менән ауаздашлыҡ тыуҙыра:

*«и женщина, в которой*
*просматриваются стеклянные пространства:*
*как чисто там и пусто*
*(как на странице: здесь)».*

Шул саф һәм буш быуындар минән — уҡыусынан ижадташлыҡ талап итә. Әлбиттә, мин үҙ аңламдарымды һалам, быуындарҙы бәйләйем... Әммә автор тыуҙырған донъяны, текст артында ятҡан подтекстарҙы тулыраҡ аңлау өсөн минең ҡараштар, белем, тәжрибә системаһы һәм авторҙың эстетик принциптары, тормош фәлсәфәһе араһында киҫешеү нөктәләре булырға тейеш. Шундай нөктәләр ни ҡәҙәр күберәк, шиғри донъяла бер-береңде табыу-таныу мөмкинлектәре лә шул тиклем киңерәк. Бына минең күңелдә ҡайтауаздар гөлләмәһе тыуҙырған шиғырҙарҙың береһе:

**Оттиск: тополь**

*о Дерево — ты Божий сон приемлимый глазами*
*первичнее чем Ум-мой-Сон —*
*из более ты ранних Божьих снов! —*
*на стыке перемены Сна*
*отечески шумишь — дитя в Господней памяти*

Ҡасандыр беренсе тапкыр С. Дали һәм П. Гоген күргәҙмәләрендә йөрөгәндә мин үҙ-үҙемә бер һорау бирҙем: «Улар ҙа кеше бит, нисек был донъяны шундай итеп күрә алалар икән?» Әкренләп төшөндөм: беренсенән, улар ябай кеше түгел; икенсенән, донъя шул ҡәҙәр ҡатмарлы һәм төрлө, унда төрлө төҫтәр, формалар, булмыштарға урын бар; өсөнсөнән, ижади шәхес сәнғәттең үҙләштерелгән һәм билдәле сиктәрен үтергә ынтыла, заман тыуҙырған яңы мәғәнәләрҙең иҫке «һауыттарға» һыйышмауы унда традицион ҡалыптар менән ҡәнәғәтһеҙлек хисе уята; ғөмүмән, кеше заты ғүмере буйы яңылыкҡа — билдәһеҙлек өлкәһенә тартыла. Геннадий Айги феноменын да мин үҙем өсөн бөгөнгә шулай аңлатам, иртәгә, бәлки, был аңлауым үҙгәрер...

Мин әле генә донъяға уның күҙҙәре менән ҡарай, уның һымаҡ тоя башланым. Нисек инде ул юҡ? Ул елдең иҫеүендә, ул һыуҙың сылтырап ағыуында, ул болондоң сәскә атыуында... Минең өсөн ул тулыһынса тәбиғәттә. Айги — бөйөк шағир, тиҙәр. Мин һәр ваҡыт был хаҡта, нимәлер әйтеп еткелмәгән, тип уйлай инем. Әле таптым: «Ул — шиғриәттең үҙе», — ти мәшһүр ағаһы хаҡында Ева Лисина.

Шағирҙың «Ҡарҙар араһына алыҫҡа» тигән шиғыр йыйынтығында:

*«А вы запеваете — а я удаляюсь*
*Постепенно в снега»*, —

тигән күрәҙәлек кеүек яңғыраған юлдар бар.

Көсөргәнешле ижади тормош менән йәшәгән Геннадий Айги ҡаты ауырыуҙан һуң етмеш икенсе йәшендә Мәскәүҙә вафат була һәм ҡышҡы күктән тын ғына ҡар яуған көндө үҙенең теләге буйынса тыуған ауылының зыяратында әсәһе менән олатаһы янына ерләнә.

## «Тик һөйөүҙе белә»: Луиза

Тышта һыуыҡ. Чебоксарҙың ғәжәйеп йәме булған киң Волга тотош ҡар аҫтында. Тәҙрә быялаһын һалҡын нәфис селтәр менән биҙәкләгән дә йылы өйгә эңер зәңгәрлеге һарҡып инә. Бүлмәлә тын һәм ниндәйҙер йәнде

шифалай торған һиллек. Лиза (туғандары шулай йөрөтә) диванға йәтеш итеп ултырып алған да (ғәҙәттә, сабыйҙар менән бесәйҙәр генә шулай рәхәтләнә белә) бер йомарлам ебәк епте «тетә». Ул үҙенсә шулай итеп селтәр бәйләй. Мин тәҙрә янындағы икенсе диванда бәләкәс кенә өҫтәл шәме яҡтыһында уның мәшһүр ағаһының шиғырҙарын күңелем менән аңларға һәм башым менән тойорға тырышып ултырам. Егерме беренсе быуат шиғриәте тип нарыҡланған был әҫәрҙәрҙең тәрәнлегенә үтергә теләйем, ләкин улар бармаҡ араһынан ағып киткән һыу, усҡа йомам тигәндә юҡ булған нур һымаҡ. Миңә аратирә һирпелеп ҡарап-ҡарап алған Лиза ҡапыл:

— Теләйһеңме, мин һиңә үҙемдең картиналарымды күрһәтәм, — тип өндәшә. Әлбиттә, теләйем. Инде улар тураһында әллә күпме ишеткәнмен. Әммә картиналарҙы аңлау ҡеүәм, шиғырҙарҙы аңлағанға ҡарағанда ла ҡойтораҡ булғанға, баҙнатым етмәй торам.

— Күрһәт, — тием сырайындағы һорау яуабыма ҡарап ҡыуаныусҡа йәки көйөнөскә әйләнергә торған ихлас йөҙгә ҡарап. Ул тулы кәүҙәле бала кеүек мышнап «ҡараңғы мөйөштән» ҡатырға йәшник һөйрәй. Саҡ өҫтөрәп алып ингәндән һуң бер-бер артлы альбом биттәре сығарып алдыма һала. Улар йөҙәрләгән. Мин береһен, икенсеһен алам, текләп тә, алыҫҡараҡ ҡуйып та, яҡыныраҡ килтереп тә ҡарайым. Артыҡ бер нәмәһе лә юҡ. Өс-дүрт йәшлек балалар шулай төшөрә: ҡылҡәләм менән буяу ала ла ҡағыҙ битенә бер төҫтө, унан икенсеһен буяй. Лиза миңә хәүефләнеп ҡарай, күҙҙәрендә генә түгел, тотош булмышында өнһөҙ һорау: йә, нисек? Һәр ижадсы шикелле унда ла эске тулҡынланыу: оҡшармы, оҡшамаҫмы? Сәйер, ни өсөн беҙ һәр ваҡыт ижад емешебеҙгә баһаны шундай хәүеф менән, гүйә, үлем һәм йәшәү кимәлендәге мәсьәлә кеүек итеп күтәрәбеҙ? Бераүгә оҡшар, икенсегә юҡ, ә беҙ йә атҡа менгәндәй һөйөнәбеҙ, йә йәрәхәтләнгәндәй әрнейбеҙ. Икенсе, өсөнсө һүрәт, мин көсөргәнеп үҙемә ҡолаҡ һалам: юҡ бит, юҡ, тулҡынландырмай, күңелгә тәьҫир итмәй. Ә Лиза мөлдөр күҙҙәре менән ҡараған да киткән: уны алдау мөмкин түгел. Сөнки уның сафлығы янында ялғанға һулар һауа юҡ. Ә ул ошо буяуҙарҙы ҡағыҙға төшөргән тулы ғына ап-аҡ ҡулдарын тубыҡтарына һалған да (әйтерһең дә, боронғо фотоһүрәттән төшкән) сабыр ғына көтә. Инде сырайы һил, нимә генә тиһәм

дә ҡабул итергә күнгән, ҡарашында бары яратыу. Бындай ҡараш моңһоу сабыйҙарҙа, аҡыллы эттәрҙә, изге күңелле ҡарттарҙа була: уларҙың һине яратыуы һинең нимә әйтереңдә лә, ниндәй булыуыңда ла бәйләнмәгән. Улар һине үҙҙәре яратмайынса булдыра алмаған өсөн ярата.

Бына бер мәл ҡағыҙҙағы төҫтәрҙең гөлләмәһе, бербереһенә күсеше, ярашыуы йәнләнеп китте лә, уларҙың һулҡылдап типкән энергияһы, вибрацияһы миңә күсә, ағыла, тирә-яҡты, бүлмәләге ябай ғына әйберҙәрҙе, хатта яҡтылыҡты ла үҙгәртеп ебәрҙе. Аҡылым нимә булғанын аңламай, әммә тотош күтәренкелеккә, ҡыуанысҡа әйләнәм; был йөҙөмдә лә сағыла, күҙҙәремдә лә балҡымай ҡалмай. Рәссам башта тулҡынланыу, хәүеф, аҙаҡтан сабырлыҡ менән көткән нәмә бына шул икән дә — ул шунда уҡ һөйөнөслө еңеллек менән — әйтерһең дә, тын да алмай көткән тәрән һулыш ала: «Оҡшай!!!»

— Оҡшай, — тип раҫлайым мин хәйләләргә кәрәкмәгән өсөн тағы ла ныҒыраҡ ҡыуанып. Хәйер, сабый паклығына һәм һиҙгерлегенә эйә булған был саф йән эйәһен хәйлә менән генә барыбер алдаштырып булмаҫ ине.

Ҡағыҙ ҡумтанан Лизаның йәнә сығара башлаған альбом биттәренең береһен алып, икенсеһен ҡуйып туҡтауһыҙ ҡарағым, уларҙың ебәк кеүек шымалығын, төҫтәрҙең ғәжәйеп сифаттарын тойғо килә. Унда төҫтәрҙең төрлөлөгө — төҫмөрҙәр муллығы хайран итә. Бына йәшелдәр серияһы. Бер үк төҫтөң күсәгилешлеге, башҡа килмәҫлек икенсе төҫ менән сәйер һәм төптө көтөлмәгәнсә ярашыуы. Бары тик илһам ғәрәсәтендә генә ошо нәфис йәшеллеккә һиҫкәндергес ҡыҙыллыҡ менән ҡағылырға йәки тап ошо урынға, ошо зәңгәрлекте тамыҙырға мөмкиндер. Минең был үҙгәргән һәм шифалыға, йәнде сихәтләндереүсегә әйләнгән яҫылыҡта, киңлектә, ысынбарлыҡта оҙағыраҡ ҡалғым килә һәм шул саҡ Айгиҙың шифырҙарының да аңлайышлыраҡ, яҡыныраҡ була башлағанын тоям. Әйтерһең дә, Лиза үҙенең картиналары менән ағаһының быға тиклем миңә ябыҡ булған булмыш-донъяһына етәкләп алып инә.

*облако давнее*
*словно с движеньями думанья*
*там — шевеленьями теми же — близко — сырое*
*словно лица ощущенье усиливая*
*место мама — обожания будто в младенчестве*
*мне закрывает*
*чтоб выдержать мог*
*и не удерживая*
*насквозь серебрится*

Лизаның көмөшһыу йәшеллек серияһы «Әлеге шул тал» япрағының шымалығын, еләҫ еүешлеген тойҙора, ниндәйҙер һиҙелер-һиҙелмәҫ оҡшашлыҡтарҙы уятып, (һәр беребеҙҙә лә йәшәй бит үҙенең бер талы) булмышыңдың үҙең дә белмәгән тәрәнлектәренә етәкләй. Бары шунда ғына Айги шиғриәтенең ни өсөн миңә быға са бикле булғанын самалайым: мин аҡылым менән «шаҡығанмын», аңларға тырышҡанмын, мәғәнә эҙләгәнмен, ә бергәләп тойорға мөмкин икәнен, был сифаттың ни тиклем ҡиммәт һәм ҡәҙерлелеген иҫәпкә алмағанмын. Дөрөҫөрәге, ғөмүмән, ундай мөмкинлектең барлығын белмәгәнмен.

Шул саҡ ишектә йоҙаҡ шытырлап асыла, алғы бүлмәлә ут тоҡана. Ева Николаевна ҡайтты. Ә беҙ тылсымлы мөхитебеҙҙән ысҡына алмай, ысҡынырға теләмәй бер килке ултырабыҙ ҙа уның янына сығабыҙ.

Һыуыҡтан биттәре алланған, дебет шәленә бәҫ ҡунған Ева Николаевна бүлмә ишегенә килеп баҫҡан Лиза менән миңә көлөп баға.

— Нимә, Лизаның картиналарын ҡарайһығыҙмы? — Әлбиттә, ябай альбом битендә акварель буяуҙар менән яһалған картиналар йоғонтоһонда ысынбарлыҡтың күҙ алдында бер халәттән икенсеһенә үҙгәреүе һәм был рух күтәренкелеге уның өсөн сер түгел.

«Бер ваҡыт Гена: «Ева, беҙ һинең менән һис шикһеҙ талантлыбыҙ. Әммә Лиза беҙҙең икебеҙгә ҡарағанда ла талантлыраҡтыр, моғайын», — тигәйне. Былай тип әйткәндә ул Лизаның кешелеклек, рухи һәләттәрен күҙ уңында тотҡандыр», — тигәйне Ева Николаевна.

* * *

Һуғыш башланғанда Еваға әле ике йәш тә тулмаған, Генаға ете, ә Лизаға дүрт була. Финляндияға алты ғына саҡрымда урынлашҡан утарға бомбалар яуа башлағас, барыһы ла урманға ҡаса. Бөтә нәмә яна, шартлау, мәшхәр.

«Гена эргәлә, мин — әсәйемдең ҡулында, ә Лиза юҡ, — тип һөйләй Ева Николаевна. — Атайым, исмаһам, быларын булһа ла ҡотҡарайыҡ, тип әйтеп ҡараһа ла, әсәйем, үлһәм үләм, мәйетен булһа ла табам, тип үҙенекен итә».

Ишек алдында уйнап ултырған ерендә үлек кеүек ятҡан Лизаны табалар. Бер нисә көндән уның ике ҡолағынан да ҡанлы эрен аға башлай. Бәхеткә күрә, Лиза һауыға. Әммә ғүмерлеккә бомбалар шартлағанға тиклем уйнап ултырған дүрт йәшлек сабый аҡылы менән ҡала. Әйтерһең дә, сабый зиһене үлем, ҡырылыш, ҡан ҡойош тулы донъяның вәхшилеге менән килешеүҙән баш тарта. Лиза тик һөйөүҙе һәм яҡшылыҡты ғына белә һәм бына етмеш биш йыл инде донъяның яҡты яғын ғына ҡабул итеп тә йәшәргә мөмкин икәнен раҫлап йәшәй. Ул ғәжәйеп изге күңелле кеше. Рустарҙа «блаженный» тигән дини төшөнсә бар. Изгелек менән тулы, хыялый Алла бәндәләрен шулай йөрөтәләр.

«Ҡатын-ҡыҙҙар монастырына барҙыҡ, — тип хәтерләй Ева Николаевна. — Бер мәлде монастырҙың етәксеһе игуменья, талапсан, тыштан ҡарағанда ҡоро ҡатын рәхәтләнеп илап ултыра. Лиза уның янына барған да: «Нишләп улай ағарып киткәнһең? Ауырыйһыңмы әллә? — тип шул тиклем яратып, хәстәрләп һораша башлаған: — Атайың менән әсәйең бармы? Улар ҡайҙа йәшәй?»

«Минең менән күптән инде бер кемдең дә шул тиклем ҡайғыртып, хәстәрләп һөйләшкәне юҡ ине», — тип үкһей матушка. Ә кемдең уға шулай өндәшергә баҙнаты етһен? Барыһы ла унан тик көтәләр, талап итәләр: «Матушка, кәңәш кәрәк; матушка, өйрәт; матушка, ярҙам ит». Әйтерһең дә, ул — тимерҙән. Ә бит барыһы ла бер йөрәккә йыйыла. Лизаның яғымлы мәрхәмәте монастырҙа һәммәһен арбаны. «Ҡалһын беҙҙең менән», — тип өгөтләп бер булдылар.

Лиза ифрат йомарт йәнле, мул ҡуллы. Күстәнәс бирһәләр, шатлығының сиге булмай, бер генә бөртөгөн дә ашамай, һөйөнә-һөйөнә кеше һыйларға тотона. Эт ме-

нән бесәй булһынмы, балалар булһынмы, балға эйәләгән ҡорт кеүек уға һырыға, сөнки уның яҡшылығынан, һөйөүенән барыһына ла өлөш сыға. Ҡыҙым да, әле ейәндәрем менән ейәнсәрем дә Лиза өсөн өҙөлөп торалар.

«Рәссам булараҡ үҙен тапҡанға тиклем ул ауылға үҙенсә оҙон-оҙон хаттар яҙа ине. Шунан көйләй-һамаҡлай «яҙмаларын» уҡып күрһәтә. Беҙ уны шаяртып, танылған ҡаҙаҡ аҡынына оҡшатып Джамбул тип йөрөтә торғайныҡ. Ә инде беҙҙең балалар һүрәт төшөрә башлағас, Лиза ла шуның менән мауығып китте. Уларҙың буяуҙарын ала ла, берәй мөйөшкә ултырып, донъяһын онота. Нимә төшөрә, нисек төшөрә — артыҡ иғтибар иткән юҡ. Шөғөлө бар, бойоғоп ултырмай — бик яҡшы. Бер мәлде ағайымдың бер дуҫы — ул ваҡытта Гена Германияла йәшәй ине — Рәсәйгә килгәнендә хәл белергә инде. Беҙҙең шулай бит инде, ҡунаҡ килгәс, бешереңәһең, төшөрөнәһең. Ишектә ҡыңғырау шылтырағас, йүгереп барып ишек астым. Башҡа саҡта мин апайымдың инвалид икәнен әйтеп таныштырам. Был юлы ниндәйҙер ашығыс эшем булғанға, аш бүлмәһенә йүгерҙем. Бер ваҡыт нимә ишетәм? Апайым:

— Мин — Лиза. Мин — рәссам, — тимәһенме.

— Бына нисек, Луиза Николаевна! — тип ҡыуанды сәнғәт белгесе. — Ә һеҙ үҙегеҙҙең эштәрегеҙҙе миңә күрһәтмәҫһегеҙме?

— Күрһәтәм, күрһәтәм. — Лиза рухланып ҡунаҡты үҙенең бүлмәһенә әйҙәй.

Сәнғәт белгесенең һоҡланыулы ауаздарын ишетеп бүлмәгә инһәм, ни күҙҙәрем менән күрәм: иҙәндә йөҙәрләгән альбом биттәре. Лиза әллә нисәмә йылдар буйы төшөрөп, матрасы аҫтына йыя барған бөтөн ижад емешен иҙәнгә йәйеп һалған. Ә ҡунаҡ, күҙлеген бер кейеп, бер сисеп, уларҙың әле береһен, әле икенсеһен ҡарай.

— Луиза Николаевна, миңә бер нисә әҫәрегеҙҙе һатмаҫһығыҙмы? — тип һорай ул.

— Ал, ал, — ти шатлыҡтан һәм ғорурлыҡтан ҡояштай балҡып торған Лиза. — Бөтәһен дә ал.

Ә мин үҙ күҙҙәремә һәм ҡолаҡтарыма ышанмай аптырап баҫып торам. Үҙем, әле бер нисә минут ҡына ошо һүрәттәрҙең сәнғәт әҫәре булараҡ ҡиммәте барлығын башыма ла килтермәгән мин, был бөтәһен дә биреп ҡуймаһын тағы тип һағаям. — Ева Николаевна рәхәтләнеп көлә. — Сәнғәт белгесе бик оҙаҡ баш ватып, Лизаның бер нисә һүрәтен һайлап алды. Атҡа менгәндәй

шатланып, рәхмәттәр әйтеп һаубуллашты. Унын артынан Генаға кустәнәстәр ебәреп тороп ҡалдыҡ.

Аҙна тирәһе үткәс, ағайым шылтырата.

— Ева, — ти ул. Гена бер ваҡытта ла ҡыҙып бармай. Әммә беҙ бер-беребеҙгә шул тиклем яҡынбыҙ, мин уның тыныс тауышынан да ризаһыҙлыҡ тойоп һағайҙым. — Ева, нишләп һин мине шул ҡәҙәрле оятҡа ҡалдырҙың?

— Нисек? — тип һорайым шомланып.

Эш былай булған. Рәсәйҙән ҡайтҡас, дуҫы ағайыбыҙҙы ҡунаҡҡа саҡырған. Хужаның стеналарҙа эленеп торған картиналары араһында таныш түгелдәрен күреп Гена:

— Яңы картиналар алдыңмы? — тип һорай ҡуя.

— Оҡшаймы? — Дуҫы ҡыуаныстан ауыҙ йыра. — Уларҙы бит һеңлең бүләк итте.

«Ева шулай һүрәт тә төшөрәме икән ни?» — тип аптырай Гена. «Еваның быңдай һәләте барлығын белмәй инем», — тип әйтергә мәжбүр була.

— Юҡ, — ти сәнғәт белгесе. — Ева түгел, Луиза Николаевна.

— Нишләп һин миңә быға тиклем Лизаның уңдай һәләте барлығы тураһында бер ваҡытта ла әйтмәнең?

— Һуң бит мин үҙем дә белмәй инем, — тинем.

Мин уға Лизаның «Сәскәләр яуа» тигән серияһын ебәрҙем.

«Ева, ниндәй талант!» — тип хайран ҡалды ул.

Бер нисә йыл үткәс, Чебоксарҙа ике тапҡыр Луизаның шәхси күргәҙмәһе ойошторола.

Белгестәр уның ижадын: «Башҡа төрлө сәнғәт», — тип баһалай.

«Хәҙерге заман сәнғәте үҙәгендә сыуаш халыҡ шағиры Геннадий Айгиҙың һеңлеһе һәм билдәле яҙыусы Ева Лисинаның апаһы Луиза Юманкканың (әсәләре яғынан ырыу атамаһы. — *Г. Ғ.*) күргәҙмәһе асылды. Врачтар тарафынан ҡуйылған «аҡылға һай» тигән диагнозға ҡарамаҫтан, ул картиналар ижад итергә ынтыла, — тип яҙҙы Сыуаштан ваҡытлы матбуғаты ул көндәрҙә. — Луиза ағаһы һәм һеңлеһенең күренекле Мәскәү рәссамдары Анатолий Зверев, Владимир Яковлев, Игорь Вулох, Игорь Ворошилов, сыуаш рәссамы Анатолий Миттов һәм башҡалар менән аралашыу мөхитендә йәшәгән. Был рәссамдар барыһы ла уның ижадын юғары баһалай. Игорь Вулох ваҡытында: «Луиза композицияны ғәжәп һиҙгер тоя. Төҫтәрҙең былдай яланғаслығында композицияны

ойоштороу ифрат ҡыйын, ә инде һаҡлап ҡалыу тағы ла ауырыраҡ. Ә Луизаның был бик тәбиғи килеп сыға һәм ундағы ысын мәғәнәлә ижадсы һиҙгерлеге хаҡында һөйләй», — тигән.

Луизаның күңеле сабыйҙыҡы һымаҡ яҡты һәм пак. Луиза бала саҡтан уҡ инвалид, әммә унда кәмһенеү тойғоһоноң эҙе лә юҡ. Ул илгәҙәк һәм иҫ киткес мәрхәмәтле. Беҙ унан бик күп нәмәгә өйрәнә алыр инек.

Уның эштәрендә тап бына шул эскерһеҙлек һәм ихласлыҡ сағыла ла инде. Ҡуйылған картиналарҙың художестволы ҡиммәте тураһында фекер йөрөтөүе ҡыйын: был — башҡа төрлө сәнғәт. Уның әҫәрҙәрендә күнегелгән образдар һәм формалар ҙа, ысынбарлыҡ һәм традицион сәнғәткә хас булған бер нәмә лә юҡ. Был эске халәт, эске донъяны сағылдырған сәнғәт.

Моғайын, һәр рәссам үҙенең иң юғары маҡсаты итеп тап бына ошо кимәлгә күтәрелеүҙе һәм шартлылыҡ ҡыҫымдарынан азат булған саф сәнғәт тыуҙырыуҙы ҡуялыр. Йыш ҡына үҙебеҙҙең һөрөмләнгән күңелебеҙҙә тыумыштан бирелгән донъяны тойоуҙың иң саф нөктәһен аҡтарып сығарыу һәм юғалған йәннәтебеҙҙе кире ҡайтарыу бик ҡыйын. Изге Яҙмаларҙа: «Сабый һымаҡ булығыҙ — Алла Батшалығына инерһегеҙ», — тип яҙылған бит. Луиза Лисинаның саф сәнғәтенә инер өсөн бер аҙ сабый булырға кәрәк. Әйткәндәй, ул бик диндар кеше, ул ғәҙеллеккә һәм ихласлыҡҡа ғәҙәттән тыш һиҙгер.

Тәнҡитсе Атнер Хузангай: «Луизаның һүрәттәре уның тойғолары, тәьҫораттары һәм кәйефенең үҙгәрешен сағылдыра. Был йәһәттән ул — импрессионист: уның ҡарашы үҙенең эске донъяһына йүнәлгән», — тигән фекерҙә. Был күргәҙмәне ойошторған рәссам Игорь Унгин үҙенең дә шундай әйберҙәр яҙыу тәжрибәһе барлығы менән уртаҡлаша һәм: «Мине төҫтәр ритмикаһының һәм тәрән хистәр хәрәкәтенең киҫеше таң ҡалдырҙы», — тип баһалай. Рәссам Георгий Фомиряков иһә: «Был сәнғәттең яңы, юғарыраҡ кимәле һәм, ихтимал, хәҙерге заман рәссамдарына уны аңларға һәм үҙләштерергә тура киләсәк», — тип ышана.

Сабыйҙарса бер ҡатлы, ябай Лиза ижад иткән ваҡытта үҙенең баһаһын, дәрәжәһен яҡшы самалаған, ғорур шәхескә әйләнә.

— Мин бит Лиза ишеккә килеп баҫыу менән уның һыны турайып, яурындары күтәрелеп, башын текә тотоп баҫып тороуынан уҡ уның картиналарын ҡарауығыҙҙы

төшөндөм, — тип йылмая Ева Николаевна. — Ҡара әле, хас та королева.

— Теләйһеңме, мин һиңә бүләк итәм, — ти Лиза, йөҙө балҡып. — Ал.

— Ысынлап тамы? Мөмкинме? — тием мин ҡыуаныстан ҡыҙарынып. Ева Николаевнаға ҡарайым.

— Рәссам бит үҙе һиңә тәҡдим итә, — ти ул күҙҙәрен көлдөрөп. — Һайла.

Мин ҡайһыһында туҡталырға белмәй, тиҫтәләгән альбом биттәрен әйләндерәм: зәңгәрлектән дә айырылғым килмәй, йәшелдең шифалы нуры ла арбай, ҡыҙыл-ҡара серияһындағы төҫтәр бәрелешенән һирпелгән ҡеүәт тә үҙенә тарта. Әммә миңә теклəп ултырған Лиза икеләнеүҙәремә талапсан сик ҡуя:

— Етер инде, — ти ул түҙемлеген юғалтып. Тауышында үҙ баһаһын яҡшы тойған ижадсының эске дәрәжәһе.

— Илһамы килгән саҡта ул телен сыртлатып, әйтерһең дә, һоҡлана-һоҡлана төшөрә. Ә инде ҡайһы берҙә йәне көйөп: «Тағы килеп сыҡманы. Килеп сыҡмай, бер нимә лә килеп сыҡмай», — тип өҙгөләнә. Башҡа ваҡытта күндәм, тыңлаусан, сабыр Лизаның, ижадҡа тотондомо, көслө ихтыярлы, талапсан, хатта бер ни тиклем тәкәббер һәм үпкәсел булып китеүе бар. Тулыһынса үҙгәрә. — Ева Николаевна апаһына яратып һәм һоҡланып ҡарап ала. Ә Лизаның беҙҙә эше юҡ. Ул өйҙәге һиллеккә, был донъяла иң яратҡан, һулар һауаһы, эсер һыуы һәм ҡояш яҡтыһылай ғәзиз иң яҡын кешеһе Еваның өйҙә булыуынан тыуған йән тыныслығы менән йәнә «селтәре»нә тотонған.

### Вещи давнего дома

Сестре Луизе

*чему спасаться?*
*только духу нищенства:*

*в вещах он в наших — жалких и прощенных:*

*и словно воздух — в воздух:*

*тиха и одинока встреча их*
*с единой Емкостью — как свечное мерцанье*
*во тьме поминовенья — нас*

*1967*

Әсәләре Феодосия Егоровна, сыуашса Хведусь — мәжүси сыуаштарҙың жрецтары нәҫеленән. «Жрец» тигәнде ошонан да ҡулайыраҡ һүҙ таба алмағанға ғына ҡулланам. Дин йолаһын атҡарыусы ир-егеттәр, Ева Николаевна әйтеүенсә, дәү кәүҙәле, күрер күҙгә ылыҡтырғыс күркәм булырға тейеш булған — илаһи заттар менән аралашалар бит. Ысынлап та, нәҫелдәге ир-егеттәр ошо талаптарға тулыһынса яуап биргән: бәһлеүән, изге күңелле һәм аҙыраҡ бер ҡатлыраҡ. Улар йолаларҙың, әгәр ҙә шулай тип әйтергә мөмкин булһа, тышҡы яғы өсөн яуап биргән: йыйын йыйыу, ҡорбан салыу һәм башҡалар. Ә ҡатын-ҡыҙҙар эстәлекте ҡайғыртҡан: ырым-тылсым, табиплыҡ. Шуға күрә ҡатындар үҙҙәренең баһаһын, затының дәрәжәһен яҡшы белгән, аҡыллы һәм талапсан, ҡаты холоҡло булған. «Әсәйем көслө рухлы, ғәйәт эшмәкәр кеше ине, — ти Ева Николаевна. — Күрше ауылға приход мәктәбенә йөрөп уҡырға һәм яҙырға өйрәнгән, хисапҡа шәп. Русса ла белә. Шуға күрә һуғыш йылдарында колхоз рәйесе лә, ауыл Советы рәйесе лә булып эшләне». Христиан диненә күскәс, ул тулыһынса мәжүсилектән баш тарта. «Нәҫел белеме әсәйемдең апаһына күсте. Апаһы әсәйемә был «хыянат»ты ғүмер буйы ғәфү итмәне. Әсәйем үлем түшәгенә яткас, мин уға ярҙам һорап барҙым. Ғазаптарын еңеләйтергә ҡулынан килә ине, тик баш тартты. «Үҙеңә өйрәтәм», — тине. Мин риза инем. Тик әсәйем ҡаты итеп тыйҙы».

Аталары Николай иһә бик хисле, намыҫсан кеше булған.

«Бер күҙе насар күргәнлектән, атайымды фронтҡа алмағандар. Ул быға шул тиклем ғазаплана, оялышынан мәктәпкә уҡытырға кәртә артынан ғына йөрөй башлай. Туҡтауһыҙ военкомат тупһаһын тапай торғас, теләгенә ирешә. 1942 йылда уны ла яуға оҙаталар. Ул 1943 йылдың 18 сентябрендә Смоленск янындағы һуыштарҙа һәләк була. Шунан алда ғына бер хатында: «Хведусь, мин күҙлегемде юғалттым», — тип яҙған. Бәләкәй генә булһам да, әсәйемдең: «Ҡан менән батҡаҡҡа буталған алтын сәстәрең туҙрап ҡайһы ғына ерҙәрҙә ятаһың икән?!» — тип һамаҡлап илағанын хәтерләйем. Уға ҡушылып беҙ ҙә түгелеп-түгелеп илайбыҙ».

Феодосия Егоровна ҡыҙының врач булыуын теләй. Ева үҙе лә тап шул турала хыяллана. Мәскәүҙәге И. М. Сеченов исемендәге медицина институтына документтарын бирә. Тик шул ваҡытта Гена агроном булырға теләгән ҡыҙға ғашиҡ була, һәм һеңлеһенең уның менән бергә уҡыуын теләй. Ева ағаһының үтенесен йыға алмайынса, К. А. Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһына барып инә. Ҡаҡса ғына кәүҙәле Ева Николаевнаның ҡасандыр ер һелкетеп ДТ тракторын йөрөткәнен, ә «Беларус»ты сиңерткәләй еңел тип эшкә һанамағанын, мотоциклда елдергәнен күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын.

Бишенсе курста уҡығанда Еваға сирле әсәһен ҡарар өсөн, академик ял алып, ауылға ҡайтырға тура килә. «Беҙҙең ауылда инвалидтар йорто бар ине. Унда йәшәгән бисараларҙың аяныслы тормошон күреп йөрөгән әсәйем, үҙе мәрхүм булғас, Лизаһының шул көнгә төшөрөн уйлап йәне әсенгәндер инде. Вафаты алдынан миңә: «Лизаны бер ваҡытта ла инвалидтар йортона тапшырма», — тине».

45 йәшендә яман шеш сиренән ғазапланып яҡты донъя менән хушлашҡан Феодосия Егоровна төпсөк ҡыҙы Еванан апаһы Лизаны бер ваҡытта ла инвалидтар йортона бирмәҫкә ант иттереп, мәңгелеккә күҙҙәрен йома.

Әсәһе үлгәс, буп-буш булып ҡалған тыуған йортта ҡайғылы йәй үткәргәндән һуң, Лизаны ваҡытлыса әсәһенең туғандарына ҡалдырып, уҡыуын дауам итергә Мәскәүгә юллана Ева. Көндәрҙән бер көндө дөйөм ятаҡҡа ҡултамғаһы ҡуйылмаған хат килеп төшә. «Хужабикә эскегә һабышып китте. Унда йыш ҡына ир-аттар менән бергәләшеп кәйеф-сафа ҡоралар. Лизаны әрәм итеп ҡуймаһындар, ҡайтып хәстәрлә», — тип яҙылған була хатта.

Ҡыҙ ауылына ашыға. Ҡайтып төшһә, ысынлап та өйҙә эске, ә Лиза юҡ. Эҙләп тышҡа сыҡһа, ҡышҡы сатлама һыуыҡта ялан аяғына ҡуңалтаҡ килеш резина итек кейгән Лиза ҡулына һәнәк тотоп, тун һаламды йолҡҡослап, мал ҡарап йөрөгән була. Нишләргә? Әсәһенең йорто менән һыйырын һатҡан ғына аҡсаға Мәскәү тирәһендә бер нәмә лә алып булмай. Бәхеткә күрә, шул осорҙа Геннадий «Василий Теркин»ды сыуаш теленә тәржемә иткән була. «Новый мир» журналының баш мөхәррире, өс тапҡыр Сталин, бер тапҡыр Ленин премияһы лауреаты А. Твардовский был тәржемә тураһын-

да белә. Шуға күрә Сыуашстан китап нәшриәте уны нәшер итергә мәжбүр була. Тәржемәсенең исемен ҡуймаһалар ҙа, заманына күрә мул ғына гонорар түләйҙәр. Ошо аҡсаларҙы иш янына ҡуш итеп, Мәскәү эргәһендәге Троицко-Голенищево ауылында өй һатып алалар. Хәйер, эргәһендәге тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. «Ул тирәлә хәҙер Швеция илселеге урынлашҡан, — тип хәтерләй Ева Николаевна. — Ауыл урамдары, саҡ ҡына ямғыр яуһа ла, шул тиклем батҡаҡ булып китә торғаны. Резина итек кейеп сығаһың да, уларҙы ауыл ситендәге өйҙә сисеп ҡалдырып, артабан туфли кейеп алаһың. Шунан троллейбусҡа ултырып академияға бара инем». Тиҙ арала ауылды бөтөрөп, яңы микрорайон төҙөргә булғанлыҡтан, пропискаға индермәйҙәр. Еваға һатып алған өйҙөң хужаһы, башы төрмәнән сыҡмаған бер кеше менән «ялған никах»ҡа инергә тура килә. «Тик, Ева, тиҙерәк айырылышырға кәрәк булыр. Минең тағы төрмәгә ултырғым килә», — ти был кеше. Ғаилә ныҡлығы тураһында хәстәрлек күргән судьяларға нисек тәьҫир итергә? «Һин мине ҡаты итеп һүк. Улар беҙҙең бер нисек тә бергә йәшәй алмағаныбыҙға ышанһын», — ти ҡыҙ. «Ул мине эттән алып, эткә һалып тетә башланы, был суд бинаһы быға тиклем дә, бынан һуң да шул тиклем матты ишеткәне булмағандыр, — тип көлөп хәтерләргә ҡала Ева Николаевнаға. — Ысынлап та, бер ағарып, бер буҙарған судья беҙҙе һис һүҙһеҙ шунда уҡ айырҙы. Судтан сыҡҡас, «абышҡа»: «Йә, Ева, инде иҫергәнсе эсәйек, мин ҡулдан килгәнсе тырыштым», — тигәс, уға бер сикүшкәлек аҡса тотторҙом да башҡаса күрмәнем. Шуны эсеп ул теләгенә ирешә, ҡабаттан төрмәгә ултырҙы». Тормош бер ни тиклем яйға һалына. Академияны тамамлағандан һуң ҡыҙ Мәскәү дәүләт университетының Ботаник баҡсаһында хеҙмәт юлын башлай. М. И. Рудомино исемендәге сит ил әҙәбиәте китапханаһында оҙаҡ йылдар эшләй, М. Щепкин исемендәге театр училищеһында буласаҡ артистарға сыуаш теле һәм әҙәбиәтен уҡыта.

Әҙәбиәткә килеүе тәүге ҡарашҡа осраҡлы ғына кеүек. Ул И. М. Сеченов исемендәге медицина институтының лабораторияһында эшләп йөрөгән була. Йорт ҡуяндары менән тәжрибә үткәргән саҡта, ваҡыт үтһен өсөн хеҙмәттәшенән бер китап алып тора. «Шул китапты уҡып сыҡҡас та мин балалар өсөн нисек яҙырға кәрәклеген тулыһынса күҙ алдына килтергәйнем инде, —

ти Ева Николаевна. — Эштән ҡайтып барышлай башымда ул китап яҙылып бөткәйне. Ултырып ҡағыҙға теркәнем дә Генаға күрһәттем. Уға бик нык оҡшаны. Тиҙ арала был китап «Детская литература» нәшриәтендә баҫылып та сыҡты. Башҡаса яҙырға уйламай ҙа инем. Ағайым иһә: «Ева, башланғыс бик яҡшы булды. Инде һиңә артабан дауам итергә кәрәк», — тигәс, аптырап ҡалдым. Нимә яҙырға? Башымда бер генә фекер ҙә юҡ ине». Әммә илһам килеп тора, ул бер-бер артлы рус һәм сыуаш телдәрендә уҡыусыларҙың күңелен арбап алырлыҡ әҫәрҙәр яҙа.

1991 йылда «Немец тулҡыны» радиостанцияһы (Кельн, Германия) әҙәби конкурс иғлан итә. Был конкурсҡа тәҡдим ителгән 1600 хикәйә араһында Ева Лисинаның «Бер һыныҡ икмәк» хикәйәһе еңеү яулай. Ул беҙҙең «Башҡортостан ҡыҙы» журналында ла баҫылып сыҡты, Башҡортостан радиоһы аша ла яңғырап тора. «Был конкурс тураһында осраҡлы ғына ишетеп ҡалдым, — ти әҙибә. — Ғүмер буйы күңелдә шырау булып йөрөгән ваҡиғалар була. Бәләкәй генә саҡта Лиза менән күрше ауылға барыуыбыҙ һәм унда күргән-кисергәндәребеҙ гелән йәнде һыҙлатып тора ине. Ултырҙым да бер тынала илай-көлә яҙҙып бөттөм. Башта сыуашса яҙҙым, унан руссаға тәржемә иттем дә һалып ебәрҙем.

Ул бер мөғжизә кеүек булды инде. Юҡлыҡ ваҡыт. Ҡыҙым Феня берәй нәмә һораһа: «Конкурста еңәм бит, шул аҡсаға алырбыҙ», — тип яуаплайым. «Әсәй, һин ысынтылап та еңгән кеше кеүек һөйләйһең», — тип көлә ҡыҙым. Ә мин еңәсәгемде ҡайҙандыр беләм». Ысынлап та, бер көндө телевизорҙан яңылыҡтар тыңлаған дуҫтары ҡотлап шылтырата. Ул арала Германия илселегенә саҡырып виза бирәләр. Премияны тапшырғандан һуң, бер нисә көн буйы Германияның иң матур урындарын күрһәтәләр һәм бер йыллыҡ саҡырыу тәҡдим итәләр. Был махсус тәҡдим шунан ғибәрәт була: йыл буйы яҙыусы Германияның иң матур төбәктәренең береһендә урынлашҡан ижад йортонда йәшәй һәм, немец телен камиллаштырып, тик үҙенең ижады менән генә шөғөлләнә. Был телде мәктәптә сағынан уҡ бик яратып өйрәнгән Ева Николаевна өсөн ғәйәт ымһындырғыс тәҡдим. Тик ул осорҙа Библияны сыуаш теленә тәржемә итеү проектында эшләй башлаған яҙыусы баш тарта. Бер ыңғайҙан был еңеүҙең артабанғы шандауы хаҡында ла һөйләп китмәксемен. Ева Николаевна үҙенә генә хас

физаҡәрлек менән Бибилияны тәржемә итеү һәм артабан мөхәррирләү эшенә тотона. Мәскәүҙән Чебоксарға күсеп ҡайта. «Сөләймәндең хикмәттәре» китабын тәржемә иткәндән һуң, уны тиҙерәк, тотош Библия донъя күргәнгә тиклем үк, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим иткеһе килә. Тик ҡайҙан аҡса табырға? Мәҙәниәт министрлығына ла, бай кешеләргә лә мөрәжәғәт итеп ҡарай. Бөтә ерҙә лә баш тарталар. Сираттағы эшҡыуарҙан «Юҡ!» тигәнде ишетеп күңеле төшөп килеп сыға. «Һалҡын февраль көнө. Башымды эйеп, илап ҡайтып киләм. «Йә Раббым, күп тә кәрәкмәй бит. Йөҙ илле мең һум тулыһынса етер ине», — тием. Өйгә ҡайтып керһәм: «Һиңә бит Германиянан аҡса ебәргәндәр», — тип квитанция тотоп торалар. «Бер телем икмәк»те немец теләндә радиоспектакль итеп ҡуйғандар ҙа гонорарын ебәргәндәр. Шуныһы ҡыҙыҡ, марканан һумға әйләндергәс, был аҡса теп-теүәл 150 мең булды». Шулай итеп, Ева Лисинаның хыялы тормошҡа аша: «Сөләймәндең хикмәттәре» тиҙ арала сыуаш телендә нәшер ителә. 2009 йылда иһә Библияның халыҡ көтөп һәм хуплап ҡаршы алған сыуаш теленә тәржемәһе донъя күрҙе. Сығарылған тираж тиҙ арала таралып бөтә. Әлеге көндә Ева Николаевна уны ҡабаттан ҡарап сығып, яңынан нәшер итеү өҫтөндә эшләй.

Шул уҡ ваҡытта әҙибәнең үҙ ижады ла әүҙем бара. Үткән йыл бер һөйләшкәндә, Германияла йәшәгән дуҫыбыҙ Томас Каут Ева Николаевнаның «Рия» тигән тетрәткес новеллаһын тәржемә итеүен әйтте. Ул һаман да әҫәрҙең тәьҫире аҫтында ине. Бер нисә тапҡыр: «Ни өсөн ул шулай тамамланы икән?» — тип ҡабатланы. Тәрән белемле, талапсан, зауыҡлы доктор Каутты шул тиклем дәрәжәлә тулҡынландырыуҙың бик үк еңелдән булмағанын белгәнгә, ул әҫәрҙе минең дә уҡығым килеп китте. Шул көндө үк Чебоксарға шылтыратып, ул новелланы мин дә һорап алдым. Уҡып сыҡҡас, аҙнаға яҡын уның йоғонтоһонда йөрөнөм. Уны башҡаларға ла уҡытҡым килеп, тәржемә итергә тотондом һәм новелла тиҙ арала «Башҡортостан ҡыҙы» журналында «Бер фәрештә ҡанат ҡағып үтте» тигән исем менән донъя күрҙе. Тап шул осорҙа, Осетияға семинарға барғас, Томас Каут менән осраштыҡ. Һанаулы ғына көндәрҙең ни тиклем тығыҙ булыуына ҡарамаҫтан, Ева Николаевнаның ижады, ошо новелла һәм уны тәржемә итеү нескәлектәре

тураһында һөйләшмәү мөмкин түгел ине. Әңгәмә барышында доктор Каут көтмәгәндә сәйер һорау бирҙе:

— Ева Николаевнанан көнләшмәйһегеҙме?

— Нишләп? — тип һораным аптырай биреп.

— Ошондай әҫәрҙе һеҙ түгел, ә ул яҙғанға...

— Юҡ, — тинем шулай ҙа булмышыма бер аҙ ҡолаҡ һалып. — Ысынлап та юҡ. Мин күптән инде тик үҙем менән генә ярышам. Юғиһә был донъяла көнсөллөктән аҡылдан шашырға ла мөмкин бит.

Әммә был һорау, әҙибәнең талантын доктор Томас Кауттың ни тиклем юғары баһалауына сағыу күрһәткес булараҡ, миңә ғәйәт ныҡ оҡшаны.

Ева Николаевнанан көнләшеп булмайҙыр ул. Нурҙан, моңдан, паклыҡтан, сафлыҡтан, яҡшылыҡтан нисек көнләшәһең? Быларҙың барыһы менән дә ләззәтләнергә һәм һоҡланырға ғына мөмкин. Ул — ғәжәйеп кеше. Бер мәлде Бибилияны тәржемә итеү проекты мөхәррире Александр Сизиков: «Ғәжәп! Башҡалар менән эшләгәндә мин нык арыйым. Ә Ева Николаевнаның береһенән-береһе сетереклерәк бөткөһөҙ һорауҙарына бергәләшеп яуап эҙләгәндә көндәр буйы ултыра алам, арыу түгел, ниндәйҙер көс артҡанын тоям», — тигәйне. Ысынлап та, уның күңел йылыһына рәхәтләнеп сорналырға һәм шифаланырға мөмкин. Уның яҡшылығы — сихәтле яҡшылыҡ. Күңелең менән уға һыйынғанда, бала сағыңдағы тыуған йортоңдоң йылы мейесенә һыйынғандай булаһың, әйтерһең дә, йомшаҡ үләнгә таянаһың, саф һауа һымаҡ һулайһың, пак һыуҙай йотлоғоп эсәһең — был яҡшылыҡ көсәнеүҙән, аҡылдан, әхлаҡтан түгел, ә тәбиғәттән, пак булмыштан, тыумыштан.

«Осрашыуҙарҙа йыш ҡына минән: «Үҙегеҙҙең мәшһүр ағайығыҙҙан күп нәмә алаһығыҙҙыр?» — тип һорайҙар. Был һорауҙың эсендә яуабы ла ята. Әлбиттә, алам, башҡаса булыуы мөмкин түгел. Шулай ҙа ҙур талант эйәһе ағайымданмы, әллә сабый аҡыллы зәғиф апайымдан күберәк аламмы — әйтә алмайым. Моғайын, Лизанандыр», — тигәйне Ева Николаевна Санкт-Петербургта бер осрашҡанда. Ул саҡта әле Лизаны күргәнем юҡ ине, шуға күрә быны әсәһенең һуңғы үтенесен хөрмәт итеп ғүмере барына ауыр йөктө өҫтөрәгән ҙур йөрәкле кешенең йыуанысы һымағыраҡ ҡабул иткәйнем. Зәғиф кешене бағыу, көн һайын, көн һайын уның өсөн яуаплылыҡ тойоуҙың ни тиклем ҡыйын һәм ғазап-

лы бурыс икәнен үҙҙәренең инҙәренә ошондай һынау ятҡан кешеләр генә беләә. Әгәр ҙә был мәшәҡәт ярты быуаттан ашыу барһа?!

Һәм бына мин Чебоксарҙа уларҙың ҡотло өйөндәмен. Ҡышҡы иртә. Ева Николаевна аш бүлмәһендә тәмле еҫтәр сығарып сәй әҙерләй. Шул саҡ бүлмәнән:

— Ева, — тигән балаларса сағыу иркә тауыш яңғырай.

— Нимә, туғаным? — тип яуаплай Ева Николаевна. Уның балҡып киткән йөҙөнән, наҙлы тауышынан бөткөһөҙ яратыу бөркөлә. Бына ни өсөн Лиза ысынлап та тик һөйөүҙе белә... Уның һөйөүен... Ошо һөйөүҙе ул үҙенең сүп-сарҙан азат булған оло күңеленә туплай, бал ҡорттары нектар йыйғандай, үҙенең булмышында үҙенең пак энергияһы менән һуғара ла, күстәнәстән ауыҙ иттергәндәй, барыһына ла муллап өләшә. Ул һөйөүҙе һөйөүгә әйләндерә.

Ә нисек ҡайғыны бәхеткә әйләндерергә? Донъялағы төҙәтеп булмаҫлыҡ ауыр ҡайғыларҙың береһе булған зәғифлекте, аҡыл зәғифлеген, ҙур бәхетһеҙлекте хатта эргәңдәге кешеләрҙе, тормошто йылыта һәм нурландыра алырлыҡ бәхеткә әйләндерә алыр өсөн, йылдар буйы һәр көн, һәр сәғәт, һәр минут шул бәхетте һүндермәү, бүҫкәртмәү өсөн ни тиклем бөйөк күңел, рухи ҡеүәт кәрәк!

Әҙибәнең «Ялбыр ҡолаҡ Илюк» тигән әҫәрен сыуашсанан рус теленә тәржемә иткән Илгиз Мостафа улы Кәримов — Айги-Лисиндарҙың ғаилә дуҫы, тәржемәсенең уҡыусыларға мөрәжәғәтендә Ева Николаевнаны тылсымсы тип атай. Был ысын мәғәнәһендә шулай. Ева Николаевна — ҡайғыны бәхеткә, тормошта осрап торған түбәнлекте юғарылыҡҡа, бысраҡты паклыҡҡа әйләндереү ҡеүәһенә эйә булған көндәлек мөғжизә оҫтаһы. Бар донъяның шиғриәт һөйөүселәрен әсир иткән шиғри талантан бер ҙә кәм түгелдер был.

Лизаны тәүге тапҡыр күргәндән һуң уның тик һөйөүҙе генә белгәне хаҡында һоҡланып һөйләгәнемдә бер дуҫым: «Үҙенә күрһәткән һөйөүҙе! — тип тормоштоң аяуһыҙ хәҡиҡәтен аныҡлап ҡуйғайны. — Ошо миһырбан тулы бәхетле затты ҡото осҡан меҫкен йән эйәһенә әүрелдерәм тиһә, яуыз бәндәгә бер сәғәт артығы менән етә. Әлегә беҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быға йышыраҡ шаһит булабыҙ».

«Лизаның һәр иртәһе: «Ева, һинең бөгөн бараһы ерең бармы? — тигән һорау менән башлана. «Юҡ», ти-

һәң, унан да бәхетле кеше юҡ. «Эйе», тиһәң, бойоғоп китә. Янымда ул юҡта, хатта был хаҡта уйламағандай булһам да, зиһенемдән: «Әле нимә эшләй икән?» — тигән борсолоу китмәй. Ауыҙыма ризыҡ ҡабам тиһәм: «Ас ултыралыр инде, йылытып ашай алмай»; ҡараңғы төшә башлаһа: «Ҡурҡмаймы икән? Ут тоҡандыра белмәй», — тип хафаланам.

Донъяға унең миһырбаны аша ҡарайым. Күрәһең, был нисектер йөҙөмдә сағыла. Элегерәк, ирем менән бергәләп урамдан китеп барғанда, ул алыҫтан уҡ ярҙамға мохтаждарҙы самалап: «Анау кеше хәҙер һине туҡтатасаҡ», — тип әйтә торғайны. Ул кеше ысынлап та мөрәжәғәт итә, ә инде баҙнаты етмәй үтеп киткәндә, бара биргәс, түҙмәйенсә ярҙам тәҡдим итеп артынан үҙем йүгергән саҡтарым була торғайны.

Әгәр ҙә ошо йылдарҙа янымда апайым булмаһа, мин бөтөнләй башҡа кеше булыр инем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Гена унан бик күп ала алманы. Әммә ғүмеренең һуңғы йылдарында бына шул мәхрүмлекте тоя башлағайны. Лизаның күңеленән ағылған һәм йәнде генә түгел, хатта тәнде лә шифалаған сихәтле нурға сарсағанлыҡтан, һәр ваҡыт Сыуашстанға атлыҡты. Хатта Шаймурзинола өй һалып, күмәкләшеп шунда йәшәргә хыяллана ине — өлгөрмәне, — ти Ева Николаевна әрнеүле үкенес менән.

Лиза янында булған бөтә яҡшылыҡтарҙы күҙ алдына килтерәм дә уйлайым: Алла һәр ваҡыт Лиза менән. Һәм апайым минең яҡлаусы фәрештәм. «Тыныс йоҡо! — ти ул йоҡларға ятҡанда. — Ҡурҡма, Ева. Мин бит һинең менән». Аңламаған кешегә, бәлки, был мәрәкә тойолор, тик был ысынлап та дөрөҫ, ул мине бөтә хаслыҡ, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торған ышығым».

Геннадий Айгиҙың ижадында «Алла булған урындар» — «Места, где присутствует Бог», «Алланың үҙен һаҡлаған урын» тигән юлдар осрай. Һуңғыһын — Алланың үҙен һаҡлаған урындарҙы шағир географик теүәллек менән әйтеп бирә: «Ул Синьял-Шаймурзинонан алыҫ түгел, Шихирдан тигән татар ауылынан ете, Шигали тигән сыуаш ауылынан биш километрҙа урынлашҡан».

Ә, минеңсә, Алла булған урын — улар үҙҙәре ҡайҙа, шунда. Был өс туғандың Алла янында һәр береһенең үҙ урыны бар, тип күҙаллайым. Лиза — Алланың Үҙендә — Хаҡ Тәғәлә уны Үҙенән айырмаған. Ева — һәр ваҡыт Алла менән. Ә Геннадийҙың һынсыл ижадсы булмышы —

Алла эргәһендә. Һәм был уларҙың рухи сифаттарына түгел, йәшәүҙәренең тәғәйенләнешенә бәйләнгән.

Моғайын, уларҙа ошоно тойған кешеләргә, дөрөҫөрәге, тормошто ошондай яҫылыҡта, сифатта, шундай юҫыҡтан ҡабул итеүселәргә Айгиҙың шиғриәте айырыуса яҡындыр. Мин бында аңлы рәүештә «төшөнөү — аңлау» төшөнсәһен ҡулланмайым. Тормошта бик күп нәмәләрҙе, ваҡиғаларҙы, хәләттәрҙе аңлау теләге уларҙың асылынан, хәҡиҡәттән алыҫлаштыра ғына. Мәҫәлән, нисек һөйөүҙе аңларға мөмкин? Бары һөйөү халәтендә булырға ғына кәрәк. Дөрөҫ, быны хәҙерге замандағы бик күп ғалимдар кеүек аңлатып ҡарарға була: ғашиҡ заттың организмында ниндәй гормондар күпме барлыҡҡа килә, ниндәй химик реакциялар бара? Һөйгәне янындағы кешенең тәнендә ниндәй үҙгәрештәр бар: күҙҙәре балҡый, йөрәк тибеше, һулыш йышая, тубыҡтар ҡалтырай, устары тирләй һ. б. Тик былар ошо мөҡәддәс тойғоно татып ҡарамаған кешегә нимә аңлата ала? Йәки бына роза. Ул тере, ул иҫ киткес матур, хуш еҫле. Беҙ уның еҫен тоябыҙ, гүзәллегенән тыныбыҙ ҡыҫыла. Һәм уны тикшерә башлайбыҙ: таждарын йолҡҡослап, химик составын билдәләйбеҙ, бер кислотанан алып икенсеһенә тығабыҙ, матурлығының асылын эҙләйбеҙ. Һәм был юлда уны юғалтабыҙ: ҡайҙа әле генә һушыбыҙҙы алған сәскә? Фекеремде аңлата алдыммы икән, белмәйем. Һөйөүҙе лә, матурлыҡты ла тойорға, күрергә кәрәк. Тормошто ошо юҫыҡта ҡабул итергә, шул халәттә йәшәргә кәрәк. Айги осрағында — шул рухи юҫыҡта йәшәргә.

Айги ижадына ошолай яҡын килгәндә, Ева Николаевнаның ағаһының вафатынан һуң: «Ни өсөн ул булмаһын? Ул елдең иҫеүендә, ул һыуҙың шылтырап ағыуында, ул болондоң сәскә атыуында... Минең өсөн ул — тулыһынса тәбиғәттә», — тигән һүҙҙәре тәрән мәғәнәһендә асыла. Улар ысынлап та тәбиғи, тәбиғәттең үҙе һымаҡ. Уларға тап тәбиғәткә ҡарағандай бағырға кәрәк һәм Айгиҙың бөтөн ижадын һуғарған «тәбиғәткә ярашлы» — «природосообразность» тигән төшөнсә шул саҡта аңлашыла башлай.

Бына ошо аңламдан башҡа Айгиҙың шиғриәте ысынлап та ҡатмарлы тойола. Бында тағы ла бер шарт бар: Айгиҙың шиғриәте өсөн уҡыусы булыу ғына етмәй. Үҙемә ҡалһа, ныҡ мөһим булған өсөн ҡабатлайым, Айгиҙың шиғриәтенә ижадташ, илһамлы ижадташ булырға кәрәк.

Ә бында инде айырым бер иман, айырым диндарлыҡ, донъя яратылмышына, әҙәм балаһының тәғәйенләнешенә башҡараҡ ҡараш зарур. Бында инде Алла донъяны алты көндә бар ҡылыуҙы теүәлләгән дә, әҙәмде Үҙ ҡулдарының емеше булған бар йән эйәһенә хужа итеп ҡуйған тип кенә ҡарау аҙ. Яратылмыш дауам итә, ә кеше Аллаға ижадташ, ижад итеү ҡорамалы булараҡ кәрәк. Шағир Алланың ҡурайы, рәссам Алланың ҡылҡәләме, табип Алланың шифаһы һәм башҡалар, һәм башҡалар...

Күреүебеҙсә, Айгиҙың шиғриәтенең асҡысы — уның һеңлеләрендә. Ошо өс рухи затты бары тик берлектә генә уларҙың тулы тәрәнлегендә һәм бейеклегендә тойоп була. Өс таған: бер яҡтан Айги, икенсе яҡтан Луиза, һәр икеһе үҙ донъяһы һәм ижадында. Уртала — Ева — һәр көн һайын көндәлек мөғжизәне ҡылыусы — ул матди донъяла ла: ашар ризыҡ, кейер кейем, йәшәр урын табыусы булараҡ та; һәм рухи даирәлә лә: күңел йылыһы, рухи аҙыҡ биреүсе булараҡ та — терәк һәм таяныс. Бында уның исеме есеменә тулыһынса тап килә: Ева — анабыҙ Һауа — боронғо йәһүд телендә тереклек һәм йәшәү тигән мәғәнә аңлата.

Әсәбеҙ, тигәндән. Беренсе чечен һуғышы башланғас, Ева Николаевна Рәсәйҙәге яу барған ерҙәргә һалдат улдары артынан юлланған меңәрләгән әсәйҙәр менән бергә студенты, етем малай Саша Якушевты эҙләргә бара. Меңәрләгән танкылар һәм бронетранспортерҙар йырғыслап бысрағын әйләндергән юлдарҙы ҡыҙырғанда ҡараңғыға ҡалып аҙаша ул. «Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғылыҡ, — тип яҙа ул «Чечня көндәлектәре» әҫәрендә. — Бер нисә аҙым атлайым да юл ситендәге соҡорға, һалдаттар ярау итергә йөрөгән ергә йығылам.

— Ярҙам итегеҙ!

Бер кем дә юҡ. Аяҡҡа баҫам (ниндәй бәхет: ике аяғым да имен, һалдат әсәһенә улын эҙләр өсөн тағы нимә кәрәк?) Үрмәләп юлға сығам. Дөм ҡараңғы. «Туғандар, мин ҡурҡам!» — тип ҡысҡырам. Аяуһыҙ хәҡиҡәт: был донъяла бөтәһе лә минһеҙ йәшәй алыр. Тик минһеҙ йәшәй алмаған бер кеше бар — ул зәғиф апайым. «Эй, Илаһым, ҡөҙрәтле Раббым, мине апайым хаҡына ғына иҫән ҡалдыр». Ҡурҡыныс. Тик янымда Алланың барлығын тоям. Ышанам: Ул мине ташламаясаҡ.

— Туғандар, мин ҡурҡам!

һалдаттар минең артымда бер-бер артлы ракета ебәрә башлай. Ракеталарҙан төшкән яҡтылыҡ аҫтында үҙем ҡуналҡаға туҡталған чечен өйөнә килеп инәм. Ҡапҡа асҡан саҡта өйҙәгеләрҙең: «Ҡайтты! Ҡайтты!» — тигән ҡыуанысдлы тауыштарын ишетәм».

* * *

Физиктар, ҡараңғылыҡ тигән нәмә юҡ, тиҙәр. Бары яҡтылыҡ ҡына бар. Ә яҡтылыҡтың юҡлығын беҙ ҡараңғылыҡ тип атайбыҙ икән. Тимәк, әҙәмдең йәне нурҙан туҡылған. Ә ҡара йөрәк, ҡара йән тигәнебеҙ, булмышта ни сәбәптәндер нурҙың юғалыуы, томаланыуы ғына бары. Шул уҡ фән әйткәнсә, йондоҙ саңынан әүәләнгән тәнебеҙҙәге — юҡһа ни өсөн унда бөтә химик элементтар ҙа бар — йән — бары аҡ нур. Рәнйеш, көнсөллөк, хаслыҡ, мәкер һәм һанап бөткөһөҙ башҡа хилафтар таш булып уҡмашып булмышыбыҙҙағы ана шул нур инешен ҡаплай. Шуға күрә яҡтылыҡтан торған асылыбыҙ ҡараңғыға әйләнә лә тамуҡтың үҙенә оҡшап китә. Ә, бәлки, тамуҡтың үҙен хасил итәлер ҙә, ғөмүмән, ғаләмдә йәһәннәм бары үҙебеҙҙең күкрәгебеҙҙәлер?

Феодосия-Хведусь менән Николай — ошо ике ябай һәм ана шул ябайлығы менән бөйөк ике сыуаштан тыуған өс йән рух юлынан әҙәмдең дә, донъяның да нурҙан ғибәрәтлеген һәм балҡып, бәхет таратып йәшәргә мөмкин икәнен раҫлап сәфәр ҡыла.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Хикәйәләр

Төшләктәге төш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4
Быйылғы яҙ йоҡоларҙан яҙҙым . . . . . . . . . . . . . . . . 16
Ҡыш бабай бүләге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 30
Алма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 44
Гүзәл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
Зәңгәр ебәк, йәки күҙ нуры . . . . . . . . . . . . . . . . 68

## Повестар

Йыһан ергә түңкәрелгән мәлдә . . . . . . . . . . . . . . . 92
Йәшә, егет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 143

## Эсселар

Мин яратҡан Амстердам . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 234
Рух юлынан сәфәр ҡылған өс йән . . . . . . . . . . . . . . 315

*Литературно-художественное издание*

**ГИЗАТУЛЛИНА Гульсира Мирзаевна**

**Время жить**

*Рассказы, повести, эссе*

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Э. М. Нигмәтуллина*
Рәссамы *А. Василов*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Ф. Н. Харрасов, А. Х. Хәкимова, З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 16.07.12. Форматы 84 x 108 $^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 18,48. Шартлы буяу отт. 18,90 Иҫәп-баҫма таб. 17,58. Тиражы 2000 дана. Заказ 120728.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, С. Юлаев пр., 55.



«Гөлсирәнең «Шул уҡ йән ине» хикәйәһенең немец телендә яңғырауын Германия яҙыусылары һоҡланып ҡабул итте. Әҙәби кисәлә әҫәрҙе ҡысҡырып уҡығандан һуң, унда ҡатнашҡан күренекле әҙиптәр: «Беҙ бит әле тап шундай хикәйәләргә мохтажбыҙ», — тип белдерҙе. Барыһы ла уның һөйләү оҫталығын, характерҙарҙың үҫешен биреүҙә маһирлығын маҡтаны. Ул кешеләрҙе һәм тормошто ғәжәйеп нескә тоя һәм һәр әҫәре бөткөһөҙ һөйөү менән һуғарылған».

Томас Каут, теология докторы,
шағир һәм романист. Германия

«Ул үҙенең хистәр көсөргәнеше менән мауыҡтырғыс. Был ғына ла түгел, уның был көсөргәнеште башҡаларға ла еткерә белеү ҡеүәһе бар. Был һирәк осрай торған һәләт. Шуға күрә, ул яҙыусы булараҡ, ғәйәт ылыҡтырғыс».

Алексей Фенин, «Инеш» нәшриәтенең
баш мөхәррире

КИТАП
Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте